АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘР ТОРМОШО



ҒАЙСА ХӨСӘЙЕНОВ

# Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев

АРДАҠЛЫ ШӘХЕСТӘР ТОРМОШО

ҒАЙСА ХӨСӘЙЕНОВ

# Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев

ӨФӨ
БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
1991

ББҠ 84 Баш
Х 75

**Хөсәйенов Ғайса**

Х 75 Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев: Тарихи-биографик китап.— Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991.— 288 бит.

Автор бик ҡыҙыҡлы фактик материалдар нигеҙендә күренекле мәғрифәтсе ғалим һәм яҙыусы М. Өмөтбаевтың тормошон күҙ алдына баҫтыра.

«Арҙаҡлы шәхестәр тормошо» серияһында сығасаҡ китаптар араһында «Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев» — иң тәүгеһе. Китап һимматле яҡташыбыҙға 150 йәш тулыу айҡанлы нәшер ителә.

**ISBN 5-295-00730-8**

Х $\frac{4603020102-45}{М\ 121(03)-91}$ 79—91 ББК 84 Баш

ISBN 5-295-00730-8 © Хөсәйенов Ғайса, 1991

## *Йәйләү*

*«1798 йылда башҡорт халҡын ғәскәр яһап, кантондарга бүлгәндәр... Хәрби губернатор Перовскийға, Волконскийга..., гәскәр командующийҙары Циолковскийға, Балкашинға, башҡаларына, кантондарға йырҙар сығаргандар».*

М. Өмөтбаев

Ишмөхәммәт кантон оҙаҡ юлйөрөмдән тамам йонсоп ҡайтты. Был юлы ул иртә яҙҙан үҙ ҡарамағындағы 9-сы башҡорт кантонының төньяҡ-көнсығыш тарафтарында йөрөнө; ярҙарына яңы ҡайтҡан Ағиҙел, Эҫем, Ләмәз йылғаларын кисеп, Ҡыратауҙарҙы урап, Йүрүҙән буйҙарынаса барып етте; Мырҙалар, Күҙәй волостарын ҡыҙырып сыҡты. Губернатор фармандары менән ипс эше.

«Парлап-парлап ҡына ат ектерҙем, елеп кенә үтһен тиеп тә», — тип йырҙа ғына йырлауы анһат ул, ир-мир эше артынан ҡышын-яҙына ҡарамай көн-төн йөрөп ҡара, йән, мал, йорт-ер ыҙалап. Әле лә ана аттары манма тиргә батты, үҙҙәре — ярҙамсыһы Динмөхәммәт ҡустыһы менән — арып арманһыҙ булды. Кантон батҡан һаҙламығын үткәндә, Ишмөхәммәт ирекһеҙҙән үҙҙәренең бер көҙгө яуында ошонда ауыр повозкалары менән батып ятҡандарын хәтерләне. Ил ауыҙына иләк ҡаплап булмай: шул урынға яңы исем дә йәбештерҙеләр — Кантон батҡан.

Шулай ҙа үҙ хәстәре түгел, ил-йорт, тоҡомдаштары хәсрәте ине башлыҡ башында. Бына ул ун биш йылдан ашыу кантон начальнигы. Ниҙәр генә күрмәне ул был йылдарҙа: ярлы-ябаға ауыҙын асһа, үпкәһе күренеп торор саҡтарын да, оло һәм кесе түрәләрҙең һарауһыҙлығын һәм ҡанһыҙлығын да, ир-егеттәрҙең үс-асыу ҡатыш уҫал ҡараштарын да, астарҙың, етем-еҫерҙәрҙең тилмереүле күҙҙәрен дә...

Кантон да ғына кантон килә тиҙәр,
Килгән кантондарҙан ҡаҡшаныҡ.
Яуыз кантондарҙы ҡуя икән
Рәсәй генә тигән батшалыҡ.

Шулай тип халайыҡ юҡҡа ғына йырламайҙыр инде. Хикмәт кантондарҙа ғына булһа икән. Уның яуыздарын алыш-

тырып, яҡшыларын ҡуйып булыр ине. Йыр әйтә лә ул әйтеүен: «үҙ хөкөмдәре лә үҙ ҡулында, ни ҡылһа ла ирке бар тиҙәр»— тип. Ай-һай, бармы икән? Ҡантонлыҡ сыҡҡас, атай-бабайҙар бер килке ҡыуанғандарҙыр ҙа ул, һалымфәлән бөтә, ике ҡулыңа бер эш — батшаға тоғро хеҙмәт ит, ер-һыуыңды һаҡла тип. Көт һин мәрхәмәт. Ярым военный хәл, әрме хеҙмәте, ылау ҡыуыу, эшсе командалары менән електәрҙе һуралар түгелме ни? Указ, фарман тип, күпме иләүҙе мыжғытып, халыҡтың теңкәһен ҡоротоп, күпме аһ-зар ишетеп ҡайтып киленә лә баһа. Әҙәм ҡәһәре нисек һуҡмай әле. Сараһыҙҙан әрнерһеңме, әрнемәҫһеңме?..

Шундай шомло-шөбһәле уйҙарға төшөп киткәненә кантон ҡапыл һиҫкәнеп ҡуйҙы. Арыу-алйыу ғәләмәтелер был. Кем-кем, ул бит хөкүмәткә тоғро хеҙмәт итеүе менән оло түрәләр, ил-йорт алдында абруй ҡаҙанды, ышаныс яуланы. Ун ете йәшенән хәрби хеҙмәттә. Алыҫ походтарға, ут-яу эсенә йөрөнө. Һәр приказды, һәр эште еренә еткереп үтәне. Бөгөнгөләй хәтерендә: бер мәл, командир ауырыпмы-нитепме китеп, уға казак отряды менән командалыҡ итергә тура килде. Полкка тикшереү үткәргән сағында ғәскәр командующийы генерал Циолковский уның был хәрби һәләтен шәйләп алған икән. Шунан, үҙе бай ғаиләнән булмаһа ла, түрәләр күҙенә эләгеп, аҙаҡ кантон башлығы дәрәжәһенә өлгәште. Ҡаранан сыҡҡан түрә түрәләргә ярап көн күрә — бындай һүҙҙәрҙе лә ишеттерҙеләр уға. Әммә сабырлығы, тырышлығы, ыҡтыматлығы менән енде ул күбеһен. Ҡантонлыҡ Рәсәй башлығы ҡулында булһа ла, кантондың көнө һәм йүне ил-йорт, аҫабалар өҫтөндә әлегә...

Һаҙанлы урманын уҙғас та тыуған төйәге Ибраһимдың күренеүе, кискә ауышҡан ҡояшҡа ялтырап ятҡан оҙон Ҡыҙылғы күле, ҡалҡыуҙа ҡалҡынып ултырған тыуған йорт-ҡуралар һыны Ишмөхәммәт кантондың сыуалсыҡ уйҙарын таратып ебәргәндәй итте.

Ирәйеп тыныс ҡаршыланы хужаны тыуған билә м. Алтышар мөйөшлө ҡуш йорт, ҙур келәт, бурама аласыҡ, ат һарайҙары, һыйыр, һарыҡ аҙбарҙары теҙелгән иркен ихата тымып ҡалған. Тимәк, ишле ғаилә, түлле мал-тыуар барыһы ла йәйләүгә күскән.

Ҡыйыҡлы таҡта ҡапҡанан инеп, үшәнгән аттарын Динмөхәммәткә ҡалдырып, кантон хужа йортҡа ынғайлағанда, ҡунаҡ өйө яғының бейек болдоронда йәш бисәһе менән алты йәштәге кесе ҡыҙы күренде. Бәлхисе, ирен көтөп, йорт-ҡаралтыларға күҙ-ҡолаҡ булып үҙе ҡалған икән. Шулай күрешеп, йорт-ер, мал-тыуар именлеген һорашып алыуға, ҡыҙы Хәнифәһенең алдында йылышып ултырыуына, ҡуйы һаҡаллы-мыйыҡлы битен нескә ҡулдары менән һый-

һауына Ишмөхәммәт тыныслана төштө, хатта әле генә башын ҡаңғыртҡан уй-хәсрәттәре һыпырып алғандай булды.

Иртәгеһен ул бөтөнләй икенсе кеше ине инде. Ҡистән ингән йылы мунса, таңһыҡлаған бисә ҡуйыны, йомшаҡ түшәктә туйғансы йоҡо үҙенекен иткән. Иллелә инде шаҡтай таушалып өлгөргән ил ағаһының йәненә яңынан дәрт, йөҙөнә алһыу ҡыҙыллыҡ ҡунды. Һуҙыу-быҙмырлау ҙа уның ғәҙәте түгел: ашап-эсеп алғас та губерна, өйәҙ үҙәгенән ай буйына йыйылған ҡағыҙ-фәләндәрҙе йәһәт кенә ҡараштырып, кисектергеһеҙ эшләнер эш-йомоштарҙы ярҙамсыһы менән писарына тапшырҙы ла йәйләүгә йыйынды. Ҡантонға ла ял кәрәк.

Ибраһимдан төш яҡлап ун биш саҡрымдар тирәһендә ятҡан төп Ҡайынлыҡул йәйләүе хужа күңелен арбап та алды. Яҙ менән йәй ҡауышыр иң хозур саҡ. Туғай, урмандарҙың тамам йәшелләнеп, ыуыҙ сафлығы менән иркәләнгән миҙгеле. Йәйләүгә үҙенсә йәм биреп, йәп өрөп ҡалҡыу урында шыршынан бурама өйҙәрс шыңғырап ултыра. Бер яғында алты ҡирәгәле аҡ тирмә, арыраҡ — ваҕыраҡтары. Уйһыулыҡта Оҙонса ҡыуаҡ буйлап йылҡыларға япма аҙбар, бейәләргә елеләр ҡоролған. Ҡыуаҡлыҡ аҫтында малтыуар һыулар һәм туплар күл. Өй-тирмәләр янына яҡын ғына аҫтараҡ бер шишмә урғылып сығып ята. Һыуының тешкә үтмәле һалҡынлығын, сәй-ашҡа тәмен, тәнгә сихәтен әйтеп бөтәһе түгел. Иртә-кисен һаумал ҡымыҙ кеүек ҡуйы һулап туйғыһыҙ һауаһы үҙе ни тора.

Ишмөхәммәт ғүмере буйы күнеккән, йәне-тәне менән үҙ иткән тыуған йәйләүенә килеп төшөүе булды, бөтөнләй икенсе донъяға ингәндәй иҙрәп һәм маҙрап китте. Ил ағаһына ла кантон-иләү ығы-зығыларынан бер аҙ арынып, ҡарт һөйәктәрҙе йылытып, бит-тәнгә ит-ҡан йүгертеп, дәрт-дарманды яңыртып алыу һис тә яҙыҡ түгелдер. Ике бисәһенең дә күңелен һәм мөҙҙәтен күреү, бала-сағалары, туған-тыумасалары араһында булыу шулай уҡ ир-ата вазифаһы.

...Губернатор килә!

Өфө наместнигы сапҡыны еткергән был хәбәр йәйләүҙең аҫтын өҫкә килтерҙе. Ҡилтерерлек тә шул: Ырымбур губернаһы хәрби губернаторы генерал Перовский үҙе 9-сы кантонға атап килә икән. Ишмөхәммәттең үҙенә, йәйләүенә төбәп. Шуға, ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тыҡҡандай, йәйләү башта нык мыжғып алды, уның һәүетемсә талғын ағышы боҙолдо. Әммә хәрби тәртипкә өйрәнеп бөткән кантон башлығы ҡубырсыған йәйләүҙе йәһәт яңы яйға борҙо, һәр ғаилә ағзаһының үҙ урынын һәм бурысын билдәләне; малсылар, ҡымыҙсылар, аш-һыусылар үҙҙәренә тейешле эштәрен

белдс. Яҡын-тирә волость, түбәләргә ат саптырып, кантон үҙенә терәк-яраидарын көн эсендә саҡыртып алды ла һәр береһенә башҡараһы эшен, вазифаһын исемләп тәғәйенләне:

— Йомран йорто йортауайы, Ибраһим, Тоҡоҫ, Илсекәй ауылдары тәртип-йүненә һин яуаплы.

— Динмөхәммәт туған, ҡаршыларға ат-көймә, затлы кәрәк-ярағын әҙерләү һинең өҫтә.

— Ҡаһарман урядник, сегерме һыбайлы ир-егетте ысын яһау итеү, команда һиндә.

— Зауряд-есаул Көҫәпҡол ағай, бөтә йәйләү һинең күҙ-ҡарамаҡта.

— Кем, Ишназар имам, дин-шәриғәтте йолалау, һүҙһеҙ, һинә фарыз.

— Ҡурайсы, сәсән, йырсы хәстәрҙәре, Ниғмәтулла, һиндә булыр.

— Ҡошсолар, һунарсылар әҙерлеген, Теләпҡол ағай, һинән үтенәм.

Хәбәр алыуға бер тәүлек тә үтмәне, ҙур түрә ҡунаҡты ҡаршылайһы мәшәҡәттәрҙең күбеһе бөткәйне инде. Һәр ҡушылғанды Ишмөхәммәт үҙе күҙәтте, кәңәш бирҙе, еренә еткермәгәндәренә үҙе тотондо, бәғҙеһен әрләп-ҡыҙҙырып ташланы, егәрлеләренә, ыҡтыматтарына йылы һүҙен йәлләмәне: сәмләндерҙе, ҡуҙғытты, тиҙләтте. Үҙе тегеһенә лә, быныһына ла етеште. Аҙаҡ үҙенсә иҫкәртеп ҡуйыуҙы ла кәрәк тапты:

— Ағай-эне, ярҙамсыларым, ҙур түрә ул күпте күрә, йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килерлек булмаһын. Уйламаған-көтмәгәне килеп сығырына ла әҙер тороғоҙ. Аҙап юғалып ҡала күрмәгеҙ. Ебеп төшкәндә, бешмәгәндә бер кем аямаҫ. Кантон ҡулы ла ҡаты булыр.

Түрәләрсә киҫәтеү ҙә ине был.

Губернаторҙы ҡаршыларға кантон көймәле повозканы ектерҙе; аттарҙың бейеп торор иң шәптәрен үҙе һайланы; буяулы дуға, ҡайыш ҡамыт, ышлыя, йүгән һәм дилбегәләрҙең көмөш биҙәктәренең ялтлап тороуынаса төпсөндө. Белә: кантондарса тиерлек булһын. Байрам-ҡунаҡ саҡҡа бәҫле Бохар бәрхәтенән тегелеп уҡалар менән ҡаймалы ҡытат кантон кейемен кейеп алды, башына — ҡондоҙонса боҫтау башлығын. Әрле кейем мыҡты кәүҙәле, түңәрәк ҡара һаҡаллы Ишмөхәммәткә кантон да ғына кантон булыр азамат һын-ҡиәфәт бирҙе.

Өфөнән Ҡамышлы юлы менән килер губернаторҙы кантон ярҙамсыһы Динмөхәммәт зауряд-хорунжий хәрби кейемдә уплап һыбайлыһы менән Өршәк күперенә етеп ҡар-

шылаһа, Ишмөхәммәт кантон үҙе көймәһендә Йомран-Табын волосы сигендә көтөп торҙо. Губернатор менән кантон башлығының осрашыуы рәсми булмаһа ла, ул үҙенсә бер тантаналы тамаша төҫөн алды барыбер. Алтынлы-көмөшлө дәү көймәһендә мисәүле аттарҙа атлы казактары оҙатыуында килгән, ә ике яҡлап башҡорт һыбайлылары елгән хәлдә генерал Перовскийҙы 9-сы башҡорт кантоны башлығы йола буйынса икмәк-тоҙ, яҡты йөҙ менән ҡаршыланы. Һылыу ҡыҙҙар ағас туҫтаҡ менән ҡымыҙ һондо. Хәрбиҙәрсә ҡыҫҡа ғына рапорт кеүек һүҙ әйткәс, кантон үҙе алдан юл башлап, генерал-губернатор экипажын оҙатыусы һыбайлылар эскорты менән йәйләү ҡарай юл тартты. Ҡаршылаусылар ҡарап хайран итеп торҙолар: алтмыш йәштәргә яҡынлап килгән Перовский эполетлы, алтын позумент һәм бахромалар менән нағышланған генерал мундирында, генерал папахаһында уғата мөһәбәт ине, буй-һыны ла, шаҡтай ҡалыная төшөүенә ҡарамаҫтан, офицерҙарса төп-төҙ, оҙон ҡуйы ҡаштар аҫтынан ҡараған ҡарашы үткер. Йөҙөндә ҡартлыҡ сырайын бик белдермәҫ ниндәйҙер мөләйемлелек бар.

Перовский генерал-губернатор башҡорттарға ҡаты ҡуллылығы, ара-тирә мәрхәмәтлелек ғәләмәте менән билдәле. Уның ғүмер юлы башҡорт иле, бергә хәрби походтар менән бәйле. Ишмөхәммәт кантон, губернатор ҡул аҫтында оҙаҡ эшләгәс, холоҡ-ҡылығын, эш-ғиғылдарын, тормошон күберәк беләлер, бәлки. Уға шул ҡәҙәреһе мәғлүм: ишетеүенсә, Перовский атаҡлы дворян Разумовскийҙарҙың береһенең тыума улы. 18 йәшендә 1812 йылғы француз яуында Бородино яланында ҡатнашҡан, шунда енелсә яра алған, аҙаҡ Мәскәүҙә әсир төшөп, күп михнәт-яфалар сиккән. Николай батша тәхеткә ултырғанда бола ҡубып, шунда контузия алған, һуңыраҡ төрөк һуғышында йөрөгән, ҡаты яраланған, яу батырлыҡтары өсөн орден, миҙалдар менән бүләкләнгән. Һәр хәлдә, ут-һыуҙар кискән, дары-төтөндө күп еҫкәгән, яфалар алған бер яугир, батыр офицер. Университет бөтөргән уҡымышлы кеше. 1833—1842 йылдарҙа Ырымбур губернаһы губернаторы сағын яҡшы беләә. 1836 йыл ҙур түрә менән яҡындан танышты. Тырышлығы, тоғролоғо өсөн Ишмөхәммәт кантонды губернатор яҡын күрҙе шикелле, бүтәндәргә үрнәк итте. Ә бына хәҙер ҙә, 1852 йылда, уға тәғәйенләп, үҙ күреп икенсе тапҡыр ҡунаҡҡа инеп сығырға уйлауы ла юҡтан түгелдер. Әүәлгесә оло ҡунаҡты ҡәҙерхөрмәт итә белергә лә, ярай алырға ла бик кәрәк.

Элекке губернаторлығында Перовский Ишмөхәммәт йәйләүен бик оҡшатҡайны. Хәҙер ни эшләр олоғайған түрә?

— Генерал-губернатор Василий Алексеевич ғали йәнәп-

тәре,— ярым рәсми телдә мөрәжәғәт итте Ишмөхәммәт кантон, йәйләүгә килеп төшкәс тә. — Бойороғоҙ, ҡайҙа, бурама өйгәме, аҡ тирмәгәме туҡталырға теләгегеҙ?

— Бойормайым. Һеҙҙеңсә, ҡунаҡ хужаның ишәге, тиҙәрме әле,— тип шаяртты губернатор һәм өҫтәне, — миңә, уңайһыҙламаһам, тәбиғәт яҡынлығы шәп, аҡ тирмә танһығыраҡ. Миңә, ҡарт кешегә, билде һалҡын һуҡмаҫтай булһа, шул ярар. Юлда поход режимы ҡулай.

— Башҡорт йәйләүе бивуакка әйләнмәһә икән, ғали йәнәптәре. Оло ҡунаҡты ҡәҙер-хөрмәт итеү хужаның бурысы.

— Ярай, Ишмөхәммәт Ишемголович, үҙегеҙ ҡарағыҙ. Мин рәсми кеше, губернатор булыуға ҡарағанда бер тәүлеккә генә булһа ла ғәҙәти ҡунаҡ кешеһе булғым килә. Ә хәҙергә ял итеп алырға яй булһа, шул етер.

Һаҡлыҡҡа тотолған өр-яңы кейеҙ аҡ тирмә йәһәт ҡоролоп та өлгөртөлдө. Эске йыһазы — келәм, балаҫтары, яйшарттары йәйләүсә, әммә затлы, таҙа һәм бөхтә ине.

Юлдан арып килгән ҡарт түрәне үҙе теләгәнсә бер ниндәй церемонияһыҙ еңелсәрәк һыйлап, үҙенсә генә ҡунаҡ итеп, хәл-ял алырға күберәк форсат ҡуйыу менән тамамланды ул көн.

Былай бик тәмле генә йоҡлап, әммә күптәнге яралары һыҙлауҙан иртә уянған губернатор таңғы ҡоштар һайрауын, йыраҡта ат бышҡырған, һыйыр мөнрәшкән тоноҡ тауыштарҙы тыңлап оҙаҡ ятты. Ырымбурҙа губерна эштәре менән мәж килеп, фармандар биреп, ҡабул итеүҙәр үткәреп, рәсми этикеттарҙы тотоп, хәрби тәртиптәрҙе һаҡлап йонсоған графҡа тәбиғәт ҡуйыны, йәйләүҙең үҙ яйы һәм шарттары барыһын онотторор, талсығыуҙарын бөтөрөр өр-яңы донъя ине. Хәйер, Ырымбур яғында Һаҡмар буйында губернаторҙың әүәл йыл да тиерлек сыҡҡан бер йәйләү резиденцияһы бар ине лә ул барын. Хәҙер уға, ни эшләптер, аяғы тартмай, күңеле ятмай. Йәйләүенә шәһәр шауҡымы инеп, тәбиғи ҡото-ние бөткәйне шул.

Был юлы йәйләүҙә ниндәйҙер экзотика, һәммәһен юйҙырыр бер ҡомар көҫәй кеүек ине губернатор күңелен. Шуны тойоп-белеп торғандай, хужа кеше бөгөнгөһө көндө төпкөл туғайға сәфәр ҡылырға, ҡош һунарын ҡарарға тәҡдим итте ҡунаҡҡа. Перовский шундуҡ хуплап, «туғайға һәм ҡунмалы барырға!»— тип өҫтәне.

Ҡунаҡ һүҙе — ҡанун. Походтағыса йәһәт әҙерләнделәр, ҡуҙғалдылар. Юл-һунарсараҡ йәтеш кейемдәре лә табылды. Ҡошсо Йәмбәттең (әллә губернатор менән кантондыңдамы) бәхете бар икән: һунар бөркөтөнөң асыҡтырылған, яҫҡыр мөддәтенә тап килде.

Ишмөхәммәт тәғәйен кешеләренә Ҡесе Талпаҡ күле туғайының иң матур урынын һайлап тирмәләр ҡорорға, ниндәй балыҡтар ауларға, бүтәненә-ниенә әмерен бирҙе лә үҙҙәре бер өйөр халыҡ Ҡарағайлы урманы тарафына йүнәлде.

Һунар эше Йәмбәт ҡулында. Ҡош һунарының үҙ хикмәтле яҡтары күп икән шул. Йәмбәт ҡошсо, бының бар нескәлектәрен белгән кеше, губернатор менән кантонды, бер нисә яранын Ҡарағайлы урманының уяҫ бер оло яланы башына ҡуйы ҡыуаҡлыҡ төбөнә илтте, һөрәнләп кейек ҡыуыусыларын бүлеп-бүлеп һәр төбәккә, үҙ һуҡмаҡтарын күрһәтеп бирҙе, үҙе бөркөтө менән оло ҡунаҡтар ҡорона ҡушылды. Әйтеүенсә, Ҡарағайлыла былтырлы-быйыллы төлкө, ҡуян ныҡ үрсегән, төпкөлдә бүреләр төйәге икән. Тик йәйгеһен бүреләр туйынған һәм түлләнгән миҙгелдә уларҙы өҫкөтөү бик ҡыйын, имеш. Ышаныс төлкөлә һәм ҡуянда.

Төп һунарсылар һәм һағалаусылар ҡыуаҡ төбөндә яйланып күпме ултырғандарҙыр, бер мәл ҡыуғынсылар һөрәне яҡынлаша башлауға улар түҙемһеҙлек менән көтөр һағыраҡ һәм айбарыраҡ киәфәткә инде. Губернатор сабырһыҙланып бер нисә тапҡыр пистолетын ҡулына нығыраҡ ҡыҫты, урман буйын һағыраҡ алан-йолан байҡаны. Уңарсы урмандан өс пар үрҡуян атылып сыҡты, ялан аша нәҡ былар өҫтөнә томоролоп килә башланы. Атырға тип әҙерләнгән губернаторҙы ҡошсо иплəп кенә тыйырға мәжбүр булды:

— Генерал, тәксир, ашыҡмағыҙ! Үтеп киткәс атырһығыҙ. Юғиһә бүтәндәре өркөр.

Генерал-губернаторҙың түҙемлеге еттеме-юҡмы, ул эргәләренән тиерлек йәнәш йән-фарман сабып үткән ҡуяндарҙың һырт биреүе менән ҡуш көбәкле пистолетынан аллы-артлы атып та ебәрҙе. Ҡуянҡайҙар бер-бер артлы тәкмәсләп барып төштөләр. Был хәлгә ни эшләргә белмәгән Йәмбәт ауыҙ эсенән ниҙер мығырланды ла ҡаса-боҫа ҡыуаҡ осона табан урын алыштырырға мәжбүр булды, уларға Перовский ҙа эйәрҙе. Ярай әле фарт-ҡоттары бар икән: ҡаршылағы урман ҡырында бер төлкө күренде. Йылғыр кейек берсә үлән араһына инеп юғалып, берсә ҡайҙалыр һырты ғына күренеп ҡалып, эҙ яҙлыҡтырырға булаша ине буғай. Ҡошсо ҡулындағы бөркөтөн күккә сөйҙө, ҡыйғыр ҡош ҡыйылып күккә атылды ла, тоҡтонлоҡта талсыҡҡан оҙон ҡанаттарын киң йәйеп, бейеклекте түңәрәкләп иңләй башланы. Осҡор бөркөт күҙе төлкөнө тиҙ шәйләне, ахырыһы, бер тирәне ҡыйылдырып бер нисә тапҡыр өйөрөлгөләп алды. Ул арала төлкө, күрәһең, боҫҡан еренән ҡуҙғалып,

ҡыуаҡлыҡҡа табан бер-ике эре-эре һикереп яһаны. Алдарында уның баҙлап торған күҙҙәре, осло мороно сағылып ҡалды. Уғаса бөркөт һауалаған күктән уҡтай шыҡыйып төлкөгә атылды, уны ергә һырыҡтырып башы-моронона үткер тырнаҡтарын батырып өлгөрҙө, үткер томшоғо менән әллә күҙен-ниен суҡып алды, ҡанаттары менән ҡатыҡаты бәргеләне. Ҡорбанына тыбырсынырға ла ирек ҡуймай, бөркөт бер-ике тапҡыр суҡып, төлкөнөң түбәһен тишеп мейеһен эсергә үк тотондо. Һунарсылар был тамашаны күреп, аптырап-иҫәңгерәп торған арала, Йәмбәт ауған төлкө янына йүгереп барып етмәһенме. Ул ниҙер әйтеүгә, бөркөтө, ҡорбанын ҡалдырып, хужа ҡулына ҡунды, алдан әҙерләнгән өс-дүрт киҫәк итте ҡарһаланып һоғопа башланы. Шулай тынысланa барҙы йыртҡыс. Бүтәндәр ҙә килеп етеп ҡараһалар, алдарында бер аршынға яҡын ҡыҙғылт һоро буйлы оҙон ҡойроҡло, ҡуйы йөнлө дәү төлкө һуҙылып ята ине.

Ишмөхәммәт кантондың һынамышлы күҙе был төлкө тиреһенең ҡиммәтен самалап алғайны инде.

— Василий Алексеевич, ҡулығыҙ ҡалай еңел. Йола буйынса тәүге һунар улъяһы — һеҙгә.

— Рәхмәт. Былай булғас, Ырымбур дамаларының күҙҙәре ҡыҙғылт төлкө тиреһенә ҡыҙасаҡ икән.

Губернаторҙың былай хуплауы уға шәберәк ҡама, шәшке, һыуһар тиреләренең өҫтәлеренә ишарат ҡына ине. Быныһы үҙе ҡатнашҡан һунар ҡомары булыуы менән һиммәт.

Ҡилһә килә: һунарҙың аҙағы ла уң булды. Ары Ҡесе Талпаҡ күлендәге һунарҙа Перовский үҙе дүрт өйрәк атып төшөрҙө. Хужаның осоп барған өйрәккә уҡ менән тейҙерә алыуына хайран итте. Үҙе лә ҡапыл йәйәгә һонолғайны ла, һирәк тотор ҡоралдан яҙа атып ҡуйырын уйлап, кире дүнде.

Ҡунаҡ өсөн әҙәгенә ҡарағанда мәҙәге ине. Ул танһыҡлаған һунар ҡомары менән кинәнде. Үҙе атҡан шөшләнгән ҡуян, өйрәк итен ауыҙ итте. Төнгө усаҡ уты ҡаршыһында донъяһын онотоп ирәйеп ултырҙы, йәш буҙа шауҡымынан рәхәтләнеп, әллә ниндәй татлы хыялдарға төшөп китте, хәтирәләргә бирелде. Хатта ул 1839—1840 йылдарҙағы ауыр Хиуа походын да был юлы тынысыраҡ иҫләне. Башҡорттарҙың шул иң хәтәр походтағы талымһыҙлыҡтарын онотторлоҡ түгел ине. Ҡурайсының шул яуҙа сығарылған «Перовский» көйөн уйнап ебәреүе оло ҡунаҡҡа йәнә бер хөрмәт билдәһе өҫтөнә шәмгә тамған майҙай булды. Ил-йорт, Рәсәй, тип күпме ҡандар ҡойған, оло түрәләре өсөн йәндәрен фиҙа ҡылырға әҙер торған башҡорттары ла баһа.

— Яу юлдарының башы минең өсөн Бородино булды,— тип хәтеренә төшөрҙө ҡунаҡ.— Шунда мин тәүге яра алдым.— Шул саҡ ул алтын балдаҡлы сәнсәк бармағын ут яҡтыһынараҡ һондо, бриллиант ҡашы әллә нисә төрлө ялтырап китте.

— Был бриллиантлы алтын балдаҡ ҡына түгел, яра протезым да ул. Имен-иҫән ҡалыуым билдәһе. Әйтһәм әйтәйем, ошонда һеҙҙең арала ултырыуым менән мин һеҙгә, тоҡомдаштарығыҙға мәңге бурыслымын. Француз атлыһының баш осомда һелтәгән ҡылысына башҡорт һөңгөһө һонолмаһа, башым, бәлки, әллә ҡайҙа тәгәрәп китер ине. Башҡорттарым, һеҙ булғанда мин имен, һеҙ барында миңә һан.

Оло ҡунаҡ генерал-губернаторлығын онотоп, йомшарып киткәнен тойҙо буғай, ҡапыл йәнә етди төҫкә инде һәм, арығанын белдереп, йоҡоға таралырға бойорҙо.

Иртәгеһен һуң ғына тороп, тәмле һыла, бәрҙе һурпаһы һәм балығы менән һыйланып алғас, төп йәйләүгә ҡайттылар. Генерал-губернаторҙың килгәс тә әйтеп ҡуйыуы буйынса, бөгөн башҡорттарҙың хәрби һәләтен, ғәйрәтен тамаша ҡылыу ине ниәте.

Көнбайышлап арыраҡ ятҡан бер таҡыр һыртлауҙа әрмеләрҙә булған йә булырға әҙерләнгән илле-алтмышлап ир-егеттең атта нисек арба, кәртәләрҙе һикертеп үтеүен, ҡылыс менән нисек таҫыллы эш итеүен, сабып барған көйө мылтыҡтан, уҡтан атып сәпкә тейҙерә алыуын, бүтән һөнәрҙәрен һоҡланып ҡаранылар. Барыһына ла ҡәнәғәт булды шикелле оло ҡунаҡ. Аңлағандар самалағандыр: генерал-губернаторҙың былай тамаша ҡылыуы күңел өсөн түгел, үҙенсә хәрби һынамыш сараһы ине. Килеүенең төп серен ул кантондың үҙенә генә тиште: киләһе йылдың яҙына Урта Азияға Аҡ Мәсеткә походҡа йыйына икән, шуға кантон бер йөҙ һыбайлыһын әҙер торорға тейеш. Был әҙерлек әлегә хәрби сер.

Кисен инде йәнә Ҡайынлыҡул буйында ҙур табын ҡороп, башҡорт батырҙарының көрәшен ҡарап кинәнделәр. Бында Атлас ҡарт күптәргә бил бирмәй. Ҡунаҡты, хужаны тағы һоҡландырған шул булды: яҡын туғандары Өмөтбаев Көҫәпҡолдоң өсөнсө улы Дәүләтбай көрәштә оҫта яҫҡышыр, ауан-ауан батырҙарҙы еңер, хатта биленән ҡыҫып алып күтәреп алғанда өйрөлтөп, ниндәйҙер һүҙен әйтеп таҫыллы сөйөп ебәрер батыр булып сыҡты. Атаһына, зауряд яһауылға ярҙамсы булған был батыр егетте генерал-губернатор үҙе тороп, башҡортса ике ҡуллап күрешеп, ҡотлап, үҙенә хеҙмәткә килергә саҡырҙы. Бындай хөрмәт тағы кемгә тейә.

«Беҙ ишеткән һәм күргән көрәшсе батырҙар» тигән бер яҙмаһында Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев аҙаҡ шуларҙы теркәп ҡуйыр:

«1841 йылдарҙа булһа кәрәк Ырымбурҙа башҡорттарҙың Каруан һарайы исемле дворецын бина ҡылғанда военный губернатор Перовский һәм башҡорттар ғәскәренең командующийы Циолковский башҡорт һәм ҡырғыҙ түрәләрен саҡырып, сәнәиғ (тамаша) ҡылып, аттар саптырып, көрәштәр яһағандар. Бәләбәй өйәҙе Дим буйындағы Яңы Көрмәнкәй ауылынан көрәшкә Мөхәммәтрәхим батыр сыҡҡан, ҡырғыҙ батырын еңгән.

Мең дә ете йөҙ ахырында беҙҙең Ибраһим Йомран ауылында мелла Наҙарғолдоң атаһы Биккенә батыр булған. Уны күреп беләмен. Бишул ауылында 1835 йылдарҙа Бикеш исемле бик шәп батыр булған. Походтарҙа күп йөрөгән. Мөкәй ауылында — Япар батыр. Ысын исеме Ғәбделяпар. Көрәштә батырҙарҙы күтәреп алғас, был ҡайһы илдең кешеһе тип өйрөлтөп йөрөтөр икән. Дыуан тиһәләр, дыуан халҡы араһына атыр ине, Кәлсер тиһәләр — Кәлсергә, Ҡумырыҡ тиһәләр — Ҡумырыҡҡа, Табын тиһәләр — Табын төркөмөнә атыр ине, ти. 1755 йылдарҙа Йомран Тәүәкәс ауылында Килмөхәммәт батыр Байбулат уғлы шәп булған. Йомран, Дыуан, Табын, Ҡумырыҡ тарафында йыҡмаған батырҙары ҡалмаған. Дим буйына көрәшкә сығып китер ине. Батырҙарҙы күтәреп, уратып йөрөтөп ташлар ине. Ҡанлы Төркәй ауылында 1895 йылдарҙа Шаһәхмәт исемле батыр... Батырҙарҙың иң ғәйрәтле сағы биш йыл».

Батырҙар менән генә ҡыҙыҡһындымы икән губернатор? Уның күҙенә Ишмөхәммәт кантондың ун бер йәшлек улы Мөхәммәтсәлим дә салынмай ҡалмағандыр...

Кантон хужаның ишле ғаиләһендә уландарға айырым һан. Ана оло улы Фәхретдин үҙ ярҙамсыһы. Ғәйнетдине, Мөхәммәтсәлиме үҫеп килә. Ишмөхәммәттең уйы һабаҡҡа зирәк Мөхәммәтсәлимен ҙурыраҡҡа уҡытмаҡта.

Һүҙ нисегерәк башланғандыр... Губернатор, бәлки, әйткән булыр:

— Оло улың үҙ юлынды ҡыуа икән. Ә уртансыһы ни эшләй?

— Сәлим тигәнен уҡытырға ине иҫәп.

— Ҡайҙа?

— Ырымбурҙың үҙендә, кадет корпусында, мәҫәлән.

— О, хуплайым теләгенде, Ишмөхәммәт Ишемғолович. Рекомендацияны үҙем үк бирәм. Илгә һеҙҙәй тоғро хеҙмәт иткән башҡорттарҙан уҡымышлы кешеләр ҙә бик кәрәк.

Теләһә, губернатор канцелярияһында эшләр. Тәржемәсе булыр...

Һәр хәлдә генерал-губернатор килгән йыл Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев өсөн — һынылышлы осор. Шул 1852 йылдың ноябрендә Ишмөхәммәт кантон улы Мөхәммәтсәлимде Ырымбурға Неплюев кадет корпусына уҡырға илтеп урынлаштыра.

## НӘҪЕЛ-ЫРЫУ

*«Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү мотлаҡ: беренсеһе — үҙеңдең сығышыңды, йәғни үҙ ырыуыңды белеү, икенсеһе — йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу һәм өсөнсөһө — ...риүәйәттәрҙе һәм өләңдәрҙе белеү».*

*М. Өмөтбаев*

### 1

Күп халыҡтарҙағы кеүек, башҡорттарҙың да борон яҙылмаған ғәҙәт-йола васыяттары булған. Шуларҙың береһе — үҙ нәҫел-ырыуыңды, халыҡ тарихын һәм рухи культураһын яҡшы белеү талабы. Был ғәҙәти кеүек күренһә лә, уның мәғәнә айышы тәрән. Телдән телгә, быуындан быуынға тапшырыла килер халыҡ хәтере, ололарҙың аманат һүҙе тураһында уның асылы.

Халыҡ хәтере иһә ул — тарих хәтере. Ололарҙың аманат һүҙе — яңы быуындарға изге теләктәре, тәжрибәләре, өйрәтмәләре — рухи байлығы. «Был нәмәләр аҙ уҡымышлы халыҡта оло ихтирам менән һаҡлана»,— ти М. Өмөтбаев.

Әүәл кешегә баһа һәм ихтирам ана шул үҙ нәҫел-ырыуың, халыҡ тарихын һәм күңел донъяһын күпме дәрәжәлә белеүенән башланған. Белекһеҙҙәрҙе халыҡ: илен белмәгән — игелекһеҙ, халҡын белмәгән — холоҡһоҙ, нәҫелен белмәгән — нәсәпһеҙ тип тамғалаған.

Башҡорттоң «Ете ырыу» тигән бер генеалогик риүәйәте бар. Борон аҡһаҡалдар йыйылып: «Аҙаматтар, ырыу башҡа булһа ла, бауыр бер бит. Беҙгә, бал ҡорто күстәре һымаҡ, бергә тупланмаҡ, оло ил-йорт булып ойошоп йәшәмәк хәйерле»,— тигәндәр. Халыҡ, керпек ҡаҡмай, аҡһаҡалдар һүҙен тынлап торған да, ырыу-ырыу кәңәшләшеп, үҙ ихтыярҙары менән аҡ батшаға барып һыйынырға уй төйнәгәндәр, ти. Ырыу аҡһаҡалдары йәнә йыйылып, Бөрйән ырыуынан Иҫке бей, Үҫәргән ырыуынан Бикбау бей, Ҡыпсаҡ ырыуынан Ҡараҡужаҡ бей, Тамъян ырыуынан Шәғәле Шаҡман бей тигән кешеләрҙе Иван Грозный батшаға ебәрергә булғандар, ти.

Был кешеләр Мәскәүгә барғас, батша: «Бик ҙур ҡунаҡтар килгән икән»,— тип ҡаршы алған, ти. Бөтә һанат, генералдарын йыйған, аш-һыу әҙерләп ҡунаҡ иткән. Бейҙәр-

ҙән барын да һорашҡан, бейҙәр ҙә илдең әйткән йомошон энәһенән ебенә саҡлы һөйләп биргән, ти. Шунан батша: «Барығыҙ ҙа миңә бер юлы баш һалығыҙ, һеҙҙең ер-һыуығыҙҙы ла үҙ арағыҙҙа бүлдереп бирҙерермен, тирә-яҡ хандар һеҙҙең илгә килеп аяҡ баҫа алмаҫ»,— тигән. Шулай, эре-эре ете башҡорт ырыуы, йорт-иле менән оло Рәсәй иленә ҡушылып, бергә-бергә йәшәп киткән, ти.

Әйткәндәй, башҡорттоң төп ете ырыуы тип йыш ҡына ҡыпсаҡ, табын, ҡатай, тамъян, үҫәргән, түңгәүер ырыуҙарын да атайҙар. Һәр хәлдә, башҡорт шундай эре-эре ырыуҙарҙан берләшеп хасил булған халыҡ, ҙур ырыу-ҡәбиләләр берләшмәһе. Һәр ырыу-ҡәбилә эсендә йәнә үҙ ырыу аралары, аймаҡтары, түбәләре бар.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев — табын башҡорто, Йомран табын ырыуы кешеһе. Табын ырыуы үҙе генә лә әллә нисәмә ырыу тармағына айырыла: табын, ҡара табын, барын табын, теләү табын, күбәләк-табын, ҡыуаҡан, һөйөндөк һ. б. Ул үҙе эре-эре ете ырыу. Табындар Ағиҙел буйҙарынан алып Урал тауҙарынаса, Урал аръяҡтарынаса әллә ҡайҙарға тиклем йәйелешеп яталар. Урал тауҙары шикелле, армыт-армыт, Ағиҙел шикелле тармаҡ-тармаҡ ул.

Ағиҙел буйында таралған М. Өмөтбаевтар нәҫеле ҡараған урта табын ырыуы үҙе йәнә ете ырыу тармаҡлы: йомран табын, кесе табын, кәлсер табын, дыуан табын, ҡумырыҡ табын, бишул табын, төкөн табын. Шуларҙың күбеһен тағы күрпәс бергә бәйләй: йомран-күрпәс табын, дыуан-күрпәс табын, ҡумырыҡ-күрпәс табын, бишул-күрпәс табын, кенәзләр-күрпәс табын. Былар заманында шундай исемдә волость булып та йөрөгән. Алда күрербеҙ әле, былары сығышы яғынан да бер тамырҙан.

Үҙ ырыу тарихын ныҡлап өйрәнгән М. Өмөтбаевтың үҙенән башҡа беҙгә быларҙы берәм-берәм айырып аңлатып биреүе бик ҡыйын, хатта мөмкин дә түгел. «Кесе табын халҡының бабалары һәм унан айырылған Йомран табын ере» тигән этнографик хеҙмәтендә ул шулай яҙа: «Кесе табын халҡы генераль пландар буйынса тәҡсим ҡылынған әүәл кесе табынға, йәнә төкөн табынға, кәлсер табын, ҡумырыҡ табын, дыуан табын, бишул табындарға. Өфө ҡалаһына яҡын Ағиҙелдең ике тарафы илә Оло Талпаҡ күленән Йыуалы күл тамағына тиклем йомран булыр. Әммә Ағиҙелде ике яҡлап, Ҡыуғанаҡ тамағынан Һәүәле күл тамағына тиклем, Ағиҙелгә ҡойған һыуҙарҙың башынан урап, йәмғеһе әүәле заманда кесе табын тип аталған.

Табын халҡы Златоуст өйәҙендә лә бар. Ҡара табын, барын табын тиҙәр. Бынан башҡа Йомран табын халҡы Һамар губернаһында, Туҡ даръяһының буйына күсеп ҡа-

лып, күп ер биләмештәр. Ундағылар һәмишә Йомран табын исемләнәләр, беҙгә туғандар».

Әйткәндәй, ошо Урта табын ырыуынан сыҡҡан әҙиптәр араһында йомран табын ырыуынан Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев үҙе булһа, Туҡ буйындағы йомран табындан — Дауыт Юлтый, Еҙем буйы кәлсер табындан — Мәжит Ғафури, Мырҙаҡай буйы кесе табындан Жәлил Кейекбаев бар. Ошо юлдарҙың авторы ла, үҙен ҡыҫтырған тимәһәләр, Ағиҙел буйы дыуан табын ырыуынан. Йәғни, М. Өмөтбаев әйткәнсә, былар яҡын туған табындар.

Кесе табын ырыуының шәжәрәһен, ғәҙәттә, Төмән бейҙән башлайҙар. Тарихсылар Төмән бейҙе — легендар Ашин хандың ейәне,—тарихи шәхес тиҙәр (Бичурин, Малов һ. б.). Боронғо Ҡытай документтарында ул Түмән хан, орхон-енисей таш яҙмаларында Тумын, Бумын ҡаған исемендә осрай.

Төмәндең улы — Майҡы бей. Легендаларҙа ҡаҙаҡ, башҡорт, ҡарағалпаҡ, табын ырыуҙарының башлығы Майҡы бей Сыңғыҙ хан заманында йәшәгән һәм унан бейлек дәрәжәһе алған шәхес булып күренә. XVI быуаттағы атаҡлы фарсы тарихсыһы Рәшитетдиндең «Жәмиғ әт-тәуарих» китабында Майҡы бей Сыңғыҙ хандың яу башлыҡтарының береһе тип яҙыла. Тимәк, ул да тарихи шәхес. Башҡорт шәжәрәләренә һәм тәуарих яҙмаларына нигеҙләнеп, М. Өмөтбаев былай бәйән итә: «...Төмән бей, унан тыумыш Майҡы. Ул Ҡара диңгеҙ тамағынан был яҡҡа сығып, үҙе бәйғәт биргән. Әммә ата йорто Ҡырым һәм Кубань тарафын ҡалдырып, Кубань, Волга һыуҙарын үтә. Яйыҡ тамағына килеп, унан үргә буйлап, Яйыҡ башынан, Тоболь һыуынан Иртышҡа тиклем барып, ер биләп, үҙенә табиғ халыҡтар менән ҙур хан булып торған. Дәхи шул ҡәҙәреһе мәғлүмдер: был Майҡы бей мәшһүр вә мәғрүф булған. Сыңғыҙ арайы Тимер Таймучин (Тимучин) хандың иң ҙур бейҙәренән булып, ҡағиҙә һәм ғәләмәттәр алыусы булған, йәғни Сыңғыҙ хан Майҡы бейгә тамғаларҙан ҡабырға тамға, ағастарҙан — ҡарағас, ҡоштарҙан — ҡарағош, оран өсөн «салауат» тигән һүҙҙе биргән. Һауытына сәйгәр тип исем биргән. Бөгөн беҙҙең Йомран табын илендә ошо рәүешле ҡабырға тамғалыр һәм Йомран табын халҡы: «ағасым — ҡарағас, ҡошом — ҡарағош, ораным — салауат, тамғам — ҡабырға, һауытым — сәйгәр» тип торорҙар».

---

*бәйғәт* — ант; *табиғ* — буйһоноусы; *дәхи* — тағы; *мәғрүф* — билдәле, күренекле; *арайы* — тоғро хеҙмәтсеһе, ышаныс ҡаҙанған кешеһе; *ғәләмәттәр* — билдә, тамға һ. б.

Башҡорт шәжәрәләре һәм тәуарихтары ла Майҡы бейҙе аҡ һөйәккә һәм ҡаһарман шәхескә сығаралар.

Легенда — легенда инде: унда ырыуҙы аҡ һөйәккә сығарыр һәм хан нәҫеленә, исеменә бәйләр өсөн шаштырыуы ла, фәстереүе лә булыр. Шулай ҙа тарихсылар күп кенә тарихи сығанаҡтарға таянып, табын, кесе, кәлсер, йомран ырыуҙарының генеалогик сығышы Үҙәк Азия һәм Алтай буйҙары менән бәйле икәнен раҫлайҙар. Ә легенда менән тарихтың тәңгәл килгән урындары күп.

Ярай, ырыу тармағынан бире киләйек. «Майҡы бейҙән тыумыш Солтан бей, унан тыумыш Әсәди (Эсди) бей, унан тыумыш Күрпәс бей, — тип дауам итә М. Өмөтбаев. — Әсәди менән Шәкәрле бей Себер йортонда Ибаҡ, Шибаҡ тигән Сыңғыҙ нәҫеленән булған ике ханға табиғ булып торғандары заманында, был хандар барса бейҙәрҙе үлтермәгә ҡасд ҡылғандар. Быны ханға ҡариб бер кемһәнә был ике бейгә агяһландырып: «Башығыҙҙы алып ҡасығыҙ, юҡһа һәләк булырһығыҙ»,— тимеш. Бәғдә Әсәди бей менән Шәкәрле бей, аттарына менеп, ҡасҡандар. Хан кешеләре ҡыуып тота алмағандар. Ҡатай халҡы ер бирмәгәс, унан үтеп, Инйәр даръяһын буйлап килеп, Ағиҙелгә еткәндәр. Ағиҙелде буйлап түбән Өфө иҙеле менән ике арала, Ҡарлуҡ исемле бер күл атауында бер аҙ әҙәмдәргә юлығып, хәл-әхүәл һорашҡандар. Был кешеләр әйткәндәр: «Ун бер ырыулыҡбыҙ, мең йәнлебеҙ». Мең ырыуы исемләнгәндәр. Ҡайһыларҙың бейҙәренән Ағиҙелдән Йыуалы күл тамағынан юғары Ҡыуғаҡ (Ҡыуғанаҡ) тамағына саҡлы биләмәк булып, ер һорағандар. Иҙелгә аҡҡан һыуҙары менән ер алғандар. Ҡайһы Мең ырыуында мал-хайуанат, йәғни йылҡы, һыйыр нәүғенән һис нәмәләрен ҡалдырмай ҡалмыҡтар алып киткән икән. Әммә Әсәди бей менән Шәкәрле бей мал биргәндәр һәм, олуғ Мең ырыуынан ефетләнеп, был Табын иләүенә баш булып ғүмер иткәндәр».

Бынан, Әсәди бейҙең Себерҙә Ибаҡ (Ибраһим) һәм Шибаҡ (Шайбани) хандар ҡул аҫтында булғанынан күренеүенсә, ул шайбаниҙар династияһындағы хандар осоронда, йәғни XV быуаттың икенсе яртыһында йәшәгәнлеге һәм шул хандар менән тыныша алмай Уралға Ағиҙел буйҙарына ҡасып киткәнлеге — табындарҙың Себерҙән Ағиҙел буйына миграцияһы асыҡлана.

Әсәди бей үҙе бер урында ғына төпләнеп ҡала алмаған. «Әсәди бей заманында был ергә (йәғни Ағиҙел буйына) һәмишә ҡалмыҡ сабып, яу булған,— ти М. Өмөтбаев.—

---

*ҡасд* — маҡсат; *ҡариб* — яҡын кеше; *агяһлау* — иҫкәртеү, белдереү; *бәғдә* — аҙаҡтан; *нәүғ* — төр, енес; *ефетләнеү* — ҡатын алыу, өйләнеү.

Шул сәбәптән Әсәди бей Зәй һыуы буйында тереклек ҡылып, шунда вафат булмыш. Мәғбәрәһе Зәйҙең арғы яғында, Ыҡ һыуы тамағының үрге яғында».

Профессор Р. Ғ. Кузеев раҫлауынса, кесе, кәлсер, йомран ырыуҙарының ата-бабалары Башҡортостанға беренсе мең йыллыҡтың икенсе яртыһында болғар ҡәбиләләре менән бергәрәк күсеп килгәндәр. Улар Ағиҙел буйына еткәнсе оҙаҡ ҡына ваҡыт Бөгөлмә яҫылығында юрматы-юрмый ҡәбиләләре менән йәнәш йә аралаш йәшәгәндәр. Кесе табындар үҙҙәренең «Иҫке йорто» итеп Нарыш тау буйҙарын, Ыҡ йылғаһы, Дим үрҙәрен иҫәпләйҙәр (Р. Г. Кузеев. Происхождение башкирского народа. М., 1974, 274-се бит).

М. Өмөтбаев яҙмаһына ҡайтайыҡ: «Әсәди бейҙең улы Күрпәс, уның улы Дәүләткилде бей, уның улы Байтирәк бей. Уның улы Аҡбирҙе бей Йыуалы күл янындағы Аҡбирҙе тауында булған (генераль план буйынса Йомран табын халҡына ҡалған тауҙыр). Уның уландарының береһе Бикшәйех, береһе Тимершәйех. Ул Ҡазан еренә күскән. Хәҙер Мамадыш өйәҙендәге Тимшәйех ауылы тиҙәр. Метрикала Тимершәйех яҙылалыр. Аҡбирҙе бейҙең йәнә бер улы Аҡсабый бей. Бикшәйех улы Ҡарабайыҡты заманында Өфө ҡалаһы бина һалынмыш. 1586 йыл тип документтар табылмыштыр».

Кесе табын ырыуында Күрпәс бей Рус дәүләтенә ырыуын үҙ ихтыяры менән ҡушыуҙа ҡатнашлығы йәһәтенән яҡшы билдәле:

«Күрпәс бей рустың царыы, йәғни ханы Иван Васильевичҡа барып, бәйғәт биреп, хеҙмәт иткән һәм ер биләргә указдар алған. Быны рус ханы Ҡазан ҡалаһына килгән заманда тимештәр... Аҡбирҙе ата-бабаларының төп йорто Өфөгә яҡын Аҡбирҙе тауына, Йомран Табын иленә килеп, йорт биләгән».

Күрпәс бейҙең ырыу тарихында тотҡан урынын аҙаҡ йомран табын, дыуан табын, ҡумырыҡ табын, бишул табын, кенәзләр табын ырыу тармаҡтарының һәм волостарының уның исеменә бәйле булыуынан да аңлап була. Тимәк, Күрпәс бей әлеге ырыуҙар тармағын башлаусы зат. Беҙҙең Дыуан-Күрпәс табын ырыуы һәм волосы ла уның исеменән килә.

М. Өмөтбаев был Күрпәс бей заманындағы һәм унан һуңғы шундай мөһим тарихи ваҡиғаларға ҡағыла: «Рус тәуарихтарында: «Өфө тарафында башҡорттар 1556 йылда баш һалды», тип әйтелә. Әммә 1557 йылда Иван Васильевич, ерҙәргә грамоталар биреп, тәҡәбеленә башҡорт

---

*мәғбәрә* — ҡәбер; *тәҡәбеленә* — ҡаршыһына, яуабына.

халкынан кырғыҙ һәм себер татарҙарын был ергә ебәрмәҫкә тип ғәһед алмыш. 1575 йыл башкорттар Себер ханының шахзадәләре Аблай менән Тәүкил Өфө калаһын һалдырмаҫка килгәндә... бик һуғышып, Аблай Кариҙел буйында (Өфөнән 15 сакрым, Аблай урманы тиҙәр) катия булынып, Тәүкил әсир булды тиҙәр.

Калмык һәм ғәйре халык тарафынан тыныслык булһын тип, башкорттар Өфө калаһын бина кылырға үҙҙәре һораған. Өфө калаһын һәм Һамарҙы һалдыртмаҫка нуғай халкының кенәзе Урус исемле кемһәнә Әстрхан губернаторына дәғүәләр йөрөткән һәм яу сығарған. Был Урус бейҙең әүладтәре хәҙер ҙә кенәз Урусов тигән нәсараның Петербургта мәшһүр түрәләрелер. Уларҙың береһе Василий Алексеевич Урусов, Оренбургка генерал-губернатор булып, Килмәк абыз, Акай, Караһакал, йәғни Солтангәрәй һәм Йосоп исемле башкорттарҙың һәм кырғыҙҙың Абулхайыр ханы яуҙарын шах Екатерина I заманында генерал Татищев, Котлоәхмәт Тәфкилев һәм Черкасский тигәндәр менән 1740 йылда баҫып, тыныслыкта калдырмыш. Быларҙың фетнәһендә биш йылда 30 мең башкорт һәләк булмыш».

Бында шуныһы ла иғтибарға лайык: хәҙерге Өфө тирәләре борон Йомран табындар ере булған. Ибраһим Йомран ауылы, Фәхретдин Мөхәмәтйәнов ағайҙың һөйләүенә карағанда, Йомран ауылы борон Өфө ерендә ултырған. Хәҙерге монумент янында. Унан, Өфө һалынғас, Шыпау янына күскәндәр. Бында имән ағасы үҫеп сыккан. Был билдә йәнә хәйерлегә түгел, бында ла урыҫтар ултырасак икән тип, хәҙерге урынына — Кыҙылғы буйына килеп нигеҙ корғандар.

## 2

Ибраһим Йомран ауылы XVI быуатта, бәлки унан элегерәк тә, нигеҙләнеп, XVI быуаттың һуңғы сирегендә хәҙерге урынына төпләнгән боронғо башкорт ауылдарының береһе. М. Өмөтбаевтың «Кесе Табын халкының нәсәбнамәһе» хакындағы генеологик яҙмаһына карағанда, Ағиҙел, Инйәр, Еҙем буйы табын ырыуҙарының Үтәгән, Төкөн, Сәйетбаба (Мырҙакай), Үтәш, Яуыш һ. б. шундай ук боронғо ауылдар.

---

*ғәһед* — ант; *катил* — үлтереү, һәләк булыу; *ғәйре* — башка; *әүлад* — нәҫел-ырыу; *нәсарани* — христиан.

Йәнә шуны билдәләп үтергә кәрәк: М. Өмөтбаев та Өфө ҡалаһының башҡорттар үҙҙәре һорауы буйынса һалыныуын раҫлай. Улай ғына түгел, был яңы ҡәлғәне ҡурғап, башҡорттар Рәсәй батшалығы яғында тороп, уны Себер хандары яуынан һаҡлашыуҙары күрһәтелә. Быны тарихи документтар дәлилләй. Башҡорт мәғрифәтсеһе Рәсәйҙе — уртаҡ Ватанды бергәләп һаҡлашыуҙы билдәләү менән бергә, нуғай кенәзе Урустың Өфөнө һалдыртмаҫҡа яу сығарыуын, ә аҙаҡ шул Урус кенәз тоҡомдары Урусовтарҙың урыҫлашып китеп, шуларҙың береһе Василий Алексеевич Урусов тигән кенәздең бер заман Ырымбур генерал-губернаторы булып, башҡорт яуҙарын рәхимһеҙ баҫтырыуын, ҡанһыҙ бәндә булыуын да ҡәһәрләп әйтергә баҙнат итә. Бүтән рус түрәләренә лә тел тейҙерә автор. Был баһа М. Өмөтбаевтың рус колонизацияһына киҫкен мөнәсәбәтенең бер ҡыйыулығы ине үҙ заманында.

Әлеге хеҙмәтендә ырыу тамырҙарын юллай килә-килә М. Өмөтбаев социаль-тарихи, ер, хоҡуҡ мәсьәләләренә инә бара. «Инде килдек йәнә ер хосусына, — тип яҙа ул, мәҫәлән, — Ҡасан кем Күрпәс бей, баш һалып, үҙенең ерен биләргә указ алған иргә, шул указды, балаларына мәсмүғ булһын тип, Өфө ҡалаһындағы воевод исемле олуғ түрәләргә мәғлүм ҡыла һәм уставной грамота ала торғандар. Көслө һәм залимыраҡ, байыраҡ халыҡ, күршеләренең еренә кереп, указ ала башлағандар. Указды яңыртыуҙа күп хыянат булып, берәүҙең еренә икенселәр йор теләк ҡыла башлағандар. Йөмләнән береһе: беҙҙең Йыуалы күлгә Өфө тарафынан Успенск монастыры монахтары керә башлағас, 1698 йыл, Мәскәү батшалары Иван һәм Петр Алексеевич заманында, беҙҙең Өмөтбай бабабыҙ улар исемдәренә прошениелар биреп, ғариза йөрөткән. Был Мәскәү архивынан алынған копияларҙа мәғлүмдер».

Үҙ фамилияларына исем биргән Өмөтбай бабаһын Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев ер, хоҡуҡ өсөн көрәшеүсе кеше булараҡ юғары баһалай. «Өмөтбай бабай XVIII быуат баштарында батшаларға күп ҡағыҙ биреп йөрөгән. Ахырҙа әл-әмир Петр, ҡатыны әбей батша Екатерина 1 үлеп, Анна Ивановна, Елизавета Петровна, ике Петрҙар булып, Екатерина II... рәзиәтте тыныслыҡта ҡалдырыр өсөн Россия дәүләтенә 1765 йылдың 17 сентябрендә манифест сығарған. Генераль межевание ижад итеп, йәғни һәр ырыуға ерҙәрен үлсәп, планын яһап, дәүләт мисәтен баҫып бирергә бойорған».

---

*мәсмүғ* — билдәле, ишетелер хәбәр; *әл-әмир* — батша; *рәзиәт* — бер дәүләт халҡы.

М. Өмөтбаев Өмөтбай бабаһын ил ағаһы тип атай. «Император Петр Алексеевич заманында беҙҙең бабаларыбыҙ Өмөтбай һәм Сәйетбай (Сәйет абыз тиҙәр ине) Йомран илендә булғандар. Өмөтбай ил ағаһы булып, Сәйетбай ҡәрәмәт эйәһе булған тип нәҡыл итәләр. Өмөтбай бабай, Йыуалы күлде Өфө монахтарынан дәғүәләп, император Петр Алексеевичҡа, батша булғандан башлап, ғаризалар йөрөткән, күлде монахтарҙан һәм ҡаратун рустарынан һаҡлаған. Йәнә нәҡыл итәләр: башҡорттоң бер яуынан һуң, икенсе һуғышмаҫҡа залог итеп, йәғни аманат итеп, Өмөтбай бабайҙы Мәскәүгә ебәргәндәр. Әлбиттә, аманатҡа бай йәки олуғыраҡ кемһәләрҙең балаларын алғандар. Өмөтбай бабай Мәскәүҙә үҫеп, ер биләргә грамота алып ҡайтҡан».

Шулай итеп, Өмөтбай ырыу, йәмәғәт ерҙәрен һаҡлау өсөн, ер, хоҡуҡ даулау өсөн көрәшсе ил ағаһы булып алға баҫа. Алда күрербеҙ, аҡ бабаһы һалған был эстафетаны аҙаҡ Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев дауам итәсәк.

«Ҡсе табын халҡының нәсәбнамәһе» буйынса Күрпәс бейҙән шәжәрә ебе шулай һуҙыла: «Күрпәстән ике ул тыуған, береһе — Юлҡотло, береһе Йөҙанбай (Буҙанбай). Быға ҡумырыҡ халҡы тотона. Йөҙанбай (Буҙанбай) улы Байшәйбәк. Уның улы Байғондо. Бының өс улы булған: береһе — Әлкәй, береһе — Аҡкүҙ, береһе — Байбүре. Был өс кешегә тотонған ауылдар бар. Әммә был Ҡсе табын шуның бер ҡисме Йомран Табын. Вә был Йомран Табын волосында бәғзеләр бабаларын ошо рәүештә яҙмыштарҙыр: Фәйрүшаһ хан, уның улы Туҡтар хан, уның улы Айҡымбирҙе, уның улы Йомран, уның улы Ишембәт, унын улы Мырҙаш, уның улы Өмөтбай, уның улы Үтәғол, уның улы Ғаббас, уның улы Ишеғол (Ишҡол), уның улы мелла Ишмөхәммәт кантон сәрдары...»

Ни тиклем күп быуынлы ҙур ырыу шәжәрәһе бит был!

Әгәр баштан алып Мөхәммәтсәлимдең үҙенә тиклем ырыу-нәҫел шәжәрәһе быуындарын теҙеп сыҡҡанда күп быуынлы генеология төҙөлә: Төмән бей — Майҡы бей — Солтан бей — Ихсан бей — Арслан бей — Аллабирҙе бей — Әсәди бей — Күрпәс бей — Дәүләткилде — Байтирәк бей — Аҡбирҙе бей — Бикшәйех — Мырҙаш — Өмөтбай — Үтәғол — Ғаббас — Ишеғол (Ишҡол) — Ишмөхәммәт — Мөхәммәтсәлим... Йәмғеһе — 24 быуын. XII — XIII быуаттарҙан алып XIX быуат уртаһынаса һуҙылған ырыу генеологияһы. Дворяндар династияһын көнләштерерлек боронғо ырыу-тоҡом

---

*нәҡыл итәләр* — һөйләйҙәр; *ҡисме* — өлөшө.

бит. Борсноғо башҡорт шәжәрәләренә хас булғанса, Йомран табын ырыуының да урта быуаттар сылбырында бейҙәр исеме килә. Традиция буйынса шулай ырыу башлыҡтарын атау мотлаҡ һаналған. Шулар хәтергә беркетелгән. Хан, бейҙәр заманынан һуң үҙ нәҫел-ырыу тармаҡтары йәйелә.

М. Өмөтбаев төҙөгән кесе табын ырыуы шәжәрәһенә шуныһы ла хас, ул ырыу бабаларының тарихта, социаль-ижтимағи барышта тотҡан ролдәренә иғтибар итергә тырыша, генеологияға характеристика бирә барыуы уға тәуарих (тарих) йөкмәткеһен һәм формаһын бирә. Күпселек башҡорт ырыу шәжәрәләре ошо типта. Тажетдин Ялсығол, Ғәли Соҡорой кеүек башҡорт әҙиптәре тарафынан дауам ителгәндәре бигерәк тә. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев та шул һәйбәт традицияны тота.

Үҙ ырыуының, нәҫел-сығышының шәжәрәһен яҙыуы менән М. Өмөтбаев башҡорттарҙың яҙылмаған ғәҙәт-йола васыятының беренсе шартын тулыһынса үтәй. Уны ысын уҡымышлыларса, әҙиптәрсә юғары сифатлы, нигеҙле итеп башҡарып сыға. Ҡабул ителгән, ҡанунлашҡан традицион формаһан һәм стиленән дә һис яҙлыҡмай.

Шулай итеп, М. Өмөтбаев быуындан быуынға телдән һәм өлөшсә яҙма рәүешле килгән кесе табын шәжәрәһен тулыландырып яҙып сыҡмаһа һәм ташҡа баҫтырмаһа, беҙ, яңы быуындар, бер ҙур ырыу һәм нәҫел-нәсәп шәжәрәһенән мәхрүм булыр йәки күп быуындарын, тарихи аңлатмаларын белмәҫ инек. Хәҙер ҙә авторҙың «Ҡесе табын халҡының нәсәбнамәһе» һәм «Ҡесе Табын халҡының бабалары һәм унан айырылған Йомран табын ере» исемле генеологик-тарихи хеҙмәттәренән тыш, ырыу-нәҫел ептәрен һәм бабаларының ғүмер юлын характерлауҙан ғажизбыҙ.

Асылың ниндәй — нәҫелең шундай тигән боронғолар. Айырым тоҫмалдар буйынса, Өмөтбаевтар нәҫеле ғәҙеллек, хаҡлыҡ өсөн даусыл ғына түгел, яусыл халыҡ та булған. XVIII быуатта бер-бер артлы ҡупҡан башҡорт яу-восстаниеларында Өмөтбаевтар ҙа күндәм ҡатнашҡан булырға тейеш. Өмөтбай бабаһы Алдар-Күсем яуҙарынан һуң Мәскәүгә хатта аманат итеп ебәрелгән. Улы Үтәғолдоң заманы ла ирек өсөн яулы осор. Ә 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында Йомран Табын волосынан ике йөҙләп ир-егет атҡа атлана, бөтә волость дәррәү рәүештә яуға күтәрелә. Тимәк, ишле ғаиләле Өмөтбаевтар нәҫеленән яуға бара алыр бар ир-егеттәре лә ситтә ҡалмаған, тигән һүҙ.

Нәҫел ебенең һуңғы быуындарынан халыҡ иҫәбен алыу — «ревизские сказки» материалдары буйынса, Мөхәммәтсә-

лимдең ҡартатаһы Ишеғол, уның атаһы Ғаббас хаҡында мәғлүмәт табабыҙ.

Ғаббастың алты улы булған: Ишеғол, Ҡүҫәпҡол, Теләпҡол, Ниғмәтулла, Ғәйнулла, Бирҙеғол. Оло улы Ишеғолдоң 1816 йылғы переписта 4 улы күренә. Бүтән туғандары ла ғаиләле. Ишеголға инде 52 йәш. Ҡатыны Мөкминәгә, Байбулат ҡыҙына — 35 йәш. Улдары Ишкилдегә — 21, Ишмөхәммәткә (Мөхәммәтсәлимдең буласаҡ атаһына) — 14, Динмөхәммәткә — 8, Ҡаһарманға 5 йәш. Ҡыҙҙары Сәлихәгә бер йәш. Ибраһим ауылы ул саҡ 8-се башҡорт кантонына ҡарай. Ҡантон башлығы — Шәрипов. Йорт старшинаһы — Ҡолбай Алыпйәпов. Ишеғол ғаиләһенең аҫаба башҡорттар — вотчинниктар икәне күрһәтелгән. Өмөтбаев бер яҙмаһында ҡартатаһының урядник булыуы тураһында әйтә.

Башҡортостанда кантондар системаһы урынлаштырылыу менән Өмөтбаевтар нәҫеле Ишеғолдан башлап хәрби хеҙмәт юлынан китҡәне күҙәтелә. 1834 йылгы перепистан күренеүенсә, Ишмөхәммәт инде — зауряд-хорунжий. Атаһы Ишеғол 1825 йылда вафат. Ғаббас улы Ҡүҫәпҡол — старшина, зауряд есаул. Йәше еткән бүтән ир заттары хәрби хеҙмәттә.

1812 йылғы Ватан һуғышында Йомран Табын волосы ҡараған 8-се башҡорт полкы сафында Йомран табын ирегеттәре, шул иҫәптән Өмөтбаевтар ғаиләһенән дә яуҙа ҡатнашалар. Яугирҙарҙың күпселеге Мәскәүҙе һаҡлаша, 1813—1814 йылдарҙағы походтарҙа Саксония, Бавария аша яу менән Францияға барып инә. Ҡүҫәпҡол 1807, 1808 йылдарҙа французДарға ҡаршы походтарҙа, 1812 йылды Мәскәү янындағы яуҙа була, аҙаҡ Мәскәү гарнизонында хеҙмәт итә. Батырлыҡтары өсөн миҙалдар менән бүләкләнә [1].

## 3

Өмөтбаевтар тоҡомоноң бер-ике быуыны, бигерәк тә Ишмөхәммәттең барлыҡ, ә улы Мөхәммәтсәлимдең тәүге ғүмер юлы кантонлыҡ осоро, кантонлыҡ системаһы менән туранан-тура бәйле. Шуға был тарихи-иҗтимағи күренешкә туҡталып китмәй ярамаҫ. Шунһыҙ Өмөтбаевтарҙың эшмәкәрлеген аңлауы ҡыйын булыр.

XVII — XVIII быуаттар һуҙымында йөҙ илле йылға яҡын бер-бер артлы ҡабынып торған башҡорт восстаниеларынан бик ныҡ биҙрәгән, бигерәк тә 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышынан ҡото осҡан Россия батшалығы

---

[1] Башҡортостан үҙәк дәүләт архивы. Перепись — «ревизские сказки». 1834 г. И — 138 оп. 2. Ед. хр. 456.

яусыл башҡорттарҙы нисек тә булһа ауыҙлыҡлар һәм уларҙың азатлыҡ ынтылыштарын быуыр өсөн төрлө сара-лар эҙләргә мәжбүр. Аҫыу-киҫеү, рәхимһеҙ ҡыҫыу менән генә эш сыҡмағас, административ, идеологик әмәлдәргә лә тотона самодержавие. Дини, идеологик яҡтан көслөрәк йоғонто яһар өсөн 1789 йылда Өфөлә Диниә назаратын аса. Шулай дин әһелдәре ярҙамында халыҡтың аңын, иркен ныҡырaҡ томаламаҡсы. Ә 1798 йылды Башҡортостанда кантонлыҡ системаһын индереп, башҡорттарҙы ҡаты режимда тотмаҡ була. Кантонлыҡтың хәрби-политик маҡсаты шунда: башҡорттарҙы хәрби хәлгә ҡуйып, улар өҫтөнән контролде көсәйтеү, ир-егеттәренең барыһын да оҙаҡ срокта хәрби хеҙмәттә тотоу. Шулай итеп, батша хөкүмәте уларҙы казаклыҡ хәленә ҡуя. Яңы режим башҡорттарҙың феодаль ырыу-ҡәбилә мөнәсәбәттәренә бәйле үҙидаралыҡ ҡалдыҡтарын да тамам юҡҡа сығарырға тейеш.

1798 йылғы указ нигеҙендә Башҡортостанда 21 кантон төҙөлә: ун бер башҡорт кантоны, бишәр мишәр һәм казак кантондары. Кантондар үҙ сиратында волостарға, бер нисә ауылды берләштерер йорттарға һәм командаларға бүленә. Кантон башлыҡтарын Ырымбур хәрби губернаторы тәғәйенләй, волость, йорт старшиналарын — кантондар үҙҙәре.

Батша хөкүмәте башҡорт феодалдарына таяна. Уларға дворянлыҡ дәрәжәһен тәтетмәһә лә, батшаға оҙаҡ һәм тоғро хеҙмәт иткәндәренә һирәкләберәк офицер чиндарын биргеләй. Унда ла ҙур түрәләргә, кантондарға ғәҙәттә иррегуляр ғәскәрҙең зауряд чиндары ғына сыға: зауряд-хорунжий, зауряд сотник. Бындай чиндар алғас та уларға байтаҡ льготалар тейә: офицер формаһын йөрөтә, аҡсалата йәки натураль һалым-йөкләмәләрҙән бушатыла, тән язаһына хөкөм ителмәй.

Кантондар менән кантон башлығы идара итә. Кантондың үҙ канцелярияһы, ярҙамсыһы, писары, йорт старшиналары, сотниктары бар. Был хәрби-административ аппаратты һәм ҡатламды тотоу халыҡ елкәһендә.

Кантондарға төп йөкләмә — хәрби хеҙмәт. Ил сиктәрен һаҡлау хеҙмәте. Башлыса Ырымбур хәрби линияһын. Ул үҙе биш дистанциянан ғибәрәт: 1-се дистанция Звеноголовский крепосы редуттарынан алып Верхнеуральскийға саҡлы, 2-се дистанция Верхнеуральскийҙан Ур крепосына хәтле, 3-сөһө — Ур крепосынан Ырымбурғаса, 4-сеһе Ырымбурҙан Уральскийғаса, 5-сеһе Уральськийҙан Гурьевҡаса. Шуларҙың тәүге дүртеһендә башҡорт һәм мишәрҙәр хеҙмәт итә, ир-егеттәр йыл да сик һағы хеҙмәтендә йөрөй. Байтаҡтарын илдең көнбайыш сиктәрен ҡурғау хеҙмәтенә лә оҙаталар.

Генерал-губернатор Перовский ваҡытында башҡорт-мишәр ғәскәре ойошторола. Ул ғәскәр халыҡ иҫәбенә тигеләй тотола. Аты, кәрәк-ярағы, кейем-һалымы, аҙыҡ-түлеге башҡорт һәм мишәрҙәрҙең үҙҙәренән. Хатта фуражы-ние лә. Хөкүмәт үҙе расход сығармай. Хеҙмәткә алынғанда үҙ аты-ние булмаған кешегә йәмәғәт ярҙам итә: атын, кәрәк-ярағын рәтләй. Үҙ ир-егеттәрен хөкүмәткә хеҙмәткә ебәреп тә бар расходын үҙ өҫтөнә алыуы халыҡҡа, әлбиттә, ҙур ауырлыҡтар килтерә. Ә хөкүмәткә шул ғына кәрәк: башҡорт-мишәрҙәр батшаға бушлай хеҙмәт итһен, ғәскәр тотоуҙы үҙ елкәһендә татыһын. Ирек, иреклек тигәндәренән тамам ваз кисһен, үҙенсә эш итергә һис бер яйы ҡалмаһын.

Кантонлыҡ дәүерендә ир-егеттәр 20 йәштән 50 йәшкәсә хәрби хеҙмәткә алынып булған. Күптәре 25—30-ар йыл хеҙмәт иткән, ғүмере батша хеҙмәтендә үткән. Заяға уҙған ғүмерен, әрме хеҙмәте ауырлығын шул замандың әрме йыры ла әсенеп әйтеп бирә:

Иртә генә тороп тышҡа сыҡһам,
Күренеп тора тауҙың үңере.
Егерме биш йыл хеҙмәт аҙ тимәгеҙ,
Егерме биш — ирҙәр ғүмере.

Әрмеләрҙә йөрөп сәс үҫтерҙем,
Сәскенәйем етте үрмәгә.
Егермелә китеп, ҡырҡҡа етеп,
Нисек ҡайтып илде күрмәгә.

Ҡаҙағстан Россияға ҡушылып, ҡаҙаҡтарҙың яу-барымталары баҫыла төшкәс, Ырымбур хәрби линияһының, Яйыҡ буйындағы кордон хеҙмәтенең кәрәге бөтә. Шунан һуң башҡорт-мишәр ғәскәрҙәрен төрлө эштәргә йәлеп итә башлайҙар. Ҡаҙна эшенең төрлөһө табыла: ул юл-тракт һалыу, урман киҫеү, һал ағыҙыу, ылау сабыу, хөкүмәт йорттарын төҙөү һ. б. Былары инде хәрби хеҙмәттән бигерәк бушлай аяуһыҙ эксплуатацияға әүерелә. Шулар ир-егеттәрҙең елеген һура, рәхимһеҙ иҙә, бөлдөрә.

Кантон башлыҡтарына хәрби һәм бүтән йөкләмәләрҙе үтәтеү, контроллек итеү эштәре тапшырыла. Ер-һыуҙарға, хужалыҡтарға ҡарар ҙур мәсьәләләр, эштәр, губерна, суд ҡарамағында. Башҡорт һәм мишәрҙәргә хәрби судтар индерелә. Вағыраҡ хужалыҡ, ил-йорт эштәре кантондар, шәриғәт суды хөкөмөндә. Кантонлыҡ, мосолман идаралығы губерна, хәрби властарға буйһона.

1258



УРЯДНИКЪ и ШТАБЪ-ОФИЦЕРЪ
*Башкирскихъ кантоновъ. 1838–1845.*

*Башкорт кантонлыҡтарының урядниғы менән штаб офицеры*

Утыҙынсы йылдарҙа кантондар йәнә алты округка бүленә. Йәки уларҙы попечительство тип тә атайҙар. Уларға попечителдәр ҡуйыла. Былар иһә, асылда, кантондар өҫтөнән күҙәтселек ҡыла. 1855 йылғы реформала Башҡорт-мишәр ғәскәренә типтәрҙәрҙе лә индереп, дөйөм Башҡорт ғәскәре төҙөлә. Ул 9 попечительствоға, 28 кантонға һәм 394 ил-йортҡа бүленә. Ишмөхәммәт кантон булған 9-сы башҡорт кантоны 25-се башҡорт кантоны булып китә һәм уның үҙәге Ибраһим менән бергә Ҡабаҡ ауылы иҫәпләнә.

4

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың ҡартатаһы Ишеғол Ғаббәс улы 25 йыл хеҙмәт итеп бары урядник чинын ғына ала алған. Уны күп ғүмерен йыл да тигеләй 15 майҙан 15 ноябргә тиклем алты ай самаһы кордон хеҙмәтендә үткәргән тип уйларға була. Ырымбур линияһы һағында. Үҙе олоғайып, ә ул-ҡыҙҙарының йәш булыуына ҡарағанда, ғаиләне хәрби хеҙмәтен яртылаш тамамлағандан һуң ғына ҡороп ебәргәнгә оҡшай. Үҙенә, 1816 йыл инде — 52 йәш, ә улдары — 8—14, бер ҡыҙына бары бер йәш.

Улдарын да шул уҡ кантонлыҡ заманының оҙаҡ һәм ауыр әрме хеҙмәте көтә. Уның дүрт улы ла шул юлды үтә. Ишле ғаиләнен шул яғы яйлыраҡ, йыл да бер еткән улы кордонға китһә лә, хужалыҡ эшендә булышырға бүтәндәре ҡала, йорт-ерҙе, мал-тыуарҙы күпмелер бөтөн тоторға мөмкин. Ана, йортҡа бер-ике ул булғандар, олоғайғандар күпме ыҙа сигә, эш ҡулы етмәүҙән хужалығы тарҡала, малы бөтә, ғаилә бөлә.

Ишеғолдарҙың ишле ғаиләһенән, дүрт ир туғандар араһынан 17-гә сыҡҡан егетте, Ишмөхәммәтте, походҡа яҙғандар. Шулай итеп, 1817 йылдың ғинуар башынан ул башҡорт казагы булып хеҙмәт итә башлай. 1818 йылда Орск крепосында кордон һағында йөрөй.

Тарихта сәйер яҡтар күп. 1734 йылда статский советник Кириллов етәкселегендә Ур буйында ҡаҙаҡтарҙы ҡурғар, ҡаҙаҡ ханы Абулхайырҙың ҡышҡы резиденцияһы булыр тигән һылтау менән һалдырылған Орск (Ур) крепосын хәҙер, киреһенсә, ҡаҙаҡтарҙың үҙҙәренән, төрлө сапҡын-барымталарынан һаҡларға тура килә. Ҡаҙаҡ далалары менән башҡорт далаларын бүлеп аҡҡан Яйыҡ һыуы буйлап ҡәлғәләр, кордондар ҡороп, ғәскәр тотола, кордон ҡарауылы алып барыла.

Хәлле генә тормошло Ишеғолдоң Ишмөхәммәтен казаклыҡҡа еренә еткереп әҙерләгәндер тип фараз итергә мөм-

кин. Ҡуптәр алдында һынатмаç өсөн йылҡы өйөрөнән иң тилбер ике ат һайланған булырға тейеш. Эйәр-өпсөнө, ҡайыш-йүгәндәре, артмаҡлыҡтары, ҡуржындары-ние һәммәһе артыҡ булмаһа ла, бүтәндәрҙекенән кәм булмаç. Аты, бар кәрәк-ярағы, фуражы, кейем-һалымы казачий устав талап иткәнсә әҙерләнмәһә, казак командирҙар ҙа ҡабул итеп бармай. Шулай үҙ аттары, бар нәмәһе менән ысын яһау булып кордонға киткән башҡорт казағы, иртә яҙҙан ҡара көҙгәсә алыç Ырымбур линияһында ҡарауылда йөрөп, ноябрь аҙаҡтарында ғына, үҙе тамам йонсоп, кейем-һалымдары туҙып, аттары миктәп тыуған йортона ҡайтып төшә. Ишмөхәммәттең дә тәүге казак хеҙмәте шулай башланған булыр.

1822 йылды ул Таналыҡ ҡәлғәһе кордонында хеҙмәт итә. Ҡордонды уң яҡлап һуҙылған һырттарҙың ҡалҡыуыраҡтарында, түбәләрҙә пикеттар ҡоролған. Линия тирәләй йәшерен пикеттары бар. Ҡарауыл постары шуларҙа урынлашҡан. Күҙгә күренер-күренмәç урындарҙа, уйпаттарҙа ҡамыштан теҙеп тотҡар сик һыҙыҡтары яһалған. Пикет араларында һыбайлылар ҡарауылда йөрөп тора, ул-был була ҡалһа, пикетҡа, пикеттан ҡәлғәгә тиҙ генә хәбәр ителә, тревога бирелә.

Был йылдарҙа Ырымбур линияһының шаҡтай ғына хәүефле сағы. Ҡаҙаҡ солтандары сик буйын юçыҡ-юçыҡ сапҡындар, барымталар менән тынғыһыҙлап торалар. Сикте һиҙҙермәй үтеп, йә казактарҙың мал-тыуарын, йә башҡорттарҙың йылҡыларын өйөрөп алып китәләр, хатта ауылдарҙы килеп баçалар.

Бер мәл Ишмөхәммәттәр командаһы ҡарауылда торғанда иртәнгеһен сик һыҙығының боҙолоуын күрәләр, кисеү ярындағы ат тояғы эҙҙәренең күплегенә ҡарап, ҡаҙаҡтарҙың төнөн ҙур төркөм һыбайлылар менән сикте үтеп китеүен шәйләйҙәр. Йәһәт кенә йәнәш пикетҡа хәбәр һалалар, унан крепосҡа ат саптыралар. Тревога ҡубыуға, пикеттан пикетҡа ут яғып сигналдар ҙа бирелә. Ҡазак һәм башҡорттарҙың ҡораллы һыбайлылары барымтасылар эҙенә төшә. Утыҙар-ҡырығар саҡрым эскә инеп киткән, унан төркөмләп йәйләү, ауылдарға таралған баçҡынсыларҙы табыу, эҙәрлекләү, әлбиттә, еңелгә тура килмәй.

Ишмөхәммәттәр командаһы иллеләп ҡаҙаҡ-ҡайсаҡ атменәрҙәрен ҙур өйөр йылҡы малын әйҙәп алғанда тап итә. Мылтығы бар мылтыҡтан, йәйәһе бар уҡтан атып, һөңгөләһе һөңгө, һуйыллыһы һуйыл менән яçҡынып ике яҡ бер-берсһенә ябырыла. Ҡанлы орош китә. Тәүге бәрелештә үк ике тиçтәгә яҡын үле йә үлемесле яралы кешеләр ятып ҡала, ҡаты йәрәхәтле аттар ужарғынып сыйнай, эйә-

һеҙҙәре тырым-тырағай саба. Был типкен атлы төркөм һырт биргәнсе өйөрҙө эйҙәгән барымтасылар байтаҡ юл алып өлгөрә. Ҡыуғанда юлға ҡалдырылған боҫҡондан да ҡырыла атлы казактар. Шулай ҙа баҫҡынсыларҙы тарҡатып, йылҡы өйөрөн барыбер һалдырып алалар.

Бына шулай барымтасылар йә ҡасҡындар менән алышырға ла, яу-сапҡын хәлдәрен кисерергә тура килә кордон һаҡсыларына. Оҙон юлға, походҡа сыҡҡан саҡтар йыш. Шулай йәшләй төрлөһөн күрә башҡорт казагы менән ат башы.

> «Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй
> Ер-егеткәй менән ат башы»,—

тигән йыр юҡҡа ғына сыҡмаған.

Мөхәммәтсәлим атаһы хаҡында: «Бер бик алыҫ походтан ул бер нисә йылдан һуң вахмистр чинында ҡайтҡан»,— тип яҙа. Ул ниндәй поход булғандыр, ҡулыбыҙҙа асыҡ ҡына өҫтәмә мәғлүмәт юҡ.

Һәр хәлдә, ун йыл буйы яулы, походлы хәрби хеҙмәттәренән һуң Ишмөхәммәт 1826 йылдың ноябрендә урядник чинына үрләтелгән. Шул чин менән тыуған яғына ҡайтып төшкән мундирлы Ишмөхәммәтте күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел: башында тар тирәсле оҙонса ҡайыма бүрек, өҫтөндә ал погонлы текә яҡалы, еңдәре көмөш галун менән сигелгән күк куртка, аяғында ал лампаслы күк сукно салбар, ҡара итек. Билендәге яҫы ҡушағына пистолет менән ҡылыс беркетелгән. Эйәрле, шпорлы ат өҫтөндә иһә ир-егеттәрҙең бынамын тигән казактың казагы.

Урядник чины бирелгәс тә шул 1826 йылдың аҙағынан 9-сы башҡорт кантонында, үҙ ауылында старшина писары булып эшләй башлаған. Был эште ул 1831 йылдың майына тиклем башҡарған. Ә 1831 йылдың июленән 1832 йылдың апрель башына саҡлы 5-се башҡорт полкы составында Ишмөхәммәт көнбайышҡа алыҫ походҡа киткән.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың яҙыуынса, башҡорт-мишәр ғәскәрҙәре 1827—1829 йылдарҙа рус-төрөк һуғышында ҡатнашҡан, Дунай буйына, Молдавияға походта булған. «1830—1831 йылдарҙа поляк һуғышына — Варшава ҡалаһына ебәрелгән. Бәғзеләре Могилев губернаһында торғандар. Шуның өсөн башҡорттарҙың Могилевка походы тип әйтерҙәр ине. Беҙҙең атайыбыҙ шул походта булмыштыр...»

Ишмөхәммәт был оҙаҡ походта 1830—1831 йылда поляк восстаниеһында ҡатнашыусыларҙы Воронеж, Тамбов, Пенза губерналарынан этап менән оҙатыуҙа ҡатнашлыҡ иткән.

Хәрби устав ҡушҡанын нисек кенә теүәл үтәмәһен, ирек, хоҡуҡ даулап элекке башҡорт восстаниеларында күп ҡат-

нашҡан ырыуҙаштарын, Өмөтбай, Үтәғол бабаларының яугирлыҡтарын, әсирлек һәм аманатлыҡ яҙмыштарын яҡшы белгән Ишмөхәммәттең даусыл поляк әсирҙәренә күңеленән теләктәш тә, уларға әҙәмсә мөнәсәбәт тә һаҡлағандыр тиергә нигеҙ бар. Һәр хәлдә, быңдай оҙаҡ һәм йонсотҡос ауыр походтар, төрлө илдәр, ерҙәр, кешеләр күреү, яҡшыһына, яманына осрау ил ағаһы булыр кешенең донъяға ҡарашы формалашыуҙа эҙһеҙ үтмәгәндер, моғайын.

«Минең атайым булғанлыҡтан, мин уның ғәҙел эштәре, эскерһеҙлеге һәм башҡа сифаттары хаҡында һөйләп тормайым, — ти Мөхәммәтсәлим. — Бары 1836 йылға тиклем империяның Көнбайышҡа һәм Көнсығышҡа, Урал тауҙары арьяғына ойошторған төрлө походтарҙа ҡатнашлығын ғына әйтеп үтәм...»

Ил ғәмен йыйған ир ил ағаһы булыр, ти башҡорт мәҡәле. Илдәр, ерҙәр ғәмен күреп, оҙайлы походтарҙа йөрөп, хәрби хеҙмәттең ғазап-асыларын татыу Ишмөхәммәтте ил ағаһы булырлыҡ ир итеп етештергән тиергә була.

1834 йылғы 7-се перепись мәғлүмәттәре буйынса, Ишмөхәммәт Өмөтбаевты зауряд-хорунжий чинында күрәбеҙ. Ул инде күптән ғаиләле кеше. Сама менән, үҙенә 22—23 йәштәр тирәһендә өйләнгән булырға тейеш. Ҡатыны Әлимбикә исемле. Ике улы, ике ҡыҙы бар. Оло улы Шәмсетдингә туғыҙ йәш, кеселенә өс йәш. Фатима исемле ҡыҙы — ун, Хәкимә исемлеһе биш йәштә.

Ир аҙаматы — илдә кантон, өйҙә ир булыр, тигәндәр. Әммә, шул уҡ ваҡытта, ҡаранан сыҡҡан хан булмаҫ, ҡаҙаҡтан икән дан булмаҫ тигән нәҡел һүҙ ҙә бар халыҡта.

Әммә ни тимә, Ишмөхәммәт Өмөтбаев 1836 йылда 8-се башҡорт кантоны башлығы инде. Аҫаба заты менән түгел, абруйы, оҙаҡ һәм тырыш хеҙмәте менән яулаған булһа кәрәк был оло вазифаны. Быны — атаһының кантон булып нисек һайланыуын — Мөхәммәтсәлим былай аңлата: «Ҡазак полкына тикшереү үткәргән сағында ғәскәр командующийы генерал Циолковский уның хәрби командирлыҡ һәләтен күреп ҡалған. Был ваҡытта Ишмөхәммәт Өмөтбаев командала тәжрибәле офицерҙың булмауы арҡаһында, отряд начальнигы вазифаһын атҡарған булған. Үҙенә йөкмәтелгән бурысын үтәгәндән һуң, ул, бай булмаған кешенең, өҫтәүенә, урядниктың улы, Циолковскийҙың теләге буйынса хәлле офицерҙар менән бер рәттән кантон башлығы итеп һайлау өсөн кандидаттар исемлегенә индерелгән. Ғәжәпкә ҡаршы, бөтәһенән дә күберәк тауыш алған, шунда уҡ офицер итеп үрләтелгән һәм кантон начальнигы вазифаһын атҡарырға рөхсәт алған». Тимәк, хеҙмәтенә күрә хөрмәте, хөрмәтенә күрә вазифаһы. Бәлки, бында халыҡ

әйткән дә хаҡтыр: уҫал булһа, аҫырҙар, йыуаш булһа, баҫырҙар, урта булһа, түрә яһарҙар.

Өмөтбаевтар эше, тырышлығы менән үрлогән һәм ишәйгән нәҫел. Бына 1850 йылғы 9-сы ревизия-перепись мәғлүмәттәренә генә күҙ һалайыҡ. Өмөтбаевтар инде ишле ғаиләлеләр. Ишеғолдоң оло улы Ишкилдегә 54 йәш (ул 1850 йылдың көҙөндә вафат була). Ҡатыны Бәҙриямал 50 йәштә. Улдары Ишназар уҡымышлы кеше: указлы мулла, имам хатип. Уға 28 йәш. Ғаиләле. Ҡатыны Гөлгәүһәр 22 йәштә. Ҡыҙҙары Ҡәримәгә 7 йәш. Ишкилдененең икенсе улы Ибраһимға 14 йәш.

Ишмөхәммәт Өмөтбаев инде ике бисә менән донъя көтә. Үҙенә 47 йәш. Беренсе ҡатыны Әлимбикә Борханетдин ҡыҙы 46 йәштә. Икенсе ҡатыны Бәлхизә Балапан ҡыҙы 35-тә. Тәүге ҡатынынан ике ул: Фәхретдингә 19 йәш, Ғәйнетдингә — 12. Икенсе ҡатынынан өс ул: Мөхәммәтсәлимгә — 9 йәш, Ғабдуллаға — 5 йәш, Сөләймәнгә — 4 ай. Оло ҡатынынан 10 йәшлек ҡыҙы Зөһрә, кесе ҡатынынан өс ҡыҙы бар. Оло ҡыҙы Бәҙеғөлъямалға — 11 йәш, уртансыһы Ғәлимәгә — 7 йәш, кесеһе Хәнифәгә—4 йәш. Ишмөхәммәттәр ғаиләһендә 78 йәшлек ҡәйнәһе Йомабикә ҡарсыҡ та бар. Күрәһегеҙ, бик ишле ғаилә.

Ишеғолдоң өсөнсө улы Динмөхәммәт өс бисәле. Үҙенә 45 йәш. Оло бисәһе Хәҙисәгә — 41 йәш, икенсеһе Мәҙинәгә — 33, йәш бисәһе Бибисараға — 29 йәш. Оло бисәһенән дүрт ул: Хөснөтдин (20 йәш), Шәрәфетдин (12 йәш), Ғиләжетдин (5 йәш), Сиражетдин (2 йәш). Ике ҡыҙ: Дәүләтбикә (16 йәш), Гөлъямал (10 йәш). Уртансы бисәнән бер ул: Шәйхелислам (5 йәш), өс ҡыҙ: Алмабикә (12 йәш), Сәхибъямал (9 йәш), Әсхәбъямал (бер йәш). Тәүге бисәһенән Хөснөтдин исемле улы үҙе башлы-күҙле. Уның 17 йәшлек кәләше Бибихоҙайбә исемле.

Ишеғолдоң дүртенсе улы Ҡаһарман ике бисәле. Оло бисәһенән ике улы бар: Ҡамалетдин — 6 йәштә, Шиһабетдин — 4 йәштә. Ҡесе бисәһе Әминәнән ике ҡыҙ: Зәйниямал (13 йәш), Сәрбиямал (9 йәш). Күренеп тора: Ишеғол уландарының ғаиләһе ғәйәт ишле. Иш исемдәренә йәтеш есеме. Ул замандағы башҡорт ғәҙәт-йолаһы буйынса, бер атаның уландары ғаиләһе һәммәһе лә бер тирәлә, хатта бер ҙур ихата эсендә. Дүрт ғаиләгә йәмғеһе — 40 йән эйәһе. Ишмөхәммәттең үҙ ғаиләһендә генә лә 13 йән башы. Был бер ата балаларының ғаилә эсендәге туған-нәҫелден һәммәһен күрергә мөмкин: ата-әсә, олатай-өләсәйҙәрен, ағай-энеләрен, апай-һеңлеләрен, байбисә, туҡал, көндәштәрен, килен-килендәштәрен, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарын, ҡоҙасаларын, бикә-бикәстәрен, ҡайны-ҡәйнәләрен, ҡайнаға-ҡәйен-

бикәләрен, еңгә-еңгәсәйҙәрен, кейәү-бажаларын, ҡәйнешбалдыҙҙарын, апһын-абышҡаларын, ейән-ейәнсәрҙәрен.

Халыҡ әйтеме хаҡлы: нәҫел ишәйһә, ырыу булыр, ырыу ишәйһә, ырыҫ килер. Өмөтбаевтарҙың ишле нәҫел-ырыуына яйлап шулай ырыҫ та ҡунған.

Генерал-губернатор Перовский 1852 йылдың йәйендә ошо Ишеғол нәҫеленең ғәйәт ишле ғаиләләрендә була ла инде. Ҡантон башы был саҡлы нәҫел-ырыуҙы нисек урынлаштырып бөткәндер, хоҙай үҙе генә белә. Һәр ғаилә үҙ йүнен үҙе күргән сүрәттә лә.

Ишле ишендә, ҡушлы ҡушында. Был осорҙа инде Ишмөхәммәт үҙе тәжрибәле кантон башлығы. Энеһе Динмөхәммәт ярҙамсыһы. Зауряд-хорунжий. Ҡесе энеһе Ҡаһарман — урядник. Динмөхәммәттең улы Хөснөтдин — писарь, ағаһы Ишкилдененең улы Ишназар — имам хатип. Тимәк, Өмөтбаевтар үҙҙәре кантон түрәләр төркөмөн хасил итә хәҙер. Ә түрә кемдеке булһа, ил-йорт шуныҡы. Ишмөхәммәт Өмөтбаев кантон булғас, кантон үҙәге лә Ибраһим ауылына күсә, Йомран табын ырыуҙаштары ла күпмелер ышыҡ таба. Оҙаҡламай ағаһы Фәхретдин дә 27-се башҡорт кантонының кантон башлығы булып һайлана. Өмөтбаевтар ғаиләһенән ике кантон, ағалы-энеле кантон башлыҡтары — һирәктәргә генә тейер ҙур түрәлек был.

Ишмөхәммәт үҙе кантондар системаһы бөтөрөлгәнсе 25 йыл буйы кантон башлығы булып эшләй. Бындай ҙур стажлы бүтән кантондар юҡ. Шул оҙаҡ һәм тоғро хеҙмәте өсөн ул 25 йыл хеҙмәт итеү миҙалы менән бүләкләнә, изге Станислав ордены кавалеры була. 1853—1856 йылдарҙағы һуғыш иҫтәлегенә Владимир таҫмалы көмөш миҙал ала. 1853 йылда яҡшы хеҙмәте, батырлыҡтары өсөн сотник исеме бирелә, 1857 йыл — есаул чины. Тарихсы Әбүбәкер Усмановтың раҫлауына ҡарағанда, Ишмөхәммәт Өмөтбаев 1853—1856 йылдарҙа күпмелер ваҡыт Ҡырымда Севастополде ҡурғау һуғыштарында ҡатнаша.

Ил өмөтөн ир аҡлар, ирҙең данын ил һаҡлар, ти мәҡәл. Башҡорт мәҡәленә Ишмөхәммәт кантондың ил, ил-йорт алдындағы хеҙмәте һәм хөрмәте дәл килә буғай. Ишмөхәммәт Өмөтбаевтың Рәсәй иле ҡаршыһында тоғро кантон, ил-йорт ҡаршыһында ғәҙел түрә, ил ағаһы тигән оло исеме һәм даны ҡала. Улы Мөхәммәтсәлим быны шиғыр юлдары аша әйтеп бирә:

Булыптыр бер заманда
Ғәжәп һиммәтле бер аға.
Уның алдыға кем барһа,
Ҡылыр икән хәйер-доға.

Ишмөхәммәт уның исеме,
Иш булмыш исменә рәсме.
Румия мең һигеҙ йөҙҙөң
Башындалыр вөжуд есме.
Өфө өйәҙендә мәрхүм
Утыҙ йылдар булып кантон.
Вафа ҡылмай уға дәлнун
Ҡә Йомран илендә мәдфүн.
Был кантон тимәктең аслы
Ғәсакир нахиәһелер,
Был ир уның ағаһылыр
Өмөтбай кәниәһелер.

Хәҙерге тарих фәнендә һәм фольклористикала кантондарға һәм уларҙың эшмәкәрлегенә, ни эшләптер, гел генә кире нарыҡ бирелә. Улар эре феодалдар, батшалыҡтың яҡын ярҙамсылары, яуыздар һәм яфа-ыҙа күрһәтеүселәр, йәнәһе. Дөрөҫ, кантондар Рәсәй батшалығының Башҡортостандағы ҙур таянысы, күбеһе эре феодал, ил-йорт хакимы. Әммә улар араһында төрлөһө бар. Бар: Ҡолой кантон кеүек яуызы, рәхимһеҙ деспоты. Бар: Ишмөхәммәт кантон кеүек ғәҙеллекте һаҡларға, халыҡ мәнфәғәтен яҡларға тырышҡаны. Төхфәт Ҡыуатов кантон кеүек ҙур уҡымышлыһы, прогрессив ҡарашлыһы, башҡорт мәғрифәте, мәҙәниәте үҫешенә ярҙам итешкәне. Лоҡман кантон Ибраһимовтың ғалим һәм әҙип булып танылыр Ғәбдрәхим Усмановты уллыҡҡа яҙҙырып, ер биреп, башлы-күҙле итеп үҙ ҡарамағына алғаны яҡшы мәғлүм.

Өфө, Златоуст өйәҙендәге кантон башлыҡтарынан Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев бер нисәһен ыңғай яҡтан атап үтә: «Башҡорт ғәскәренең 65 йыл йәшәүе һуҙымында Златоуст, Өфө өйәҙҙәрендәге кантон башлыҡтары араһында Златоуст йортонда Бейеш, аталы-уллы Абулғәзиз Әбдрәшитовтар, ә Өфө йортонда Ҡара Яҡуп ауылынан Тәлғәт Мырҙаев, Ҡобау ауылынан Ғәббәс Тикеев, Йомран Ибраһим ауылынан аталы-уллы Ишмөхәммәт һәм Фәхретдин Өмөтбаевтар булған».

Ишмөхәммәт Өмөтбаев та үҙ заманы өсөн уҡымышлы кеше. Ул мәҙрәсә белеме алған. Уның остаздарының береһе Хаммат хәҙрәт. «Боронораҡ башҡорт халҡы күсмәле замандарҙа, мөдәррисәр талиптары (шәкерттәре) менән йәйләүгә сығып йөрөгәндәр, — тип яҙа М. Өмөтбаев. — Йөмләнән берс күрше Бишул Мансаҙы тигән ауылдан ата-

---

*вөжуд есме* — тыуған ваҡыты; *дәлнун* — күрһәтеп биреүсе; *мәдфүн* — күмелгән, ерләнгән; *ғәсакир нахиәһе* — ғәскәр административ бүлеге.

йыбыҙҙың остазы Хаммат хәҙрәт йөҙләп шәкерттәре менән Ҡарлыман һыуының буйында күсеп йөрмөштөр».

Ишмөхәммәт Өмөтбаевтың хеҙмәте, һиммәте тураһындағы формуляр исемлектә уның рус, ғәрәп һәм төрки телдәрен яҡшы белгәнлеге, шул телдәрҙә уҡыу-яҙыуы билдәләп үтелә. Тимәк, хәрби хеҙмәт осоронда, кантон булғанында ла, ул белемен камиллаштырыуҙы дауам иткән. Заманында писарь булған кеше.

Мөхәммәтсәлимдең әсәһе Бәлхизә тураһында мәғлүмәттәр күп түгел. Перепись материалдары һәм формуляр исемлек буйынса уның Ишмөхәммәттең йәш бисәһе икәне билдәле. Ул күрше ауылдан килен булып төшкән. Бәлхизә Уңғар ауылынан зауряд сотниғы Балапан Илембәтов ҡыҙы. 1834 йылда уға 19 йәш икәне мәғлүм. Ишмөхәммәт кантонға ул заманса ултырған ҡыҙ булып, 1837—1838 йылдар эсендә 22—23 йәштәрендә сыҡҡан булһа кәрәк. Баш балаһы Бәҙеғөлъямал 1839 йылда тыуған. Мөхәммәтсәлим — 1841 йыл. Барлығы өс ул, өс ҡыҙ тәрбиәләп үҫтергән. Ҡаҙаҡ мәҡәле әйтмешләй, алты бала тапҡан ҡатынды ханым, тиһәң, булмаймы ла ағай тигән кешене яным, тиһәң, булмаймы: Бәлхизә көндәш менән һыйышып йәшәй белер кесе кантонша ла, иренең яратҡан йәш бисәһе лә булып, татыу, тигеҙ ғүмер иткән. Үҙе бик һылыу, һәйбәт ҡәбилиәтле, бүтәндәргә үрнәк байбисә булған. Улы Мөхәммәтсәлим әсәһен шиғыр юлдарында шулай һынландырған:

Дәхи бер ярылыр Бәлхис,
Алыр ғибрәт ҡатын вә ҡыҙ,
Йөҙө шәме ҡәмәр йондоҙ
Уның узафылыр мең йөҙ.

Оло улының матур ҡәбилиәте, һәйбәт холоҡ-ҡылыҡһыры шул әсәһе тәрбиәһенән киләлер тип әйтергә ярайҙыр.

Ишмөхәммәттең оло ҡатыны Әлимбикә үҙен өлкән байбисә итеберәк тотһа, йәш ҡатыны Бәлхисе ишле ғаиләә, өй-йорт эштәре менән булыр хужабикә вазифаһын күберәк атҡарғандыр. Яҡшы ҡатын — өй күрке лә, йорт-ер ырыҫы ла. Күп ҡатын-ҡыҙға өлгө алырлыҡ һиммәт шунһыҙ булмай булмаҫ.

Татыу көндәш байбисәләр өй-йорт эсендә, ғаиләлә төп терәк булғанға күрә, Ишмөхәммәт кантонға бар көсөн, ғүмерен йәмәғәт эшенә, кантонлыҡ хәстәрҙәренә биргәндер тиергә мөмкин. Бар ил-йорт эше кантон иңенә төшкән. Ҡантондарҙың күбеһе үҙ мәнфәғәттәрен күҙәтеп, байыу, ҙур дәрәжәләр артынан ҡыуыу менән мауыҡһа, Ишмөхәммәт кантон мир эше менән көн-төн сапҡан, ил-йорт ғәме менән йәшәгән.

Ишмөхәммәт Өмөтбаев 1862 йылда алтмыш йәше яңы тулып уҙғанда вафат. Ун ете йәштән егерме йыллап хәрби хеҙмәт, утыҙ йылға яҡын кантонлыҡ эше уның сәләмәтлеген, әлбиттә, ныҡ ҡаҡшатҡан. Уның балаларына ҡалдырған байлығы, мал-мөлкәте лә, бүтән кантондар менән сағыштырғанда, әллә ни түгел. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың архивында 25-се башҡорт кантоны, икенсе йорто, Ибраһим ауылы есаулы Ишмөхәммәт Өмөтбаев мәрхүмдең мөлкәт мираҫы яҙмаһы (опись) һаҡланған. Кантондың йәш балаларына опекунлыҡ өлкән улы Мөхәммәтсәлимгә йөкмәтелгән. Бына ул листың төп өлөшө:

«Улы: Сөләймән, 14 йәш. Ҡыҙҙары: Хәнифә, 16 йәш; Фатима, 11 йәш; Суфия, 8 йәш; Зәйнәб, 5 йәш.

Ҡалған мөлкәт. Йорт-ҡаралтылар: Ҡуш йорт. Икешәр бүлмәле. Йоҡа таҡта менән ике бүлә ябылған. Ун дүрт тәҙрәле, алты ишекле. Ике кирбес мейес. Береһе урыҫ мейесе, береһе голландка. Йорттарҙың буйы 23 аршын, иңе 9 аршын. Ике бейек болдор.

Аш-һыу өйө. Биш аршынлы. Бурама аҙбар. Иҙән-түбәһе таҡта. Башы йүкә ҡабыҡ һәм дранса менән ябылған. Аҙбар буйына 20, иңенә 5 аршын. Кесе аҙбар. 8 аршын самаһы. Бурама аласыҡ. Һөйән ағасынан. Йүкә ҡабыҡ япмалы. Иңе-буйы алты аршын.

Йорт йыһаздары: Шкаф. Диван. Дүрт өҫтәл. Алты ултырғыс. Ике көҙгө. Ҡайын ағасынан ике һике. Шкатулка. Төрлө иҫке төрки китаптар. Бишәү. Поляк көмөш ҡашыҡтары. Ун туғыҙ. Поляк көмөшөнән кувшин. Ун ике фаянс тәрилкә. Өс фаянс һауыт. Биш сәйнүк. Өс батмус. 12 сынаяҡ. Өс еҙ самауыр. Бүтән ҡашыҡ-аяҡ.

Арба сана, сбруй: тәгәрмәстәре тимер ҡоршаулы повозка. Тимер табанлы оло сана. Ике ҡайыш ҡамыт. Ҡайыш дилбегәләр. Ике ҡайыш эйәр. Буяулы дуға. Ыңғырсаҡ, эшлейәләр.

Кейем-һалым: Сукно менән көпләнгән ике төлкө тун. Бохар ебәге менән көплө ҡарһаҡ төлкө тун. Бер толоп. Бохар халаты. Көпләмә бишмәт. Ҡаҙ йөнөнән түшәк. Йөн мендәрҙәр. Ҙур ковер. Бәләкәй ковер. Балаҫтар.

Формалы кейем-һалым: Сукно күк бишмәт. Пальто.

Мал-тыуар: бер туры ат, күк ат, алма сыбар ат. Ҡолондар. Ҡашҡа бейә. Күк бейә. Йәмғеһе биш баш.

Иген: иллe бот арыш. 200 бот һоло. 70 бот арпа. 80 бот бойҙай, 80 бот тары. Ужым ашлығы алты дисәтинә. 55 түмәр умарта. Ҡортһоҙ 20 таҡта умарта. 10 кәбән бесән.

Йәйләүҙәге ҡаралтылар: Бер иҫке ағас өй. Дүрт тәҙрәле, ҡабыҡ башлы. Бер кирбес мейес. Өйҙөң буйы туғыҙ аршын, иңе алты аршын. Ҡабыҡ япмалы бурама аласыҡ.

Ер иҙән. Ете аршын. Һөйәм ағасынан буралған аҙбар. Буйы туғыҙ, иңе алты аршын.

Ҡабаҡ ауылында: Кантон фатиры. Ике бүлмәле ағас йорт. Туғыҙ тәҙрәле, ике кирбес мейесле. Йорттоң буйы егерме ике аршын, иңе һигеҙ аршын. Ихата кәртәле. Ҡырҡ өс сажин. Ике ҡапҡалы».

Ишмөхәммәт кантондан ҡалған бар байлыҡ, мал-мөлкәт шул. Әгәр кантон идараһы менән бөйле ҡуш йортто һәм Ҡабаҡтағы кантон фатирын иҫәпкә алмағанда, кантон башлығының үҙ мираҫы бик кескәй генә булып ҡала. Етмәһә, описта, ни эшләптер, һыйыр малы, ваҡ малдар, ҡош-ҡорт бөтөнләй күренмәй: йә улар булмаған, йә иҫәпкә инмәгән. Йә иһә, ул саҡ иҫән булһалар, мал-мөлкәттең бер өлөшө кантондың ике ҡатынына бүленгән. Ләкин ул турала бер ниндәй документ, опись-фәлән юҡ.

## 5

Нәҫел-ырыу, ата-әсәләре менән таныштырғас, хәҙер булаçаҡ атаҡлы мәғрифәтсе һәм әҙип, ошо китаптың геройы Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың үҙе хаҡында һүҙ башларға ваҡыт. Әҙиптең фәнни-популяр биографияһын яҙыу бер бурыс. Әммә шунһы: уны тулыраҡ яҙыр өсөн материалдар наҡыçыраҡ. Ҡеçе табын ырыуының шәжәрәһен, туған халҡының тарихи сәхифәләрен бәйән иткән авторҙың үҙ тормошон, хатта ҡыçҡа ғына булһа ла автобиографияһын яҙырға тура килмәгән йәки уны кәрәк тип тә тапмаған. Замандаштарының уның хаҡында иҫтәлектәре лә йәки ҡорҙашы сыуаш халҡының күренекле мәғрифәтсеһе Иван Яковлевтың тәржемәи хәлен шәкерттәре үҙенән һөйләтеп яҙып алғаны кеүек шундай яҙмалар ҙа ҡалмаған. Ярай әле был бушлыҡты әҙме-күпме ҡаплай төшөр айырым документтар, баçма материалдар, иң ҡиммәтлеһе, мәғрифәтсе үҙе йыйғылаштыра барған шаҡтай бай архив фонды һаҡланып ҡалған. Шунһыҙ тере ҡулһыҙ булыр инек.

Ошоларҙы файҙаланып, әҙип йәшәгән замандарды, мөхитте өйрәнеп, төрлө сығанаҡтарға таянып, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың тормош юлын яҙып ҡарарға, күҙалларға тейеш булабыҙ. Төп канваһы төҙөлһә, уны артабан тулыландыра барыу киләсәк эше. (Күп мәғлүмәттәр, әҙиптең хаттары, байтаҡ шиғырҙары, яҙмалары китапҡа тәүләп индерелә).

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев Ырымбур губернаһы, Өфө өйәҙе, 9-сы башҡорт кантонының Йомран табын волосы Ибраһим ауылында 1841 йылдың 21 авгусында Ишмөхәм-

мәт кантон ғаиләһендә донъяға килгән. Был административ бүленеш, даталар, сығыш аныҡ итеп документтарға теркәлгән. Мөхәммәтсәлим, алда әйткәнебеҙсә, әсәһе Бәлхизәнең икенсе балаһы, атаһы Ишмөхәммәттең оло бисәһенең улдары менән бергә иҫәпләгәндә, ғаиләлә өсөнсө ул. Атаһына был саҡ 41, әсәһенә 26 йәш. Ата бер, әсә башҡа ике ағаһы бар: береһе Фәхретдингә туғыҙ йәш, икенсеһе Ғәйнетдингә өс йәш, апаһы Зөһрәгә бер йәш. Үҙенең бер туған апаһы Бәҙеғөлъямал өс йәштә.

Тимәк, Мөхәммәтсәлим тыуғанда атаһы Ишмөхәммәт үҙе кантон башлығы булып эшләгән, ике бисә менән йәшәгән, ғаиләһе ишәйеп барған хәлле тормошло түрә кеше инде. Улы, үрҙә телгә алған ҡуш өйҙөң береһендә тыуған булырға тейеш. Сөнки һайланыуына алтынсы йыл киткән ике бисәле кантон берләм өйҙә йәшәмәҫ. Йола-ғәҙәт буйынса һәр өйҙә айырым ғаилә.

Өйө ипленең ил-йорто һипле. Ҡантондың ипле ғаиләһе үҙ-ара татыу йәшәгән шикелле, туған Йомран табын волосы ла берҙәмерәк йәшәй ул заманда. Үҙе баш кантонлыҡ та сағыштырмаса тыныс.

Ере-һыуы бар ерен һөйләр, ил-йорто бар илен һөйләр, тигән кеүек, Мөхәммәтсәлимдең үҙе хаҡында һүҙ асҡансы, ул тыуған ауыл, ер-һыуы, йорт-иле тураһында бер аҙ мәғлүмәт биреп китмәй ярамаҫ.

Ибраһим ауылы — кантон үҙәге. Үҙәк һаналһа ла ҙур ауыл түгел, бары утыҙлап ҡына өйлө. Әүәл кантондар заманында кантон башлыҡтары кантон резиденцияһы итеп үҙ тыуған ауылдарын һайлар булған. Ишмөхәммәт кантон да шулай иткән. Ибраһим ауылының рәсми исеме уға нигеҙ һалған кеше исеменән. Халыҡ үҙе элек-электән Йомран ауылы тип атап йөрөткән. Ырыу исеменә бәйләп. Шуға бәғзе бер рәсми ҡағыҙҙарҙа ул ауыл Йомран Ибраһим тигән ҡуш исем менән дә яҙыла. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев үҙе лә ошо ҡуш исемде ҡулланғылай.

Ибраһимда 1859 йылғы 10-сы ревизия-перепись осоронда йәмғеһе 32 ғаилә йәшәгән: 135 йән ир, 143 йән ҡатын-ҡыҙ. Йәнәштәге Тоҡос ауылында 23 ғаилә: 102 ир, 118 ҡатын-ҡыҙ йән башы. Һуңыраҡ был ауылдар ҡушылып, Йомран Ибраһим урта ҙурлыҡтағы ауылдарҙың береһенә әйләнеп киткән.

Йомран Ибраһим менән Тоҡос йылға шикелле оҙон булып һуҙылған Ҡыҙылғы күленең һул яҡ ҡалҡыу яры буйлап ултырған. Уның аръяғында көнсығыш-көньяҡлап Ағиҙел туғайлыҡтары йәйелә. Унар саҡрымдар йәйрәгән был туғайлыҡ эреле-ваҡлы күлдәр менән тулы. Оло Талпаҡ, Кесе Талпаҡ, Балапан, Солтан, Ҡаракүл, Ҡәсеүән,

Йырғаҙы, Татыҙай, Таллы, Имәнкүл исемле эре күлдәре генә лә унлап. Улар үҙҙәре бер-береһенә саҡ ҡына ялғанмай оҙон-оҙон йылғалар шикелле теҙелешеберәк ята. Улар, күрәһең, заманында Ағиҙелдең үҙәне булып, иҙел яңы үҙән ярғас, үле иҙел күлдәренә әйләнеп ҡалған. Ҡыҙылғы ла әүәл Ағиҙел үҙәне булырға тейеш. Уның буйы йылға шикелле артыҡ киңәймәй һәм тараймай биш-алты саҡрымғаса һуҙыла ла аҙаҡ йырынты рәүешенә әйләнеп, Ҡыҙылғы йылғаһына ялғана һәм Ағиҙелгә барып ҡоя.

Был Ҡыҙылғы менән Ағиҙел араһында ятҡан күлле, урманлы киң туғай әле лә бик хозур. Ә әүәл Мөхәммәтсәлимдең бала сағы һәм йәшлеге уҙған, үҙе шул туғай-күлдәрҙе ҡыҙырған заманда ул уң, йөҙ тапҡырға хозурыраҡ һәм байыраҡ булғандыр тип икеләнмәйенсә әйтергә мөмкин. Уны Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев «Йомран иле» шиғыры менән үҙе үк раҫлай:

Беҙҙе Йомран иле, тиҙәр,
Ағиҙелдең буйы, тиҙәр.
Беҙҙең дә бар гүзәл ерҙәр,
Ҡолаҡ тот, тыңла беҙҙәрҙән,
Ғәжәп хозурлы ерҙәрҙән
Ҡыҙылғыны ишет беҙҙән...
Балапан һәм Ҡесе Талпаҡ
Яталар миҫле аҡ ҡалпаҡ...

Тыуған ауылының, Йомран иленең был ғәжәйеп матур Ағиҙел туғайлыҡтарын, Ҡыҙылғы буйҙарын Мөхәммәтсәлим йәннәт гүзәллектәренә тиңләй. Тыуған яғының ана шундай матур тәбиғәте әҙиптә бала сағынан уҡ тәбиғәткә һөйөү, ер-һыуҙы ҡәҙерләү, гүзәллек тойғоһо тәрбиәләгән булыр. Тыуған ерҙе, ата-бабалар ғүмер һөргән төбәкте һөйөү ырыу-тоҡомдо, ил-йортто һөйөүҙән тыуған ил-Рәсәйҙе үтә яҡын, үҙ итеүгәсә үҫер. Ватан тойғоһо, гражданлыҡ хисе шулай формалашыр. Тыуған ауылының көн яҡлап йәйелгән ялан, баҫыуҙар, йәйләүлектәр, көҙләүлектәр, ҡарағанлы ҡалын урмандар әҙиптең күңелендә мәңге онотолмаҫ төбәктәр, киңлектәр, йәмдәр булып ҡалыр. Улай ғынамы, шул ерҙәрҙә емеш-еләктәрен тәмләп, бесән сабып, иген игеп түккән тир, тәм менән ҡаныңа, йәнеңә ҡушылыр. Алда күрербеҙ: шул ер-һыуҙарҙың, тәбиғәттең йәмен ебәрер, рәхимһеҙ талар ҡомһоҙ әҙәмдәргә ҡаршы дауға, алышҡа сығыр.

Ауыл ҙур булмаһа ла барыбер уның төрлө ҡатламы, байы, ярлыһы бар. Ҡабыҡ башлы, хатта бер нисә тупраҡ



الحمد لله رب العالمين الرحمن الرحيم
مالك يوم الدين اياك نعبد واياك
نستعين اهدنا الصراط المستقيم صراط
الذين انعمت عليهم غير المغضوب
عليهم ولا الضالين

*Авторҙың үҙ автографы һәм тыуған ауылдарының мәсете һүрәте (М. Өмөтбаев ҡулъяҙмаларынан).*

түбәле өйҙәр араһында биш-алты босмаҡлы таҡта башлы ҙур йорттар һерәйеберәк ултыра. Кантондың ҡуш йорто Ҡыҙылғының төшлөк башында, ҡалҡыу урында.

Күпселек халыҡ малсылыҡ менән шөғөлләнә. Бер-ике ат, һыйыр, ваҡ мал аҫрай. Хәллерәктәренең йылҡы малы унар, һыйыр-таналары бишәр-алтышар башҡа етә. Ҙур йылҡы өйөрҙәрс, ишле һыйыр малы, өйөр-өйөр ҡуйҙары булған байҙар бар. Аҫабаларҙа ер яғы иркен. Өйөр мал утлар яландар, бесәнен сабыр туғайҙар, иген сәсер баҫыуҙар етерлек. Маллы-түллеһе йылҡы малын, ҡуй-һарығын эргәләге генә Өфөгә илтеп һатыуы менән байый. Байтаҡ халыҡ умартасылыҡ, солоҡсолоҡ менән кәсеп итә. Өмөтбаевтар нәҫел-ырыуы мал аҫрап, күп умарта тотоп, шаҡтай иркен йәшәй. Егеренә, ашарына ғына мал тотҡаны күберәк урман эше менән шөғөлләнә: дегет ҡайната, һалабаш төшөрә, туғын бөгә, һал ағыҙа. Арала ер-биләмһеҙ халыҡ та бар. Уларҙың бер нисәһе ситтән килгән. Быларын аҫабалар килмешәк кенә тип йөрөтәләр. Ерһеҙ-малһыҙҙарын әтәмбәйҙәрҙән һуҡтыралар. Улар шул байҙарҙың малын көтөп, яллаһып тамаҡ аҫрайҙар.

Ауыл халҡы үҙе ашарлыҡ өсөн генә иген сәсә. Берәр-икешәр дисәтинә арыш, тары, һоло, ҡарабойҙай сәсә. Бәрәңге ултыртыу, емеш үҫтереү менән мәшәҡәтләнмәй. Бәрәңгене аш-һыуға тәм өсөн генә баҙарҙан һатып ала. Мал, бал кәсебе менән Өфө, Охлебин баҙарҙарына барғанда миҙгелендә ауыҙ итергә генә ҡыярын, кишерен, алмаһын алып ҡайтҡылай. Сәй-шәкәрен дә әсмүхәләп, шаҡмаҡлап ҡына ала.

Кантон малайы Сәлим ауылдың шул хәлле-хәлһеҙҙәрен, бай һәм ярлыларын күреп үҫә, шул уҡ аҫабаларҙың, әтәмбәйҙәрҙең балалары менән бергә уйнай. Хәрәмләшеп алған саҡтарында «кантун-ҡаҡтун» тип үсәүҙәренә лә артыҡ иҫе китмәй. Бәғзеләренә «әтәмбәй», «килмешәк балаһы» тигәнен күтәреүе генә ҡыйын. Ул мәл ғауға көрмәкләшкә, йоҙроҡҡа еткеләй.

Балалар өсөн донъяның ғәменә ҡарағанда ҡыҙығы күберәк. Улар Ҡыҙылғыны күк боҙ тотоу менән тимер аяҡта шыуырға, балыҡ шаңҡытырға керешә, ҡышын текә ярҙарынан шау-гөр килеп санала шыуа, ҡалтағай менән урманға сыға, яҙын ҡарҙан иртә асылған битләүҙәрендә ослоҡай һуға, һыйырҙар ҡобаһын ҡоя башлағас, йөндән туп яһап соҡор туптар уйнай, йәйгеһен йәмле Ҡыҙылғы буйҙарын ҡыҙыра, һыу ҡойона, болонона емеш-еләккә китә. Яҙын ҡарға бутҡаһына сыҡҡан саҡтар балалар өсөн үҙе оло байрам, йәйге һабантуйҙарын, ат сабыштарын, батырҙар көрәшен, көршәк ватыш уйындарын һөйләп бөткөһеҙ.

Ауыл балаларының ана шундай уйындарын, күңел асыу йолаларын, байрамдарын Сәлим дә уйнап, күреп, кинәнеп ҡатнашып үткәргән булыр. Улар аҙаҡ әҙип күңелендә бала саҡтың онотолмаҫ хәтирәләре генә булып түгел, уйын-йолаларҙың уйылып киткерлек күркәмлеге, байрамдарының халыҡ таһылы, рухи күрке булып ҡалыр, ғилми-тикшеренеү эштәрендә сағылыр.

Һабаҡҡа төшөр йәш тә тиҙ еткән. Ибраһимда һомғол ғына манаралы мәсет бар. Кантон хәҙрәт унда указлы уҡымышлы мулла тотоу хәстәрлеген күргән. Ул үҙенең иркен генә йортоноң бер яғын мәҙрәсә урынына һабаҡ уҡытырға файҙаланған. Бының өсөн йәмәғәттән, волостан үҙенсә әжерен дә, саҙаҡа-зәкәттәрен дә алған. Сәлим һабаҡҡа төшкән йылдарҙа уҡытыу арыу ғына ҡуйылған булһа кәрәк, Ибраһим имам хатибына Тоҡостан ғына түгел, Бишул, Мансаҙы, Ҡолош, Һәүәләй ауылдарынан йөрөп уҡыусы шәкерттәр ҙә байтаҡ булған. Оҫтабикәһе ҡыҙ балаларға хәреф таныҡҡан.

Имам хатиптың уҡытҡаны, әлбиттә, бары дин дәресе. Ул әлеб, бей, тей, сейләп хәреф-ижек танытыуҙан башланған. Был заман кескәй ҡәҙим мәҙрәсәләрҙә синыф, бүлекфәлән тигән нәмә юҡ. Һабаҡ ниндәй китаптарҙы өйрәнеү менән билдәләнгән. Әлеббейҙән һуң «Иман шарты» уҡытылған, унан «Һәфтиәге», «Мөхәмәҙиә»һе, бүтән төрки китаптары. Быларын Сәлим шәкерт тиҙ үҙләштергән буғай, имам хәҙрәт уға ғәрәп теленән, нәху һәм сарыфтан, хәҙистән үҙенә махсус дәрес биреүгә күскән. Ауыл мәҙрәсәләрендә имам хатиптар биш-алты йыл бирер дин дәрестәрен Сәлим өс йыл эсендә йырып сыҡҡан.

Алма ағасынан йыраҡ төшмәҫ, ти мәҡәл. Ә алма тәрбиәһе — наҙлы тәрбиә. Ишмөхәммәт кантон улының һабаҡҡа зирәклеген күреп, уны ҙурыраҡ мәктәптә уҡытыу уйына килгән булырға тейеш. Ата-әсәһе хаҡындағы шиғырында Мөхәммәтсәлим үҙе шулай яҙа:

Шул Бәлхис улылыр Сәлим,
Насип булмыш уға тәғлим,
Ата менән әсә уғлын
Теләптер ғилем нафиғын.

Ата кеше улының үҙ юлынан китеүен, әммә уға теймәгән махсус белем алып ҙурыраҡ һәм рус түрәләр ҡата-

---

*тәғлим* — белем алыу; *нафиғ* — файҙа.

рында булыуын теләгән. Улын кадет корпусында уҡытып, шунда белеш мөғәллим Мирсәлих Биксурин йәки подполковник Ҡыуатов кантон кеүек юғары чинлы белемле түрә итеү ниәте унда иртә уянған булһа кәрәк. Генерал-губернатор Перовскийҙың үҙе менән һөйләшеп, ул бер йәшлек Сәлимен Ырымбур хәрби корпусына уҡырға урынлаштырырға фатихаһын да алып өлгөргән.

*Икенсе бүлек*

# ЫРЫМБУР

*«Башҡорт халҡы фәнгә һәм һөнәргә бик һәләтле. Мәҫәлән, Ырымбурҙағы Неплюев исемендәге кадет корпусының Азия эскадронында башҡорт егеттәре айырылып торған».*

*М. Өмөтбаев*

1

Ун бер йәшлек Сәлимде Ырымбур ҡалаһы һоро таш йорттары, һерәйеп ултырған сиркәүҙәре, ике-өс таш мәсете, бысраҡ урамдары, тырым-тырағай һибелгән ваҡ өйҙәре, саман казармалары, меновой дворҙары менән сәйерһендереп ҡаршылаНЫ. Ҡыҙылғы буйҙарын, Ағиҙел туғайҙарын ҡыҙырып уйнап ирәүән үҫкән, ғәзиз әсә ҡулында иркен йәшәгән кантон малайына кадет корпусының хәрби тәртиптәренә, ярым казарма тормошона, ҡыҫынҡы таш бүлмәләренә күнегеп китеүе һис еңелдән булмағандыр. Ҡаланың үҙен дә, бүтәнен дә үҙ итәһе, үҙләштерәһе бар ине уға.

Ҡалайыраҡ ине һуң Мөхәммәтсәлимде үҙ ҡосағына алған Ырымбур ҡалаһы үткән быуаттың урталығында?

Ырымбурҙың һалыныуына инде был саҡта йөҙ йыл тулып уҙғайны. Уның хәҙерге урынына төпләнеп китеүе лә сәйер генә. Быуат эсендә даулы-яулы ине уның тарихы. Батша хөкүмәте Ҡаҙағстанға, Урта Азияға үтеп инер һәм Башҡортостанды тамам ҡулға алыр өсөн ныҡлы ҡәлғә булырлыҡ бер ҡала ҡорорға ҡарар ҡыла. Статский советник Кириллов башлығында хәрби экспедиция ойоштоiолоп, 1735 йылдың авгусында Ур йылғаһы буйында Ырымбур ҡәлғәһенең нигеҙ таштары һалына. Батшалыҡтың ҡәлғәләр менән уратып алырға, халыҡты тамам ауыҙлыҡларға йыйынғанлығын күреп торған башҡорттар баш күтәрә, яңы ҡорола башлаған ҡәлғәгә сапҡындар яһала, бөтә Башҡортостанды яу ҡаплап ала. Ҡилмәк абыз яуы шулай башланып китә. Ырымбур крайының хәрби губернаторы Неплюев, Ур буйындағы ҡәлғәнең бер яҡ иттә үтә хәүефле икәнен күреп, уны 182 саҡрым ӥpe Яйыҡ (Урал) һыуы буйында Красногор станицаһы урынына күсертә (элекке ҡәлғә хәҙер Орск ҡалаһы исеме менән аталып ҡала). Яңы

урында ла бик тамырлана алмаған, Ырымбур ҡалаһы, ниһайәт, 1742 йылда хәҙерге урынға, Яйыҡ менән Һаҡмар килеп ҡушылған моронға, ҡаялы тау башына һалына. Көньяҡтан Яйыҡ йылғаһы терәлеп аҡҡан бейек тау башындағы ҡала төньяғынан, бигерәк тә башҡорттар һөжүменән ҡурғау өсөн тәрән урҙар һәм бүрәнә менән нығытылған бейек ҡоролмалар, валдар менән уратып алына. Шулай итеп, ул ныҡлы бер крепосҡа, ҡәлғәле ҡалаға әүерелә. Уның был ҡоролмалары Крәҫтиәндәр һуғышы осоронда Емельян Пугачев ғәскәренең 1773 йылдың октябренән 1774 йылдың март аҙаҡтарына тиклем ярты йылға һуҙылған ҡамаулы һөжүмено лә бирешмәй ҡаланы һаҡлап ҡала. Ырымбур үҙе Ҡаспий диңгеҙенән Себергә, Тубыл йылғаһынаса, Ҡама буйҙарынан Ҡаҙағстан далалары эсенәсә, Арал буйҙарынаса һуҙылған, Рәсәйҙең сирек территорияһын тиерлек биләп торор бик ҙур губернаның үҙәгенә әйләнә. XIX быуат уртаһында был яҡтарҙа сәйәхәттә булған бер Европа кешеһе Ырымбур губернаһының колония менән провинция ҡушылдығын хәтерләткән край икәнлеген яҙа.

Географик яҡтан Ырымбур Европа менән Азия киҫешкән сиктә ятҡан, үҙе лә ярым европаса, ярым азияса бер ҡала. Уның тау башындағы үҙәге — губернатор йорто, канцелярриялары, сиркәүҙәре, казармалары һәм бай түрәләр йорттары менән — Европа таш ҡалаларына күпмелер оҡшаһа, ситтәге балсыҡ, ағас өйлө, бысраҡ тар урамлы биҫтәләре, мәхәлләләре, меновой дворҙары менән Азия ҡышлаҡтарын, саман тәпәш ҡалаларын хәтерләтә. Бер яҡтан Ырымбур империяһының көнсығыштағы бер форпосты икән, икенсе яҡтан, ул Азияға оло ҡапҡа. Ҡаҙағстанға, Урта Азияға инеү, Һиндостанға үтеү ҡапҡаһы.

Ырымбур—сауҙа ҡалаһы. Уның аша Европа тауарҙары Азияға сыға, Ҡаҙағстандан, Урта Азиянан мал-тыуар, ҡыҙыл мал, көньяҡ аҙыҡ-нәфәҡәләре, мамыҡ инә. Көтөү-көтөү мал менән алыш-биреш итер атаҡлы меновой дворы бар. Ҡалала каруанһарайҙары, лавка-кибеттәре күп. Сауҙагәрҙәр мыжғып тора, каруандар өҙлөкһөҙ йөрөп ята.

Губернаһына күрә үҙәге, ил-йортона күрә түрәһе үҙенсә; генерал-губернатор канцелярияһы Ырымбурҙа, бүтән административ йорттар, ғәскәр казармалары, казак, башҡорт ғәскәре идаралығы, хөкөм йорттары, төрмәләре шунда. Губернаторы, һанаттары, ғәскәр башлыҡтары, төрлө чиновниктар, судьялар, офицерҙар, һалдаттары, мещандары, дин әһелдәре. Ул саҡ Ырымбур Башҡортостан өсөн дә мәркәз, губерна баш ҡалаһы. Өфө әле өйәҙ ҡалаһы ғына.

Ырымбур — губернаның мәҙәниәт үҙәге лә. Унда мәк-




*Неплюев исемендәге кадеттар корпусы бинаһы*

тәптәр, бүтән бер нисә уҡыу йорто, училищелар бар. Кадет корпусы шунда. Ҡескәй булһа ла, йәмәғәт китапханаһы асылған. Ҡалала уҡымышлы кешеләрҙе, ҡай бер ғалимдарҙы, яҙыусыларҙы табырға мөмкин. Бында көнсығыш белгесе Григорьев эшләй. Атаҡлы лексикограф һәм яҙыусы В. Даль йәшәгән. Т. Шевченко, А. Плещеев һөргөн йылдарын кисергән, утыҙынсы йылдарҙа А. Пушкин булып киткән. Декабристар ойошмаһы төҙөлгән. Декабрист яҙыусы П. Кудряшев Башҡортостан тарихы, башҡорт этнографияһы, культураһы менән ҡыҙыҡһынған, ғилми-тикшеренеү эштәрен яҙған, фольклор әҫәрҙәрен йыйған. В. Даль дә башҡорт халыҡ ижады өлгөләрен яҙып алған һәм баҫтырып сығарған. Эшмәкәрлеге, ғүмере Башҡортостан, башҡорт халҡы тормошо менән бәйле бүтән рус уҡымышлылары байтаҡ.

Йәш курсант Сәлим өсөн дә Ырымбур таш сиркәүҙәре, губернатор йорто, Ҡаруанһарайы, икешәр-өсәр ҡатлы ҡупшы йорттары, урамындағы сыбар халҡы, яҡшы көймә-кареталы, сана-кашауайлы аттары менән хайран иткән ят ҡала. Ҡаланың тарихы, эске тормошо менән уның хәбәрҙәры аҙ йәки бөтөнләй юҡ әлегә. Ҡай бер хәбәрҙәрҙе ата-

һынан ишетеп кенә белә. Үҙе беләһеләре, күрәһеләре алда әле.

Атаһы килтереп урынлаштырған кадет корпусы тураһында ла мәғлүмәте үтә самалы, балаларса. Әлегә белгәне: корпус — ҙур уҡыу йорто. Бында һәр кем дә инә алмай. Уҡыр өсөн 300 һум аҡса түләү шарт. Бай йә түрә балаһы үтһә, үтә. Инһәң, тырышһаң, уҡымышлы кеше булып сығаһың, рус телен, бөтөн телдәрҙе өйрәнәһен. Һигеҙ йыл буйы уҡып сыға алһаң, ҡайҙалыр бер түрә йә писарь, йәки толмас итеп ебәрәләр, офицер чины бирәләр икән. Һәр хәлдә, ҙур кеше булаһың, урында ултыраһың. Атайым, иҫән-һау булһам, үҙ кантонлығына алыр, арыу эш табыр. Үҙе әйткәнсә, уны алыштырыр үҙ кеше лә кәрәк. Тик яҡшы уҡыһын, тәртипле, тыңлаусан булһын...

1852 йылдың ноябрендә атаһы урынлаштырып ҡайтып киткәндә бар булғаны шул: Сәлимде корпустың торлаҡ йортондағы ун койкалы ҙур бер бүлмәһенә төйәкләндерҙеләр. Бейек тәҙрәле яҡты таҙа бүлмә. Курсанттарға (хәрби исеме генә ни тора!) махсус кейем бирҙеләр: еҙ төймәле, ВКК хәрефтәре менән ҡаймалы, погонлы махсус ҡаракүк боҫтау куртка, тар ғына лампаслы шул уҡ төҫ салбар, кокардалы күк картус, ботинка һәм алмаш итек. Шуныһы ла яйлы: дөйөм аш бүлмәһе торак йорттоң бер осонда. Уҡыу урыны Николаев урамының ике ҡатлы таш йортонда. Класта, торакта тәртип һаҡлау өсөн айырым инспекторҙар тәғәйенләнгән. Уҡыуҙар яңы башланып тора.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев уҡырға килеп ингәндә Ырымбур Неплюев исемендәге кадет корпусының егерме ете йыллыҡ уҡыу-уҡытыу тәжрибәһе һәм мәғлүм үҙ тарихы, традициялары тупланып өлгөргәйне инде.

Ырымбурҙа бер хәрби училище асыу идеяһы крайҙың беренсе губернаторы И. И. Неплюев заманында XVIII быуат уртаһында уҡ тыуған булған. Тик ғәмәлгә ашмай ҡалған. Был идеяны 1806 йылда хәрби губернатор Волконский кенәз яңынан ҡуҙғатҡан. Шунан аҡса-сәрмәйә туплау, төрлө әҙерлектәр күреү, йортон төҙөү менән йәнә егерме йыллап ваҡыт уҙып киткән. Ниһәйәт, ул 1824 йылды ойошторолоп, тәүҙә хәрби училище булып, 1825 йылдың ғинуарында рәсми рәүештә асылып, уҡытыу эштәрен башлап ебәргән. Училище иррегуляр ғәскәр өсөн хәрби кешеләр, чиновниктар әҙерләү маҡсатын ҡуйған. Хәрби уҡыу йорттары идараһы ҡарамағына буйһонған. Ғәмәлдә училище менән Ырымбур хәрби губернаторы етәкселек иткән. Училищены тотоу, уҡытыу өсөн сығым бер аҙ ҡаҙнанан, күберәге башҡорт-мишәр ғәскәре, мәсет фондтарынан алынған. Алты йыллыҡ был хәрби училище 1841 йылда




*Ырымбурҙағы Неплюев исемендәге кадеттар корпусы кадеты, 1844–1855.*

Неплюев исемендәге кадет корпусы итеп үҙгәртеп ҡоролған. Уҡыу мөддәте (срогы) һигеҙ йылға хәтле оҙайтылған. Быға тиклем училищела һикһәнләп кенә бала уҡыған булһа, корпуста уҡыусыларҙың һаны ике тапҡырға арттырылған, уҡыу-уҡытыу программаһы киңәйтелгән. Тарихтан, географиянан, физика, математикаларҙан дөйөм белем биреү менән бергә сит ил телдәрен, шул иҫәптән ғәрәп, фарсы телдәрен уҡытыуға иғтибар арта төшкән. Элек «Европа бүлеге», «Азия бүлеге» тип исемләнеп йөрөтөлгән бүлектәр «Беренсе эскадрон», «Икенсе эскадрон» тип алыштырылған. Уҡыу-уҡытыу эше көнбайыш һәм көнсығыш культураларына бағлы өйрәнелер, билдәле дәрәжәлә ориенталистик йүнәлеш алған. «Ырымбур кадет корпусының тарихы, — тип яҙыла был уҡыу йорто хаҡындағы бер брошюрала, — Россия көнсығышы культураһы менән тығыҙ бәйләнешле. Был йорт ғәйәт ҙур Ырымбур крайын Европа цивилизацияһына яҡынайтыуҙа күп хеҙмәт күрһәтте».

Уҡытыу программаһы һәр береһе икешәр йыллыҡ дүрт класҡа бүленгән: әҙерлек, түбән, урта һәм юғары кластар. Беренсе эскадронда сит телдәрҙән немец, француз телдәре, икенсе эскадронда ғәрәп, фарсы телдәре уҡытылған. Бүтән предметтар ике эскадронда ла бер күләмдә тигеҙ индерелгән. Хәрби фәндәргә, хәрби әҙерлеккә ҙур урын бирелгән.

Корпусҡа исеме ҡушылған И. И. Неплюев үҙе ниндәйерәк түрә һуң?

Граф Иван Иванович Неплюев (1693—1773) Россия самодержавиеһының күренекле дәүләт эшмәкәрҙәренең береһе. Сығышы менән Новгород дворяны. Петербург диңгеҙ академияһын тамамлаған. Аҙаҡ тағы сит илдәрҙә — Венецияла һәм Испанияла уҡыған. 1720 йылды Россияға ҡайтҡас, Петербургта төҙөлөп ятҡан диңгеҙ судноларының баш командиры итеп тәғәйенләнгән. 1721—1734 йылдарҙа Төркиәлә илсе-резидент булып хеҙмәт иткән. 1742—1758 йылдарҙа Ырымбур крайының хәрби губернаторы. 1760 йылда отставкаға сыҡҡансы бер нисә йыл сенатор.

Ырымбурҙа хәрби губернатор булып эшләү дәүерендә Неплюевтың рәхимһеҙ түрә, ҡанһыҙ палач булыуы менән яманатлы исеме ҡала. Ул башҡорт хәрәкәттәрен аяуһыҙ ҡанға батыра, йөҙ илле башҡорт старшинаһын алдатып саҡыртып, Яйыҡ йылғаһында мәкегә терелә́й тыҡтырта. 1755 йылғы восстание осоронда, башҡорт менән ҡаҙаҡ халҡын бер-береһенә ҡаршы ҡотортоп, унарлаған мең халыҡтың ҡырылыуына килтерә. «Иван Иванович Неплюевтың үҙе тураһында үҙе яҙғаны» тигән китабында ул ошондай ҡанһыҙлыҡтары, бала-сағаларҙы, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла үлтертеүе тураһында маҡтанып һөйләй.

Мөхәммәтсәлим И. И. Неплюев исемен йөрөткән корпуста уҡый башлаған дәүер был ҡанһыҙ түрә заманына йөҙ йылдар үтеп, ул яулы-даулы осорҙар артта ҡалып, край менән идара итеүҙә бер ни тиклем үҙгәрештәр ингән, кантонлыҡ системаһы хөкөм һөргән, В. А. Перовский кеүек бер ҡәҙәр либераль рухлы губернатор башлыҡ иткән заман. Неплюевсылыҡ рухы корпустың шул исемендә лә, ҡай бер хәрби тәртиптәрҙә, инструкцияларҙа, монархистик ҡараштарҙа йәшәп киләлер күберәк.

Курсант Сәлим шуға иғтибар итер: беренсе эскадрон бүлеге Үҙәк урамдың Изге Троица сиркәүенә ҡаршы классик стилдә һалынған ике ҡатлы матур таш бинала урынлашҡан булып, унда фәҡәт ҙур түрәләрҙең, төрлө чиновниктарҙың балалары уҡый. Уларға администрацияның мөнәсәбәте яҡшыраҡ, мәртәбәләре икенсерәк. Рәсми йыйылыштар, тантаналар, педсоветтар шул төп корпуста үтә. Икенсе эскадрон бүлеге иһә Никольский урамының ике ҡатлы йортонда. Уның курсанттарын инородец тип йөрөтөлгән рус булмаған халыҡтың — башҡорт, ҡаҙаҡ, мишәр, татар балалары тәшкил итә. Арала көнсығыш телдәре менән ҡыҙыҡһыныусы бер нисә рус, казак балаһы бар. Икенсе эскадронға иғтибар, әһәмиәт беренсеһенән күпкә кәм. Уға һәр яҡлап тиерлек икенсел ҡараш. Дөйөм фәндәрҙән күп уҡытыусылар уртаҡ булһалар ҙа, дәрес биреүҙә, талапта айырымлыҡтар һиҙелә.

Ике бинаның да ҙур актовый залы стеналарына Ырымбур губернаһының губернаторҙары портреты алтын буталлы ялтыр рамдарҙа элеп ҡуйылған: И. И. Неплюев (губернаторлыҡ иткән йылдары: 1742—1758), князь Волконский (1803—1817), граф П. Ҡ. Эссен (1817—1830), граф П. П. Сухтелин (1830—1833), граф Перовский (1833—1842), В. О. Обручев (1842—1851). Һәр береһенән — париклы сәстәре һаҡал-мыйыҡлы етди йөҙҙәре, орденлы, миҙаллы хәрби мундирҙары, уҡалы-суҡлы погондары менән — мөһәбәтлек, һауалылыҡ һирпелеп торған һымаҡ. Был залдарҙа үткән ҙур йыйылыштарҙа курсанттар уларға күҙ һалып, берсә һоҡланып, берсә һағайып ҡараусан. Улар бар аҙымыңды, ҡылыҡтарыңды күҙҙәрен алмай күҙәтә төҫлө.

## 2

Әҙерлек класының тәүге йылында русса һөйләшеүгә, уҡый-яҙа белеүгә ныҡ диҡҡәт бирҙеләр. Дәрестәрҙә бер үк һүҙҙе, фразаларҙы дөрөҫ әйтергә, баҫымды урынлы ҡуйырға ҡат-ҡат өйрәттеләр. Ҡағыҙәләр ятлаттылар. Ҡаллиграфик матур яҙыуға ныҡ күндерҙеләр. Көн аша тигеләй

диктант, инша яҙҙырҙылар. Арифметиканан ҡушыу, алыу, бүлеү, ҡабатлау ғәмәлдәре менән әллә күпме мәсьәләләр ҡуйып, хисаплатып, өҙләкһеҙ тәкрарлаттылар: сауҙагәр фәлән хаҡҡа шунса бот шәкәр, шунса ҡап сәй һатып алған. Юлда шунса сығым сыҡҡан. Килтергән шәкәрҙең фунтын шунса хаҡҡа, сәйҙең мыҫҡалын шунсаға һатҡан. Сауҙагәр күпме табыш алған? Дворяндар шунса мең аҡса йыйып, шунса баш ат һатып алып Ватан һуғышы йылдарында хөкүмәткә бүләк иткәндәр. Ат хаҡы, кейем-һалым, фураж хаҡы фәләнсә булған. Дворяндар йыйған аҡсаға тағы күпме ат һатып алғандар? Йәмғеһе күпме ат килеп сыға? Ырымбур менән Өфө араһы шунса саҡрым. Юлда шунса көн вә сәғәт үтелә. Көнөнә ат нисә саҡрым юл уҙа?

Йәнә татар, башҡорт, ҡаҙаҡ, һарт телдәре менән сағыштырылып, төрки тел дәрестәре инә. Былары күпкә ҡыҙығыраҡ һәм яҡыныраҡ.

Икенсе эскадрон бинаһы янында бер ҙур манеж бар. Шунда хәрби уйын, строй дәрестәре үтә. Улары саф һауала булһа ла тамам арытып биҙрәтеп бөтә. Айырата муштрапы тецкәгә тейә.

Көн һайын тиерлек дин дәрестәре инә. Унан ошо уҡыу йорто муллаһы Ғәбдерәүеф ахун һабаҡ бирә. Иман шарт, шәриғәт, ҡөрьән ҡанундарын тылҡый. Тәрбиәләнеүселәрҙе хаҡ исламға тогро мөьмин булырға вәғәзләй.

Дин һабаҡтары үтелһә лә, кадет корпусы ҡәҙим мәҙрәсә түгел инде. Аралары ер менән күк араһы. Дине-ние шул хаҡ мосолманлыгынды онотмаҫ өсөн генә тигәндәй.

Корпустың уҡыу-уҡытыу нигеҙендә — донъяуи фәндәр. Уның да иң кәттәләре, үтә хәжәттәре. Бая һынаған телдәрҙән ҡала дөйөм тарих, Россия тарихы һәм географияһы, физика, математика, алгебра, геометрия, һыҙым, рәсем дәрестәре. Урта һәм юғары кластарҙа теүәл фән дәрестәре арта һәм ҡатмарлана бара. Кадет корпусынан бирелгән шәһадәтнамәһенә ҡарағанда, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың тел дәрестәренән дә, бүтән фәндәрҙән дә тигеҙ һәм яҡшы уҡығанлығы күренә. Ул барлыҡ фәндәрҙән дә, шул замандың көнсығыш гәмәлдәре исеме менән әйткәндә, әғлә вә тәхсин, йәғни бик яҡшы һәм яҡшы билдәләре генә алған.

Шуныһы ла яҡшы: икенсе эскадронда ла дөйөм фәндәрҙе бер программа күләмендә бер үк уҡытыусы тарафынан русса уҡытыу бүтән милләт балаларына рус телен тәрәнерәк үҙләштереү өсөн өҫтәмә файҙа иткән. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың корпусты рус телен камил үҙләштергән, иркен һөйләшкән, грамоталы яҙа башлаған уҡымышлы булып сығыуы ла был хаҡта күп нәмә һөйләй. Ә уның

корпуста бары алты йыл ярым уҡығанын иҫәпкә алғанда бигерәк тә.

Ҡорпуста күптәре университет белемле, бай тәжрибәле уҡытыусылар уҡытҡан. Улар araһында генерал, статский советник, полковник, коллежский советник кеүек сағыштырмаса юғары хәрби һәм граждандлыҡ дәрәжәһенә эйә педагогтар булған. Араларында, әлбиттә, ата монархисы ла, прогрессив рухлыһы ла, либералы ла булмай булмаҫ.

Был уҡыу йортонда Россия тарихын һәм географияһын уҡытҡанда өҫтәмә рәүештә Ырымбур губернаһы географияһын һәм тарихын белеүгә лә әһәмиәт булырға тейеш. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың Башҡортостан тарихын һәм географияһын яҡшы белеүе, тыуған яҡты өйрәнеүгә артабан бар иғтибарын туплауы нигеҙһеҙ түгел. Дәрестәрҙәге тарихи-сағыштырма ысул, яңы методика унын алдағы ғилми-тикшеренеү эштәренең мөһим методына әүерелеп китә. Ә телдәр бында нигеҙҙә сағыштырма метод менән уҡытылған. Педагог Мирсалих Биксуриндың атаҡлы «Начальное руководство. К изучению арабского, персидского и татарского языков с наречиями бухарцев, башкир, киргизов и жителей Туркестана...» тигән дәреслек китабының оҙон исеме һәм есеме генә түгел, М. Өмөтбаев курсант-тәрбиәләнеүсенең тел дәрестәрендәге яҙма дәфтәрҙәре барыһы ла шуны раҫлай.

Алда күрер һәм яйлап төшөнөр: физика, алгебра, геометрия, фортификация, тағы бүтән дәрестәре үҙҙәре лә серле сетерекле ғилемдәр. Һәр хәлдә, ата-бабалары уҡыған ғилем түгел. Ауылдан ҡалаға килеп, үҙен бөтөнләй яңы мөхиткә инеп киткәнен тойған бала мәҙрәсә һабаҡтарынан һуң Ырымбур кадет корпусы дәрестәренең айырмаһы ер менән күк араһы икәнен дә тиҙ аңлап алғандыр моғайын. Уғата өр-яңы һабаҡ, аң-белем донъяһы бит. Дәрестәре, донъяуи ғилем, уҡыу-уҡытыу ысулдары, әсбаптары — һәммәһе, һәммәһе лә. Иман шарт, әфтиәк тылҡыу, доғалар ятлау, дин ҡанундарын һеңдереү түгел инде һәр хәлдә.

Мәғлүм булыуынса, кадет корпусы — европаса типтағы уҡыу йорто. Уның программаһы рус махсус уҡыу йорттары, училищелар, күп яҡтан гимназиялар программаһына яҡын. Хәрби-административ йүнәлеше генә уға үҙенсәлек бирә торғандыр. Йәнә икенсе эскадрондың көнсығыш телдәренә ориентацияһы, ориенталистик йүнәлеше үҙе бер яңылыҡ.

Өс-дүрт ҡыш ҡына мәҙрәсә һабағы алған баланың балалыҡтан үҫмерлеккә күсеү миҙгеленең, донъяға ҡарашы тыуа һәм нығына барыуының хосусиәттәрен төшөнөү өсөн шул заман тәғлимәттәренә ҡағылып үтмәй мөмкин булмаҫ.

Мәғлүм, борондан донъяға материалистик һәм идеалистик ҡараштар йәшәп килә. Дин баштан-аяҡ идеалистик тәғлимәтте алға һөрһә, тормош үҙе, донъяуи ихтыяждар кешеләрҙе үҙенән-үҙе материалист булырға әйҙәй. Мәҙрәсә бер төрлө, мәктәп, училищелар икенсе төрлө һабаҡ бирә. Дин әһелдәре бер нәмә һөйләй, ғилем эйәләре — икенсене. Шуларҙы йәш башың менән аңлап, үҙ аҡыңа алып ҡара — еңел микән?

Дин донъяны үҙенсә аңлата. Мәҫәлән, исламдың төп өйрәтмәләре шуға ҡайтып ҡала: алланың барлығын һәм берлеген яҡлай. Донъя яратылышын, йәшәйешен, әҙәм яҙмышын алла ҡөҙрәте менән бәйләй. Шуға йәтешләп ахыр заман, фаный һәм баҡый донъя, йәннәт һәм тамуҡ, ғаләм һәм ғәмәл, барлыҡ һәм юҡлыҡ, гонаһ һәм яза һ. б., һ. б. тураһында төрлө легендаларын, талмудтарын ижад иткән. Шуларҙы мөъминдәренә ижтиһад итергә бойора. Был догмаларының күбеһе исламдың төп китабы — ҡәләм шәрифкә — ҡөрьәнгә тупланған. Әҙәп-әхләҡ, хоҡуҡ, хөкөм мәсьәләләренә бағлы шәригәте, фиҡҡыһы бар. Ҡөрьәндең үҙ тәфсирҙәре — аңлатмалары күп. Ҡәләм шәрифе үҙе бер том икән, тәфсирҙәре йөҙәр том иҫәбендә. Мөхәммәт пәйғәмбәргә бәйле хәдистәре әллә ни хәтле. Дин белгестәре һәр ҡанунды, һәр догманы үҙенсә нигеҙләргә, раҫларға тырыша, мосолманды дин фәлсәфәһенә алып инә, хөрәфәт һөрөмө менән башын томалай.

Ҡөрьәндең ҡануны ҡаты: күктән алланан ингән, Мөхәммәт пәйғәмбәргә тапшырылған дин тәғлимәтен һәр мосолман һүҙһеҙ ҡабул итмәк фарыз. Уға донъя хаҡында баш ватаһы юҡ, алла исеменән барыһы аңлатылған, шуны ҡабул ҡылып, үтәй генә бел, үҙеңде теге донъяға әҙерлә. Бүтән диндәр — христианы ла, буддизм, башҡаһы ла — тәүрәт (Библия), Инжил (Евангелие) булһын һәр береһе үҙенсәлән бер төрләрәк дини тәғлимәтте тәкрарлай, дини идеалистик ҡарашты уҙғара.

Быуат артынан быуаттар үткән, быуын артынан быуындар алышынған, илдәр, ерҙәр, дәүләттәр үҙгәргән, ә дин йәшәй биргән, әҙәм дин әйткәнде хәҡиҡәт һанарға, шәкерттәр уҡып өйрәнергә, ҡанундарын, догмаларын ятларға, мейеһенә һеңдерергә тейеш булған. Күп быуат дауамында ислам диненең мәҙһәбтәре (йүнәлештәре), тәриҡәттәре (секталары) барлыҡҡа килгән. Суфыйсылығы әҙәмдәрҙе фаный донъянан тамам ваз кисергә, теге баҡый донъяға үҙеңде әҙерләргә, суфый-дәрүишкә әйләнергә өндәгән. Уны вәғәзләү өсөн Хужа Әхмәт Йәсәүи кеүек ата суфыйҙары,

---

*ижтиһад* — тырышлыҡ; *фиҡҡы* — юриспруденция ғилеме.

Сөләймән Баҡырғани ише мөриттәре, әйтәһен шиғри юлдарға һалып өгөтләүсе шағирҙары тыуған. Шулар мәҙһәбе, шиғри мәктәбе боронғо үҙ заманында ғына ҡалмайынса урта быуаттар аша XIX йөҙгәсә һуҙылып киткән, суфизм, тәссауф идеяһы суфыйсылыҡ поэзияһын һуғарған.

Алыҫ китәһе түгел: Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев тыуып үҫкән Йомран Табын волосынан көньяҡта ишандары, мөриттәре, суфый шағирҙары менән һәр тарафҡа билдәле Стәрлебаш мәҙрәсәһе, әле уҡып ятҡан Ырымбур ҡырында ғына ишанлы-имамлы Ҡарғалы мәҙрәсәһе йәшәп килә. Йәшәй генәме, гөрләп торған саҡтары. Ишандары шул ислам тәғлимәтен, суфыйсылыҡ идеяларын үткәрә; шуларҙың һәр һүҙен йотоп, ятлап ала торған мөриттәре, эйәрсендәре, шәкерттәре тулып ята. Шағирҙарының тәхәллусы-ҡушаматтары кем икәндәрене атама: Шәмсетдин суфый, Һибәтулла ишан, Әбелманих хажи. Ярай, былар әле һиммәтлерәктәре. Арала уҡымышлы тигән муллаларының, имам хатиптарының уй-ниәте саҙаҡа-зәкәттән килгән аҡса-мал хисабына байып, ике-өс бисә менән йәшәп, доға уҡып, биш намаҙ тотоп, ҡөрьән әйтеп, хөббә һөйләп, мәжлестәрҙә йөрөп ғүмер сереткәндәре күберәк. Ундайҙарҙың үрнәге ни ҙә, һабағы ни. Шәкерт бала ни эшләһен, аңы — үрнәген дә, ғибрәттәрен дә үҙенсә ҡабулларға мәжбүр.

Мөхәммәтсәлим дә замана балаһы, мәҙрәсә шәкерте. Хужа Әхмәт Йәсәүиҙең «Диуаны хикмәт», Сөләймән Баҡырғаниҙың «Баҡырған китабы», Аллаяр суфыйҙың «Сөбәтелғажизин», Тажетдин Ялсығолдоң «Рисалаи Ғәзизә», Һибәтулла ишандың «Мәжмәғел әҙәб» һ. б. ш. китаптарҙы ла уҡып үҫкән шәриҡ.

Сағыштырғанда әйтәһе түгел, Ырымбур ҡалаһы, кадет корпусы — бөтөнләй башҡа даирә, икенсе мөхит. Ҡала үҙе, уның шарттары, уҡыу йортоноң рус һәм бүтән милләт балаларынан торған интернациональ средаһы, белемле уҡытыусылары, уҡыу-уҡытыуҙың яңы ысулдары, фән дәрестәре Мөхәммәтсәлим курсанттың белем алыуҙа һәм донъяға ҡарашы асыҡланыуҙа киҫкен боролош биргән мөһим факторҙар икәнен билдәләргә кәрәк. Шуларҙан М. Өмөтбаевтың киләсәктә шәхес һәм әҙип булып формалашыу юлында ҙур роль уйнаған ике факторға: икенсе эскадрон бүлегенең ориенталистик-филологик йүнәлешенә һәм көнсығыш телдәре уҡытыусыларының эшмәкәрлегенә туҡталып үтеү урынлы булыр.

## 3

Кадет хәрби корпусының бер маҡсаты — хәрби-административ эштәр һәм илселек-дипломатия даирәһе өсөн тәр-

җемәселәр, төрлө чиновниктар әҙерләү. Рус-башҡорт, рус-татар, рус-ҡаҙаҡ мәктәптәре өсөн уҡытыусылар етештереү ҙә күҙ уңында тотола, әлбиттә. Һәр хәлдә, инородец вәкилдәре Россия империяһының тоғро хеҙмәтселәренә әүерелеп, илде төрлө халыҡтар, крайҙар, дәүләттәр менән бәйләшер араҙашлыҡ вазифаһын башҡарырға тейеш. Рус мөхите эсенә алып рус телендә монархистик рухта тәрбиәләүсе русификация политикаһын тотҡаны ла көн кеүек асыҡ.

Корпуста көнөнә уртаса алтышар сәғәттән аҙнаһына 36—37 сәғәт дәрес уҡытыла. Шуның түбән кластарҙа ҙур өлөшө (26 сәғәт), юғары кластарҙа яртылашы (18 сәғәт) телдәр өйрәнеүгә бүленә. Ул дәрестәрҙең аҙнага сәғәтләп бүленеше шулай: рус теле һәм әҙәбиәтенә 11 сәғәт, татар-төрки телдәренә — 11, ғәрәп, фарсы телдәренә — 9, француз һәм немец телдәренә 10 сәғәт. Бер нисә телде шулай ентекле өйрәнеү, үҙенән-үҙе аңлашыла, курсанттарга телдәрҙе камил үҙләштерергә, икенсе телдә иркен һөйләшергә һәм еңел аралашырға мөмкинлек биргән. Шуга күрә был уҡыу йортонан тәржемәселәр генә түгел, Мирсалих Биксурин, Салихъян Күкләшев, Мартимьян Иванов, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев кеүек тиҫтәләгән мәгариф эшмәкәрҙәре, филолог ғалимдар сығыуы ла бик тәбиғи. Ундайҙар бер нисә телдә иркен һөйләшә, уҡый һәм ижад итә алған.

Ырымбур кадет корпусының Россия көнсығыш өлкәләре, бигерәк тә Башҡортостан өсөн әһәмиәте шунда: ул ысын мәғәнәһендә мәғариф һәм мәғрифәт усағына әүерелә. Демократик йүнәлештәге башҡорт мәғрифәтселегенең башы, уның тәүге вәкилдәренең эшмәкәрлеге ошо уҡыу йорто менән бәйле. Шуныһы характерлы: башта үҙҙәре ошо училищены йәки корпусты тамамлаған курсанттарҙың алдынғылары ошонда уҡ уҡытыусы итеп ҡалдырыла һәм шулар филологик ғилем, мәғрифәтселек эшен дөрләтеп ебәрәләр. Өҫтәүенә уларҙың белемен йәнә камиллаштырыу өсөн Ҡазан университетында уҡытып алыр ҙа булғандар.

Ошолар араһынан биш кешене айырып күрһәтергә кәрәк: М. Иванов И. Батыршин, В. Костромитьянов, С. Күкләшев һәм М. Биксурин. Улар һәммәһе лә Ырымбур крайында йәки Башҡортостанда тыуып үҫкән, Ырымбур училищеһында уҡыған, күбеһе Ҡазан университетын тамамлаған, аҙаҡ ошо корпуста оҙаҡ йылдар уҡытҡан педагогтар. Быларҙан Искәндәр Батыршин эшсәнлеге тураһындағы мәғлүмәттәр генә аҙ. Уның бер туған ағаһы Сөләймән Батыршинның Салауат Юлаев шиғырҙарын рус теленә юлға-юл тәржемә итеүе, башҡорт халыҡ йырҙарын йыйып,




*Ырымбурҙағы Неплюев исемендәге кадеттар корпусының обер-офицеры, 1847—1855.*

айырым өлгөләрен баҫтырып сығарыуы билдәле. Кем белә, Искәндәр Батыршин да ағаһы һәм Р. Г. Игнатьев менән бергә Салауат Юлаевтың әле табылмаған йәки бөтөнләй юғалған төркисә йә башҡортса яҙылған шиғырҙарын ҡулдарында тотҡан, тәржемә итешкән, башҡорт йырҙарын да йыйышҡан кешеләр.

Был педагогтар араһында һәр йәһәттән дә — элгәрерәк уҡыуы һәм уҡыта башлап еһәреүе менән — Мартимьян Иванов башта тора.

Мартимьян (Мартиньян) Иванович Иванов 1812 йылды тыуған. Ләкин ҡайҙа, ниндәй ғаиләлә тыуыуы тураһында әле аныҡ ҡына мәғлүмәттәр табылғаны юҡ. Бер формулярҙа ул бөлгән помещик ғаиләһенән, тигән һүҙ осрап ҡала. Ул башҡорт ғаиләһендә тыуып, сабый көйө үкһеҙ етем ҡалып, рус помещигы ҡарамағына алынып, христиан диненә күсерелгән, тигән версия ла йөрөй. Һәр хәлдә, Мартимьян Ивановтың башҡорт һәм татарҙар араһында үҫеп был телдәрҙе йәшләй яҡшы белгәнлеге күренә. Ул Ырымбур кадет училищеһының тәүге курсанттарының береһе. Уны 1831 йылды тамамлаған. Үҙе уҡығанда уҡ училищела татар-төрки телдәрен уҡытыуға йәлеп ителгән. Бер йыл ныҡлап әҙерләнеп, 1832 йылда Ҡазан университетында имтихан тапшырған һәм төрки, фарсы телдәрен уҡытырға диплом алып ҡайтҡан. Утыҙынсы йылдар дауамында кадет училищеһында уҡытҡан, бер үк ваҡытта Ырымбур хәрби губернаторы канцелярияһында тәржемәсе лә булып эшләгән. Ошо осорҙа хөкүмәт йомоштары, уҡытыу, ғилми-тикшеренеү шөғөлдәре менән бәйле рәүештә, губерна төбәктәренә, Башҡортостанға, башҡорттар араһына йыш сығып йөрөгән. Был хаҡта «Отечественные записки» журналы 1842 йылдың 6-сы һанында: «Неплюев училищеһында тәрбиәләнгән Иванов әфәнде ғүмере буйы Ырымбур крайында йәшәй. Йыш ҡына далаларға һәм Башҡортостанға сығып йөрөүе, тәржемәсе булып эшләүе уға Ырымбур татарҙары, ҡырғыҙҙар һәм башҡорттар телен төплө белеүгә мөмкинлектәр асты», — тип яҙған.

Иң мөһиме, училищела ун йылға яҡын уҡытыу тәжрибәһенә таянып һәм халыҡ араһында йөрөгәндә, башҡорт, татарҙарҙан йыйған фольклор, яҙма әҫәр материалдарына нигеҙләнеп, М. Иванов ике уҡыу китабы төҙөгән һәм 1842 йылды баҫтырып сығарған автор. Береһе «Татарская грамматика», икенсеһе «Татарская хрестоматия» тип атала.

Ошо урында Ырымбур кадет училищеһында һәм корпусында уҡытылған «Татар теле» тигән дәрестең һәм шуға «Татар теле», «Татар хрестоматияһы» тип сығарылған ҡул-

ланма китаптарҙың исеменә һәм мәғәнәләренә аныҡлыҡ индереп китәйек. Ул саҡтағы «Татар теле» тигән терминды бөгөнгө көндәгесә хәҙерге татар әҙәби теле мәғәнәһендә ҡабул итергә һәм тиңләргә ярамай. Ул заманда «Татар теле» термины татар, башҡорт, хатта өлөшсә ҡаҙаҡ телдәрен берләштергән уртаҡ исем рәүешендә киң мәғәнәлә ҡулланылған һәм яҙма төрки тел йөкмәткеһен үҙ эсенә алған. Быны шулай икәнен китапты төҙөүселәр үҙҙәре үк, бигерәк тә ошо тип хрестоматияһында С. Күкләшев, асыҡлап, татар теле мәғәнәһен татар, башҡорт, мишәр һөйләштәренең уртаҡ термины, уртаҡ әҙәби тел күренеше тип билдәләйҙәр. Бик йыйынтыҡтарҙың эстәлеге, материалы барыһы ла шуны раҫлап тора. Шуның өсөн беҙ «Татар теле», «Татар хрестоматияһы» тигән терминды һәм юғарылағы китап исемдәрен, йөкмәткеһен XIX быуаттың беренсе яртыһында һәм уртаһында татар, башҡорт халыҡтары аңлаған, исемләгән һәм ҡулланған «төрки тел» төшөнсәһендә, татар-башҡорт хрестоматияһы рәүешендә конкрет-тарихи ерлегендә киңерәк мәғәнәһендә ҡарайбыҙ.

Мартимьян Иванов 40-сы йылдарҙың уртаһынанмы, бер ни тиклем һуңыраҡмы уҡытыу эшенән киткән һәм күп йылдар Архангель (Аҫҡын) баҡыр иретеү заводының управляющийы булып хеҙмәт иткән. Инйәр менән Аҫҡын һыуы буйында табындар ерендә ултырған был заводтың управляющийы М. Иванов менән Ишмөхәммәт Өмөтбаев аралашып, яҡын дуҫ булып йөшәгәндәр. Өфөгә барғандаҡайтҡанда юл өҫтөндәге Ибраһимға Мартимьян төшөп йөрөр булған. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың архив фондында «Мартимьян Иванов хаҡында» исемле бер шиғыр осрай. Унда М. Ивановтың уҡымышлылығы, китапханаһы бай булыуы, ҡыҙыҡлы китаптары барлығы хаҡында әйтелә лә мәғрифәтсел управляющийға маҡтау яуҙырыла. Шиғырҙың башына русса «Бывший учитель туркейского языка в Оренбургской военной училище» тип яҙып ҡуйылған. Иғтибар итегеҙ: «туркейский язык», йәғни төрки тел уҡытыусыһы тиелгән.

Башҡортостандағы тәүге мәғрифәтселәрҙең күренеклеһе, М. Өмөтбаевтың көнсығыш, төрки телдәренән уҡытыусыларының береһе — Салихъян Күкләшев.

Салихъян Бикташ улы Күкләшев шулай уҡ Ырымбур губернаһында 1811 йылда тыуған. Сығышы менән дворян (тархан йә мырҙа) нәҫеленән. Атаһының надворный советник дәрәжәһен алғанлығы билдәле. Башланғыс белемде өйҙә алған булырға тейеш. Ырымбурҙа Неплюев училищеһы асылғас, шунда уҡырға биргәндәр һәм Салихъян уны Мартимьян менән бергә, барлығы 9 кеше 1831 йылды та-

мамлап сыҡҡан. Ырымбур сик буйы комиссияһында тәржемәсе булып эшләп йөрөгән сағында уны йәнә бер төркөм башҡорт балаларын 1832 йылды Ҡазанға университетҡа медицина факультетына ебәргәндәр. Ул ошо факультетта ике йыл уҡығас, филология факультетына күскән һәм 1836 йылда шуның көнсығыш бүлеген бөткән. «Диуане хикәйәт татар» тигән уҡыу китабын баҫтырып сығарыуына ҡарағанда, ул хәрби корпуста төрки-татар телдәрен дә күпмеләр уҡытҡан булырға тейеш. Был телдәр буйынса ул 1844 йылды Ырымбурҙа асылған ҡырғыҙ мәктәбендә лә дәрес биргән. Унда бер үк ваҡытта надзиратель булып та эшләгән. Күп телдәр белгән Салихъян Күкләшевты рус илселеге йәки экспедициялар составында дипломатия эштәрендә лә файҙаланып булғандар. Оҙаҡ йылдар педагогик, административ хеҙмәттәре өсөн статский советник дәрәжәһен алған.

Салихъян Күкләшев замананың иң уҡымышлы, алдынғы ҡарашлы кешеһе. Ырымбурҙа һөргөндә йәшәгән поляк революционеры Сигизмунд Сераковский менән дуҫтарса мөнәсәбәте лә был хаҡта күпте аңлата ала. Иң мөһиме, С. Күкләшев ҙур педагогик эшмәкәрлеге, айырата «Диуане хикәйәт татар» («Татарская хрестоматия») китабы менән үҙен күренекле мәғрифәтсе итеп танытты, башҡорт һәм татар әҙәбиәттәре, әҙәби-эстетик фекер үҫеше тарихына һиҙелерлек өлөш индерҙе.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың корпуста ғәрәп, фарсы телдәрен ныҡлы үҙләштереүҙә, ғөмүмән, филология ғилеменә эйә булыуҙа С. Күкләшевтың роле бик ҙур. Курсант Мөхәммәтсәлимдең дәфтәрҙәренән фарсы телен өйрәнеү яҙмалары һаҡланып ҡалған. Шуларҙың береһенә «Персидская грамматика. Персидские слова». Старший учитель Кукляшев. 1856 г.» тип яҙып ҡуйылған. Дәфтәрҙәге конспект, күрһәтмәләр буйынса, С. Күкләшевтың фарсыны уҡытыуы сағыштырмалы өс телдә — фарсы, рус, төрки телдәрендә алып барғанлығы асыҡ. Грамматик ҡағиҙәләр, миҫалдар фарсы телендә килтерелә лә уларға русса тәржемәһе бирелә, улар йәнә төркисә аңлатып, нығытылып ҡуйыла. Алынған һүҙлектәр мотлаҡ өс телдә: фарсыса — русса — төркисә.

Әйтәһе лә түгел: былай ике тел менән сағыштырып аңлатмалы уҡытыу ысулы өйрәнелгән төп телде камиллаштырыуға, сағыштырмалы фекерләүҙе, хәтерҙе үҫтереүгә ныҡ булыша. Былай һабаҡ фарсы теленә Мөхәммәтсәлимде шунса мауыҡтыра, ул оҙаҡламай фарсы әҙәбиәте классиктарын — Фирдәүсиҙе, Рудакиҙы, Сәғҙиҙе, Хафизды, Хәйямды оригиналында уҡый башлай, поэтик тәржемә күнекмәләре яһай. Фарсы теленең музыкаллелеге, шиғриәте ме-

нән һоҡлана. Был эш шуның менән генә ҡалмай, М. Өмөтбаев аҙаҡ үҙе уҡымышлы, мәғрифәтле кеше булып танылакилә фарсы грамматикаһын яҙыу, фарсы-рус-төрки һүҙлеген төҙөү эшенә керешә. Фарсы телендә шиғырҙар ижад итә. Лингвистика, лексикография ғилеменә тартыла. Быны алда күрербеҙ әле.

Шулай ҙа Ырымбур корпусында уҡығанда Мөхәммәтсәлимдең иң яратҡан уҡытыусыһы, остазы булып киткәне — Мирсалих Биксурин.

Остазы ниндәй, шәкерте шундай, тиҙәр. Мирсалих Мирсәлим улы Биксурин (1820—1903) башҡорт тархандары затынан. Ырымбур хәрби училищеһын тамамлап сыҡҡас, 1838 йылдан Сик буйы комиссияһы канцелярияһында тәржемәсе булып хеҙмәт юлын башлаған. 1841 йылдан алып үҙе уҡыған училищела уҡытыусы. Был училищеның корпусҡа, аҙаҡ гимназияға, прогимназияға әйләнеү дәүерҙәрендә лә өҙлөкһөҙ эшләп, унда барлығы ҡырҡ йылға яҡын педагоглыҡ, уҡытыусылыҡ вазифаларын башҡарған. Ул башлыса көнсығыш телдәренән, бер ни ҡәҙәр ваҡыт төрки телдәренән дәрес биргән. Былар өҫтөнә көнсығыш телдәре буйынса «наставник-наблюдатель» тигән вазифаны ла үтәгән. Ҡырғыҙ мәктәбендә шул уҡ телдәр менән ҡатар рус теленән дә уҡытҡан.

Мирсалих Биксурин — киң эрудициялы, төрлө фәндәр менән ҡыҙыҡһыныусан бик эшмәкәр шәхес. Ул уҡытыусылыҡ эшенән тыш, губерна администрацияһының эшендә, төрлө ижтимағи, фәнни хеҙмәттәрҙә, экспедицияларҙа, хәрби походтарҙа, депутация составтарында ҡатнашҡан кеше. 1865, 1866, 1871—1873 йылдарҙа Урта Азияла экспедицияларҙа булған, Төркөстан депутацияһы менән Санкт-Петербургка барған. 1870—1880 йылдарҙа Ырымбур ҡала думаһының гласныйы итеп һайланған. Фән һәм культура өлкәһендә күп эштәр башҡарған. Тыуған крайҙы, Урта Азияны өйрәнеү буйынса хеҙмәттәр яҙған, дәреслектәр сығарған. Башҡорт, ҡаҙаҡ телдәрен, халыҡ ижадын тикшергән, башҡорт йырҙарының, әкиәттәренең айырым өлгөләрен ташҡа баҫтырған. Ырымбурҙа ғилми архив комиссияһын төҙөшкән, уның тәүге етәкселәренең береһе булған. Россия география йәмғиәтенең ағзаһы итеп һайланған. Бик күп ғалимдар, дәүләт эшмәкәрҙәре менән аралашҡан. Ил ҡаршыһындағы хеҙмәттәре өсөн коллежский асессорҙан алып статский советниккаса юғары чиндарға эйә булған. Икенсе дәрәжә Изге Анна, икенсе, өсөнсө дәрәжә Изге Станислав, өсөнсө, дүртенсе дәрәжә Изге Владимир ордендары, миҙалдар менән бүләкләнгән. Генерал исемен йөрөткән.

Бына ошо күренекле дәүләт эшмәкәре, педагог һәм ға-

лим, мәғрифәтсе Мирсалих Биксурин Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың иң яҡын уҡытыусыһы һәм остазы булып киткән дә инде. Атаһы Ишмөхәммәт кантон менән яҡшы таныш булған Мирсалих Мөхәммәтсәлимде айырыуса үҙ һәм теләктәш иткән. Шәкерте уны ғүмерс буйы остазы, мөғәллиме күреп ололаған, тығыҙ бағланышта йәшәгән. 1878 йылда яҙған «Бежнаб остаз Мирсалих ибн Мирсәлим генерал Биксурин» исемле одаһында М. Өмөтбаев М. Биксуринды «ғилем бостанында һин сәрри эфраз», йәғни ғилем баҡсаһының бер фекер эйәһе — ҙур ғалимы тип атай. Шиғырының аҙағын автор үҙе өсөн утә тыйнаҡ тамамлай:

Зәһри кем алды бәһрә, булды чәһрә,
Бәнем эшем би бәһрә, китте дәһрә.

(Диҡҡәт итегеҙ: фарсы, ғәрәп уҡытҡан остазына был мәдех шиғырын шулай ғәрәп, фарсы һүҙҙәре менән тултырып бик иҫке төркисәгә көйләгән. Шиғыр юлдары ғәжәйеп бай эске янғырашҡа ҡоролған).
Мәғәнәһе: ғилем емешендә кем һәйбәт алһа, шул булды бәхетле. Ә минең эшем емешһеҙ буш үтте буғай.

Ғәмәлдә иһә Ырымбур кадет корпусы ғилем баҡсаһынан алған емеш, бигерәк тә үрҙә исемләнгән мөғәллимдәрҙең, остаздарының өлөшө Мөхәммәтсәлим ише шәкерттәре йөҙөндә, алдағы эшмәкәрлектәрендә өлгөргән зәмин-ерлек табып, гөрләп үҫеп, яңы бәһрә емештәрен бирәсәктәр ҙә инде.

Ниҙән ғибәрәт һуң Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевты ғалим һәм әҙип итеп етештерешкән, шуның тәүге орлоҡтарын һалышҡан был ғилем бостаны? Шуның филология босмағы?

Кадет корпусының донъяуи уҡыу программаһы, рус мәғарифы системаһы беҙгә билдәле инде. Шуныһы йәл, курсант Мөхәммәтсәлимдең дәрес дәфтәрҙәре аҙ һаҡланған, дөйөм фәндәрҙән бөтөнләй юҡ. Бар ҡәҙәреһе, күрәһең, үҙенсә ҡәҙерлеһе, — көнсығыш телдәренән алып барған бер-ике дәфтәр үрнәге. Ҡалғандары өҙөк-киҫәктәр генә.

Уның ҡарауы, бәхетебеҙҙән, туған тел һәм әҙәбиәтте уҡытыусыларҙың дәрес программалары һәм конспекттары нигеҙендә төҙөлгән баҫма уҡыу китаптары бар. Шулар барыһы бергә беҙгә был белем, ғилем боҫтанының эсенә инергә, улай ғына түгел, тәүге мәғрифәтселәребеҙҙең үҙ педагогик-ғилми эшмәкәрлектәрен, улар етештергән емештәрен, тос орлоҡтарын барлап ҡарарға мөмкинлек бирә.

Филология бостанының тәү дәү түтәлдәрен М. Иванов «Татарская хрестоматия, составленная Мартимьяном Ивановым» (1842) тигән китабында яһай. Төҙөүсе, баш һүҙендә әйткәнсә, үҙ алдына бер нисә маҡсат ҡуя: төрки-татар телен өйрәнеү өсөн шул халыҡтарҙың — татар, башҡорт, ҡаҙаҡ фольклор үрнәктәрен киң файҙаланыу, шуның үҙе йыйған үрнәктәрен баҫтырыу, яҙма әҙәбиәттән текстар һайлау, рус әҙәбиәтенән тәржемә тәжрибәләр менән таныштырыу. Һәйбәт, изге ниәттәр.

Әлеге китаптың башҡорт, татар әҙәби-культура тарихындағы новаторлығы шунда: Башҡортостандағы демократик мәғрифәтселек әҙәбиәтенең нигеҙ таштары һалына унда, шуларҙың беренсе өлгөләре иғлан ителә. Быны иҫке традицион әҙәбиәттән, айырата ярым дини-суфыйсылыҡ рухтағы вәғәздәренән киҫкен айырмалы рәүештә, халыҡ ижадынан алынған текстар, тарихи, донъяуи эстәлекле яҙма әҙәби йәдкәрҙәр, рус әҙәбиәтенән тәржемәләр, мәғрифәтселек идеялары менән һуғарылған барлыҡ яҙмалар раҫлап тора.

Мәҫәлән, хрестоматия мәҡәлдәр бүлеге менән асыла. Унда халыҡтың күп быуаттар буйына туплана килгән мәҡәл, әйтем, һүҙ хазинаһынан аҡһаҡалдар аҡылын, әҙәп-әхләҡ, тәртип-низамдарын, яҡшы менән яманды айыра белергә өйрәткән уй-фекерҙәрен туплаған өлгөләре килтерелә. «Күп йәшәгән белмәҫ, күп ҡыҙырған белер», «Һылыу һылыу күренмәҫ, һөйгән һылыу күренер», «Иҫкеһеҙ яңы булмаҫ, яманһыҙ яҡшы булмаҫ», «Күренгәндең алыҫлығы юҡ, күтәргәндең ауырлығы юҡ», «Атаһы болан атмағандың балаһы ҡолан атмаҫ», «Алыҫтағы дошмандан аңдып йөрөгән дуҫ яман», «Кеше булыр кешенең кеше менән эше бар, кеше булмаҫ кешенең кеше менән ни эше бар» кеүек мәҡәлдәр башҡорт халҡы араһында хәҙерге көндә лә әүҙем йөрөп ята. Ә инде «Арғымаҡтың балаһы аҙ утлар ҙа күп юшар, атаһы тарлауҙың тәмен татҡанда, азамат ирҙең балаһы аҙ һөйләр ҙә күп тыңлар, атаһы тороп кәңәш иткәндә», «Тауҙа булыр тарғыл таш, тарыҡһа күҙҙән сығыр йәш, тар ҡултыҡтан уҡ тейһә, тартып алыр ҡәрендәш, ҡәрендәшең юҡ булһа, далала ҡалыр яңғыҙ баш» ише әйтем һүҙҙәр шулай уҡ фольклорыбыҙҙың алтын фондынан.

«Татар халҡының йырлай торған йырҙары» тип киң мәғәнәлә, йәғни татар, башҡорт, мишәрҙәргә хас йырҙарҙы берләштергән бүлектә лә күпселек йырҙар бөгөнгө башҡорт йыр репертуарында шул көйө тигеләй йәшәп килә.

Ат яҡшылары ала аяҡ,
Тун яҡшылары төлкө аяҡ.
Был кисә — донъя, таңда — әхирәт,
Уйнап та ғына көлөп ҡалайыҡ.
Ағиҙелкәйҙәрҙе кискәндә
Парлы ғына ишкәк һынырмы?
Һағындыңмы, тиеп ник һорайһың,
Һағынмаһа кеше йырлармы?
Һандуғас та һайрар ер түгел,
Һайрар ғына ере киң түгел,
Һағынһаң да ни хәл итәйем,
Йүгереп кенә етер ер түгел.
Бейек кенә тауҙың башында
Аҡ кейектәрҙең төйәге.
Һыуҙа ғына батмаҫ, утта янмаҫ,
Асыл егеттәрҙең һөйәге.
Туры атҡайым уйнайҙыр,
Саналарға екһәм тулайҙыр.
Илама ла, йәнем, һай илама,
Һин илаһаң, юлым уңмайҙыр.
Ағиҙелкәй буйы, ай, андыҙлыҡ,
Ай-һай ғына беҙҙең аңһыҙлыҡ,
Йәш сағымда аңһыҙ түгел инем,
Муйынымды борҙо яңғыҙлыҡ..

Бындай йырҙар, күңел күрке булып, ана ҡасандан уҡ килә икән.

Бынан 150—160 йылдар элек яҙып алынған һәм баҫып сығарылған йомаҡтары ла беҙгә үтә таныш һәм үҙ: «Еҙ һарайҙың эсендә еҙнәм аты кешнәйҙер», «Ишектән инһәм, еңгәм көлөп ултыра», «Урманда бөктөм, өйгә ҡайтып тек-тем, уртаһында иһаһай», «Мөгөҙө-мөгөҙө мөрәлгәй, мөгөҙө күккә терәлгәй, тарлауына тары сәскән, татлыһына кинән-гән», «Бәләкәй генә бөкрө, бөтә ҡырҙы бөтөрҙө», «Мороно мортас, ҡарыны ҡартас, атҡа менмәҫ, йәйәү йөрөмәҫ», «Та-баҡ тулы тарым бар, күтәрә алһаң барын да ал», «Ары тәки, бире тәки, ҡунаҡ килһә йүгер тәки» — Бындай йо-маҡтар боронғоларҙың уй-фекерҙәрен матур итеп йомоу-ҙары, образлы мәғәнәләре, музыкаль яңғыраштары менән хәҙер ҙә уй-зиһенде, зауыҡты биләй.

Күҙ алдына килтерергә мөмкин: Дәрес бара. Мөғәллим курсанттарына бер нисә йомаҡ ҡойоп ҡарай. Зирәктәре ауылдарында ишеткәндәрен шунда уҡ иҫенә төшөрөп, сат-натып яуабын да таба. Йәһәт кенә таба алмағанының атын-затын һорай. Заты шәйләнһә, аты ла табыла. Курсанттар мауығып, дәртләнеп китеп, үҙҙәре белгән бүтән йомаҡтар-

ҙы ҡоялар, бергәләп яуабын юллайҙар. Мөғәллим үҙе ишетмәгәнен хәтеренә һалып ҡуя, хатта дәфтәренә үк яҙып ала. Шулай зирәклек, отҡорлоҡ һынала. Шулай өҫтәмә өлгөләр туплана.

Йыр, мәҡәл тиһәң инде ул, йәштәрҙе, шәкерттәрҙе ҡуш...

Хрестоматияла «Татар әкиәттәре» тип килтерелгән ике бөртөк өлгө лә хәҙерге башҡорт көләмәстәренең ата-бабаһы ла баһа. Әкиәт, тиһәң, шәкерт йәнә һап итеп төшә. Оҫтарағы уны көнөн төнгә ялғап һөйләй алыр. «Аҡ йылан» иисеһен генәме, «Аҡъял батыр», туғыҙ, унар башлы аждаһалар хаҡындағыларын да. Көләмәстәрен дә өлөшһөҙ ҡалдырмаҫ.

Бына дәрестә аҙаҡ хрестоматияға индергән «Өс банхор» әкиәтенә туҡталдылар, ти. Банхор әфиюм тартҡан әҙәм, имеш. Уҡыйҙар, фәһемләйҙәр: Бохара шәрифтә өс банхор йәшәгән, ти. Бер мәл берәүһе баҙарға сыҡҡан. Тамағы ас, һатып алырға бер динар аҡсаһы юҡ. Нишләмәк кәрәк, берәүгә бер дәү сүлмәк ҡатығын өйөнә илтеп ҡуйырға яллана был. Сүлмәкте башына ултыртып илтә барышлай, татлы уйҙарға сумып китә байғош: эшем өсөн ун тин аҡса алырмын, уға бер тауыҡ һатып алырмын. Тауығым күп йомортҡа һалыр, бер аҙын һатырмын, ҡалғанын баҫтырып, себеш сығартырмын. Себештәре үҫеп тауыҡҡа әйләнер. Уларын һатып ҡуй алырмын, ҡуйынан йәнә ҡуҙылары үрсер. Уларын һатып ат алырмын. Ул ҡолонлап ебәрер. Унан яйлап йылҡы малым ишәйер, шулай байып китермен. Байығас, бай кәләш алырмын. Һай, ҡыҙын бирергә теләгәндәр күп булыр. Их, иң шәбен һайлармын кәләштең. Бай ҡыҙын, юҡ, хан ҡыҙын. Хуш, хан ҡыҙын ҡоталап, кейәү булып барырмын. Миңә, бай кейәүгә, ит вә плау ултыртырҙар. Ашар алдынан, мин, кейәү ише, көйәҙләнеп, ҡулды сайҡарға үтенермен. Быға ҡанизәге генә килһә, «юҡ инде, хан ҡыҙы үҙе ҡомғанды тотһон!» тип бойорормон. Ризалашмай, «хан ҡыҙымын», тип һауалана-нитә ҡалһа, «ә, шулаймы, хан ҡыҙымы ни әле, ә мин ирең» тип тегенең яңағына берҙе сабып та ебәрермен. Күҙҙәренән уттар күренһен. Минең кемлегемде белһен. Ярай, ҡыҙ илап атаһына барып әйтте, ти. Әйтһен! Мин — ир. Хан асыуы килеп, ҡылысын сығарып һелтәнһә, башымды бер яҡҡа янтайып ҡалырмын. Шул унайға байғош башын ялтанып ебәргәйне, башындағы ҡатыҡлы сүлмәге, ергә төшөп, селпәрәмә килде ти шул. Быны күреп, хужа: «Һин ни эшләнең? Барыһын харап иттең бит!» — тиһә, байғош: «Һин сүлмәк тиһең, башымды ялтанып саҡ һаҡлап ҡалдым», ти икән. «Һай, диуана, һиңә ни булды һуң?» — тип һорағас,

әлеге башынан үткән хыялдарын, ул биргән тиндәрҙе түләп, мал ишәйтеп, байып, хан ҡыҙына өйләнергә самалағанын һөйләп бирҙе, ти шул байғош.

Ана башҡорт көләмәсендә лә тотҡан аҡсаһына тауыҡ һатып алып, уны үрсетеп, бейә алыуға, унан тыуған ҡолондо үҫтерергә хыялланған әҙәмдең хәлен хәтерләтеп тора ла баһа. Ни эшләһендәр, ярлы-байғоштар ҡотаймаҫ донъяларын, шул уй-хыялдары менән бөтәйтеп, үҙҙәренә йыуаныс тапҡандарҙыр инде.

Мөғәллимдәре был көләмәстәрҙе бер фәһемгә ҡайтарһа, кем белә, Мөхәммәтсәлим ише зирәгерәк курсанттар икенсе төрлөрәк тә юрағандыр. Әкиәт тигәндәре лә хәҡиҡәткә яҡын бит. Уйлағанға үҙе бер хикмәт, торғаны бер хыял донъяһы.

Руссанан тәржемә тигән мәҫәлдәре, хикмәтле тамашалары үҙҙәре үрнәк вә ғибрәтле нәмәләр. Ҡүптәре төрлө хәлгә тарыған, ауырлыҡтарға юлыҡҡан әҙәмдәрҙең тапҡырлыҡ, зирәклек, һоллоҡ менән еңеп сығыуҙарын хикмәтләп һөйләп торалар, сабырлыҡҡа, ныҡышмалылыҡҡа, ғәҙеллеккә өндәйҙәр, күңелдәргә өмөт, изгелек орлоҡтарын һибәләр, зиһенеңде ҡуҙғаталар. Ана «Иван Ҡостин» тураһындағы ҙур хикәйәт үҙе бер яҙмыш төйөнө, тетрәткес тамаша теҙмәһе.

Ҡескәй генә тамаша ла тос фекерҙе аса ала. Бына «Себен» хикәйәте. Бер себен үгеҙ мөгөҙөнә ҡунып ҡайтып килә, имеш. Быға таныша осрап: «Ҡайҙан киләһең?» тип һораған. «Күрмәйһеңме ни, үгеҙ менән ер һөрөп арып ҡайтып килгәндә» тигән теге. Мәғәнәһен дә әйтеп үк бирә хикәйәт: Себен кеүек, үҙең эшләмәгәнде эшләнем тип лаф ороп йөрөмә, әҙәм.

Быларҙа мәғрифәт орлоҡтары ята түгелме һуң? «Рәүшанлыҡ» исемле хикәйәт быны үҙе үк атап әйтә: Һарун әр-Рәшит хәлифәнең вәзире бер саҡ һорау биргән ти: «И, хәлифә, һинең мәҙрәсәләр вә мәктәптәр, ғилем йәмғиәттәре бина ҡылып, балалар уҡытыуҙың мәғәнәһе ҙурмы икән? тип. «Мәгәр халҡым данлы вә ғалим булһа, ул мәғрифәтлерәк вә итәғәтлерәк булыр, донъяуи вә дини ҡанундарҙы яҡшыраҡ төшөнөр», тигән хәлифә.

Хәлифәләр, батшалар, Уғыҙ хан, Нәүширвән, Хатим Тай хаҡындағы риүәйәттәр, хикәйәттәр боронғонан, тарихтан ниндәйҙер ғибрәтле мәғлүмәттәрҙе биреү менән бергә уй-хыялдарҙы ҡуҙғатып, хисте ҡуҙғытып, фәһемен дә, рыяһыҙ өгөт-нәсихәтен дә еткерәләр, ниҙер күндерәләр, вәғәзләйҙәр улар.

Мәҙрәсәлә доғалыҡ, иман шарттар уҡып, мәғәнәһеҙ әфсен-төфсөндәр туҡып, аңлайышһыҙ ҡөрьән сүрәләрен ятлап

мейеһен сүп-сар менән тултырған Мөхәммәтсәлим шәкерткә һөйләшкән, туған теленә оҡшаш аңлайышлы төрки телдә яҙылған был дәреслектәр, матур әҙәбиәт өлгөләре йәш кешене матурлыҡ, һүҙ сәнғәте донъяһына алып инеп, уйхыялдарын уятып, эстетик зауыҡ тойғоһон ҡуҙғатып ебәрмәй ҡалмаç, әлбиттә. Улар үҙҙәре бер кинәнесле, мауыҡтырғыс зауыҡ, ғилем дарьяһы ла баһа.

Мөхәммәтсәлим корпуста уҡып йөрөгәндә инде М. Иванов уҡытыуҙан киткән, улар яғы Аçҡын заводында эшләп йөрөгән саҡ. Уның хрестоматияһы 1842 йылды Ҡазан университеты типографияһында янғын ваҡытында төп тиражы янып бөткән. Айырым даналары ғына һаҡланып ҡалған. Курсанттар, шул иçәптән Мөхәммәтсәлим дә, ул хрестоматия менән әҙәбиәт дәрестәренә өçтәмә ҡулланма рәүешендә корпус китапханаһында танышып, һабаҡҡа әҙерләнеүе мөмкин. Ул заманда шул китаптан тыш бүтән баçма ҡулланма булмаған да.

Бөгөнгө көндә Башҡортостан фәнни үҙәге китапханаһында М. Иванов хрестоматияһының бер ҡулъяҙма нөсхәһе бар. Уның М. Өмөтбаев ҡулъяҙмалары фонды менәнме йәки бүтән юл менәнмелер, бында нисек килеп ингәндер, иллә мәгәр ул ҡулъяҙма М. Ивановтың үҙ автографы, төп нөсхәһе булырға тейешле. Был нөсхә хрестоматияның ерлеген дә, йәнә уның авторының Өмөтбаевтарға һибә ҡылыуын — бүләк итеүен дә дәлилләй торғандыр. Һәр хәлдә Өмөтбаев тормошо, яҙмалары менән бағлы ҡулъяҙма ул.

Мөхәммәтсәлимдең уҡытыусыһы Салихъян Ҡүкләшев тә М. Иванов китабы тибындағы христоматия сығарған. Уның оҙон исеме титул битендә ике телдә: «Татарская хрестоматия, составленная Салихъжаном Куклишевым, коллежским советником, старшим учителем арабского и персидского языков при Оренбургском неплюевском кадетском корпусе. Казань, в университетской типографии 1859 г.», Диуан хикәйәт татар. Ошбу тәғлимнамә китабы Оренбургның кадетский корпус нам мәдрәсәсенең мөдәрис коллежский советник һәм кавалеры Салихжан Ҡүкләшевның сути вә ижтиһады илән теләп мөдәрәсә өчөн дөзөлмөштөр». Был исем-аңлатмалар дәреслектең характерын да, төҙөүсеһенең кемлеген дә, дәрәжәләрен дә әйтеп бирә.

М. Иванов, С. Ҡүкләшев китаптарының теле, Мөхәммәтсәлимдең дәрес дәфтәрҙәре шуны күрһәтә: төрки-татар теле һәм әҙәбиәте дәрестәре русса алып барылған, дәрестә рус-төрки нигеҙле сағыштырма телле методик ысул ҡулланылған. Тел, әҙәбиәт текстары төрки-татарса бирелгән. Күрәһең, дәрестәге аңлатмаларҙа мөғәллимдәр ике телде лә актив ҡулланған (төрки тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә

рус һәм бүтән халыҡ балалары уҡығанлығын да онотмайыҡ).

С. Ҡуклашевтең хрестоматияһы русса яҙылған инеш һүҙ менән асыла. Төҙөүсе бында Ырымбур крайындағы мосолмандар теле төрки нигеҙле булһа ла, татар, башҡорт, ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ) телдәренең бер-береһенән шаҡтай айырмаларын, был халыҡтарҙың үҙ көнкүреш, ыҙан-йола айырымлыҡтарын билдәләп үтә. Уларҙың һөйләү һәм яҙыу телен төрки тел тип атай. Төрки телдә ул өс төркөмгә бүлә: төрөк, сығатай һәм татар телдәренә. Татар телен һигеҙ шиүәгә (наречие) айыра: 1. Нәғеҙ татар (Россияла). 2. Ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ). 3. Башҡорт. 4. Нуғай. 5. Ҡумыҡ. 6. Ҡарачай. 8. Ҡараҡалпаҡ. 8. Мишәр шиүәләре. Тимәк, хәҙер тел ғилемендә ҡыпсаҡ-нуғай төрки тел төркөмөнә индереп йөрөтөлгән үҙ аллы телдәрҙе С. Ҡуклашев, шул заманда ҡулланылынғанса, татар теленең шиүәләре итеп кенә ҡарай. Татар теле һәм татар хрестоматияһы тигәндән ошо төрки телдәре һәм уларҙың әҙәбиәт хрестоматияһы рәүешендә киң мәғәнәле йыйылма төшөнсә аңлашыла (шуға күрә хәҙерге татар телселәренең һәм әҙәбиәтселәренең М. Иванов, С. Ҡуклашев хрестоматияларын бер татар теленә һәм әҙәбиәтенә генә ҡайтарып, үтә тарайтып аңлатырға һәм уның төрки тел һәм әҙәбиәте йөкмәткеһен танымаҫҡа тырышыуҙары һис дөрөҫ түгел).

Диуан хикәйәттең, йәғни хрестоматияның теле — шул замандың төрки яҙма теле; йөкмәткеһе татар, башҡорт, ҡаҙаҡ мәҡәлдәрен, йырҙарын, ерле, көнсығыш сығанаҡлы хикәйәттәрен, бүтән әҙәби тел ҡомартҡыларын эсенә алған интернациональ рухлы. М. Иванов китабындағы мәҡәлдәр ҙә бында инеп киткән.

С. Ҡуклашев китабының исемен һәм жанрын «Диуан хикәйәт» тип атай. Йәғни: хикәйәттәр йыйынтығы. Хикәйәттәр төшөнсәһенә ул, шул үҙ заманынан сығып, киң мәғәнә һала. Хикәйәт, хәҙер ҡабул ителгәнсә бер эпизодҡа ҡоролор тапҡыр мәғәнәле, хикмәтле, йөкмәткеле ҡыҫҡа сәсмә жанр тип түгел, бәлки сәсмә һәм теҙмә юл менән яҙылған, төрлө һәм айырым хәл-ваҡиғаларҙы һөйләүгә нигеҙләнгән ҙур һәм кесе күләмдәге әҫәр рәүешендә киң мәғәнәгә эйә. Шуға хикәйәт исемендә, хәҙер беҙ аңлағанса, повесҡа яҡын ҙур әҫәрҙәр ҙә, әкиәттәр ҙә, нәғеҙ хикәйәттәр ҙә, хикәйәләр һәм көләмәстәр ҙә алынған. Повессы, әкиәте, хикәйәһе, хикәйәте үҙе лә ул заман өсөн барыһы ла хикәйәт. Сөнки уларҙы берләштергән нәмә—ул ҙурмы, бәләкәйме— хәл-ваҡиғаларҙы һөйләп, хикәйәләп биреү. «Һаран», «Зирәк бала», «Етеҙ һәм ялҡау уғыл», «Нөжүм ғилемен өйрәнгән угыл» ишеләре берәр конкрет ваҡиғаны ҡыҫҡа ғына

итеп биш-алты юлда, иң күбе ярты биттә хикмәтләп һөйләп биреүе, тапҡыр фәһемле һүҙе менән үҙе бер парса икән, «Ширзад вә Гөлкәдәси», «Жәмшид, Зәхҡаҡ һәм Фәридун» кеүек 15-әр, 20-шәр биткә һуҙылғандары оҙон хикәйәттәр, хәҙерге термин менән әйткәндә, повестарға тарта. Әммә мажаралығы, фантастикаһы менән романтик повесть тибында. Шәкерт кеше тәүгеләре менән танышып, хикмәтле һүҙҙе ҡыҫҡа һәм тапҡыр итеп әйтеп биреү үрнәген күрһәтә, икенселәрендә инде ғашиҡтарҙың мөхәббәт мажаралары, көнсығыштың Жәмшид, Зәхҡаҡ, Фәридун кеүек ҡаһармандары менән әүрәп, ниндәйҙер гизле әкиәти донъялар эсендә гиҙә. Улар йәш кешенең былай ҙа ҡыбырсып торған йөрәген ярһытырға етә ҡалыр. Улай ғынамы, мөғәллимдәре һөйләгәндәргә, аңлатҡандарға эйәреп, шәкерт уйы быларҙың төп сығанағы атаҡлы Фирдәүсиҙең «Шаһнамә»һенә йүнәлер. Алда Өмөтбаевты был сюжеттар, ҡаһармандар ғүмер буйы арбар, ҡәләм, ғилем һөнәренә әйҙәр. Ә шул уҡ С. Ҡуклашев китабы буйынса йәки һөйләгәндәрҙән ишеткән мәшһүр Искәндәр хаҡындағы «Искәндәрнамә» дастаны һуң? Бындай тарихи шәхестәр, әҙәбиәттә, тел[...] легендалы ҡаһарманға әйләнгәндәр М. Өмөтбаевты бик боронғонан уҡ байҡар тәуарих ғилеменә илтешер. Йәнә...

Әлегә С. Ҡуклашев хикәйәтенең тағы мәҡәл һүҙҙәр, шиғырҙар, хаттар, эш ҡағыҙы өлгөләре, һүҙлектәр кеүек текстологик өлөштәрҙән торғанлығын атап үткән дә ярар. Улар шулай уҡ М. Өмөтбаевтың алдағы әҙәби-ғилми эшсәнлегендә үҫтереп алып кителәсәк орлоҡтар булып шытыр. Мөғәллиме дәрестәрендә Мөхәммәтсәлим башҡорт кантон башлыҡтарының ғарызнамәләре, рапорттары, хатта традицион хат өлгөләре менән дә танышыр.

Әҙәбиәт дәрестәре һәм дәреслектәре генәме икән һуң әле былар? Китапта халыҡ ижады үрнәктәре, башҡорт, татар шағирҙары әҫәрҙәре, рус әҙәбиәтенән тәржемәләр, көнсығыш әҙәбиәттәренән өлгөләр, эш ҡағыҙы күнекмәләре, документтар, һүҙлектәр ҙә бар ҙа баһа. Улар үҙенсәлекле антологияны хәтерләтә түгелме? Хрестоматияларҙың тотмары, структураһы махсус энциклопедияларға оҡшай төшә хатта. Улар дөйөм әҙәбиәткә бер инеш кеүек тә. Өмөтбаевтың атаҡлы «Йәдкәр»е шул ерлектән үҫеп сығасаҡ.

Ә бына Мирсалих Биксуриндың «Начальное руководство...» тигән дәреслегенә күҙ һалайыҡ. Ҡазанда 1869 йылда икенсе баҫма булып сыҡҡан был китаптың исеме үтә лә оҙон: «Начальное руководство к изучению арабского, персидского и татарского языков с наречиями бухарцев, башкир, киргизов и жителей Туркестана и с русско-персидско-татарскими словами, расположенным по предметам, разго-

ворами и прописями. Составил Мир-Салих Бикчурин, штатный преподаватель восточных языков в 4-ом военном училище и Оренбургской Неплюевской военной гимназии русского и киргизского языков в школе киргизских детей, учрежденном при Тургаевской областной правлении».

Шул замандың традицион тәртибе буйынса, китап исемендә уның төп тотмары, авторы, ҡайҙа эшләүе, профессияһы тураһында барыһы әйтеп бирелгән. Асылда, китаптың аннотацияһы ла ул.

Телдәрҙе сағыштырма өйрәнеүгә бәйле рәүештә ғәрәп, фарсы, татар-төрки телдәре хаҡында ҡыҫҡаса аңлатмалар бирелгән. Унан төрлө һүҙҙәрҙең рус, ғәрәп, фарсы, татарҙың Ырымбур һөйләше, башҡорт, ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ) телдәрендәге мәғәнәләре теҙеп сағыштырып аңлатылған. Мәҫәлән, «кеше» һүҙе: русса — человек, ғәрәпсә — шәхес, фарсыса — кес, татарса — кеше, башҡортса — кеше, ҡырғыҙса — кесе тип теҙеп бирелгән. Йәки бына «ҡатын» һүҙе: русса — жена, ғәрәпсә — зүжә, фарсыса — зән, татарса — ҡатын, башҡортса — бисә, ҡырғыҙса — байбисә, туҡал. Атай — отец — әп — пәдр — ата — атай — әкә һ. б. ш.

Курсант бында һүҙҙәрҙең төрлө әйберҙәр, кешеләр, тәбиғәт донъяһы, хайуандар, эш ҡоралдары, ҡорамалдар, ғилем, һөнәр атамаларына бағлы төркөмләнгән мәғәнәләре менән таныша, сағыштырыу аша бер тел менән икенсе тел араһындағы һүҙ айырмаһын йә оҡшашлығын хәтерендә ныҡ ғыраҡ ҡалдыра ала.

Артабан ғәрәп, фарсы, төрки-татар телдәрендәге еңелерәк фразаларҙы һәм өгөт-нәсихәт бирерлек тапҡыр һүҙҙәрҙе тәржемә итеү күнекмәләре телдәрҙе сағыштырып белеүҙе, хәтергә һалыуҙы тағы нығыта төшә. Бында татар, башҡорт, ҡаҙаҡ телдәренән һайланган ятлап алырҙай, иҫтә ҡалырҙай халыҡ мәҡәлдәре лә урын тапҡан. Ғәрәп, фарсы, төрки-татар телдәрендә уҡыу өсөн һайланған текстар бик ҡыҙыҡлы. Башҡорт телендә «Батыр батшаның әкиәте» тексы баҫылған. Ҡаҙаҡса текстар башлыса мәҫәлдәрҙән ғибәрәт.

Шулай итеп, М. Иванов, С. Күкләшев, М. Биксурин дәреслектәре, тимәк, ошо уҡ уҡытыусыларҙың үҙ дәрестәре тел менән әҙәбиәтте уҡытыуҙа, курсанттарға төплө белем, еткеле күнекмәләр биреүҙә ғәйәт ҙур роль уйнаған булыр.

## 5

Һабаҡ дәфтәрҙәре. Мөхәммәтсәлим курсанттың ғәрәп, фарсы, рус, төрки-татар телдәре буйынса һаҡланып ҡалған дәфтәрҙәре дәрестәрҙе шул тиклем яратып уҡығанлығын,

һәр ҡағиҙәне, миҫалды теүәл яҙып, нисек үҙләштерә барғанлығын дәлилләп тора. Дәфтәр ситтәренә дәрес ваҡытында, аҙаҡ тәкрарлаған, әҙерләнгән саҡта үҙенең айырым фекерҙәрен, сағыштырыуҙарын төркисә яҙып, билдәләп киткән урындары байтаҡ. Хәтерҙә ҡалырға тейеш төп ҡағиҙәләрҙе, мөһим фекерҙәрҙе аҫтына һыҙып, айырыбыраҡ барырға ла онотмаған. Һәр нәмәне еренә еткереп башҡарыуы, каллиграфик матур почергы — үҙҙәре генә ни тора. Таҙа, бөхтә, ыҡтымат дәфтәрҙәрҙең һәр битенән матурлыҡ, теүәллек, етдилек рухы аңҡый.

Шәкерт дәфтәрҙәре! Мәҙрәсә, мәктәп, йәшлек йылдарының ҡәҙерле яҙмалары бит улар өҫтәүенә. Ниҙәр генә теркәлмәгән тиһең уларға: уҡыған һабағы ла, эсе бошоп киткәндә яҙып ҡуйған йыр, бәйете лә, хатта мөхәббәт хаты өлгөһө. Берсә сабыр, берсә ярһыу йәш йөрәктең айбарлы ауаздары ла, ғазаплы өндәре лә ишетелеп ҡалыр. Шул йәһәттән шәкерт дәфтәрҙәренең кәттәләре үҙ заманының фольклор, яҙма әҙәбиәт, тел йәдкәрҙәре дәрәжәһендә ул. Бындай дәфтәрҙәр әҙәбиәт ғилемендә махсус өйрәнелеүгә лайыҡ.

Әйткәндәй, Мөхәммәтсәлим үҙе был шәкерт дәфтәрҙәренә аҙаҡ шундай нарыҡ биргәне булыр: «Ғөмүмән, азиялылар фекерҙе шиғри юлдар менән бирергә һәүәҫтәр, — ти ул. — Шуға күрә мәҙрәсәләрҙә лә шәкерттәр буш ваҡыттарында фәҡәт мөнәжәттәр һәм мөхәббәт шиғырҙары яҙыу менән мауығалар. Ҙур булмаған был әҫәрҙәрҙең күбеһе, нигеҙҙә, иғтибар үҙәгенән ситтә ҡала һәм йыш ҡына, теләһә ҡайҙа йөрөп, бөтөнләй юҡҡа сыға. Бит шиғырҙар һәм йырҙар ижад итеү шәкерттәрҙең уҡыу программаһына, ғилем өйрәнеү сиктәренә инмәй, улай ғына ла түгел, фанатиктар тарафынан бөтөнләй тыйыла».

Үтә тыйнаҡ етди шәриҡ Мөхәммәтсәлимдең дәфтәрҙәрендә лә шул шәкертлек осҡоно, шиғриәт саҡҡыһы барыбер сарпылмай ҡалмай.

Бына берсә русса, берсә төркисә яҙылған дәфтәр тыштары: «Бу дәфтәр Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевныҡы булыр. Хушдыр аның әйәсе. 1856 йылда, 1272 һижри». «Һадә дәфтәр Мөхәммәдсәлим бин Ишмөхәммәд Өмөдбаев рәшид» 1856-чы йылда Румнә илендә» (ғәрәп һүҙе «рашид» инде тура юлдан барыусы, тоғролоҡло, ҡыйыу, зирәк кеше мәғәнәһен тота). («Сочинение воспитанника Оренбургского Неплюевского кадетского корпуса ефрейтора Мухаммет-Салима Уметбаева. 28 октября 1860, 2-й эскадрон», «Русская грамматика воспитанника среднего класса Уметбаева. 1860, 9 марта Оренбург».

Фарсы, төрки-татар дәресе дәфтәрҙәренең тышҡы битендә йә эске яғында төркисә шиғырҙар ҙа осрар:

Әгәр булса бу донъяның вафасы,
Киселмәс иде Хәсәннең кафасы.
Бәканы тапты ноҡсанын,
Аның чөн әгәр беленер тариҡасы.
Тәсниф Мөхәммәдсәлим.
Һәдә ғәләм шарты иләдер, әй, ғәзизләр,
Айырмай икән без дик би тимерләр.

Бындай шиғри күсермәләрҙә, шәкерт дәфтәре яҙмаларында дәфтәр эйәһенең рухи хәле лә сағылып ҡалыр.

Көнсығыш телдәренә бағышланған бер дәфтәр тышында шундай юлдар теркәлгән:

«Дәүләт гиззәт булә булмаған ҡырын,
Әй нәфсе һәм дәми рух ал әмин.
Дәүләт әгәр булса иде пайдәр,
Янмас иде Рөстәм әнла сафында, яр.

«Дәүләткә ышандаҡ күп әл-гәмәл салих сәбәб улыр». Ҡай бер төрки сығанаҡтарҙанмы йәки фарсы телен өйрәнгәндә фарсынан тәржемәләрҙәнме Мөхәммәтсәлим шулай күңеленә ятҡан айырым шағир бәйеттәрен дәфтәр тышына уҡ сығара. «Бабурнамә»нән бәғзе өлгөләрҙе күсерә. Йөрәге йәшлек дәрте менән ярһыбыраҡ типкәндә йырҙар яҙып ҡуйырға ла күп алмай:

Тәрәзәм түбә тутый ҡош,
Ал ефәкләр белән тотоңоз.
Үзем ҡунаҡ, сүзем бүләк
Өмөт итеп тороңоз.

Быға оҡшаш йырҙарҙы Мөхәммәтсәлим шәкерт һағышланған саҡтарында алыҫтағы туған ауылына, ятҡан әсәһе Бәлхискә лә яҙып ебәргәндер, бәлки.

Рус теле грамматикаһы дәфтәренең тышлығында, тәбиғи — рус телендәге шиғырҙар.

Науки юношей питают,
В несчастной случай берегут.
Наука в трудностях утеха,
И в дальних странах не помеха.

---

*вафа* — тогролоҡ; *кафа* — муйын; *бәҡа* — мәңгелек; *ноҡсан* — кәмселек; *тариҡа* — юлы, ысулы; *тәсниф* — яҙыусы.

Бындай поэтик строфалар һабаҡ, ғилем донъяһына мөкиббән Мөхәммәтсәлимгә төп девиз кеүек шулай алға сығарылғандыр моғайын.

Тарихҡа ҡарар тәрән мәғәнәле шиғри юлдар ҙа күҙгә салына.

> Когда хорошо живется другим
> Злостью один не восстановит Рим!

Коли де Рензи был восстановитель древнеримской республики. Он убит, а Капитолий Римский сожжен».

Бындай яҙмалар М. Өмөтбаевтың аҙаҡ боронғо Рим республикаһы тарихы менән ҡыҙыҡһыныуының башы булғандыр тип әйтергә лә ярайҙыр.

Шәкерт-курсант сағында зиһененә, күңеленә һалынған нәмәләргә һуңыраҡ яңы баштан ҡайтасаҡ әле ул.

Орлоҡтар шытым бирә башлай.

## 6

Курсанттар күпме хәрби тәртиптә йәшәмәһен, күп ғүмерҙәрен һабаҡ, һалдат күнекмәләре менән үткәрмәһен, уларҙың эш-тормошо кадет корпус-казармаларына ғына һыйып ҡалмаған, әлбиттә. Ял көндәрендә увольнение алып ҡалаға сығып йөрөгәндәр. Яҙын, йәйгелсген алты-ете аҙнаға Һаҡмар буйына хәрби лагерға күскәндәр. Ҡалалағы ҡай бер йәмәғәт кисәләрендә ҡатнашҡандар. Башҡорт ғәскәре идараһы, уның эштәре, айырым уҡыу йорттары менән бәйләнештәр булған.

Кадет корпусынан бер урам аша ҡаҙаҡ балалары өсөн бер махсус уҡыу йорто бар. Ул Ырымбур сик буйы комиссияһы ҡаршыһында ойошторолған йорт 1850 йылда ғына асылған. Кадет корпусында уҡытҡан уҡытыусыларҙың күбеһе, шул иҫәптән Салихъян Күкләшев менән Мирсалих Биксурин дә, был ҡырғыҙ мәктәбендә уҡыта. Шул уҡ ғәрәп, фарсы, төрки-татар тел һәм әҙәбиәт дәрестәрен. С. Күкләшев өҫтәүенә ул мәктәптең уҡыу-тәрбиә эштәре буйынса сик буйы комиссияһының рәисе һәм мәктәптең надзирателе лә. Нәҡ ошо педагогтар кадет корпусының икенсе эскадрон курсанттары менән ҡырғыҙ мәктәбе уҡыусыларының үҙ-ара аралашыуына әһәмиәт биргән. Уҡыу-уҡытыу эшендәге программаның күпмелер яҡынлығы, берҙәй маҡ-

---

*дәми* — һулыш, ҡыҫҡа мәл; *әмин* — тыныс; *пайдәр* — ныҡлы, даими; *ушандаҡ* — шундай; *салих* — яҡшы, изге.

саттар, уртаҡ уҡытыусылар был ике уҡыу йортон бер-береһенә тартҡан.

Ҡырғыҙ мәктәбе таш бинаһының, уҡыу бүлмәләренең, дөйөм тораҡтың йыһазландырылышы бер төрлө тиерлек. Уҡыу-тәрбиә тәртип-низамдары, һабаҡ ысулдары ла бер тирә. Тик тышҡы яҡтан ҡырғыҙ уҡыусыларының кейемһалым формаһы үҙгәрә, ярым ҡырғыҙса. Ҡышҡы кейемдәре кафтанға оҡшаш тун, баштарында малахай. Йәйге кейемдәре ҡупшы ғына елән формалы.

Курсант башҡорт, мишәр егеттәре ҡырғыҙ мәктәбенә йыш барыр булғандар, үҙ сиратында, ҡаҙаҡ уҡыусылары — корпусҡа. Ундай аралашыу йәйге хәрби лагерь, йәйләү шарттарында йышая төшкән. Ҡырғыҙ мәктәбенең йәйге урҙалары йәйләүгә тартымыраҡ икән. Шәкерттәр өсөн тирмәләр ҡоролған, бейәләр бәйләнгән, һыбай йөрөргә, ҡаҙаҡ далаһы шарттарына күнегергә өйрәтелгән. Унда ат сабыштары, мәрәйгә атыштар, төрлө уйындар ҡорғандар. Бындай саҡта корпустан, күбеһенсә икенсе эскадрондан, курсант ҡунаҡтар саҡырылған. Мөхәммәтсәлимгә лә ҡырғыҙ мәктәбендә, лагерь йәйләүҙәрендә, уйындарында күп тапҡыр булырға тура килгән. Атта сабыш, уҡтан атыш, ҡылыс менән орош ярыштарында башҡорт егете Мөхәммәтсәлим бүтәндәрҙән ҡалышмағандыр тип уйларға кәрәк.

Кадет корпусын һәм ҡырғыҙ мәктәбен 50-се йылдарҙа аҙаҡ ҡаҙаҡ халҡының арҙаҡлы йәмәғәт эшмәкәрҙәре булып киткән уҡыусылар тамамлап сыҡҡан. Шулар араһында ҡаҙаҡтың мәшһүр мәғрифәтсеһе һәм әҙибе Ибраһим Алтынсарин да бар. 1855 йылды кадет корпусын билдәле булып китер Мөхәммәт Йәнтүрин түрә тамамлаһа, 1857 йылды ҡырғыҙ мәктәбен — Ибраһим Алтынсарин. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев Йәнтүрин менән корпуста уҡ яҡын таныш була, уларҙың тормош юлдары аҙаҡ та киҫешә тора. Мөхәммәтсәлим курсанттың Ибраһим шәкерт менән осрашыуы, танышлыҡтары хаҡында ҡулыбыҙҙа документ-дәлилдәр юҡ әлегә. Шулай ҙа Ибраһим Алтынсариндың Салихъян Күкләшев, Мирсалих Биксурин уҡытыусылары менән тығыҙ бәйләнеше, улар йортона барып йөрөүе хаҡындағы мәғлүмәттәр, ике уҡыу йорто тәрбиәләнеүселәренең йыш осрашыуҙары Мөхәммәтсәлимдең Ибраһим менән яҡшы таныш, фекерҙәш булыуына инандыра. Уларҙың артабанғы эшмәкәрлектәре — тәржемәсе, уҡытыусы булып эшләүҙәре, мәғрифәтселектәре — шулай уҡ уртаҡ бер төрлө яҙмышлы. И. Алтынсарин остаздары үрнәгендә «Ҡырғыҙ хрестоматияһы», «Начальное руководство к обучению киргизов русскому языку» китаптарын әҙерләп баҫтырып сығарған уҡымышлы һәм мәғрифәтсе икән, М. Өмөтбаев та

үҙ туған халҡы өсөн шунса хеҙмәт күрһәткән ғалим һәм әҙип, «Йәдкәр» йыйынтығы һәм уҡыу китаптары авторы. Остаздары ниндәй, шәкерттәр шундай, тигән тапҡыр һүҙ ошо шәкерттәр бағланышында һәм берҙәй эшмәкәрлегендә тағы бер ҡат раҫланмаймы ни?

Бына тағы бер бина. Быныһы — башҡорттарҙың атаҡлы Каруанһарайы. Ҡадет корпусынан ҡала Мөхәммәтсәлимдең бар уйын, йөрөр һуҡмаҡтарын тартҡаны ошо зиннәтле һарай булғандыр, моғайын. Уға һәр башҡорттоң, башҡорт халҡының уй-хыялдары, яҙмыш төйөндәре тир һәм ҡан төйөрҙәре менән ҡатыш килеп төйнәлгән бит. Тәүләп атаһы менән бергә йәки үҙе генәме башлап бында нисек аяҡ баҫҡандыр, әммә Каруанһарай бар йәме һәм мөһәбәтлеге менән Мөхәммәтсәлимде лә хайран итмәй ҡалмаҫ. Бөтә ҡаланың күрке һәм гүзәл архитектура ҡомартҡыһы, йөҙөк ҡашы булырлыҡ зиннәтле бинаһы ла баһа ул.

Каруанһарай — үҙе бер бөтөн архитектур ҡомартҡылар комплексы. Атаҡлы архитектор А. Брюллов проекты буйынса һалынған бина. Башҡорт ауылы, йәйләүе ҡоролошон белгән һәр кем тоҫмаллай торғандыр: урталыҡта һигеҙ кирәгәле тирмәгә оҡшатып һалынған һигеҙ ҡырлы түңәрәк көмбәҙле таш мәсет. Ҡырында алғы планда өс яруслы оҙон таш манара. Уныһы йәнә һигеҙ ҡырлы оҙон ярустан, аҙан әйтер рәшәткәле түңәрәк кәрнистән һәм икенсе ярусы ярым конус булып ослайып бөткән өлөштәрҙән ғибәрәт. Мәсеттең йәшел түбәле башындағы ослоҡайында ла, манара осонда ла алтын ялатылған ярым ай беркетелгән. Урталыҡтағы мәсет-тирмәне уратып, оҙон манараны ике яҡлап төкәлткәндәй, ике ҡатлы таш корпустар әйләндереп алған. Мәсеттең төрлө аҫыл таштар менән биҙәлгән диуарҙары, шыма таштары ялтырап торған оҙон һомғол манараһы, ҡупшы итеп семәрләп һалынған йорттары Каруанһарайға күрмәлекле күркәмлек һәм мөһәбәтлек биреп тора.

Йомаларға үҙҙәренең ахун хәлфәләре менән килер Мөхәммәтсәлим шәкерт мәсет залының иркенлеген ишек, тәҙрә баштарына, түшәмдәргә ғәрәпсә яҙылған алтын путаллы яҙыуҙарҙы уҡып, атаһы менән ошо бинала башҡорт ғәскәре идаралығында булып, Каруанһарайҙың эстәрен күреп йөрөп күп тапҡырҙар һоҡланмай һәм уйланмай ҡалмағандыр.

Ололарҙан, атаһынан ишетеп, ялтырап торған Каруанһарайҙың аяныслы яҙмышын яҡшыраҡ белгәс, борсоулы уй-хистәр ҙә йөрәген телеп үтмәй булмаҫ. Әйтеүҙәренсә ҡалай һәйбәт маҡсаттар, яҡшы ниәттәр менән һалдырылған төҫлө был Каруанһарай: башҡорт ғәскәренең фатирлар





*Ырымбур. Каруанһарай күренештәре.*

төп йорто булыр, башҡорттарҙың ҡалаға тура килеп төшөр ҡунаҡханаһы — каруанһарайы хеҙмәтен үтәр, башҡорт балалары уҡыр, төрлө һөнәргә өйрәнер мәктәп, һөнәр йорт урынын алыр. Генерал-губернатор В. А. Перовский әйткәнсә, башҡорт цивилизацияһының бер бишеге булыр ул. Шулай ниәтләп, генерал-губернатор Василий Алексеевич халыҡҡа мөрәжәғәт иткәс, башҡорттар үҙ хисаптарынан аҡса йыйып, ҙур капитал туплап, хөкүмәттән бер тин аҡса сығартмай үҙҙәре үк тотона бит төҙөргә халыҡ һарайын. Уралдан ағасын киҫеп, Һаҡмарҙан ҡыуғынын ҡыуа, Ырымбурҙан егерме саҡрым ары тауҙан ташын киҫеп, бар ағасташын, кәрәк-ярағын үҙе меңәрләп йөк аттар менән ташый, һәр таш, кирбесен үҙе һала. Хатта Ҡаруанһарай тирәләй төҙөлгән парк-баҡсаның һәр бер төп ағасын Урал урмандарынан төбө-тамыры, бар тупрағы менән имгәтмәй ҡаҙып алып, арбаларға тейәп килтереп ултырта. Шыршыһы, ҡарағайы, ҡарағасы, йүкәһе, ҡайыны, имәне, сағаны — һәммәһе Урал урманының үҫеп ултырған йәшел ағасы.

1836 йылдан 1842 йылғаса алты йыл буйы һала халыҡ был ҙур таш һарайҙарҙы. Унда башҡорттарҙан аты-ние, арба-санаһы менән йыл да меңдән ашыу ылау, кеше ҡатнаша. Халыҡ, үҙебеҙ өсөн тип, дәртләнеп эшләй.

Ҡөт һин изгелек батшанан, уның түрә-һанаттарынан. Ҡаруанһарай төҙөлөп бөтөүе була, халыҡ тарафынан халыҡҡа тип һалдырылған бина хөкүмәт ҡарамағына һалдырып та алына: губернаның төрлө административ учреждениелары, фәлән-төгәне инеп ултыра. Ҡаруанһарайҙы ысынлап та бер һарайға — ат һарайына, казармаға әйләндерәләр. Һемәйтелгән башҡорттарға үҙҙәре өҫтөнән хакимлыҡ итер башҡорт ғәскәренең бер канцелярияһы ғына бер мөйөш таба.

Батшаларға ышанған ыштанһыҙ ҡалған, тигәндәре шулдыр инде. Уҡыған, уҡымышлы булырға теләгән башҡортҡа аяуһыҙ тарих, батшалар тағы бер һабаҡ уҡыта, халыҡтың өмөт-ниәтен өҙөп төп башына ултырта.

Уҡый белһәң, ҡаланың үҙе, һәр урамы, таныҡлы бинаһы, казармаһы, баҙары, халҡы һабаҡ бирер китап икән.

Ана Яйыҡтың бейек тау башында генерал-губернатор йорто ҡайһылай ҡайҡайып ултыра. Йәнәшәһендә Преображенск соборы. Уның янында Главгауптвахта төрмәһе. Әҙәм яҙмыштарын үҙенә буйһондорған биналар.

Ҡорпуста уҡыуының икенсеме-өсөнсөмө йылында атаһы менән Мөхәммәтсәлимдең был губернатор йортона ингәне, атаһына эйәреп Перовскийҙың ҡабул итеү бүлмәһенә үткәне, курсанттың төҙ ҡатып йәүкә яһағаны ла булыр.

Ырымбурҙа фатирланған башҡорт ғәскәре һалдаттары Мөхәммәтсәлим уҡыған йылдарҙа инде сик буйы һағы тигән вазифаларҙан бушанып, трудармияһына әүерелеп киткән дәүер. Ырымбурҙың генерал-губернатор канцелярияһы, Николаевск казармалары, ҡала һыу үткәргестәре ошо һалдаттар тарафынан төҙөлгән. Орск, Уральск ҡалаларының байтаҡ йорттары, казармалары шулар ҡулы менән һалынған. Губерна үҙәгендә төҙөлөштәрҙә, былай күпме ырыуҙаштарын, яҡташтарын осратҡаны булыр. Башҡорт ғәскәре идаралығына йомоштар менән ингәне, хатта толмаслыҡ ҡылыу эшендә булышҡаны бар. Шул аралашыуҙарҙа күрә һәм аңлай башлай ул һалдат хеҙмәтенең ауырлығын, башҡорт ғәскәренең яҙмышҡынаһын.

1853 йылдың көҙөндә Аҡ мәсет походында булған ауылдашын Ырымбурҙа осратып, уның ауыҙынан ишеткән һүҙҙәре хәтерендә. В. А. Перовский командалығындағы был ауыр хәрби походта өс меңгә яҡын башҡорт һыбайлылары ҡатнашҡан икән. Ҡаҙағстан ҡом сәхрәләре аша үткән оҙон юлда эҫелектән, сарсауҙан интегеп, асығыуҙан миктәп әллә күпме ат, кеше ҡырылған. Һыр Даръяны кискәндә, бер нисә ҡәлғәне яулап алғанда, бигерәген ҡалын таш диуарҙар менән уратылған Аҡ мәсетте штурмлағанда йөҙәрләгән казак, башҡорттар баштарын һалған. Перовскийҙың 1839 йылғы уңышһыҙ Хиуа походынан һуң, был яу уңыш менән бөтөп, генерал-губернатор элекке хурлығын юйып, ордендар менән бүләкләнеп, графлыҡ дәрәжәһен алһа ла, быларҙы әүәле походта түрәгә «Перовский» маршын бағышлаған һалдат, башҡорттар йәнә баш, йән менән түләгән. Батша, түрәләр тип башҡорт баштары ҡайҙарҙа ғына ятып ҡалмаған!

В. А. Перовскийҙың тышҡы ялтырауыҡ, парадсылыҡ менән мауыға торған ғәҙәте булған. Шаулы тантаналар, парадтар ҡорорға яратҡан. Дини байрамдарҙа сиркәүгә барғанда ғәуамгә аҡса һибергә хирес икән. Губернаторҙың ниндәй «йомарт», «шәфҡәтле», икәнен күрһендәр, йәнәһе. Уның малын, көс-ҡеүәтен тойһондар. Ул һәр йыл һайын тиерлек май аҙаҡтарында Һаҡмар һыуы аръяғындағы киң туғайлыҡта һабан туйына оҡшаш бер йыйын үткәргән. Үҙенсә бер парад кеүек тамашалар ҡорҙорған. Шунда башҡорт ғәскәре һыбайлылары яҡшы аттарҙа, ҡупшы хәрби кейемдә парадта ҡатнашҡандар, сабыуыл, ярыш тамашаларын күрһәткәндәр. Башҡорт көрәшен, бүтән ярышын ойоштороғандар. Еңеүселәргә төрлө бүләктәр таратҡандар. Мөхәммәтсәлимдең ошо тамашаларҙы һоҡланып ҡарағаны, курсанттар парадында үҙе ҡатнашҡаны булыр.

Иң ҡәттәһе, моғайын, атаһы һөйләгәне. Ишмөхәммәт

яңы кантон булып эшләй башлаған сағында 1837 йылдың йәйендә Александр ғәли йәнәптәре — булаһы батшаның әле тәхет вариҫы осоронда Перовский шулай бик шәп парад ойошторған икән. Тәхет вариҫын таң ҡалдырғаны башҡорт һыбайлыларының сабыуылы булған, ти. Бер сотняһы шау күк аттарҙа, ҡыҙыл төлкө бүректә, уҡа таҫмалы ҡыҙыл боҫтау хәрби кейемдә, уҡ-һаҙаҡ менән ҡалҡанда, икенсе сотняһы шәп туры аттарҙа, башта тимер шишаҡта, өҫтә тимер калчуга өҫтөнән кейелгән еңел еләндә, ҡулға кәкре ҡылыс тотҡан көйө ҡара-ҡаршы сабыуылға йән-фарман сабышып, ҡылыста айҡашып, ер һелкетеп үтеүҙәре булған тамашаның тамашаһы. Тәхет вариҫы бик ҡәнәғәт ҡалған. Ҡем-кем, Перовский генерал-губернатор тамаша-декорацияны ҡора белгән инде. Ни тиһәң дә, эстән ҡалтыр, тыштан ялтыр декорациялар заманы.

Ырымбур кешеһе 1824 йылда Александр Беренсе батша, ә һуңыраҡ Александр Икенсе батша ҡунып киткән Николаевск урамындағы ике ҡатлы ҡупшы мезониналы йортто ла яҡшы белә. Был йортта 1833 йылды А. С. Пушкин да бер кис ҡунып киткән. Шул йортто һуңынан Әхмәт бай Хөсәйенов һатып алған. Ҡалай үҙенсә данлы, иҫтәлекле йорт.

Батшаларҙы, тәхет-вариҫтарын бар шартына килтереп ҡабул итә белер Перовский губернатор яҙыусылар, ғалимдар менән аралашып, салондар ҡороп, үҙен мәғрифәтле, юғары культуралы интеллигент түрә итеп танытырға тырышҡан. Ул үҙ тирәһенә В. В. Григорьев, В. В. Вельяминов-Зернов, Ханыков кеүек күренекле ғалимдарҙы, В. Даль, А. Толстой, А. Плещеев һымаҡ яҙыусыларҙы тартҡан. Шуныһын да билдәләйек: В. В. Григорьев, Ханыков кадет корпусында ла уҡытҡан, Ханыков, Вельяминов-Зернов Ырымбур сик буйында эшләгән. Тимәк, Мөхәммәтсәлим дә был ғалимдарҙан дәрес тыңлаған булырға тейеш. Илленсе йылдарҙа Ырымбурҙа, губернала һөргөн ғүмерҙәрен кисергән Т. Г. Шевченко, Плещеев тураһында Мөхәммәтсәлимдең ишетеүе, белеүе бик мөмкин. Ә бына шул кадет училищеһын тамамлаған, аҙаҡ Т. Г. Шевченко менән яҡындан таныш икенсе башҡорт курсанты Әхмәт Хәйеров бөйөк украин яҙыусыһы менән Манғышлаҡта бергә хеҙмәт итә, аралашып, хат алышып йәшәй.

Йыйып әйткәндә, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың кадет корпусында ете йылға яҡын уҡыу дәүерендә, йәғни үткән быуаттың илленсе йылдарында Ырымбур крайында, бигерәк тә уның үҙәгендә булып уҙған күп кенә эре һәм ваҡ ваҡиғаларҙың шаһиты булырға тура килгән, әлбиттә. Губерна үҙәгенә кантон эштәре менән йыш ҡына килер ата-

һы аша ла, үҙе күрә-ишетә белеп тә был осорҙағы кантонлыҡ хәлдәрс, башҡорт ғәскәрс эштәрс, халыҡтың көнкүреше, тын алышы, 1853 йылгы Аҡ мәсет походы, 1855—1856 йылдарҙагы Ҡырым һуғышы, унда оҙатылған башҡорт полктары, Ырымбурҙың үҙ тормошо, ижтимағи атмосфераһы тураһында билдәле бер мәғлүмәттәрс, үҙ ҡарашы ойошмай булмаҫ. Йыл да ул тыуған ягына, Ибраһимға ике айға каникулға ҡайтыр булған. Ил-йорт хәлдәрен күреп-белеп йөрөгән. 1856 йылдың йәйендә Һамар губернаһына көкөрт һыуы менән дауаланыу шифаханаһына барған. «Көкөрт һыуы» тигән юлъяҙмаһында был шифахана хаҡында аҙаҡ шуларҙы әйтеп үтә: «1856 йылдың 10 июнь көнөндә Ырымбур ҡалаһындағы кадет корпусынан, ҡолаҡ һәм баш ауырыуына дауа эҙләп, Һамар губернаһында Сергеевский ҡаласығы ҡорбында (эргәһендә) хазиналыҡтан һаҡланмыш көкөрт дауаһына барҙыҡ. Ул бер бейек тауҙыр. Ҡайһыһының күҙләүҙәренән, тирмән улағынан аҡҡан кеүек, көкөрт һыуы ағалыр. Унда баҡса һәм күперҙәр һалынған. Тауҙың ситенән йөрөп һыу эсәләр, күл эсендә һыуҙа йөҙәләр. Мунсалары бар. Ундағы һәнхамды (хозур күренештәрҙе) яҙып бөтөрөп булмаҫ. Ғәжәйеп һәм ғәраип (сәйер) таштар, шишмәләр һәм нәбаттар (үҫемлектәр) — барыһы ла мәғрифәт эйәһенә мөғтәбәрҙер.

2 августа Ырымбур ҡалаһына килдек. Кадеттар, йәғни шәриктәребеҙ лагерҙа ине. Беҙ ҡайтҡас та Петербургтан ревизор килеп, һәр төрлө һөнәребеҙҙән имтихан итеп, бәғзеләребеҙгә мәҙех (маҡтау) ҡағыҙҙары бирелде. Беҙ ҙә уға лайыҡ булдыҡ».

Был яҙмала шундай мәғлүмәт тә бар: «Батша хәҙрәте Александр çани Николаевичтың коронования байрамын шул көкөрт шәһәрендә яһаныҡ». Йәғни, ярым хәрби режимдағы Николай I батшалығы дәүере үтеп, Александр II батша тәхеткә ултырған саҡ был.

Кадет корпусының курсанттарҙы Россия батшалығына тоғролоҡло хеҙмәтселәр итеп тәрбиәләү маҡсаты мәғлүм дәрәжәлә бойомға ашырылыуын танырға кәрәк. Унда батшалыҡҡа тогро хеҙмәт иткән, аҙаҡ генерал, адмирал, ҙур административ түрәләр булып киткән байтаҡ кешеләр етешкән. Ете йыл буйы уҡыу дәүерендә корпустағы шул монархистик рух, батшалыҡҡа, дәүләт хеҙмәтенә тоғролоҡ хисе Мөхәммәтсәлим курсант аңына һәм күңеленә лә ярайһы уҡ һеңешеп ҡалғанлығы алда күренер. Үҙенең кантон улы булыуы, аҙаҡ үҙе дворянлыҡ дәрәжәһен алыуы ла быны күпмелер нығытмай ҡалмаҫ.

Әммә корпуста прогрессив ҡарашлы уҡытыусыларҙың эшләүе, С. Күкләшев, М. Биксурин һымаҡ мөғәллимдәре-

неӊ мәғрифәтселек ҡараштары, батшалыҡтың милли-колониаль сәйәсәтенең тиҫкәре яҡтарын тоҫмаллай башлауы Мөхәммәтсәлимдә прогрессив, демократик ҡараштарҙың тәүге орлоҡтары һалыныуға ла ерлек табыр.

Мөхәммәтсәлим 1860 йылдың йәйендә Ибраһимға каникулға ҡайтҡанда атаһының ҡаты ауырығанын күрә. Аяҡ-ҡулдары һыҙланыуҙан ул көндәр буйы тиерлек түшәк өҫтөндә ята. Ҡантон, хужалыҡ эштәрен етешкәндә күберәк ағаһы Фәхретдин башҡарырға мәжбүр. Атаһының сырхау хәлен, кантон, хужалыҡ эштәренең торошон, барыһын да уйлап, кәңәшләшеп, Ишмөхәммәт, туғандары Мөхәммәтсәлимгә уҡыуын ташларға тура килеү, кантонда уның бик кәрәклеге хаҡында хәл ҡылған булырға тейеш.

Шул көҙҙө иһә Мөхәммәтсәлим корпусҡа уҡырға бармайынса туған кантонында эшкә ҡала, дөрөҫөрәге, атаһының күп йөктәрен үҙ өҫтөнә ала.

Аҙаҡ корпустан алынған, Мөхәммәтсәлимдең ҡулына бирелгән танытма шундай мәғлүмәттәрҙе документ итеп теркәй:

## СВИДЕТЕЛЬСТВО

Оренбургского Неплюевского кадетского корпуса, воспитаннику среднего класса 2-го эскадрона Мухамед Салиму УМУТБАЕВУ в том, что он поступил в сей корпус 1852 года ноября 24-го и как из документов видно, сын есаула башкирского войска, родился 1841 года августа 22-го, верноподданные магометанского.

Во время состояния его в корпусе поведения был хорошего, обучался с хорошим успехом: закону магометанскому, языкам: русскому, персидскому, татарскому (тюрки); наукам: арифметике, географии, истории и гражданской архитектуры и искусствам: рисованию, гимнастике и фронтовому учению. Ныне согласно просьбе отца его, с разрешения штаба его императорского Высочества, главного начальника военно-учебных заведений от 25 августа 1860 года, за № 4874, уволен из заведения по домашним обстоятельствам. В удостоверении сего дано ему сие свидетельство за надлежащим подписом и приложением казенной печати.

г. Оренбург, ноябрь 10-го дня 1861 года.

Подлинные подписи: генерал-майор Ш и л о в
инспектор классов полковник М и т у р и ч
и командир эскадрона капитан П о п ы в а н о в

С подлинным верно, за директора корпуса инспектор классов полковник Дерюгинский

Сверял секретарь Еремин.

Был танытма документ күпте раслай: Мөхәммәтсәлимдең корпуста яхшы укыуын, һәйбәт тәртибен, белем даирәһен дә.

Шул заман Россияла реформалар башланып тора ине. Өмөтләнеп һәм һағайып күптән көткән реформалар.

## ВОЛОСТЬ

*«Беҙ ғәүамдың ходатайы...»*

М. Өмөтбаев

1

Шул ҡайтыуынан ауылда ҡалды. Ҡалмаһа ла ҡалды инде. Һигеҙ йыллыҡ корпустың һуңғы курсын бөтөп, аттестатын алаһы ине лә бит, сараһы юҡ: атаһы ҡаты ауырыу, кантон эштәре мөшкөл, хужалыҡ тарҡау. Ағаһы Фәхретдин ситтә — 27-се башҡорт кантоны башлығының үҙ эше башынан ашҡан. Төп йортҡа булышырға түгел, ҡайтып, атаһының хәлен белешергә лә йүнләп форсаты теймәй. Энеһе Сөләймән үтә йәш, һеңлеләре ваҡ. Әсә-көндәштәрҙең үҙ шөғөлө. Ә йорт-ҡаралты, мал-тыуар ишле.

Аталы-уллы Өмөтбаевтарҙы нығыраҡ борсоғаны — кантон хәле. Губерна үҙәгенән, өйәҙҙең үҙенән дә кантон буйынса төрлө инструкциялар, ҡағыҙҙар килә тора. Ниндәйҙер үҙгәреш һиҙелә. Реформалар хаҡында һүҙ йөрөй. Кантондарҙың абруйы ла төшөп бара.

Мөхәммәтсәлимдең бөтөр уҡыуын өҙөп, кантонда эшкә ҡалырға кәрәге хаҡында атаһы менән етди һөйләшеү булған икән — уны шулайыраҡ күҙалларға мөмкин:

— Улым, хәлемде күреп тораһың. Егерме йыллап әрме хеҙмәтенең кантонлыҡ мәшәҡәттәренең, өҙлөкһеҙ, яҙ-ҡыш тимәй, юл йөрөмдәрҙең ҡасафаты йыйылғандыр: аяҡ-ҡул тәҡәтһеҙ һыҙлай, быуындар шеш. Бынан ары, белмәйем, аяҡҡа баҫа алырмынмы, юҡмы, хоҙай эше. Күңелем ниҙер һиҙенә. Ни эшләмәк кәрәк, тәҡдиргә ни яҙһа, шул булыр. Әйтер һүҙем шул, улым: донъяны, эште һинең ҡулға тапшырырға тура килә. Фәхретдин ағайыңдың үҙ донъяһы, үҙ кантон хәстәре. Туғандарың әле ваҡ. Һинә тәртәгә егелергә ваҡыт. Бүтән әмәл юҡ.

— Аңлайым, атай. Барыһын да күреп-белеп торам. Уҡыу өҙөлөп ҡалыуы ғына йәл.

---

*ғәүам* — халыҡ, ялпы.

— Унығы шулай. Ни эшләйһең инде, шунса уҡыуың да ярап торор. Хикмәт аттестат-ҡағыҙҙамы ни, ғилем-белемендә булыр. Уҡымышың, минеңсә, һис тә әҙ түгел. Шуныһын да тоям, улым: һинең күңелең барыбер әрме хеҙмәтенә ятмаç төçлө.

— Шулай инде, атай. Военный эш миңә бер ҙә генә төç түгел.

— Унан, үҙең дә анғараһыңдыр, башҡорт ғәскәре, кантонлыҡ күпкә бармаçтыр, моғайын. Әле үк военный хеҙмәт бурысы аҡсалата түләүгә әйләнеп килә. Былтырғы отчетта гражданский губернатор Барановский башҡорт, мишәр, типтәрҙәрҙе лә гражданский управлениеға бирергә кәрәк, тигәйне. Оло түрәләр әйттеме, ул хаҡ булыр.

Шуны ла иçеңдә нығ тот: ары ни генә булмаһын, илйортҡа үҙ кешең, ышанысы ҡул кәрәк. Ҡантон һынлы кантонды ғына түгел, хатта йорт-хужалыҡты ла теләһә кемгә ҡалдырып булмай. Күҙ терәп торған берҙән-бер кешем, ышанысым һин, улым.

Бүтәне хаҡында ла нығ уйланам. Күптәр төшөнмәй әле: кантонныйҙан гражданскийға күсеүе, ай-һай, бик еңелдән дә булмаç. Иген игеүҙе киңәйтергә, төрлө һөнәрҙәргә өйрәнергә зарурат артыр. Белмәçһең, гражданскийҙа аçабаларҙың ергә вотчинный правалары бөтөүе лә бар. Ни генә тимә, яңы заманда башҡорттоң, ғәуам халҡының барлы-юҡлы праваларын яҡлашыр өсөн дә уҡымышлылар кәрәк. Наҙандан фәтүә әҙ.

Шулай ун туғыҙ йәшлек еткән егет Мөхәммәтсәлим ихтыяждан тормош арбаһына егелеп китергә мәжбүр. Хәйер, әлегә тәртәнең йәнәшенә — мисәүгә.

Ул башта атаһының ауырып ятҡан сағында йыйылған ҡағыҙҙарын, губерна, өйәҙ күрһәтмәләрен, төрлө кисектергеһеҙ эштәрен атҡарыу, тәржемәләү, яуаптар яҙыу менән мәшғүл булды. Ил-йорт йомошо менән өйәҙ үҙәгенә — Өфөгә әллә нисә тапҡыр барып ҡайтты. Йәйен-көҙөн үҙҙәренең йорт хужалығын рәткә һалыу, бесән саптырыу, кәбәндәр ҡойоу, иген урып, сыбағашлап һуҡтырып алыу, мал-тыуарҙы ҡышҡы ҡураларға индереү, бүтән тағы тауыҡ сүпләһә лә бөтмәçлек хәстәрҙәр менән шөғөлләнде.

Ҡышҡыһын Өфөгә барып, 1861 йылдың башынан башҡорт ғәскәре ҡарамағына хеҙмәткә тәғәйенләнеп ҡайтты. Белеменә ҡарап, юнкерға бәрәбәр урядник чины бирҙеләр. Ул мундирын да үҙе һатып алырға тейеш булды. Ҙур түрәләр килгәндә, рәсми вазифаларын башҡарғанда кейгеләй торған был мундиры уҡалы погоны һәм торма яғалы костюмы, көмөш галунлы салбары, оҙонса түбәле ҡырма бүрке, йомшаҡ итеге менән йәш кешегә үтә килешеп тора ине.

Ҡылысын да тағып алһа, ысын яһау хәрби урядниғы ине башҡорт ғәскәренең. Азамат егет.

Былай штат буйынса тәғәйен эше — үҙҙәренең 25-се кантон идараһы тәржемәсеһе. Тимәк, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың рәсми хеҙмәт юлы кадет корпусында уҡыу йүнәлешенә ярашлы рәүештә толмас вазифаһы менән башланып китә.

Контонға генерал-губернатор, башҡорт ғәскәре канцеляриянларынан, өйәҙҙән бөтә рәсми ҡағыҙҙар рус телендә инә. Уларҙың еткереләһен йортауай старшиналарға, сотниктарға, бүтәндәренә тәржемә итеп йәки төп йөкмәткеһен аңлатып йә күрһәтеп бирергә тура килә. Ә үҙҙәренән килгән рапорттарҙың, донесениеларҙың, шикәйәт-ялыуҙарҙың күпселеге төркисә. Уларын түрәләр өсөн руссаға тәржемә итергә кәрәк була. Губерна, ғәскәр, өйәҙ канцеляриелары араһындағы яҙышыу фәҡәт рус телендә. Оло түрәләр, попечителдәр, үҙәктән килгән вәкилдәр менән башҡорт, мишәр, татар кешеләренең эңгәмәһендә, бигерәген допрос ваҡыттарында йыш ҡына толмасһыҙ һис булмай. Бер һүҙ менән әйткәндә, кантон тәржемәсеһенең эше тулып ята. Ул яҙма рәүешлеме, ул телдән булһынмы. Ығы-зығылы, низағлы хәлдәр ҙә килеп сығып тора. Юҡ-бар ғәйебе өсөн һалдаттарға ҡулланылған ҡаты хәрби судтары теңкәгә тейә.

Атаһы Ишмөхәммәт кантон күк үлән ҡалҡҡанда аяҡҡа баҫып, йәйен төрлө шифалы үләндәр, йәш тирегә төрөүҙәр менән дауаланып, бер аҙ ил-йорт эштәре менән үҙе булғайны ла, ләкин көҙгө ҡар-ырашҡыларҙа, бысраҡ юлдарҙа күп йөрөп тамам миктәп яңынан йығылды. Тағы кантон ярҙамсыһына, улына эштәрҙең ауыры ауҙы.

Атаң барҙа ир таны, нәҫелең барҙа ил таны тигәндәй, йыл-йыл ярым эсендә төрлөһөн күреп, төрлөһөн кисереп өлгөрҙө йәш толмас. Кантонлыҡта ярым хәрби тәртип ҡуйылһа ла, устав, инструкцияларҙағыса барыһын да еренә еткереп үтәп сығыу үтә ҡыйын, хатта мөмкин түгел хәл икән. Корпуста уҡып йөрөгәнгә ҡарағанда, хеҙмәте күпкә ауырыраҡ тойолдо Сәлимгә. Әсе һабаҡты тормош үҙе нығыраҡ бирә икән шул.

Атаһы әйткәндәр дөрөҫкә сыҡмаҡсы, ахырыһы. Кантондар бөтә, ғәскәр таратыла, тигән хәбәр халыҡ араһында йышыраҡ тарала башланы. Мөхәммәтсәлим үҙе эш буйынса өйәҙ түрәләре менән аралашҡанда башҡорт-мишәрҙәрҙе хәрби сословиенан гражданлыҡ хәленә күсереү тураһында генерал-губернатор положение проектын төҙөгән, ул дәүләт советы ҡарамағына тапшырылған имеш, тигән һүҙҙәрҙе ишетте. Былдай хәбәрҙәрҙән ярлы-ябағаның шатланғанын, старшина, офицерҙарҙың борсолоуын, ә кантондарҙың иһә

көйөнөүен тойҙо ул. Тойҙо ғынамы, күбеһен үҙе күреп-белеп йөрөнө, төрлөһөнә ҡолаҡ һалды.

Заманаһына ҡарай берәүгә һан, берәүгә йән. Ғәүам, һалдат меңкен осэн осҡа саҡ ялғап йән аҫрағанда түрә-һәрә, кантон-попечителдәре күпме шашынманы. Хәйер, кантондарҙың да төрлөһө булды. Анау Ҡолой кантон, Абдулла ахун ишеләре яуызлыҡтары менән ил-йортҡа яманлыҡтарын сәсте. Аҙмы ҡан-йәш түктермәгән тиерһең ундайҙары. Эше-хәстәре менән килмәһә, үҙеңә йыр сығартып ҡына дан-шөһрәт алып булмайҙыр ул. Атың ҡалмаһа ла, йырың ҡалһын тимәһәң. Ил алдында мәсхәрәләнер йыр сығарылһа, уны йыуыуҙары би гәзим. Ана ахунлығын ташлап Беренсе башҡорт кантонының башлығы булып алған Абдулла ахунға, «башындағы аҡ сәлләһен аҡ картусҡа алышҡан» кантонға әсе йырҙың ҡайһылайын йәбештерҙеләр. Өҫтәүенә йыры менән көләмәсе лә эйәреп йөрөй бит әле:

Бер ваҡыт Абдулла ахун менән Филат попечитель бер башҡорт ҡурайсыһының кантондары тураһында төртмә йыр сығарыуын ишетеп ҡалғандар, ти. Шунан ни, теге йыр сығарған Мәнди тигән ҡурайсыны таптырып килтерттеләр ти, был түрәләр. Арыу ғына ҡаршылаған булдылар ти, ҡурайсыны. Филат түрә һорай икән: «Йә, ҡурайсы, кантонға сығарған йырыңды йырлап күрһәт әле» тип. Мәнди әйтә була: «Түрә, ниндәйен? Яманлағанынмы, әллә маҡтағанынмы?» «Яманлағанын», ти түрә. Мәнди: «Тыңлағыҙ улайһа», — ти ҙә йырлап та ебәрә:

> Ҡарғалыңда ник торманың,
> Иманғолға ник күстең.
> Атаң һинең кем ине,
> Урыҫлаша башланың,
> Шаулап әйткән дәресеңде
> Кантон булғас ташланың.

Шунан Филат әйтә: «Инде кантонды маҡтағанын йырла» тип. Мәнди йырлай:

> Абдулла ахун Дәүләтшиндең һәр бер һүҙе тоғро...
> Абдулла ахун кантон булғас, ҡалманы бит оғоро.
> Урай-урәй ат сабырға Ҡоштупалай ер ҡайҙа?
> Һәр хөкөмдө ғәҙел бирә, Дәүләтшиндәй ир ҡайҙа?

Маҡтаған йыры Абдулла ахунға оҡшай ҡуйҙы, ти шул. Шатлығынан кеҫәһенән ун һум аҡса сығарып ҡурайсыға һондо, ти. «Халыҡҡа шул маҡтағанын ғына йырла, яманын ауыҙыңдан ел алһын» тип үтенде, ти.

Юҡ шул, тарихта Абдулла ахундың яуызлығына бәрәбәр яман йыры, яманаты ғына тороп ҡала.

Мөхәммәтсәлим шул кантондар заманында күреп йә ишетеп белгән кантон начальниктарының ҡайһы берҙәре тураһында үҙе лә яҙып ҡалдыра. «1856 йылда Александр II тәхеткә ултырыу тантанаһы ваҡытында Мәскәүҙә үлеп ҡалған подполковник Мөхәммәтйән Бузыкаевтың ярҙамсыһы Троицк өйәҙснең кантон начальнигы Төхфәттең байлығы тураһында ла күп һөйләйҙәр, — ти ул, мәҫәлән. — Ҡантон башлығы булып алғас, Төхфәт үтә ныҡ байып киткән һәм тирә-йүндә үҙ ҡарары, үҙ хөкөмө менән эш итә башлаған. Баш биреп бармаусылар өсөн уның хатта үҙ төрмәһе һәм ҡараңғы зинданы ла булған. Үҙенең эш-ҡылыҡтары менән ул ахырҙа халыҡты ла, дуҫ-иштәрен һәм эшнәләрен дә ныҡ ялҡытҡан, бер көндө килеп Себергә һөргөнгә ебәрергә хөкөм ителгән. Себергә китеп барышлай, ул ҡайһы бер түрәләрҙең мәрхәмәте менән ҙур ғына араны үҙ экипажында үткән, аттарҙы алмаштырған урындарҙа йыйылған бала-сағаларға нотоҡ уҡыған: имеш, үҙ ғәйебе арҡаһында Себер китеп бара, хәҙер уның балалары ла, энеләре лә, йыйған байлыҡтары ла уға бөтөнләй ят һәм сит булып ҡала, сөнки заманында үҙе башҡаларҙың мөлкәтенә ҡул һуҙырға яратҡан. Төхфәттең Себерҙән ҡасып ҡайтҡан Ғәлләм исемле бер улы үҙен ата-әсәһен бөтөнләй белмәгән алла бәндәһе тип иғлан иткән һәм һалдат хеҙмәтенә алынған...»

Һөргөн киткән Төхфәт кантон хаҡында халыҡ хәтерендә икенсе төрлөрәк тарихтары ла һаҡланған. Әммә Мөхәммәтсәлим яҙғаны, шул заман кешеһенең һүҙе, ысынбарлыҡҡа иң яҡынылыр, моғайын. Төхфәт кантон тураһындағы йырҙы ла ишетмәй ҡалмағандыр кантон улы:

> Каруансылар килә, ай, теҙелеп,
> Бохараның алыҫ юлынан.
> Етмеш бер тин хәйер бирер инем
> Ҡотолмаһа хөкөм ҡулынан.

Ана ҡалай ҡарғаған һәм ҡәһәрләгән бит халыҡ яуыз кантонды. Тәбиғи, әҙәмгә көн күрһәтмәҫ яуыз кантонды халыҡ үҙе лә йыркөйләп көнгәккә ҡаҙаҡлар.

Әлдә кантон менән кантон бер түгел. Тарих та, халыҡ үҙе лә шуны һөйләй: кантондарҙың да кешелеклеләрен, уҡымышлы һәм мәғрифәтле булғандарын таный. Быны Мөхәммәтсәлим әүәл үк билдәләп үткән: «Башҡорт ғәскәренең 65 йыл йәшәүе һуҙымында Златоуст, Өфө өйәҙ-

ҙәрендәге кантон башлыҡтары араһында Златоуст йортонда Бейеш, аталы-уллы Абулғәзиз һәм Абулнасир Әбдрәшитовтар, ә Өфө йортонда Ҡара Яҡуп ауылынан Тәлғәт Мырҙабаев, Ҡобау ауылынан Ғәббәс Тикеев, Йомран Ибраһим ауылынан аталы-уллы Ишмөхәммәт һәм Фәхретдин Өмөтбаевтар булған». Был әле үҙе яҡшы белгән, күптәре менән аралашҡан күрше төбәктәш кантон башлыҡтарын ғына атағаны.

Араларында кантондарҙың данлыҡлылары, прогрессив ҡарашлылары бар. Буранғол менән Ҡаһарман Ҡыуатов кантондарҙы, Төхфәт кантонды халыҡ нигеҙҙә ыңғай баһалаған. Аталы-уллы Ҡыуатовтар 1812 йылғы Ватан һуғышы ҡаһармандары булып танылған. Фольклор һәм тарих материалдары Ҡаһарман кантонды уҡымышлы кеше итеп тә нарыҡлай. Ҡаһарман Ҡыуатов үҙ заманы өсөн ҙур ғына шәхси китапхана тотҡан. Ҡитап күсереүселәр, ҡурайсылар йыйған үҙенә. Ул үҙ осороноң Һибәтулла Салихов, Әбелмәних Ҡарғалы, Шәмсетдин Зәки кеүек шағирҙары һәм әҙиптәре менән йөрөшөп йәшәгән. Ҡаһарман башҡорттарҙан уҡымышлы кешеләр әҙерләү хаҡында мәғлүм бер хәстәрлек күргән түрә. Был хаҡта «Оренбургские губернские ведомости» газетаһы 1838 йылғы беренсе һанында шуларҙы яҙа: «Мысли его, инициатива Куватова Кагармана должны были служить колыбелью башкирской цивилизации. Замысли были обширные, а результаты мизерные. Только 50 мальчиков башкир были отправлены в Москву и Казань и другие города для обучения разным ремеслам». Шулар эсенән Йософ Ҡарамышев, Шәйәхмәт Сираев, Мирхәйҙәр Азаматов, үҙ улы Әлмөхәммәт Ҡыуатов кеүек уҡымышлы кантондар етешкән, врачтар, мөғәллимдәр сыҡҡан.

Атаһының һуҡмағын улы киңәйткән. Ҡаһармандың улы Әлмөхәммәт 1838—1844 йылдарҙа Ҡазан ҡалаһында гимназияла уҡыған, унан Ҡазан университетына ингән. Ул башта медицина, унан философия факультетында уҡып, 1848 йылды Көнсығыш телдәре белгесе булып сыҡҡан. Философия буйынса кандидатлыҡ дәрәжәһе алған. Илленсе йылдар дауамында ул тәүҙә хәрби губернатор эргәһендә тәржемәсе, һуңынан кантон ярҙамсыһы, кантон начальнигы булып эшләгән, күренекле административ эшмәкәр булып танылған.

Әлмөхәммәт Ҡыуатов халыҡтың көнкүрешен яҡшыртырға тырышҡан, халыҡ мәнфәғәтен яҡлаған, уны аң-белемле итергә ынтылған прогрессив ҡарашлы башҡорт эшмәкәрҙәренең, мәғрифәтселәренең береһе. Ул үҙе баш булған кантондарҙа рус-башҡорт мәктәптәре асҡан, балаларҙы

уҡытыу хәстәрен күргән. Кантондар бөтөрөлөп, башҡорттар граждандлыҡ хәленә күскәндә килеп тыуған төрлө ауырлыҡтарҙы, ил-йорт яҙмышы тураһында уйланып, ҡайһы бер тәҡдимдәр менән «Башҡорт халҡының ярлыланыу сәбәптәре» исемле бер хеҙмәтен яҙған. Бында ул башҡорттарҙың тарихына, экономик хәленә, кантондар дәүерендәге тормошона күҙәтеү яһап, халыҡтың ауыр социаль-экономик хәлен, унан сығыу юлдарын күрһәтергә тырыша. Экономиканы нығытыр өсөн игенселекте үҫтереүгә иғтибар бирә. Прогресҡа өлгәшеү өсөн аң-белемгә эйә булыуҙың мөһимлеген билдәләй, төрлө иҫке ғөрөф-ғәҙәт, хөрәфәт, ыҙанйолаларҙан тиҙерәк ҡотолорға саҡыра. Тарихсы Әнүәр Әсфәндиәров әйткәнсә, халыҡ араһында аң-белем таралһа, уҡымышлы кешеләр артһа, төрлө яман ғәҙәттәрҙән йәһәтерәк арынып, үҫеш башланыр ине, тигән ҡараш Ҡыуатовтың был яҙмаһында ярылып ята. Шуға күрә халыҡ Әлмөхәммәт Ҡыуатовҡа арналған йырҙарында «Ҡыуат та ғына тигән, ай, сәсән ир зирәктәрҙән зирәк һанала», «Ҡыуат та һымаҡ ирҙәр һирәк, аҡыл ғына менән дау кисә» тип тиктәҫкә генә юғары баһа бирмәгән.

9-сы башҡорт кантоны башлығы булып эшләгән Сәйфулла Тоҡомбәтов, Ырымбур хәрби училищеһын, Ҡазан гимназияһын һәм университетын тамамлап, шулай уҡ күренекле белгес, сит телдәр буйынса кандидат дәрәжәһенә эйә ғалим булып күтәрелгән. Йә иһә шул уҡ гимназия һәм университетты тамамлап, 5-се башҡорт кантоны начальнигы, башҡорт ғәскәре командующийы эргәһендәге тәржемәсе вазифаларын башҡарған Әхмәт Хәйеров прогрессив ҡарашлы башҡорт уҡымышлыларының, украин шағиры Тарас Шевченконың иң яҡын дуҫтарының, теләктәштәренең береһе булған. Быларҙан тыш йәнә Ырымбур хәрби училищеһында йәки корпусында уҡып, ҡай берҙәре университет белеме лә алып, кантон башлыҡтары, тәржемәселәр, күренекле административ эшмәкәрҙәр булып киткән башҡорт уҡымышлыларының Батыршиндар, Биксуриндәр, Диваевтар, Дәүләтшиндар, Ибраһимовтар, Көсөкөвтар, Нуғайбәковтар, Солтановтар, Сыртлановтар, Өмөтбаевтар, Яуышевтар фамилияларынан торған бер нисә быуын кешеләрҙең бөтөн династияһы барлыҡҡа килә.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев бына ошо ҙур төркөм һәм ике-өс быуын уҡымышлылары һәм кантондары араһынан күтәрелеп сыҡҡан күренекле шәхестәрҙең береһе генә.

1877 йылда «Оренбургский листок» газетаһында «Об образовании мусульман» тигән бер мәҡәләлә бер миссионерҙың татар һәм башҡорттарҙы үтә кәмһетеп, тәбиғәттән наҙан һәм томаналар, йүнләп тел дә белмәйҙәр, тип яҙғанын

М. Өмөтбаев һис онотмай. Быға Шәйәхмәтов тигән бер башҡорт яуап итеп яҙған «Ответ башкирца» мәҡәләһендә шундай юлдар бар: «Башкиры, окончившие курс в гимназиях или в университете, настолько владеют разговорным русским языком, что трудно, а иногда и невозможно бывает отличить их от природного русского, их можно узнавать только по типу. Почти все образованные башкиры получили воспитание в гимназиях казанской, уфимской и оренбургской и в казанском университете».

Быны үҙе ошондай белем алған бер башҡорт яҙа бит.

Ҡантонлыҡ заманы. Ҡантондар...

Ҡантонлыҡ — Башҡортостан, башҡорт халҡы тарихында — айырым ыңғай һәм кире яҡтары менән бергә — үҙе бик үҙенсәлекле заман.

Башҡорттарҙың азатлыҡ көрәше һәм һуғышсанлыҡ традицияларын быуыр өсөн батшалыҡтың уларҙы хәрби режимға буйһондорорға тырышҡан заманы.

Шул ерлектә Башҡортостан экономикаһы, башҡорттарҙың хужалығы бөлгөнлөккә төшкән ауыр замана.

Башҡорттарҙан батшалыҡҡа тоғро түрәләр—кантондар әҙерләнгән дәүер.

Ҡантонлыҡтың ыңғай яҡтары ла юҡ түгел.

Башҡорттар азатлыҡ һәм мәғлүм дәрәжәлә үҙидаралыҡ хоҡуҡтарын һаҡлаған.

Европаса белем алыуға, культураға эйә булыуға бер ҡәҙәр шарттар бирелгән.

Шул ерлектә яңы тип уҡымышлылар ҡатламы хасил була, демократик мәғрифәтселек тыуа Башҡортостанда.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев ана шуларҙың бер вәкиле.

Мөхәммәтсәлим кантонлыҡ осороноң бер осона ғына эләгеп ҡала. Ул шәхес һәм ғалим булараҡ һуңынаныраҡ формалаша.

Әммә Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев кантонлыҡтың күп яҡтарын күреп һәм белеп тә өлгөрә.

Ҡантондар эшендә ул бары өс-дүрт йыл ҡатнашып ҡала. 1860—1863 йылдар — кантонлыҡтың һүнеп барған һуңғы осоро. Боларыҡ заман. Бөгөн кантон, иртәгә ҡартун, тигән саҡ. Шуға эшкә илке-һалҡы ҡараусылар күп. Ҡемгә лә алда ни булырын, гражданский хәлдең ни килтеререн белеүе, аңлауы ҡыйын. Ғәжәп тә түгел, замана юлы сатында аҙап ҡалғандар осраһа ла. Ҡантон башлыҡтарына, ҙур түрәлеккә күнгәндәргә дәрәжә һәм властан яҙыуҙары ла еңел түгелдер инде.

Ҡантондар бөтөрөлөп, һәммәһе гражданлыҡ хәленә, штатлыҡҡа күскәс, бәғзе бер кантондар ҡылыс һәм мундирҙарын һалыуҙы ауыр кисерһә лә ни ғәжәп. Халыҡ һөй-

ләүенсә, мәҫәлән. Ҡаһарман кантон штатный булыуына һис риза түгел икән. «23 йәшемдән тағып йөрөгән ҡылысымды тағыуҙан тыйғансы, йә үҙем үлгәнсе хеҙмәт итергә әрмегә ал, йә булмаһа ҡылысымды тағып йөрөргә рөхсәт ит» тип, батшаға хат яҙған ти. Батша ризалыҡ биргән, имеш. Ә телсәр ҡурайсы был ваҡиғаға йырын да сығарып өлгөргән ти:

Буранғол улы Ҡаһарман
Кантон ине бер заман.
Ҡылысын тағып йөрөйҙөр
Кантонмын тиеп һаман.
Ҡаһарман кантон ҡытатский,
Ник булдың штатский?
Шәһиҙә һиңә барыр ине
Булмаһаң штатский.

Шулай, яҡшыһы-яманы менән кантонлыҡ замандары ла үтеп китә.

Әле күптәргә билдәһеҙ яҡтары менән башҡорт тормошонда, шул иҫәптән кантон идаралығында эшләп йөрөгән Мөхәммәтсәлим толмасҡа ла, яңы боларыҡ осор башланырға тора.

Ревматизм менән интеккән Ишмөхәммәт кантон 1862 йылда донъя ҡуя. Етем ҡалған ишле ғаилә, ҙур хужалыҡ, донъя хәстәре тотошлай Мөхәммәтсәлим өҫтөнә төшә. Ул, хәҙер ир заттарынан ғаиләлә иң өлкән кеше, эне-һеңлеләренең ҡараусыһы — опекун итеп билдәләнә.

Атаһы менән бергә бөтә кантонлыҡ замалы бар ҡотоние менән донъянан уҙҙы һымаҡ тойолдо улына.

## 2

Яңы осор Мөхәммәтсәлимде һиҫкәндереп килде. Уға ла күп нәмә асыҡ түгел ине. Ана мәрхәмәтле батша ғали йәнәптәре указы менән 1861 йылды крепостной правоны юҡҡа сығарҙылар[1]. Рәсәй крәҫтиәндәренә ирек бирҙеләр. Ирек тигәнең дә, помещиктарҙан ерҙе ҡиммәт хаҡтарға һатып алырға ирекһеҙләне. Дәүләт, завод крәстиәндәренә лә уҙҙәренә күрә азатлыҡ иғлан иттеләр. Йәнәһе, дүрт

[1] М. Өмөтбаевтың архив фондында 1861 йылдың 19 февраль указына бәйле «Предположения об изменениях в устройстве местных учреждений по крестьянским делам» тигән күсермә һаҡланған. Унда Мөхәммәтсәлим батша реформаһының нигеҙҙәрен пунктлап күсереп алған һәм тикшереп ҡараған (IV том, 131—134-се биттәр).

яғығыҙ ҡибла. Ҡайҙа ҡарама, һәммәһенең үҙ хәстәре, үҙ мәсьәләләре, үҙ ауырлыҡтары.

Ә башҡорттар менән ни эшләрҙәр? Уларҙың да бар ҡарап торған яҙмышы ергә бәйле бит. Аҫабалыҡ хоҡуғы һаҡланырмы? 1832 йылғы батша указы менән ергә генеральное размежевание үткәрәбеҙ тигән булып, башҡорттарҙың ергә хоҡуҡтарын сикләп, артыҡ тип, ерҙәрен киҫкеләп алманылармы ни? Белеүебеҙсә, күрше Бишауыл Табын волосының 35 мең дисәтинә еренең 29 меңен артыҡ тип киҫтеләр ҙә алдылар хөкүмәткә. Өҫтәүенә ер һатырға, ҡортомға бирергә ирек ҡуйҙылар. Йомран Табындарҙың Ағиҙел аръяғындағы күпме ерҙәре китте.

Ә был реформалар, ер мәсьәләләре башҡорттарға ни килтерер? Тағы ни тип һемәйтерҙәр икән?

Күптән көтөлгән реформа, ниһәйәт, башҡорттарға ла иглан ителде. 1863 йылдың 14 майында Дәүләт советы тарафынан тикшерелеп, Александр II батша тарафынан раҫланған «Положение о башкирах» ине ул.

Был положение буйынса башҡорттар кантонлыҡ системаһынан гражданлыҡ хәленә күсерелә. Кантондар бөтөрөлә. Батша указы былай элекке кантон начальниктарын, бүтән эре түрәләрҙе һис ҡыйырһытмай: уларға дворянлыҡ хоҡуғы ҡалдыра. Башҡорт феодалдарына ергә хужа булыу, аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлай. Теләгәнсә сауҙа итеү, һөнәр мастерскойҙары, фабрикалар төҙөү ихтыярын ҡуя хатта. Ярлы-ялпыға ғына әллә ни өлөш сыҡмай.

Батша хөкүмәтенең ниәтендә башҡорттарҙы ерҙәренән тамам мәхрүм итеп, дәүләт крәҫтиәндәренә әйләндереү уйы йәшәһә лә, ер реформаһында аҫаба хоҡуғын бөтөнләй бөтөрөүгә бармай. Шуныһына ла хуш. Аҫабаларҙан шикләнә, ҡурҡынҡырай батша тигәнең дә. Ә элекке батша указдарын яңы батшаға юҡҡа сығарыу шулай уҡ маҡталмай.

Мөхәммәтсәлимдең айырыуса шуға иғтибар иткәне булыр: «Общественные вотчинные земли, — тип яҙылған 1863 йылғы положениела, — в прошлое время пожалованные башкирам как иначе им доставшиеся, обмежевание за башкирскими обществами при генеральном межевании и состоящие в бесспорном их владении принадлежат сим обществам на праве собственности». Йәнә аҫабаларға йән башына 40 дисәтинәнән, хәрби припущенниктарға — 30 дисәтинәнән, гражданский припущенниктарға 15-шәр дисәтинәнән артҡан ерҙәрен һатырға йә ҡоромтаға (арендаға) бирергә рөхсәт ителә.

«Башҡорт халҡының аҡ һәм ҡара көндәре» исемле тарихи хеҙмәтендә Мөхәммәтсәлим ошо реформаларҙың ша-

һиты һәм ҡатнашсыһы булараҡ, шуларҙы теркәп ҡуя: «1863 йылда башҡорт һәм мишәрҙең ғәскәре һәм кантондар бөтөрөлөп, волостной правлениелар булды. 1869 йылда Оренбургтағы ер комиссияһы бөтөп, ер эштәре губерна крәҫтиән присутствиеларына бирелде. 1863 йылда башҡортҡа ерҙәрен теләгәнсә һатырға ихтыяр булып, ул 1876 йылда, дәғүә күп булғанлыҡтан, мәнеғ булды (тыйылды)».

Ҡантонлыҡтан граждандыҡ хәленә күсеүҙең үҙ мәшәҡәттәре күп булып сыҡты. Һәр эште үҙ шартынса еренә еткереп башҡарырға кәрәк. Ул бөтөрөләһе кантон идараһының, ғәскәр эштәренең документ, архивтарын тәртипкә килтереп өйәҙгә тапшыраһы. Ул отчет-хисап ҡағыҙҙарын яҙышаһы. Ул ер-һыу мәсьәләләренә ҡараған айырым документтарҙы граждандыҡ идараһына күсерәһе. Алыш-биреш ваҡытында, кәрәк мәлдәрҙә толмаслыҡ вазифаһын үтәйһе... Ул бүтән ҡағыҙ-фәлән, юл йөрөп, асыҡлау-аңлатыу эштәре тауыҡ сүпләһә лә бөткөһөҙ. Шулар менән йылға яҡын мәшғүл булды Мөхәммәтсәлим.

Яңы төҙөлә башлаған волость, ауыл эшенә лә ылығып киткеләне. Үҙенә төшөнәһе, бүтәндәргә төшөндөрәһе тейеш ине.

Уҡымышлы толмас егеттең мир эштәренә бик зирәк икәнен дә тиҙ тойоп алдылар яңы волость түрәләре. Уларҙың үҙҙәре өсөн дә күпселек эш яңы. Бына башҡорт һәм мишәрҙәрҙең ярым хәрби йортауай идаралары урынына ауыл һәм волость обществоларын төҙөргә кәрәк. Уның өсөн йәмәғәт сходын йыйырға. Ауылға хәҙер староста баш, уны табаһы, һайлайһы бар. Сход һалым йыйыусыларҙы, урман, баҫыу һаҡлаусыларҙы, ауыл писарен, мөгәзәй ҡараусыһын, бүтәнен тәғәйенләргә тейеш. Волость обществоһын, идараһын һайлауға ауылдар сходы һайлаған вәкилдәр ҡатнаша, шулар хәл итә. Хәҙер крәҫтиән хужалығының, ауылдың эштәре, ер һатыу, алыш-биреш, төрлө низағлы, дауҙы мәсьәләләр сходта тикшерелә. Волость идараһы әлеге сход, уның һайланған старшинаһы, волость суды менән берлектә эш ҡыла. Уларға бөтә волость эштәре тапшырыла. Ошо яңы эш-сараларға ҡатнашып китте Мөхәммәтсәлим; сходтарҙа толмаслығы ла кәрәк булып төштө.

Община ерҙәрен бүлеү, ер һатыу, ҡоромтаға биреү эштәре башланып киткәс, хәлдәр тағы ҡатмарлашты. Төрлө шау-шыу, низағтар сыҡты, ялыуҙар китте. Быға мировой посредниктар килеп тығылды. Ҡаты ҡуллы шулар заманы килә ине буғай.

Улай тиһәң, бик ҙур хоҡуҡтары булған мировой посредниктар вазифаларына башта, нисектер, өҫтәнерәк ҡарағандай тойолдо. Ер һатыуҙың приговорын тикшереп ҡул

ҡуйғанда ҡағыҙы шартына килтереп дөрөҫ яҙылғанмы-түгелме, алыш-биреш закон параграфтары боҙолмағанмы — нигеҙҙә шуларға ғына иғтибар иттеләр. Аҙаҡ аңлашылмаусылыҡтар, алдашыуҙар килеп сыға башлағас, эш оло дауға, судҡа киткәс, мировой посредниктарға эш күбәйҙе, мәшәҡәттәр артты.

Хәлдәр шулай киҫкенләшеп ҡуйырып барған йылдарҙа Мөхәммәтсәлимде Ҡырмыҫҡалы волосына мировой посредник писары итеп эшкә саҡырҙылар. Егеттең уҡымышлылығын, зирәклеген, ғәҙеллеген иҫтә нык тотҡандарҙыр моғайын.

Бына шунда, 1864 йылдан башлап, ҡырмыҫҡа иләүендәй мыжғып торған волость иләүе тормошона, мир эшенә, мировой посредниктар даирәһенә инеп китте лә инде Өмөтбаев. Уның үҙе өсөн халыҡ, ғәүәм араһына инеп, уның хәстәре, ғәмдәре, мәнфәғәттәре менән янып һәм яҡлашып йәшәүенең үтә мәшәҡәтле, тынғыһыҙ оҙон осоро башы ине был.

Волость үҙәге Ҡырмыҫҡалыла. Мировой посредник писары ла волость йортоноң бер бүлмәһенә төйәкләнгән. Мөхәммәтсәлимгә инде Ибраһимдан волость үҙәгенә күсеп килергә тура килде: писарь урыны конгорҙа.

Үтә шаулы саҡтар. Башҡорттар хаҡында яңы положение буйынса ерҙәрҙе бүлеү бөтөр-бөтмәҫтән ер һатыу, алыш-биреш эштәре ҡыҙып китте. Ауыл сходтарынан приговорҙар, купчий ҡағыҙҙар яуа башланы. Тикшереп кенә өлгөр. Писарһыҙ посредник тере ҡулһыҙ. Тикшереп ҡарай писарь, күрә: йә приговор формаһына килтереп төҙөлмәгән, йә ер һатыу-алыу шарттары асыҡ түгел, йә, киреһенсә, законға һыймай. Китә писарь ат ектереп сход үткән әлеге ауылға, таба старостаһын, аңлата-төшөндөрә. Тегеһе үҙ файҙаһына сыҡмағанында аҡланырға, белмәмешкә һалышырға керешә. Ер һатҡан башҡорттарҙың үҙҙәре менән һөйләшә башлаһаң, теге йәки был килешеүҙең уларса яҙылмағаны, ниндәйҙер һандарҙың боҙолғаны асыҡлана. Һүҙ көрәш, әрепләш ҡуба староста менән. Ә мөһөрлө түрәлә миһырбан юҡ. Хата булһа ла һаман уның һүҙе хаҡ. Һатып алыусы үҙенекен һөйләй, һатыусылар — үҙҙәренекен. Һис аңлап, асыҡлап бөтөрәм тимә. Алыусылар әллә күпме аҡса түккәнен, сәй-шәкәр таратҡанын — һәммәһен йыйып иҫәпләй, һатыусылар һөйләшеү буйынса сәй-шәкәр, бүтән ваҡ-төйәк аяҡ юллыҡ сығым приговор шартына индерелмәүен иҫбатлай. Һатылған ер күләме фәләнсә дисәтинә, тип бара, ә арттырып яҙылғанса түгел, ти халыҡ. Китә тағы ғауға-дау. Быға киткәс, эш мировой посредниктың үҙенән башҡа булмай. Уға мөрәжәғәт итә — хәҙер ике яҡ та.

Ә түрәнең бойороғо ла, ҡойроғо ла үҙе менән: мировой посредник — араҙашсы башта илтифатһыҙ ҡылана, ана писары асыҡлап бөтһөн тип эште һаман уға ауҙара. Писарь приговорҙың яңылыш, хата төҙөлөүен әйткән, алыш-биреш шарттарының боҙолоуын күрһәткән, ҡалғаны—закон талабына килтертеү — мировой посредник вазифаһы. Быны ике яҡ та белеп, тойоп тора инде тороуын. Шунан һәр береһе үҙенсә китә мировой посредникты өгөтләү, майлау. Уға кем күберәк сумыра — дөрөҫлөк шуныҡы. Ҡөслөнөкө тирмән тарта. Мәғлүм, бай помещик, аҡсалы купец, дәрәжәле чиновник — хаҡ булып ҡала. Ер һатҡан башҡорттар һемәйеп йә алданып, күрәләтә кәкре ҡайынға терәләләр шулай. Ҡем көслө, кем аҡсалы — закон шуның яғында.

Мөхәммәтсәлим писарь хаҡлыҡты яҡлап, дөрөҫлөктө раҫлап ике арала йүгерҙе, ҡаты алышҡанда, алдашыусыларҙы ҡымшанмаҫлыҡ итеп стенаға килтереп һырыҡтырғанда ул ер һатыусылар файҙаһына еңеп сыҡты. Байтаҡ осраҡта еңелеп тә ҡалды. Алым алған, майланған түрәләр, бигерәген үҙенең төп хужаһы мировой посредник үҙҙәрене-кен тылҡыны, улар һүҙе һүҙ булды. Бындай хәлдәрҙә йәш писарҙың ғәҙелһеҙлектәр өсөн йөрәге янды, шуны аҙағына-са раҫлай алыуҙан ғәжиз булыуына үрһәләнде. Ярлы ялпы, ғәүәм мәнфәғәте, хаҡлыҡ, ғәҙеллек тип көнө-төнө сапты, арып-алйып арманһыҙ булып бөткөләне. Даулы-низағлы мәсьәләләр буйынса йыраҡ юлға ылау ҡыуып, әле бер ауылға, әле икенсеһенә, әле өсөнсөһөнә юлланды. Ҡышҡы буран, яҙғы бысраҡ, көҙгө яуындар тип торманы.

Йәш ине, тәжрибә аҙыраҡ ине шул писарҙың. Әле тормош рәтен төшөнмәгән баш-күҙһеҙ, ғаиләһеҙ буйҙаҡ тип тә ҡарағандарҙыр, бәлки, бәғзеләре.

Йәш тиһәң дә, Мөхәммәтсәлимгә хәҙер егерме дүртенсе йәш китте бит инде. Уның ҡай бер ҡорҙаштары ана өс-дүрт балалы булып, хатта икешәр бисә менән донъя көтөп яталар. Уға ла күптән өйләнергә, башлы-күҙле булырға ваҡыттыр. Шулайҙыр: быны әсәһе, еңгәләре, бүтән туған-тыумасалары иҫенә төшөрөп торалар ҙа баһа. Димләүселәре лә юҡ түгелдер. Күҙе төшөп йөрөгәне лә булмай булмаҫ йәш кешенең. Өҫтәүенә ил-йорт эсендә күп йөрөгән, күпте күреп өлгөргән уҡымышлы егет бит. Аҫыл зат кантон улы.

Ысынға әйләнер бер серҙе беҙгә хәҙер сискәндә лә ярар. Мөхәммәтсәлим ил-йорт йомошо менән йөрөгәндә Бозаязда бер саҡ Рәжәповтарҙың бер сибәр ҡыҙын шәйләберәк ҡалғайны. Ҙур волость-иләүҙә бындай сибәрҙәрҙе күреүен байтаҡ күрҙе, иллә мәгәр быныһы, ни эшләптер, күңеленә инеп ултырғандай итте. Иҫенә төшкөләп торҙо. Бәлки, яйлап онотҡан да булыр ине, бер мәл Фәхретдин ағаһы күңеленә

ут тоҡандырып ебәрҙе, ахырыһы. Ағаһы Йомран Ибраһимға ҡайтҡанда, һүҙҙән һүҙ сығып, шул Бозаяз ауылы Рәжәповтар хаҡында һөйләргә кереште бит. Уларҙың нәҫел-ырыуын, абруйлы тоҡом, ырыҫ-зат булыуҙарын маҡтап алды. Әнсһе былай һүҙ ялғаманы ялғауын, әммә күңеленә ниҙер һалып ҡуйҙы, улай ғына түгел, теге сибәр ҡыҙҙары хистәрен йәнә ҡуҙғытып үтте.

Йомош-яйын тура килтереп, Мөхәммәтсәлим писарь бынан һуң тағы Бозаязға барҙы. Был юлы инде тәғәйен йомошон табып, Мирғәләүетдин Рәжәповтарҙың йортонда булды, хужа менән һөйләште. Ҡыҙҙарын да күҙәткеләргә, хатта күпмелер һүҙ ҡатырға форсатын тапты.

Мөхәммәтсәлимгә электән үк мәғлүм ине: Рәжәповтар Бозаязда түрә нәҫел. Әүәл Фәйзулла Рәжәпов тигәндәре мишәр ғәскәренең войсковой старшинаһы булған. Сотник Шаһибәк Рәжәповтары 2-се мишәр кантонының управляющийы булған кеше. Хәҙер волоста баш. Ә Мирғәләүетдин Рәжәпов элекке зауряд-сотник. Хәҙер бик иркен йәшәүсе бай кеше, мировой посредник ярҙамсыһы. Ағаһы хаҡ: Рәжәповтар ырыҫ заттар. Хикмәт унда ғына түгел: заманса йәшәй белгән кешеләр, ер хужалары. Уларҙың исем-намы, һиммәт-абруйы тирә-яҡ волостарға ла яҡшы билдәле.

Иң мөһиме, ҡыҙҙарын нығ оҡшатты йәш писарь. Исеме Бибиғәбиҙә икән. Йәше егермеләрҙән саҡ уҙып баралыр барһа. Ултырған ҡыҙ түгел, самай тулышып бешкән сағы. Һомғол буйлы, аҡ йөҙлө һылыу. Ҡыйғас ҡаштары, зәңгәрһыу күҙҙәре, тыйнаҡ ҡына йылмайыусан ҡарашы һөйкөмлөлөк бөркөп тора. Әллә кемдәрҙе ғашиҡ итерлек.

Ҡара күҙле, ҡап-ҡара сәсле буйсан Мөхәммәтсәлимде лә ҡыҙ яҡын итте шикелле. Йәнә затлы уҡымышлы егет тиҙәр үҙен.

Был осрашыуҙан һуң Мөхәммәтсәлимдең юлы Бозаязға йыш ҡына төшә торҙо. Егерме саҡрым ара бер ни торманы уға. Йәштәр үҙҙәренең ғашиҡ булыуын, бер-береһенә тартылыуын тойҙолар. Хужалар ҙа эштең ҡайҙа барырын һиҙенгәндер инде. Ләкин тарих Мөхәммәтсәлим егет менән Бибиғәбиҙә ҡыҙҙың күпме ғишыҡ тотошоп, нисек һүҙ ҡуйышып, ҡалай ҡауышыуҙарын бәйнә-бәйнә белмәй хәҙер. Тик шуны ғына әйтергә мөмкин: 1865 йылдың аҙаҡтарынан да ҡалмайынса улар өйләнешәләр. Башҡорт-мишәр ғәҙәтә буйынса шул йылдың урталарында Мөхәммәтсәлимдең ағаһы Фәхретдин баш ҡоҙа урынында яусылап, әүәлдән таныш-ултырҙаш Рәжәповтарға түркен йортҡа килгән булырға, килешкәс, мәһәр-ҡалым, бүтән туй бүләктәрен, мөддәтен билдәләгәс, ҡыҙ йортонда егет кейәүләп йөрөгән, башта Бозаязда шаулатып ҙур туй үткән, ҡыҙҙы килен

итеп Йомран Ибраһимға шулай уҡ бар шартына килтереп ҙурлап төшөргән булырға тейештәр.

Йәнә таныштыра төшәйек: ҡайныһы Мирғәләүетдин Рәжәпов Бозаязда алты мөйөшлө ҙур йорт, күп мал, мөлкәт хужаһы. Ҡатыны — Мөхәммәтсәлимдең ҡәйнәһе — Ғәйнеямал Хөсәйен ҡыҙы. Мирғәләүетдингә — илле биш, Ғәйнеямалға илле өстәр тирәһе. Оло ҡыҙҙары Өммөямал ҡәйембикәһе Стәрлетамаҡта Шәрәфетдин ишан улы Ҡамалетдин мөҙәрисҡә кейәүҙә. Улдары Нурғәлиҙең үҙ ғаиләһе. Ҡайнағаһы хәлле кеше.

Аҫыл зат аҫыл затҡа тартылған. Ҡәләш һайлағанда Өмөтбаевтар башҡорттоң боронғо йолаһын да тотҡан тиергә кәрәк. Алыҫ сит ырыуҙан алғандар. Мишәрҙән өҫтәүенә. Ибраһим менән Бозаяз араһы ҡырҡ саҡрымдар самаһы— ярайһы ара. Ырыу күпме ят, ара күпме йыраҡ, шунса шәп. Ҡәләштең нәҫел-ырыуы һиммәтле. Шулай ҡан-нәҫел яңыртып, тормошоноң бер китек ерен ямағандай итте Мөхәммәтсәлим.

3

Үҙендә тәбиғәттең иҫ киткес матурлығын бергә йыйған, ҡуйынында алтын менән көмөштөң, һәр төрлө аҫыл таштың иҫәпһеҙ хазиналарын һаҡлаған илде, күнереп торған ҡара тупраҡлы ерҙәрҙе, миллион-миллион дисәтинә булып һуҙылған күҙ яуын алып торған матур һәм хуш еҫле сәскәләргә, ҡыҙарып бешер еләктәргә күмелгән болон һәм туғайҙары әллә ҡайҙа, алыҫҡа йәйелгән илде беләһегеҙме икән?

Янына барһаң, балыҡтары үҙҙәре килеп ҡабырға торған ҙур һәм ваҡ, әммә һәр береһе үҙенсә йәмле күлдәр һәм йылғалар илен, береһе икенсеһенән мөһәбәтерәк булып бейеккә күтәрелгән тауҙар һәм кейектәр донъяһына тулы ирек, хәүефһеҙлек биргән ҡуйы урмандар илен күргәнегеҙ бармы икән?

Был ил — Башҡортостан. Донъяның ғәжәп бер мөйөшө!..

«Башҡортостандың әүәле» тигән яҙмаһын XIX быуат рус яҙыусыһы Филипп Нефедов шундай һоҡланғыс тасуирлау менән башлай. Башлай ҙа кинәт шундай киҫкен иҫкәртеү яһай: «Ә илле йылдан был ерҙәрҙә ошо байлыҡты талаған һәр төрлө йыртҡыстарҙан һәм иҙеүселәрҙән хатта бер бөртөк тә ағас ҡалмаҫ, йәмле илдең тамам ҡото бөтөр» ти.

Ниндәй аяныс һәм юш килгән юрау.

Үткән быуаттың тәүге яртыһындағы гүзәл Башҡортостан ере менән икенсе яртыһындағы таланған яланғас Башҡортостанды йәнәш ҡуйыуы ла ҡыйын. Торғаны бер контрастар донъяһы. Реформанан һуң ун-ун биш йыл эсендә ике миллион дисәтинәнән артыҡ башҡорт ерҙәре талап йә тартып алына, йөҙәр меңләбе ярым буш хаҡҡа һатыла. Был ерҙәргә рус помещиктары, кулактары, купестары, чиновниктар килеп тула. 1869 йылдан 1878 йылға тиклем, ун йыл араһында Өфө губернаһында ғына ла 852 мең дисәтинә ерҙәрен дисәтинәһен бер һум көмөш һәм тиндәргә һатып, башҡорттар иң яҡшы ерҙәренән яҙып, ҡаҡ таҡырға ултырып ҡалалар. Батша хөкүмәте шул 1869 йыл ҡарары менән башҡорттарҙың йөҙәрләгән мең дисәтинә ерҙәрен, йәнәһе, запасҡа тигән булып, ҡаҙна ҡарамағына киҫеп ала. Шулай аҫабаларҙы төп башына ултыртып, припущенниктарға бүләһе ерҙәрҙе, батша помещиктарға, генералдарға, офицерҙарға, төрлө түрәләргә таратырға тотона. Ҡаҙнаның шул запас ер бәлешенән ҙур өлөш эләктергәндәр араһында 293 эре түрә, 52 генерал, 29 полковник, әллә ни хәтле статский, йәшерен советниктар, батшаның иң яҡын яранһанаттары була. Уларҙың һәр береһе 500 дисәтинәнән алып икешәр мең дисәтинәгәсә ер ҡармайҙар. Ҡалъяның уртаһына сумып мас киләләр. Генерал-губернатор Крыжановский үҙе генә лә ҡаҙнанан бушлай 6300 дисәтинә Минзәлә яҡтары ерҙәренә эйә була.

Башҡорт ерҙәрен талауға, алдап-йолдап алыуға үҙәк Россиянан, Волга буйҙарынан унар меңәрләгән кулактар, купестар, мужиктар ябырыла. Америка Калифорнияһында алтын табып байырға ашҡынған берәҙәктәрме ни! Әйткәндәй, 1876 йылда «Оренбургский листок» газетаһы «Калифорниялагы алтын биҙәгенә оҡшаш, Башҡортостанда ер эләктереү биҙгәге йәйелеп китте» тип яҙҙы был хаҡта.

Ә ҡайҙа алтын, алтындай ер өлөшө өсөн тартыш — унда ҡан, үлем, алдау, көсләү, йәбер, золом.

Был — Башҡортостан тарихының йәнә бер аяныслы, фажиғәле, ҡан-йәшле биттәре ине.

Ана шуларҙың ҡап уртаһында айҡаша һәм ҡайнаша башлай ҙа инде Өмөтбаев башҡорт ерҙәре тип.

Мөхәммәтсәлимде 1866 йыл волость старшинаһы итеп һайлап ҡуялар. Ағиҙел буйҙарынан Өршәккә, уның тамағынаса йәйелеп ятҡан сирек өйәҙ еренә тиң Ҡырмыҫҡалы волосына. Ифрат ауыр, яуаплы вазифа. Йәш Өмөтбаевҡа бөтә волость-иләү халҡы ҙур өмөт менән баға: ғәҙел ҡомар уҡымышлы ир заты, тырышһа, ул йәмәғәт мәнфәғәтен яҡлар, ер-һыуҙарҙы ҡурсалашыр.

Аҙған йортҡа яһауыл булма, бөлгән илгә бағауыл бул-

ма, тигән боронғолар. Яһауыл атаһы кантон булып һайланғас, ил-йорт тип, бар ғүмерен фиҙа ҡылды. Хеҙмәттәре ҡаты булһа ла, аҫабаларҙы нығыраҡ ҡурсыны.

Хәҙер заман башҡа — заң башҡа. Атлы казакка ергә төшөргә ваҡыт. Башҡорт, мишәр, типтәр казагына гражданлыҡ хәленә күнекмәк, ергә йәбешмәк мөһим.

Ил-йорт көнө ер менән — шуны яҡшы төшөнөп ғәмәл ҡылырға тырышты яңы старшина. Халыҡтың бар ҡарап торғаны ер. Шуға Мөхәммәтсәлим старшинаның алға ҡуйған төп бер маҡсаты — волость, йәмәғәт ер-һыуын әрәм-шәрәм иттермәү, ярым буш хаҡҡа һатыуҙы туҡтатыу ине. Арзан ер хисабына ят бауырҙарҙың байығыуын, ғәуамдың, ярлы-ябағаның бөлөүен бөтөрөү...

Халыҡтың ышаныһын, үҙендә ниндәйҙер көс-кәр тойоп, ең һыҙғанып тотондо старшиналығына Мөхәммәтсәлим. Волостың әле бер ауылында, әле икенсеһендә сход йыйып, эште йүнләп алып бара алмаған йә мутлыҡтары, зыян-гонаһтары менән яманаты сыҡҡан старосталарҙы яңылары, ышаныслыраҡтары менән алмаштырырға тырышты. Ауыл-йорт алдында абруйы булырҙай, үҙе танырҙай кешеләрҙе һайлатышты. Юл, күпер төҙөкләү, һалым, ссуда эштәрен үҙ мөддәтендә яйға һалды. Волость үҙәгендә ултырып һис сыҙаманы, ярҙамсыларын бер ауылға ебәрһә, үҙе икенсе ауылға йүнәлде. Күп ғүмере ауылдарҙа, халыҡ араһында үтте. Ул сходын йыйҙы, быжмыр старосталарын бешерҙе, ялыуҙарын тикшерҙе, ҡыйырһытыуҙарҙы тәфтишләне. Ер һатырға ҡыҙырыусыларҙы дүндерергә иреште.Имеш-мимештәргә сик ҡуйырға, бүтәненә-ниенә ваҡыт йәлләмәне. Волость, йәмәғәт эше өсөн ал тип, ял тип торманы.

Бына ул Өфөгә, хәҙер губерна һәм өйәҙ булегенә барыр юлдағы Өршәк күперен таштан һалдырыу өсөн генә лә күпме көс түкте. Земство иҫәбенә һалдырыуҙы юллап сығарҙы. «Беҙ фәҡир, 9 йыл гласный булып йөрөгәндә дәғүәләшеп Өршәк күперен земство аҡсаһына таштан түшәмдәр менән *мәхкәм* ҡылып яһарға *дәләләт* иттек», ти ул үҙе был хаҡта. «Ғәуамға тырышып йөрөгән өсөн сауаптар насип булыр әле, — тип тә өмөт итте ул. Һуңынан килгәндәр: «Рәхмәт бындай юл һәм күпер яһаған кешеләргә!» — тип әйтерҙәр. Әлбиттә, кемдәрҙең тырышып йөрөүе менән яһалғанлыҡтары онотолор».

Әммә ләкин Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың Ҡырмыҫҡалы волосында ун йыл буйы старшина булып эшләгәндә һәм шунса йылдар гласный булып һайланғанда башҡарған күп эштәре, изгелектәре волость халҡы, ғәуам өсөн онотолор-

---

*мәхкәм* — ныҡ; *дәләләт* — дәлил.



*Өфө губерна земствоһы идараһы.*

лоҡ түгел ине. Уны, Мөхәммәтсәлим старшинаны, старшина хәҙрәт, гәуам ходатайы итеп ололар ҙур абруй апһат ҡына килмәгән, әлбиттә.

Иң борсоғаны, иң яфалағаны ер мәсьәләһе ине. Волость ерҙәрен яклап, башҡорт биләмдәрен ҡурсалап, ҡайҙарға ғына барманы, ниҙәр гепә ҡылманы икән Мөхәммәтсәлим. Хатта башҡорт йәмғиәтенең үҙ эсендәге ҡаршылыҡтары, бәгзе бәндәләре менән ҡаты көрәшергә, көс түгергә тура килде уға.

Бына йөҙҙән бер эпизод. Берҙән-бер көн Күлләр ауылынан һыбайлы килеп етә волосҡа. Мөхәммәтсәлим конторҙа. Күлләрҙә бер төркөм елғыуар ер һатырға ниәт ҡорғандар икән. Ярты ауылды ҡотортоп, хатта ҡотҡо таратып, ҡурҡытып уҡ бөткәндәр. Имеш, башҡорттарҙан ерҙе барыбер тартып аласаҡтар, буш ҡалғансы, осһоҙға булһа ла һатып ҡалайыҡ, йәнәһе. Шуға сход йыйып яталар икән.

Волость аттарын мисәүләп ектереп, күсереп кузлаға, ярҙамсыһын йәнәшә ултыртып елдерәләр Күлләргә. Йәнфарман барып етһәләр, — сходтың иң ҡыҙған сағы. Шаушыу, ғаугалаш.

Уҡалы буҫтау кейемеп, башына ҡырма кәпәсеп кейеп алған, түшенә таҫмалы старшина миҙалын таҡҡан Мөхәм-



*М. Өмөтбаев кантонда эшләгән йылдарында (1859—1863) кантон есаулы формаһында.*

мәтсәлим мөһәбәт кәүҙәһен тура тотоп, майҙан уртаһына уҙғанда, ярлы-ябаға уға юл биреп, аптырашлы шымып ҡалмаһынмы? Староста менән пүнәтәйҙәре телдән яҙғандай була.

— Ниткән сход был? Нишләп йортауайҙар юҡ? Ниңә, беҙгә, волосҡа мәғлүм түгел был хәл?— тип старостаға асыулы тауыш менән һорауын төбәне старшина.

— Мөхәммәтсәлим старшина хәҙрәт, ер һатыу хаҡында үҙ-ара кәңәш итешкә генә йыйылғайныҡ.

Шул саҡ тирә-йүндән тауыш ҡупты:

— Ниндәй кәңәш ти, сход бит.

— Приговор төҙөйҙәр.

— Ерҙе бушлай тартып алалар, тиҙәр ҙә баһа.

— Ятып ҡалғансы атып ҡал!

— Ерҙәрҙе һаттырмайыҡ! Һатмайыҡ!..

Танып алыуынса, Стәрле купесы ярандары менән бер ҡорҙа өймәкләшеп тора. Улары шым. Староста янында бер нисә ҡуштаны, ҡыҙмаса баштары урала.

Старостаның икеле-микеле һөйләүенән, бер аҫаба әйткәненән Мөхәммәтсәлим шуны аңланы: ер барыбер бушлай китәсәк тип, халыҡты һатырға күндереп бөткәндәр икән. Ризалашмағандарҙы ла, вәғәзләп, ҡурҡытып тигәндәй, ризалатҡандар. Приговор ҡағыҙы яҙылған. Унда күрһәтелгәне: һатылыр дисәтинәһе бер һум егерме тин көмөш. Ә купестың ғәһет иткәне — ике һум. Йәнә сәйләтә-шәкәрләтә өлөш сығарылған.

Мөхәммәтсәлим старшина эштең әрәсәһен төшөндөрөп, нотоҡ тотарға тейеш булды.

— Йәмәғәт, законға һыймаҫ эш ҡылаһығыҙ. Волосҡа әйтмәй-нитмәй йәшерен эшләргә булашыу үҙе оло хилаф. Ер эше—мир эше, уны орҙо-бәрҙе генә эшләү ярамас. Йән башына 15 дисәтинәнән артығын һәр ир затының ризалығы булғанда ғына бер йылға һатырға лазым. Был һеҙгә мәғлүмдер бит. Ә һеҙ еребеҙ күп, былай ҙа бушҡа китер тип арзанға һатып ебәрһәгеҙ, мал-тыуарығыҙҙы ҡайҙа көтөрһөгөҙ? Нисек көн итерһегеҙ? Уйланығыҙмы шуны? Аңларға ваҡыт: ер хаҡы ла хәҙер тәңкә, тәңкә ярым түгел, бишалты тапҡыр ҡыйбатыраҡ. Алдап, ыштанһыҙ ҡалдырырға йөрөүселәр күп булыр. Үҙегеҙҙе үҙегеҙ ҡайғыртмаһағыҙ, ят хәстәрләмәҫ. Буш суманға ғына ултыртыр. Батша ғәли йәнәптәренең февраль указы башҡорттар ерҙәренә үҙҙәре хужа, ти. Хужа булғас, һаҡлай ҙа, яҡлай ҙа белегеҙ. Ере барҙың ғына көнө бар. Бойороғом шул: бар-баштаҡлыҡ ҡылмаҫҡа. Волость рөхсәтенән тыш йыйылған сходты таратырға. Алдатҡан йә алдаҡҡа ышанған старостаның ҡылығын тәфтишкә ҡуйырға.

Ер һатыу «йәрминкәһе»нең шундай тамашаларын, йәмәғәт хисабына кесә ҡалынайтырға тырышҡан старосталары, үҙенең мут маклерҙары, ашап-эсеп һыйланып ҡалырға ятҡан ҡуштандары, һемәйеп ерҙәренән яҙған әтәмбәйҙәре, тар урынға килеп тығылған килмешәктәре, туймаҫ яуыз ялмауыҙҙары кеүек «ҡаһармандар»ын да күп күрҙе һәм бәрелеште Мөхәммәтсәлим старшина.

Ер һатыу сходы әле йәрминкәнең башы ғына. Дауамы волость идараһына, өйәҙҙең үҙенә, ашып китһә, судлашыуҙарға күсә. Ғәҙәттә ғәуам халҡы ер һатҡанда, приговорҙа ҡаралмағандарын ишетеп, алданып ҡалғандарын аңлап, һуңында тауыш күтәргән була булыуын. Эш үткәс, дөмбөрөнән ни файҙа: приговор яҙылған, тамғалар һалынған, купчий ҡағыҙ раҫланған. Шикәйәт яҙыу, өҫтәмә тамға йыйыу китә лә бит. Эштәр судҡа барып етә. Дәғүәләр йылдарға һуҙыла. Мировой посредниктар, судьялар, өйәҙ түрәләре килеп ҡыҫыла. Тик ҡарға күҙен ҡарға суҡыймы? Ала ҡарғалар хаҡ. Бар дәғүә, судлашыу, йөрөүҙәр бушҡа сыға: биш тинлек ҡуян ун тинлек зыянға әйләнә.

Ун йыл буйы старшиналығында әҙ күрҙеме ни бындай ғәҙелһеҙлектәрҙе. Ҡөпә-көндөҙ күрәләтә талауҙарҙы. Башҡорт ерҙәрен тартып алыуҙарҙы, алдап-йолдап, буш хаҡҡа үҙләштереүҙәрҙе. Хаҡлыҡ эҙләп, ғәҙеллек юллап, күпме дәғүәләшеп, көрәшеп ҡараны. Ара-тирә еңгәндәй итте. Ә күпселегендә ғәҙеллекте таба алмай йөрәгенә ҡара ҡандар һауҙы. Ғәйепте айырым түрәләрҙән күрҙе. Халыҡтың алданыуын уның наҙанлығына ҡайтарҙы.

Үҙе кескәйерәк булһа ла түрә кешегә тормош әсе һабаҡты барыбер бер яҡлыраҡ бирә ине.

Ер һатыуҙың касафатлы һалҡын елдәре бер заман Йомран Табын ерҙәренә лә бәреп инде. Әле Мөхәммәтсәлим Ырымбурҙа уҡып йөрөгәндә, әле унан алдараҡ уҡ тыуған ауылының ҙур ғына биләмдәре урыҫ помещиктары ҡулына кереп өлгөргәйне. Реформанан һуң өләшкә кереүҙәр, ҡыҫымдар йәнә артты. Беренсе гильдия Өфө купесы Ҡондратий Блохин күп ерҙәргә эйә булғайны. Мөхәммәтсәлим мировой посредник писары, волость старшинаһы саҡтарында Йомран Табын ерҙәрен һатырға ырыуҙаштарына бик ирек ҡуйманы. Һәр төрлө яҫҡыныуҙарҙан, ҡотортоуҙарҙан әрсәләп килде. «Беҙҙең Йомран Табын ере камил үлсәнеп бөтмәгән ине, — тип яҙҙы М. Өмөтбаев аҙаҡ был хаҡта.— Шул сәбәптән һатырға юл тапмаған әҙәмдәр: «Ғәйре урында һаталар, әммә беҙҙең ерҙе Өмөтбаевтар һаттырмай»,— тип әйтәләр икән. Үпкәләп йөрөгәндәр. Ул за-

---

*тәфтиш* — тикшереү.

мандарҙа дисәтинәһен бер тәңкәгә һатырға нисә ҡәррә ҡарарҙар яһанылар. Ер үлсәүе беҙҙең ғаризабыҙ буйынса 1863 йылдан башлап, ер һатыу мәнеғ булғанса 1876 йылға тиклем туҡталып торҙо. Сөнки 1863—1865 йылдарҙа комиссияның ағзаһы Циолковскийҙың үлсәтеүенә риза булмай туҡтаттылар. Әммә үҙем старшина булғас, 1866 йылдан башлап 1874 йылдың 29 апреленә тиклем Ибраһим һәм Тоҡос ауылынан мин, Илсекәй ауылынан Хисаметдин Ҡасҡын улы һәм Ҡужабай Ҡолбай улы Өфөнөң Блохин исемле купесы менән 8 йыл дәғүәләштек. «Блохин еребеҙҙе Аҡбирҙе тауында, йәғни Ҡаратауында 665 дисәтинә артыҡ биләй»,— тип граждандар палатаһына ҡағыҙ биреп, өйәҙ землемерынан үлсәттек. Артығы табылды. Мәгәр палата: «10 йыл дәғүәһеҙ торған, дәғүә мәсмуғ түгел»,— тип сенатҡа аппеляция бирергә рөхсәт менән (был ерҙе) Блохинға ҡалдырҙы. Илсекәй ауылының башҡорттары Блохиндан аҙыраҡ ашап-эсеп ғасабалаш сенатҡа ҡағыҙ бирҙермәнеләр, сөнки доверенность уларҙа ине. Беҙ, Ибраһим, Тоҡос ауылдары (кешеләре) Өфөгә барғас, илсекәйҙәрҙе көтөп, килмәгәс, мәхрүм булып ҡайттыҡ. Шул тариҡса Блохинда «һәмишә артыҡ ер ҡалды».

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың архив фондында, үҙе яҙып ҡуйғанса, «Йомран Табынский волостың Илсекәйский общество һәм ауылдың гражданская палатанан юлыҡҡан спорный еренең решениеһы» копияһы һаҡлаған (Мөхәммәтсәлим ҡулы): «1874 года апреля 29 дня по указу его императорского величества в Уфимской палате уголовного и гражданского суда слушали: дело о взыскиваемых башкирами деревни Ильчикаевой с Уфимского 1-й гильдии купца Кондратья Блохина убытках за захват земли, 3400 руб. Определено: рассмотрев обстоятельства этого дела, палата уголовного и гражданского суда находит: 1. что башкиры деревни Ильчикаевой предъявили иск к Уфимскому 1-й гильдии купцу Кондратию Блохину о захвате им у них землю до 225 десятин по взыскании с него убытка за это 3 150 руб. Но доказательных ни на принадлежность им той земли, ни на понесение убытков не представили, тогда как по силе 312 ст. хп. ч.П, на их обязанность подлежано представить предусмотренные законом доказательства в подкрепление своего иска (683, 769 ст. хп. ч.П).

2. За купцом Блохиным в опровержение иска тех башкир представлены купчая крепость 1818 г. и акт данной выданной 30 апреля 1856 г. из коих видно, что спорная

---

*ҡәррә* — тапҡыр; *мәнеғ булғанса* — тыйылғанса.

*мәсмуғ* — нигеҙле, дәлилле.

земля преобретено первою от башкир вотчинников Юмран-Табынской волости без означения количества десятин земли по урочищам...

3. Что так как башкиры деревни Ильчекеевой споре против акта данной в течение двух лет со дня ввода купца Блохина землею по урочищам означенных в том акте, не предъявляли, по тому они в данном случае и не могут оспаривать владения Блохина. Суд определяет: в иск башкирам деревни Ильчекеевой предъявлении к купцу Блохину стороны признав владение Блохиным спорных убытков законным. За производству по делу 16 руб. взыскать с башкир деревни Ильчекеевой на расходы».

Был документ шуның менән ғибрәтле: халыҡ әйткән «Ҡарға күҙен ҡарға суҡымай» тигән мәҡәлде тағы бер ҡат раҫлай. Илсекәйҙәр Ибраһимдар менән үҙ ерҙәрен әүәл буш тартып алған Кондрат Блохин купесҡа күпме дәғүә белдереп, судтарға бирел ҡарамаһын, батша суды барыбер купесты яҡлай. Яҡлай ғынамы, хатта судлашып йөрөгән сығымдарҙы ерҙәренән мәхрүм ҡалған илсекәйҙәрҙең үҙҙәренән түләтә.

Башҡорттар помещиктарға, купестарға, төрлө түрәләргә ер һатып, приговорҙа һәм купчий документтарында фәләнсә дисәтинә ер фәләнсә хаҡ менән тип килешеп тә, ғәмәлдә байҙарға һатлыҡ мировой посредниктарҙың, писарҙарының ерҙе өҫтәп яҙыуы арҡаһында, һатыусылар алдатылып, күп ерҙәренән мәхрүм ҡалып, аҙаҡ дәғүәләшеп, судлашып ҡараһалар ҙа ғәҙәттә бер ни сыҡмай. Сөнки батша администрацияһы, шул уҡ түрәләр түрәләргә, әшнәләренә, аҡһөйәктәргә тел-теш тейҙертмәй.

Ер үлсәп межаларға айырыу, ваҡлап һатыуҙар, ҡоромтаға биреүҙәр киткәс, быны ҙ үҙ мәшәҡәттәре килеп тыуҙы. Өйәҙҙән килгән землемерҙар ерҙе үлсәгән, межалаған булып, йәмәғәт елкәһендә айҙар, йылдар буйы яттылар. Землемер үҙе генә түгел, бер өйөрө — ярҙамсыһы, ашнаҡсыһы менән бергә ине. Шуларҙы ауыл халҡы туйҙыра. Йортон, атын бирел тора.

Ерҙе ғәҙел бүлеү шул землемерҙарға бәйле. Шуға халыҡ былар күңелен күрергә тырыша, ә тегеләр үҙҙәренән ни торғанын тойоп, көйәҙләнә бара. Халыҡтан тегеһен талап итә, быныһын. Ашағанда ҡаҙы, ҡымыҙы, араҡыһы ла булһын. Йоҡлағанда йомшаҡ түшәгендә — ҡыҙ-ҡырҡыны. «Зимләмир түрә» теләгәндәрҙе үтәмәһәң, үҙеңдән күр — ул ерҙең һиңә аламаһын сығарыр, тишек суманға ултыртыр.

Мөхәммәтсәлим старшина ерҙәрҙе ғәҙел бүлдереү мәсьәләләре, землемерҙарҙың эштәре, ҡылыҡтары менән күп

шөғөлләнде. Баш-баштаҡ ҡыланғандарын, өйәҙгә ҡағыҙ йөрөтөп, алыштырырға мәжбүр булды.

Йомран Табын ерҙәрен межалап үлсәгәндә ҡыраләмәт булып бөттөләр. Теге Өфө яғы ерҙәрҙе тотош Блохин купесҡа күсерҙеләр. «Заманында Ҡаратау, йәғни Аҡбирҙе тауы яландары менән генераль план алынгас, Өфөнөң Минаев исемле чиновнигына закладҡа һалынып, бәғдә губерна идараһы ул ерҙе торг менән һатҡанда, Өфөнөң беренсе гильдия купесы Ҡондратий Игнатьевич Блохин һатып алмыш»,— тип яҙа М. Өмөтбаев.

Блохин купес менән дәғүә туҡтағас, 1875 йылдан башлап Йомран Табын ерҙәрен үлсәй башлайҙар. Шуларҙың шаһиты булып уртаһында ҡайнаған Мөхәммәтсәлим былай ти: «Ул заманда посредник Поляков Ширяев исемле землемер менән килеп үлсәне (фәҡирегеҙ ғәйреләр йөмләһендә вәкил булды), яланды беҙгә тар ҡалдырырға тырышты, ҡарағайлыҡ уртаһындағы Урыҫ юлынан Сатра һәм Ҡәҙерле ҡыуаҡты ҡалдырып, мең межаһы һуҡты. Әммә беҙ көнбайышында уҡ Һынлы ҡыуаҡты йылғаһы менән керетеп һораныҡ, э төшлөктә Ҡайынлыҡул башынан уҙмаҫҡа, дүрткелерәк булһын, тинек. Губерна присутствиеһы ғаризабыҙҙы ҡабул күреп, Поляковтың ул йөрөшөн боҙоп, 1876 йылда Рутто исемле землемер менән уны яңынан сығарҙы. Улар иген баҫыуын беҙ һорағанса биреп, үҙенең межовой закон белмәгән фәһеме менән беҙҙең Ибраһим һәм Тоҡос ауылына 10-сы рәүиз менән биреп, илсекәйҙәргә 7-се рәүиз менән биреп, беҙҙең ике ауылға тейешле свободный еребеҙҙе уларға биреп үлсәне. Сөнки илсекәйҙәр 7-се рәүиз менән алғанда ер күберәк алалыр: ул ваҡытта улар 64 душ (ҡырҡ дисәтинә душына), 10-сы рәүиздә 119 душ (ун биш дисәтинә душҡа), Ибраһим ауылы 7-се лә 48 душ, 10-сыла 130 душ, Тоҡос ауылы 7-селә 41 душ, 10-сыла 102 душ. Инде 7-се һәм 10-сы рәүиз менән хисап ҡылып ҡара. Әммә ахырында 1869 йыл 10-сы февралдәге указ буйынса 7-се рәүиз менән бирелмәй, мәгәр биреләлер 10-сы рәүиз буйынса».

Бында — башҡорт йәмғиәтенең ҡатмарлы ер мөнәсәбәттәренә килеп инәбеҙ. Улай ғына түгел, Ибраһим, Тоҡос, Илсекәй ауылдарының 1834 йылғы ревизия (йән хисабын алыу) ваҡытында күпме ир кеше, 1859 йылғы ревизияла күпме ир кеше булғанын асыҡ күрәбеҙ. Ә 7-се ревизия ваҡытында «Һәр ир кеше йән башына 40 дисәтинә ер тәғәйенләнһә, 10-сы ревизияла иһә 15-әр дисәтинәгә генә ҡала. Йән башына ер хисабы өсләтә тиерлек кәмей. Былар — шулай уҡ башҡорт ерҙәрен ҡыҫыу, бүлгеләп алыу һөҙөмтәһе.

Тағы әлеге яҙманы дауам итәйек. «Ҡайтайыҡ моратҡа, — ти М. Өмөтбаев,— 1876 йыл беҙҙәр йәки вәкил булып инде тырышабыҙ туғайҙы түңәрәкләп алырға. Был турыға еттек. Ҡарат әрәмәһе янына. Посредник һәм полномочийҙар Янбулат ҡушында, бер ҙур имән төбөндә хәл йыйғанда Ибраһим һәм Тоҡос ауылдары кәңәш итә башланыҡ. «Ярандар, был посредник беҙҙең еребеҙҙе кәм бирәләр. Әгәр дөрөҫ бирһә, беҙгә йә төпкөл сабыны, йә Ҡолаттың яртыһы керәләр. Беҙгә ике йылдан бирле ҙур яфа һалды. Аһ алла, Ҡолат урманы ла китте»,— тигәнсә, алдыма имән башынан бер ҙур ҡарағош йығылып төштө лә йән бирҙе. Йыйылышып ултырған йәштәргә әйттек, «Әй, уғландар, нисә йыл ошо Ҡолат өсөн тырыштыҡ. Әммә ҡош булып, алдыбыҙға төшөүе Ҡолаттың китеүенә ғәләмәттер. Сөнки бабаларыбыҙҙың Майҡы бейҙән ер һәм урмандарыбыҙға нишан (билдә) итеп алған ҡошо ҡарағош ине. Ул да бөгөн үлде. Ағасыбыҙҙың ҡото китеүенә был ғәләмәттер» тип пошаймән булдыҡ. Донъяның һис тә тигеҙ урыны юҡ имеш икәнлегенә төшөнгән инек. Туғай һәм әрәмә китте».

Ерҙәренең ҙур ғына өлөшө сит ауылдарға китеүен Мөхәммәтсәлим шулай иҫке хөрәфәткә, яҙмышҡа ҡайтарып ҡалдырған кеүек.

Ләкин ер өсөн тартыш былай ғына бөтмәй, әлбиттә. Ибраһим, Тоҡос ауылы халҡы М. Өмөтбаевҡа юлларға тапшырып, 1879 йылғаса ғаризалар яҙып дәғүә алып баралар. Эш хатта Петербургка, сенатҡа тиклем барып еткән. Хатта ки батшаның үҙенә мөрәжәғәт итәләр. Әммә ләкин юғарынан күңелде тынысландырырлыҡ йыуаныслы хәбәрҙәр килмәй. Етенсе ревизияға ярашлы рәүештә тәсдиҡ ителәә ерҙәре.

Блохин купес кеүек ҡарғалар күп булды ил өҫтөндә. Ил өҫтөндә илле ҡарға, ти башҡорт мәҡәле. Емгә йомолған ҡоҙғондар төҫлө ябырылды улар башҡорт еренә. Шуларҙың ниндәйҙәре генә булманы. Күршеләге Архангель (Аҫҡын) заводы хужаһы әллә ҡайҙа Польшала йәшәгән Коссаковская графиня тигән берәү 52 мең дисәтинә Ҡумырыҡ Табын еренә баш ине.

Ағиҙел аръяғында Урман-Күҙәй йортонда Вайнберг тигән бер Лифляндия йәһүте Тикәй ауылы урмандарын ҡулға төшөрөп, ағас-таш менән кәсеп итә башланы.

Урман промышленнигы Артем Лаптев Ағиҙел, Нөгөш буйҙарының бөтә урмандарына тиерлек хужа булып, йөҙйәшәр ыршыларҙы, ҡарағайҙарҙы ҡырып, миллиондар йыйҙы.

Мировой посредник Фок тигән яуыз, үҙе ер һатыу-алыу

эштәрендә булып, үҙенә 12 мең дисәтинә ер йома. Әллә ниндәй хужа булып, ерһеҙ ҡалған башҡорттарҙы ҡыйырһытырға, шашынырға тотона. Ер бер килеп тота ул, ти халыҡ. Ҡомһоҙ Фокты ла ер тота: һыу ингән ерендә башҡорттар уны шәрә көйө атып үлтерәләр. Эткә — эт үлеме.

Бер татар мырҙаһы, суҡынған кенәз Александр Кугушев Меңле башҡорттарының өс мең ярым дисәтинә еренә хужа булып ала.

Ә икенсе аҙман мырҙа Тимашев Ырымбур губернаһының Ташлы имениеһында йөҙ мең дисәтинә ер тота. Һәр дисәтинәһен бары бер эсмухә сәйгә алған, тиҙәр. Башҡорттар эстәре янып, көйөп бер көләмәсен дә һөйләйҙәр икән: Аҫабаларҙы был бер һыйлағанында тегеләр, йомартланып китеп: «Әйҙә, мырҙа, тәүлегенә күпме ер һыбай сабып үтә алаһың — шул ерҙәр һинеке»,— тигәндәр, имеш. Шулай осһоҙ-ҡырыйһыҙ ергә эйә булған тиҙәр үҙен. Аҙаҡ халыҡты зар илатҡан Тимаш баяр шул инде.

Ҡорнило Морозов тигән бер мужик, Лев Толстойҙың Прохорына йә әлеге Тимаш эмәле менән, тиҫтәләгән мең дисәтинә башҡорт ерҙәрен ҡармаған.

Рус яҙыусыһы Н. В. Ремезов, башҡорт ерҙәрен талаған, буш хаҡҡа эләктергән бындай эре ҡарға-ҡоҙғондарҙы — ер өләшләү ҡаһармандары тип атаған һәм уларҙың ҡылыҡтарын төрөк башы боҙоҡтары, Салтыков-Щедриндың Ҡалупаев-Деруновтары менән тиңләгән.

Алдатып, ҡурҡытып ҙур ерҙәр биләгән генерал-губернатор Н. А. Ҡрыжановскийҙы Н. В. Ремезов башҡорт ерҙәре короле тип исемләй. Төрлө юл менән башҡорт ерҙәренә хужа булып алған ошондай эре ҡоҙғон-ҡарғалар, «ер ҡарғалары» араһына керергә, шулар менән хәленсә алышырға, дәғүәләшергә мәжбүр булды Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев. Мировой посредник Фок менән Өфөлә бер нисә тапҡыр бәрелешергә тура килде уға. Ағаһы Фәхретдин менән Вайнбергты бер мәл ҡаты ҡыҫмаҡҡа ла алдылар улар. Өфө суд палаталарында, земстволарҙа Лаптев, Ҡугушевтар менән юлдары киҫешкеләне. Ер асыуы — йән асыуы ине: сая сәкәләшкән саҡтар булды.

Шундай ҡоротҡостар барында ер үҙе, донъя ҡото, тәбиғәт йәме нисек ҡоромаһын да ҡорғаҡһымаһын.

Бер мәл Ҡондратий Блохин купес менән һүҙгә килешкәне һаман хәтерендә. Мөхәммәтсәлим уға: «Башҡорт ерҙәрен, беҙҙең Йомран Табын биләмәләрен законһыҙ һәм намыҫһыҙ рәүештә талайһығыҙ», тигәс, былай ти купес:

— Башҡорт ерҙең ҡәҙерен белмәй, әрәм итеп ятҡыра. Уны, законлымы-түгелме, тартып алаһы ғына ҡала. Ер — Россияныҡы.

— Ә Россияның башҡорт ерҙәре хаҡында закондары ла бар бит.

— Закон ул беҙҙең ҡулда. Фетнәсел башҡорттоң Россияға файҙаға ҡарағанда зыяны ҙур. Уны ер йөҙөнән юк юҡ итәһе ине...

— Итергә тырыштылар, тырышалар түгелме һуң?

— Ерен тартып алып ҡына түгел, ер йөҙөнән һөрөп, тим мин.

— Ә һеҙҙә, юғары гильдия кешеһендә, мәғрифәтселек һәм гуманизм булмағанда әҙ генә лә намыҫ, выждан тигәне юҡмы ни?

— Таптың буш һүҙҙәрҙе. Әйттерәһең килһә, минең өсөн кеше, ер тигәнең фәҡәт бер сара, аллам — алтын минең. Бына нимәгә табынырға кәрәк.

Шундай ҡомһоҙ бәндәләрҙән ниндәй йүн көтөргә мөмкин.

4

Тормош даръяларын кисеү анһаттан түгел. Ун биш йыллап старшиналыҡ ғүмерендә Мөхәммәтсәлимдең күп нәмәгә күҙе асылды. Күп йәшәгән ни белгән, күпте күргән шул белгән хәҡиҡәтен үҙе татып төшөндө. Йәмғиәттә аҡтан ҡараны айырырға өйрәнде.

Айҡалып-сайҡалып торған тормош даръяһының хәтәр өйөрмәләрендә күпме айҡалманы ла күҙ күременсә байҡашманы икән ул. Ел-дауылында ситкә тибәрелгән, ғарыҡ ителгән бәндәләрен, бер-береһен батырышҡан әҙәмдәрен, барын үҙенә ялмар яуыздарын аҙ күрҙеме ни? Үҙе әйткәнсә, «үҙем йәшәгән һәм күп кенә ауырлыҡтарҙы кисергән йәмғиәт» хаҡында аҙ баш ваттымы ни?

Былар — тормош һабаҡтары ине.

Әле төшөнә барғаны шул: халыҡ-ғәуам яҙмышы — власть ҡарамағында. Иң аяныслыһы, үҙе атағанса,— «көслө һәм ҡороҡҡос төркөм ҡулында». Шуларҙың ауылда крәстиән өҫтөнән хөкөм йөрөткәндәре — яуыз староста һәм старшиналар.

Ошондай яуыз — көслө һәм ҡороҡҡос төркөмдө, «бындай йоғонтоло төркөмдө нигеҙҙә урындағы власть башлыҡтары һәм ауылдың байҙарынан торған кешеләр тәшкил итә» тигән һығымтаға килә Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев.

Был — ул заман өсөн, үҙе старшина булған кеше өсөн бик ҡыйыу социаль ҡараш. Асылда, синфи яҡтан ҡараш.

Үҙе йәшәгән һәм күп кенә ауырлыҡтарын бергә кисергән ауыл йәмғиәтендә старшина булып эшләгән Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев ошо уй-ҡараштарын аҙаҡ «Йәмғиәт тәр-

типтәре» тигән хеҙмәтендә йомғаҡлабыраҡ бирергә тырыша. Шул йәмғиәтте ул «староста, старшина, ҡарый-судьялар, ҙур түрәләр» ише юғары ҡатламға һәм ярлы, ерһеҙ крәҫтиәндәргә, атһыҙҙар йәки эшсе-зимагорҙар ише түбән ҡатламға айырып ҡарай. Тәүгеләрен ул, әлегесә, «көслө һәм ҡоротҡос төркөм», яуызыраҡтарын «ҡомһоҙ йыртҡыстар» тип атай. Башҡорт ерҙәрен аяуһыҙ талап һәм алдап-йолдап алыуҙарынан сығып, «ер менән алыш-биреш итеү шул уҡ ҡомһоҙ йыртҡыстарға файҙа килтерә» тип бәреп әйтә.

Бындай күренештәрҙе М. Өмөтбаев йәмғиәттәге бер ҙур ғәҙелһеҙлек тип нарыҡлай. Был социаль ғәҙелһеҙлекте ҡаты тәнҡит итә һәм унан ҡотолоу юлдарын эҙләп ҡарай.

«Башҡортостанда хәрби тәртиптәр бөтөрөлөп, башҡорттар өҫтөнән опека алынғандан һуң урман һәм сабынлыҡтарҙы ҡоротоусы төркөмдәр барлыҡҡа килде, — тип яҙа М. Өмөтбаев. — Улар, башҡорттарҙы ер-һыуҙы ҡарай алмауҙа, ялҡаулыҡта ғәйепләп, ер-һыу, урмандарҙы ситкә һаталар. Ләкин был күҙ буяу ғына». Автор бында төрлөсә һылтау тапҡан булып, ер һатыу менән кәсеп итеүселәр, ер алып байыусылар хаҡында һүҙ ҡуҙғата.

1865 йылда — Ырымбур генерал-губернаторы Крыжановский «башҡортто шунса ерһеҙләндерергә кәрәк, ул йәйләүгә күсеп йөрөрлөк булмаһын» тигән шартты ҡуя. Хикмәт башҡорттарҙың ергә хужа булыуында йәки йәйләү тотоуҙарында ғына түгел ине, әлбиттә. Был, башҡорттарҙың ярым феодаль көнкүреш шарттарынан яңыса көнкүрешкә, капиталистик мөнәсәбәттәргә яйлап күсеү һәм яйлашыу менән тығыҙ бәйле ине.

Ике төрлө көнкүреш мөнәсәбәттәрен күргән һәм кисергән Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев башҡорттарҙың әүәлге кантонлыҡ системаһынан хәҙерге граждандыҡ хәленә күсеп китеүҙәренең ауырлыҡтарын яҡшы тоя. «Башҡорттарҙың бөлгөнлөккә төшөүе күсмә тормоштан ултыраҡҡа ҡапыл күсеү менән дә бәйле,— ти ул. — Хәҙергә улар ни яңы һөнәргә күнегеп китә алмайҙар, ни Европа кешеләренең эштәрен өйрәнеп өлгөрмәгәндәр». Шунан сығып, ул яңы шарттарҙа яңыса йәшәргә, яңы һөнәрҙәргә өйрәнеү, европаса ғилемдәрҙе үҙләштереү мәсьәләләрен көн тәртибенә ҡуя.

Сирҙең үҙен белмәй тороп, рецепт яҙып булмай, ти М. Өмөтбаев. Шуның өсөн ул XIX быуаттың икенсе яртыһында, үҙе йәшәгән заманда башҡорт йәмғиәтселегенә кисергән сир-ауырыуҙарҙың үҙен, халыҡтың бөлгөнлөккә төшөү сәбәптәрен төшөнөргә тырыша. Шуға ул йәмғиәт тәртиптәрен анализлап ҡарай, халыҡты миктәреүсе сирҙәрҙе, микробтарҙы, яуыз ҡоротҡостарҙы эҙләй, исемләп әйтә. Сә-

бәптәрен тапҡан ҡәҙәрен дауалау өсөн рецептарын яҙып, тәҡдимдәрен индерә.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың рецепт-тәҡдимдәре шул заманы өсөн үтә урынлы һәм файҙалы һымаҡ. Бына улар:

1. Ғәҙәтләнгән күсмә һәм һунарсылыҡ итеп йәшәүҙән ултыраҡлыҡҡа сығарыу өсөн иң тәүҙә башҡорттарға эш һөнәрҙәрен өйрәтеү кәрәк. Башҡорт халҡы беренсе сиратта итекселәргә, тегеүселәргә, төҙөү оҫталарына мохтаж. Һәр бер волоста бер нисәшәр мастерской төҙөү маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Аҡсаһыҙ, бигерәк тә аҙ ерле урындарҙа уларҙы төҙөүгә земство ярҙам итергә тейешле.

2. Ер эшкәртеүҙе күтәреү өсөн иң тәүҙә уны мотлаҡ эшсе йән башына бүлеүҙе хәл итергә кәрәк. Ерҙе бүлеүҙе иһә биш-алты йыл һайын яңыртып тороу маҡсатҡа ярашлы булыр.

3. Мәжбүри рәүештә өс сәсеүле система индерергә, ә 10-сы ревизия буйынса йән башына 15 дисәтинәнән артыҡ ерҙе арендаға биреүҙе ҡаты тыйырға кәрәк. Айырым хужа ерен бер йылдан артыҡҡа һатырға тейеш түгел...

4. Старшиналарға, судьяларға, писарҙарға, старосталарға, башҡорттар ғәскәри булған дәүерҙәге кеүек, ер бирмәҫкә, шулай уҡ арендаторҙар кампанияларына ҡатнаштырмаҫҡа. Әгәр улар аҫтыртын ғына быны эшләй икән, бер һүҙһеҙ эштәренән алырға.

5. Ер һатыуҙы, ғөмүмән, туҡтатырға.

6. Иген игеүҙе һәм баҡсасылыҡ менән шөғөлләнеүҙе көсәйтергә...

Быларҙан тыш йәнә әллә нисә конкрет тәҡдимдәре бар Мөхәммәтсәлимдең.

Өфө губернаторының үтенесе буйынса яҙылған был тәҡдимдәр шул заманында ғәйәт ҙур роль уйнай. Уларҙың күбеһе губернатор, өйәҙ түрәләре бойороғо буйынса ғәмәлгә ашырыла башлай. Заман үҙе, ижтимағи ихтыяж уларҙы бөтә ҡәтғилеге менән көн тәртибенә ҡуя.

Ошо губернаторға яҙған «Йәмғиәт тәртиптәре» исемле эшендә XIX быуаттың икенсе яртыһындағы башҡорт йәмғиәтселеге тормошондағы тәртип-низамдарға, халыҡтың хәленә анализ яһап, социаль, ижтимағи күренештәрҙе үҙенсә нарыҡлап һәм күптәрен фашлап сығыуы Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев кеүек күренекле кеше өсөн ҙур ҡыйыулыҡ һәм юғарылыҡ та ине.

Губернаторҙың уға, ҙур тәжрибәле, уҡымышлы һәм абруйлы башҡортҡа, мөрәжәғәт итеүе лә осраҡлы түгел ине. Был саҡта ул халыҡтың ходатайы тигән арҙаҡлы исемгә лайыҡ атаҡлы йәмәғәт эшмәкәре, ил ағаһы дәрәжәһендәге кеше ине.

Аҡты аҡ тип, ҡараны ҡара тип, яуыздарҙы яуыз итеп, тураһын әйтеп, губернаторҙың үҙенә яҙған был хеҙмәтендә барыһын да үҙе күреп белеп, тәжрибәһенә таяныи, инаныи яҙғанлығын да әйтеп китеүҙе кәрәк таба автор. «Быларҙың бөтәһенә лә мин, шул уҡ башҡорт вотчинниктары араһынан сыҡҡан һәм улар менән бергә ғүмер һөргән кеше булараҡ, старшиналыҡ иткән, ерҙәрҙе межалау һәм уға бәйле килеп тыуған бәхәсле мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса халыҡ вәкиле булған саҡтарҙа күреп ышандым»,— ти ул.

Былар Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың волость старшинаһы, халыҡ вәкиле булып эшләү йылдарының ҙур бер һабағы һәм йәмғиәт үҫешенә йоғонто яһарлыҡ бер һөҙөмтәһе ине.

5

Һөнәр алды — ҡыҙыл тел, ти.

Әлеге һөҙөмтәләргә килгәнсе әҙме уйланырға, кәңәштөңәш итергә, башларға һәм ҡушларға, яңы тәжрибәләр яһарға тура килде әле уға.

Ерҙәре иркен аҫаба башҡорттар бығаса башлыса мал аҫрау, солоҡсолоҡ менән шөғөлләнде. Көтөү-көтөү мал тоттолар, йылҡы үрсеттеләр. Уларҙы Өфө, хатта Ырымбур баҙарҙарынаса илтеп һаттылар. Бар килерҙәре шул малтыуарҙан, ризыҡ-ниғмәттәре ит-майҙан, һөт-ҡатыҡтан ине. Өйөр-өйөр бейә бәйләп, ҡымыҙ яһау, табаҡ-табаҡ һөт өҫтәрен алып, күбек май бешеү, ҡатыҡ ҡайнатып эремсек төшөрөү, эркет эретеп ылаштарҙа ҡорот ҡатырыу, ит-балыҡ ҡаҡлау, емеш-еләк ҡаҡтары киптереү төп шөғөл булды. Солоҡсолоҡ, һунарсылыҡ кәсептәре ишемгә ҡушым ине.

Төп кәсептәре шулар булғас, ашлыҡты бығаса үҙҙәренә ашарлыҡ ҡына сәстеләр. Улар өсөн ашлыҡ — ашлыҡ ҡына ине. Ерҙәр ҡыҫыла башлағас, өйөр-өйөр мал-тыуар утлар яландар тарайғас, солоҡ, һунар урмандары наҡыҫайғас, иген игеү бер ни тиклем арта төштө.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев был хаҡта шулай ти: «Тау-урман башҡорттарының йәнлек тиреһе менән яһаҡ түләгәнлектән, һунарға йөрөү, йәнлек аулау, балыҡ тотоу, ҡорт аҫрау төп кәсептәре булып тора. Ә ялан башҡорттарының төп эше мал аҫрау булып, игенде ашлыҡ өсөн генә сәсәләр... Хәҙер ерҙәрҙе һатҡас, һоҡланғыс урмандарҙы ҡырғас, һунарсылыҡ элекке килемде бирмәй, ерҙәрҙе күпләп һөрөү арҡаһында малдар күпләп кәмей. Башҡорттар еренә сит кешеләрҙе күсереп ултырталар. Бөтөнләй башҡаса ғөрөф-ғәҙәтле яңы кешеләр менән аралашыу башҡорттар араһында донъя көтөүҙең яңы төрҙәре, яңы ғәҙәттәр барлыҡҡа килеүенә килтерә».

Башҡорттарҙың төрлө эшкә ҡонарлығын да билдәләп үтә М. Өмөтбаев. «Мәҫәлән, баҫыу эшендә улар күсеп килгән халыҡтан айырылып тора,— ти.— Ҡатын-ҡыҙҙар бесән саба, ураҡ ура, күбә һәм кәбән һала. Уларҙың ҡайһы берҙәре ирҙәр менән тиң эш хаҡы ала».

Ағиҙел буйы Табын башҡорттары, Ҡырмыҫҡалы, Талбазы төбәктәре реформаларҙан һуң иген игеүгә ныҡлабыраҡ тотондо. Күберәк әрһеҙерәк ашлыҡ: арыш, ҡарабойҙай, һоло сәсеү менән мәшғүл булдылар. Уңғаныраҡ һәм хәллерәк хужалыҡтар унар дисәтинәгәсә иген сәсеп, 300 — 400 бот ашлыҡ алалар ине. Ләкин ишле ғаиләгә, мал-тыуарға, төрлө һалым-сығымдарға бүлә башлаһаң, ул уңыш ҡына таҡы-тоҡо булып ҡала. Өҫтәүенә кейем-һалымын, сәй-шәкәрен, бар кәрәк-ярағын һатып алырға кәрәк. Барыһына шул бер иген.

Быларҙы һәр ауылда күргән, күҙәтә йөрөгән Мөхәммәтсәлим старшина шундай һығымтаға килә: «Игенде һалым һәм натураль йөкләмәләрҙе түләү, сәй, шәкәр һәм башҡа шундай кәрәк-яраҡтарҙы алыу өсөн һатырға тура килә. Һуңғыларын бер кешегә еткереү өсөн генә лә йылына 25 һумлап аҡса китә. Тикмәгә генә сәйҙең бөлдөргөс нәмә булыуы хаҡында күптәнән шиғырҙар ижад ителмәгән. Башҡорттарҙы Ҡытай сәйе, араҡы һәм шәкәр ныҡ бөлдөрҙө... Аҙнаһына 10 бот иген һатып, ғаиләгә бер аҙнаға саҡ-саҡ етерлек бер ҡаҙаҡ (фунт) сәй менән дүрт ҡаҙаҡ шәкәр алырға мәжбүр булған халыҡ нисек итеп мантыһын инде. Сәй-шәкәрҙең шул тиклем ҡыйбат булыуы халыҡҡа түгел, сауҙа компанияларына ғына байлыҡ килтерә».

Мөхәммәтсәлим ауылдарҙа йыш йөрөгәндә, баҙар көндәрендә халыҡтың бер булғанда буйтым итеп ҡуйы сәй эскән, шәкәр ауыҙ иткән саҡтарында телсәр ҡатын-ҡыҙҙарҙан сәй бәйеттәрен үҙе ишеткәне булды, мөнәжәттәрен уҡыны.

Был заманда фетнә өсөн
Сыҡты сәй тигән үлән,
Сәнҙе долгка ала-ала
Разорит булып түлән...

Сәй-шәкәренә ҡарағанда араҡыһы бөлдөргөсөрәк ине. Халыҡтың бер ишеһен, һирәк булһа ла, алйыта, миңрәтә башлағайны инде ул шайтан эсемлеге.

Старшиналыҡ иткәндә Мөхәммәтсәлим волостың һәр төбәгенә, уның тәбиғи шарттарына ҡарап, ҡайһы кәсепте үҫтереүгә ныҡ иғтибар бирҙе. Урман-туғайлы Йомран Табын төбәктәрендә малсылыҡ, солоҡсолоҡ ҡулайыраҡ ине.

Ҡырмыҫҡалы, Ҡаран яландарында иген игеү файҙалыраҡ. Ҙурыраҡ ауылдарҙа ниндәйҙер һөнәр мастерскойҙары асырға мөмкин. Малсылыҡтан игенселеккә, һөнәрселеккә яйлап күсеү, уларҙы аралаштырыбыраҡ алып барыу хәйерле. Халыҡтың ҡайһы кәсепкә ҡомарлыраҡ икәнен иҫәпкә алыу ҙа бик мөһим. Шуға күрә Мөхәммәтсәлим ошоларҙың бөтәһен иҫәпкә алып, халыҡтың үҙе менән кәңәшләшеп эш итергә тырышты.

Аҙаҡ был тәжрибә саралары менән уртаҡлашып, шулай яҙҙы: «Ниәтләнгән эш-саралар хаҡында алдан губерна Ведомостарында баҫтырып сығарғанда, волость һәм ауыл сходтарында иғлан иткәндә, файҙалы булыр ине. Юғиһә ғәскәри идаралыҡтар бөтөрөлөр алдынан хәрби түрәләр башҡорттарҙы, иген игеү, баҡса үҫтереү менән шөғөлләнмәүҙә ғәйепләп, кинәттән тән яҙаһына тарттыра башланылар. Башҡорт ғәскәре бөтөрөлгәндән һуң инде ярлы башҡорттарҙың күбеһе, көслө надзор юҡлыҡтан, шулай уҡ тейешле һөнәре булмау сәбәпле, бай ер биләүселәр ҡулына барып ҡаптылар, һәм алып торған аҡсаларын ҡайтарыу маҡсатында һәр ваҡыт шуларға эшләргә, шулар ҡулы аҫтында йәшәргә мәжбүрҙәр. Йәмғиәттәге ғәфү ителгеһеҙ тәртиптәр, урындағы һәм юғарылағы власть башлыҡтарының үҙ хоҡуҡтарын артыҡ файҙаланыуҙары, яуапһыҙ эш-ҡылыҡтары арҡаһында шундай хәлгә ҡалдылар улар».

Был күҙәтеүҙәр һәм фекерҙәр халыҡтың нисек бөлөү сәбәптәрен һәм хоҡуҡһыҙлыҡтарын, ә байҙарҙың ярлыларҙы нисек иҙеүен, власть башлыҡтарының баш-баштаҡлыҡтарын асып биреү һәм тураһын әйтеп нарыҡлауҙары менән ул заман өсөн иң ҡыйыу социаль ҡараш, ҡаты тәнҡит һүҙҙәре ине ул.

Бында автор үҙе лә күреп-ишетеп белгән, заманында күп баш-баштаҡлыҡтар, ахмаҡлыҡтар ҡылған яманатлы попечитель Филатовты күҙ алдында тотоп әйткәндәре лә бар.

Ҡантондар осороноң йәнә бер ҡаһарманы — попечитель Филатов тураһында ғибрәтле һүҙҙәр, яманаттар тороп ҡала. Уны башҡорттар әленән-әле ғәжәпләнеп һөйләйҙәр һаман.

Генерал губернатор А. П. Безал заманындараҡ микән, әҙ генә алдамы, башҡорттарҙы ярым күсмә көнкүрештән фәҡәт ултыраҡлыҡҡа, малсылыҡтан игенселеккә йәһәт кенә күсереп бөтөү өсөн китә бит ашыҡ-бошоҡ саралар. Ғүмер баҡый күнеккән йәйләүҙәрҙе туҙҙыралар, мал-тыуарҙы кәметеп, иген игергә мәжбүр итәләр. Күп халыҡ малынан яҙып, иген, баҡса һөнәренә тиҙ генә күнә алмай бөлөп бөтә, хужалыҡ тарҡала.

Шунда попечитель Филатов уғата бер хиреслек күрһәтә, баш-баштаҡлыҡтың иң баш түрәһенә әйләнә.

Ул ике-өс өйәҙ, волостарға яҡшы тройкаларҙа атлы ҡазаҡтары менән сығып, йәйләүҙәрҙе туҙҙырып, өйөр-өйөр йылҡыларҙы, мал-тыуарҙарҙы һаттырып, иген кәсебен йүнләп белмәгәндәргә иген сәстереп, баҡсалар үҫтерергә мәжбүр итеп йөрөй. Йөрөй генәме, һәр ауыл һайын старостаһын-бүтәнен, тегеһен үтәмәгәнһен, быныһын башламағанһын тип, розгаһын һуҡтырып, яҙаһын биреп ыҙалай. Хатта, ахмаҡлыҡтың аръягына сығып, ҡыш көнө башҡорттарҙан ҡар эсенә бәрәңге күмдереп, уны кире ҡаҙып алдыртып этләй икән. Өйҙәргә килеп инә лә, ҡыш тип, көҙ тип тормай, сыуал булһа, емертеп, ҡарындыҡ тәҙрә икән бүҫеп китә имеш. Халыҡ шуға «Пилат түрә килә, тағы нишләй инде» тип ҡан ҡалтырап тора, күбеһе ҡайҙа булһа ла ҡасып-боҫоп бөтә икән.

Ул ҡылған ғәжәп яман ҡылыҡтарҙы һаман ғәжәпһенеп һөйләйҙәр.

Бер заман «Пилат түрә атлы ҡазаҡтары менән килә» тигән хәбәр ауылдарға йәһәт тарала бит. Ҡантонлыҡ ҡапыл геү итә.

Пилаттың килеүҙәре гөбөрнаторҙан да яман. Пилат көймәлә елә. Мисәүле аттарҙа. Алда ун ике һыбайлы, артта шунса һыбайлы. Көймә йәнәшәһендә биш-алты башҡорт һыбайлы эфисәре. Пилат ҡулында ҡамсы. Шулай хәтәр йөрөй юлда Пилат. Сабыуыллап ауылға килеп инә Пилат.

— Сыуалдарҙы емерегеҙ, голланка һалығыҙ! — тип ҡысҡыра түрә.

— Нимә ул голланка? — тип аптырай ҡарттар.

— Ә, белмәйһегеҙме ни әле, ҡартластар. Күрһәтәйем әләйгәс белмәгәнегеҙҙе, эттәр. Ярырға үҙҙәрен!

Һалдаттары халыҡты, ҡарттарҙы ҡамсылары менән ярырға тотона. Тауыш, сыр-сыу китә.

Шулай ҙур эш ҡылған кешеләй булып, Филат волостнойға төшкө ашҡа төшә. Ашай-эсә, ҡыҙмасаланып ала.

Ҡыҙмаса башы менән тағы ауыл урамына сыға. Күрә: башҡорттар үҙ кейемдәрендә. Әһә, улай икән.

— Ниндәй кейем был?

— Ниндәй тип ни, башҡорт кейеме инде.

— Хәҙер үк ул кейем-һәләнде һалып ташлағыҙ, ана һеҙгә яңы форма.

Ҡараһалар, башҡорттар үҙ күҙҙәренә үҙҙәре ышанмай тора: Филат ҡулында яңы форма: урыҫ кейеме. Оҙон киң суҡлы күлдәк.

— Барығыҙ ҙа тик ошондай ғына бер төрлө кейем тегегеҙ. Бер аҙнанан һуң кире килеп ҡарармын.

— Беҙҙең бисәләр был кейемде килештереп тегә белерҙәр микән?

— Өлөш алғығыҙ килмәһә, белерҙәр... Ә хәҙер бынау тел бисҭәһенә бер ике-өс ҡамсы өлөш сығарығыҙ! Ярырға үҙен!

Волостной, нишләһен, ҡамсы менән тегене һуҡтыра инде түрә алдында.

Йәнә кереп китә Филат волостнойға ашарға, эсмәгә.

Иҫерек көйө йәнә ауыл буйына сыға. Аҡырып, кеше ҡурҡытып, һуҡтырып йөрөй.

— Нисек ҡотолорға был ҡанһыҙ Пилаттан?— Баш вата инде башҡорттар. Уйлап табалар бит бер хәйләһен. Бер ун-ун бишләп урыҫ күлмәген формаһына килтереп тектереп алалар ҙа кейенеп, яһанып торалар инде, бер аҙҙан һуң Филаттың кире килерен көтөп.

Һүҙендә тора түрә — икенсе аҙнаһына йән-фарман сабып килеп тә етә. Яңы форма урыҫ кейемен кейгән, билдәрен быуған башҡорттар ҡаршы алып торалар оло түрәләрен.

— Яңы кейемдәләрме? Яңы кейемдә. Бөтәһе ләме? Бөтәһе лә.

— Алай икән. Ярар. Хәҙер картусын да табығыҙ!

— Уныһы мосолманға килешмәҫ бит.

— Шулаймы ни әле? Бунтмы әллә был? Ярырға үҙҙәрен!

Тағы ҡамсылар ялтылдай башлай. Филат ашарға-эсергә инеп китә.

Икенсе ауылға саба бар өйөрө, ҡазаҡ-башҡорт һыбайлылары менән.

Халыҡ алдан белеп ҡаршы алып тора. Яңы кейемдәр. Яңы форма — яҡшы.

Ары саба. Быларҙа ла яңы форма.

Вот шулай өйрәтермен, урыҫ итермен, тип эсенән ҡыуана инде Филат.

Шулай ҙа үҙенең иҫәр икәнен белмәй шул Филатка. Иҫәр булмаһа, бер үк кейемде әллә нисәмә ауылда кейеп ҡаршылағанды һиҙмәҫ, тоймаҫ булыр инеме ни! Башҡорттар бит Филат үткән ауылда шул кейемде кейеп ҡаршылай ҙа үтеп киткәс тә йәһәт кенә сисеп ташлап, һыбайлы менән күрше ауылға турынан саптыралар бит. Филат барып еткәнгә ҡәҙәр. Бер үк кейем әллә ҡайҙан күренеп тора ла һуң күҙе бар әҙәмгә.

Башҡорттар: «Әй Филатка! Иҫәрҙең иҫәреһең инде, башҡорттоң үҙен төп башына ултыртһа ла тоймаған, тиҙәр. Әй, ул Филатка, — ҡәһәрләйҙәр башҡорттар, — теңкәләргә тейеп бөттө, ул алым аҡсаһын теләнеп, ул ҡатын-ҡыҙ талап итеп, күпме әҙәмде, күпме донъяны боҙҙо, мәлғүн».

Бына шундай ине илленсе йылдарҙың түрә ҡаһармандары.

Быны асыныл, рус яҙыусыһы Ф. Д. Нефедов яҙа. «Таковы башкирские герои сороковых и пятидесятых годов,— ти ул, әлеге Филатты ла һөйләгән очеркында. — К сожалению, трудно, почти невозможно, со всей полноте, со всеми красками и юмором, передать по-русски эти перлы народного эпоса и новейшей башкирской поэзии (журнал «Русские ведомости», 1884 г.).

Филаттар булыр ҙа үтер.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев иген игеүҙә өс сәсеүле баҫыуҙы яҡлай. Заманы өсөн ул прогрессив ысул. Баҡсасылыҡты киңәйтеү яғында. Аҡса емешенән баҡса емеше отошлораҡ.

Старшина үҙе, күрше-тирәләре ихата янында баҡса кәртәләп, түтәлләп ҡыярын, кишерен, һуғанын, бүтән емешләген ултырта башланы. Береһенән-береһе күрмәксе, күршенән күршегә, ауылдан ауылға был шөғөл яйлап таралып китте. Баҡса емеше менән кәсепләшеүселәр табылды. Бәрәңге үҫтереү ғәҙәткә инде.

Ҡыш бауырҙары бик оҙон, ашарға ла, эшләргә лә кәрәк. Был хаҡта ла күп уйлағаны, ғәмәл ҡылғаны булыр старшинаның. «Ҡырыҫ климатлы был крайҙа йылдың дүрт айын ғына файҙалы эш менән үткәрәләр. Ә ҡалған һигеҙен башҡорт нисек етте шулай йәшәй,— ти М. Өмөтбаев «Тәҡдимдәр» яҙмаһында. — Рус мужигы ғүмерен эшһеҙ үткәрмәһен өсөн земстволар, һөнәрселек училищелары һәм файҙалы эш йорттары ойошторалар. Бындай саралар башҡорттарҙың тормош-көнкүрешен яҡшыртыу өсөн дә бик кәрәкле. Айырыуса һуғыу, тегеү, столярлыҡ йорттары төҙөү маҡсатҡа ярашлы».

Тимәк, М. Өмөтбаев башҡорттарҙы төп малсылыҡ, игенселек эштәренән тыш төрлө һөнәрселек эштәренә йәлеп итеү мәсьәләләрен алға ҡуя. Һөнәрселек училищеларында уҡытылыуын теләй. Дөрөҫ, башҡорттарҙың мәғлүм бер өлөшө тире иләү, кейем тегеү, балаҫ һуғыу, һауыт-һаба яһау кеүек традицион кустар һөнәрҙәр менән шөғөлләнә. Күптәр умарта тота, шулар менән алыш-биреш итә. Әлбиттә, бындай һөнәрлеләрҙең донъяһы бөтөн, өҫтәмә кәсеп-шөғөлө бар.

Әммә М. Өмөтбаев һөнәрселек эшен ваҡ кустарсылыҡтан киңерәк майҙанда — промышленность нигеҙенә ҡуйыу яғында. Был йүнәлештә ул ҡай бер эштәр башлап ҡарай. Ул һыу тирмәндәре һалдырыу, арба-сана мастерскойҙары, тимерлектәр булдырыу, ул умартасылыҡты юлға һалыу йәһәтенән булһын.

Йәмғиәт умартасылығы менән бер саҡ мауығып алды ул. Бының үҙенә күрә тарихы ла бар. Әле атаһы кантон булып эшләй башлаған осорҙа, тәғәйене 1839 йылда, Перовскийҙың инициативаһы менән ҡорт заводы ҡороу фекеренә киләләр генерал-губернатор менән кантон начальнигы. Ҡортсолоҡҡа иң яйлы урын итеп, Стәрлетамаҡ өйәҙе Дыуан волосының Күл Төбәге исемле урман-туғайлы ерендә Үрге һәм Түбән Ләкәнде, Үрге һәм Түбән Төкөн, Үтәймулла, Нуғаҙаҡ, Алайғыр, Мөрсәк, Ҡарлыман ауылдары ҡарамағындағы ҙур майҙанды һайлайҙар. Генерал-губернатор башҡорттар араһынан оҫтараҡ умартасыларҙы һайлап алып, Мәскәү, Ҡазан ҡалаларына ошо һөнәр буйынса уҡытырға ебәртә хатта.

Перовский ҡортсолоҡ заводын, умартасылыҡта донъя күләмендә өлгәшкән уңыштарға таянып, ғилем-фән нигеҙенә ҡуйырға ниәтләй. Ағиҙел буйында ҡорт заводын ҡороуҙы, башҡорт балының шөһрәтен бөтә донъяға таратыуҙы Николай батша ғәли йәнәптәре үҙе үтенгән имеш, ти. Шуға эшкә ҙурҙан ҡубып тотонғандар ҙа. Күрше Лоҡман Ибраһимов кантон Күлләр ауылы Искәндәр Күрпәсов старшина менән Сәтләүек урманы исемле йүкәлекте нығыраҡ оҡшатҡандар. Шунда өс йөҙ баш түмәр умарта алып ултыртҡандар былар. Циолковский генерал былар янына йәнә таҡта умарталар яһатып, йәш күстәр яптырған. Таҡта умарталарҙы, ғилем ҡушҡанса, өс бүлемләп эшләткән. Бал ҡорто бер бүлемен бал менән тултырһа, икенсеһенә, унан өсөнсөһөнә күсергә тейеш икән.

Умарталарҙы ҡышҡыһын аҫрар өсөн имән ағасынан ике ҡатлы стеналы итеп омшанниктар яһағандар. Ләкин тәүге ҡышты уҡ теге таҡта умарталағы ҡорттар һыуыҡтан һәләк булған. Ҡәҙимге түмәр умарталар ғына бер нигә лә бирешмәгән.

Уҡып ҡайтҡан умартасыларҙа инде китап ғилеме лә булған. Улар әреһен — эрегә, ҡорт инәһен үҙен башҡа айырып, әллә ниндәй американ, кавказ бал ҡорттары менән аталандырып, ҡорт туйҙарын үҙҙәренсә итмәксе булып ҡарағандар. Инәләрен үҙебеҙ яһатабыҙ, әреләрен үҙебеҙ ҡуштырабыҙ, тип маҡтанышып та йөрөгән тиҙәр үҙҙәрен. Ләкин әллә ни сығара алмағандар буғай. Башҡорт ҡорто башҡорт ҡорто булып ҡалған.

Киммәт хаҡҡа төшөрөп йәнә ҡорт һарайҙары һалғандар. Силәбе, Троицк, Бәләбәй, Минзәлә өйәҙҙәренән яңы умарталар, умарта оҫталарын килтерткәндәр. Шулай ғәләмәт дәү ҡорт заводы хасил булған.

Тик ул завод, нишләптер, әллә ни мантый алмаған. Бәғзе бер оҫталары бал ҡойоп эсеүгә һалышҡан, майор

Миһран Ибраһимов тигән бер кешеһе урлап умартаһын һата башлаған, яңы күстәрҙән үҫнә, ҡуштандарына, ишемгә ҡушым итеп, умарталыҡтар балалатҡан. Йәйгелеген губернаторы, өйәҙ башлығы, кантон начальниктары килеп, ҡымыҙын, балын эсеп, типтереп ятыр булған. Шулай әллә ни ырай алмаған ҡорт заводын һуңғараҡ Ишмөхәммәт Өмөтбаев кантон ҡарамағына тапшырып ҡуйғандар. Ул да заводты дөрләтеп ебәрә алмаған. Аҙаҡтан был эш һүнеп ҡуйған.

Шуны Мөхәммәтсәлим кире тергеҙергә тырышып ҡарай. Шул Сәтләүек урманында ике волость бер булып йәмәғәт умартасылығы асалар. Унан күпмелер килем-файҙа алалар. Уны волость кәрәк-ярағына тотоналар. Урман-туғайлы ауылдарҙа умартасылыҡ кәсебен астыралар. Ағиҙел буйы балы Өфө, Ырымбур баҙарҙарында яҡшы сифатында юғары хаҡҡа йөрөй.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев старшинаның ун биш йыллап эшләүе дәүерендә волость, йәмәғәт мәнфәғәте, халыҡтың көнкүреше, кәсебе тип тырышлыҡтарын, хәстәрҙәрен әлегәсә мәғлүм ҡәҙәрен һанай-яҙа киткәндә үҙе бер ҙур йылъяҙма булыр ине.

## 6

Яуынлы 1867 йылдың йәйендә улдары Баязит донъяға килде. Йәш ғаиләгә ул яңы йәм килтерҙе, аҙаҡ берҙән-бер таянысҡа, вәрискә әйләнер ул. Алыҫ юлдарҙан, мәшәҡәтле эштәренән арманһыҙ булып йонсоп ҡайтҡанда шул сабыйы, илгәҙәк бисәһе бар арыуҙарын, ҡайғы-һағыштарын һыпырып алғандай итте. Шундай наҙ булмаһа, ир-ат күңелдәре ташҡа әйләнер ине моғайын.

Ер-һыу кибеп, тәбиғәт йәмләнә башлау менән Өмөтбаевтар ғаиләләре, мал-тыуарҙары менән йәйләүгә күсер булды. Ҙур ихаталарының бәпкә үләндәрендә аунап, Ҡыҙылғы һыуҙарында ҡойоноп, хозур ҡырҙарын ҡыҙырып үҫте улдары Баязит. Бибиғәбиҙәһе лә иренең тыуған төйәгенә ҡайтһа, ҡымыҙын эсеп, йылы һыумал һөтөн, майын, балын ауыҙ итеп, йәнә сибәрләнеп, йомроланып китә торғайны. Йәйҙең йәмле саҡтарында йәйләүгә Мөхәммәтсәлимде ер-һыу йылыһы, бисәһенең ҡайнар ҡуйыны йышыраҡ тартты. Ғаилә күркен, һөйгәне наҙын, илерткес мәлдәрен нығыраҡ татыны.

Ил-йорт тормошо ни тиклем ауыр, михнәтле булмаһын, донъя — донъя инде. Уның күңелле миҙгелдәре, байрамдары ла булғылай. Дәртләнеп эшләгән ҡыҙыу ураҡ саҡтары, өмәләп бесәндәр сапҡан, кәбәндәр ҡойған миҙ-

гелдәр үҙҙәре гснә ни тора. Ир-аттың ҡәре, дәрттәре ташып тормалы. Халыҡ әйткәнсә, йәйге айҙа гаилә башлыҡтары, ирҙәр арыҫландай етеҙ һәм сапсан булырға, баштарына төшкән бөтә хужалыҡ эштәрен атҡарып сығырға тейештәр.

Әйткәндәй, халыҡ араһында йөрөгәндә Мөхәммәтсәлим уның үҙенә бағыр, һәр һүҙенә ҡолаҡ һалыр булып китте. Аһ-зар ғынамы, өмөт-ниәттәр, аҡыл-тәжрибәләр ята халыҡ һүҙендә. Күпме һынамыштар үҙендә. Май айы — һабан айы, ти. Һабанда һайрашмаһаң, ырҙында ыңғырашырһың, тип иҫкәртә.

Яҙын ҡайын түбәндән япраҡ яра башлаһа, — иртә сәселгән, остан башлаһа, һуң сәселгән һабанашлыҡ уңыр, ә инде ул дәррәү япраҡ ярһа, иген мул булыр, тип юрай.

Йәйгелектә уның үҙ күҙәтеше: ашлыҡ бешкән төнөн һалҡынса һәм ысыҡлы булһа, сибек булырына ишара. Йәйен үләндәрҙә, игендә әрәшә балы күп булһа, ем тулышыуға ҡамасау.

Былар бит игенсе кешенең һынамыштары, оҙаҡ күҙәтемдәре.

Апрель йылы булһа, май елле килә. Сәүкәләр ер бауырлап осһа, — тиҙ үтемле һалҡын ямғырға, бейектә осһа,— аяҙға һәм эҫегә. Ай кәртәләнһә, айлыҡ ризыҡ әҙерлә, көн кәртәләнһә, көрәгеңде тот. Бындай һыналмыштарға ҡолаҡ һалып ҡына ҡалманы Мөхәммәтсәлим, зиһененә һалып ҡуйҙы, иркен сағында аҡҡа төшөрҙө.

Тәбиғәт күренештәрен дә ул ара-тирә ҡағыҙға яҙғылап барырға ғәҙәтләнеп китте. Бына һаҡланып ҡалған бер ҡулъяҙма китабы тышлығындағы мәғлүмәттәре: «1871 йыл Ағиҙел боҙо апрель башында, 4-се көнөнә бөттө. Мин 27 май ишәйгән кәмә илән боҙаулы һыйыр сығарҙым. Шул яҙ Фәхретдин Өмөтбаев хаждан ҡайтты». «1872 йыл апрелдең 7 көнөндә күктә салауат күпере бар ине. Йылы ҡояш сығышында 2-се көнөндә күк күкрәне. Ағиҙел боҙо 4-се көндә китте. Икенсе көнө бөттө».

«1875 йыл ошондай яҙ фасылы булып, апрель баштарында боҙ аҡты. Мәгәр рашҡы булып йылҡы 10-сы числоларҙа ҡалды».

Көн һынамаҡ бер бурыс, ир һынамаҡ өс бурыс, ти. Ир-егеттең ҡулдары ғына түгел, кәрәк сағында телдәре лә уйнай. Әйтәһен телеп һала. Иҙел кисмәй, ил булмай, донъя күрмәй, ир булмай, ти ул. Байҙар араһында маҡтанма, ярлылар араһында маһайма, ти ул тыныс ҡына. Ят ярлыҡамаҫ, үҙендеке үлтермәҫ, ти мәғәнәле генә итеп. Насарҙан башҡа яҡшыһы булмаҫ, иҫкенән башҡа яңыһы булмаҫ. Һөнәрһеҙ һине күрә алмаҫ, үҙе мәғәнә бирә ал-

маç, тип ҡуя. Яҡшы аға йорт көтһә, йорт кәрәген үтенер, яман аға йорт көтһә, ерен һатып бөтөрөр, ситтәр ерендә алһа, ағасын төпләп бөтөрөр, тип, булып ятҡан ил-йорт хәлдәрен дә йөрәккә үткәрерлек итеп әйтә.

Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтер. Мөхәммәтсәлим халыҡтың үҙенән дә, хаҡ һүҙенән дә аҡыл йыя. Шуларҙан ҡәләм осона ала барғандарын аҙаҡ мәглүм бер тәртипкә һалып, туған халҡының һынамыштарын һәм тапҡыр һүҙҙәрен бүтән халыҡтар ҙа белһен өсөн рус теленә тәржемә итеп, Өфөлә ил өйрәнеүсе белгестәргә тапшыра. Һуңыраҡ улар, 1883 йылда «Справочная книга Уфимской губернии» тигән белешмә китапта «Приметы, поверья, поговорки и изречения магометян Уфимской губернии» исемендә ташҡа баҫылып сыға. Был — Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың тәүге баҫма эштәренең береһе.

Халыҡтың уй-хисе, күңел күрке — уның йырҙарында һәм моңдарында. Йыр ул күңеллегә ҡыуаныс, күңелһеҙгә йыуаныс икәнен Мөхәммәтсәлим эштә, юлда ишеткән йырҙарынан, мәжлестәрҙә, байрамдарҙа тыңлаған моңдарынан белә. Уның күпме аһ-зарлы оҙон йырҙарын тыңлап йөрәктәре телгеләнмәне лә, шатлыҡлы, өмөтлө йыртаҡмаҡтарҙан нисек кинәнмәне, йыуанманы икән. Үҙе оҙон юлдарҙа һағышлы көйҙәрҙе көйләп, табындарҙа хуш килгәндәрен йырлап ебәрмәгәнме ни. Оҫта йырсыларҙан ул ниндәй шәптәрен ишетте, күпме моң-һағыштарға батты. Үҙе йырлап күпме һағыштарын баҫты.

Аҙаҡ ошолар хаҡында йыйып ҡыҫҡа ғына итеп теркәп ҡуя ул бер яҙмаһында. Мәҫәлән «1812 йылғы һуғыш тураһындағы хикәйәттәр, риүәйәттәр, легендалар һәм йыркөйҙәр башҡорттарҙа бик күп,— ти ул.— Йыр-көйҙәрҙең күбеһе ғәҙәттә ҡурайҙа башҡарыла. Мәҫәлән, генералдар Бахмутов менән Марковты, барон Розенды, кенәз Кутузовты һәм башҡаларҙы данлаған йырҙар шундайҙарҙан. Хәрби губернаторҙар Перовскийға, Волконскийға, Сухтелинға, Эссенға, ғәскәр командующийҙары Циолковскийға, Жуковскийға, Балкашинға һәм, типтәр һәм башҡа припущенниктарҙы ҡушып, 28 кантон барлыҡҡа килгәнсә булған, 12 кантон башлыҡтарына арналған йырҙар ҙа ҡурайҙа уйнала. Был йырҙар йылдан-йыл онотола бара».

Ана Мөхәммәтсәлим үҙе күпме йырҙар тыңлаған. Уларҙың күбеһе хәҙер онотолоп бөткән. Перовскийға, Кутузовҡа, Циолковскийға, кантондарға бағышланған йырҙар ғына бөгөнгәсә килеп еткән. Бүтәндәре эйәләре менән бергә онотолған, күрәһең. М. Өмөтбаев 25 йыл армияла хеҙмәт итеп, ҡартайып, һаҡал үҫтереп иленә ҡайтҡан баш-

ҡорт һалдатының яҙмышҡынаһы тураһындағы бер йырҙы хәтерендә нык һаҡлай. Ул йыр әле лә йөрөй.

Халыҡтың ир-егеттәре, ил батырҙары ҡыҙыҡһындыра Мөхәммәтсәлимде. Булғандары менән күрешә, горурлана, киткәндәре менән һөйләгәндәр — хикәйәттәр, легендалар аша таныша йөрөй.

Бына бер саҡ эш менән Үтәгән ауылына барғанда ошо төбәктең батыры, 1812 йылғы Ватан һуғышы ҡаһарманы Абдрахман Аҡъегет тураһында һөйләгәндәрҙе тыңлай. «Абдрахман батыр хаҡында шул төбәктең башҡорттары бик ҡыҙыҡлы легендалар һөйләйҙәр, — ти ул.— Уның улы Мырҙаҡай миңә 1814 йылдың апрелендә төрлө крепостарҙың комендантары тарафынан француз телендә яҙылған өс яҙыу тапшырҙы. Уларҙа Абдрахман сотник булараҡ телгә алына... Һуғыштан һуң ул оҙаҡ йәшәмәгән. Офицер чины һәм формаһы, ордендар һәм уларҙы раҫлаусы тамғалар уға бары вафат булғас килгән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был танытманы уның балалары үҙ-ара киҫәктәргә бүлешеп алғандар. Бер киҫәге үрҙә телгә алынған француз яҙмалары менән миндә һаҡлана». Ошо мәғлүмәттәрҙән тыш Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев Абдрахман Аҡъегет тураһындағы хикәйәттең үҙен дә яҙып алған һәм Өфө тарихына ҡағылышлы бер тарихи яҙмаһында файҙаланған.

Шуны билдәләп үтке килә: М. Өмөтбаев яҙып алған хикәйәт менән, шунан һуң йөҙ йылға яҡын ваҡыт үткәс, мин үҙем тыуған Үтәгән ауылында Исмәғил Байымов бабай һөйләгән легенда араһында ҙур айырма юҡ,— Абдрахман хаҡындағы хикәйәт заман манерына ҡоролоп легендаға әйләнгән, ҡаһарманлаштырыу көсәйтелгән.

Әйткәндәй, минең ҡарт әсәйем Шәрғиә үҙе әле яңы килен булып төшкән саҡтарында М. Өмөтбаевтың Үтәгәнгә килеп йөрөгәндәрен хәтерләй торғайны: «Мөхәммәтсәлим хәҙрәт тройкаларҙа килеп төшөр ине. Ҡарттар унан ер-һыу хаҡында шикәйәт ҡағыҙҙары яҙҙырып алғандар икән тип һөйләйҙәр ине».

Урта Ағиҙел буйы төбәктәренең ҡайбер легендалары (мәҫәлән, «Ҡанлыгүл», «Серлегүл») шул юл йөрөм саҡтарында яҙылып, Мөхәммәтсәлим тарафынан тарихҡа теркәлеп ҡалғандар.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевҡа башҡорттарҙың боронғо ҡобайырҙарын ишетеү һәм айырым өлгөләрен яҙып алыу бәхете тейгән. Ул йәшәгән йылдарҙа инде был эпос жанры традицияларының ялан башҡорттарында һүнеп барған осоро булған. Әммә Өмөтбаев уның осона булһа ла эләгеп ҡала. Ҡобайырҙарҙы ул өләндәр тип исемләй. Күрәһең, был төбәктәрҙә шулай аталған. Былай аңлата ул быны:

«Башҡорттарҙың боронғо йыры өләң тип атала. Өләң — ул хикәйәт, йәғни эпос... Бөтә башҡорт батырҙары өләңдәрҙә йырлана: мәҫәлән, Мораҙым, Заятүләк, Сура батыр һәм дары еҫен аҙ еҫкәгән бүтән күп кенә батырҙар. Өләң йәки башҡорт эпосы осоро иһә, башҡа европалыларҙағы кеүек үк, батырҙар дәүере менән тамамлана».

Фольклорҙа поэтик эпостың билдәле бер тарихи осорҙа нығыныуын һәм аҙаҡ һүнеп ҡалыуын бик дөрөҫ билдәләгән.

Волоста эшләгәндә бер аҡһаҡалдан «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының хәтерендә ҡалған бер өҙөгөн генә яҙып алған ул. Бабаһының Мораҙым менән әйтешкән иҫтәлекле өлөшө.

Бабаһының әйткәне:
...Биләнсек башы биш тирәк,
Билге ҡуйҙың, Мораҙым,
Биш бейәгә бер ҡолон
Һин теләнең, Мораҙым.
Ҡаҙ ғына ҡунмаҫ ҡорағас,
Ҡаҙ ҡундырҙың, Мораҙым,
Әҙәм етмәҫ ҡола сүл,
Ил ҡундырҙың, Мораҙым.
Ҡара һыуға ҡан ҡойҙоң,
Һыуҙы ҡайҙан эсерһең?
Ҡара аргымаҡ ҡатырҙың,
Атты ҡайҙан менерһең?
Ҡара ыласын ҡуйырттың
Ҡошто ҡайҙан сөйөрһөң?
Кәниҙәктәр ыйиыттың
Нөкөр ҡайҙан ҡосорһоң?..

Мораҙымдың яуабы:

Биләнсек башы биш тирәк,
Билге ҡуйһам — йорт өсөн,
Биш бейәгә бер ҡолон
Мин теләнем һөт өсөн.
Ҡаҙ ғына ҡунмаҫ ҡарағас,
Ҡаҙ ҡундырҙым ит өсөн,
Әҙәм етмәҫ ҡола сүл,
Ил ҡыҙырҙым йорт өсөн.
Ҡара һыуға ҡан ҡойһам,
Һыу тоноғон эсермен,
Ҡара арғымаҡ ҡатырһам,
Толпар һайлап менермен.

Ҡара ыласын ҡуйытһам
Шонҡар һайлап сөйөрмөн.
Кәнизәктәр рәнйетһәм,
Нөкөр һайлап ҡосормон...

Шуныһы характерлы: боронғонан килгән «ҡуйытыу» һүҙенә М. Өмөтбаев бик белеп аңлатма бирә: «Ҡуйытыу— ҡатырыу йәки һөнәрен онотторо у. Ыласынды оҙағыраҡ сөймәйенсә аҫраһаң, һауала ҡош тибеүен һәм әйләнеп килеп ҡулға ҡуныуын онота башлай. Хужаһы ас аҫраһа, ыласындың ҡанаттары һәм ҡойрого һалынып, йүне бөтә башлай. Ул ваҡытта, ыласындың ҡанаттары быулыҡҡан, тиҙәр». Тимәк, Мөхәммәтсәлим һунар ҡоштарын өйрәтеү, аҫрау һәм һунар итеү тәртиптәрен яҡшы белгән.

«Боронғо башҡорттарҙың өләндәре «Иҙеүкәй менән Мораҙым» яҙмаһын М. Өмөтбаев алда әйткән бүтән фольклор күсермәләре менән бергә 1876 йылда Өфө Статистика комитеты секретары, «Уфимские губернские ведомости» газетаһының рәсми булмаған бүлеге редакторы Н. А. Гурвичҡа, ә 1880 йылда Рус география йәмғиәтенә ебәргән. Ул ете йылдан һуң ғына «Справочная книжка Уфимской губернии» китабында донъя күргән.

Ошо волоста эшләгән йылдарында, эш араларында ваҡыт тапҡылап, башҡорт тарихы, тәуарих китаптары менән мауыға башлай. Боронғоно белгән ҡарттарҙан ырыу тарихтарын һораша, шәжәрәләрен яҙып ала. Хисаметдин Мөслимиҙең «Тәуарихи Болғария» китабы ҡулъяҙмаһын ҡулына төшөрә. Тарихтан әле тегеһен, әле быныһын төпсөнә. Шуның әлегә иң тәүге күнекмәһе булып, «Башҡорттар» тигән бер тарихи очерыгы барлыҡҡа килә. Был эшен дә ул фольклор яҙмалары менән бергә, 1876 йылда Өфөлә Н. А. Гурвич ҡарамағына тапшыра.

Шулай итеп, ауылда, халыҡсан ерлектә, тынғыһыҙ эш, старшиналыҡ вазифаһы шарттарында Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың ғилми-тикшеренеү хеҙмәттәренең тәүге көр ҡыяҡтары шытып сыға, беренсе сәскә бөрөләре беленә.

## 7

Әй, йәйләүҙең хозур мәлдәре!...

Йәндәренде йәннәттә тип тойорһоң, йәйҙең йәмдәренә иҫең китеп. Ул күпереп ап-аҡ сәскә атҡан муйылдары, ул йәйҙең тәүге наҙлы гөлдәре иҫерткес хуш-еҫтәрен бөркә, ул һандуғастары күңелдәрҙе өҙҙөрөп һайрай, янда ғына кәкүге саҡыра. Аҡланында көрәйеп алған тай-тулаҡ уйнаҡлай. Бал ҡорттары, иңкештәре, һағыҙаҡтары гөж килә.

Ҡүлдәрендә сабаҡтары ҡарпый, аҡсарлаҡтар кәйелеп уйнай. Талғын елгә урманы шаулай.

Бейә бәйләгән, һаумал ҡымыҙ бешкән ҡыҙ-ҡырҡыны, хур ҡыҙҙарындай, күҙҙәрҙе ҡыҙҙырып, йомшаҡ баҫып, билһын мыймылдатып йөрөп ята. Бер өҙҙөрөп ҡараузары һуштарынды алмалы. Бындай мәлдәрҙә йөрәктәр ҡайнарлығын, хистәр ташҡынын ни менән баҫырһың икән...

Күңелгә үҙенән-үҙе шиғыр килә.

Бында ерҙең ниғмәттәре,
Хуш еҫле шиңмәҫ гөлдәре,
Тынғы белмәҫ урман шауы,
Алтындай көн вә төндәре.
Йөрәк, гүйә, ҡайнар тормош,
Тойғолар ҙа изге нурҙай,
Аулай күңелде алйытып,
Йәп-йәш кенә ҡыҙы хурҙай...

Йәйләүҙә шундай мәлдә тыуғандыр Мөхәммәтсәлимдең был шиғыры.

Һирәгерәк тейә шул хәҙер уға йәйләүҙәрҙә йәйрәп йәшәүҙәр.

Бында ла ул барыбер ниҙер менән мәшғүл. Ул хужалыҡ эштәре менән, ул әсәләре, апа-һеңлеләре хәстәре менән. Ғаилә менән булырға кәрәк. Ана Баязиты теремек булып үҫеп килә.

Мөхәммәтсәлимдең бер хиреәе — солоҡсолоҡ. Йәйләүгә сыҡҡас бер нисә солоғон үҙе ҡарап бөтмәй түҙеме юҡ. Биленә кирәмен бәйләп ала ла бейек йыуан тирәккә йәбешеп менеп тә китә. Солоҡ эсен самалап барлай, ҡорт тауышына — тигеҙ гөжләйме, ярһымағанмы — ҡолаҡ һала. Бейектән тирә-яҡты кинәнеп байҡап ала. И, урман, тирәк, бейеклек йәмкәйҙәре!..

Күңелендә йәнә нисек шиғыр яралмаһын инде.

Бейек тирәк башында юнар ағас
Йә имән, ҡарама, уҫаҡ, йүкә ағас,
Тейендәр шөбһәһеҙ миҫле йөрөштә,
Тейер маҡсаты ихласлы һәр эштә.
Билемә кирәм ихласын ал әле,
Иҫән булһа, балаларың бар әле.
Бейек булһа — бейек тирәк башылыр,
Балын тапһа — баланың күҙ йәшелер.
Насип булһа, улар үҫеп етерҙәр,
Атаһының ерен биләп күтөрҙәр.
Ҡара урман эсе тулы ҡарағас,
Шөкөр итер, күренһә ҡорт, балағас.

Балдай татлы шиғриәте, шиме бар был шиғырҙың. Солоҡ ҡына түгел, бал ағасы ти ул тирәген. Балы, гүйә, баланың күҙ йәшелер. Балы-ние, биләме, балағасы балаларҙың киләсәгелер. Бейек тирәк бейеклеккә баһалыр... Шиғыр үҙе тигеҙ гөжләп торғандай.

Тәбиғәт донъяһы гел генә йылы, яҡты, сыуаҡ булып торматан кеүек, кеше күңелен дә йыш ҡына һағыштар ҙа сорнай, ҡараңғылыҡ, һалҡынлыҡ баҫҡылай. Әҙәм был донъянан бер китәһен уйлап, ғәмгә сума, аллаға һығына, илаһи уй-хыялдарға бирелә башлай. Шуға көйләнгән шиғырҙар ҙа тыуа унда. Мөхәммәтсәлимдең, шул уҡ йәйләү шарттарында, 1877 йылдың беренсе июнендә яҙылған бер шиғыры ошондай ҡаршылыҡлы болоҡһоу уй-хистәр менән тулы.

Әлһи ике донъяла хәбибтең,
Дауа унда ҡаму дәрде табибтың.
Ерем, шәһәрем, фида булһын һәм илем
Ата-анам фиҙалыр бән ғәриптең.
Баҫып ғәфләт, йыраҡ ҡалдыҡ ирәндәр,
Халәһен эстәмәҫме ир тигәндәр.
Үҙебеҙ күрмәһәк хәстәрен туғандар
Кеше өсөн ҡайғырыу аҙҙыр тигәндәр.
Күңел биләйелдер, дәүаран һүрелмәҫ,
Был гөлдөң ғәнжәһе асылмайынса.
Бәнем күңелем был гөлдәй ғәнжә булмаҫ
Йөрәк ҡаным һыҙылып тынмайынса.
Әгәр йөҙ мең баһәр күрһәм дә төңөлмәҫ,
Был ғомандың кенәрен күрмәйенсә.

Авторҙың ике донъя хаҡында борсолоуы, нимәгәлер ынтылыуы сағыла. Ул ғәмһеҙлек, ғәфләт йоҡоһонан уянырға, үҙең, киләсәгең хаҡында хәстәрләргә саҡыра. Донъялыҡта тынысланып ҡалмаһа икән әҙәм:

Һай, әмин булма, саҡын дошмандарым юҡ, тимә, кем,
Һиңә дошман — мал, нәфсе, ғәүрәт вә уғлан етер,
Ни ҡәдәр күп еткерерһең — нәфсем һис туйҙым тимәҫ,
Хәрсә лә мәлк ғәжәм нә Һиндостан етер.

Ошо уҡ дәфтәренә яҙып ҡуйған икенсе бер парсаһында былай ти:

---

*хәбиб* — һөйөклө, дуҫ; *табиб* — врач; *ирән* — ир кеше; *халә* — ҡотолоу хәлен; *биләйел* — төн түгел; *дәүаран* — хәрәкәт; *ғәнжә* — бөрө; *баһәр* — яҙ; *ғоман* — томана, наҙан; *кенәр* — сик.

Әгәр эсһәң ямандың шарабын,
Ҡуярһың бер юлы донъя харабын,
Хәтерҙәр күп үҙемдән, әй, ғәрип баш,
Күҙем, күңелем боҙолмай сыҡманы йәш.

*Мөхәммәтсәлим. 1873, 15 февралдә.*

Бындай шиғри яҙмаларҙа уйҙар драматизмы ла, хистәр ҡаршылығы ла бар.

Автор кәйефе күтәренке саҡта, шатлыҡ хистәре ташып торғанда яҡты буяулы, оптимистик рухлы шиғырҙарын яҙһа, ә инде ниндәйҙер уйҙарға, борсолоуҙарға бирелгәндә, тәбиғи, драматик тон, болоҡһоу тойғолар алға сыға. Былар уның шиғриәтендәге ике традицияны билдәләмәксе.

Бына сәсмә һәм теҙмә өлөштәрҙән торған «Дуҫыма» тигән бер әҫәре. Уны остазы Мирсалих Биксуринға арналған әҫәр тип баһаларға кәрәк. М. Өмөтбаевтың 1876 йылдың 3 мартында остазына яҙған хатында уның сәсмә өлөшө урын алған. «Йәдкәр» китабында иһә ошо өлөштө «Дуҫҡа» шиғырына инеш рәүешлерәк килтереп ҡуйған.

«Эй, ғәзиз дуҫым, беҙҙең ғүмерҙең эсендә йәшлектән тупраҡҡаса күңелдәрҙә мөхәббәтле вә тәхҡиҡ дөрөҫ вә ғәйәт тә хуш юлдашыбыҙ дуҫлыҡ икән... Дуҫлыҡтың сәскәһе менән беҙ бала ваҡытта уйнаныҡ, егетлек дәүеренең ҫәмәрәһен уның менән бүлештек, ирлек һиммәтендә изге ниәттәрҙе уға фиҙа ҡылдыҡ. Күңелдәребеҙҙәге күркәм тәжрибәләр, изге фекерҙәр булары серҙәр ләззәттәре менән барыһы ла дуҫлыҡҡа ҡорбан булды. Инде үткән занғ ғүмер дәриғ булып, һөнәр вә фирағәттәр кире дүнеп, истиҡәмәттә истирахәт булып, егет вә шәп юлдаштарҙан ҡалынһа ла, күңелдәрҙә ғишыҡ уты һүнһә лә, дуҫлыҡ һаман һүнмәҫ имеш. Афарин ундай күңелгә! Йәнә бер мәлде ҡупшылығыбыҙҙан туйып диңгир йөрәгебеҙгә ғазап һалһа, хатта өмөттәребеҙ өҙөлөп, бәхеттәребеҙ ҡартайһа ла, дуҫлығыбыҙ һаман үҙенең хозурындалыр. Был дуҫлыҡ ҡына аҙыраҡ йылмайыу итеп, бер илата, ҡайғынан йыуата. Дуҫлыҡ, йыуата дуҫтар! Шуның өсөн донъяла дуҫлыҡ ҡына йөрәктә ята!»

Дуҫлыҡҡа мәдех был. Остаз менән шәкертенең дуҫлығына ғына түгел, илаһи бер мәдех ул.

Теҙмә өлөшө күпкә асыҡ төбәлешлерәк.

---

*ҫәмәрә* — емеш; *занғ ғүмер дәриғ булып... фирағәттәр кире дүнеү* — бушҡа уҙған ғүмер үкенесле булып, эштәрҙең асылына төшөнөү, кәмей төшөү; *истиҡәмәт тә истирахәт булыу* — туры тоғро юлда ял булыу.

Килде беҙгә айырылыу көндәре, әй, дуҫҡайым,
Бер аҙ шулай һөйләшеп ҡалмаҡ кәрәк.
Дуҫ дуҫына саҡ ҡошондай һағынғанда,
Мөхиб күреп, хаттар яҙып тормаҡ кәрәк.
Хизап өрөп, бағтарҙы көйҙөрҙө һижран уты
Бәрәкалла, сабыр ҡылдың, дуҫтар шулай булмаҡ кәрәк.
Яҙ көнөндә эҫе тип, йөрәккә һалма боҙҙар,
Йәйҙең булыр ҡышы ла, түҙерһең, нитмәк кәрәк.
Ҡайҙа китте әйткән һүҙ, көлгән йөҙҙәр,
Илай-илай яд иткәндә, дуҫҡайым, түҙмәк кәрәк.
Аһ, ҡатылыр алдыбыҙҙа һижаран көнө,
Был вафаһыҙ донъянан бер китмәк кәрәк.
Дуҫыңдандыр ошо сәләм белгел, дуҫым
Дуҫтар дуҫтың сәләмен хуш күрмәк кәрәк.

Былдай шиғри юлдар инде, теге алдағылары кеүек үк, тормоштоң эсеһен-сөсөһөн күргән, ысын дуҫлыҡ ҡәҙерен белгән кешенең ышаныслы ҡулдары менән яҙылған. Фекерҙәре етди, образдары һәлмәк, поэтикаһы баҙыҡ. Ул әл-фираҡ — айырылышыу шиғырҙарының традицияһын матур дауам итә, уға үҙ йөрәк утын — һижран утын өҫтәй.

1877—1878 йылдарҙа Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев этнографик характерҙағы бер шиғри әҫәрен яҙған. Ул «Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының оҙатылыуы» тип атала. Күрәһең, ул быны үҙе заманында кейәү егете булғанда, аҙаҡ башҡорт, татар никах туйҙарында йыш ҡына ҡатнашҡан һәм күргән тәжрибәләренән сығып ижад иткән. Уның боронғораҡ йолалары ҡыҙыҡһындырған. Шуларҙың береһен — кейәүгә сығаһы ҡыҙҙың ҡыҙ таҡыяһын һалып, ҡатын булыр тубый ҡашмау кейер тамашаһын сиртекләберәк тасуирлай. «Һаҡал, таҡыя кейер — йәш ҡыҙ балалыр, тубый ҡашмау кейгән — ҡатын булалыр» тип аңлата ул был тамашаның символик мәғәнәһен. Килен булып төшәһе ҡыҙҙы кейәүҙән йәшереү, сәхрәгә алып сығыу, таҡыяға тартыш, ҡыҙға теләк әйтеп, сеңләп оҙатыу тамашаларын да матур итеп тасуирлап үтә автор. Үҙе кейәү егете сағында тәү ҡауышыу йортона инеү хәлдәрен дә иҫенә төшөргәндер, бәлки. Йоланың иң ирмәк мәле был. Еңгәләр кейәүҙән йыртыш хаҡын йолҡоп ҡалырға тырыша. «Ишек бауы бер тәңкә, йыртыш хаҡы биш тәңкә, ҡыҙыбыҙ тора мең тәңкә» тип һамаҡлап тора улары. Саялары: «Ҡарама, кейәү, киммәткә, хәҙер керетәм йәннәткә, хур ҡыҙын тапшырҙым иһә, ирешерһең дәүләткә»,— тип үк сбәрә.

---

*фираҡ* — айырылыу; *мөхиб* — һөйөүсе, яратыусы; *хизап* — ауыр ҡайғы; *һижран* — айырылышыу.

Бына шулай көс-дәрт ташып торған егермс йыллап ғүмеренең иң мәшәҡәтле старшиналыҡ дәүерендә Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, хәҙер донъяның аҡтан ҡараһын, яҡшыһын һәм яманын, михнәтен һәм рәхәтен үҙ тәжрибәһе менән айыра барған өлкән кеше, форсаты тейгәндә ҡәләмгә лә тотона, үҙ уй-тойғоларын, донъяга ҡараштарын шиғри юлдарға күсергеләй башлай. Донъяның үҙе шикелле, шатлыҡлы һәм һағышлы, ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы ла ул поэтик теҙмәләр. Әммә уларҙа етди уй-фекерҙәр орлоғо ятыуын, зирәк күҙәтеүҙәрҙе күрергә мөмкин.

Ерлекле поэтик шытым емешһеҙ булмаç.

## 8

Өмөтбаевтар — ергә ереккән затлы нәçел. Улар һаман волость, өйәҙ тирәһендә түрә кешеләр. Өс бер туғандарҙың өлкәне Фәхретдин Өмөтбаев — Өфө өйәҙенең абруйлы аҡһаҡалы, өйәҙ гласныйы, хажи хәҙрәт. Уртансылары — Мөхәммәтсәлим волость старшинаһы, һайланған йәмәғәт вәкиле — уполномоченный. Ҡесеҙәре Сөләймән — ауыл старостаһы.

Ағаһы, энеһе хаҡында Өмөтбаев назымында әйткәне бар:

Олуғ зәнедин Фәхретдин,
Ата дәүләтендә хупдин,
Насип алмыш күп эшләрдин
Эше яҡшы булыр йортдин.
Икенсеһе Сөләймәндер,
Уның фәһеме дәхи бардыр,
Былар өсәү брадардыр
Заман эшен күрәләрдер.

Аталарының бер туған ағаһының улы, йәғни бабалары Ишназар Өмөтбаев Ибраһимда утыҙ йыллап инде указлы имам хатип, мөҙәрис. Бер туған һеңлеләре Суфия ауылдаНоғман хажиҙа кейәүҙә, оçтабикә, ҡыҙҙар мөғәлимәһе. Уларҙың һәр береһенең балалары башлы-күҙле булып, дөрләтеп донъя көтөп яталар. Шулай уҡ шаҡтай хәлле, дәрәжәле быуын.

Мөхәммәтсәлим улын — Баязитын уҡытып, өйләндереп, ғөләмә араһына индерҙе. Үҙҙәренең көн итеше: Өмөтбаевтарҙың һәр береһенең мал-тыуарҙары ишле, йорт-ҡаралтылары һипле, тәртип-низамдары ипле.

---

*брадар* — бер туған.

Мөхәммәтсәлимдең үҙ хужалығы нык. Самаса өс-дүрт һыйыр, күп вак мал тота. Йылкылары унлап. Йүкәлек урманында умарталығы, 60—70 баш умартаһы бар. Һабан ашлығын мул ғына сәсә. Шулай иркен йәшәй, донъяһы бөтөн, ил-йорт эсендә, волоста абруйы ҙур. Барыһына ла шөкөрана итеп эшләргә лә йәшәргә генә.

Ауылда егерме йыл буйы ер-һыу тип, ил-йорт тип түккән көс, әлбиттә, аҙ түгел. Үҙенсә һөҙөмтәләре лә бар кеүек. Инде төпләнеп, донъяның кәҙерен белеп, һәүетемсәрәк йәшәгәндә лә ярар ине.

Юк шул, күңел барыбер тыныс түгел. Мөхәммәтсәлим даирә тарлығын тоя, ҙурырак уй-хыялдары тынғы бирмәй уға.

Атаһының бер әйткән һүҙен хәҙер йыш кына иҫенә төшөрә. Гуд-пальма тирәген утта яндырһаң, хуш-еҫ сығарыр, ғилемгә һөнәрле ир ғәйрәтен майҙанға сығарыр, ти торғайны атаһы. Йөрәгенең бик янған сактарында, күрәһең, атаһының ошо һүҙҙәрен бер дәфтәренә бер фарсыса, бер төркисә яҙып, йәнәшенә ике һүрәт тә төшөрөп куйған. Береһендә — ситлеккә ябылған кеше, икенсеһендә — бер ҙур каруан һәм алдан барыусы каруан башы рәсеме. Атаһы әйткән һүҙҙәр менән, ошо төшөрөлгән һүрәттәр араһында тәрән бер эске мәғәнә бар төҫлө. Административ эш, донъя мәшәкәттәренә бикләнгән Мөхәммәтсәлим үҙен ошо тимер ситлектәге тоткон хәлендә тойһа, ә уй-хыялдары сәхрәләр гиҙгән каруан, каруансы кеүек киңлеккә ынтыла һымак.

Шик юк, киңерәк даирә, ғилем, мәғрифәт донъяһы хакында Мөхәммәтсәлим күп уйланған булыр. Ғәмәлһеҙ ғилем ямғырһыҙ болот менән бер икәнен дә самалар. Уның укымышлы, ғилемгә һәләтле әҙәм икәнлеген күреп, уға ҙурырак калаға, йә өйәҙ үҙәгенә күсергә кәңәш иткәндәр ҙә аҙ булмағандыр. Шулар араһынан Стәрлетамактағы бажаһы Камалетдин мөҙәристең кәңәше һәм тәкдиме, ниһәйәт, хәл иткес роль уйнаған буғай.

1878 йылдың аҙағында Мөхәммәтсәлим старшиналык эшен тапшырып, бажаһының юллауы, Ырымбур укыу округының, башкорт, татар, кырғыҙ мәктәптәре инспекторы В. В. Катаринскийҙың хуплауы буйынса 1879 йылдың башынан Стәрлетамакка укытыу эшенә тәғәйенләнә. Бажаһы заманының прогрессив карашлы кешеһе Камалетдин Нугаев, үҙе тоткан һәм укыткан Стәрлетамак мәҙрәсәһендә, унда асылған рус кластарына рус теле һәм математика укытыусыһы итеп Мөхәммәтсәлимде сакыра.

Үткән быуаттың етмешенсе йылдарында мәҙрәсә кырында рус кластары асыу, мәҙрәсәлә рус телен, матема-

тика, тарих, география кеүек донъяуи фәндәр уҡытыуҙы индереү, ул осор өсөн яңы һәм ҡыйыу бер прогрессив күренеш ине. Мөхәммәтсәлим үҙе аҙаҡ «Йәдкәр» китабында Ҡамалетдин мөҙәрис тураһында: «Уның менән генерал-губернаторҙар, мөфтиҙәр иҫәпләшер ине. Ул мосолмандарҙың праваларын яҡлап һис бер хакимдан тартынмай әйтер ине»,— тип, юғары баһа бирә.

Стәрлетамаҡ инде был осор экономик һәм мәҙәниәт йәһәтенән нығына барған өйәҙ ҡалаһы. Уның пристане бар, тире эшкәртеү, һабын ҡайнатыу заводтары, эре тирмәндәр, ваҡ кустар мастерскойҙары байтаҡ. Мәктәптәр, училищелар, бер нисә мәҙрәсә йәшәп килә. Баҙар, мәхәлләләре гөрләп тора.

Был яҡ ҙур төбәк мәғариф, культура өлкәһендә тернәкләнеп бара. Ырымбур Ҡарғалыһы, Стәрлебаш мәҙрәсәләре менән ярышҡандай, бер-бер артлы яңы мәҙрәсәләр, мәктәптәр асыла. Үҙенсә мәҙәниәт усаҡтары барлыҡҡа килә. Тарих, география, астрономияны яҡшы белгән, һәр фәнгә маһир Ғәбделвәхит әл-Стәрле тигән ғалим тирәяҡҡа киң билдәле. Әле йәш Хәбиб Назар әл-Үтәки тигән мәғрифәтсенең исеме ишетелеп ҡала. Үҙе Шиһабетдин Мәрҗәни шәкерте икән. Сәцкем Ҡыпсаҡ ырыуынан сыҡҡан Муллағәл Диуана ҡушаматлы сәсән шағирҙың исеме, шиғырҙары Стәрлетамаҡ төбәгенә яҡшы таныш. Әбелхайыр шағир, Әхмәтвәли әл-Стәрле әҙип хаҡында ла йыш һөйләйҙәр.

Стәрлетамаҡта эшләгәндә Мөхәммәтсәлимдең был ғалим, әҙип һәм шағирҙарҙы ишетеп кенә түгел, күреп, танышып белеүе, ултырҙаш булыуы бик мөмкин. Ҡамалетдин мөҙәрис бажаһын был яҡтың ғалим-ғөләмә даирәһе менән яҡындан таныштырырға, төрлө мәжлестәрҙәге ғилми, мәҙәни, дини диспуттарҙа ҡатнаштырырға ятаҡан.

Мөхәммәтсәлим үҙе телдәр белеүе, мәҙрәсәлә яңыса уҡытыуы менән тиҙ арала шөһрәт ҡаҙанып өлгөргән. Учитель кеше рус кластарында, шәкерттәренең рус ҡына түгел, башҡорт, татар балаларынан тороуынан сығып, рус телен йыш ҡына татар, башҡорт телдәре менән сағыштырып үҙенсә уҡытыр булған. Арифметика дәрестәрендә хисап ғәмәлдәре менән генә сикләнмәйенсә, йыл календары, төрлө дәүмәл үлсәмдәре хаҡында ла мәғлүмәттәр биргән. Мәҙрәсәнең рөшди кластарына ла яңы ысул менән ошондай киңерәк мәғлүмәттәрҙе еткерергә тырышҡан.

Губерна мәктәптәре инспекторы Василий Владимирович Ҡатаринский яңы учителдең дәрестәрендә булып, уның телдәрҙе сағыштырма уҡытыу ысулын, арифметиканы тормошҡа тығыҙ бәйләп алып барыуҙарын хуплаған, уларҙы

бүтән мәрәсәләргә лә үткәреү хәстәрлеген күрергә керешкән.

Йәнә шуныһы фәһемле: яңы учителдең телдәрҙе сағыштырмаса өйрәтеүе Қатаринскийға шул тиклем ыңғай тәьҫир итә, Василий Владимирович рус-башҡорт телдәрен үҙенә лә сағыштырма тикшереү, ике яҡлы һүҙлек төҙөү фекеренә килер. Был йәһәттән Қатаринский Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтан байтаҡ консультациялар алған булырға тейеш.

Архив фондынан күренеүенсә, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев үҙе Стәрлетамаҡта саҡта фарсы-рус һүҙлеген төҙөү эше менән мыҡлабыраҡ шөғөлләнә башлай.

Қамалетдин Шәрәфетдин бин Нуғаевтың шәхси китапханаһы шаҡтай бай булған. Мөхәммәтсәлим, күптән һыуға сарсаған әҙәмдәй, бығаса бары ишеткән йә бөтөнләй ишетмәгән һирәк осрар лөғәт, камус, тәуарих китаптарын йотлоғоп уҡырға, кәрәген күсергеләп алырға форсатын таба. Ғилем донъяһы уны шулай йәнә мауыҡтырып үҙенә алып инеп китә.

Стәрлетамаҡ осоронан Мөхәммәтсәлимдең ауылға ағаһы Фәхретдингә яҙған бер хаты һаҡланып ҡалған. Уның хәл-әхүәлен, ҡыҙыҡһыныуҙарын белеү йәһәтенән унда ҡайһы бер факттар бар.

«Мәғлүмегеҙ Ырымбур янып аҙ ҡалған, — тип хәбәр итә ул, мәҫәлән. — Апрель ахырҙарында бер мәртәбә 6 өй, бер мәртәбә 500 өй янмыш тип телеграммалар бар. Қаруан һарай һәмишә сәләмәт иркән. Бәғзеләр бары йөҙ генә йорт ҡалмыш тип һөйләйҙәр. Ырымбур өсөн ярҙам аҡсаһы йыйырға министерствонан рөхсәт бар. ...Был тарафта бик яҡын ерҙә биш ауыл янды. Стәрле халҡы ут һалыусылар йөрөй, тип бик хәүефләнеп торалар. Һәм беҙ әйберҙәрҙе подвалға һалдыҡ. Мәгәр подвалда оҙаҡ ятһа боҙоласаҡ, ни эшләргә белмәйбеҙ.

Беҙҙең йорттоң мунсаһының мейесе туҙған — яҡмаһындар. Рөхсәт юҡ яңынан сығармай яғырға. Дәхи умарта баҡсаларҙа ҡарауылсы ут яғып ятмаһын.

Йәнә минең бейәләрем, аттарым сәләмәт микән? Нисә бейә ҡолонлаған? Яҙһағыҙ, яҡшы хушланыр инек.

Ҡарт инәйҙәребеҙгә, еңгәгә һәм Нуриманға, һәммәһенә күптин күп сәләм, доға. Йәнә Сөләймәнгә, Биби ғәйреләргә сәләмдәребеҙҙе юлланыҡ. Хәҙрәт Нурғәли ҡайнағаға барсаларыбыҙҙан доға. Дамеллабыҙ Ишназар аға илән хажи Ноғман кейәүгә күптин күп сәләмдәребеҙҙе юлыҡтырҙыҡ

---

*лөғәт* — һүҙлек; *камус* — энциклопедия.

Туғаныбыҙ Суфияға сәләм юлланыҡ. Вә беҙҙе һораған барса ҡәрҙәштәргә доға вә сәләм.

Фатихағыҙҙы үтенеп ҡалыусы брадарең Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев. 1879 йыл, 5-се май».

Был хат беҙгә байтаҡ нәмәләрҙе асыҡлаша.

Стәрлетамаҡҡа уҡытырға Мөхәммәтсәлим үҙе генә киткән. Ғаиләһе Ибраһимда. Үҙе бажаларына урынлашҡан. Ҡайнағаһы Нурғәлиҙең Ибраһимда йәки Ҡырмыҫҡалыла йәшәгәне аңлашыла.

Мөхәммәтсәлимдең мал-тыуарҙарын, умарталарын, бөтәнен ҡайғыртыуҙан мал-мөлкәттәре байтаҡ икәне күренә.

Ике инәһе — Әлимбикә, үҙ әсәһе Бәлхизә әле иҫәндәр. Бабаһы дамелла Ишназар хатип иҫән-һау, хажи Ноғман хәҙрәт — кейәүҙәре инде. Һеңлеләренән Бибисуфия ғына телгә алына һ. б.

Хатының аҙағы «Мәрхүм Мәһәди хажиҙың ахыр ғүмерендә яҙмыш хатына яуап» тип шиғыр менән тамамлана:

Саҡыраһың бер күрешеп дәрт илә ултырмаға,
Бар морадым ғәҙәти итергә һинән дарман юҡмылыр.
Хажи Мәһәҙи былбыл булып ҡалмаға ҡанаттарың
Ах итәрдән баҒ эскәндән ғәнжә гөлдәр юҡмылыр.
Рәнйеү, михнәт алдылар сын дәртең белдермәгә,
Серләшергә йәнең менән нур динаң юҡмылыр.

Ҡатыны Бибиғөбәйҙәгә һағынып яҙған хаттарын ул ғәҙәттә шулай уҡ шиғыр менән тамамлар булған, ахырыһы. Шундай хат шиғырҙарының береһен (хәтерендә нығыраҡ һаҡланып йәки айырым теркәп ҡуйыпмы) аҙаҡ «Йәдкәр» китабында ташҡа баҫтырған. Ул хәҙер «Кемгә хәлем һөйләйем...» исеме менән йөрөгән шиғыр.

Хәләл ефетен өҙөлөп һағыныу һағышы менән тулы шиғыр был.

Эй, болон иленең нәфисе, эй, күцелем йәре, йәнем,
Мең йәнем әгәр булһа ине, барыһы ла булһын һинең,

— тип өҙгөләнеп өндәшә ул йәренә.

Әгәр яманың мин күрһәм, бәдәреңә булам һилал,
Рәхбәт менән ҡыл доғалар, та висал булған камал.

Мәғәнәһе:

Әгәр гүзәллегең күрһәм, тулган айҙай гүзәллегеңә булам
яңы айҙай,

Теләк менән ҡыл догалар, яҡын киләсәктә ҡауышыу булһын
камил.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев Стәрлетамаҡ мәҙрәсәһендә ике ҡыш уҡыта. 1880 йылдың яҙында уҡыуҙар бөткәс тә ғаиләһе янына Ибраһимға ҡайта. Шуның менән ҡыҫҡа ғына ғүмерле Стәрлетамаҡ осоро тамам була.

Стәрлетамаҡты Мөхәммәтсәлимдең киңерәк даирәгә сығыу юлындағы бер кескәй генә трамплин тип ҡарарға мөмкин.

Был үтә провинциаль өйәҙ мөхите менән генә ҡәнәғәтләнеп ҡала алмайынса, М. Өмөтбаев Өфө губернаторы һәм Диниә назараты менән яҡшы таныш, оло йоғонтоло бажаһы Ҡамалетдин хәҙрәттең туранан-тура ярҙамы йәки кәңәше менәнме-нисек, Өфөгә эшкә күсеү уйына килгән булырға тейеш.

# ӨФӨ

*«Һәр халыҡтың тарихы өйрәнелһен өсөн уның үҙ Карамзины булыуы шарт».*

*М. Өмөтбаев*

## 1

Өфө — үҙебеҙҙең ҡала, Йомран Табын ерендә ултыра, тип ярым шаярып һөйләргә ярата торғайны Өмөтбаевтар. Үҙҙәренең Ҡаратауына күтәрелделәрме, Өфө ус төбөндәге кеүек күренеп ята. Ибраһимдан Өфөгә туры ни бары утыҙ саҡрым юл. Йомрандарҙың бар йөрөгәне, кәсеп, алыш-биреш иткәне шул Өфө. Йомошо-ихтыяжы төштөмө, халыҡ бер йөк бесәнен йә утынын тейәй ҙә, йә ит-майын һала ла китә ҡалаға. Һатаһын һатып, алаһын алып көн эсендә әйләнеп тә ҡайта.

Өмөтбаевтарҙың таныш-белештәре, туған-тыумасалары байтаҡ Өфөлә.

Мөхәммәтсәлимдең үҙен бала сағынан тартып торғаны, ғәжәп иткәне шул Өфө булды. Ул таш йорттары, ҙур баҙарҙары, бейек сиркәүҙәре, таш мәсеттәре менән. Писарь, старшина дәүерендә Өфө юлын аҙ тапаманы. Губернатор канцелярияһына, земство биналарына, суд палаталарына йөрөргә, ниҙер юлларға, дәғүәләшергә күп тура килде уға. Эре түрәләрен, чиновниктарын, купестарын, мировой посредниктарын, присяжныйҙарын да ярайһы күрҙе, мөғәмәлә ҡылды.

Ҡырҡҡа яҡынлаған Мөхәммәтсәлим хәҙер Өфөгә башҡараҡ хыялдар, ҙурыраҡ өмөттәр менән аяҡ баҫа. Губерна үҙәгендә төпләнеп, тейер уй-теләктәрен ғәмәлгә ашырыу ниәте менән.

Ҙур йылғалар ҙа кескәй инештәрҙән башлана. Мөхәммәтсәлим 1880 йылдың июнендә Диниә назараты канцелярияһына хеҙмәткәр итеп тәғәйенләнде. Жалуньяһы бәләкәй ине. Ҡала һынлы ҡалала йүнлерәк йәшәр өсөн һис еткеле түгел. Ул шуға күрә бер үк ваҡытта Өфө округ ой судына тәржемәсе булып та урынлашты. Етем балалар приютында тәрбиәсе вазифаһын алды. Өҫтәүенә татар,

башҡорт байҙарының балаларына рус теленән хосуси дәрестәр биргеләне. Шулар барыһы бергә ишемгә ҡушым булып, матди яҡты нығытырға, көҙөнә ғаиләһен Өфөгә күсереп алып килергә мөмкинлек бирҙе. Тапҡан фатирҙары Юғары Фролов урамының Диниә назаратына ҡыйыҡ ҡаршы бер ҡатлы ағас йорт ине. Бер мейесле ике кескәй бүлмә. Фатир хаҡы йылына 15 һум. Утыны-ине үҙендән.

Ниндәйерәк ҡала ине һуң Өфө һиҡһәненсе йылдар башында?

Россияның губерна ҡалаларынан әллә ни айырмалы түгел, әлбиттә. Өфө шул уҡ дворяндар, чиновниктар ҡалаһы. Губерна, өйәҙ, земство, суд, полиция йорттары күп. Ҡалала йәмғеһе 24 мең самаһы кеше. Аристократиянан ҡала байтағы мещандар, купестар. Кустар, эшсе халҡы бар.

Өфө үҙе 1865 йылдан бирле губерна үҙәге. Ҡала элекке ярым крепость Иҫке Өфө тауы яғынан көнбайышҡа Ағиҙелморонондағы тауға үрмәләп бара. Үҙәктә бер-ике ҡатлы байтаҡ таш йорттар бар. Үҙәк урамдарға һуйыр таш түшәлгән. Ҡаланың күпселек өлөшө ағас йорттарҙан ғибәрәт. Араларында өс-дүрт тәҙрәле ҙур фасадлы, мезонинлы особняктары бар.

Үҙәктә Ҙур Ҡазан урамы башында Юғары баҙар майҙаны. Уртала таш магазиндары, кибеттәре менән түңәрәк гостиный двор бинаһы. Унда әлеге Йомран Табын ерҙәренең күп өлөшөнә хужа булып алған беренсе гильдия купесы Кондратий Блохиндың әллә нисә магазины, кибете урынлашҡан. Береһендә яманаты сыҡҡан Блохин араҡы ҡабағы, Йәнәшәһендә Полетаев, Калмацкий купестар компанияһы. Бер башта йәрминкә майҙаны.

Үҙәктән әҙ генә ситкә киттеңме тар һәм бысраҡ балсыҡ урамдар. Төнгөһөн үҙәк урамдарҙа газлы фонарҙар тоҡандырылһа, ситтә бер ни юҡ — дөм ҡараңғы.

Өфөлә баҙар көндәрен, ҡышҡы йәрминкәлә Мөхәммәтсәлим ҡатыны менән кәрәк-яраҡ, аҙыҡ-түлек алырға, ауылдаштарын күргеләргә сыҡҡаны бар. Йәрминкә майҙаны, ғәҙәттә, бесән, утын йөктәре менән тулы була. Йәнә ит, бал, май менән башҡорттар күберәк сауҙа итә. Түбән баҙарҙа мал-тыуар, йылҡы сауҙаһы. Баҙарҙа, кибеттәрҙә аҙыҡ-түлек әллә ни ҡиммәт түгел кеүек. Арыш ононоң бото 90 тин самаһы, бойҙайҙыҡы — бер һум егерме тин көмөш, ҡарабойҙайҙыҡы шунса уҡ. Һыйыр итенең килоһы 10 тин, тауыҡ йомортҡаһының ун тиҫтәһе бер һум да егерме тин көмөш. Бал менән майҙың бото ун икешәр һум. Бәрәңгенең бото 26 тин. Ә бына утын хаҡы, әрҙәнә шаҡтай ҡыйбат: бер куб сажины 2 һум да етмеш тин көмөш.

Айына жалунья һәм өҫтәмә килемдәрҙән йыйылған йәмғеһе 10 һум тирәһенә фатирға, утынға түләп, ғаилә менән иркенләп йәшәүе һис мөмкин түгел. Ҡала ерендә шулай таҡы-тоҡораҡ ғүмер ителә. Ярай, тыуған ауыл, йорт-ер яҡын, итен, майын, бүтәнен килтергеләй торалар.

Мөхәммәтсәлимдең төп эш урыны — Мәхкәмә шәрғиәлә. Шуныһы һәйбәт булды: шул 1880 йылдың беренсе июленән тәржемәсе вазифаһына күсерҙеләр. Жалуньяһы әҙерәк арта төштө. Эше эргәлә. Ул саҡлы мәшәҡәттәре лә күп түгел.

Сәлимгәрәй Тәвкилев мөфти хәҙрәт, Ҡамалетдиндың әшнәһе, Мөхәммәтсәлим толмасты ихлас ҡабул итте кеүек, уҡымышлылығына, бөтмөрлөгөнә ҡыуанды.

Диниә назараты даирәһе — волость, старшиналар, хатта мөғәллимдәр даирәһе менән сағыштырғанда — әлбиттә, бөтөнләй икенсе донъя. Уның үҙ йәмғиәт мәхкәмәһе. Башында — мөфти хәҙрәт. Ике ағзаһы, — ҡазыйҙары — Мөхәммәтйән Мостафин ахун менән Йәләлетдин Маҡсутов мулла. Өҫтәл начальнигы, коллежский ассесор Рәхмәтулла Мамлеев хәҙрәт, уның ярҙамсылары, титулярный советник Батыргәрәй Тереғолов менән Хәйретдин Еникеев. Йәнә архивариус, титулярный советник Яҡуп Алиев мырҙа. Штаттары йәмғеһе һигеҙ кеше. Хеҙмәттәштәре шулар.

Фани донъяға, ил-йорт мәшәҡәттәренә ҡарағанда бында дини-рухани донъя, дин әһелдәре мөхите.

Диниә назаратының йорттары 1863 йылда һалынған. Юғары Фролов урамында (хәҙерге Туҡай урамы). Берсәһе ике ҡатлы, икенсеһе бер ҡатлы таш йорттар. Йәнәшәлә ҙур таш мәсете — төп жәмғе.

Шуныһы бер тиклем сәйер: мосолман диниә назаратына бер йорт — ҡатын-ҡыҙҙарҙың духовный училищеһы бинаһы аша православныйҙарҙың Архирей йорто, уға ҡаршы кафедраль собор, ары йәнә бер таш сиркәү. Ҡаршыла Губернатор йорто. Гүйә, дини-рухани ярашмаҫ православный менән ислам дине, губернаторҙары бергә уҡмашҡан төҫлө. Дине түгел, йүне-көнө көн, күрәһең.

Ырымбур мосолман шәрғиәте мәхкәменең хасил булыу тарихы үҙе лә ғибрәтле лә баһа. Ҡантондар менән бер тирәлә барлыҡҡа килгән. Тураһын әйткәндә, икеһе лә бер сыбыҡтан ҡыуылған инде.

Батша хөкүмәтенә баш бирмәҫ башҡорттарҙы, татар-башҡорт мосолмандарын ауыҙлыҡлар өсөн ярым хәрби кантон системаһы ла, уға йәнәш диниә назараты — шәрғиәте мәхкәмә хәжәт булып төштө. Береһе ҡамсы, бере-

---

*Мәхкәмә шәрғиә* — Духовное собрание бинаһында.

һе — тәтәй хөкөмөндә. Аҙаҡ Ырымбур вәләйәтенең фәнни архив комиссияһы журналында яҙылганса, «башҡорт, ҡырғыҙ, ҡалмыҡтарҙың Пугач яуына ҡушылыуына баглы, императрица Екатерина ҫаниә ҡатылыҡтан файҙа табылмаҫ-дин мосолмандарҙы итәғәткә килтермәк өсөн икенсе йомшаҡ сәбәп тапты. Йәғни мосолмандарҙың эсенә инсаниәт вә нәзәф һалмаҡ илә мәйлә ҡылмаҡты бойорҙо. Уфа вә Сембер вәләйәттәренән булған генерал поручик Иван Варфаламиевич Якубовҡа 1782 йылда яҙмыш указ илә бойорҙо: Уфа вә Тоболь вәләйәттәренең сәрхәдтәренә ул шаһбаныу үҙе мәғкүл күргән план вә фазадтар буйынса мәседтәр бина ҡылырға...»

«1788 йылдың 22 сентябрендә Екатерина II Духовное собрание исеме менән ислам дине мәхкәмәһенә указ биреп, 1789 йылдың 4 октябрендә Өфө шәһәрендә мәхкәмә фәтех ителмештер»,— тип яҙҙы М. Өмөтбаев үҙе «Башҡорттарҙың аҡ һәм ҡара көндәре» исемле тарихи хеҙмәтендә.

М. Өмөтбаев үҙе шунда эшләгән сағында был датаға 100 йыл тулыу уңайы менән «Оренбургский духовный собрание мәхкәмәһенең 100 йыллыгы хаҡында ҡыҫҡаса тәуарихы» тигән брошюраһын яҙып сыҡты. Ул шул заманда төрки һәм рус телдәрендә баҫылды.

Был тарих һәм хисап баҫмаһы буйынса бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр һәм һандар менән танышырға мөмкин.

1889 йылда Ырымбур Diниә назараты ҡарамағында 4254 мәхәллә була һәм шунса һан мәсет. Өфө губернаһының үҙендә 1396 мәхәллә. Назарат ҡарамағында өс миллион ярым мосолман. Дин әһелдәренән ахундар 65, хатиптар 2734, мөҙәрис һәм муллалар 2621, мөәзиндәр 1873 кеше.

Өс миллион ярым мосолман рухына баш был ҙур сиреү, оло өйөр дин әһелдәре.

Ырымбур духовный собраниеһы — руханәи мәжлесенең идараһы, мәхкәмә йорттары баштан уҡ Өфө ҡалаһында. Батша хөкүмәте тарафынан идарага баш итеп мөфти тәғәйенләнә.

Тәүге мөфти — Мөхәммәтйән Хөсәйенов. Сығышы менән сауҙагәр ғаиләһенән. Бай әҙәм. Ике улы — хәрби кеше, мырҙалар. Фатима исемле бер ҡыҙы ҡаҙаҡтарҙың Бөкәй урҙаһы вассал ханы генерал майор Йыһангир Бүкәйхановҡа кейәүгә сыға. Уларҙан тыуган улдар: кенәз Ибраһим Сыңғыҙ, кенәз гвардий полковник Әхмәт Сыңғыҙ, генерал лейтенант солтан Ғәбиҙулла Сыңғыҙ хан (Былар

---

*нәзәф* — сафлыҡ; *сәрхәт* — сик; *фатых* — асыу (асылыу).

ҙы исемләп китеүебеҙ шунан: алда Мөхәммәтсәлим уларҙың береһе менән бергә эшләйәсәк әле).

Мөхәммәтйән үҙе Ҡавказ линияларында оҙаҡ хәрби хеҙмәттә булған, Ырымбур сик буйы комиссияһында ла эшләгән. Үҙенә башҡорттарҙың күп ерҙәрен үҙләштергән.

Икенсе мөфти — тархан Ғәбделсәлим Ғәбделрәхим улы. Ахун һәм мөҙәрис булған кеше. 1825 йылдан мөфти итеп тәғәйенләнгән.

Өсөнсө мөфти — тархан Ғәбделвәхит Сөләймәнов. Башта Петербургта имам хатип. 1840 йылдан мөфти.

Дүртенсе мөфти — Сәлимгәрәй Тевкилев. Хәрби хеҙмәт юлын үткән. 1828—1830 йылдарҙа рус-төрөк һуғышында ҡатнашҡан. Батырлыҡтары өсөн ордендар менән бүләкләнгән. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев ошо мөфти ваҡытында Диниә назаратында эшләй башлай.

Бишенсе мөфти — Мөхәммәтйәр Солтанов. Гимназия тамамлаған. Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт иткән. Унан, 1866—1881 йылдарҙа Минзәлә, Бәләбәй өйәҙҙәрендә мировой посредник, мировой судья булып эшләгән. Үҙен мәғрифәтсе итеп тә күрһәтмәксе.

Әлеге мәхкәмә тарихында Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев был мөфтиҙәргә характеристика биргәндә уларҙың тормош юлы һәм хеҙмәттәрен, рәсми бүләкләүгә әҙерләнгән характеристика кеүек, бик ентекләп теҙеп, күпертеп һанарға, дәрәжәләрен, титулдарын, орден һәм миҙалдарын берәмтекләп исемләргә тотона. Батшалар ҡаршыһындағы халуйлыҡтарын, шымсылыҡтарын йомоп ҡалдырырға тырыша. Уларҙың наган һәм картустарын елән һәм сәлләгә алыштырған, елән бөркәнгән батша администраторҙары икәнен күрмәмешкә һалыша. Улай ғына түгел, үҙенең төп ҙур хужаһы Мөхәммәтйәр Солтанов мөфтигә махсус мәдех бағышлай.

Кемдең санаһына ултырһаң, шуның йырын йырлау шулдыр, бәлки...

Эшләгән урыны — Диниә назараты, мөхите — дин әһелдәре даирәһе.

Уның тирә-йүнендәге төп ҡаһармандар мөфтиҙәр, ҡазыйҙар, ахундар, ҡарыйҙар, имамдар, муллалар, мәьзиндәр бит.

Дөрөҫ, мул мөфтиҙәр һымаҡ мөнбәрҙән фәтеүә уҡымай, ҡарыйҙар шикелле фатиха бирмәй, муллалар кеүек вәғәз һөйләмәй. Ул назарат менән губерна, Россия администрацияһы араһында яҙышҡан яҙыуҙарҙы, фармандарҙы, фәтүәләрҙе, бүтән ҡағыҙҙарҙы ғәрәпсәнән руссаға, руссанан төркисәгә тәржемә итеү эше менән мәшғүл. Ул толмассы кеше.

Әммә үҙгә мөхит, шөғөлө уны диндар булырға ла мәжбүр итә.

Дингә ышанмаҫ иманһыҙ дәһри әҙәм ислам дине мәхкәмәһе үҙәгендә эшләүе мөмкин түгел. Ул башҡа һыймаҫ хәл.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев — заман улы. Ул Диниә назаратында эшләһә-эшләмәһә лә барыбер дин тотҡан кеше булып ҡалыр ине. Дин — үҙ заманының иманы, төп идеологияһы.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевҡа, заманының мәғлүмәтле һәм мәғрифәтле кешеһенә, мосолман даирәһендә ислам тотоу фарыз. Шунһыҙ уға һан да, дан да юҡ. Мосолмандың бар шәхсиәте, инсаниәте, ҡәбиләте ислам тәғлимәте менән баһалана булыр.

Ҡөнсығыш мосолман илдәренең ҙур ғалимдары, әҙип һәм философтары дин тотоуҙары, исламды таныуҙары менән һис кәм түгел, тәғлимәткә һыймауҙары, тәнҡити ҡараштары, стихиялы материалистик фекерҙәре, аҡыл эйәләре булыуҙары менән бөйөк. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың замандаштары һәм рухи фекерҙәштәре татар Шиһабетдин Мәржәни, Ҡәйүм Насыри, ҡаҙаҡ Ибраһим Алтынсарин, Абай Ҡонанбаев, сыуаш Иван Михайлов һ. б. дин тотҡан һәм дини тәғлимәтте таныған шәхестәр, донъяға киңерәк ҡараштары, прогрессив фекерҙәре менән демократик мәғрифәтсе әҙиптәр. М. Өмөтбаев та шулар рәтендә. Әзербайжан мәғрифәтсеһе һәм әҙибе Фәтих-ғәли Ахунов, осетинлы Ҡоста Хетагуров кеүек ул да тәржемәсе.

Диниә назаратында егерме йыл буйы хеҙмәт итеү дәүерендә Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың йәнә бер сәйерерәк яғы беленә. Ул үҙен батшалыҡтың тоғро хеҙмәтсеһе һәм монархистик ҡарашлы кеше итеп күрһәтмәксе. Үҙенең бар граждалнлыҡ бурысын һәм инабатлылығын, гүйә, батшалыҡҡа тоғро хеҙмәттә һәм аҡ батшаға инаныуҙа күрә.

Ышаныслылығы һәм вазифаһы арҡаһында Диниә назараты делегацияһы составында 1883 йылдың майында Мәскәүҙә Александр III батшаны тәхеткә ултыртыу коронацияһында ҡатнашырға насип була уға. Быны М. Өмөтбаев өлөшөнә төшкән ҙур бәхет тип һанай. Коронацияла ул мөфтиҙең яҡын ярҙамсыһы ассисенты булып ҡатнашып, Ырымбур духовный собраниеһы исеменән батшаға алтын менән биҙәлгән ҡиммәтле альбомдың тексын ғәрәпсә һәм тәржемәһен русса үҙе төҙөүсенә һәм каллиграфик яҡтан бик бөхтә итеп күсереп яҙыуына ғорурланыр була. Батшаны тәхеткә ултыртыу коронацияһының ғәжәйеп тантаналығына, ил, сит илдәр буйынса мөғтәбәр делегациялар

килеүенә, иҫ китмәле тамашаларға хайран ҡала. Быларҙың барыһын да аҙаҡ бик ентекләп, тәфсилләп тасуирлап «Император Александр Третийҙың коронацияһы хаҡында бер нисә һүҙҙәр», «Наследник байрамы» исемле яҙмаларында сағылдыра һәм уларҙы ике китабында — «Оренбургский духовнос собрание мәхкәмәһе тарихы» һәм «Йәдкәр»ҙә — ташҡа баҫтырып сығара. Коронация, тәхет варисы байрамы хаҡында шиғырҙар яҙа. Александр III батшаға махсус мәдех бағышлай.

Тырышлыҡтары ла бушҡа китмәй, буғай. Коронацияла ҡатнашҡаны өсөн көмөш миҙал менән бүләкләнә. Киләһе йылға коллежский регистратор тигән дәрәжә бирелә. Тағы алдағы йылына губерна секретары итеп үрләтелә.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев өсөн коронацияға барыуҙың бер хәтирәлеһе һәм мөһимерәге шул: улар барышлай Ҡазанға туҡталып күп кенә ғалим-ғөләмәләр, шул иҫәптән Шиһабетдин Мәржәни менән таныша, аҙаҡ Мәскәүҙең атаҡлы архитектура, тарихи ҡомартҡыларын, музейҙарын тамаша ҡыла. Хәҙер «Мәскәү хаҡында күңел мөһөрө» тип исемләнгән юлъяҙмаһында шуларҙы иҫкә ала: «...Мәскәүҙә ғәжәйеп һәм ғәләмәт эштәрҙе ҡарап, эрмитаж баҡсаһына барҙыҡ, Петр дворецын һәм башҡаларын ҡыҙырҙыҡ; 1882 йылда булып үтмеш «Торговое промыслы» күргәҙмәһе йортон ҡараныҡ; Тверь заставаһында Триумфаль ҡапҡаны тамаша ҡылдыҡ. Ул ҡапҡаны 1815 йылда, француздарҙы Мәскәүҙән тар-мар итеп сығарыуға йәдкәр итеп яһағандар. Ҡапҡа башында бер кеше алты суйын атты дилбегәләр менән тотоп тора.

Йәнә «Красные ворота» тигән ҡапҡа бар. Тағы Сухарев башняһы тигән ғимарәтте күрҙек. Бик бейек бер һарайҙыр... Кремль, йәғни Кремль крепосы һәм дворец тарафтарын күп ҡыҙырҙыҡ... Дворецтың шимал тарафында Царь-пушка тигән ҙур туп бар. Туптың бейеклеге, йәғни ултырған урыны ерҙән ике аршын да ун ике вершок булып, минең башымдан бер аяҡ юғары ине. Туптың алдында, ерҙә дүрт йәдрәһе бар... Йәдрәне ҡосаҡланым. Бер ҡолас йәҙрәнең яртыһынан аҙ ғына уҙҙы. Йәнә дворецтың шул уҡ урынында, Иван Великий исемле сиркәү манараһы төбөндә, юғарынан йығылып төшкән ҙур ҡыңғырау бар. Царь-колокол тиҙәр. Ултырған ташы минең эйәк аҫтынан. Таштың бейеклеге ике аршын. Борис Годунов исемле батша заманындағы ҡыңғыраудыр. Әммә 1733 йыл төшөп, сите аҙыраҡ кителгән, китеге әҙәм буйы бар. Ул ҡыңғырау ишеге асыҡ сатыр кеүек...

---

*мөғтәбәр* — почетлы; *ғимарәт* — ҡоролма.

Кремль дворецынан йыраҡ түгел, крепость тышында, Мәскәү һыуының ярында бер ғәжәп ҙур сиркәү бар. Исеме Храм Спасителдер... ФранцузДарға ғалип булып ҡайтҡас, шуның йәдкәренә тип, 1815 йыл бинаһына ижтиғад итеп, 1880 йыл камиллағандар. Ҡөмбәҙенә 26 бот алтын китмеш тип «Московский листок» газетаһында уҡыным».

М. Өмөтбаев йәнә бер ҡоролмаға игтибар итә: «Мәскәүҙәге Кремль крепосының шимал тарафында, «Красная площадь» тигән майҙанда, Спасск ҡапҡаһына ҡаршы «Лобное место» тигән урын барҙыр. Баштан яһалған түңәрәк, бейеклеге бер сажин майҙандыр. Белмәгән кеше ситтән фонтанға хисап ҡылып китәләр. Уртаһында таштан бүкән бар. Боронғо батшаларҙың әмерҙәрен шунда сығып уҡырҙар һәм ғәйепле кешеләрҙе шунда яза ҡылырҙар икән».

Был «Лобное место» урынын тамаша ҡылганда М. Өмөтбаевтың, тарих менән ҡыҙыҡһынған кешенең, Степан Разин, Емельян Пугачев кеүек бунтарь шәхестәрҙең шунда язаланыуын да бәлки хәтеренән үткәргәндер.

Шулай итеп, Мәскәү Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевта онотолмаҫлыҡ хәтирәләр ҡалдыра.

## 2

Мөхәммәтсәлим Өфөлә эшләй башлаған һикһәненсе йылдар Урал — Волга буйҙарында татар-башҡорттар араһында мәғариф һәм мәҙәниәт өлкәһендә яңы ижтимағи хәрәкәт ҡуҙғала һәм ҡыҙа барган осор. Нәҡ ошо осорҙа мәктәп-мәҙрәсәләргә исләхат-реформа мәсьәләһе ҡалҡып сыға. Конкуренцияларҙа бирешмәҫ өсөн үҙ мосолмандарынан мәғлүмәтле, белемле әҙәмдәр кәрәклеген яҡшы күргән эре сауҙагәрҙәр, фабриканттар, рус мәктәптәрендә, гимназияларҙа йәки сит илдәрҙә уҡып, донъяуи фәндәрҙең әһәмиәтен, заман еҫен тойған зыялылар, прогрессив ҡарашлы ғалим-гөләмәләр иҫке мәҙрәсәләрҙе яңы баштан үҙгәртеп ҡороу йәки яңы тип мәктәптәр асыу хаҡында ныҡышмалыраҡ һүҙ ҡуҙғаталар. Татар, башҡорттарҙы рус һәм Европа халыҡтары менән йәнәш ҡуйып ҡарайҙар ҙа: күрегеҙ, улар фән вә мәғрифәттә ни тиклем алға киткән, ә беҙ ҡалай артта ҡалғанбыҙ, тиҙәр. Бының сәбәбе, тиҙәр, иҫке ғөрөф-ғөрәфәттәргә йәбешеп ятыуыбыҙҙа, донъяуи ғилемдәргә эйә булмауыбыҙҙа. Тәрәҡиәттең берҙән-бер юлы — ғилем, мәғрифәт.

---

*ғалип* — еңеүсе; *тәрәҡиәт* — прогресс.

Бының өсөн улар мәғариф өлкәһендә конкрет проекттар тәҡдим итәләр, шуларҙы бойомға ашырыу сараларын эҙләйҙәр. Шулай Ҡазан һәм Өфө губернаһы мәктәптәр инспекторы вазифаһын башҡарған рус ғалимы В. В. Радлов йәнә Шиһабетдин Мәржәни, һуңыраҡ Риза Фәхретдинов проекттары пәйҙә була. Улар ҡәҙими мәҙрәсәләрҙе өр-яңыса үҙгәртеп ҡороуҙы, яңы тип мәктәптәр асыуҙы, схоластикаға ҡоролған иҫке ысул урынына яңы ысул менән уҡытыуҙы алға һөрәләр. Донъяуи фәндәр уҡытыуҙы үҙәккә ҡуялар.

Шул ерлектә иҫкегә сат йәбешкән ҡәҙимселәр менән яңылыҡты уҡытыуҙа ысулы йәдитте яҡлаған йәҙитселәр араһында көрәш ҡыҙып китә. Ишандар, мулла-монтағыйҙар, һөрһөп бөткән имам-мөҙәристәр ҡәҙими мәҙрәсәләрен ҡурсырға итә, йәҙитселәрҙе дәһрилектә, тағы әллә ни гонаһтарҙа ғәйепләй, бәддоғалар яуҙыра. Былары тегеләрҙе консерваторҙар, прогресҡа аяҡ салыусылар тип бара. Йәдитселәрҙең алдынғыраҡтары уҡыу-уҡытыуҙа ғына түгел, көнкүрештә, донъяға ҡараштa ла яңылыҡҡа, европасылыҡҡа өндәйҙәр.

Иҫкелек күпме ҡарышмаһын, яңылыҡ яйлап барыбер үҙенекен итә: мәҙрәсәләргә әҙ булһа ла донъяуи фәндәр индерелә, яңы мәктәптәр асыла башлай. Уҡыу-уҡытыу тәртиптәре үҙенсә яңыртыбыраҡ һипләнгән мәҙрәсәләр, мәктәптәр Өфө губернаһында быуат аҙағынса йөҙгә етә.

Мәғрифәтселектең көрәш майҙанына үҙенең әһелдәре, лидерҙары сыға. Атаҡлы Ҡәйүм Насыриҙары, Шиһабетдин Мәржәниҙәре, Хөснөтдин Ждановтары...

Араларында иң шөһрәтлеһе — мөтәфәннин ғалим, ҙур реформаторсы Шиһабетдин Мәржәни. Ул, мәҙрәсәнең әүәлге нигеҙҙәрен емермәй, үҙенсә һипләп фән дәрестәре, яңы ысул, парта-таҡталар индергән, ғәрәбиәтте ғаҡлиәт менән алыштырған ислахсы мөҙәрис. Ул дини фанатизмды, схоластиканы, хөрәфәтселекте ҡаты тәнҡитләгән зат. Фән үҫешенә, тарихҡа, философияға, мәғрифәтселеккә ҙур өлөш индергән ғилем эйәһе һәм әҙип.

Ҡазанда аҙағыраҡ «Мөхәмәҙиә» исемле мәҙрәсәһе менән дан алған Ғалимъян Баруди шул йәҙит уҡыуҙарын башлап ебәргән мөҙәристәрҙең береһе.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев 1883 йыл Мәскәүгә барышлай, Ҡазанға туҡталып, Шиһабетдин Мәржәни хәҙрәт менән осрашып һөйләшеү бәхетенә ирешә. Мәржәни китаптары менән яҡшы таныш Мөхәммәтсәлим уның йөҙөндә

---

*мөтәфәннин* — энциклопедист; *ғәрәбиәт* — ғәрәп теле, әҙәбиәте, ҡөрьәне, хәдистәре; *ғаҡлиәт* — аҡыл ғилемдәре; *һибә* — бүләк.

үҙенә яҡын фекерҙәш һәм теләктәш таба. Әмәленә-ғәмәле, бер үк мәжлестә ул Барудиҙың атаһы Мөхәммәтйән Ғәлиев менән дә ултырҙаш була. Улар араһында 1882 йыл яңы мәктәп асып, шунда уҡыта башлаған Ғалимъян дәмелла хаҡында ла, моғайын, һүҙ булмай, бай был һибәһе менән маҡтанмай ҡалмағандыр.

Ырымбурҙан Хөсәйенов байҙар яңы мәктәптәр, уҡытыусылар курсы, студенттар, тип күп аҡса түгә. Уларға конкуренцияла еңелеп ҡалмаçтай мәғлүмәтле кешеләр уҡымышлылар хәжәт. Тиҙерәк милләт хәдимдәре етешһен. Тиндәрҙән һумдар, миллиондар туплаған сауҙагәр Ғәни бай Хөсәйенов яңыса уҡытыр өсөн Ҡарғалыла уҡытыусылар курсы астырып ебәрә. Ҡырымда Исмәғил бәк Ғаспринский асҡан ысулы сүтиә мәктәбендә үҙ иçәбенән шәкерттәр уҡыта. Энеһе Әхмәт бай яңы ысул менән уҡытылыр рөшди мәҙрәсәләренә нигеҙ һала. Өфөлә асылыр «Госмания» мәҙрәсәһенә ҙур сумма-өлөш сығара. Әхмәт бай Хөсәйенов оҙаҡламай Ырымбурҙа асылыр «Хөсәйениә» мәҙрәсәһе менән шөһрәт табыр. Унда өс башланғыс (ибтидаиә), дүрт урта (рөшдиә), юғары класҡа әҙерлек (иғдадиә) һәм өс юғары (ғалиә) кластары булдырыр. Уларҙа дин дәрестәренән алып, рус, ғәрәп, француз, немец теле дәрестәренәсә, физика, химия, сауҙа эше, экономика, бухгалтерия, логика, философия һ. б. фәндәр уҡытылыр.

Хөсәйеновтар ише байҙар, яңы тип мәктәптәр, мәҙрәсәләр һалдырыу һәм яңыса уҡыу-уҡытыу эшен ғәмәлгә ҡуйҙырыуҙары менән, асылда, мәғариф һәм мәҙәниәт меценаттарына әйләнәләр.

Йәки бына — Зәйнулла Рәсүлев дәмелла (1833—1917). Ул Бохарала уҡып ҡайтҡас, Башҡортостанда нәҡшбәнди тәриҡәтен тарата башлай. Әммә шәйех-ишандар, реакцион муллалар уның дингә тел тейҙерер бидғәт һүҙҙәре һәм әçәрҙәре өсөн, батша чиновниктары хөр фекерҙәре өсөн донос яҙып, ялалар яғып, уны төрмәгә яптыралар һәм аҙаҡ һөргөнгә ебәрттерәләр. Вологда губернаһында ун йыл һөргөн йөрөп ҡайтҡас, 1884 йылда Зәйнулла Троицкийҙа атаҡлы «Рәсүлиә» мәҙрәсәһенә нигеҙ һалып, уҡытыуын дауам итә. Мәҙрәсәлә донъяуи фәндәр индерелеүе, яңыса уҡыу-уҡытыу методтары, шәкерттәрҙе практик эшкә тәрбиәләүе менән «Рәсүлиә» Урал, Ҡаҙағстан яҡтарында, Россия мосолмандары араһында ҙур популярлыҡ яулай. Уның айырыуса Ҡаҙағстанға мәғариф-белем таратыуҙағы роле ифрат ҙур.

---

*ысулы сүтиә* — яңы метод; *дәмелла* — Бохарала уҡып ҡайтҡан уҡымышлы кешегә шулай тиҙәр.

Зәйнулла Рәсүлев, Ғәбделнасир Ҡурсауи өлгөһөндә, Бохара схоластикаһын һәм дини фанатизмды ҡырҡа кире ҡаға, фән дәрестәрс уҡытыуға, эшмәкәр кешеләр тәрбиәләүгә ориентация тота. Уның ҡайһы бер уҡыу-уҡытыу, дини-теоретик ҡараштары «Мәҡәләт Зәйни», «Әлифиә» тигән баҫма китаптарында сағыла.

Мөхәммәтсәлим был атаҡлы дин әһеле һәм мөҙәрис Зәйнулла Рәсүлев менән ныҡ ҡыҙыҡһынған, бер нисә тапҡыр Өфөлә осрашҡан. Уның архив фондында З. Рәсүлев хаҡында айырым яҙмалары һаҡланған. Ул биографик мәғлүмәттәр туплаған. Шәжәрәһе вә тәржемәи хәле: «Троицк Зәйнулла ишан бин Хәбибулла, бин Рәсүл, бин Муса, бин Байрамғол, бин Ғашиҡ, бин Солтанай, бин Морадҡабул, бин Туҡай, бин Ураҙғәле, бин Яңыкеше, бин Ятаби, андан мәурасы мәғлүм дүгел. Башҡорт ырыуы Ҡыуаҡан дидекеләрс. Таифән Дүнгәүер. Сәнә милади илән 1833 дә вөжүдкә килмештер. Вәләйәте Троицк өйәҙе Туңғатар волосы Шәрип ҡәрйәһе. Уп ике йәшкә ҡәдәр кәнд ҡәрйәһендә тәғлим алып, андан Малай Муйнаҡда Бүзкәйев кантон ауылында Яҡуп хәҙрәттә уҡып. Ул Яҡуп хәҙрәт Ахунд ауылына күскәс (1848) был Ахунд ҡәрйәһендә булып, 1851 йыл мәшһүр Троицкиҙа Әхмәд бин Халдамани мәҙрәсәһендә тамам ҡылып, 1858 йылда Верхнеурал өйәҙе типтәрҙәр Аҡкужа ҡәрйәһендә имам булып, андан 1873 йыл нәфи алыплар булып шималда Вологда шәһәрендә тороп, андан Кострома шәһәрендә тороп, 1882 сәнәдә городларынан һуңра Троицк шәһәрендә дәрес әйтмештәр».

М. Өмөтбаевтың архив фондында Зәйнулла Рәсүлевтың ҡулға алыныу сәбәбе һәм һөргөнгә ебәрелеүгә ҡараған батша түрәләренең рапорт нөсхәләре ятып ҡалған. Былар, күрәһең, аҙаҡ Диниә назараты ҡағыҙҙары аша ингән.

«Ағиҙел буйындағы ғөләмә вә мәшәйехтәр» тигән мәҡәләһендә М. Өмөтбаев үҙе йәшәгән тарафтарҙағы уҡымышлы мәғариф һәм дин әһелдәрен һанап китә. Улар араһынан сәсән Хөснөтдин Ждановты айырым күрһәтә. «Быларҙың заманында Стәрле өйәҙенең Балыҡлыгүл ауылында сәсән Хөснөтдин Жданов рус йортонда беренсе ғалимдарҙан булып, алтмыш йылдан артыҡ дәрес әйтеп, тирәяҡҡа нисә йөҙ ғөләмә вә мөҙәристәр таратмыштыр»,— ти.

*биҙағ* — тыйылған, зарарлы; *мәура* — нәҫел; *тәйфа* — тармаҡ; *сәнә милади* — милади йыл хисабынса; *вөжүдкә килмеш* — донъяға килеүе. *ҡәрйә* — ауыл; *тәғлим алып* — уҡып; *нәфа алыплар булып* — һөргөн ебәрелеп; *ғөләмә вә мәшәйехтәр* — ғалимдар һәм дин әһелдәре.

Риза Фәхретдинов «Аҫар» китабында яҙғанса, Жданов үҙ заманының бик ғилемле, күп телдәр белгән мөҙәрис булған, бик бай китапхана тотҡан, ислам фанатизмын, Бохаранан килгән схоластиканы, суфыйсылыҡты ҡаты тәнҡитләгән. «Беҙҙең халҡыбыҙҙың наҙан ҡалыуының иң оло сәбәбе, — тигән ул, — Бохара ҡалаһы ғилем шишмәһе ул тип ышанып, шунда белем алырға барыуҙа, унда ни күрһәләр, шуны сабый балалар шикелле илебеҙгә ғилем исеменән килтереп һатыуҙа һәм донъяла бер типлек файҙаһы булмаған вә әхирәт өсөн кәрәге күренмәгән нәмәләрҙе саф күңелле шәкерттәребеҙгә тылҡып, ҡандарын боҙоуҙа, әхләктәрен тәбиғи хәленән сығарыуҙа». (Р. Фәхретдинов. Аҫар, 2 том, 14-се киҫәк, 480-се б.).

XIX быуаттың икенсе яртыһында мәҙрәсәләрҙәге ҡәҙимселектә кире ҡаҡҡан ҡараштар көсәйеп китә.

Шулай итеп, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың Өфөгә килеп эшләй башлаған һикһәненсе йылдарҙа, айырыуса XIX быуаттың һуңғы сирегендә, Башҡортостанда мәғариф эштәре киң йәйелеп, уҡыу-уҡытыуҙа яңы ысулға күсеү, фән дәрестәре уҡытыу йүнәлешендә йылдам үҫеп китә һәм былар башҡорт демократик мәғрифәтселегә хәрәкәтенең көсәйеүенә ныҡлы база булып тора.

Йәдитселек исеме менән башланған был ағым мәктәп-мәҙрәсә реформаһы менән генә сикләнеп ҡалманы. Быуаттың һуңғы сирегендә иһә халыҡтың экономик, культура йәһәтенән артталығын бөтөрөүгә, аңын үҫтереүгә, социаль-экономик хәлен яҡшыртыуға йүнәлтелгән идеологик, ижтимағи-политик характерҙағы демократик мәғрифәтселек хәрәкәтенә әүерелде. Уның ыңғай һәм йомшаҡ яҡтары асыҡлана барҙы.

Әҙәбиәтсе Әхәт Вилданов башҡорт мәғрифәтселек тарихын өс этапҡа бүлеп ҡарай: беренсе этап — 40—70-се йылдарҙа милли мәғрифәтселектең тыуыу һәм формалаша барыуы (М. Иванов, С. Күкләшев, М. Биксуриндарҙың фәнни-педагогик эшмәкәрлектәре); икенсе этап — XIX быуаттың 80-се йылдарынан 1905—1907 йылдарҙағы рус буржуаз-демократик революцияға тиклемге осор (М. Өмөтбаев ижады, М. Аҡмулла поэзияһы һ. б.); өсөнсө этап — беренсе рус буржуаз-демократик революцияһынан Октябрь социалистик революцияһына тиклемге осор (М. Ғафуриҙың башланғыс ижады, С. Яҡшыголов, Ш. Әминев, Н. Йомрани поэзияһы, Р. Фәхретдинов, З. Һади прозаһы һ. б.).

Тимәк, был классификация буйынса, М. Өмөтбаев мәғрифәтселек хәрәкәтенең икенсе этабында фәнни-педагогик һәм әҙәби эшмәкәрлеген киң йәйеп ебәргән һәм баш-

ҡорт мәғрифәтселәренең күренекле вәкиленә әйләнгән әҙип булып һанала.

### 3

Нисегерәк башланып китә һуң М. Өмөтбаевтың мәғрифәтселек эшмәкәрлеге?

Мәғрифәтселектең тәүге осоронда уның билдәле вәкилдәре М. Иванов, С. Күкләшев, М. Биксурин дәреслектәрен өйрәнеп, уларҙың икеһендә үҙе һабаҡ алып, М. Биксурин остазы булып, йәш кешенең донъяға ҡарашы нисегерәк формалашыуы беҙгә мәғлүм. Ул да, уҡытыусылары кеүек, туған халҡының арталығын, экономик хәленең ауырлығын, фәҡир йәшәүен наҙан булыуҙарынан, үҙ хоҡуҡтарын яҡларлыҡ белемдәре юҡлыҡтан күрә башта. Улай ғына түгел, бөтә мәғрифәтселәр кеүек үк, халыҡты мәғлүмәтле, мәҙәниәтле һәм бәхетле итер өсөн берҙән-бер юл итеп мәғрифәтте иҫәпләй. Кеше аң-белемгә эйә булһа, барыһы ла — тормошо ла, мөхите лә бер юлы яҡшырып китер, донъяла ғәҙелһеҙлектәр бөтөр, яуыз бәндәләргә, рәхимһеҙ түрәләргә зәмин ҡалмаҫ төҫлө.

Бындай ҡараштары уның уҡытыу эшенә тотонғас, нығына төшә. Баланы йәшләй ғаиләлә, унан мәктәптә юғары әҙәп-әхлаҡлы итеп тәрбиәләп, тейешле белем биреп, үҙ яҙмышын үҙе хәл итер ҙур юлға сығармаҡсы ниәте. Белемле, итәғәтле әҙәм үҙен дә, бүтәндәрҙе лә яҡлай белер, яҡшылығы, ғәҙеллеге менән өлгө булыр. Шундайҙар илйорт тотҡаһы. Белем, әхлаҡ кешенең матди һәм рухи донъяһын да байытышыр, инсаниәтте күтәрешер. Тәрәҡҡиәт белемдә, тырышлыҡта, хеҙмәттә. — Бына шундай халыҡсан педагогик ҡараштар сағыла.

Уҡытыу-тәрбиә эшендә М. Өмөтбаевтың халыҡ педагогикаһына, өҫтәүенә, атаҡлы рус педагогтары К. Д. Ушинский, бөйөк әҙип Л. Н. Толстой ҡараштарына һәм тәжрибәләренә таянып эш иткәне күренә. Ул сабыйҙарға аңларлыҡ итеп әҙәп-әхлаҡ ҡағиҙәләрен күндерә, яҡшынан яманды айырырға, яңылыш юлға төшөп китеүҙән һаҡ булырға өйрәтә. «Эй бала, һабаҡҡа иртәрәк барғыл, барғанда вә ҡайтҡанда туғры барып вә туғры ҡайтҡыл,— ти ул, мәҫәлән.— Юлда оло вә кесегә сәләм биреп, иҫәнлек һорап үт. Юлда малайҙар менән һуғышма, һинә ҡасыд итһәләр, йүгереп ҡас, яман һүҙ әйтһәләр, кире һүҙ ҡайтарма... Ҡулыңдан килһә, туҡтап «Ҡуйығыҙ» тиген, зәғиф малайҙы яҡлағыҙ. Көсөң етмәһә, яҡшы һүҙ менән туҡтатып булмаһа, тиҙ кит, унда торма. Яман һүҙ ишетһәң, икенсе малайҙарға һөйләмә — ҙур гонаһ булыр. Оҫтаң янына кер-

ғәс, фәлән малай һуғышты, фәлән малай яман һүҙ һөйләне, тип һүҙ башлама. Һораһалар, зинһар, турыһын әйт, һорамаһалар әйтмә».

Тәрбиәнең төп нигеҙен ғаиләлә, унан ҡала мәктәптә күреп, Мөхәммәтсәлим былай ти: «Әй, мосолман балалары, бәлиғ булмаҫтан борон, егет вә ирлеккә еткәнсе, сабый заманда ата вә әсәнән ғилем вә әҙәпте ишетеп сыҡмаҡ кәрәктер. Мәҡәл һүҙ ҙә барҙыр: ағас йәшлектә бөгөлмәһә, ҡартайғас бөгөлөүе мөшкөлдөр, тиеү. Баланы сабый заманында тәүфиҡ вә әҙәпкә өйрәтмәк кәрәк. Нитәккә остаздан һабаҡ алмайынса ғалим булмайҙар. Ошондай өгөт-нәсихәт ишетмәйенсә һәм бала юлға кермәйҙер. Остазыңдың ижтиһады күберәк ғилем вә һөнәр өйрәтеүҙә, әммә өгөт вә нәсихәт ата-әсә эшелер. Әй, күңелемдең нуры, бәғеремдең параһы, әй өмөтөм бала, һабаҡ уҡығыл!»

Баланы аҙыу-туҙыуҙарҙан һаҡлар өсөн, ата-әсәләренә мөрәжәғәт итеп, Мөхәммәтсәлим Әҙәм менән Иблес хаҡындағы мәғлүм дини риүәйәтте иҫкә ала.

Әҙәм менән Һауа ожмах баҡсаһында ихласлап йөрөгәндә йылан ҡиәфәтенә ингән Иблес, ожмах алмағасынан алмаһын ауыҙ итергә ҡоторта бит быларҙы. Емештең тәмен, донъяның йәмен белерһегеҙ, ти. Еңелерәк ҡылыҡлы Һауа, ҡотҡоға бирелеп, алманы ауыҙ итә бит: тәмен татый, Әҙәмгә лә ҡаптыра. Тыйылған алманы ашаған өсөн алла асыуынан Әҙәм менән Һауаны ожмахтан ергә һөрә. Ожмах ҡәҙерен белмәгәс, ерҙә тир түгеп аҙыҡ-түлек табығыҙ, тир-йәш ҡойоп ғүмер һөрөгөҙ, тип ҡарғай алла. Улар менән бергә ҡотҡосо фәрештә — Иблес тә ергә һөрөлә. Шунан бирле Иблес әҙәмдәрҙе аҙҙырып, юлдарынан яҙҙырып ҡотҡо һалып йөрөй, имеш.

«Ни тәккә Әҙәм ғәлиәссәләм Иблес мәлғүндең ялған һүҙҙәре менән дәрәжәһенән төштө,— ти Мөхәммәтсәлим.— Ожмахтан сыҡты. Быларға ялғансы һәм уғры Иблес ғәйепләләр. Йәнә һәр кем тәкәббер булһа, маҡтансыҡ булһа, донъяла хурлыҡ күрмәй китмәҫ, сөнки был фиғылдәр дәхи Иблестекелер. Иблес тәкәбберлек ҡылды, мин Әҙәмдән артығыраҡмын, тип маҡтанды. Шуның өсөн һәм донъяла хур вә мәҡһүр булды».

Йәғни мосолман педагогы, мәҙрәсәләге хәлфә йә имам кеүек, балаға һәм уның ата-әсәһенә ялған һәм уғрылыҡтың, төрлө яманлыҡтарҙың сәбәпсеһе Иблес ҡотҡоһо һәм фиғылы тип, дин риүәйәтенсә аңлатырға тотона. Быларға дини вәғәз ялғанып китә. Һабағыңды доға менән ныҡыт, иманлы бул, шөкөрана ҡыл, шәриғәт ҡағиҙәләрен үтә,

---

*ижтиһады* — тырышлығы; *мәҡһүр* — ҡәһәрле; *мөбтәлә* — дусар.

ата-әсәнде тыңла, күңеленде изге эштәргә күңдер, хәйерһеҙ харам эштәрҙән һаҡлан. Бәхетһеҙ кеше хәйерһеҙлеккә мөбтәлә булыр, тәкәббер булма, ғазазилдай яуыз телләнмә, аламалыҡ ҡылма, шайтан нәфсеһенә бирелмә, тип вәғәзләй.

Йәғни әҙәмде әҙәпле һәм тәүфиҡле, белемле һәм инсафлы итер өсөн мәғрифәт эшендә динде лә ҡушып файҙаланырға уйы. Унынса заманаһының уҡымышлылары, мәғлүмәтле муллалар, ғилем эйәләре генә баланы мәғрифәтле һәм әҙәпле итешер заттар, рухи асҡыс улар ҡулында. Бала күңеле аҡ ҡағыҙ, ни яҙһаң шул ҡала, бала зиһене — лакмус, ни һөйләһәләр, шул һеңә. Аҡыл эйәләре әйткәнсә, Tabula rasa — Бар мәғрифәтселәрсә шундайыраҡ фекер йөрөтә Мөхәммәтсәлим дә.

Өмөтбаев мәғрифәт юлы менән кешеләрҙең аңын, донъяны ағартыу өсөн мәғариф, уҡытыу-тәрбиә эшенә күсә. Ҡәләм хеҙмәтен дә шул эшкә егә.

Өмөтбаевтың йәнә поэтик һәләте бар. Уны ла мәғрифәткә бағышларға мөмкин бит. Шиғриәт эстетик зауыҡ өсөн генә түгел, тәрбиә сараһы ла булһын. Өгөт-нәсихәттең иң үтемлеһе, йоғонтолораҡылыр әле ул.

Шуға уның тәүге осорҙағы байтаҡ шиғырҙары мәғрифәтселек рухлы, дидактик йөкмәткеле. Ынйылар һәҙәптән нисек хасил булған шикелле, өгөт-нәсихәтле ынйы һүҙҙәр ярҙамында шағир кеше күңелдәренә ысын әҙәп-әхлаҡ орлоҡтары һалырға уйлай. «Брадарҙәр, ишетегеҙ хуш әҙәптән, нитәк хасил улыр ынйылар һәҙәптән, — тип башлай ул бер шиғырын. «Әҙәп тигән төп епте һин тотҡол, әҙәптән яҡшы раз булмаç» ти ул икенсе шиғырында.

«Васыят вә нәсихәт йырауы» тип исемләй Өмөтбаев икенсе бер назымын. Ул нәҡ ошо нәсихәт рухына көйләнгән дә инде.

Ошоңа инандым мин ғәрип өмәт,
Мин Мөхәммәтсәлим, атам Ишмөхәммәт,
Балаларым, туғандарым ҡылың ғиззәт.
Быны яҙам сәләмәт саҡтарымда.
Васыятым былдыр һеҙгә, балаларым,
Йә булмаһа, туғандарым, ағай-энем;
Һис тә былар булмаһа, дуçым-ишем,
Ишетегеҙ хәлдәрем бар саҡтарында.
Был вафаһыҙ донъя беҙгә бирмәç аман,

---

*брадарҙәр* — туғандар; *раз* — серле ни; *вафаһыҙ* — ышанысһыҙ; *аман* — тыныслыҡ, именлек.

Шатлыҡты бирһә, алды бик тиҙ заман.
Бер сәғәтлек донъя өсөн булма яман,
Итәғәтлек ҡыл сәләмәт саҡтарыңда.
Был рөтбә наҙанға ғалим бирмәҫ,
Ижтиһад ҡыл ғилемгә йәш саҡтарҙа...
Хеҙмәт итһәң мәслихәт һәм илеңә,
Ебәк билбау булыр ул үҙ билеңә.
Ҡыл ярҙамың форсатың бар саҡтарыңда.
Форсат булыр, туҫтағы уның тулы булһа,
Һандуғастар баҡсаһында һайрап торһа,
Инәләре, бәпкәләре шунда булһа,
Шөкөр кәрәк дәүләтең бар саҡтарыңда.

Шулай автор үҙендә көс-ғәйрәт һәм форсат бар саҡтарҙа ғилемгә ижтиһад ҡылып, илеңә мәслихәт менән хеҙмәт итеп йәшәргә өндәй.

«Нәсихәт» исеме менән «Йәдкәр» китабында баҫылған икенсе бер назымы М. Өмөтбаевтың мәғрифәтселек поэзияһының төп мотивтарын бергә йыйған үҙәк шиғыр кеүек ҡабул ителә. «Һәр кемдең ҡалыр бер йәдкәре... уның өсөн ынйылар сәселер һәҙәптән»,— тип автор үҙенең яратҡан төп уй-ниәтен әйтеп бирә. Ә ынйылар сәселер өсөн «төҙөйҙәр байҙар биналар, уның өсөн яҙалар хәйрат даналар». Йәғни рухи ынйыларҙы кеше күңелдәренә сәсер кешеләрҙе ғилемле итер өсөн уҡытыр биналар һалырға кәрәк, хәйрат даналар — уҡымышлылар китаптар яҙырға тейештәр икәнлеген дә атап әйтә.

Артабан автор алда беҙ «Йәдкәр» буйынса килтерелгән һәм сәсмә формала һөйләгән өгөт-нәсихәттәрен, хәҙер шиғыр юлдарына һалып, яңынан тәкрарларға, шиғри һүҙ итеп еткерергә тырыша кеүек. Ул йәнә сабый балаға өндәшә: «Кил, эй сабый, үҙеңде хуп төҙәткел, яманға барма, яҡшы юл күҙәткел...» Унан ата-әсәһенә әйтә: «Балаң булһа, былдыр уға нәсихәт: кисә көндөҙ өйрәткел иманға, бәлиғ булһаң, эйәрмә тип яманға. Фарыздарҙан тип ғилем, динде».

Бала — йәш йүкәләр. Китһә бруска,
Алырҙар йүкәһен, ҡалыр ҡурыска.
Йүкәнең ҡәҙере бар, эшкә алалар,
Ағасын күберәк утҡа яғалар.
Ағастың яҙмышы нисбәт балаға
Үҙең тәрбиә ҡыл, бирмә ҡылаға.

---

*рөтбә* — дәрәжә; *ижтиһад* — тырышлыҡ.

Алда автор баланы тиҙ бөгөп булыр йәш ағасҡа оҡшатһа, хәҙер уны йәш йүкә менән сағыштыра. Артабан күрербеҙ әле: «Ҡайыш менән йүкә» тигән кинәйәле мәҫәлен дә яҙыр.

Алыр булһаң бер остан ғилем донъя,
Уның да шартылыр — тәүфиҡ, бик аңла.
Сеү, донья ғилеме бер сикһеҙ мишәлер
Табиптары бере бер юл тишәлер.

«Әгәр тәүфиҡ вәҡар булһа кешелә, булыр хикмәт уның һәр ҡылмышыла» тип әхләҡтән килер ғәмәлде лә раҫлай автор. Әммә ләкин шул уҡ ваҡытта көнбайыш илдәрендәге, йәнәһе, төрлө һүҙ менән әҙәмдәр башын бутарға тырышҡан төрлө әһелдәрҙе — нигилистарҙы, социалистарҙы ҡырҡа кире ҡаға, мосолманға хаҡ һүҙенә нығыраҡ ышанырға димләй. Шулай итеп, әҙәмде тәүфиҡлы, тәрбиәле, ғилемле итергә өндәр өгөт-нәсихәттәрен йыш ҡына дини этик ҡараштар менән дә һиплəп ебәрә.

Тырыштарға әйтер бер шиғары шул:

Ғилем берлә вәли булһаң,
Ғәза берлә ғали булһаң,
Һөнәрҙәрҙә әжге булһаң
Мөхәббәт булһын илдәрҙән!

Йәғни Мөхәммәтсәлимдең кешене баһалауҙағы төп үлсәме ғилем менән ни дәрәжәлә мөнәсәбәтле, көрәше ниҙә икәнлеге, ниндәй һөнәрҙәргә эйә булыуы менән бағлы. Уныса, ғилем, һөнәр, шулар өсөн көрәш — кешенең кешелеклеген, бар тәрбиәһен, ҡабиләтен билдәләй. Ошо нөктәнән сығып, ул үҙе белгән, хөрмәт иткән ғилем эйәләрен ололай, шуларҙың М. Биксурин, Ғ. Баязитов, И. Гаспринский кеүектәренә хатта махсус мәҙехтәр бағышлай. Шиһабетдин Мәржәни ише оло шәхестәрҙе өлгө итә.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың мәғрифәтселек ҡараштарының билдәле бер система ала башлауы һикһәненсе йылдар мәғариф эшенә тартылған, ғалим-гөләмәләр менән тығыҙыраҡ аралаша башлаған Өфө осорона ҡарай. Мәктәп, мәҙрәсәләрҙә, приюттарҙа, шәхси йорттарҙа дәрестәр биреү, уҡыу китаптары әҙерләшеү был өлкәлә тәүге йомғаҡтар яһарға мөмкинлек аса. Һуңыраҡ баҫылып сыҡҡан «Мөхтасар әл-викайә», «Әлифба иҡтиҡад баяны...» исем-

---

*вәҡар* — етди, ололарса.
*шиғар* — лозунг; *вәли* — изге, изгелекле; *ғали* — бөйөк; *әжле* — алдынғы.


و النظم والنثر والثاني عشر كلمة ان تفيد ان معنى
المصدر احدهما الر مثل رفتار وگفتار وكردار وثانيهما
كى مثل بخشندگى وشرمندگى بالكاف الفارسى والثالث
عشر كلمة تفيد معنى الظرفية وهى دان مثل قلمدان و
سرمه‌دان

فصل

فى بيان اليا التحتانية اعلم ان اليا فى الفارسية ثمانية انواع
الاول تفيد النسبة مثل بخارى وموسوى وخراسانى
والثانى يا التعجب مثل چه مردى والثالث يا الخطاب
مثل گفتى وآمدى والرابع يا المصدرية مثل نواختنى وبرد
اشتنى وكشتنى وزدنى يعنى لايق نواختن وبرداشتن
وزدن والخامس يا التنكير والوحدة مثل مردى واسبى
بدان راه مى آمد يريد به رجلا غير معلوم والسادس يا

*М. Өмөтбаев яҙған һәм үҙе төшөргән һүрәтле ҡулъяҙманан бер өлгө.*

ле ҡулланма китаптары шул уҡытыу-тәрбиә тәжрибәләре нигеҙендә тыуһа, 1897 йылда донъя күргән атаҡлы «Йәдкәр» йыйынтығы ла мәғрифәтсел шиғырҙары менән бергә төрлө өгөт-нәсихәтле яҙмалар, хатта дәрестәрҙә ҡулланылыр өлгөләр менән аралаш ине.

Күпселек мәғрифәтселәр кеүек, М. Өмөтбаевтың мәғрифәтселек ҡараштарының баштан уҡ көслө яғы шунда, ул мәғариф эшен прогрестың мөһим шарты һәм сараһы итеп ҡарай, уға ҙур өмөт бағлай. Йомшаҡлығы ла шунда, мәғрифәтселекте берҙән-бер универсаль сара итеп иҫәпләй. Уны заманаһының төп идеологияһы диндән айырмай.

Мөхәммәтсәлимде өгөт-нәсихәтсе булараҡ әллә ни маҡтап булмай. Ул күберәк вәғәз һөйләй. Тәүге осорҙа уның мәғрифәтселек фекерҙәре шаҡтай сикле һәм ҡаршылыҡлы әле.

4

Мөхәммәтсәлим — эшмәкәр кеше. Ул өгөт-нәсихәт, бигерәген вәғәз һөйләү менән ҡәнәғәтләнеп ҡала торған кеше түгел. Ул, тынғыһыҙ әҙәм, халыҡты аң белемле, әхлаҡлы итешеү хаҡында өҙлөкһөҙ уйланыу менән бергә, шуларҙы ғәмәлгә ашырыу юлдарын эҙләй, хәрәкәт итә. Хәрәкәттә бәрәкәт икәнен яҡшы белә. Ижтиһадтың иҡтисадҡа — экономикаға бәйлелеген яҡшы аңлай.

Халыҡҡа кәсеп, һөнәр эше кәрәк, ерҙәрҙе һаҡламаҡ һәм файҙалана белмәк шарт, хоҡуҡтарҙы яҡламаҡ һәм дауламаҡ тип, ул әле лә, Өфөгә күскәс тә көн-төн саба. Әле волостан килгәндәргә прошение яҙып земствоға йүгерә, әле губерна суд палатаһына шикәйәтен төҙөп бирә, әле гласный булып, халыҡ мәнфәғәтен яҡлап, мәғариф эштәрен ҡуҙғатып, губерна земствоһы йыйылышы трибунаһына күтәрелә.

Хәҙер ҡалала үҙ көнөн һәм йүнен бер яйға һалып алғас, шунда ғалим-ғөләмәләр араһында һәүетемсә генә йөрөп, үҙенең тәғәйен тәржемәселек вазифаһы менән генә шөғөлләнгәндә лә ярар ине лә бит. Донъяһы теүәл, эше тыныс. Юҡ шул, ҡанына һеңгән мир эшенән, ғәүам ғәменән башҡа йәшәй алмай ине ул тынғыһыҙ йән.

Ул һаман өйәҙҙең һайланып ҡуймыш гласныйы, йәғни, үҙенсә әйткәндә, ғәүам ходатайы. Гласныйҙың йәмәғәт эше баштан ашмалы. Волоста саҡта ер-мир эше тип бар көсөн фиҙа ҡылды.

Өфөгә күскәс тә, өйәҙ йыйылышы Мөхәммәтсәлимде яңынан гласный итеп һайланы. Өфө губернаһының губерна һәм өйәҙ земство управалары бар. Ике управа ла

Өфөнөң үҙендә. Өфө өйәҙендә һайланған ун ике гласный араһында Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев мосолмандарҙан бер үҙе. Йәғни ерле халыҡ тормошон, башҡорт-татарҙарҙың үҙ хәстәрҙәрен яҡшыраҡ белгән һәм күберәк хәстәрләр берҙән-бер вәкил.

Губерна һәм өйәҙ гласныйҙарының күбеһе фабрикант йә баяр, дворян йә ҙур түрә. Йәғни үҙ иштәрен, байҙар мәнфәғәтен яҡлар кешеләр. М. Өмөтбаев, дворяндар рәтенә инһә лә, башҡорт араһынан сыҡҡан, халыҡты аңлар зат. Уны өйәҙ халҡы, егерме йыл буйы волоста старшина булып эшләүе дәүерендә, үҙ кеше итеп бөткән. Абруйы ҙур. Шуға, Өфөгә күсһә лә, уның кандидатураһына сат йәбештеләр. Өйәҙ үҙәгендә йәшәүе түрәләргә лә яйлы ине.

Хәҙер ҡала кешеһе Мөхәммәтсәлим ҡәҙимге ер, йорт, волость хәстәрҙәре менән бергә гласный вәкәләтлегендә өйәҙ мәғариф эштәренә диҡҡәтлерәк була башланы. Уны Өфө өйәҙ земствоһының мәктәп, мәҙрәсәләр эше буйынса төрлө комиссиялар составына индерҙеләр. Өйәҙ мосолмандары араһындағы мәғариф, мәҙәниәт мәсьәләләрен тотошлай уға йөкмәттеләр.

Земствоның әллә ни хоҡуҡтары булмауынан сығып, В. И. Ленин уны заманында Россия дәүләт идараһы арбаһының бишенсе тәгәрмәсе тип атағайны.

Шулай ҙа, земстволар губернатор күҙәтеүе аҫтында һәм дворяндар ҡулында булыуға ҡарамаҫтан, улар юлкүперҙәр төҙөү, халыҡ мәғарифы, һаулыҡ һаҡлау, ваҡ кустар хужалыҡтарҙы юлға һалыу өлкәһендә байтаҡ эштәр башҡара алдылар.

Үҙенең гласныйлыҡ хоҡуғын файҙаланып, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев халыҡ мәғарифын юлға һалыуҙа байтаҡ мәсьәләләр ҡуҙғатты. Уның хөкүмәт ҡаршыһында ҡуйған иң ҡыйыу талабы Россия мосолмандары, шул иҫәптән башҡорт һәм татарҙар араһында уҡыу һәм уҡытыуҙы туған телдәрендә алып барыуҙы дәүләт күләмендә хәл иттереү ине.

1881 йылда Өфө өйәҙенең нәүбәттәге VII земство сессияһында М. Өмөтбаев шундай программа менән сығыш яһай: «Мосолмандар араһында мәғариф эше бер ҙә алға бармай — ти ул трибунанан. — Европа ғилемен юғары һәм урта уҡыу йорттарында рустар менән бергә уҡығандар ғына ала. Улар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Балаларға, үҙ телдәрендә башланғыс белем бирмәй тороп, рус телендә төрлө фәндәр уҡыуҙа мосолмандар уларҙы ағартыуҙы түгел, ә бары көсләп руслаштырыуҙы күрә... Аҙмы-күпме грамоталы булған мосолмандар, шул иҫәптән мин дә башҡорттар араһында Европа фәндәрен уларҙың үҙ туған тел-

дәрендә уҡытыуҙы мәғрифәт таратыуҙағы иң мәшәҡәтһеҙ һәм иң дөрөҫ юл тип һанай. Европа халҡы байтаҡ фәндәрҙе көнсығыш телдәренән үҙ теленә күсергәне һәм Европалағы һәр бер милләт фәнде үҙ туған телендә уҡып белем алған кеүек, Европа фәндәрен дә көнсығыш телдәренә әйләндереү кәрәк. Аҫаба башҡорт булараҡ, миңә шул мәғлүм: уҡымышлы кешеләр, шәриғәт менән бер рәттән, тарихи романдар уҡырга бик һәүәҫ; тик яңы китаптар юҡлыҡтан, башҡорт күберәк үҙ китабын һөйләүсе булып ҡала».

Россия самодержавиеһы бүтән халыҡтарҙы көсләп руслаштырыу политикаһы алып барған заманда М. Өмөтбаев быға ҡаршы ҡыйыу һәм принципиаль талаптар ҡуя: мәғариф өлкәһендә һәр халыҡтың туған телендә уҡыуҙы индереү һәм законлаштырыу; рус телен иректе өйрәнеү; Европа телдәренән, шул иҫәптән рус теленән бүтән телдәргә фән дәрестәрен, төрлө китаптарҙы тәржемә итеү; туған телдә әҙәбиәтте үҫтереү...

Шул уҡ ваҡытта М. Өмөтбаев бер нисә ҙур конкрет тәҡдимдәр ҙә индерә. «Мосолмандарҙы донъяуи фәндәр һәм бөгөнгө көн менән таныштырыуҙы башлап ебәреү маҡсатында, земство йыйылышынан хөкүмәт алдына, беренсенән, уҡыу әсбаптарын татарсаға тәржемә итеп баҫтырыуҙы, икенсенән, татар телендә газеталар, география һәм тарих карталары сығарыуҙы хәл итеүҙе юллауын һорайым»,— ти ул сығышында.

Берҙән, Россия мосолмандары араһында был осорҙа бер генә фән дә туған телдәрендә уҡытылмаған заманда туған телдә уҡытыу мәсьәләһен күтәреү бик мөһим социаль-политик әһәмиәткә эйә. Икенсенән, Россия мосолмандары араһында бер генә газета ла үҙ туған телдәрендә сыҡмаған заманда, туған телдә газета сығарыуҙы ҡуйыу шулай уҡ баһалап бөткөһөҙ ижтимаги-политик талап.

Милләттәрҙең хоҡуғы, мәғариф эштәрен туган телдә ҡуйыу мәсьәләһендә М. Өмөтбаев аҙағыраҡ тағы ҡыйыуыраҡ политик фекергә килә. «Әҙәбиәт һәм мәғрифәт күберәген үҙ хөкүмәте булған халыҡтарҙа алға киткән, — ти ул бер яҙмаһында. — Аң-белем биреү, әҙәбиәтте үҫтереү хөкүмәт тарафынан хәстәрлек күргәндә генә үҫә, тигән фекер Көнсығыштагы аҡыл эйәләре миҫалында ла раҫлана».

Үҙ дәүләттәре булмаған халыҡтарҙың прогресҡа өлгәшеүгә, туған телдәрендә уҡыуға хоҡуҡтары ла юҡ, тигән ҙур политик һығымта яһала асылда. Яҙмыштарын инә ҡортһоҙ ҡалған умартаға оҡшатып, шулар кеүек бер ҙә

хәстәрлекһеҙ, терәкһеҙ йәшәй бирәбеҙ, тигән үкенесен дә әйтмәй ҡалмай Өмөтбаев.

Былар Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың политик яҡтан үҫешен, милләт, мәғариф мәсьәләләрс хаҡында ҡыйыу фекер йөрөтөүен һөйләүгә тороштор. Тимәк, уҡыу-тәрбиә эштәре хаҡында ярым дини рухта өгөт-нәсихәт һөйләгән һәм яҙған Мөхәммәтсәлим тора-бара мәғрифәтселек ҡараштарында демократик, хатта революцион-демократик ҡараштар кимәленәсә күтәрелә.

«Йәмғиәт тәртиптәрс» исемле, Өфө губернаторына адресланған яҙмаһында иһә башҡорт халҡының бөлөүенең, экономик һәм культура йәһәтенән артта ҡалыуының сәбәптәрен социаль-политик факторҙарға ла бәйләп аңлата ул. Ундай фекерҙәрҙе ҙур тормош тәжрибәһенә таянып, инанып алдынғы ҡарашлы кеше генә әйтә ала.

Батшалыҡтың төрлө милләттәрҙе дискриминациялауына, төрлөсә кәмһетеүҙәренә ҡаршы, үҙ туған башҡорт халҡының һимммәтен һәм тиң дәрәжәһен яҡлап фекерҙәрен тура әйтеүҙән дә тыйылып ҡалмаңы Өмөтбаев. «Башҡорт халҡы фәнгә һәм һөнәргә бик һәләтле,— тип яҙҙы «Йәмғиәт тәртиптәре»ндә. — Мәҫәлән, Ырымбурҙағы Неплюев исемендәге кадет корпусының Азия эскадронында уҡыусылар араһында башҡорт егеттәре айырылып торған. Башҡорттар тәкәббер холоҡло түгелдәр, ялағайланырға, ярамһаҡланырға яратмайҙар». Бында автор, ҡайһы бер рус түрәләренең һәм ғалимдарҙың башҡорттарҙың фәҡирлеген һәм артта ҡалыуын, йәнәһе, уларҙың ялҡаулығынан тип яла яғырға тырышыуҙарына ҡаршы әйтеп, уның сәбәптәрс ниндәйҙер ҡылыҡ, психологик хәл менән бәйләнмәүенә ишаралай.

Шуныһы мөһим, М. Өмөтбаевтың земство трибунаһынан һөйләгән һүҙҙәрс, тәҡдимдәр рәүешендәге яҙмалары ҡоро һүҙ генә булып ҡалмаңы. Ул шул һүҙҙәрен яҡлап, ғәмәлгә ашырырға тырышып, бар көсөн һалды. Өфө земство управаһы һуҙыбыраҡ, һуңлабыраҡ булһа ла, мәҫәлән, башҡорт һәм татар халыҡтары араһында баҫтырып таратыр өсөн тәржемә комиссияһы төҙөргә мәжбүр булды. Ул комиссияла М. Өмөтбаев та эшләне. Бер нисә популяр брошюра тәржемә итеп сығарылды. Уның география, тарих буйынса тәржемәләре, фәнни эштәре ошо ерлектә активлашып китте. Мөхәммәтсәлим татарса газета сығарыу буйынса ынтылыштар яһап ҡараны. Газета сығарыу хаҡында уның юллау хаттары, проекттары бар. Ләкин әлегә былары таш стенаға бәрелгәндәй селпәрәмә килде.

Өфө ҡалаһы Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың иждимағи һәм фәнни эшмәкәрлегә өсөн байтаҡ мөмкинлектәр асты.

Губерна үҙәгендә фән һәм ижад менән шөғөлләнер өсөн күпмелер шарттар һәм үҙенсә мөхит бар. Түләүле булһа ла, губерна статкомитетының китапханаһы эшләй, дүрт-биш китап кибете һатыу итә. Диниә назаратының китапханаһы һәм архив фонды бай ғына. Өфөлә «Уфимские губернские ведомости» газетаһы, «Вестник Уфимского земства» журналы сыға. Губерна статкомитеты һәм ҡала думаһы «Уфимский календарь», «Адрес-календарь Уфимской губернии», «Памятная книжка Уфимской губернии» кеүек белешмә китаптар баҫтырып сығара.

М. Өмөтбаев хәҙер үҙәк һәм губерна газеталарын һәм журналдарын даими уҡып бара. «Уфимские губернские ведомости», «Уфимская земская газета»ларында башҡорт этнографияһы, көнкүреше хаҡында мәҡәләләрен баҫтыра. Земство сессияһында мәғариф эштәре тураһындағы сығышы «Вестник Уфимского земства» журналының 1882 йылғы дүртенсе сығарылышында донъя күрә. 1883 йылда «Справочная книжка Уфимской губернии» йыйынтығында «Приметы, поверья, поговорки и изречения магометян Уфимской губернии» исеме менән фольклор-этнографик хеҙмәте баҫыла. «Башҡорттар» тигән тәүге тарихи-этнографик эшен яҙа.

Башҡортостан тарихы, башҡорт этнографияһы һәм фольклоры буйынса русса мәҡәләләр, хеҙмәттәр яҙған башҡорт уҡымышлыһын рус ғилми-культура йәмғиәтселеге тиҙ күреп ала. Өфөләге рус ғалимдары һәм журналистары М. Өмөтбаевтан фәнни консультациялар ала, заказдар бирелә. Тиҙ арала ул Р. Г. Игнатьев, М. В. Лоссиевский, П. И. Добротворский, Д. С. Волков, Н. Л. Гурвич кеүек ил өйрәнеүселәр менән яҡындан танышып, дуҫлашып өлгөрә. 1883 йылды М. Өмөтбаев Рус география йәмғиәтенең Ырымбур бүлеге ағзаһы итеп һайлана.

Өфөнөң өс йөҙ йыллығын үткәреү комиссияһында эшләгән сағында Өмөтбаев Өфө һәм Башҡортостан тарихы буйынса байтаҡ материалдар туплай. Шулай итеп ул рус ғалим-ғөләмәләре даирәһендә лә билдәле шәхес булып китә.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевҡа Өфөлә йәшәгән рус ғалимдары, алдынғы интеллигенция вәкилдәре менән тығыҙ аралашыу күп нәмә бирә. Ул ғилем донъяһына, иждимағи эшмәкәрлеккә киңерәк ҡарай башлай. Араларында фәһем

алырҙай, кәңәшләшеп, бергәләп эшләрҙәй теләктәш коллегаларын таба.

Уны айырыуса археолог, ил өйрәнеүсе ғалим Руф Гаврилович Игнатьевтың (1819—1886) төрлө яҡлы тынғыһыҙ фәнни эшмәкәрлеге һоҡландыра. Мәскәүҙә тыуып үҫкән, Лазарьев исемендәге көнсығыш телдәре институтын тамамлаған һәм хәҙер күп йылдар Өфөлә йәшәгән, Башҡортостандың археологияһы, тарихы менән шөғөлләнгән ғалимдың хеҙмәттәренә һоҡланырлыҡ һәм фәһем алырлыҡ та шул: Р. Г. Игнатьев — М. Өмөтбаев менән танышҡанда инде — археология, тарих, фольклор буйынса биш йөҙләп мәҡәләләр, ҙур хеҙмәттәр авторы. «Өфө губернаһында нуғай валдары», «Ырымбур крайы тарихына бер ҡараш», «И. Ҡ. Татищев Ырымбур крайының икенсе начальнигы», «Өфөнө ҡамау», «Ҡараһаҡал — Башҡортостандың ялған ханы» тигән хеҙмәттәре айырым иғтибарға лайыҡ. М. Өмөтбаев Р. Г. Игнатьевтың йәнә «Записки Оренбургского отдела Русского географического общества» журналында баҫылған Салауат Юлаев тураһындағы, Ырымбур губернаһы мосолмандарының ҡулъяҙмаларҙа һәм телдән һөйләүҙә һаҡланып ҡалған хикәйәттәре, йырҙары хаҡындағы яҙмаларын ҡыҙыҡһынып уҡый. Өфө, Ырымбур, Уральск, Троицк архивтары менән яҡшы таныштығын белеп, Башҡортостан тарихы буйынса бай материал туплағанын күреп, унан күп тапҡырҙар консультациялар ала, үҙе көнсығыш сығанаҡтары хаҡында белгән мәғлүмәттәре менән уртаҡлаша.

М. Өмөтбаев дүрт-биш йыл булһа ла Өфөлә икенсе билдәле краевед Михаил Владимирович Лоссиевский-Уфимский (1850—1884) менән аралашып ҡала. М. В. Лоссиевский күберәк башҡорт культураһы һәм фольклоры менән ҡыҙыҡһына. Самарҙа, Ырымбурҙа, Өфөлә сыҡҡан газеталарҙа был хаҡта байтаҡ ҡына мәҡәләләрен баҫтыра. 1883 йылда «Справочная книжка Уфимской губернии» йыйынтығында донъя күргән «Легендалар, риүәйәттәр һәм шәжәрәләр буйынса Башҡортостандың һәм башҡорттарҙың үткәне» исемле хеҙмәте ғалим-ғөләмәләрҙең иғтибарын биләй. Хәҙер шул яҡшы мәғлүм: был хеҙмәттең «Башҡорттарҙың боронғо дине һәм көнкүреше», «Башҡорт һөйләштәре», «Башҡорттарҙың рухи донъяһы һәм әҙәбиәте» тигән бүлектәрен яҙыуҙа М. Өмөтбаев туранан-тура ҡатнашлыҡ итә һәм үҙендәге материалдарҙы авторға тәржемә итеп бирә.

Башҡортостандың тарихын, башҡорт тормошон өйрәнеү буйынса киң билдәле яҙыусы-народник Филипп Диомидович Нефедов (1838—1902) хеҙмәттәрен уҡып ҡына

түгел, Башҡортостанда экспедицияларҙа булғанда, Өфө архивтарында эшләгәндә М. Өмөтбаев уның үҙе менән дә танышҡан булырға тейеш. Ф. Д. Нефедовтың 1880 йыл «Русское богатство» журналында баҫылған «Движение среди башкир перед Пугачевским бунтом; Салават — башкирский батыр» исемле тарихи хеҙмәте, 1884 йыл «Русские ведомости» газетаһында сыҡҡан «На восточной окраине» тигән Башҡортостан хаҡындағы очерктар циклы документаль сығанаҡтары, Башҡортостандың Россияға ҡушылыуының прогрессив характерҙа булыуы тураһындағы трактовкаһы, башҡорт восстаниеларын объектив сағылдырырға ынтылышы, башҡорт ерҙәренең нисек таланыуы, уның Филатов ише «ҡаһармандарын» күрһәтеүе Өмөтбаев хеҙмәттәрендә лә ауаздашлыҡ табыуы, үҙенсә дауам ителеше осраҡлы түгел булһа кәрәк.

Өфөнөң нигеҙләнеүенә өс йөҙ йыл тулыу уңайы менән төҙөлгән юбилей комиссияһында эшләгәндә М. Өмөтбаев ошо комиссия председателе, Өфө ҡалаһы башлығы Д. С. Волков менән яҡындан таныша. Хәйер, ул Волковты элегерәк тә яҡшы белә ине: ҡала башы булыу вазифаһынан файҙаланып, унар меңәр дисәтинә башҡорт ерҙәрен ҡулына төшөргән ҡомһоҙ түрә булараҡ. Әүәл ул сиркәүҙә пастырь булыуынан, халыҡ араһында пастырь кейемен чиновник мундирына алыштырған карьерист тигән яманаты ла үҙенә эйәргәйне.

Шуныһы ғәжәп: яман байып алған шул башлыҡ хәҙер Өфөнөң тарихын, Башҡортостандың үткәне тураһында яҙыр өсөн архивтарҙа көн-төн материал туплау менән мәшғүл. Берәмтекләп йыйылған күсермәләр, документтар, төрлө ҡулъяҙмалар үҙҙәре генә лә есе том тәшкил итә. Волковтың ҡыҙыҡһынмағаны, төпсөнмәгәне юҡ: ул ил, губерна тарихынан, башҡорт тормошонан, этнография, әҙәбиәт, дин мәсьәләләренән булһын. М. Өмөтбаев уға, В. А. Ефимов «Д. С. Волковтың әҙәби мираҫы» (Өфө, 1912) тигән китабында яҙғанса, Өфө губернаһы башҡорттары тураһында, йәнә ғәрәп, төрки телдәрендәге сығанаҡтарҙан тәржемә итеп бик күп материалдар тапшыра. Дин, Диниә назараты тарихына бәйле ләре лә инеп китә. Д. С. Волков М. Өмөтбаевтың был эштәренә, тырышлығына тейешле баһаһын бирә: уның төҙөгән тарихи яҙмаларын атаҡлы рус тарихсыларының мәғлүмәттәренә һәм бирелешенә тиң ҡуя.

Өфө губерна статистика комитеты секретары һәм «Уфимские губернские ведомости» газетаһының рәсми булмаған бүлеге редакторы Н. Гурвич М. Өмөтбаевҡа губерна мосолмандарының, атап әйткәндә башҡорттарҙың

этнографияһы, тарихы, рухи донъяһы хаҡында мәғлүмәттәр бирергә үтенгәс, Мөхәммәтсәлим фольклор, этнография, әҙәбиәт хаҡында русса яҙған өс мәҡәләһен тапшыра.

Шулай итеп, Өфөлә йәшәй башлауының тәүге йылдарынан уҡ М. Өмөтбаевтың фәнни-тикшеренеү эшмәкәрлеге рус ғалимдарының һәм әҙиптәренең туранан-тура ҡатнашлығында дәррәү башланып китә.

Йәмғиәт эшмәкәре һәм әҙип П. И. Добротворский-Кармасанов (1839—1908) менән аралашыу һәм күпмелер бергә эшләү М. Өмөтбаевҡа бәхетле яҙмыш булып әүерелә. Демократик ҡараштары, ғәҙеллеге менән халыҡ араһында абруй ҡаҙанған Петр Ивановичты Мөхәммәтсәлим Ишмөхәммәт улы уның мировой посредник булып эшләгән йылдарынан уҡ яҡшы белә. Ә етмешенсе йылдарҙа Өфө өйәҙенең мировой судьяһы булғанда иһә суд палаталарында халыҡ мәнфәғәтен яҡлап бергә сығыш яһағанда яҡындан танышып ысын теләктәштәргә әйләнделәр. Башҡорт ерҙәрен талауға ҡаршы көрәштә, алдап-талап ер алыусыларҙы фашлауҙа Петр Ивановичтың сығыштарында, уның тырышлығында Өфө губернаһында ике тапҡыр сенат ревизияһы ойошторолоуында Мөхәммәтсәлим иң яҡын таянысын тапты. Өфө өйәҙе земствоһының гласныйҙары булараҡ, земство йыйылыштарында ла улар бер төптән торҙолар. П. И. Добротворскийҙан М. Өмөтбаев халыҡ мәнфәғәтен яҡлап ҡыйыу көрәштә, демократик ҡараштарын ҡабул итеүҙә күп нәмәгә өйрәнде.

П. И. Добротворскийҙың башҡорттарҙың тормошон үҙе күреп белеп, психологияһын тәрән төшөнөп яҙған тиҫтәләгән хикәйәләре һәм очерктары араһында «Үҙ кеше» тигән хикәйәһе айырылыбыраҡ тора. Мөхәммәтйән исемле башҡорт волость старшинаһының мөләйем образын кәүҙәләндерә ул. Старшина эше яуаплы һәм мәшәҡәтле лә, түрәләргә лә, халыҡҡа ла ярарға кәрәк. Өмөтбаевтың да ундай старшиналарҙы күп күргәне, улар хаҡында хикәйә авторы менән һөйләшкәне лә бар. Башҡорттар Добротворский мировой посредникка, үҙе бер хикәйәһендә яҙғанса, «Эх, хазрет, хазрет! Ты самый наша душа знаешь. Наш своя людя» тип ҡарайҙар. М. Өмөтбаевтың тормош юлында Петр Иванович ана шундай үҙ кеше, хөрмәтле хәҙрәт булып ҡала.

## 6

Ҡадет корпусында уҡып йөрөгәндә Мөхәммәтсәлим дәрестә үткән бер риүәйәтте хәтерендә ныҡ ҡалдырыр. Ул скиф илсеһенең Александр Македонскийға һөйләгән һүҙе...

Борон бик күп илдәрҙе яулап алғас, Александр Македонский, шәреҡтә исемләнгәнсә, Искәндәр шаһ Ҡаф тауҙары аша скифтар иленә лә килеп сыҡҡан, имеш. Ҡара диңгеҙ буйҙарынан Урал тауҙарынаса йәйрәп ятҡан Скиф илен шаһ ғәскәре баҫып ала һәм талай башлаған. Шунан Скиф батшаһы Искәндәр шаһ менән һөйләшергә илселек ебәргән. Ғорур тәбиғәтле, үткер телле илселек башлығы шаһҡа былай тигән: «Әй, бар йыһанға баш булмаҡ Йыһангир шаһ, донъяға һыймаҫтай булып сикһеҙ нәфсеңә барып, бер ҡулың көн сығышын, икенсеһе көн байышын тотмаҡ, көн сырағы ҡояш нуры етер ерҙәрҙе эләктермәк итәһең, ахыры. Күрәһең, бар донъяның ер-һыуына, бар халыҡтарына баш булырға ниәтең.

Күпкә дәғүә итерҙән алда ана бер ағасҡа баҡ: күпме ғүмер үҫкән бер ағасты бер арауыҡта һәләк итергә була. Йә ағастың емешенә ымһынып, уға үрләп ботаҡтарын һындырып, ҡырып бөтөүең үҙ башыңа булмағайы. Ҡырмаҡ, емермәк өсөн аҡыл кәрәкмәй. Арыҫлан һынлы арыҫлан да бер мәл ҡош-ҡорт еменә әйләнә, иң ҡаты булатты ла тут ашай.

Әй, алыҫ илдәр шаһы, һиңә ни етмәй? Малмы, йәнме? Әллә илдәр туҙҙырып, йәндәр ҡыйып, тыныслыҡ боҙоп йөрөмәк кәсебеңме?

Беҙ, скифтар, дала балалары, бер кемгә лә ҡол булманыҡ, булмабыҙ ҙа. Ер-һыуыбыҙ, байлыҡ-тапҡаныбыҙ тәбиғәттеке. Күк тәңреһенән иңгән бүләк: һабан, уҡ вә һауыт. Шулар беҙҙе йәшәтә. Шуларҙы беҙ дуҫтарыбыҙ менән уртаҡлашабыҙ, шулар менән дошмандарыбыҙға ҡаршы торабыҙ. Һабан менән ер һөрөп, иген игеп йәшәйбеҙ, һауытынан аш ашайбыҙ, шарап эсәбеҙ. Уғы менән кейек аулайбыҙ, яу килһә, шуға тоҫҡайбыҙ. Шулай ил-еребеҙҙе, иркебеҙҙе һаҡлайбыҙ.

Ишетәбеҙ: һин Юнан шаһ, Фарсы, Һинд, Сир, Бактри батшаларын еңдең. Ярты донъя ҡулыңда. Ә нәфсең һаман туймай. Инде беҙҙе, скифтарҙы йотмаҡсыһың.

Ярай, беҙҙең далаларға үтеп ҡара: улар һинең меңәрләгән ғәскәреңде йотасаҡ. Әммә Скиф иленең сигенә етә алмаҫһың.

Уҡҡа — уҡ, ашҡа — аш беҙҙең яуап. Әгәр үҙеңде тәңрегә тиңләгең килә икән, тәңре кеүек бөйөк, һимmәтле, мәрхәмәтле бул, әҙәмдәр иркен, бәхетен урлама, ил-йорттарын хурлама. Шуны онотма: ҡыйырһытылмаған халыҡтар дуҫтарың булып ҡалыр, ҡыйырһытылғандары — дошман булыр. Батша менән ҡол араһында татыулыҡ юҡ.

Беҙҙе яулап, ҡурҡытып, дуҫ-яуҙаш яһай алмаҫһың. Бары тиңлектә, берлектә — дуҫлыҡ. Йөрәк һүҙе генә — тоғро

һүҙ. Яулашып түгел, ярашып, ярлыҡ яҙышып дуҫлашырға уйлайбыҙ.

Диңгеҙ аша Фракиә, Македония беҙгә йәнәш. Тимәк, беҙ күршеләш. Күршеләрҙең дуҫ-татыу булғаны хәйерле».

Бер кемдән дә кире, киҫкен һүҙ ишетергә ғәҙәтләнмәгән Искәндәр шаһ скиф илселәренең бил иҫкәртмәле һүҙҙәренән эстән ярһыһа ла тыштан үҙен тыныс тотҡан, ти. Илселәрҙе имен ҡайтарып ебәреп, икһеҙ-сикһеҙ скиф иленә яу уйынан кире ҡайтҡан, имеш.

Мөхәммәтсәлим дәрестәрҙә йәнә «Искәндәрнамә» дастанын, Зөлҡәрнәйен тураһында бүтән риүәйәттәр ишетте. Берәүҙәрендә Искәндәр тиңһеҙ йыһангир, икенселәрендә илаһи бер шаһ, өсөнсөләрендә яуыз илбаҫар итеп һүрәтләнгәйне. Аҙаҡ көнсығыш тарихсыларының «Тарихи Табари», башҡа китаптары менән танышты, тарих менән ныҡлап мауығып китте.

Беҙҙең эраға тиклемге иң боронғо тарихтың, хатта бынан мең ярым, ике мең йыл элгәргеләренең дә ярым легенда икәнен төшөндө ул. Меңәрләгән йылдар, унарлаған быуаттар үткән, ҙур илдәр, империялар ойошоп тарҡалған, дәүләтәр, халыҡтар алышынған, әллә күпме атаҡлы хандар, батшалар, ҡайсарҙар килеп киткән. Күпмеһе тарихтан эҙһеҙ, хәбәрһеҙ юғалған.

Башта халыҡ хәтере йәшәткән түгелме тарихты? Телдән һөйләнер легенда, риүәйәт, хикәйәт итеп. Халыҡ хәтере шулай ойоша башлаған булырға тейеш.

Искәндәр хаҡындағы риүәйәттәр, Табари тәуарихтары Мөхәммәтсәлимдә Ҡара диңгеҙ, Волга буйы, Урал яҡтары, ата-бабаларының боронғо тарихтарына ла килтереп сығарғандар. «Тарихи Табари» Искәндәр диуарҙарын, йыһангирҙың шимал (төнъяҡ) илдәренә яуҙарын, Болгарға еткәнен дә бәйән итә бит. Бер-береһен алмаштырғанын: Скиф, Сармат, Алан, Ҡыпсаҡ дәүләттәре һуң. Тик быларға бағлы хәҙер бары боронғо риүәйәттәр, бейек-бейек ҡурғандар, һөйәк-таштар, балбалдар, таш һындар ғына һаҡланып ҡалған. Улар серле шаһиттар булып уй-хыялдарҙы ҡуҙғыта.

Ана Йомран туғайҙары аша Ағиҙелдең арғы бейек ярҙарындағы Аҡташ, Мансаҙы тауҙары, мәмерйәләре үҙҙәре генә лә күпме серҙәр аҫрай, имеш-мимешле күпме легендаларға төрөнгән. Былар менән нисек ҡыҙыҡһынмай, төпсөнмәй түҙһен тынғыһыҙ Мөхәммәтсәлим уйы.

Аҡташ хаҡындағы легенданы ишеткәндер ул башта. Легенда уны айырым тәуарихтарға илтеп тоташтырғандыр. Улар шәкерт сағында уҡ ишеткән, уҡыған Искәндәр-Зөлҡәрнәйен риүәйәттәренә ялғанғанға оҡшай. «Был Аҡ-

таш ханды шәжәрәләрҙә күргәнебеҙ юҡ, — ти М. Өмөтбаев. — Мәгәр шаһ Зөлҡәрнәйен тимәкле мәшһүр зат шәриф тураһындағы «Шәрех камус» тигән «Океанус» китабының әйтеүенсә, ул донъя гиҙеп, мәғрип һәм мәшриҡты алып, Дәшти Ҡыпсаҡ сигенә еткәс, Мауәрди ҡалаһының батшаһы Яйгирҙан Аҡташ хандың кем икәнен ишетте».

Йәғни М. Өмөтбаевтың «Аҡташ хан» исемле ҙур риүәйәте Зөлҡәрнәйенден боронғо скифтар ерендә ойошҡан ҡыпсаҡтарҙың Дәшти Ҡыпсаҡ дәүләте ханы Аҡташ менән нисек бәйләнешенән башланып китә.

Искәндәр-Зөлҡәрнәйен — Александр Македонский ишетмеш Дешти Ҡыпсаҡ иле Ҡара диңгеҙҙән Урал тауҙарынаса һуҙылған иң дәү дәүләттәрҙең береһе икән. Ил башы Юш (Яуш) хан йыһандан киткәс, хан итеп кесе улы Таҡташ ҡуйылһа ла, оло улы Аҡташ ханлыҡты көс менән үҙ ҡулына төшөргән, ти. Зөлҡәрнәйен, Таҡташты хан итеп ултыртыуҙы һылтау итеп, Ҡыпсыҡ иленә яу асмаға хасланған. Башта илселәрен ебәргән. Илселәр ҡырҡ көнлөк юлды егерме дүрт көндә үтеп, Ағиҙел һыуы үҙәнендәге Аҡташ хан урҙаһына килеп еткәндәр. Вәзирҙәре илселек килде тигәс, Аҡташ хан һорамыш: «Искәндәр-Зөлҡәрнәйен ниндәй хан, кем илсе күндермеш?»— тип. Вәзирҙәре әйтер: «Эй, шаһ, Искәндәр йәнә бер шаһтыр, Румдан ҡупты, ғәжәм диярын алды, унан Хөрәсәнде, Һиндостанды, Ҡытайҙы, Төркөстанды, Бөрйәнде вә башҡа ил-диярҙарҙы алды. Искәндәр тигәндәре шул шаһтыр. Искәндәрҙән оло, ғаҡыллы зат аҙҙыр»,— тип.

Илселәрен саҡырып индергәс, Искәндәр шаһтары һүҙен Аҡбаш ханға белдермештәр: «Аҡташ хан Искәндәр шаһҡа баш ороп килһен, ханлыҡты Таҡташҡа бирһен, үҙе имен-аман, ил батыры булып ҡалыр», тип.

Аҡташ хан асыуынан шашып аҡырҙы ла былай тине: «Һис кем донъяла шаһтарҙан миңә ҡаршманы. Тәңре берәүгә ярҙам итһә һәм бәндә алыр. Итәк яу булмаһа, бер хәл-хәстә күрәсәкмен».

Хандың хәл-хәстә тигәне шаһтың үҙен ҡунаҡҡа саҡырып килешмәк икән. Хәст-хәйләһе ҡунаҡ иткәндә алдап, ғәскәрен ҡырып ташлап, үҙен әсир итмәк, имеш.

Хандың саҡырыуын ҡабул итеп Искәндәр шаһ килә, ҡунаҡ була. Әммә шаһ төш күреүенән, бүтәнен шөбһәләнеп, үҙен һаҡ тота. Хан хәйләһе беленгәс, оло яу ҡуба. Ағиҙел буйҙарында аҙна-айҙар буйы йөҙәр меңләгән ғәскәр һуғыша. Берсә Аҡташ хан сиреүе, берсә Искәндәр шаһ ғәскәре еңә яҙып ҡуя. Ниһәйәт, Искәндәр Аҡташ хан ғәскәрен ҡыйрата. Әммә Аҡташ хан Болғар ҡалаһына барып, унда ғәскәр йыйып, бер еңеп, бер еңелеп әллә күпме

һуғышмыш. «Хатта был Аҡташ тиклем хан һис бер шаһ Искәндәргә ҡаршы тормаған — ти М. Өмөтбаев, — Ахырҙа Аҡбаштың урҙаһын Искәндәр алғанмы мәғлүм түгел, сөнки беҙ күргән тәуарихтың ахыры юҡ ине».

Әлегә беҙ М. Өмөтбаев телгә алған был тәуарихты, «Шәреҡ ҡамус» тигән «Окианус» китабын таба алманыҡ. Бәлки ул ҡулъяҙма китап булһа юғалыуы ла йә ҡоро риүәйәт булыуы ла ихтимал.

Әммә нисек кенә булмаһын, Искәндәр, Аҡташ хан хаҡындағы, шуға оҡшаш бүтән риүәйәттәр, легендалар, хикәйәттәр халыҡ хәтеренең сағылыш формаһы булыуы менән ҡиммәтле. Улар боронғоноң тарих хәтере. Борондонан һаҡланған яҙма сығанаҡтар булмағанда легендалар, риүәйәттәр ярҙамға килә. Шуға ла тарихтың боронғо дәүерҙәре йыш ҡына халыҡ хәтере мәғлүмәттәре буйынса ла күҙ алдына баҫтырыла.

«Аҡташ хан» риүәйәте хаҡында М. Өмөтбаев былай ти: «Быны йәд итмәктән морад шул ине: был Аҡташ хандың беҙҙең Ағиҙел буйында төп йорто булып та, үҙебеҙгә хикәйәттәре ҡалмаған. Беҙҙең йортобоҙҙо сит йорт халҡы яҙған, ә үҙебеҙ белмәйбеҙ». Дөрөҫ, Аҡташ хан хаҡында халыҡта тәғәйен хикәйәттәре ҡалмаһа ла, Аҡташ тау, ундағы ханлыҡтар хаҡында айырым легендалар юҡ түгел. Мәжит Ғафури яҙып алған легенда ла үҙе бер иғтибарға лайыҡ.

«Ағиҙелдең уң ярында, Инйәр менән Эҫем һыуының Ағиҙелгә ҡойған ерендә, Аҡташ тигән бейек тау өҫтөндә һәмишә төрлө урында ҡала әҫәрҙәре бар, — тип яҙа М. Өмөтбаев. — Тәуарих әйтә: «иңе һәм оҙонлоғо етешәр фәрсәх» тиеү. Һушы, аҡылы бар әҙәмгә был ер шөйлә дәүләт ғибрәттер ки. Нисә мең йыл был урындан тороп, мәшриҡ тарафына — Ҡытайға, Һиндостанға, Ҡавказға тиклем хөкөм ҡылған... Дәшти Ҡыпсаҡ тигән мәшһүр империяның тәхетгяһы беҙҙең Табын иленең Аҡташ тауында булған, имеш... Быларҙы тәфтиш ҡылырға теләгән әҙәм «Ҡаһарман вә Искәндәрнамә»нең бөтә тәуарихтарын ҡараһын. Беҙ күргән тәуарих Зөлҡәрнәйендең ун бишенсе жилдендә, йәғни китабында. Ошондай ҡаһарман китаптары нисәмә жилд тиҙәр. Быға иғтимад ғәжәп түгел, сөнки Ибн Халдун яҙған тәуарихтар нисәмә жилдтер».

Дешти Ҡыпсаҡ дәүләтенең баш ҡалаһы Аҡташ хан заманында Ағиҙел буйындағы Аҡташ тауында булған, тигән гипотеза археолог һәм тарихсылар өсөн айырым диҡҡәткә

---

*фәрсәх* — саҡрым; *тәхетгяд* — баш ҡала, хан баш ҡалаһы; *тәфтиш* — тикшереү, өйрәнеү; *жилд* — бүлек; *иғтимад* — ышаныу.

лайыҡ. Быны М. Өмөтбаев риүәйәт һәм тәуарих яҙмалары менән үҙенсә дәлилләргә лә тырыша, айырым деталь-мәғлүмәттәрҙе бөртөкләп йыя.

«Беҙҙең йортобоҙҙо сит йорт халҡы яҙған, ә үҙебеҙ белмәйбеҙ»— тип дөрөҫ әйтә Өмөтбаев. Үҙ автохтон яҙмалар булмағас, боронғо тарихыбыҙ тураһында айырым мәғлүмәттәрҙе сит ил, бүтән халыҡ ғалимдары яҙмаларынан эҙләргә тура килә. Көнсығыш сығанаҡтарынан, ғәрәп, фарсы, грек тарихсылары яҙмаларынан, рус тарихсыларынан.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың тарихсы булып уйланыуҙарының һәм тарих буйынса эшмәкәрлегенең баштан уҡ дөрөҫ фәнни йүнәлеш алыуы шунда: ул халыҡтың тарихи хәтере була алырҙай риүәйәттәрҙе, легендаларҙы боронғо тарихи яҙма сығанаҡтар менән сағыштырып өйрәнеүҙе алға ҡуя. Көнсығыш һәм Көнбайыш яҙма сығанаҡтарҙы халыҡтың үҙ автохтон мәғлүмәттәре менән тығыҙ берлектә тикшерә.

«Боронғо башҡорттар тураһында төшөнсә алыу өсөн башта уларҙың хикәйәттәрен (сказания) рус теленә тәржемә итергә кәрәк, — ти ул. — Был тәржемәләрҙән ижадсы (сочинитель) бер ни ҡәҙәр һоҡланғыс ер-урындарҙың иң боронғо атамаларын да беләсәк. Бөйөк Петрҙың: «Башҡа халыҡтар Россия тураһында нәмә булһа ла дөрөҫтө яҙа алалармы?»— тигән һүҙҙәре бар. Быны өсөн ижадсыға, тәржемәсе һымаҡ итеп, Азия һәм Европа тарихынан төрлө яҡлап мәғлүмәтле, риүәйәттәр һәм хикәйәттәрҙе йыйырға һәләтле, тарихты яратҡан ысын башҡортто беркетергә кәрәк. Һәр халыҡтың тарихы өйрәнелһен өсөн уның үҙ Карамзины булыуы шарт. Ул да шулай уҡ башҡорттар хаҡындағы төшөнсәгә урта быуат эпостары аша барып етәсәк».

Рус география йәмғиәтенә яҙған хатында М. Өмөтбаев шундай һүҙҙәрен дә әйтә: «Мин үҙем һун-башҡорт тигәндәрҙән төп башҡортмоп. Азия һәм Европа тарихтарын уҡырға бик һәүәҫ булыуым менән бергә, мин үҙ туған халҡым тураһындағы риүәйәт, легенда һәм хикәйәттәрҙе лә яҙып алырға тырышам. Шунан сығып бүтәндәр башҡорт тураһында дөрөҫ төшөнсә һәм мәғлүмәт алырлыҡ та булһын».

Ошо программа характерындағы фекерҙәренә яраšлы рәүештә, М. Өмөтбаев тарихҡа ҡарар яҙма һәм телдә йөрөр мәғлүмәттәрҙе, фольклор һәм яҙма сығанаҡтарҙы өйрәнеүгә, берәмтекләп факттар туплауға төп иғтибарын йүнәлтә. Башҡортостан, туған халҡы тарихын тикшереүгә бар көс-һәләтен һала.

Көнсығыш һәм Көнбайыштың тәуарих һәм тарих китаптары, тарихи яҙмалары, газета-журнал мәҡәләләре менән танышҡас, М. Өмөтбаев шуны күрмәй ҡалмаҫ: Башҡортостан, башҡорт тарихы буйынса бүтән ғалимдар яҙғандар ҙа бик аҙ икән. Улары ла күберәк өҙөк-йыртыҡ мәғлүмәттәр, айырым тарих сәхифәләре, субъектив күҙәтеүҙәр рәүешендә. Ғәрәп-фарсы ғалимдарынан, сәйәхәтселәре юлъяҙмаларынан боронғо һәм урта быуаттар башҡорт тарихынан берәмтек мәғлүмәттәр, рус тарихсыларынан болғар, ҡыпсаҡ осорҙарына, айырыуса XVI — XVIII быуаттарға ҡарар байтаҡ материал табырга мөмкин. В. Н. Татищев, П. И. Рычков, Н. М. Карамзин китаптарында улар мәғлүм бер система ала төшә, үҙенсә тарихи концепцияһы тыуа.

М. Өмөтбаевтың көнсығыш тарихсылары хеҙмәттәрен яҡшы белгәнлеге күренә. Ул бигерәк тә Ибн Халдун, Табари, Әбулхаир, Рәшитетдин, Бабур, Абулғази китаптарын йыш телгә ала, «Мөҡәддилә», «Жәмиғ эт-тәуарих», «Бабурнамә», «Шәжәрәи төрөк» яҙмаларына һылтана. Көнбайыш тарихсылары ла ситтә ҡалмай. «Европаның боронғо тәуарих эйәләре: «Башҡорт ҡәҙим дә Урал тауының көнсығышында, Иртыш буйындараҡ йәшәгән, баскатир исемләнгән» — тип әйткәндәр, — ти ул. — Әммә Абулғази тәуарихында уйғыр һәм уғыр башҡорт әйтелгән. Башҡорттарҙың үҙҙәре унғар тип һөйләгәндәр. Ибн Халдун тәуарихында: «Был халыҡтың араһында Алан, Бөрйән, Ҡаңлы, Пәжиж, Дыуан, Әйле, Табын вә ғәйре ырыуҙар бар, әммә бара-тора барсаһы басжарт әйтелгән»,— тип әйтә».

Ошондай ғалимдарҙың ҡараштарына, мәғлүмәттәренә таянып М. Өмөтбаев башҡорт халҡының төрлө ырыуҙарҙан ойошоуын, башҡорт этнонимына, уның сығышына үҙенсә бер аңлатма биреүгә килә. Башҡорттарҙың сығышын ул уғыр-уйғыр компоненты менән нығыраҡ бәйләй.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев төрлө сығанаҡтарға, шәжәрәләргә нигеҙләнеп, башҡорттарҙың Урал буйҙарында бик борондан йәшәгән халыҡ икәнен раҫлай. «Улар борондан уҡ Урал теҙмәләренең ике яғында йәшәгәндәр. Хәҙерге Өфө губернаһы улар биләгән ерҙәрҙең уртаһы булған,— ти ул.— Унда элеккенән ҡалган емерек ҡалаларҙың, каналдарҙың эҙҙәре һаҡланған... Һуңыраҡ мәжүси халыҡтарҙы башҡорттар ҡыҫырыҡлағандар һәм, болғарҙарға ҡушылып, улар менән бергә ислам динен ҡабул иткәндәр, хатта үҙҙәрен болғарҙар тип нарыҡлай башлағандар. Болғарҙар шәфҡәтле халыҡ булған. Улар булмышы менән башҡорттар үҙ биләмәләрен Волганың үҙенсә тип әйтер-

лек киңәйткәндәр. Шуға күрә ла башҡорттар әле булһа Болғар илен йәнле итеп күҙ алдына килтерәләр».

Шулай М. Өмөтбаев башҡорт-болғар бәйләнешенә лә тарихи яҡтан дөрөҫ һәм конкрет аңлатма бирә.

Башҡорт үҙ тарихын телдән һөйләргә әүәҫ, ти Өмөтбаев. Әллә ҡасанғы хан замандарының, Болғар, Ҡыпсаҡ осорҙарының тарихын, ырыу, яу батырҙарының хикәйәттәрен күп тыңлағандыр ул. Зиһенле аҡһаҡалдар бигерәк тә төрлө хан һәм батырҙар тураһында мауығып, ғизләндереп һөйләргә ярата. Барыһын да тарих тип һөйләй.

Былары телдән һөйләнер халыҡ хәтере икән, ҙур ырыу шәжәрәләре иһә тарихтың ҡағыҙға күскәне инде. Шәжәрәләрҙең дә боронғо осорҙары, хан замандары легенда, риүәйәт рәүешендә. Беҙгә яҡын быуаттары ысын тарихҡа әйләнә. Башҡорт шәжәрәләре ырыу, ҡәүем тарихының боронғоһо легендалап, урта быуаттары деталләберәк хикәйәләнгән йылъяҙмалар ул асылда. Ғибрәтле һәм мауыҡтырғыс итеп хикәйәләнеүе менән улар хәтерҙә лә ҡалыр булған.

М. Өмөтбаев архивы материалдары эсендә башҡорт шәжәрәләренең боронғо күсермәләре осрай. Үҙе кесе Табын халҡының нәсәбнамаһын төҙөй. Йәнә айырым күсермәләргә, аҡһаҡалдар һөйләгәнгә, һуңғыраҡ осорҙарын архив документтарына таянып, «Кесе Табын халҡының бабалары һәм унан айырылған Йомран Табын ере» тигән ырыу тарихын яҙа. Башҡорттар араһында тәуарих ҡулъяҙмалары ла таралған — уҡымышлылар шәжәрә менән генә хушһынып ҡалмай, башҡорт тарихын киңерәк итеп яҙып ҡалдырырға тырышҡандар. Уның өсөн төп сығанаҡ итеп халыҡ һөйләгәнде, яҙма шәжәрәне, бүтән яҙма мәғлүмәттәрҙе, документтарҙы файҙаланғандар. Шулай итеп, «Сыңғыҙнамә» кеүек, көнсығыш тәуарихтарына оҡшашыраҡ, үҙ тәуарих яҙмалары барлыҡҡа килгән. Уны ситил тарихсылары башҡорттарҙың XVI быуатта яҙылған әһәмиәтле әҙәби-тарихи ҡомартҡыһы итеп танығандар. М. Өмөтбаев үҙ тарихи әҫәрҙәрендә был ҡомартҡыға бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт итә.

Мөхәммәтсәлим кадет корпусында уҡығанда Хисаметдин Болғари-Мөслимиҙең «Тәуарихи Болғариә» тигән китабын күсереп ала. Уның Волга буйы болғар тарихына, башҡорттар араһында ислам диненең нисек таралыуына ҡағылышлы урындарын ентекләберәк өйрәнә. Үҙ тәуарих яҙмаларында быға таянғылай.

Ә инде Тажетдин Ялсығолдоң «Тәуарихи Болғариә» китабын өйрәнеп кенә ҡалмай, уның әйле ырыуына ҡараған

шәжәрә өлөшөн бер ни тиклем ҡыҫҡартыбыраҡ «Йәдкәр» китабында баҫтырып сығара.

Шәжәрә, ошо тәуарих китаптары традицияһына нигеҙләнеп, ул яңы типтағы тәуарих жанрын үҫтереү хәстәрлеген күрә. Юғарыла исемләгән «Ҡесе Табын халҡының бабалары...» исемле тәуарих яҙмаһы нәҡ ошо ерлектә тыуа. Бында ул традицион тәуарихтың әҙәби стилдә яҙыу манераһын һаҡлай. Бына бер үрнәк: «Әсәди бей менән Шәкәрле бей Себер йортонда Ибаҡ, Шибаҡ тигән Сыңғыҙ нәҫеленән ике ханға табиғ булып торғандары заманында, был хандар барса бейҙәрҙе үлтермәгә ҡасд ҡылғандар. Быны ханға Ҡариб бер кемһәнә был ике бейгә агяһланып: «Башығыҙҙы алып ҡасығыҙ, юҡһа һәләк булырһығыҙ»,— тимеш, бәғдә Әсәди менән Шәкәрле бей, аттарына менеп, ҡасҡандар. Хан кешеләре ҡыуып тота алмағандар. Бәғдә Ҡатай иленә килеп, туғыҙ өйлө Ҡатайҙан ер һорағандар. Ҡатай халҡы ер бирмәгәс, унан үтеп, Инйәр даръяһын буйлап килеп, Ағиҙелгә еткәндәр. Ағиҙелде буйлап түбән Өфө Иҙеле менән ике арала, Ҡарлуҡ исемле бер күл атауында, бер аҙ әҙәмдәргә юлығып, хәл-әхүәл һорашҡандар. Был кешеләр әйткәндәр: «Ун бер ырыулыҡбыҙ, мең йәнбеҙ». **Мең ырыуы исемләнгәндәр.** Ҡайһыларҙың бейҙәренән Ағиҙелдән, Йыуалы күл тамағынан юғары Ҡыуғаҡ (Ҡыуғанаҡ) тамағына саҡлы биләмәк булып, ер һорағандар. Иҙелгә аҡҡан һыуҙары менән ер алғандар. Ҡайһы Мең ырыуында мал-хайуанды, йәғни йылҡы, һыйыр нәүғенән һис нәмәләрен ҡалдырмай ҡалмыҡтар алып киткән икән. Әмлә Әсәди бей менән Шәкәрле бей мал биргәндәр һәм, олуғ Мең ырыуынан ефетләнеп, был Табын иләүенә батша булып ғүмер иткәндәр».

Әммә ғалим кеше Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев хәҙер шәжәрә һәм тәуарих традициялары менән генә сикләнеп ҡала алмай инде, уға ысын тарих булыр фәнни хеҙмәт яҙыу төп шарт. Быны өсөн тарихи сығанаҡтарға, документаль материалдарға нигеҙләнергә кәрәк.

Шул йүнәлештә эш алып барғанда, М. Өмөтбаев шәжәрә һәм тәуарих яҙмаларына өҫтәмә сығанаҡ рәүешендә мөрәжәғәт итеп, көнсығыш һәм көнбайыш ғалимдарының, бигерәк тә рус тарихсыларының хеҙмәттәренә ныҡ таяна. Ул әленән-әле рус тәуарихтары (тарихтары) китабында күрһәтелгәнсә тип, һылтанмалар яһай, сығанаҡтарҙы исемләй. Мәҫәлән, башҡорттарҙың Россия дәүләтенә үҙ их-

---

*табиғ булған* — буйһонған; *касд* — теләк, хаслыҡ; *кариб бер кемһәнә* — яҡын, яҡын ҡәрҙәш кеше; *бәғдә* — һуңынан; *нәүге* — төр, енес; *ефетләнеү* — ҡатын алыу, өйләнеү.

тыяры менән ҡушылыуын раҫлағанда, бер яҡтан, уларҙы үҙ яҙма шәжәрәләре менән дәлилләп үтеүҙе кәрәкле һанаһа, икенсе яҡтан, быны рус тарихи яҙмалары менән нығытып ҡуя. «Башҡорт халҡының аҡ һәм ҡара көндәре» тигән хеҙмәтендә шулай яҙа: «Йәғни мәҫәлән, Россия тәуарихтарынан, хосусан «Уфимская справочная книга» һәм «Губернские ведомости»ҙарҙан мәғлүмдер ки, Иван Васильевич Грозный заманында, башҡорттар ихтыяр баш һалған өсөн ерҙәренә грамота бирелгән. 1556 сәнә йәнлек тиреһенән һәм балдан бәйғәт биргәндәр. Яһаҡты Ҡазанға түләгәндәр. Әммә 1572 йылда, Ҡазанға йөрөмәктәрен йыраҡ тип, Торатауҙа, йәғни Өфө тауында ҡала һалырға һәм ғәскәр тоторға һорағандар. Сөнки ул заманда ҡалмыҡ халҡы көслө булып, башҡорт йортон бик ғәрәт ҡылғандар. 1574 йылда Иван Нагой исемле ҙур чиновник ҡәлғә һала башлаған. 1575 йылда Себер хакимының балалары Аблай менән Тәүкил Өфө ҡалаһын һалырға мәнег ҡылғандар. Башҡорттар, рустар менән бер яҡлы булып, себер татарҙарын боҙоп, хан балаларын әсир иткәндәр».

Баҫылған тарихи хеҙмәттәренән, ҡулъяҙмаларынан күренеүенсә, М. Өмөтбаев күп кенә рус тарихсыларының, ил өйрәнеүселәрҙең китаптары, мәҡәләләре менән яҡшы таныш булған. Ул Н. М. Карамзиндың «История государства Российского», В. Х. Кондоракиҙың «Универсальные описания Крыма» күп томлыҡтарын, П. И. Рычковтың «История Оренбургская» китаптарын, Р. Г. Игнатьев, П. П. Пекарский, В. В. Вильяминов-Зернов хеҙмәттәрен, төрлө ғилми яҙмаларҙы һәм тарихи-популяр журналдарҙы яҡшы белгән. Һуңғыларын (периодик матбуғатты) даими уҡый барған. Шулар буйынса айырым конспекттар төҙөгән, Башҡортостан, башҡорт халҡы тарихына, этнографияһына ҡағылышлы урындарын күсереп алған йәки төрки теленә тәржемә иткеләгән. Ҡайбер күсермәләренә аңлатмалар биреп барғылаған.

Бына, мәҫәлән, П. И. Рычковтың «История Оренбургская» китабынан нуғай хандары хаҡындағы өлөшөн тәржемә иткәндә «Басман исемле нуғай ханы ун ете мең тирмә менән килеп, Һаҡмар даръяһының Яйыҡ даръяһына ҡойған ерендә тау башында урҙа ҡороп, Аҡтүбә исеме бирмеш» тигән һөйләмдән һуң йәйә эсендә шундай аңлатма биреп үтә: «Ул урында был заманда лагерҙар бар. Бер заман типтәр полкының лагеры ине. Әммә полкы бөткәс, Неплюевский кадетский корпустың лагеры булды. Беҙ-

---

*бәйғәт* — бында «яһаҡ» мәғәнәһендә; *ғәрәт* — баҫып алыу, барымта, талау; *мәнег* — ҡаршылыҡ.

ҙең күреп белеүебеҙсә, 1861 йылға тиклем типтәр полкының мәсетендә йома уҡырҙар ине. Һуңынан вайран булмыштыр».

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың иң билдәле тарихи-этнографик хеҙмәттәре шулар: «Башҡорттар», «Өфөнөң тарихына ҡағылышлы материалдар», «Башҡорт халҡының аҡ һәм ҡара көндәре», «1755 йылғы башҡорттар восстаниеһы хаҡында», «Ҡесе Табын халҡының бабалары һәм унан айырылған Йомран Табын ере», «Башҡорттар һәм Торғаут ҡалмыҡтары хаҡында бер нисә һүҙ». Былар Башҡортостан, башҡорт халҡы тарихы буйынса мәғлүм бер система алған фәнни-тикшереү эштәре.

«Башҡорттар» очеркы ваҡыт яғынан иң тәүге яҙылғаны. Уны М. Өмөтбаев 1876 йылда Өфө статистика комитеты секретары, «Уфимские губернские ведомости» газетаһының рәсми булмаған бүлеге редакторы Н. А. Гурвичҡа тапшыра. 1880 йылда бер күсермәһен Рус география йәмғиәтенә ебәрә. Ләкин ул очерк баҫылып сыҡмай ҡулъяҙма көйө ҡала. Әммә уны М. В. Лоссиевский «Былое Башкирии и башкир по легендам, преданиям и хроникам» (1883) тигән хеҙмәтендә файҙаланғаны билдәле.

«Башҡорттар» — этнографик-фольклор характерындағы очерк. Уны артабанғы ошо тип яҙмаларына инеш кеүегерәк ҡарарға ла мөмкин: Башҡорт халҡының йолалары, бигерәк тә фольклоры һәм яҙма әҙәбиәте тураһында тос ҡына мәғлүмәттәр, аңлатмалар бирелә.

«Өфөнөң тарихына ҡағылышлы материалдар» мәҡәләһе Өфөнөң төҙөлөүенә өс йөҙ йыл тулыу айҡанлы әҙерләнгән. Был тарихи датаны билдәләү юбилей комиссияһында М. Өмөтбаев та эшләгән. Ошо уңай менән Өфө ҡала башлығы Д. С. Волков етәкселегендә Өфөнөң тарихын яҙырға әҙерлек осоронда М. Өмөтбаев ғәрәп, фарсы, төрки һәм татар телендәге сығанаҡтарҙан йыйылған материалдарҙы руссаға тәржемә итешә, быға өҫтәп тарихи-этнографик характерҙағы мәҡәләһен русса яҙып тапшыра.

Өфө тарихы буйынса йыйылған материалдар һәм яҙмалар ваҡытында баҫылмай, М. Өмөтбаев йыйған һәм тәржемә иткән мәғлүмәттәр ҙә, әлеге мәҡәләһе лә донъя күрмәй ятып ҡалған. 1981 йылда Башҡортостан дәүләт китап палатаһының фондында был мәҡәләнең бер тулыраҡ ҡулъяҙмаһы табылды. Шул ҡулъяҙма текст Ғиниәт Ҡунафин тарафынан башҡортсаға ҡайтарылып, М. Өмөтбаевтың «Йәдкәр» (1984) китабында бер ни тиклем ҡыҫҡартылып баҫылып сыҡты.

«Өфөнөң тарихына ҡағылышлы материалдар» башҡорттарҙың Болғар, Ҡыпсаҡ осорҙарына ҡарар тарихына, шу-

ларға бәйле легендаларҙы, төрлө мәғлүмәттәрҙе, Өфө төҙөлгәндән һуңғы тарихын, айырым хәл-вәҡиғаларҙы системаға һалып биреүе, тарихи-фольклор күҙәтеүҙәре менән ҡыҙыҡлы. Автор бында Аҡташ хан легендаһын да яңынан хәтерләп үтә, уға яңы факттар өҫтәй.

«Башҡорт халҡының аҡ һәм ҡара көндәре», «Башҡорттар һәм Торғаут ҡалмыҡтары хаҡында бер нисә һүҙ» тигән хеҙмәттәре Башҡортостан үҙ ихтыяры менән Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң башҡорт тарихының героик һәм трагик көндәрен күрһәтеүгә арналған. Рус тарихсыларының китаптарына, башҡорт шәжәрәләренә һәм тәуарихтарына таянып, М. Өмөтбаев башҡорттарҙың уртаҡ Ватан Россияны сит ил баҫҡынсыларынан һаҡлап төрлө яуҙарҙа, походтарҙа ҡатнашыуын, героик тарих биттәрен ғорурлыҡ менән бәйән ҡыла. Башҡорттарҙың Россияға үҙ ихтыярҙары менән ҡушылыуын, дуҫ һәм туған булып ғүмер кисереүен, шанлы тарихтарындағы уртаҡ шатлыҡтарын, уртаҡ ғәмдәрен уларҙың «аҡ көндәре» тип атай.

Әммә тарихтың ҡара, фажиғәле көндәре лә аҙ түгел. Ҡай бер яуҙар еңелеү менән бөткән, илде ваба, ҡырғын, аслыҡ ҡаплап алғылаған, бунттар, болалар булған. Шуларын М. Өмөтбаев «ҡара көндәр» тип характерлай.

Башҡорттарҙың ирек яулап күтәргән восстаниелары ла биләй М. Өмөтбаев уйын. «Йәдкәр» китабына ингән тарихи очерктарында, бигерәк тә әлеге «Башҡорт халҡының аҡ һәм ҡара көндәре» менән «Башҡорттар һәм Торғаут ҡалмыҡтары хаҡында бер нисә һүҙ»ҙә, батша цензураһының ҡаты күҙәтеүенән үтерлек булһын өсөндөр инде, башҡорт восстаниеларын һанап, етәкселәрен, хәл-ваҡиғаларын исемләп, бер ни тиклем характерлап ҡына уҙғандай итә.

«1676 йылда башҡорт, мишәр һәм Ҡазан татарҙары, ҡалмыҡ халҡы менән ҡушылып, башҡорт енесенән Сәйет исемле старшинаны баш ҡылып, күп йылдар рус менән һуғышып, был яу биш йылда тамам булды. Бәғзеләр һигеҙ йыл тимештәр, — тип яҙа ул, мәҫәлән.— Император Петр I заманында, 1707 йылда, башҡорт старшиналары Алдар һәм Күсем Өфө ҡалаһының комиссары Сергеевка хушнуд булмай, бола яһап, ул ике йылда тамам булған. Сергеевты Петр батша ғәйепле табып, ҡатыл ҡылдырып, башҡортто ризалыҡта ҡалдырған».

Йәки: «...1676 йылда, башҡорт халҡы бер Сәйет Йәғәфәр исемле әүлиә ҡәрәмәтлек әҙәмен хан тотмош. Русҡа

---

*хушнуд* — ҡәнәғәт, риза; *ҡатыл ҡылдырып* — үлтереү, юҡ итеү; *әүлиә ҡәрәмәт* — изге кеше; ***мөҡәддәм*** — һуңырaҡ; *ғәрәт ҡылыу* — баҫып алыу.

яу булды. Шул уҡ йылда башҡорттар рус менән Ҡырым һуғышына барғандар. Бынан мөҡәддәм поляк һуғышына барғандар. Айукә хан ул арала Сәйет Йәғәфәргә ярҙам биреп, Ҡазан һәм Өфө губерналарын ғәрәт ҡылғандар».

«Бының һуңында 1707 йылда, император Петр Алексеевич заманында, башҡорттар Өфөләге комиссар Сергевҡа риза булмай, яу барғандар. Хатта ике старшина — береһе Алдар, береһе Күсем барса башҡорттарҙы ҡуҙғатып, Ҡазан ҡалаһына һөжүм иткәндәр... Йәнә итәғәткә килеп, башҡорттар Петр батша менән швед короле Ҡарл XII менән һуғышырға барғандар». «Бынан һуң, 1735 йылда башланып, биш йыл мәшһүр яу булған. Башҡорт старшинаһы батыр Ҡилмәк Абыҙ Ырымбурҙы һалдырмаҫ өсөн Ҡириллов исемле түрәгә инҡар ҡылған. Һуғыш 1740 йылда туҡтаған. Был яуҙа 30 мең башҡорт ҡырылған, ҡатын һәм ҡыҙҙарын баярҙарға һатҡандар».

Был башҡорт восстаниеларын автор шулай объектив атап, ҡай бер хәл-ваҡиғаларын иҫкә төшөрөп үткән кеүек булһа ла, уларҙың киңлеген һәм ҡеүәтен әйтеүе, илде бергәләп һаҡлар яуҙары менән йәнәш телгә алыуы М. Өмөтбаевтың халыҡ яуына теләктәш икәнен тойҙорта. Шул рухта ул башҡорттарҙың 1755 йылдағы восстаниеһына, уның етәксеһе Батыршаға асығыраҡ теләктәшлек белдерә («1755 йылғы башҡорттар восстаниеһы хаҡында»).

1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышын М. Өмөтбаев, цензураға яйлашып, тыштан хөкөм иткән кеүек булһа ла, башҡорттарҙың ул яуҙарҙа күп ҡатнашыуын, Юлай менән Салауат кеүек башлыҡтарын билдәләп китә. «Мәшһүр Пугач яуы 1773 йылда башланып 1775 йылда тамам булған. Был яуҙа башҡорттар Пугач менән Ҡазанға, Сембергә, Саратов һәм Царицын ҡалаларына йөрөгәндәр». «Быларҙың араһында Өфө өйәҙенең Шайтан Көҙөй волоҫынан Юлай һәм улы Салауат башлап йөрөмөштәр... Яу баҫтырылғас, Салауат һәм Юлай Балтик диңгеҙендәге Рогервик исемле крепосҡа, һуҡтырылып һәм төрлө язалар аша үткәрелеп оҙатылмыштарҙыр. Йөмләнән береһе: танауҙарын телеп, йөҙҙәренә мисәт баҫып, Өфө өйәҙендә, ауылдан ауылға йөрөтөп, һуҡтырғандар».

Был яуҙар менән йәнәш ул башҡорттарҙың рус ғәскәре менән берлектәге швед походтарын, һуңғараҡ һуғыштарҙы һанап китә. «1812 йылда башҡорт һәм мишәрҙәр француз һуғышына Наполеон 1 ҡаршы бармыштарҙыр һәм уны һөрөп Париж ҡалаһына кермештәрҙер — тип яҙа ул. — 1827—1829 йылдарҙа башҡорт, мишәр төрөк һуғышында — Дунай буйына, Молдавияға барғандар. 1855 йыл башҡорттар йәнә төрөк һуғышында ҡатнашҡандар. Ул

Ҡырым һуғышы йәки Севастополь һуғышы тимәк менән мәшһүрҙер».

Башҡорт восстаниеларын гел кире яҡтан баһалаған, шау ямманланған, башҡорт халҡының Россия ҡаршыһындағы хеҙмәттәрен, тоғролоғон күрергә теләмәгән бәғзе бер рус тарихсылары менән эске полемикаға инеп, М. Өмөтбаев туған халҡының героик һәм трагик тарихы биттәрен мөмкин хәтле объектив күрһәтергә тырыша. Россияны яҡлап яу сапҡандарын, хеҙмәттәрен билдәләп, улар «башҡорттоң вәғәҙәгә вафаһылыр, йөҙөнөң ағылыр» ти. «Әммә рус тәуарихтарында башҡорттоң бунттарын күп яҙып, хеҙмәттәрен бик аҙ йәд ҡылалар» — ти ул туранан-тура. Башҡорт тарихының аҡ биттәре тураһында һөйләп, мәҡәлгә лә һылтана: «Һәр кем үҙен үҙе маҡтамаһа, ғәйре маҡтамаç, тигәндер башҡорт мәҡәле».

М. Өмөтбаев ни тиклем объектив булырға тырышмаһын тарихҡа һис тә битараф түгел. Башҡорт халҡының боронғолоғон, һимmәтен, төрки, бүтән ҡәүемдәр менән, рус халҡы менән ҡәҙимдән килгән татыулығын, туғанлығын, героик тарих сәхифәләрен күрһәткәндә ғорурлыҡ хистәрен, ҡараңғы, ҡара, фәжиғәле биттәре хаҡында һөйләгәндә аяныс, үкенес һәм көйөнөс тойғоларын тойорға мөмкин. Ул «Ҡесе Табын халҡының бабалары һәм унан айырылған Йомран Табын ере» тигән шәжәрәләрендә ижадсы-шәжрәсе икән, тарихи-этнографик хеҙмәттәрендә ысын тарихсы кимәлендә. Ошо тип тарихи эштәре менән Өмөтбаев башҡорт тарих ғилеменә нигеҙ һалған тарихсы ул. Д. С. Волковтың М. Өмөтбаев хеҙмәттәрен рус тарихсыларынан И. Ҡ. Кириллов, В. Н. Татищев, П. И. Рычков, Р. Г. Игнатьев, П. П. Пекарский, В. В. Вельяминов-Зернов, И. Н. Березин эштәре менән тиң ҡуйыуы һис тә нигеҙһеҙ түгел. Башҡорт тарихсыһының эштәре, рус тарихсыларыныҡы кеүек, факттарға бай булыуы, ышанысл сығанаҡтарға нигеҙләнеүе, системалылығы, фәннилеге менән айырылып тора. Уның тарихи-этнографик хеҙмәттәрендә башҡорт халҡының килеп сығыуы (этногенезы), ырыу-ҡәбилә мөнәсәбәттәре, айырым тарихи осорҙары, халыҡтың көнкүреше, йолалары, культураһы, социаль-экономик хәле шаҡтай эҙлекле тикшерелә.

Башҡортостан, башҡорт халҡы тарихы буйынса яҙған хеҙмәттәрендә М. Өмөтбаевтың үҙ алдына ҡуйған маҡсаттарының береһе туған халҡына үҙ тарихын мөмкин тиклем асыҡ һәм ябай итеп фәнни нигеҙҙә һөйләп биреү булһа, икенсеһе рус теленә тәржемә итеп бүтән халыҡтарҙы ла таныштырыу, Көньяҡ Уралдың тарихын яҙышыу ине. Ул туған халҡы тарихын яҙғанда һәр саҡ шул тиклем

мауығып китә, шундай биттәре героик йә фажиғәле хикәйәтте хәтерләтә башлай, фәнни-тарихи стиль әҙәби стиль менән аралаша.

Өмөтбаев-тарихсының бер һәйбәт яғы йәнә шунда: ул Башҡортостан, башҡорт тарихын тирә-йүн ҡәүемендә, төрки халыҡтар тарихы контексында, Россия тарихы эсендә яҡтыртырға тырыша. Хатта ара-тирә донъя тарихына экскурс яһай.

Бөтә донъя тарихын яҙып ҡарау уйы ла бар Мөхәммәтсәлимдә. Дөрөҫөрәге, ғәрәп, фарсы, рус телдәрендәге мәғлүм дөйөм тарих китаптарына таянып, төркисә бер китап яҙыу. Шулай туған халҡын бөтә донъя тарихы менән таныштырыу ниәте.

Оҙаҡ әҙерләнеп, күп китаптар уҡып, ныҡ өйрәнеп был ауыр эшкә лә тотона ул. Шуның «Тәуарих хаҡында мөҡәддимә» тигән инеш өлөшө яҙыла. Бында ул Көнсығыш һәм Көнбайыш тарихсыларының донъя тарихын осорҙарға, ил-региондарға бүлеүҙә уртаҡ принциптарҙы, дөйөм классификацияны тотоп эш итә. «Европа, мәғәриб зәмин данишмәндәре, бөтә тәуарихты әжмағ өс ҡыҫымға бүләләр: ибтида ҡәҙими тәуарих, урта тәуарих һәм яңы тәуарихҡа. Ҡәҙими тәуарих үҙе дүрт нәүғ»— тип башлай ул «Мөҡәддимәһен» һәм әлеге дүрт төркөмдөң тәүгеһенә Азия, Африка һәм Европа тарихының беҙҙең эраға тиклемге дәүерен (Ҡытай, Һиндостан, Боронғо Грек, Рим, Мысырҙың иң боронғо осорҙарын) индерә. Боронғо Азия тарихынан ғәрәп, йәһүд, ҡытай, татар, ҡыпсаҡ, юнан, легендар пәһлеүәндәренең замандарына мөрәжәғәт итә: Кимурас, Тәһмурас, Жәмшид, Фридун һ. б. Шунан Мысыр фирғәүендәренә, Юнан (Греция) хакимдарына килеп сыға: Рамзис, Геркулис, Әфләтүн (Платон), Пифагор, Әристу (Аристотель), Сократ, Перикль, Ғүмәр һ. б. Европалағы боронғо Греция һәм Рим, Африкалағы Мысыр (Египет) һәм Карфаген дәүләттәрен исемләй. Шуныһы беҙҙең иғтибарҙы тарта: «Ғайса ғәллиәссәләмгә 560 сәнә тикрү, йәғни фарсы дәүләте башланғанса был беренсе нәүғтан Әфридун менән Мәнүчәһер араһында ҡыпсаҡ халҡынан Азияла Ҡаһарман Ҡатил заманы булған» ти. Был — Көнсығыш дастандарында һүрәтләнгән, беҙҙең «Урал батыр» эпосына ла килеп ингән Ҡаһарман Ҡатилдың прототибы.

Иң боронғо тарихтың икенсе төркөмөнә М. Өмөтбаев фарсының мөстәҡил батшаһы Мәнүчәһер-Кир шаһтан Ис-

---

*мөҡәддимә* — инеш; *мәғәриб зәмин данишмәндәре* — көнбайыш ғалимдары; *әжмағ* — бөтәһен; *ибтида ҡәҙими тәуарих* — бик боронғо тарих; *нәүғ* — төрлө, төркөм.

кәндәр Юнани әл-Макидуни (Александр Македонский) заманынаса осорҙо ала. «Был падишаһтарҙы иң дөрөҫ падишаһтар тиҙәр» тип М. Өмөтбаев тарихи шәхестәр икәнлеген айырып әйтә. Ул легендарь ҡаһармандарға дини легенда, ялған хикәйәт геройҙарын индерә: Әҙәм ғәлиәссәләмдән алып, Нух, Исмәғил, Дауыт, Исхаҡ, Яҡуп, Йософ һ. б. пәйғәмбәрҙәргәсә ҡаһармандар, Жәмшид, Фридун, Афрасиб, Сиауш, Әсфәндиәр, Рөстәм һ. б. пәһлеүәндәр. Фирдәүсиҙең «Шаһнамә»һендәге әлеге атаҡлы пәһлеүәндәргә ялғап, М. Өмөтбаев «Мөҡәддимә» яҙмаһында шаһтар шәжәрәһен һәм тарихын шулай дауам итә: «Бөһман Әсфәндиәр улы шаһ булды. Унан һуң Бөһмандың улы Һома шаһ булды. Унан һуң уларҙың улы Дараи шаһ булды. Был Дараи юнандарҙан Македония шаһы Филиппустың Наһнә исемле ҡыҙын алып, һуңынан талаҡ ҡылды. Наһиә атаһына хәмлә килеп, ир уғыл килтерҙе. Ул балаға Искәндәр ат ҡуйҙылар. Ул уғланды Филиппус Македонияға вәли ғәһед әйләне. Дараи йәнә бер ҡатын алды. Унан бер уғлан булды. Исемен Дара ҡуйҙылар. Бер Искәндәр килеп был Дараның милкен баҫып, Дара мәҡбүл булып, милади Ғайса ғәлиәссәләмдән 330-сы йыл ғәжәм, фарсы дәүләте Искәндәр ғәжәмдә алып Һиндостанға етеп Бабыл шәһәрендә вафат була».

Бында инде легендар Искәндәрҙең хикәйәттәрҙәге образы түгел, тарихи Искәндәр — Александр Македонский хаҡында ысын һүҙ алып барыла.

«Тәуарих хаҡында мөҡәддимә» яҙмаһының иң боронғо легендалы өлөшөн М. Өмөтбаев, үҙе бер урында телгә алып киткәнсә, «Тарихи Табари» китабына йәнә ғәрәп тарихсыһы Ибн Халдундың «Мөҡәддимә» томлығына таянып яҙған булырға тейеш. Александр Македонскийҙан алып Рим императоры Юлий Цезарь, Август һ. б., Европа тарихы хаҡындағы өлөштәрен яҙғанда Көнбайыш тарихсылары хеҙмәтенә мөрәжәғәт итеүе мөмкин. Ә Урта Азия, Урал-Волга буйҙары тарихын яҙыу «Жәмиғ эт — тәуарих», «Сыңғыҙнамә» кеүек тәуарихтар нигеҙендә дауам иткәнгә оҡшай. М. Өмөтбаевтың архивында баҫма тарихнамә — төрки-монгол ырыуҙарының генеологияһы ла һаҡланған. Бынан да ул күпмелер мәғлүмәт алған. «Мөҡәддимә» аҙағында автор Россия, Башҡортостан тарихына килеп инә.

Йыйып әйткәндә, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың «Тәуарих хаҡында мөҡәддимә» яҙмаһы Урта быуат ғәрәп ғалимдары Табари, Ибн Халдундарҙың тарихҡа инеш рәүешендәге «Мөҡәддимә» китаптары традицияһында, айырым көнбайыш тарихсылары үрнәгендә яҙылған бик мөһим хеҙмәт донъя тарихына инеш һүҙ ул.

Бөтә донъя тарихының төп өлөшөн яҙыуҙы М. Өмөтбаев аҙаҡ бүлек-бүлек рәүешендәрәк дауам иткән, буғай. Уның шундай айырым өлөштәре менән «Йәдкәр» китабында таныша алабыҙ. «Фирғәүендәр хаҡында хәбәр» боронғо Мысыр фирғәүендәренең пирамидалары, шуларға бәйле тарихтар хаҡында. «Ром ҡалаһы хаҡында» мәҡәләһе Рим ҡалаһының төҙөлөү легендаһын, Рим-Карфаген яуҙарын, Рим триумвиратын, Марий, Сулла, Помпей, Цицерон, Юлий Цезарь, Август һәм башҡа ҡайсарҙар хакимлығын, Византия империяһы тарихын бәйән итә. «Румия менән 1400 йыл эсендә булған ваҡиғаларҙан» мәҡәләһе урта быуаттар Европаһындағы мөһим фәнни-техник асыштар тарихынан мәғлүмәттәр бирә.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев шулай тарих донъяһына ҡыйыу атлап инә. Ул ысын-ысындан клио ғилеме эйәһе. Тарихсы дауам итә.

## 7

Һикһәненсе йылдар Өфөнөң гөрләй башлаған сағы. Ҡала яйлап үҫә, йәмләнә, йәмғиәт тормошо йәнләнә килә.

Бына бер ни тиклем хроника:

*1879 йыл.* Өфөлә «Вестник Уфимского земства» газетаһы сыға башлай.

*1880 йылдан* «Уфимский календарь», «Памятная книжка Уфимской губерний»ише периодик белешмә баҫмалар даими нәшер ителә.

*1880—1881 йылдарҙа* Өфө өйәҙ һәм губерна земствоһына, ҡала Думаһына һәм управаһына һайлауҙар була.

*1881 йыл.* Өфөгә сенат ревизияһы килә.

*1882 йыл.* Башҡорт ерҙәренә башҡорттарҙың хоҡуҡтары тураһында указ сыға.

*1883 йыл.* Өфөлә Крәҫтиән банкы асыла.

*1883 йыл.* Александр III батшаны тәхеткә ултыртыу — коронация уңайы менән Өфөнөң почетлы делегацияһы Мәскәүгә китә.

*1883 йыл.* «Справочная книга Уфимской губернии» тигән белешмә китап донъя күрә.

*1885 йыл.* Һамар — Өфө — Златоуст — Силәбе тимер юлын төҙөү проекты ҡабул ителә һәм Һамар — Өфө өлөшөн һалыу эше башлана.

*1885 йыл.* Өфөлә йыр, музыка һәм театр һөйөүселәр йәмғиәте ойоша.

*1886 йыл.* Өфөлә халыҡ иҫәбен алыу үткәрелә.

*1886 йыл.* Өфөнөң нигеҙләнеүенә 300 йыл тулыу байрамы уҙғарыла.

*1886 йыл.* Өфөлә ил өйрәнеү музейы асыла.

*1887 йыл.* Н. В. Ремезовтың «Очерки из жизни дикой Башкирии» китабы сыға.

*1887 йыл.* Өфөлә «Ғосмания» мәҙрәсәһе асыла.

*1888 йыл.* Диниә назараты төҙөлөүгә 100 йыл тулыуға әҙерлек эштәре башлана.

Өфөлә булған ошо мөһим ижтимағи-культура ваҡиғаларында Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев туранан-тура ҡатнаша. Беренсенән, ул Өфө өйәҙ земствоһына яңынан гласный булып һайлана һәм земствоның эшендә, йыйылыштарында, матбуғат органдарында актив ҡатнашлыҡ итә. Өфөгә Мәскәүҙән сенат ревизияһы килеү менән башҡорт ерҙәрен талау, алдап алыуға бәйле низағлы эштәрҙе тикшерергә йәлеп ителә. Земство йомоштары менән сенат ревизияһы буйынса төрлө документтарҙы, мөрәжәғәттәрҙе, ялыу ҡағыҙҙарын тәржемә итеү, белешмәләр биреү ҙә бик күп ваҡытын ала. Волостан, өйәҙҙән башҡорттарҙың, старшиналарҙың үҙенә туранан-тура үтенес менән килгәндәре күп. Икенсенән, М. Өмөтбаев бик күп бүтән ижтимағи, мәҙәни эштәр менән мәшғүл. Матбуғат органдары уны штаттан тыш үҙҙәренең хәбәрсеһе итеп саҡыра. Өфө статистик комитеты губернаның белешмә китаптарын әҙерләгәндә башҡорт йәмғиәте, мәҙәниәте буйынса мәҡәләләр яҙырға заказдар бирә, консультациялар менән йыш мөрәжәғәт итә. Музей ойоштороу, халыҡ иҫәбен алыу комиссияһы ултырышына саҡырыла. Өфөнөң нигеҙләнеүенә 300 йыл тулыу уңайы менән ойошторолған комиссияла Өфө тарихын яҙыуға материалдар туплашыуға булһын, байрамдың программаһын һәм мосолман халҡының байрамда уйындарын нисек ойоштороуҙа булһын, тантанала сығыштар, иғландар текстарын төҙөүҙәме унан башҡа мөмкин түгел. Киң эрудициялы, күндәм һәм ҡонар М. Өмөтбаев белешмә, фәнни консультациялар биреүҙәме, төрлө ойоштороу, толмаслыҡ эштәрендәме һис йыбанып тормай һәр береһен еренә еткереп башҡара. Өфө делегацияһы составында Мәскәүгә коронацияға барып ҡайта.

Шуныһы ла яҡшы, төплө белемле һәм культуралы башҡорт уҡымышлыһының тоғролоҡло хеҙмәтен һәм тырышлыҡтарын Өфө йәмғиәтселеге, хатта губернаның ҙур түрәләре лә күрмәй һәм баһаламай ҡалмай. Ҙур түрәләр, бәлки, күрмәмеш тә булыр ине, ләкин улар башҡорт йәмғиәтенең ҡайһы бер сетерекле мәсьәләләрен хәл итеүҙә, мәғариф, мәҙәниәт, ижтимағи фән өлкәһендә М. Өмөтбаев кеүек кешеләргә бик мохтаж. Шуға ул сенат ревизияһы өсөн дә иң кәрәкле кеше, батша коронацияһында ҡатнаша алыр төплө ассистент та, губерна земствоһының гласны-

йы ла. М. Өмөтбаев 1884 йылда коллежский регистор тигән дәрәжәгә эйә булһа, икенсе йылына губерна секретары. Фән өлкәһендәге тәүге хеҙмәттәрс үк уны 1883 йылда Рус география йәмғиәтенең Ырымбур бүлеге ағзаһы итеп һайланыуға ныҡлы нигеҙ бирә.

Күрәһең, М. Өмөтбаевтың исем-аты, дан-шөһрәте ил баш ҡалаһына ла барып еткән. 1886 йылда Ҡырымдағы ваҡеф эштәре комиссияһына мосолмандар араһынан иң эшлекле, уҡымышлы кеше һайлау мәсьәләһе сыҡҡас, Россия сит ил эштәр министерствоһы Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев кандидатураһына туҡтала. Петербургтан йыл аҙағында Өфөгә шундай телеграмма килә: *«Уфа. Муфтию. Прошу не отказать вашим вниманием убедить Уметбаева принять должность переводчика и моего секретаря. Содержание 1200, весма обяжите. Султан Чингизхан».*

Мөхәмәтйәр Солтанов мөфтиҙең бик ныҡ димләүе буйынса бөтә шарттарҙы асыҡлап бөткәс, ғаиләһе менән ныҡлап кәңәшләшкәс, баш ҡалаға яңы йыл башында шундай телеграмма һуғыла: *«Петербург Султану Чингизхану». Поздравляю с новым 1887 годом. Согласен. Телеграфируйте будут прогоны, подъемные где получу. Уметбаев».*

---

*вакеф* — йәмғиәтселек (халыҡ) файҙаһына васыят ителгән мөлкәт

*Бишенсе бүлек*

# ПЕТЕРБУРГ

*«Петербург бәрәкаттән әбәд тәхетпайҙыр».*

*М. Өмөтбаев*

Оҙон сәфәргә сыҡмаҡсылар. Тәхетпай Петербургтың үҙенә башта. Ары Ҡырымға. Ҡышын юлдары еңел булмаясаҡ.

Сәфәрен Өмөтбаев хәҙер иң яйлы юл Ырымбур аша башламаҡсы булды. Һикһәненсе йылдар башында Һамар-Ырымбур тимер юлы һалынып бөтөп, баш ҡалаға юл паровоздарға ла тейгәйне. Ураү булһа ла оло юл яҡшы, тигән боронғолар. Ураүы ураү инде: Өфө — Стәрлетамаҡ— Ырымбур — Һамар — Мәскәү— Петербург. Уның ҡараүы— өстән икеһе, мең ярым саҡрымдан артығы — тимер юл.

Юлъяҙмаһында Өмөтбаев оҙон сәфәрен бер генә һөйләм менән атап үтә ул үтеүен: «1887 йылдың 12 ғинуарында сәфәребеҙҙә әүәл Стәрлетамаҡ ҡалаһына барып, бабабыҙ Ҡамалетдин хәҙрәткә күрешеп, Ырымбурға кереп, остазыбыҙ генерал Биксуринға күрешеп, унан Мәскәүгә килдек; Мәскәү ҡалаһын икенсе кәррә күреп, тәхетпай Петербургка килдек». Әйтеүҙәре генә анһат: юлда аттан атҡа, поездан поезға күсә-күсә ай уҙҙы. Бигерәген ҡышын юл ғазабы гүр ғазабына тиң ине.

Өс көн мәшәҡәтле юлдан һуң, беренсе ҙур туҡталышта, Стәрлетамаҡта Ҡамалетдин хәҙрәттәргә төштө. Ике көн ял алып, һый-хөрмәт күрҙе. Шаҡтай олоғайған, таушалған мөҙәристең һөйләгәндәре күңеленә май булып һеңде: бажаһының Өфө ғалим-ғөләмәләр араһына инеп шөһрәт яулауына оло ҡыуанысын йәнә тәҡрарланы. Пайтәхеттә яуаплы эшкә тәғәйенләнеүен үтә хуп күрҙе. Үҙенсә һөйөнөслөһө: Мөхәммәтсәлим уҡытҡан мәҙрәсә гөрләп тора, донъяуи фәндәрҙән ул һалған бәрәкәтле орлоҡтар хәҙер дәррәү емеш биргәндәр икән. Киске мәжлестә яңы мөғәл-

---

*бәрәкәдтән әбәд тәхетпайҙыр* — муллыҡтан мәңгелек баш ҡала.

лимдәр, иман хатиптар менән әңгәмәләш һәйбәт тойғолар ҡалдырҙы. Шиһабетдин Мәржәни хәҙрәт шәкерте Хәбибназар әл-Үтәкиҙең фәлсәфи, шәреҡ хеҙмәттәрен, Ғәбделвәхит әл-Стәрле мәхзумдең һәр фәнгә маһирлығын маҡтап һөйләнеләр.

Йәшлеге ҡалаһы Ырымбур. Танымаҫ булып үҫкән, үҙгәргән. Ҡат-ҡат янғындарҙан һуң таш йорттары күбәйгән. Күпкә матурлана төшкән. Ҡәҙимге йорттары, кадет корпустары йәшлеген хәтерләтеп тора.

Иң хәтирәлеһе, әлбиттә, остазы Мирсалих Биксуринды күреү. Генерал отставкаға сыҡҡан, әммә етмеште уҙһа ла бик теремек күренә, хатта әле лә төрлө административ хеҙмәттәргә, ғилми йәмғиәт эштәренә йәлеп итеп торалар икән үҙен. Бер ҙур фәнни-экономик очерк яҙыу менән мәшғүл, өҫтәүенә.

Остазын ҡыуандырғаны — шәкертенең уңыштары. Теләктәрен дә мәҡәлсәләп әйтте остазы: «Нужа күрмәй ир булмаҫ, ғәмәл күрмәй ғалим тыумаҫ,— тине ул. — Күрәһен күрҙең, ир булдың, ғалим булып шөһрәт табырға ваҡыт. Ғилемгә һалһаң икән күберәк дарманыңды». Былар шәкертенә девиз булып әйләнер кәңәштәр ине.

Шулай ике кис буйы һөйләшеп, кәңәшләшеп һүҙҙәре бөтмәне. Оло уҡытыусыһынан фатиха алыуҙары ла мөһим ине алдағы юлдарында, оҙон сәфәрендә. Биксурин генерал Сыңғыҙханов генералды яҡшы белә икән. Сәләмен тапшырырға, үтенестәрен еткерергә ҡушты. Бер-ике кәлимә хат яҙып та тотторҙо.

Мәскәү! Йәнә күп гүзәл ерҙәрен ҡыҙырып сыҡты. Күрмәгән зиннәтле ғимарәттәре, музейҙары менән танышты. Башында яңы хыялдар, фәнни пландар уянды. Мосолман донъяһы өсөн атап, Россияның ҡанлы вә шөһрәтле тарихы, сәнәғәт, сәнғәт тәрәккиәте тураһында яҙаһы ине...

Ниһәйәт, Петербургтың үҙе. Пайтәхет. Петр батша заманында бабаһы Өмөтбай булған ҡала. Мәскәүе аманат булып ятҡан ҡалаһы. Шуның балаларының, балаларының балаһы шул аҡ таш ҡалаларҙа йөрөп ятһынсы. Атаһы Ишмөхәммәт кантон улының пайтәхеттең үҙенә, ҡолағы ишетмәгән Сит ил эштәре министерствоһына рәсми мөстәхәдәм итеп саҡырылыуын ишетһә, нишләр ине икән?

Министерствола эштәр шәп ҡуйылған, күрәһең: пайтәхеттең Мәскәү вокзалында кареталары менән төшөп ҡаршы алдылар, бик һәйбәт гостиницаларына урынлаштырып уҡ ҡуйҙылар. Оҙон сәфәрҙән һуң баш-күҙ алырға, баш

---

*сәнәғәт* — промышленность; *тәрәккиәт* — прогресс; *мөстәхәдәм* — хеҙмәткәр.

ҡаланың үҙенә күнегергә лә форсатын бирҙеләр. Өсөнсө көнөнә генерал-майор Ғәбиҙулла Сыңғыҙхан солтан менән осрашырға, тинеләр.

Мөхәммәтсәлимдең хәҙер төп начальнигы ошо Сыңғыҙхан хәҙрәт. Уның тураһында ишетеп белгәне ярайһы уҡ. Ул ҡырғыҙ-ҡаҙаҡтарҙың затлы нәҫеленән. Сыңғыҙхан тоҡомо. Оло бабалары арҙаҡлы Әбулхайыр хан. Кесе урҙа ханы. Тәвкилев менән Алдар батырҙар тарафынан Россия подданстваһына шырт ҡылдырылған хан. Әбулхайыр улы Нурали хан, уның улы Бөкәй хан, Бөкәй хан улы Йыһангир хан. Ошо Йыһангир хан Ғәбиҙулла Сыңғыҙхан хәҙрәттең атаһы инде. Хәҙер Сыңғыҙхан генерал-майор, Россия Сит ил эштәр министерстваһының Азиатский департаменты начальнигы. Илдең көнсығыш халыҡтары өсөн иң ҙур түрә.

Өмөтбаев Сыңғыҙханов генералды тәү тапҡыр Мәскәүҙә, бынан дүрт йыл элек коронация ваҡытында күргәйне. Тамашаһы бөгөнгөләй хәтерендә. Уны хәтирәләренә лә яҙып ҡуйҙы ул: «Азиатский кейемдәр араһында ҡырғыҙ түрәләренең кейемдәре ятыраҡ күренде. Ҡыҙыл хәтфә, көрән хәтфә бишмәттәрен һәм сәкмәндәрен алтын уҡа менән сигеп эшләгән был түрәләрҙең һәр береһе бер хан ҡиәфәтендәлер. Азиатский халыҡ араһында быларҙан һиммәтлерәк кейемдәр булманы. Шаһ хозурында хеҙмәт итеүсе солтан Ғәбиҙулла ибн Йыһангир хан, кинәйәһе Сыңғыҙхандыр. Ул заманда свита его величества генерал-майор ине. Ҡырғыҙ түрәләрен коронация көнөндә халыҡ йыйылғансы Парадный крыльцоға ҡуйҙы. Коронация башланғас, Красный крыльцо алдына ҡуйҙы. Хоҙай тәғәлә абруйын биреп, дәүләтен арттырһын. Ул Ғәбиҙулла солтан мөфти хәҙрәтенә лә шул ваҡытта күп ярҙам күрһәтте. Был зат Шәрифең бер туған ағаһы гвардия полковнигы кенәз Әхмәт Сыңғыҙ, кинәйәле ҡырғыҙ депутаттарына аға булып барған ине».

Бына шул ил ағаһы зат менән хәҙер күҙгә-күҙ осрашырға тейеш. Аудиенция Эске эштәр министерстваһының Азиатский департаментында.

Департаменттың бейек колонналы бинаһының зиннәтле ҡабул итеү залында танышып, иркенләп һөйләшеүҙәрҙән башланып китте был рәсми бәйләнеш.

Ғәләмәт ҙәү имән өҫтәл артында ултырған генерал-майор Сыңғыҙханов хәрби мундирында әүәлгесә бик мөһәбәт. Һыҙатлана төшкән сырайы, аҡ йүгергән ҡуйы сәс һәм мыйығы һимматлек өҫтәй. Монголса ярым ҡыйыҡ үткер күҙендә һынамышлы етди ҡараш сағыла.

Көнсығышса ҡуш ҡуллап аяҡ өҫтө күрешеп, ултырышып, хәл-әхүәл һорашҡандан һуң әңгәмә көйлө генә ялғанып та китте.

— Мөхәммәтсәлим хәҙрәт, мин һеҙҙе ишетә беләм, бына имде күреп танышмаға ла, иншалла, насип булды, — тип башланы солтан. — Бергә-бергә һәйбәт эшләргә яҙһын. Һеҙҙең турала яҡшы нарыҡтар мәғлүм, рекомендациялар һәйбәт. Тураһын әйтәм: был ауыр, яуаплы ваҡеф эшенә тәрших-кандидатураны оҙаҡ һайланыҡ. Аҙаҡ тәғәйенс һеҙгә туҡталдыҡ. Уҡымышыңыҙ, телдәрҙе яҡшы белеүеңеҙ, зат ҡәбиләтеңеҙ, хәҡиҡәткә тоғрололоңыҙ мөмтаз улды. Шуларҙан хәйерле ни иmәç. Сәлимгәрәй мөфти хәҙрәттең бәяһе әғла.

— Хәйер-фатихаларына, һеҙҙең ышанысҡа рәхмәт, солтан хәҙрәт.

— Эш уғата буталсыҡ, мәсьәлә сәғбәт. Еп остарын тапмаҡ, сисмәк хәжәт. Оҙаҡ мөддәтле ғәмәл булыр. Түҙмәк кәрәк. Ихтыяр, сабырлыҡ, ғәҙеллекте юлдаш итһен, аллаһы тәғәлә. Бер-ике һүҙ менән әйтмәктә, төп эш-ғәмәл шунан ғибәрәт: ваҡеф ҡағыҙ-документтарын тәртипкә һалмаҡ, гәрәп, фарсы, ҡырым-төркисәләрен руси теленә тәржемә итмәк. Төрлө документтарҙы барлап, дәлилләп тәфтишләмәк. Йәнә сәркәтип вазифаһы.

Эште департаменттағы ҡағыҙҙарҙан башларбыҙ. Хәл ҡәҙәренсә үҙем ярҙамлашырмын. Унан Ҡырымдың үҙенә барып ҡайтырбыҙ. Аҡ Мәсеткә, йәғни Симферополгә.

— Ҡүпме мөддәт булыр икән самаса, солтан хәҙрәт?

— Өс-дүрт ай. Арта китһә ярты йыл.

— Хуш, бергә-бергә һеҙҙең мөбәрәк ярҙамда эшләргә насип булһын.

Шунан ике-өс вағыраҡ мәсьәләләрҙе асыҡлау, бер-нисә күрһәтмә биреү менән тамамланып та ҡуйҙы аудиенция. Һәҡ хәрбиҙәрсә ҡыҫҡа, аныҡ ине һәммәһе.

Гәрсә, бынан бер ни тиклем сыҡҡандай, солтан мөстәхәдәмен береһе көнгә өйөнә саҡырҙы икән әле. Ҡаҙаҡтың хан-солтанат йолаһын йолалауы булды микән? Әллә бүтән сәбәпме? Дөрөҫө, бергә эшләр кешеһен үҙенә бер ни ҡәҙәр яҡынайтыу, ҡылын тартып ҡарау ниәте бар ине шикелле.

Солтан зат генерал-майор, әлбиттә, шәп йәшәй. Ике ҡатлы кескәй ҡупшы йорт. Ҙур ҡунаҡ бүлмәһе ҡаҙаҡтың аҡ тирмәһенә оҡшатыбыраҡ йыһазландырылған. Стенаның бер яғы шау ҡаҙаҡса биҙәүле келәмдә, икенсе яғы —

---

*мөмтаз улды* — өҫтөнлөк бирҙе; *әғла* — яҡшы, юғары; *сәғбәт* — ҡатмарлы, мәшәҡәтле; *мөддәтле* — сроклы; *тәфтиш* — тикшереү, ревизия.

европаса. Иҙәндә шулай уҡ эре биҙәкле, төрлө буяулы ҡаҙаҡ кейеҙе. Стенаның бер мөйөшөндә уҡ-һаҙаҡ, ҡалҡан, мылтыҡ-пистолеттар менән аралаш ниша. Ханбикә Алтынай бөтөнләй ҡаҙаҡса кейенеп алған. Өҫтөндәгеһе шау ебәк. Ғибаҙулла солтан үйҙә үҙе лә ҡыр-ҡайсаҡса.

Ике улы Петербург кадет корпусын бөткәндәр икән. Береһе көньяҡта ҡайҙалыр хеҙмәттә, икенсеһе — Петербургта, үҙҙәрендә. Әйтеүҙәренсә, мауығыуы көнсығыш ғилемендә мөстәшәриф булмаҡсы.

Табынға ултырышҡас, унда өшө кесе улы Ишем дә бар ине, һүҙҙәре башта ҡаҙаҡ-башҡорттарҙың уртаҡ ыҙан-йолалары тирәһендә йөрөнө. Унан, хужа кеше, Рәсәй тарихынан, шәреҡтән булһын, ҡунағының белем дәрәжәләрен самалап, һорауҙарын, юл айҡан тигәндәй, бирен, яуаптарын тыңлап ултырҙы. Мәғрифәт, дин йәһәтенән дә әңгәмә ҡуйырғылап алды.

Ҡаҙы һоғоноп, ҡымран һемереп буйтым булып алған солтан, әүәлге ханлыҡ ҡылыҡтары ҡымырйыпмы-нисек, Мөхәммәтсәлим һүҙҙе ҡырғыҙ-ҡайсаҡ хандары тәңгәленә йүнәлтеү менән үҙ арғымағына ҡунаҡлап та өлгөрҙө. Тәүгә Тәүке, Хаҡназар хандарҙан һүҙ йәйләп Әбулхайыр ханға күсте.

— Әбулхайыр хан — ҡырғыҙ-ҡайсаҡ йөҙҙәрен Рәсәйгә борған алдан күрер аҡыллы хан, — тип дауам итте шуларҙың тоҡомо.— Әбулхайырҙың 1748 йылғы һәләкәте — томана яуыз солтандар ҡулынан. Улы Нурали ханда иһә атайының көҙрәте имәҫ. Айбарһыҙ вә умыртҡаһыҙ була гуй. Аманат хәлендә Өфөлә вафаты ла үҙенән.

— Нурали хандың ҡәбер ташын тапҡаныбыҙ, зыярат урынын билдәләгәнебеҙ булды,— тип ҡушылды ҡунағы.

— Шуның хан аҡ һөйәген үҙ урҙаһына күсертәһе ине лә бит, һис ҡул етмәй, — тип көрһөнөп алды хужа.

— Уның улы Ишем хан да Өфөлә вафат, буғай.

— Эййе, уның үлеме лә ситтә. Кесе улымдың аты шул хан аманаты. Нуралиҙың икенсе улы Бөкәй хан. Ул беҙ фәҡирегеҙҙең олатаһы. Бөкәйҙе Александр I ғали йәнәптәре 1812 йылды хан итеп грамота бирә, Кесе урҙа ханлыҡҡа күтәрә. Унан ҡала, өлкән улы, беҙҙең арҙаҡлы атабыҙ булыр, Йыһангир солтан 1833 йылда 22 йәшендә хан итеп кейеҙҙә күтәрелә, бадишаһ гармота менән тәсдиҡ ҡыла.

Кесе тигән йөҙөбөҙ, ололоҡло урҙабыҙ Яйыҡ үрҙәренән Әстерхан ерҙәренәсә, Ырымбур далаларынан Арал диңгеҙе, Сырдаръя һыуҙарынаса йәйрәп яталыр ине, истәгем.

---

*мөстәшәриф* — көнсығыш белгесе; *ҡымран* — дөйә һөтөнән әҙерләнгән эсемлек.

һағышланып өҙгәләнә башлаған солтандың борсоулы уйҙарын икенсегә бороу ниәте менән Мөхәммәтсәлим һорау бирергә ашыҡты:

— Ә бына Вәлихановтар тоҡомо ҡайҙанырак килә, тәҡсир? Чоҡан Вәлихандың һеҙгә нәҫеллеге юҡмы?

— Ниңә булмаһын, бар, әлбиттә. Нәҫел башҡа булһа ла аҫыл зат бер гуй. Сыңғыҙ хандан. Ана әкәгеҙҙең фамилияһы ҡайҙан!

Вәлихановтарҙың яңы тоҡомдарының арҙаҡлыһы Аблайхан. Беләһегеҙме икән, Аблайҙың ун ике ханбикәһенән 30 улы, 40 ҡыҙы булады. Аблай хан вафат булғас, — мәғлүм булһын, ул Әхмәт Йәсәүи әүлиә ҡәбере менән йәнәш Төркөстан маҙарында ерләнгән, — улы Вәлиҙе Урта йөҙ ханы итеп күтәргәндәр. Уның улы — Сыңғыҙ солтан. Чоҡан Вәлихановтың атаһы булады.

Чоҡан Вәлихановтың беҙгә яҡын туысҡанлығын да әйтәйем. Сыңғыҙ менән минең ағайым Әхмәт Йәнтүрин туысмаҡ өсөн Чоҡанды бала сағында уҡ Әхмәттең сабый ҡыҙы менән ҡолағын тешләттергәйҙәр. Йәғни, мәҫәлән, ҡоҙалашып ҡуяларды. Ахыр Чоҡан Вәлиханов батша тарафынан оло хеҙмәттәре өсөн штабс-ротмистр чины алады, ошо Азиатский департаментҡа драгоман итеп жалунья тәғәйенләнәде.

— «Записки Русского императорского географического общества» журналында мин Чоҡан Вәлихановтың «Очерки Джунгарии» юлъяҙмаларын уҡығаным бар. Бик төплө ғалим, географ булғаны күренә.

— Бик ҙур ғалим булмаҡсы ине. Ҡашғардан экспедициянан ҡайтҡас, 1860 йыл Петербургта оҙаҡ ҡына булады. Шунда ғалим-ғөләмәләр араһында индереүҙә минең ҡулым бар. Нишләйһең, үҙен йәлләмәне, һаҡламаны инде, үтә йәшләй китте. Бер ғали ғалимыбыҙ булады ине.

— Минеңсә, шул көйө лә уның хеҙмәте аҙ түгел. Ул тәуарих, ул география, ул этнография буйынса. «Манас» хаҡында, ҡара ҡырғыҙ этнографияһы хаҡында хайран ҡалып уҡыным.

— Ә Ибраһим Алтынсаринды беләһеҙме? —тип һораны ҡапыл хужа.

— Беләм. Бер осорҙа Ырымбурҙа уҡыныҡ бит. Остазым Мирсалих Биксурин уның да шәкерте ине. Үрнәк ҡуйып һөйләр ине Ибраһимды. Ул беҙҙе таныштырҙы ла. Ҡаҙаҡтың өлгөр мәғрифәтсе әҙәме тип һанайым мин уны.

— Мирсалих Биксурин генерал ҡонар шәхес. Бер нисә

---

*истәк* — ҡаҙаҡтар башҡортто шулай атай; *тәҡсир* — ололап әйткән һүҙ; *туысҡан* — туғандаш.

тапҡыр осрашҡаным, ултырҙаш булғаным бар унын менән. Бына көс-ҡеүәттән, ижтиһадтан кемдән өлгө алырға кәрәк. Шәкерттәре лә йөктән төшөп ҡалғандар түгел...

Һүҙ эйәрә һүҙ сығып, әңгәмәләре Вәлихановтан Достоевскийға, Федор Достоевскийҙан Лев Толстойға ла ялғанып китте.

Шулай оҙаҡ һөйләшеп, гәпләшеп ултырыуынан, булаһы хеҙмәткәренән ҡәнәғәт ҡалды шикелле генерал-майор түрә.

Аҙаҡ Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев «Башҡорт халҡының аҡ һәм ҡара көндәре» исемле тарихи очеркында Башҡортостан тарихына бәйле рәүештә әле һүҙ барған ҡаҙаҡ хандары хаҡында ла бик ентекле күҙәтеү яһай, ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр теркәп ҡалдыра.

Ғөләмә менән гөләмә осраша икән ул. 1872 йылда яҙмыш икенсе бер башҡортто — Аҡмулланы Петербургка килтерә, ошо уҡ Ғәбиҙулла солтан Сыңғыҙханов менән осраштыра. Ғәбиҙулла солтан Александр II батшаға хат яҙып, Аҡмулланы хаҡһыҙ ғәйепләнеп төрмәлә ултырыуынан, аҙаҡ «арестантский ротанан» ҡотҡарып алып ҡала. Был уңай Аҡмулланың «Солтан Ғәбиҙуллаға шикәйәт» мәҙехе яҙыла (Әбелмәнех Ҡарғалы Ғәбиҙулланың атаһына «Йыһангир хәҙрәткә» мәҙехен бағышлағайны). Аҡмулла уға «күп булды мосолманға ярҙамығыҙ, көндән-көн үҫә барҙы баҙарығыҙ» тиһә, Өмөтбаев та солтанды ыңғай баһалай.

2

Генерал-майор еңел һөйләһә лә, департаменттың эше үҙе менән. Министерство бик мыштыр ҡылапды. Ҡағыҙ волокитаһы күп булды. Ғәбиҙулла солтан түрә лә сәфәргә бигүк ашығып бармай ине шикелле. Шуғалырмы инде, нисектер, Ҡырымдан бәғзе бер материалдарҙы почта менән пайтәхеткә алдырҙылар. Мөхәммәтсәлим уларҙы тәфтишләү, тәржемәләү эшенә ултырҙы.

Февралдә ауылға Фәхретдин ағаһына яҙған хатында Өмөтбаев былай ти: «...хәҙергә һәмишә 23 ғинуарҙан бирле Петербургта торамын. Тәржемә эштәрен Ҡырымдан почта һайын юлығабыҙ. Байтаҡ нәмәләр яҙҙыҡ. Ҡабул булған эштәрҙән булғай инде. Амин».

Мөхәммәтсәлим ял көндәрендә, ҡай бер көн эш сәғәттәренән һуң Петербургты ҡыҙырырға, унын хәтирәле урындарында булырға тырыша. Форсат тейгәндә, пайтәхетте

---

*ижтиһад* — тырышлыҡ, эшкә күңел биреү.

күреп, танышып ҡалырға кәрәк. Уның күптәнге хыялы, рухи ихтыяжы ине был.

«Был Петербург бәрәкәттән әбәд булмыш тәхетпайҙыр,— тип яҙҙы ул аҙаҡ юлъяҙмаһында. — Урамдары вә өйҙәре тулы баҙарҙыр, мөсәнниф ләғәтендә заһрән вәсәфа зинуар вә зәййәннәттер. Әммә батыни йыһанының зауыҡ вә сафаһына мәйелдер. Бында йәнә әһле фән вә мөһәндистәр хыялына күңел мөһөрө күптер».

Тимәк, автор фекеренсә, баш ҡалалағы бер нисә зиннәтле һарай, сәнғәт ҡомартҡылары оҫталарының уй-теләктәрен, һүрәттәрен сағылдырған ысын ҡоролма һындарҙыр. Әҙәмдең рухи донъяһының юғары зауығына һәм күңел сафлығына ярашлы мәйелдер. Ә уҡымышлы кешеләргә, фән әһелдәренә хыялына рухи аҙыҡ бирер күңел мөһөрөләр.

Шулай, хыялына ҡеүәт биреп, зауыҡландырып күңел байлығына әүерелгән атаҡлы урындарҙы, музейҙарҙы, сәнғәт йәдкәрҙәрен байтаҡ күреп өлгөрҙө Мөхәммәтсәлим. «Ғимарәттәрҙән мәшһүрҙәре әҙ йөмләнән Зимний дворецты, Главный штаб йортон, Адмиралтействоны, Исаакиевский вә Казанский соборҙарҙы вә ғәйере ҙур дворецтарҙы йөрөп күрелде. Эрмитаж дворецына кереп тамаша ҡылдым. Бында күп ғәжәп эштәр бардыр»,— ти ул ҡыҫҡа ғына итеп юлъяҙмаһында.

Уны иң ныҡ таң ҡалдырғаны, рухын ҡанатландырғаны, моғайын, Ҡышҡы һарай һәм Эрмитаж үҙе булғандыр. Батшалар йәшәгән зиннәтле һарайҙар. Баҡыр һыбай Петр батша һәйкәле. Йәнә Екатерина II ҫаниә йәнәптәре йәшәгән һәм батшалыҡ ҡылған дәү һарай Мөхәммәтсәлимде айырыуса ҡыҙыҡһындырҙы. Ҡышҡы һарайҙың кем проекты буйынса төҙөлөүен, һалыныу тарихын мауығып тыңланы, яңы мәғлүмәттәр ишетте. Эрмитаж иһә бөтә донъяның кешелек тарихының иң гүзәл сәнғәт йәүһәрҙәрен үҙенә еткеле туплаған хазинанан ғибарәт булараҡ уны тамам хайран итте. Боронғо Юнан, Мысыр, Рим иле скульптуралары, Афродиталары, Зевстары, фирғәүендәре, кесарҙары вә ғәйреләре менән танышты; мәғрип Европа, Россия сәнғәте ҡомартҡыларын ихласлап тамаша ҡылды. Зауҡы аша улар күңел мөһөрөндәй һеңеп, рухи донъяһын биҙәп яҡтыртып

---

*бәрәкәттән әбәд* — мәңге бәрәкәтле мул; *мөсәнниф ләғәтендә заһрән вәсәфа зинуар вә зәййәннәттер* — ижадсы, төҙөүсе, автор теләк-ҡараштары асыҡ сағылған зиннәттәр; *батыни йыһанының зауыҡ вә сафаһына мәйелдер* — рухи донъяның зауығына һәм сафлығына ятышлы; *әһле фән һәм мөһәндистәр* — фән эйәләре һәм инженерҙар; *ғимарәт* — ҡоролма, йорт.

ебәргәндәй итте. Тамашаларҙың тамашалары, гүзәл һындарҙың гүзәлерәктәре лә баһа.

«Эрмитаж дворецына кереп, ике сәғәт ҡарап йөрөнөм. Ул дворецтың һәйбәтлеген һөйләп бөтөрөрлөк түгел,— тип уй-фекерҙәре менән бүлешә ул ағаһына ебәргән хатында.— Төрлө ғәжәйеп һөнәрҙәр, хотуафәрләр, батшаларҙың әсбаптары, төрлө зиннәттәр бар. Шул дворецта гуд йығастары вә ғәйре йығастарҙан баҡса, залдың түбәһе һауа, йәғни быяла. Ағастарында һандуғастар һәм канариҙар һайрап тора. Баҡсала һис кем юҡ. Хикәйәт ҡылалар: император Александр Веторойҙың жәүҙәһе Мария Александровна үҙенең Ҡырымдағы баҡсаһының йығастарын килтертеп ҡуйған тип. Баҡсаһы бар, хужаһы юҡ. Эсендә таштан яһалған нәмәләр бар.

Хәтергә килде Йософ ғәлиәссәләм вафат булғас, Зөләйхабану әйткәне:

Вайран улыр бағлар багбан улмаһа,
Фәләс вайран булыр солтан улмаһа,
Дарьялар дәхаби руан улмаһа,
Һитәйәт бит улмаһа имде.

Сәнғәт донъяһы, фәләс-ҡаҙаныштар әҙәм балаһын уйхыялдарға һала шул. Уның ижадсыһы, төҙөүсеһе әҙәм аҡылы, әҙәм ҡулдары бит. Һәләт ҡеүәһе. Һәр бағ-баҡсалар баҡсасы булмаһа, баҡса түгел, аҫыл заттары булмаһа, затлы түгел. Әҙәм аҡылы, һәләте менән яһалғанға ғына улар ысын зиннәттәр, зауыҡ донъяһы.

Ҡантон улы Главный штаб йортон ҡарап йөрөй. Быныһы инде Рәсәй иленең көс-ҡеүәт ғимарәте. Уның сәрҙәрҙәре, полководецтары эшмәкәрлеге, төрлө трофей-ғәнимәттәр, еңеү-ғәлиптар тупламаһы.

Башҡорт ғәскәренә бағлы нәмәләрҙе күреп тә ғәжәп итте уның администрацияһында күпмелер эшләп алған толмас. Тыуған халҡының ауыр һәм ҡаһарманлы яу, ғәлип юлдарын иҫенә төшөрҙө, Рәсәй шәүкәтенә ҡушҡан өлөшөн тойғандай булды. Башҡорт ғәскәренең ҡорал-ҡорамалдары, тыуҙары, хәрби кейемдәре лә бар ине унда. Былар инде хәҙер тарих. Экспонат.

Петербургтың үҙендә һәйкәл, таш һын булып ҡалҡҡан йәдкәрҙәр һуң! Мөхәммәтсәлим үҙе яҙғанса, шундай ғәләмәттәрҙән император Александр Первыйға яһалған таш бағана (колонна), императорҙар Николай Первый һәм Ека-

---

*гуд йығастары* — тропик ағастары; *жәүҙә* — ҡатын; *фәләс* — ҡаҙаныш, байлыҡ.

терина çаниәнең монументтары. Кенәз Кутузов, Суворов һәм Барклай де Толлиҙың ошондай монументтары, йәнә Аничков күперендәге дүрт суйын атлы кеше һүрәттәре Петербургтың ғәжәйептәренәндер. Петропавловский крепосына ҡаршы биржа янында ике таш бағана, Слава таш колоннаһы. Ә бына Невский дворецтарға яҡын казармалар янындағы бер ғәләмәт дәү гранит таш үҙе ни тора. Ҙурлығы тирмә ҡәҙәре. Үҙе ултырғысҡа ултыртылған кеше сифатлы. Тик, ни хикмәткә килтерелгәне мәғлүм түгелдер, тип ғәжәпләнеп ҡуя сәйәхәтсебеҙ үҙе.

Урамдарҙың иң эреләһе, әлбиттә — Невский проспект. Күп мәшһүр әлеге ғимарәттәр һәм ғәләмәттәр ошо урамда. Невский — Петербургтың үҙәге. Уның һәр дворецы зиннәтле йорто үҙе бер йәдкәр, үҙе бер тарих. Ана шуларҙы ҡарап, тарихтарын хәтерләп, атаҡлы әҙәмдәр, Пушкин, Гоголь, Достоевский кеүек әҙиптәр баҫып йөрөгән таштарға баҫып йөрөнө, йәшәгән йорттарын тамаша ҡылды Мөхәммәтсәлим. Гоголдең ошо Невский проспект тураһындағы мажаралы хикәйәләрен, Аккакий Аккакиевич тигән чиновник ҡаһарманын хәтеренән уҙҙырҙы.

Пайтәхеттә Мөхәммәтсәлимде йәнә ғәжәп иткәне ғәжәйепханалар, музейҙар булды. Уларҙың индәйҙәре генә юҡ бында. Ул тарихҡа, ул йыһанға, ул тәбиғәткә, илхалыҡтарға, фән вә диндәргә бағлыһы. Бәғзеләренең тереләй итеп бирелеше ғәжәп. «Петербургта Невский проспектының бер музейында мәшһүрерәк ғәжәйептәрҙән беренсе бүлмәлә хәбәшиҙәр, ҡытай халҡы, француз Гамбетта, Германия императоры Вильгельм, ғәрәптең «Мең дә бер кисә» хикәйәтендәге батша һәм ҡатыны Шәһрезада, йәнә Прекрасная Елена һәм башҡалар тылсым менән бөтә ағзалары балауыҙҙан яһалып, кейемдәр кейҙерелеп, жәүаһирҙарға ғарыҡ ителмештәрҙер, — тип яҙа М. Өмөтбаев. — Үҙҙәре, йәнле кеше кеүек ҡуҙғалып, һулау алып, күҙҙәрен уйнаталар.

Бер урында бер гүзәл ҡатын, жәүаһирҙарға ғарыҡ булып, истирахәттә көрһөнөп яталыр дәхи ни ҡалған тигән рәүешле. Быны күргәс, ихтыярһыҙ рисаләи «Йософ»тан Зөләйха бәйеттәре хәтеремә килеп, уҡып ебәрҙем:

> Был төн бер ваҡиға күрҙем,
> Насибын булһа, йәрем бар.
> Мине ғәйеп итмәгеҙ, дуҫтар,
> Һораһам, ихтыярым бар.

---

*хәбәши* — хәбәшстан (Эфиопия) кешеһе; *жәүаһирҙарға ғарыҡ* — аҫыл таштарға күмелгән; *истирахәт* — рәхәтләнеп ял итеү.

Шунда Наполеон I, Отто Бисмарк йәнә афған ғазыйы бар. Уң ҡулдағы икенсе бүлмәлә яҙыусы Тургенев бар. 1886 йылда һыуға батҡан Бавария короле Людвик II бар, Рим папаһы Пий IX ята. Йәнә Франция короле ҡатыны менән тәхеттә ултыралар. Уларҙың янғында, өҫтәл өҫтөндә, ике ҡулы ла тыумыштан юҡ Радион Прокофьев исемле рус кәтип ләуаземын эда ҡылып ултыралар. Аяҡ менән яҙалыр вә кәре эштәрҙе шулай уҡ аяҡ менән ҡылалыр. Минә бүләк итеп һүрәтен бирҙе. Һыртына минең исемде һәм үҙенекен яҙып ҡуйҙы».

Ныҡ уйландырғаны һәм тетрәткәне дүртенсе бүлмәлә урта быуат инквизициялары тураһындағы һынлы тамашалар булғандыр моғайын. «Дүртенсе бүлмәлә испан инквизиция язалары — борон заманда нәсара халҡы борғос вә утҡа көйҙөрөү вә ғәйре нәүғ язалар менән дингә көсләгәндәре, — ти автор. — Бына яланғас әҙәм. Йөмлә ағзаһында таяҡ йәрәхәте һәм сәнселгән урындарҙан ҡандары аҡҡан. Үҙе өҫтәл өҫтөндә, һәр тарафҡа тарттырылып, колодкаға һуғылған. Уның янында шул язаларҙы ҡеүәтләүсе нәсара побы ултыралыр. Уның янында бер ҡатындың имсәген колодкаға ҡыҫҡандар, балаһы янында илап ята. Унан ары, 1878 йылғы Ҡарс һуғышында күкрәгенә йәҙрә кереп һәм балтыры арҡыры ҡылыс менән киҫелеп, Муса Ҡандороҡ исемле төрөк пашаһы ята. Рустан ҡыҙ фельдшер уның йәрәхәтен бәйләй. Паша күҙҙәрен асып-йомоп, ҡаты һулыш ала».

Был рәхимһеҙ һәм ҡанлы тамашаларҙы күргәндә Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың, тыуған халҡының аҡ һәм ҡара көндәре тарихын яҡшы белгән кешенең, башҡорттарҙың азатлыҡ яуҙарынан һуң ҡул-аяҡтарын сабып өҙөп, ҡабырғаларынан тимер ырғаҡтарға аҫып, танау-ҡолаҡтарын ҡырҡып язалауҙарын хәтерләп, яуҙа уҡ-һөңгөләрҙән, ҡылыстарҙан ҡаты йәрәхәтләнеп, ҡанһырап ятҡандарын, үлгәндәренең һөйәктәре әллә ҡайҙарҙа ятып ҡалғандарын йәд итеп йөрәктәре сәнсеп, иңрәп китмәгәнме тиһең. Урта быуат инквизицияһы менән Рәсәй батшалығының рәхимһеҙ экзекуциялары араһында айырма ҙурмы ни? Тәүгеһе рух азатлығына ҡаршы дини яза икән, икенсеһе ил-йорт азатлығы өсөн көрәшеүселәргә ҡырағайҙарса яза.

Бишенсе бүлмәлә ислам диненә ҡағылышлы материалдар бар икән. Шиға мәҙһәбенең шәйеттәр биҙғәте.

Бына яңы донъя — Америка ҡитғаһы. «Алтынсы бүл-

---

*кәтип ләуаземын эда ҡылып* — секретарь хеҙмәтен атҡарып; *нәсара* — христиан; *йәд итеү* — хәтерләү; *шиға мәҙһәбенең шәйеттәр биҙғәте* — хәлифә Ғәли тарафтарҙары дини сектаһы.

мәгә кергәс тә һул ҡулда, аҡ сымылдыҡ эсендә Төньяҡ Американың булып үткән президенты Гардвельд тылсым менән яһалған, — тип дауам итә автор. — Үлем яйында, ҡаты һулау алып, ғазап сигеп ята. Һул күҙе өҫтөндә йәҙрә йәрәхәте бар. Уң ҡулда һинд халҡы бар ҡатындары менән. Йәнә Гардвельдтың баш осонда тимер ситлектә ҡарт арыҫлан бар. Янында бер гүзәл ҡыҙ илап ята. Уның биленә арыҫлан мөхәббәт менән ҡулын һалған. Ул ҡыҙҙың кейәүе, уны арыҫландан ҡыҙғанып, ситлек тышында мылтыҡ менән атырға ниәтләнеп тора. Мөҡаддәм ҡыҙ һәм арыҫлан бергә уйнап үҫкәндәр икән. Әммә ҡыҙ кейәүгә китер көнө ситлек эсенә кереп: «Инде, дуҫым, айырылабыҙ!» — тип илағас, арыҫлан ҡайғырып, асыуланып үкерә башлағанда, егет йүгереп килә һәм күрәләр: ҡыҙ ситлектә, арыҫлан асыуланмыш. Егет ҡыҙҙы хәлас итергә мылтыҡ алып килер. Әммә арыҫлан, ситлекте ватып сығып, егетте һәләк итмәксе икән. Ҡөсө етмәгәс, ғазабынан ҡыҙҙы һуғып үлтермеш тә, ҡыҙғанып, йәнә ҡосаҡлап ятмыш. Быларҙың янында бер мөһәбәт кеше барабан һуғып тора. Панорамалар шулай уҡ күптер».

Тарихтан, ил-халыҡтар тормошонан килтерелгән бындай панорамалар, әлбиттә, тамашасыны тетрәтә, уйҙарға һала.

Әҙәм быларҙан ғибрәт һәм һабаҡ та алырға тейештер. Быларҙы тамаша ҡылыуҙан М. Өмөтбаевҡа ла мәғлүмәт кенә түгел, байтаҡ һабаҡ һәм ғибрәт алырға яҙғандыр. Улар күңел мөһөрөнә әйләнгәндәр. Шулай булмаһа яҙып та, тасуирлап та тормаҫ ине.

Бына ул анатомия ғилемен, кешенең бар ағзаларын күрһәткән бүлмәләрҙе лә ҡарап йөрөй. Бында ла күпте белерлек, фәһем алырлыҡ нәмәләр күп. Автор әйткәнсә, һәр бәлиғ әҙәм, үҙенә ваҡиғ була торған хәлдәрен күреп, фәһемләп, дауа ҡылынмағы өсөн, сөнки «сирен танған үлер» тигән мәҡәл мәғлүмдер.

Ағаһына яҙған хатында ла ул әйтә: «Бында оҙаҡ ятҡас, күп эштәрҙе, әлхәмделилла, йөрөп күрҙем. Петербургты бик күп ҡыҙырҙым. Ишеткән-белгән урындарын барып ҡараным. Күрҙем, фәһем алдым. Йәнә әҙ йөмлә иң әглә пассаждары».

Петербургта айҙан артыҡ йәшәп, уның иҫтәлекле урындары, музейҙары менән танышып, тамаша ҡылып сығыу Мөхәммәтсәлимдең донъяға ҡараш офоҡтарын, фән-ғилемгә, сәнғәткә тартылышын күпкә ҡеүәтләп, рухи күтәрелеш

---

*мөҡаддәм* — элек; *хәлас итеү* — ҡотҡарыу.

осорон асып ебәргәндер, тип әйтергә кәрәк. Быны юлъяҙмалары, тәү тәьҫораттары, алдағы эшмәкәрлеге раҫлап тора.

Илдең иң ҙур китапханаһына инергә, унда күпмелер шөғөлләнергә лә ваҡыт таба Өмөтбаев. «Имперский библиотекаға керҙем, күп китаптар күрҙем, — ти ул бер хатында. — Күп китаптар эсендә «Шаһнамә» Фирдәүси уҡып ултырҙым. Ул императорский библиотекала көн һайын егет, ҡыҙ-ҡатын икешәр йөҙ кеше уҡыйҙар. Бында ике көн барып уҡыным. Бик тикшереп, билет менән мәшәҡәтләнеп керәләр».

Ғилем эйәһе, ҡояшҡа баҡҡан көнбағыштай, әлбиттә, китапханаларға, музейҙарға, ғилем әһле даирәләренә тартылыр.

3

«Беҙҙең фатирыбыҙ ошо йәд ителмештәрҙең уртаһындалыр. Невский проспектҡа яҡын Большая конюшня урамында, 63 номер. Волков йорто».

Ҡала үҙәгендә ошо йортта 1887 йылдың ғинуар аҙағынан март башынаса йәшәй Өмөтбаев. Был йорт үҙенсә мәшһүр булып, унда Ырымбур байҙарынан Әхмәтбай Хөсәйен эфәнде йәнә Ҡазан байҙары төшөп йөрөй икән. Үҙенә махсус ҡунаҡхана хозурында.

Өмөтбаев Петербургтың мосолман даирәһе менән дә күпмелер аралашырға, ултырҙаш булырға өлгөрә. «Был шәһәрҙең мосолмандары үҙҙәрен саф һәм хәсән халыҡ итеп тоторҙар, — ти ул. — Әғләраҡ йорттарҙа һәм дворецтарҙа хәдимдәр мосолмандарҙан күптер. Әммә гостиница тота торған ике бай барҙыр: Фәтҡулла һәм Рәхмәтулла ағалар. Гостиницалары зиннәтле дворец формаһындалыр».

Петербургта Өмөтбаевҡа Хөсәйеновты күреп һөйләшергә тура килгән. «Әхмәтбай Хөсәйеновты бында күреп һөйләштем» ти ул Петербург яҙмаларында. Тимәк, улар ошо Волков йортонда осрашҡан.

Хөсәйеновтарҙы ул заман Урал, Волга буйҙарында, татар-башҡорт донъяһында белмәгән кеше юҡтыр. Өс бер туған ағай-эне — Әхмәт, Ғәни, Мәхмүт — танылған байҙар, миллионерҙар. Сығыштары менән ярлы ғаиләнән. Әммә тырышлыҡтары, ижтиһадтары менән нығынып киткәндәр. Аҙаҡ ҙур сауҙагәрҙәргә әйләнгәндәр. Һөйләүҙәренсә, Миңлеәхмәт ҡырҡтартмасы булып йөрөгән башта. «Мин биш тиндән башлап биш миллион капитал туплауға килдем» ти ул. Шулай итеп, ул тире-яры, мал-тыуар менән алыш-

---

*йәд ителмештәрҙең* — алда һөйләгәндәрҙең.

биреш итеп, лавкалар, магазиндар тотор, ҙур йорттар һалдырыр байға, мәҙрәсәләр астырыр, матбағалар булдырыр миллионер меценатҡа әүерелә. Атаҡлы «Хөсәйениә» мәҙрәсәһен Әхмәтбай нигеҙләй. Өфөлә «Белем» мәғрифәт йәмғиәтенә 25 мең һум бүлә, «Хөсәйениә»гә миллиондарын һала.

Мөхәммәтсәлим әле Әхмәтбай менән яҡындан танышып, күп тапҡыр әңгәмәләрендә уның фәһемле тормош девиздарына бик диҡҡәт итте.

— Ҡара иҫәп менән генә йәшәп булмай хәҙер. Мосолмандың үҙенән ғилми иҡтисад, ысулы ғәмәл белгәндәр, уҡымышлылар кәрәк.

— Ижтиһатлы бул: берҙе бишкә әйләндер. Сәрмиәнде бушҡа серетмә. Йәмғиәт файҙаланһын, ҡәҙерен белер, үҙ ҡәҙерең артыр.

— Ғилемдә лә килем бар. Аҫау аттар арымаҫ, арыһа ла ал бирмәҫ.

— Динем тип кенә тереклек итмә, көнөм-йүнем тип тә йәшә.

— Изгелегеңде халыҡ белер, халыҡ белмәһә балыҡ белер. Итәғәт барыбер илгә етер, йәмәғәттә йәмүнен табыр...

Әңгәмәләренән аңлашылғанынса, Әхмәт әфәнденең үҙ программаһы, маҡсат-ҡасыдтары ла бик асыҡ һәм ябай: мосолманды донъяуи ғилемгә эйә итмәк, тәрәҡкиәттә алдын халайыҡтарҙан өйрәнмәк, сауҙа, иҡтисадта алғырлыҡҡа ынтылмаҡ.

Әхмәт бай түңәрәк һаҡаллы, түбәтәй, һырма бүрек кейер, үҙе төптән йыуан сыҡҡан әҙәм. Байҙарға хас һауалыҡ, тәкәбберлек юҡ, холоҡ-ҡылығы менән ябай.

Шуны ла хәбәр итте ул: әле Ырымбурҙа бик йәһәтләп яңы мәҙрәсә бинаһы һалдырып ята икән, исемле, ғилемгә төплө мөғәллимдәр йыя. Жалунъяларын юғары ҡуймаҡсы, мәҙрәсәһен ғалиә дәрәжәле, ысулы йәдитсә итмәксе икән. Шунда Мөхәммәтсәлимде рус вә фарсы телдәренән мөғәллимлеккә өндәне.

Петербургта Өмөтбаевтың ғалим-ғөләмәләр араһынан иң ныҡлап танышҡан һәм дуҫлашып киткән кешеһе Ғатаулла ахун Баязитов. «Ғөләмәләрҙән гражданский ахун Ғатаулла Баязитовты күреп һөйләштек,— тип яҙҙы ул.— Сөнки ғилем вә фән илән ғәмәл ҡылып, төрөк һәм Россия лөғәтендә байтаҡ дин вә бәхәс китаптар яҙып империяға

---

*иҡтисад* — экономика; *ысулы ғәмәл* — математика; *сәрмиә* — капитал; *интишар ҡылмыш* — таратыу; *шаиғ* — билдәле.

интишар ҡылмыштыр. Әһел ғәләм вә һөнәр араһында заһир мосолман файҙаһына тырышҡанлығы шаиғтыр».

Ғатаулла Баязитов Ҡасим вәләйәтендә мулла ғаиләһендә тыуып үҫкән әҙәм. Шул вәләйәттәге атаҡлы мәҙрәсәнән һабаҡ алып, аҙаҡ үҙе шунда Петербургка саҡырылып, пайтәхет мәсетенә имам итеп һайланған. Аҙаҡ ахун дәрәжәһен алған, 1880 йылдар уртаһынан Сит ил эштәре министерствоһының Азиатский департаментында тәржемәсе булып та эшләй башлаған. Мосолман балаларын шәхсән уҡытыу эше менән дә шөғөлләнә икән (һуңынан инде, 1905 йылда Россияла беренсе мосолман газетаһы «Нур»ҙың мөхәррире булып китер зат).

Ғатаулла Баязитов Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев менән осрашҡанда уҡ ислам тарихы, дин ғилеме буйынса Россия мосолмандарына яҡшы таныш геолог. Полемист. Мөхәммәтсәлим уның баҫылып сыҡҡан унға яҡын китабын исемләй: Ислам китабы; Донъя вә мәғишәт; Париж шәһәрендә француз Эрнест Ренандың мәҡүләтләр вәсиәтендә нәҡилис вә шәреҡ; Пәйғәмбәр ғәлиәссәләмнең донъяға килеүе вә диненең башланыуы; Исламның фәнгә мөнәсәбәте. Йәнә ике китабы рус телендә. Рус матбуғатында, фәнни журналдарында ислам фәлсәфәһе хаҡында өс-дүрт ҙур мәҡәләһе, диспуты баҫылған.

Ҡитаптарына һәм журналдағы мәҡәләләренә ҡарағанда, Ғатаулла Баязитов ислам тарихын һәм философияһын яҡшы белгән, уларға бөтә донъя диндәре һәм философияһы нигеҙендә киңерәк ҡараған ғилем әһле, төрлө ҡараштар менән бәхәсләшергә яратыр диспутсы, оратор булған. Быныц ҡай нигеҙҙәрен ике әһел — Ғатаулла Баязитов менән Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың әңгәмәләше рәүешендә күҙаллап ҡарайыҡ.

— Ислам тәрәҡиәттәге тәғлимәт,— ти Ғатаулла ахун.— Ул, ғәйре диндәр һымаҡ замандға ярашмаҡ мәслихәт. Тәнзимәт дәүере исламға ла ҡағыла.

— Ислам әсәсе ҡәләм шәриф. Ҡөрьән һүҙе ҡодсиәт, ти бит пәйғәмбәребеҙ. Ислам ул тәғлимәт булараҡ, ҡәләм шәрифтән күпкә киң. Ул дин вә мәғишәт хаҡында фәлсәфә лә. Күп һорауҙарға яуап бирер йыһани фәлсәфә. Юҡҡа мыни Алман иленең философы Гегель мосолман диалектикаһына иҡтидад иткән. Мосолман фәлсәфәһе донъя ҡаршында Ғазалиҙары, Бируниҙары, Фарабиҙары менән ғали.

---

*мәҡүләтләр вәсиәте* — Фән ассоциацияһы.

*нәҡилис вә шәрех* — бәхәс һәм аңлатма; *тәнзимәт* — реформалар дәүере; *әсәс* — нигеҙ; *ҡодсиәт* — изге, тейелгеһеҙ; *иҡтидад* — өйрәнгән, иҫәпкә алған.

Аурупа Азиянан, ислам ғәләменән күпте алған. Әлжәбриә, һимаз ғилме ғәрәп зәмине. Йәнә иң боронғоһо, һинд-рум донъяһы. Аурупаға араҙашлыҡ ҡылыусы ла Азия. Әристу, Әфләтүн, Фәлис фәлсәфәләре әүүәл ғәрәп шәрхе арҡылы Аурупаға үтер. Абуғалисиналар, Авириустар үҙ ғилемдәре илә аурупалыларҙы әсир итмеш.

— Һүҙегеҙ хаҡ, ғилме хикмәт әүәл Юнандан да сыҡмыш. Дәхи был юнанлылар әһле шиғыр вә вәсахәт, ғөлүм ғаҡлиә вә маҡтыҡиә, фөнүн тәбиғиә вә әл-һәййә вә мәғариф риязияның әнүәгенә мәғхәз һәр хикмәт әрбаб фазалл вә вәләғәт бер ҡауам ҡәçир булып, мәғрифәт майҙанында һөнәрҙәр күрһәттеләр.

— Әммә ләкин һуңғы дәүерҙәрҙә ислам ғәләме Аурупанан күпкә артта ҡалмыш. Уның үҙ ғөҙөр-сәбәптәре бар. Әммә олуғ ғәләм ғәфләттән уяныр ки. Имде шәреҡ, ислам ғәләменә Аурупанан өйрәнмәк лазым. Шунһыҙ тәрәҡҡиәт юҡ. Аурупаның сәнәғәтен усвоить хәжәт. Мосолмандар олуғ әһле фән вә мөһәндистәргә мохтаж.

— Әл-хаҡ, ғилем, һөнәр — донъя тотҡаһы. Заманса мәғариф, мәғрифәт кәрәктер.

— Ислам фәнгә хөҡабил түгел. Ҡәләм шәрифтә лә инҡар иткән кәлимә юҡ. Шуға ла бит француз Эрнест Ренандың мәҡүләтләр вәсиәтендә исламды яманлап яҙыуына заманында нәкилис вә шәреҡ менән сығырға тура килде фәҡирегеҙгә.

— Шәреҡте, ислам ғәләмен өйрәнеү пайтәхеттә ни хәлдәрәк, ахун хәҙрәт?

— Минең ғоманымса, ярайһы уҡ яҡшы. Петербург дәрелфенүнендә махсус шәрҡиәт бүлеме бар. Шәреҡ телдәрен яҡшы белгән И. Н. Березин, Л. З. Будагов ғөләмәләре дәрес бирә. Академик Радлов Василий Васильевич төрки ғилеме, мосолман мәҙәниәтенә бағлы күп эштәр башҡара. Хөсәйен Фәйезханов хәҙрәт дәрелфенүндә уҡыта ине. Ғүмере ҡыçҡа булды, был донъянан үтә иртә китеп барҙы. Ҡумыҡ Мөхәммәт Османов мырҙа бик ғилемле әҙәм. Тик сәләмәтлеге арҡаһында иртәрәк отставкаға сыҡты.

---

*әл-жәбриә* — алгебра; *һимаз ғилме* — химия; *әһле шиғыр вә вәсахәт, ғөлүм ғаҡлиә вә маҡтыкиә, фөнүн тәбиғиә вә әл-һәййә вә мәғариф риязияның әнүәгенә мәғхәз һәр хикмәт әрбаб фазалл вә вәләғәт бер ҡауам ҡәçир* — шағирҙарҙың һәм ораторҙарҙың, рухи байлыҡтарҙы өйрәнеү һәм логика ғилемдәренең, тәбиғәт һәм мөхит хаҡындағы фәндәрҙең, математиканың төрлө теоретик тармаҡтарының барлыҡҡа килеүенә юл башлаусы юғары сифатлы һәм камил телле булған күп һанлы бер халыҡ; *мөһәндис* — инженер; *әлхаҡ* — дөрөç; *кәлимә* — һүҙ; *хөкабия* — ҡаршы; *дәрелфенүн* — университет.

— Эйе, бик мәшһүр ғалим-ғөләмә заттары. Ҡүбеһенең китаптары менән танышмын. Шуныһы йәл, ундай әҙәмдәр менән күрешеп мөғәмәләлә булырға насип булманы.

— Яйы сыҡһа йә Ҡырымдан ҡайтышлай үҙегеҙҙе академик Радлов Василий Васильевич һәм Будагов менән таныштырыу мәслихәт булыр ине.

— Иншалла, хоҙаның рәхмәте төшөп, шулай булырға яҙһын!

Азиатский департаментта эш буйынса Ғатаулла Баязитов менән Мөхәммәтсәлим тағы бер нисә тапҡыр осрашып, дин вә мәғишәт, ғилем вә фәлсәфә хаҡында байтаҡ әңгәмәләшкәндәре булды, ахун хәҙрәт ҡунағының ҡылын тартып үҙенсә имтихан төҫлө соалдар ҙа биргеләне. Бик маҡтап алды.

Ауылға ағаһына ебәргән хатында йәнә шундай юлдар бар:

«Бер аҙ эштәрҙе Баязитов ахун тәржемә ҡылған икән. Үҙе ғалим йәнә русса грамота уҡымаһа ла лөғәтенә бик маһир. Министерствола переводчик луазмын да ҡылалыр. Беҙҙе имтихан ҡылып һөйөндөргән була».

Петербургта Ғатаулла ахун менән аралашыу, әңгәмәләшеүҙәр Мөхәммәтсәлимгә бик хуш килгән буғай, уға «Дигер бежнәп ахунд Ғатаулла Баязитов» тигән мәдехен бағышлай.

Мосафирдыр дилә һүнгән сыраҡҡа,
Ғата булды миңә бер яр фираҡта,
Ғатаулла ахунд хәҙрәт һәр аҙна
Ғәрип күңелем булып торҙоң йыраҡта.
Йығылған былбылың һайраусы булды,
Түгелгән бостандың фирдәүсе булды.
Мәғәнәүи мәғрифәт кем һинән алды,
Шараптың нуш идүбән һыуға ҡанды.
Күргәндәр мәжлесеңде ғалим булһын,
Һинең кеүек дәх ул ғәләм булһын.
Һинең зерәң илә пушидә булһын,
Егетлектә залаләтдин арынһын.
Камал истғидат илә хөршид булһын...
Черадъяндары напрсәйед булһын...
Өмөтөндәр аҫәр һәр бер яранға
Ишетеп, уҡып ғәмәл ҡылғанға
Һүҙеңдәр барсага дәүләт, сәғәдәт,
Һиңә, уладыңа улһын сәләмәт.

---

*луазмы* — вазифаһы.

*фирдәүес* — йәннәт баҡсаһы; *нуш* — эсемлек, ләззәт; *зерә* — өсөн; *пушидә* — бошонор; *залаләт* — аҙғынлыҡ; *истғидат* — күтәрелеү; *хөршид* — ҡояш; *сәғәдәт* — бәхет.

Был мәҙех мәҙех эйәһен ғалим булараҡ юғары баһалауын да, күп яғының үҙ рухына яҡын икәнлеген дә әйтеп тора.

Ғатаулла ахун менән 1872 йылда Аҡмулла ла осрашып, уртаҡ тел тапҡайны.

4

Ситтә, ни генә тимә, әҙәм күңеле барыбер китек.

Мөхәммәтсәлим үҙен ситтә, фираҡта һүнгән сыраҡҡа оҡшата ана хатта. Күрәһең, бигерәген ғаиләле кешегә сит-ят ерҙәрҙә һис еңелдән түгелдер. Әнис шунда икән, күңеле өйҙә, бар хәстәре, ғәме ғаиләлә.

Мөхәммәтсәлим ҡыш уртаһында оҙаҡҡа оҙон сәфәргә сыҡҡансы ғаиләһен Өфөнән ауылға ҡайтарып ҡуйырға өлгөрмәне. Уларға хәҙер ҡалала йәшәүе ауырға төшә. Бына ошо ғаиләһен күсереү, бүтән донъя мәшәҡәттәрен бүлешергә үтенеп старшина Сөләймән энеһенә мөрәжәғәт итергә мәжбүр. «Алла бойорһа, Баязитҡа 50 һум ебәрермен, — ти ул хатында. — Иллә тәләф итмәй бик кәрәк урынға ғына тотонһондар. Йәғни өйҙө эшләтергә. Әҙерәк утын алып ҡуйырға кәрәк. Ике йәки өс ер ураҡҡа. Дүрт йәки биш дисәтинә бесән сабырға. Йәнә ике атлыҡ һабан тырмаһы һатып алһындар. Һәм аҡсаны юлыҡҡас та «юлыҡтыҡ» тип хат яҙһын һәм ни урынға ни ҡәҙәр тотонған ай һайын счет ебәрһен. Счет ебәрмәһәләр, аҡса ебәрмәмен. Сөнки мин аҡсаны гөрбәтемдә ауырлыҡ илән табамын».

Бар үтенесе шул старшина энеһенә: «Йәнә үтенәмен: зинһар, беҙ насарҙың балаларына күҙ була күрегеҙ. Аллаға тапшырып, өйҙө төҙәтеп бөтөрһәгеҙ, ҡыш өҫтөндә күсереп килтерә күрегеҙ. Ярҙам итеп, үҙең һәм күршеләр берлә өмә әйтеп булһа ла әйберҙәрен килтереп, бәғрендә үҙҙәре килһендәр. Яҙға ҡалһа, һабан етә, йәй көнө мәшәҡәтлерәк була. Бер урынлашҡансы, зинһар, ярҙамыңдан ташламағыҙ. Уларҙың һис тә кәсеп итеп ашарға табырға хәлдәре юҡ. Иҫәнлек булғанда, алла ҡушһа, ай һайын аҙраҡ (аҡса) ебәрербеҙ. Аҡса барып етеүенсә кешеләрҙән кәрәк нәмәләрҙе табып бирешегеҙ».

Шулай ғаилә хәстәре, ауылдағы хужалығы борсой ғаилә башлығын.

Бында, пайтәхеттә ваҡеф эштәренә сумған Мөхәммәтсәлим ял көндәрен, буш сәғәттәрен ҡалала музейҙар ҡарап, сайран ҡылып ҡына йөрөй алмай, әлбиттә. Өҫтәүенә, Петербургтың дымлы, ямғыр ҡатыш рашҡылы һауа шарт-

---

*гөрбәт* — ситтә.

тарында һалҡын тейҙереп ҡаты сирләп тә ала. «Юлда уҡ һыуыҡ алып бик сирләнем,— ти ул бер хатында.— Һис тә хәлемде һораған кеше юҡ. Көн ямғыр һәм рашҡы яуып, һауалар бик яман. Тәбиғәтте харап итте. Ликерҙарға барҙым. Быға бик ҡиммәт дауалар кәрәк, тип аптыраталар. Илайым да ҡайтамын. Бер ҙә аш үтмәй. Бер дурағы әйтә: «Ни уйлаһаң, эт дарыуы бирербеҙ»,— ти. «Бер нәмә лә уйламайым»,— тип ҡайтып киттем».

Ҡырымға китеү мәсьәләһе шаҡтай оҙаҡҡа һуҙылды. Һәр тине, һумы иҫәпле мосафирға, ҙур ҡалала йәшәүе осһоҙ түгел. Фатир хаҡы ғына ла көнөнә бер һум көмөш. Ашау-эсеүе ҡиммәт. Тегеһе, быныһы сығып тора: сығым күп.

Бына, ниһәйәт, прогон аҡсаһын бер ҡәҙәр бирҙеләр. Ҡырымға китеү датаһы асыҡланды. Хисап биргәндәй, тыуған ауылына шулай яҙа Мөхәммәтсәлим: «Бөгөн, әлхәмделилла, бер нисә биян улынды: ошбу көн, 23 февралдә, прогон аҡсаһын йән әҙерәк бирҙеләр, йәғни ике йөҙ һум. Был аҡсанан 80 һум форменный кейемгә бөттө. 30 һум — фатирға. Юлға Ҡырымға, Аҡ Мәсеткә еткәнсе 40 һум кәрәк — тимер юл менән багажына. Бына ҡалған 50 һумын йортҡа ебәрәмен. Үҙемә Өфөнән алып киткән аҡсанан 30 һумым бар. Сөнки жалунъя алғаным юҡ».

Дүшәмбе көн, 23 февралдә, һикһән һумға төшөрөп алған форменный кейемен — яңы мундирын кейеп, начальнигы Ғәбиҙулла солтан Сыңғыҙханов генерал-майор менән министерствоға, ҙур түрәнең үҙенә, граф Спиранскийға, унан кенәз Ҡантакузға барып мәғлүм булдылар. Аудиенция тейешле кимәлдә үтте шикелле.

Граф Спиранский ваҡеф эштәренең сыуалсыҡлығын, яуаплылығын аңлатырға тырышты. Эшкә мәсьүлиәтле ҡарарға үтенде. Мөхәммәтсәлим переводчиктың әҙерлегенә, рус лөғәтенә, сәйәси мәғлүмәтенә, шәреҡ мәсьәләләренә йәнә Ҡырымдың үҙенә, тарихына, халҡына ҡағылышлы байтаҡ һорауҙар бирҙе. Яуаптарынан ҡәнәғәт ҡалды һымаҡ. Кенәз Ҡантакуздың бүлмәһендә лә күберәк шул ваҡефҡа бәйле төрлө мәсьәләләр, айырым деталдәре хаҡында төпсөрлө һүҙ барҙы.

«Беҙҙе бик яҡшы принимать иттеләр, күп һөйләшеп, һорашып үттеләр. Ҡат-ҡат ҡул бирешеп, янына ултыртып илтифат иткән булдылар»,— тип теркәп ҡуя бер яҙмаһында был аудиенция хаҡында М. Өмөтбаев.

Март башында Мөхәммәтсәлим үҙе генә юлға сығырға тейеш. Түрәһе Ғәбиҙулла солтан Петербургта эшем бар, тип ике аҙнаға һуңыраҡ сығырға булды. Тимәк, Ҡырымға барып урынлашыу, эш башлау Мөхәммәтсәлимдең үҙ ҡа-

рамағына ҡала инде. Түрәһе бар ваҡеф хәстәрен дә уға ауҙарҙы. Хәйерлегә булһын.

Мөхәммәтсәлим Өфөнән китерендә, үҙе Ҡырымға килеп урынлашҡас, ғаиләһен үҙ янына алырға һүҙ беркеткәйне. Ләкин Петербургта оҙаҡ ҡына йәшәү, бүтән юл мәшәҡәттәре, Ҡырымдағы ҡимммәтселек уны был уйынан кире ҡайтарырға дүндерҙе. Энеһенә яҙған хатында ул ниәтен былай аңлата: «Бында Ҡырымға килеүҙәре булмаç, ахырыһы. Бик күп аҡса кәрәк. Алып барырға йәнә бер кеше кәрәк. Йыраҡ. Уларҙы илтеп ҡуярға кәм тигәндә лә йөҙ тәңкә кәрәк».

Петербургта ике айға яҡын йәшәү осорона Мөхәммәтсәлим шиғыр менән үҙенсәрәк йомғаҡ яһай:

Хода әмере илән бәндә,
Ҡуйып Йомран илен анда,
Килеп мәшһүр Петербурға
Ҡарар иттек ике ай унда.
Вар ирмеш унда һәр инсан,
Күп имеш дәхи мосолман,
Ғәрәйеп вә ғәжәйепте
Тамаша иттек, әй ян.
Күреп солтан Сыңғыҙханды,
Йәнә бәғзе хәкимдәрҙе,
Ҡабул булдыҡ миһырбаны
Ҡалырға унда баҙҙарҙан.
Булып әмер министерҙан,
Сыңғыҙхан генерал илән
Ҡырым йортҡа тиҙләндек,
Етештек сөнки яҙҙарҙан.

Петербурҙа сыға торған Россия үҙәк газетаһы «Новое время» 1887 йылдың мартында ваҡеф комиссияһының Ҡырымға йүнәлеүен хәбәр итте.

*Алтынсы бүлек*

# ҠЫРЫМ

*Килеп Симферополгә тиҙ,*
*Йәғни Аҡмәсеткә тибеҙ,*
*Ваҡефтар комиссияһында беҙ*
*Эш башланыҡ әмер менән.*

*М. Өмөтбаев*

## 1

1887 йылдың марты. Ҡырымда инде күптән яҙ. Төньяҡтан, дымлы, һалҡын таш Петербургтан килеп төшкән кешегә Ҡырым һауаһы бөтөнләй икенсе климат, яңы донъя. Тәбиғәт ярым йәм-йәшел. Кипарис, пальма, хөрмә, сәрбей ағастары шау йәшел төҫтә. Ҡаштан, чинар, артыш, сылғый тополдәре бөрөгә тулышҡан. Һәр ерҙә сафлыҡ, бәхтәлек. Йылы, май кеүек һауаһы күкрәктәрҙе киңәйтеп ебәргәндәй.

Мөхәммәтсәлим Симферополь ҡалаһының үҙәгендә алдан тәғәйен бер күркәм йортона килеп урынлашты. Оҙон юлдан бер аҙ күҙ-баш алды ла, яңы ерҙә эшкә ныҡлап тотоноп киткәнсе, ике көнгә диңгеҙ буйына, Севастополгә барып ҡайтты.

Урманлы-убалы үҙәк Россия ерҙәрен, икһеҙ-сикһеҙ көньяҡ яландарын, Серек диңгеҙ аша Перекоп валдарын арҡыры үтеп, Ҡырым далаларын, тау йәйләләрен киҫеп, Ҡара диңгеҙгә килеп сығыу, төшлөк ярының хуш-еҫле гөлдәр, матур баҡтар иленә юлығыу Мөхәммәтсәлим мосафирҙың елкендергес уйҙарын, кисерештәрен ҡуҙғатып ебәрҙе.

Тәбиғәте шикелле төрлө, ҡапма-ҡаршылыҡлы, контраслы ине шул Ҡырымдың тарихы һәм эра-быуаттар кискән ҡәүем-халайыҡтары ла. Уның беҙҙең эраға са Кемберия дәүерҙәре, грек-генуя колониялары сағы, ҡыпсаҡ ҡәүемдәре, Ҡырым ханлыҡтары замандары. Таныҡлы Таврия ере. Төрөк вассалиәте миҙгелдәре, Россия хакимиәтенә күскән осорҙары. Өҙлөкһөҙ яу-сапҡындар. Төрөк-рус һуғыштары.

Ҡырым далаларын уҙғанда мосолман мосафирға, вагон тәгәрмәстәре тыҡылдауы яйына, ҡыпсаҡ-ҡоман тоҡомдаштарының меңәрләгән ат тояҡтары тупылдағаны ишетелгән-

дәй тойолдо. Рус ғәскәре сафында башҡорт һыбайлыларының, Рәсәй шәүкәте тип, яу сапҡан Ҡырым походтары күҙ алдына килде. Әле ҡасан ғына, 1853—1855 йылдарҙағы Ҡырым һуғышында ҡатнашыр башҡорт полктарын Ырымбурҙан яуға оҙатыу тамашаларын хәтергә төшөрҙө. Севастополь оборонаһы һыҙыҡтарын, бастиондарын ҡарап йөрөнө, ҡалала шул яу ҡаһармандарына һалынған суйын һәйкәлдәрҙе тамаша ҡылды. Әүәлерәк Ҡырымға килгән, Төркиәгә үткән башҡорт илселәренең яҙмыштарын, хәж сәфәре ыҙаларын татыған яҡташтарын иҫләне. Ҡайҙарҙа ғына булмаған да ҡайҙарҙа ғына ятып ҡалмаған башҡорт баштары.

Һиммәтлеһе имәнлек, илселек миссияһы. Ҡасандыр уҡ һөңгө, штык остарында килгән хәкимиәтте үҙ-ара татыулыҡ, уртаҡ ватан — парвәрлек, инсаниәтлек алыштырырға тейештер.

Ығы-зығылы фани донъяла ил-ер, ғәнимәт, мал-мөлкәт тип яу-тартыштар менән бергә ана шул юғары инсаниәтлек, изгелек, шәфҡәтлелек, йәмғиәт йәнлелек кеүек игелекле төшөнсәләр, шуның һиммәтле заттары, тарихи-шәхестәре лә бар бит әле. — Инабатлы һәм мәғрифәтле Мөхәммәтсәлимдең уйҙарын, ваҡеф комиссияһы ағзаһын, шундай изге төшөнсәләр, йәмғәтселек фекерҙәре күберәк биләгәндер, моғайын.

Донъя малы — дуңғыҙ ҡаны. Әҙәмдәрҙе аҙҙыра ла, хатта юлдан яҙҙыра ул. Ҡөсөндө нигә сарыф итәһең дә донъя малын нимәгә тип йыяһың бит. Ишәйтеп ҡәҙерен күрһәң — бер хәл. Табып та әрәм-шәрәм итһәң, юҡҡа тәләф ҡылһаң ни мәғәнә. Донъяныҡы донъялыҡта ҡалыр. Булғас-булғас, донъяла яҡшы исем-атың, бай икәнһең — мал-мөлкәтең йәмғиәт файҙаһына ҡалһын. Йәмғиәте хәйриәләр, һәйәттәр аша мохтаждар игелеген күрер, капиталың илгә хеҙмәт итер.

Миһырбанлы йәндәр тарафынан васыят ителеп мосолмандарҙың ваҡеф хазиналары шулай тупланған, йәмғәт мәнфәғәтенә фарыз ителгән.

Ҡырымдың ваҡеф ҡаҙнаһы шаҡтай мул. Ул нисәмә тиҫтә, йөҙ йылдар буйы хәлле кешеләрҙең, байҙарҙың, бәк һәм мырҙаларҙың васыятнамәһе менән йорт-ҡаралты, зиннәтле һарайҙар, жәмиғ-мәсеттәр, ишле мал-мөлкәт, аҡса-капитал, ер-һыу биләмдәре, мәҙәниәт усаҡтары, архитектура, сәнғәт йәдкәрҙәре рәүешендә ваҡеф һәйәте ҡарамағына, йәмғиәте хәйриә сәрмиәләренә күсә һәм файҙала-

---

*ватанпарвәрлек* — патриотизм; *инсаниәтлек* — гуманизм.

*сәрмиә* — өлөш, фонд.

ныла килгән. Уның менән йәмғиәттең һайлап ҡуйылмыш абруйлы хәдимдәре, дин әһелдәре эш иткән. Әммә ләкин һайланмыштарҙан да ҡулдары үҙҙәренә кәкреләре пәйҙә булғылаған. Береһе үҙ йә әшнәләре мәнфәғәтен ҡайғыртҡан, бәғзеһе дөйөм хазинаға ҡул сумырған, ҙур ҡуш, ерһыу, хатта зиннәтле һарайҙар эләктергән. Хәләл малға хәрәм ингән.

Ҡырымдың мосолман вәҡеф хазинаһына ана шундай бысраҡ ҡулдар тығыла башлағас, быға ҡаршы ялыу-шикәйәттәр бирелгәс, илдең Эске эштәр министерствоһы тарафынан авторитетлы вәҡеф комиссияһы төҙөлә лә инде ентекле тәфтиш өсөн. Уға иң абруйлы, ышаныслы әҙәмдәр, ил ағалары тәғәйенләнә. Әйткәнебеҙсә, Мөхәммәтсәлим шуның тәғәйенләнмеш вәкиле.

Был вәҡеф эше шуның менән ауыр һәм ҡатмарлы: унда оялап алған бәғзе бер намыҫһыҙ әҙәмдәр бөтә фондты, документтарҙы юрый бутап бөткәндәр, күбеһен ялған ҡағыҙҙар менән алыштырғандар, кәрәклеһен юҡ иткәндәр, айырым мал-мөлкәт ҡаҙнаһы, аҡса-капитал еп осон йәшерергә, сыбалтырға тырышҡандар. Бындай енәйәт-гонаһтары шәриғәт хөкөмөнә генә һыймағанға гражданлыҡ суды ҡарамағына тапшырылырға тейеш. Шуға ла «Новое время» газетаһы тураһын әйтеп атап яҙа: «Вакуфной комиссии возложена трудная обязанность урегулирования прав духовенства на вакуфы в Крыму, т. е. на недвижимую собственность, принадлежащую духовенству магометанского вероисповедования, большая часть которой захвачена частными владельцами. Кроме этого на комиссию возложена также выработка проекта устройства безземельных крестьян в Крыму».

Ә Ҡырымдың төрки телендә сыҡҡан «Тәржеман» газетаһы вәҡеф комиссияһына ҙур өмөттәр бағлап, шуларҙы ла өҫтәй: «әһленең өмөд вә хәсән низамларыны таярларлар. Вәҡеф һәйәтенең эшләре ғәйрәтлечә вә тизчә күчеп, мәсьәлә хәл улынса. Ҡырым әһелечәнә бөйөк файдалар улачағы бәдһидер».

Комиссияның резеденцияһы, вәҡефтың фонды һәм документтары Симферополдә инс. Мөхәммәтсәлимдең башта үҙенә, унан Ғәбиҙулла солтан Сынғыҙханов килгәс, ҡай саҡ берлектә вәҡефтың бөтә материалдарын барлап сығырға, ялыу булған, хилаф яҡтары табылған фондтарҙы ентекләп тәфтишләргә, ғәрәпсә, фарсыса, ҡырым татарынса яҙылған васыятнамәләрҙе, ғарызнамәләрҙе, шикәйәттәр-

---

*хәсән низамлары* — яҡшы тәртип, закондар; *таярларлар* — таянырҙар; *бәдһи* — асыҡ.

ҙе вә ғәйре яҙыуҙарҙы рус теленә тәржемә итергә тура килде. Айырым документтарҙың дөрөҫлөгөн тикшереүҙәр, аныҡлауҙар, өҫтәмә белешмәләр әллә ни хәтле ваҡытты алды. Урындағы административ органдарға, юридик консультацияларға, хатта прокуратураларға мөрәжәғәт ителәргә кәрәк булды. Биш-алты эш бик ныҡ өйрәнелеп, хәл итер өсөн суд органдарына тапшырылды. Генерал-майор, Ғәбиҙулла солтан Сыңғыҙханов, хәрбиҙәрсәрәк ҡыланып, комиссия компетенцияһынан сығып китер административ сараларға ла тотонғоланы, ғәйепләләрҙе, ваҡеф мөлкәтенә хужа булып алғандарҙы ҡаты ҡыҫымсаланы.

Ваҡеф комиссияһы былай бик абруйлы. Күбеһе ҙур түрәләр. Уның ағзалары: Сит ил эштәр министерствоһынан С. С. Велецкий, Одесса генерал-губернаторствоһынан Н. И. Газнов, Таврия губернаторствоһынан Гаяховский, Таврия мосолман руханиҙарынан Сәйет Мәләд һәм Мәмәд мирзалар. Секретары М. Өмөтбаев.

Эштең ҙур өлөшө Өмөтбаевҡа төшә. Ул документтарҙы тәфтишләү, фондты асыҡлау менән бергә ваҡеф хаҡындағы инструкцияларҙы, төрлө документтарҙы, иғландарҙы, мөрәжәғәттәрҙе руссанан Ҡырым татар теленә тәржемә итеү менән дә мәшғүл. Уларҙы «Тәржеман» газетаһы типографияһында баҫтырып та ала.

Ваҡеф комиссияһы 1887 йылдың 15 июненән 1 июленә тиклем ваҡеф фондының ерҙәрен арендаға биреү тураһында иғлан итә. Торг рәүешендә. Бындай ерҙәр ярайһы ғына: Феодосия өйәҙе Ҡибп-Шәғүл ауылынан — 25 дисәтинә, Ҡуранғы ауылынан — 50 дисәтинә, Перекоп өйәҙе Сафа ауылынан — 56 дисәтинә, Бигәндән — 396 дисәтинә, Евпатория өйәҙе Аҡташ ауылынан — 300 дисәтинә.

Мөхәммәтсәлимдең хәҙер эш-шөғөлө Ҡырым мирзалары, бәктәре, ҡырымлылар араһында. Ара-тирә өйәҙгә сығып әйләнә.

Өс айға бер министерствоға хисап биреп торҙолар. Ваҡеф комиссияһының эш барышы хаҡында «Тәржеман» газетаһында әленән-әле хәбәрҙәр басылды. Мәшәҡәтле эш шулай айҙарға, йылдарға тартылды.

Мөхәммәтсәлимдең тыуған яғы менән бағланышы туғандары, ғаиләһе, Ҡамалетдин бажаһы, Сәлимгәрәй мөфти хәҙрәт менән хатлашыуы аша булһа, донъя, ил хаҡындағы хәбәрҙарлығы бер-ике үҙәк газета һәм «Тәржеман» газетаһы буйынса инс. Ҡазан, Өфө вәлиәттәрендәге мәғариф эштәре хаҡында ҡыҙыҡлы ғына хәбәрҙәр уҡыны. Яңы танышы һәм фекерҙәше Ғатаулла Баязитов ахундың пайтәхеттә таш мәсет һалдырыу өсөн 10 мең һум һибә йыйғанлығы тураһында белде. Атаҡлы Ҡавказлы Шамил имам-

дың улы Ҡазы-Мөхәммәт хажиҙың Мәҙинәлә вафаты — шәһитлеге ошо уҡ газета аша мәғлүм булды. Мәктәптәр, мәҙрәсәләр асылыу тураһында Урта Азия, Ҡаҙағстан яҡтарынан ҡыуаныслы мәғлүмәттәр сыҡты...

## 2

Батырға ла ял кәрәк. Мосафирҙың ялы — сәйәхәт.

Ҡырым һанлы Ҡырымда инде ике ай йәшәп нисек уның йәмле ерҙәрен, Аҡъярын, Баҡсаһарайын, Ялтаһын күрмәй түҙергә мөмкин! Иленә ҡайтҡас, һораһалар, нәмә һөйләр һуң? Шул ваҡеф мәшәҡәттәрен генәме ни?

Күңел ҡошо, ғөрбәттә, ситлектә ятҡандай, гел һауаға, киңлектәргә атлыға бит, ирекһәй.

Шундай ирек ике көнгә 25 апрелдә генә тейҙе. Юлы Аҡъяр, йәғни Севастополь аша.

Табып форсат әмирҙәрҙән,
Йөрөп бик күп гүзәл ерҙәрҙән,
Етештек ҡала Аҡъярға —
Севастополь тигәндәрҙән.

Севастополде Мөхәммәтсәлим йәнә бер көн тигеләй ҡыҙырып сыҡты. Күңел мөһөрө булып был аҡ ярлы ҡала хаҡында матур хәтирәләре ҡалды. Тик шуныһы йәл, был сәфәрен ул, нишләптер, юлъяҙмаларына теркәмәгән, бары әлеге шиғырында һәм ауылға яҙған хаттарында әйтеп кенә уҙған.

Үҙен ситлектәге былбылдай тойған мосафир күңеле гөлбаҡсалар еренә — Баҡсаһарайға ныҡыраҡ тартылған, күрәһең.

Аҡъярҙан — Севастополдән әйләнеп, икенсе көнө 26 апрелдә Баҡсаһарай ҡалаһына йүнәлә ул. Әүәле Ҡырым хандары резеденцияһы Баҡсаһарай тамам хайран итә Мөхәммәтсәлимде.

Әле лә ул йәшел ҡала фани донъяла йәннәт баҡсаларын хәтерләтеп торғандай. Ул зиннәтле хан һарайҙары, субтропиктик мәңге йәшел ағаслы, хуш-еҫ сәскәле баҡсалары. Ул шылтырап ағып ятыр шишмәләре, һайрап торор йөҙ төрлө ҡоштары. Ул салауат күперҙәрен уйнатып ағылып торған фонтандар. Ул меҫ биҙәкле таш мәсеттәре, ул хан мәҡбәрәләре баҡсаһы. Ул бассейндары... Мөхәммәтсәлим ике- һөҙәк тау араһында, Серек һыу йылғаһы үҙәнендә, гөл-баҡсаларға күмелеп ятҡан Баҡсаһарайға атаҡлы Селтәрле күпер аша үтеп киткән булыр. Семәрләп эшләнгән ҡурсаҡтай ҡупшы ағас йорттарына, мәҙрәсә би-

наларына, манаралы таш мәсеттәренә һоҡланып үткәндер. Үҙәктә иҫ китмәле хан һарайҙарын, йәнәшендәге иң оҙон манаралы мәсетен тамаша ҡылып таң ҡалғандыр. Мәсет ишегенә алтын бутал менән яҙылған ҡөрьән аяттары күҙенә салынғандыр. Уның 1540 йылда Сәлимгәрәй хан тарафынан һалынғанлығы тураһындағы яҙыуын да уҡымай ҡалмаҫ. Арыраҡ күренгән Йәшел Жәмиғ мәсетенә лә һоҡланмай булмаҫ. Быныһы Сәлимгәрәй хандың иң яратҡан һөйәркәһе Диләрәсбикә әсирәгә атап һалдыртҡан мәсет икән. Әсир итер әсирәләрҙең баһаһы хандарға ана ни торған. Ары йәриә һарайҙары. Евнух хөжрәләре...

1503 йылда Миңлегәрәй хан төҙөткән ғәжәйеп һарай. Ишек баштарына ташҡа ҡалҡытып яҙылған ғәрәпсә яҙыуҙар. Янында тағы шунса күркәм таш мәсет.

Ә баҡсалар эсендәге фонтан-шишмәләр һуң! Шуларҙың иң атаҡлылары дүрт-биш. Һәр береһенең үҙ исеме, үҙ даны. Береһе — селсибел исемлеһенең һыуы зәмзәм тәмдәре таты, икенсеһе — алтын тигәне мең төрлө нур уйнатмалы, өсөнсөһө — йылаҡ шишмә йәки күҙ йәше тигәне йәнә тылсымлы.

Хан мәҡбәрәләре баҡсаһы, гүйә, бер йәннәт босмағы. Тик мәрмәр һалҡынлығы, ҡәбер тынлығы килеп тороуы ғына әллә нисек.

Фараз итмәйек, Мөхәммәтсәлимдең үҙенең һаран ғына юлъяҙмаларына һүҙ бирәйек әле: «Баҡсаһарай ҡалаһында хандарҙың баҡса вә һарайҙары, фонтандары, йәғни шишмәләре вә жәмиғтары — ғәжәйеп ерҙәрҙер. Ихатаһында Сәлимгәрәй хандың ике манаралы бейек жәмиғы барҙыр. Уның янында мәҡбәрәләренең баҡсаһы... ике бейек төрбә барҙыр. Береһенең эсендә ун дүрт хан, икенсе төрбәлә ун хан табуттары бар. Йәнә башҡа ҡәбү эсендә ғәйре хан вә хансалар.

Хан һарайы хисарының тышында бер йүкәлек гүшәлә йыйнаҡ төрбә бар. Ҡәбүһенең башына «мәрхүмә вә мәғфүрә Диларасбикә рухына фатиха» тип яҙылмыштыр. Поляктың граф Патоцкий ҡыҙы Мария, ғанимәт малы менән әсир булып, бер хандың ҡатыны булмыш тип әйтәләр. Йәнә һарай эсендәге бер шишмәне «Марияның күҙ йәше» тип тәсмиә ҡылалар.

Ғәжәйептәренән тағы һарай аҫтындағы ҙур ғөрфәлә Ҡырымгәрәй ибн Дәүләтгәрәй, йәнә Ҡаблангәрәй ибн Сә-

---

*мәҡбәр* — зыярат; *жәмиғ* — мәсет, халыҡ йыйылыр йорт; *төрбә* — мавзолей; *ҡәбү* — көмбәҙ, япма; *хисар* — таш ҡойма; *гүшә* — мөйөш, сат; *мәғфүрә* — тыныс, ғәфү ителгән; *ғанимәт* — трофей; *тәсмә ҡылыш* — исем биреү, атау.

лимгәрәй шишмәләре бар. Суҡ алтын зиннәттәр менән яҙылмыштыр. Шул уҡ гөрфәгә ҡушып һарай эсендә яһалған мәсет сәләмәт Гәрәй ибн хажи Сәлимгәрәй 1155 сәнә, тип һижри илән яҙылмыштыр...».

«Диларасбикә», «Күҙ йәше фонтаны» тигәндән, шул хаҡта бер риүәйәтте бәйән итеп үтәйек әле:

Бер заман Ҡырымгәрәйҙәрҙән Сәлимгәрәйхан йәриәләренең хәрәм бүлмәләрен йөрөп сығып, мөрхәтһенмәй евнухына былай әйткән имеш: ҡара әле бынау һулыған сәскәне, хуш-еҫе юҡ бит. Һинҙә, ҡолом, ханыңды берәй ни менән әүрәтергә, шәберәк рәхәтлек татытырға ине. Әйтәләр, Кавказда кафыр ҡыҙҙарының ожмах хурҙайҙары бар, тип. Шуларҙың иң сибәрен, хөрмәләй тулышып бешкәнен табып килтерһәң һуң ханыңа.

Хандың әйткәне — бойорғаны. Евнух баш эйеп, юлға әҙерләнде, иң шәп егеттәрҙе, башкиҫәрҙәрҙе һайлап алды, ти.

Һыбайлы ир-егеттәр ике төркөм булып, ике тарафҡа таралмыш. Бер төркөмө шләхтәр тарафына, икенсеһе — гөржандарға.

Берме-икеме ай үтә, ике төркөм ике тарафтан ике-өс әсир йәриә табып ҡайтмыштар, ти. Иң гүзәлдәренең береһе — шләх кенәзе ҡыҙы, икенсеһе — гөржестан шахинәһе, ти.

Хан күреү менән шләх сибәренә ғашиҡ булмыш. Үҙ исеме Мария булған тиме шул, хан яратып Диларасбикә тип атамыш. Әсирә ҡыҙ ханды үҙенә шунса әсир иткән, ти, хан, илереп, быныҡ аяғына йығыла, биттәрен, боттарын үбә, ғашиҡлығынан шаша. Ашауын, хан хәстәрен онота.

Бер мәл хан, Дилара с сибәрҙең алтын-көмөшлө бүлмәһенә инеп, нескә билдәрен ҡосаҡлап былай ти: «Диларасым, бәғерем, һин ят кеше, кафыр заты мосолман әҙәмен, Ҡырым ханын бағындырҙың, хандың хушын алдың. Мин донъяла йөҙәрләгән йәриәләр күрҙем, бәғзеләрен ратҡандай иттем, ә һин, әсирә, мине үҙең әсир иттең. Бер кемгә баш эймәҫ хан һиңә башын эйә. Ә минең ғишҡыма һинең ғишҡың тиң түгел. Минсә шашып һөйә алмағас, һиңә тулы ирек. Көсләп һөйҙөрөүҙә фәтүә юҡ, тәм юҡ. Йән тартмағас, тән тартмаҫ.

Мине тилмертеүең вә илертеүең етәр. Һин ирекле. Дүрт яғың ҡибла. Иленә ҡайт, һөйгәненде тап. Ҙурлап оҙатырҙар үзенде. Хәйерле юл, сибәр йән.

Шулай тип хан шләх ҡыҙын ҡаты ҡосаҡлап һөйә лә ишеккә китә.

---

*шләх* — поляк; *гөржән* — грузин.

Шул мәл Диларас һушына килә лә ханына ташлана, ҡосағына һарыла, йәнен-тәнен теләгәнсә фиҙа ҡылырға әҙер.

Бына шулай хан менән Дилярастың ысын ғишҡы тоҡана. Улар бер-береһенән бер төн, бер сәғәт айырылмаҫ бер йәнгә әйләнәләр. Диларас мосолман булырға, ханға никахлашырға йыйына. Тик көтмәгәндә ҡапыл ауырып та китә, йән тәслим дә булып ҡуя.

Диларасбикә хөрмәтенә Сәлимгәрәй хан әлеге ғәжәйеп йәшел мәсетте һалдырта. Һарай алдына фонтан шишмәһе ҡорҙорта. Ул фонтан ғишыҡ һағышын, мәңге айырылышыу йәшен ҡойор һынға, күҙ йәше тамсыларына әйләнә.

Бына ошондай ул илаҡ шишмә йәки күҙ йәше фонтанының риүәйәте.

Был күҙ йәше фонтаны риүәйәте аҙаҡ күргән-ишеткән әҙәмде үҙе шунса әсир итә, бәндәнең күҙҙәре дымланмай ҡалмай, шағирҙар шиғыр сығармай түҙмәй. Пушкиндың атаҡлы «Баҡсаһарай фонтаны» поэмаһы ла шулай тыуған. Өмөтбаев был фонтанды тамаша ҡылгас, Пушкин поэмаһын татарсаға тәржемә итмәй тынғы тапмаған. Баҡсаһарайҙан йөрөп ҡайтҡас, «Ҡырымға сәфәр» шиғырын яҙған.

Аҙаҡ А. С. Пушкиндың йөҙ йыллыҡ байрамы көндәрендә М. Өмөтбаев Диларасбикәгә тағы бер әйләнеп ҡайтҡан — аңлатма мәҡәлә яҙған: «А. С. Пушкин әҫәрҙәре араһында татар теленә хан Дәүләтгәрәй тарафынан Диларасбикә тип нарыҡланған Мария менән булған хәл-ваҡиғалар һүрәтләнгән «Баҡсаһарай фонтаны» тәржемә ителгән. В. Х. Ҡондараки әфәнде «Ҡырымдың күп яҡлы тасуирламаһы» («Универсальное описание Крыма») тигән хеҙмәтендәге XV бүлектең 187-се битендәге иҫкәрмәһендә Марияны нилектән поляктарҙа ла, татарҙарҙа ла булмаған Дилара исеме менән атап йөрөтөүҙәрен белә алмауын хәбәр итә. Шуға ла мин был мәсьәләгә аныҡлыҡ индереп үтеүҙе үҙемдең бурысым һанайым.

«Дилара» һүҙенең һүҙмә-һүҙ тәржемәһе «күңелде биләүсе». Фарсынан килгән исемдер. Ул «дилбәр — күңелде үҙенә тартыусы; дилбора — күңелде баҫып алыусы, йыһанара йәки ғәләм-ара — донъяны биҙәп тороусы» тигән турапан-тура «йөрәк, ара-арастан» ҡылымынан хасил булған «зиннәт, биҙәк» тигән һүҙ. Уларға «арастя — биҙәүсе» сифаты йәки исем ҡылымы ҡушылыуҙан «дилараст», ә халыҡ телендә «диларас» һүҙбәйләнеше барлыҡҡа килгән. Ә «бикә» һүҙе «хан (батша, бай) ҡатыны» тигәнде аңлата.

Хәҙер, Диларасбикә исеменең ҡайҙан алынғанлығын төшөндөрөү маҡсатынан сығып, уның тарихи сығышы ха-

ҡында әйтеп үтәйек. Урта быуаттарҙа ошо исемдәге иҫ киткес бер һылыуҙың йәшәгәнлеге мәғлүм. Даны тирә-яҡҡа таралғанлыҡтан, уның исеме күп халыҡтар өсөн уртаҡ һүҙ-атамаға әүерелеп, «Баҡсаһарай фонтаны»ндағы Мария кеүек матур ҡатын-ҡыҙҙарҙың күбеһенә тора-бара Дилара тип исем ҡуша йәки, уларҙың ысын исемдәрен телгә алмайынса, шул һүҙ менән мөрәжәғәт итә башлайҙар. Ә Дилара һылыуҙың тарихы, моғайын, Урта Азияла йәшәүсе төрки ҡәбиләләренең Көнсығыш Рим империяһына күсеп барған юлында булғандар. Ни өсөн тигәндә, «Мөхәммәҙиә» тарихының бер урынында шағир былай ти: «Әгәр ҙә мин римляндарға китеп барған юлымда Диларапы күрергә тейешле булһам, ҡайҙа ғына булһам да — Сәмәркәндтәме, Бохараламы йәки башҡа берәй ҡалаламы — мин ул юлға мотлаҡ сығыр инем».

Күрәһегеҙ, Баҡсаһарайҙағы күҙ йәше фонтаны уны бер күргән Мөхәммәтсәлимдә ун ике йылдан һуң да күпме ассоциациялар уята, Пушкин Марияһының прототибы Диларасбикәгә махсус белешмә мәҡәлә бағышлауға килтерә.

Шуны ла өҫтәйек: Мөхәммәтсәлим Ҡырымда эшләгән сағында Баҡсаһарай тарихы ҡомартҡыларын, Диларәс-бикәгә бәйле урындарҙы һаҡлау, реставрациялау өсөн Эске эштәр министерствоһына яҙма рәүештә мөрәжәғәт итә, уларҙы дәүләт ҡарамалығына алыуҙы ҡуя.

### 3

Мөхәммәтсәлимдең Баҡсаһарайға сәфәренең йәнә бер маҡсаты — Исмәғил Гаспринскийҙы күреү. Уларҙың осрашыу хаҡында алдан хәбәрләшеүе лә бик мөмкин. 25 апрелдә Аҡъярҙан ғаиләһенә яҙған асыҡ хатында: «Көндәрҙең шундай һәйбәт заманында Севастополдә хат яҙып ултырам. Килдем ике көнгә, алла ҡушһа, ҡайтҡанда Баҡсаһарайҙа Гаспринскийҙарға керәсәкмен» ти.

Икенсе көн, 26 апрелдә, хан һарайҙарын, атаҡлы фонтан-шишмәләрҙе, баҡсаларҙы ҡарап йөрөгәс, Мөхәммәтсәлим төш ауғанда Исмәғил бәк Гаспринскийҙарға туҡтала.

Исмәғил Гаспринскийҙың билдәле «Тәржеман» газетаһын сығарыусы һәм мөхәррире, мәғрифәтле кеше икәнен дөйөм рәүештә белһәк тә, уның хаҡында бер ни тиклем өҫтәмә мәғлүмәт биреп китеү артыҡ булмаҫ.

Уның турында һуңыраҡ «Шура» журналында Риза Фәхретдинов — Диниә назаратында Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев менән бергә эшләй башлар кеше — былай яҙыр: «Әҙәм булыр өсөн ниндәй эштәр менән шөғөлләнергә, донъ-

яла мөғтәбәр милләт булып йәшәр өсөн шул милләт ағзалары араһында ниндәй заттар булырға тейешле икәнлекте өйрәтә торған хөрмәтле әҙәмебеҙ Исмәғил бәк Гасприҙыр» тип.

Исмәғил 1851 йылда Ҡырымдың көньяҡ яры буйындағы Аусы ауылында тыуған. Әсәһе Фатима Ҡырымдың аҫылзадәләре (дворяндар) нәҫеленән, атаһы Мостафа Ҡара диңгеҙ буйындағы Гаспранан. Улының Гаспринский ҡушаматы шунан килә. 1853—1855 йылдарҙағы Ҡырым һуғышы осоронда ғаиләләре Баҡсаһарайға күсә һәм шунда төпләнеп ҡала. Исмәғил башта Баҡсаһарай мәҙрәсәһендә, унан Симферополь гимназияһында һабаҡ ала. Хәрби хеҙмәткә алынғас, Мәскәүҙә хәрби мәктәп тамамлай. Аҙаҡ Стамбул, Париж ҡалаларына китеп белемен камиллаштыра. 1874 йылда тыуған иленә ҡайтып, Ялтала, һуңыраҡ Баҡсаһарайҙа мәҙрәсәләрҙә рус теленән дәрестәр бирә. Дүрт йыл Баҡсаһарай ҡала идараһында эшләй. 1880 йыл журналистика эшенә күсә. Ҡавказ, Төркөстан яҡтарында, Мысыр, Һиндостанда сәйәхәттә йөрөп ҡайта.

Шулай итеп, Исмәғил Гаспринский башлыса русса уҡып, хәрби белем һәм хәрби хеҙмәт юлы үтеп, Европа ҡалаларында белемен камиллаштырып, европаса нигеҙле уҡыу-тәрбиә ала, учителлек хеҙмәтен уҙа. Францияла Вольтер хеҙмәттәре, энциклопедистар эше менән мауыға, Мәскәүҙә рус классикаһын, философияһын үҙләштерә. «Московская газета»ның редакторы Ҡатков менән дуҫлаша.

Исмәғил Гаспринский Россия мосолмандарына, төрки халыҡтарына европаса уҡыу-тәрбиә биреү хаҡында хыяллана. Быны ғәмәлгә ашырыу юлында тәүге аҙым итеп, «Россия мосолмандары» тигән китап яҙып, русса баҫтырып сығара. Ул китаптың программа характерындағы төп фекере — мосолмандарҙың прогрестан артталығын бөтөрөү өсөн мөһим сара европаса уҡыу-тәрбиә, фән нигеҙҙәрен үҙләштереү, заманса мәғрифәтселеккә эйә булыу. Быны пропагандалау өсөн 1881 йылда «Нәшриәт Исмәғилиә» тигән серия нәшер итә башлай. Бының менән генә ҡәнәғәтләнмәй, төрки һәм рус телдәрендә газета сығарыу идеяһына килә. Ҙур ауырлыҡ менән юллап, 1883 йылда «Тәржеман» исемле газетаны сығара башлауға өлгәшә. Был газета асылда Россия төрки халыҡтарының төрки телендә сыҡҡан тәүге периодик матбуғаты.

«Тәржеман» газетаһы бөтә Россия мосолмандары, рус вә ғәйре йәмәғәтселек араһында таралып (ул төрки һәм рус телдәрендә нәшер ителә), халыҡты ғилем һәм һөнәргә саҡырыуы, яңыса уҡыу, донъяуи белем алырға, фән

нигеҙҙәрен, төрлө телдәрҙе үҙләштерергә өндәүе, донъя прогресын, мәғрифәтте пропагандалауы менән тиҙ арала популярлыҡ яулай. Шулай итеп, Исмәғил Гаспринский Россия төркиҙәре араһында тәүге күренекле матбағасы, журналист исемен ҡаҙана.

Был ғәйәт ҙур һәм мәшәҡәтле матбаға эше менән бергә, ул Баҡсаһарайҙа яңы тип мәктәп асып ебәрә һәм шундай үрнәк мәктәпкә нигеҙ һала. Унда рус, Европа мәктәптәре пропагандаларына ярашлы дәреслектәрҙе индерә, яңыса уҡытыу ысулын ғәмәлгә ашыра, рус, француз, ғәрәп телдәрен өйрәтә. Үҙе шул мәктәптең рус, француз, ғәрәп телдәренең мөғәлиме, мәктәп мөҙәрисе булып эшләй. Был йәһәттән ул — хәҙергесә әйтһәң, — новаторҙарса педагог, мәғариф һәм педагогика өлкәһендә яңы йүнәлешкә нигеҙ һалыусы.

Был тынғыһыҙ нәшер һәм педагог өҫтәүенә «Тәржеман» газетаһына ҡушымта итеп, фәнни, педагогик, методик китаптар, ҡулланмалар серияһын сығара.

Бына шундай ҙур эштәр менән мәшғүл булған мәшһүр шәхес, матбағасы һәм педагог янына килә Өмөтбаев.

Исмәғил Гаспринскийҙы ул күптән ишетеп белә. Шундай ҙур тырышлыҡтарына хөрмәт менән ҡарай. Белә генә түгел, Мөхәммәтсәлим Исмәғил бәкте 1883 йылда Өфөгә килгәнендә күргәне, Сәлимгәрәй мөфти хәҙрәт мәжлесендә ултырҙаш булғаны бар. Шунда ныҡлабыраҡ танышып ҡалды ла ул.

«Тәржеман» газетаһы сыға башлау менән (Россияла төрки телендәге ул саҡ берҙән-бер матбағаны) Мөхәммәтсәлим баштан уҡ яратып уҡыған даими алдырыусыһы булып китте, Өфө губернаһындағы мосолман мәғариф эштәре, Диниә назараты, мәҙәниәт яңылыҡтары тураһында хәбәрҙәр ебәргеләне, улар баҫылғылай ҙа торҙо. Шуға газета ла, уның мөхәррире лә үҙ ине уға.

Бына сәфәргә сығырынан алда, аҙнаға ике тапҡыр нәшер ителер «Тәржеман»дың 19 апрель яңы һанын уҡып ултырҙы. Россияла, мосолмандар даирәһендә һуңғы аҙнала булып үткән хәл-әхүәлдәр тураһында иғтибарға лайыҡ мәғлүмәттәр бар. Ҡавказ, Төркөстан, Сибириә вәләйәттәрендәге мәғариф, мәҙәниәт эштәре хаҡында яңы хәбәрҙәр баҫылған. Мөхәррир үҙе яҙған «Жиһад» исемле баш мәҡәлә халыҡ-ара хәлдәргә, Афғанстан ваҡиғаларына арналған. Инглиздәр Афғанстан ханын Русиәгә ҡаршы һуғышҡа ҡоторталар икән. Быға ҡарата автор «инглизләр Русиәне ҡурҡызмаслар. Россия дошманлары безләргә, мосолман-

---

*жиһәд* — һуғыш.

нарға да дошмандыр» ти. Бүтән халыҡ-ара хәлдәрҙән Италияла, Ғосманияла, Австрияла, Болгарияла булған айырым хәл-ваҡиғалар, ил-ара дәғүәләр мәғлүм ителә.

Ҡырым ваҡиғаларынан Ялта линияһын төҙөүгә бер миллион илле мең һум аҡса тотоноу хаҡында яҙыла. Баҙар хаҡтары тураһында мәғлүмәттәр бирелә. Бойҙай оно 7 рубля 50 тин көмөш, арыш оно 5 рубля 25 тин көмөш икән. Мөхәммәтсәлимде төрки һәм рус телдәрендә бирелгән иғландар иғтибарын тартты. Ҡарасубаҙарҙа 6 майҙа ат ярыштары була имеш. Призддары: беренсегә 100 рубля еҙ самауыр илә. Икенсегә 50 рубля көмөш сәғәт илә. Өсөнсөгә парча, ҡыҙыл мал. Был ярыштарҙы ҡарайһы ине.

Быйыл йәй ҡояш тотолмаҡ икән: «Бу сәнә август еде-дә, йәғни Дәй әлҡәғидәнең утыҙынчы жомға көнө көн тотолмасы ваҡиғ улып, ҡилаи вәләйәтләр кичә кеби ҡараңғы эчендә ҡалачаҡлар ирмеш. Көн тотолмаҡ хикмәте нәдар улан ваҡиғалар: көн ҡап-ҡара улып әтраф донъя ҡараңғыда ҡалыр, инсанлара ҡурҡу килер, ҡошлар тынып шашып ҡалыр. Күкдә йолдозлар күренә башлар. Бәғдә кенә эчлә башлап донъя зиадар улыр.

Бу ваҡиға Россияда Гродно, Вильно, Ярослав, Кострома вә Вятка, Пермь, Тоболь, Том вә Иркутск шәһәрләрендән камила күренәчәге кеби бер дәрәжә ҡәдәр Ҡазан, Өфө, Рүзах вә ғәйер ҡәлғәләрендән дәхи мешаһдә улына биләчәкдер».

«Тәржеман» газетаһының бар төрки халыҡтар — ҡырымлылар, әзербайжандар, татарҙар, башҡорттар, үзбәктәр, ҡырғыҙҙар, ҡумыҡтар, төрөкмәндәр, төрөктәр, алтайлылар вә ғәйреләр барыһы ла аңлай алырлыҡ яҙма төрки теле ошо рәүешлерәк булыр. Төрки таныған газетаның телен дә еңел төшөнөр.

Рәсәй мосолмандарының, төрки халыҡтарының дөйөм мәнфәғәтен ҡайғыртырға, мәғариф вә мәҙәниәт эштәрен әғлә кимәлгә күтәрергә хыялланған вә үҙенсә ғәмәл ҡылып ижтиһад иткән ошо абруйлы олуғ әҙәмден, мәғрифәт хәдименең үҙенә килеүелер Мөхәммәтсәлимдең.

Йорто үҙәк урамда. Бер ҡатлы ҙур ағас өй. Дүрт бүлмәле. Хужаның эш, йоҡо, ял бүлмәһе кескенә бер хөжрә рәүешле. Ҡунағын залда ҡабул итте. Быныһы шаҡтай иркен.

Исмәғил бәк үҙе тулы ғына кәүҙәле, асыҡ йөҙлө күркәм әҙәм. Килешле ҡуйы мыйығы, ҡалын ҡаштары йөҙөнә һим-

---

*дәй әлҡәғидә* — ай исеме; *ҡилаи вәләйәтләр* — ҡайһы бер өлкәләр; *нәдар* — ниҙән; *инсанлар* — кешеләр; *бәғдә* — һуңынан; *зиадар* — артыр;

мәтлек өҫтәй. Башына Ҡырым кәләпүше, өҫтөнә еңелсә елән кейеп алған.

Хәләл ефете Сембер губернаһынан атаҡлы Аҡчурин Искәндәр байҙың ҡыҙы Зөһрә ханым икән. Уның менән таныштырҙы. Рөфғәтбәк вә Мансурбәк исемле ике улы, Хәҙисә вә Шәфиғә исемле ике ҡыҙы бар.

Эшмәкәр хужаның эш көнө тәртибе менән ҡыҙыҡһынды ҡунаҡ кеше. «Иртән сәғәт етелә торам да ҡәһеүә эсеп, эшкә ултырам, — тине ул. — Башта почтаны ҡарап сығам. Газеталарҙы күҙҙән кисерәм. Ҡәрәкле тапҡан мәғлүмәтте, яңыраҡ хәбәрҙәрҙе «Тәржеман»ға һайлайым. Бер яңы мәҡәлә әҙерләйем. Сәғәт ундарҙа типографияма төшәм. Хәрефтәр йыйышыу, матбуғатты ойҡаштырыу эштәренә керешәм.

Тураһын әйткәндә, матбаға эшем еңелдән түгел. Асылда, үҙем үк корреспондент, үҙем үк сәркәтип вә мөхәррир, линотипист вә нәшер, таратыусыр әҙәм ис. Бары бер ярҙамсым бар. Илгә, мосолман йәмәғәтенә хеҙмәт итмәк, мәғрифәт юлына барын фида ҡылмаҡ фәкирегеҙгә дарман бирәлер ахры».

Исмәғил бәк һүҙгә әүәҫ, әңгәмәләшен дөйөм мәнфәғәткә өгөтләмәк ҡонар зат та икән. Ғәмәленән һүҙе айырылғыһыҙ. Газетаһындағы шикелле төп шиғар-лозунгыларын тәкрарларға яратыр.

«Донъяуи хәҡиҡәт вә мәғрифәт өсөн ҡәләмгә йәбештем, — ти ул, мәҫәлән, бар программаһын асып һалғандай.— Ҡәләм емеше — матбаға. Матбаға — әҙәм аңына етер баҫма һүҙ, өгөт ауазы.

Беҙ мосолмандарға Россия вә Европа тәрәҡиәтенә тиңләшеү — донъяуи ҡибла. Һөнәр вә сәнәғәт, иҡтисади тәрәҡиәт өсөн фән вә ғилем эсастарын белмәк лазым. Ә уның өсөн ысулы сүтиә мәктәптәр, мәҙрәсәләр, фән дәрестәре кәрәк. Мосолмандар донъяла иғтибар вә шәрәф кәсеп итеүҙәре өсөн Бохара ысулынса өйрәтелгән нәмәләр, хөрәфәттәр түгел, бәлки донъяуи фәндәр, заманса яңы фекерҙәр зарур. Мәҙәниәтле күршеләрҙе күрмәмеш булып, наҙан, томана ғүмер һөрмәк әҙәмгә хурлыҡтыр. Ислаҡи фекер, тәнҡиди ҡараш та тәрәҡи итһен төрки ҡәүемдәрҙә.

Үҙе асҡан һәм уҡытҡан Баҡсаһарай яңы тип мәктәбе тәжрибәһе менән дә таныштырып үтте Исмәғил учитель. «1883 сәнә ысулы сүтиәне әсас тотоп беренсе мәртәбә яңы мәктәп тасис иткән инем, — ти ул. — Был мәктәптән сабыйҙар ике йыл эсендә иң анһат вә файҙалы ысулда яҙыу,

---

*сәнәғәт* — промышленность; *ысулы сүтиә* — яңыса ысул; *әсәс* — нигеҙ; *тасис итеү* — асыу; *тәҡсил итеү* — белем алыу.

уҡыу, хисап вә ғилем хәл тәксил итеп уҡып сыға торалар. Инде Баҡсаһарайҙа йәнә ике шундай мәктәп асмаҡсыбыҙ. Бик мәслихәт. Баҡсаһарайҙың үҙендә әле өс мәҙрәсә, 20 мәктәп, 3 русиә мәктәбе йәмғеһе. Ҡалала 6 таш мәсет, 26 ваҡ мәсет. Бер грек, бер әрмән монастыры. Йәһүд вә карайым сеногогы бар. Күпселек ғәүам мосолман.

Мосолман ҡатын-ҡыҙҙарына ислахлыҡ ҡылып, милләт хәдимәләре тәрбиәләргә лә бик ваҡыт. Телде сабыйға башлап өйрәтеүсе ана бит. Ана олуғ тәрбиәсе. Тимәк, ул үҙе лә тәрбиәле хәдимә булһын. Хикмәт шунда. Шунан ҡала баланың донъяға күҙен асыусы, донъялыҡҡа үгрәтеүсе мәктәптер вә китаптыр.

Әүәл Ғәбделҡаюм Насыри әфәнденең календаре берлә мөстәшәриҡ Радловтың «Белек» рисаләһенән башҡа ғәүам, бала анларлыҡ туған телебеҙҙә китаптар юҡ ине. Бөгөн төркисә жәғрафиә, тарих, лөғәт китаптары күренә башланы, иншалла. Русиә, Европа телдәренән тәржемәләр кәрәк. Йәнә хыялым шул: беҙгә, Русиә мосолмандарына, жәдидә мәктәптәре генә аҙ, гимназия һәм дәрелфенүндәр кәрәк».

Исмәғил бәк Гаспринскийҙың бөтә төрки әҙәбиәт, Россия төрки әҙиптәре хаҡында ла мәғлүмәте вә ҡарашы шаҡтай асыҡ. Ул, әңгәмәнән аңлашылыуынса, әзербайжанлы Фәтихғәли мырҙа Ахундов ижадын юғары ҡуя. Уны төркисә тәүге театр рисаләһе яҙған әҙип ти. Бакуҙа «Игенче» газетаһын нәшер итә башлаған Хәсән бәк Маликов ижтиһадлығын хуплай. Төркисә вә русса рисаләләр мөғлифе Ғатаулла Баязитов әфәндене ололай. Ғәбделҡәюм Насыри менән Шиһабетдин Мәржәниҙе мәғрифәтле ғалим заттар тип баһалай. Ибраһим Алтынсарин, Муса Аҡъегетов, Муллаҡай Йомажиғол хеҙмәттәре менән дә таныш.

Әңгәмә барышында Мөхәммәтсәлим Исмәғил бәк иғтибар итмәгән йә белмәгән Урал буйы әҙиптәре Һибәтулла, Әбелманих, Шәмсетдин Зәки, Мөхәммәтғәли Соҡорой хаҡында мәғлүмәттәр биреп уҙҙы. Улар Европаса мәғрифәтселек, яңы әҙәбиәт башланғыстары хаҡында ла байтаҡ һөйләштеләр.

Мөхәммәтсәлим бер йылдан һуң Симферополдә шуны ла иҫенә төшөрҙө: «Тәржеман» газетаһының 1888 йыл 15 июлендә баҫылған «Ҡәләм вә әҙәбиәт ғәйрәтселәре» тигән мәҡәләһендә Исмәғил Гаспринский әле әңгәмәләшкәндә телгә алған исемдәрҙе, яңы әҙәбиәт барышын күҙҙән үткәрә ине.

---

*мөстәшәриҡ* — көнсығыш белгесе.

*дәрелфенүн* — университет; *рисалә* — йыйынтыҡ; *мөғлиф* — *автор.*

Шулай итеп, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев Баҡсаһарайҙа Исмәғил бәк Гаспринский менән осрашыуҙан, сәғәт ярым самаһы ихлас әңгәмәләшеүҙән үҙе өсөн фәһем алырлыҡ, ижтиһад итерлек, донъяға, ғилемгә, мәғрифәткә заманса ҡарарлыҡ фекерҙәр тапҡандай итте, килешеп бөтмәҫ, бәхәсләшер яҡтарын да дәләлотле генә әйткеләп йә иһә күңеленә һалып ҡуйҙы.

Хәҡиҡәт әңгәмәләрҙә, бәхәстәрҙә лә асыҡланыр — шуны йәнә яҡшы тойҙо ул.

«Ҡырымға сәфәр» шиғырында Исмәғил Гаспринскийға, уның «Тәржеман» газетаһына мөнәсәбәтен белдерер һүҙҙәрен уҡырға ла мөмкин:

Маләкәр булдыҡ унда беҙ,
Әфәнде Исмәғилгә тиҙ.
Фамилияһы уның тимеҙ
Тиерҙәр Ғаспрыҙарҙан.
Жиһан әхбарны тиреп,
Гәзитә нәшриәт итеп,
Ғафил булма был дәрттең тип,
Жиһан мәғлүм ирандарҙан.
Яҙыр вә сауда әхүәлең,
Беленер дуҫ вә дошманың,
Йәмеғе һөйләнер унда
Ағәһтар сәнаиғдардан.

## 4

Петербургта, Ҡырымда күргәндәр, яңы мөхит, ғалимғәләмәләр даирәһе Мөхәммәтсәлимдең донъяға ҡарашын киңәйтеберәк, ғилми һәм ижади яңыса балҡытыбыраҡ ебәргәндәй итте. Симферополгә килеп урынлашыу менән ул эшкә сумды. Көндөҙ ваҡеф эштәре менән ултырһа, кистәрен, ял көндәрен ижадҡа бүлде. Ҡырым тураһында бик күп әҙәбиәт уҡыны, уның тарихы, мәҙәниәте менән ныҡ ҡыҙыҡһынды. Ҡырым татар телен өйрәнеп алды, ҡалала, баҙарҙа был телдә арыҡ иркен һөйләшергә күнекте.

Мөхәммәтсәлим бик дәртләнеп тиҙ арала бер китап яҙып ташланы. Июнь айында ауылға яҙған хатында: «төркисә бер китап тәсниф итеп Петербургка цензураға ебәрҙем. Хәҙергә әле килмәгән. Рөхсәт булһа, баҫтырып таратырға (иҫәп)», — ти ул. Ләкин был китап, цензураның рөхсәте булмауы сәбәплеме, нисек, баҫылмай ҡалған һәм уның

---

*жиһан әхбарны тиреп* — донъя хәбәрҙәрен сүпләп; *ағәһ* — хәбәрдар; *сәнаиғ* — һөнәр, сәнғәт; *тәсниф итеп* — яҙып.

ҡулъяҙмаһы ла табылғаны юҡ әлегә. Шуға күрә уның ни хаҡында булыуын әйтеүе ҡыйын. Әгәр ҙә авторҙың был китабын Ғатаулла Баязитов, Исмәғил Гаспринский кеүек заманының билдәле мосолман фекер эйәләре, мәғрифәтселәре менән осрашыуҙан һуң тиҙ арала яҙыуын иҫәпкә алғанда, мәғрифәтселек идеяларын алға һөргән әҫәр булыуы бик мөмкин. Сөнки был осорҙа инде М. Өмөтбаевтың демократик мәғрифәтселек ҡараштары тамам формалашып етә. Быларҙы ул ғәмәлгә ашырыуҙың матур үрнәктәрен, юлдарын асыҡ күрә.

Ҡырымдың гүзәл тәбиғәте, шифалы һауаһы, әҙәм күңелендә илһам уятып, шиғриәткә лә еңел көйләй буғай.

Бына Мөхәммәтсәлим ваҡеф эштәре менән асыҡ тәҙрә ҡаршыһында ултыра торғас, Ҡырым тәбиғәтенең бәрхәт миҙгеленә хайран булып, хозурланып һәм илһамланып китә лә шиғыр яҙырға тотона. Бәрхәт миҙгел тыуған яғының йәмле йәйҙәрен, Йомран ерҙәрен иҫенә төшөрә.

«Ваҡеф эштәрен яҙа торғас, хәтергә төштө», — ти ҙә үҙе шиғыр юлдарын теҙә башлай:

Беҙҙе Йомран иле, тиҙәр,
Ағиҙелдең буйы, тирҙәр.
Беҙҙең дә бар гүзәл ерҙәр
Ҡолаҡ тот, тыңла беҙҙәрҙән.
Ғәжәп хозурлы ерҙәрҙән
Ҡыҙылғыны ишет, берҙән.
Күренер ине күп ерҙән
Юҡ ине шул тирәктәрҙән.
Ишет һин шул Һымай күлен,
Тотар яҙ, бикләмеш юлын.
Ыласын уйнар яҫы болон
Урай-урай тирәктәрҙән.

Тәҙрә ҡаршыһындағы әллә мәңге йәшел тәбиғәткә һоҡланып, әллә ҡыҫҡа миҙгелле тыуған яҡ йәйҙәрен һағынып, әллә ер-һыуҙарының ярлылана барыуына эсе бошоп, ҡапыл шиғырҙың тоны үҙгәрә, тасуирлауҙары үҙгәләнә:

Балапан һәм кесе Талпаҡ
Яталар миҫле аҡ ҡалпаҡ.
Ағастары бөгөн ваҡ-ваҡ,
Уларҙа һәм һирәктәрҙән.
Әгәр күл булһа ағасһыҙ,
Шулай ил ҡала башһыҙ.

---

*миҫле* — төҫлө, кеүек.



*М. Өмөтбаевтың «Йомран иле» («Ваҡеф эштәрен яҙа торғас хәтергә төштө») шиғырының автографы.*

Йә булһа ауыҙың тешһеҙ,
Ни файҙа шул дудактарҙан.
Ҡөйөрһөң һәм тирәк өсөн,
Табалмаһаң кәрәк өсөн.
Бөгөн ахыр ярағы өсөн
Ҡөйөрһөң, булһаң ирҙәрҙән.

Был — тәбиғәттең ярлылана барыуына көйөнөү, хәҙерге термин менән әйткәндә, экология мотивы.

Шағирҙың уйҙары тулҡын-тулҡын булып аға, бер мотивтан икенсеһенә күсә:

Ҡамаләтле бер ир ҡана
Сығар сараһы майҙана.
Илендә булһа мәрданә,
Нәсихәт ал, ул рәһбәрдән.
Ҡыуаҡты тәрбиә ҡылһаң,
Күрерһең һәм тирәктәрҙән.
Табырһығыҙ һәм ирәндәрҙән,
Уҡытһаң йәшерәктәрҙән.

Йәғни һүҙ тәбиғәтте һаҡлар кешеләргә, ғилем-һөнәре камил аҫыл заттарға күсә. Ҡыуаҡты тәрбиә ҡылһаң, ул тирәккә әйләнер, тигән кеүек, кешене йәшерәктән уҡытһаң, шәфҡәтле вә мәғрифәтле булыр, тигән фекер ярала.

Мөхәммәтсәлим аҙаҡ мәғрифәтселек ҡараштарын алға һөргән мәҡәләләренең береһендә «ҡыуаҡтағы йәш тал сыбыҡты еңел бөгөп булған шикелле, баланы йәшләй тәрбиәләү ҙә еңелерәк бирелә» тигән образлы фекерен дауам итә.

Ә шиғыр бер фекерҙән икенсеһенә күсеп, тасуирлауҙарға ялғанып ағыла ла ағыла.

Был — хәҙер киң билдәле «Йомран дәүрәне» исемле шиғыр.

Тыуған яҡ тәбиғәтен тасуирлаған һәм һағышланған был шиғырын М. Өмөтбаев хатҡа күсереп Ибраһимға һала. Бында шиғырҙың нисек тыуыу шарттарын да, датаһын да әйтеп китә ул: «1887 сәнә 27 сентябрҙә яҙылған. Шәһәр Аҡмәсет йәғни Симферополдә. Ебәрелде хат менән диңгеҙ буйы Алушта шәһәренән.

Ғәрип былбыл бында ла һайрауҙан туҡтаманы.

Икенсе көнө Алушта шәһәрендә Сәйед мөфти әфәнде өйөнән диңгеҙҙә дельфин балыҡтарына ҡарай-ҡарай яҙҙым. Улар һикерешеп уйнайҙар ине».

---

*камаләтле бер ир ҡана* — ғилем-һөнәре камил бер ир ҡайҙа; *мәрдана* — ҡыйыу ир-егеттәр; *рәҡбәр* — юл күрһәтеүсе, етәксе; *ирәндәр* — ирҙәр; *дудак* — ирен.

Тимәк, Симферополдә яҙыла башлаған шиғыр Алушта-ла тамамланған.

Ситтә лә былбылдай һайрауҙан туҡтамаған шағир кеше һағышынан хаттарын да йыш ҡына шиғырҙар менән ҡеүәтләп ебәрә. Ул шиғырҙар ситтә зарыҡҡан кешенең һағышы, хәләл ефетенә һөйөү һүҙе булып иленә, ғаиләһенә етә.

Бына 1887 йылдың 25 апрелендә ауылға, ғаиләһенә ебәргән хаттағы шиғыр:

Яҙ көнөндә кәкүк саҡыра микән
Агиҙел буйы бейек тирәктә,
Бер күрергә һеҙҙе мин зар булдым,
Мәхрүм, мәхзүн булып йыраҡта.
Урал тауҙарына ашҡан саҡта,
Боролоп-боролоп ҡарай егете.
Хаҡ тәғәлә яҙып, ризыҡ булғас,
Күп ерҙәрҙә дәхи йөрөттө.
Яҙ көнөндә сәскә бик шат саҡта,
Гөл ағасы ниңә бөгөлгән.
Һеҙҙең өсөн, дуҫҡай, илай-илай
Япраҡтарым минең түгелгән...
Һалмаһана, дуҫҡай, беләгеңде,
Талдыраһың нәҙек үҙәкте.
Уҙған ғүмерҙәрҙе уйлай-уйлай
Әле лә баҫып булмай йөрәкте.

Был һағышлы шиғыр юлдары, йәштәрҙең хаттарында осрар традицион йыр, шиғырҙар шикелле, халыҡ йыры үлсәүенә һәм мотивтарына көйләнгән. Шиғырҙың аҙаҡҡы куплеты берсә халыҡса ла, берсә шағирса үҙенсә лә:

Ҡарҙар ғына ереп, боҙҙар китер,
Тимер юлдар бөтөр һалынып.
Насип булһа, ҡайтҡан юлдарымда
Гөлбикәсем көтөр һағынып.

Ә бына икенсе бер һағышлы шиғыры (ул хәҙер «һағыныу хаты» тип атап йөрөтөлә) поэтик хат стилендә:

Сәләм булһын, сәләм һеҙгә,
Сәләмәтме бөтәгеҙ ҙә?
Шөкөр, кисмәт етеп, беҙ ҙә
Вафа ҡылдыҡ һеҙгә, әй йән!

---

*мәхзүн* — ҡайғылы, һағышлы.
*кисмәт* — яҙмыш, өлөш; *вафа* — тоғролоҡ.

Ҡайҙа минең гүзәл улым,
Һөйөр, үбер, күрер күңелем,
Ҡузым, бәғрем вә аҡыллым,
Ҡайҙа китте был йорттарҙан.
Йәнем, ҡорбаның, эй, торам,
Һине лә саҡ ҡына күрәм.
Сырағым һүнде, мин үләм
Янып был әсе зарҙарҙан.
Ҡайғың донъяны тар ҡылды,
Йөрәкте һары нар ҡылды.
Бәһар көндәре ҡар ҡылды
Шөкөр, күрҙек был көндәрҙән,

Шуныһына ла иғтибар итегеҙ: «Йомран дәүраны» кеүек был шиғыр ҙа бер строфа ҡалыбында яҙылған. Улар ишкә ҡуштар. Береһе — тыуған ер-һыуға, икенсеһе — ғаиләгә һөйөү һәм һағыш.

Әҙип кеше, әлбиттә, гел һағышланып ҡына йөрөй алмай. Ул йыш ҡына етди уйҙарға бата, хикмәтле һүҙҙәргә мөрәжәғәт итә. «Әҙәм балаһы бер сырхамай, бер нужа күрмәй ир булмайҙыр» тип яҙып ҡуя. «Хәкимдәр әйтмештер», тип шиғри юлдар теҙә. Бына хатында осраған хикмәтле шиғри юлдар:

Ғалим булмаç, күрмәгән нәхү вә ҡәләм,
Ғалим булмаç сикмәгән жоур-әләм,
Аҡыллылар күп белеп аҙ һөйләгән,
Белекһеҙҙәр аҙ белеп сүп һөйләгән.

«Бына минең һабағым. Шуны белә алмайым» тип тә өçтәй автор.

«Донъяла ғилемдән ләззәтле шир юҡ, ғилемдең икмәге китаптыр» тип йәнә хикмәтле һүҙен әйтә.

Тимәк, ғилем менән мәшғүл әҙип шиғри һүҙҙәрен дә шулай йыш ҡына хикмәтләп әйтергә ярата.

Шулай, көндәлек ваҡеф эше, ижад-ғилеме аралашып бара.

## 5

Ҡырымдың бәрхәт миҙгеле.

Нәҡ шул иң йәмле саҡтарҙа Мөхәммәтсәлим полковник Ғәни бай Булғаковтың зиннәтле һарайына күсә. Ул гөл-баҡсалар эсендә. Баҡсаһында ниндәй генә ағас, сәскә,

---

*нар* — ут; *бәһар* — яҙ; *шир* — арыçлан.

емеш юҡ. Ул хөрмәһе, ул йөҙөмө, ул алычаһы. Емештәрҙең тулышып бешкән мәле.

Мөхәммәтсәлим ҡай саҡ көн оҙоно шул баҡсанан инә белмәй. Гөл түтәлдәренә һыуын һибә, һайлап ҡына сәскәләрҙән таж теҙә, емештәрен ауыҙ итә. Йөҙ төрлө ҡош һайрауҙарын кинәнеп тыңлап йөрөй. Ер йәннәтендәй хозурана гөл-баҡса инде.

«Баҡсанан гөл сәскәләре йыйып керҙем, сәйгә һалып эсә торғандарын, — ти ғаиләһенә яҙған хатында. — Бындағы татарҙар гөл сәскәләренән варенье яһайҙар. Унан хушбый, йәғни гөл майы еҫе килә. Йомшаҡ булһын өсөн бешкән көкөрт һыуына һалып иҙәләр. Көкөрт һыуы һутын сығармай икән. Аҙаҡ ҡайнаталар.

Минең баҡсала бик яҡшы виноград, йәғни йөҙөм ағасы бар. Көн дә һыу һибәм. Емештәре борсаҡ ҡәҙәре булып килә...»

Емеш-йөҙөмгә мул иркен ирәүән баҡса. Һуштарҙы алырлыҡ хуш еҫле гөл-сәскәләр. Аулаҡ, тып-тыныс күркәм һарай. Иркенләп йәшә, эшлә, ижад ит — һәммә шарты, яйы бар.

Мөхәммәтсәлимгә хәҙер ашау-эсеү хәстәрен, кәрәк-ярағын үҙе ҡайғыртаһы түгел. Байҙар йортонда бары әҙер һәм байҙарса.

Ғәли бәк Булғаковтың Бибиямал исемле бик сибәр ҡәрҙәше бар. Уны бары ла һөйөп, иркәләп Бибкәй тип кенә йөрөтәләр. Бер ҡорьән хафиздан тол ҡалған ханым икән. Бешеп еткәндә генә ҡорғаҡһып емеш биреүҙән мәхрүм ҡалған гөлмө ни. Сарсар емшәндәренә, гүйә, тамсы ғына мән һәм нур хәжәт.

Һылыуҙың шундай хәлен һәм мәлен аңламағандарға, һылыулығына бер күреүҙән ғашиҡ булып, эстән йөрәктәре янмағандарға туң һәм күҙһеҙ булыу кәрәк.

Бибкәйҙе бер күреү һәм өҙҙөрөп ҡарауҙары менән Мөхәммәтсәлимдең зарҡынған күңелен һәм бәдәлен бер юлы ут ялманы. «Бер ҡалала гүзәл күрҙем» тигән шиғыры шул саҡ тыуғандыр, моғайын.

Буй һыны, һис шөбһәһеҙ, килбәтлелер,
Ҡамзул менән ҡалпаҡ кейһә, зиннәтлелер,
Арлы-бирле йөрөгәндә бик һиммәтлелер,
Күргәндәрҙең йәндәрен киҫәр имде.

Ғишыҡ уты ҡабынып ир азаматтың йөрәге толпарҙай ашҡынғандыр ҙа дәрт-дарманын ашырмаҡ булып ынтылғанда, бәлки, ике ут араһында ҡалғандыр. Хәләл ефетеңә тоғролоҡ аҡылы менән йәш сибәргә үлеп ымһыныу ялҡыны араһында. Моғайын, шул хәлендә ул аптырап әйткәндер:



*М. Өмөтбаевтың Ҡырымдан тыуған яғына — Ибраһим ауылындағы ҡатынына яҙған хатынан бер бит.*

Йән һөйгәнде уйлап мин атҡа аштым,
Ике һөйгән күңел менән утҡа төштөм.
Бер күңелдә ике һөйөп, юҡҡа сыҡтым,
Аттан төшөп йәрҙе алмаҡ кәрәк имде.

Мөхәммәтсәлим Бибкәй һылыу менән ғишыҡ дәртен нисек баҫҡандыр, йөрәк серен асҡанмы йә юҡмылыр, иллә мәгәр үҙенең Мәжнүн хәленә төшкәнен, һөйгәненең Ләйлә булып ҡалғанын кисерә ул. Ошо мәлдәрҙә ул «Ғишыҡ ғүмер бәйете» шиғырын да аҡҡа төшөрә, ғазаплы ярһыу мөхәббәт хистәрен түгә.

Ғашиҡ Мөхәммәтсәлим бер риүәйәт тә килтерә: «Ҡырым вәләйәтендә бер талип, хур ҡыҙын күреп, ғашиҡ булып китап сығарған имеш», тигәнде. Мөхәммәтсәлим үҙе лә был мәлдә ғишыҡ шиғырҙарын байтаҡ яҙа. Тик мәғшуҡаһы ғына хур ҡыҙы түгел, ер ҡыҙы.

Әҙәмдәр ерҙә ғашиҡ булалар. Мөхәббәт ул күпме серле һәм күпме әйтелмәгәндәре булмаһын, ул йөҙҙә лә, һүҙҙә лә беленәлер барыбер. Үлеп ғашиҡтар бер-береһен табыша һәм ҡауыша торғандыр.

Булғаков генерал һарайында бер ҙур мәжлес булған. Ул ошо ике ғашиҡтың мөҙҙәтенәме, әллә тыуған яҡтан килгән мөғтәбәр ҡунаҡтар хөрмәтенәме бағлы — тәғәйен асыҡ ҡына түгел. Төрлө хәбәрҙәрҙән, имеш-мимештәрҙән аңлашылыуынса, мәжлес бик күркәм һәм шау-гөрлө уҙған. Унда ҡатнашҡан Биштәкә ауылы Хафиз хажи, мөфтиҙең улы Арыҫланғәле Мөхәммәтсәлимде Ҡырымда өйләндереп, туйында булып ҡайттыҡ тип, Өфөлә хәбәр һалғандар. Ундай хәбәр тиҙ йөрөй, Өфөнән Ибраһимға ла, Мөхәммәтсәлимдең хәләл ефете Бибиғәбиҙәгә лә барып еткән. Хат аша аңлашыуҙар, үпкәләр киткән.

Бибиғәбиҙәнең Мөхәммәтсәлимгә яҙған бер хатында шуларҙы уҡыйбыҙ: «Беҙгә Биштәкә ауылы Хафиз хажи бер хәбәр һөйләгән ине. Бынан һуң үҙегеҙ бер хатығыҙҙа кеше һүҙенә ышанмағыҙ, ул хәбәр дөрөҫ түгел, тип яҙған инегеҙ. Унан һуң дәхи бер хат алған инем: «Талаҡ ҡылдым» тип яҙҙығыҙ. Был өс төрлө хәбәрҙең ҡайһыһына ышанырға белмәй аптырап торабыҙ. Хафиз хажи бик асыҡ һөйләгән: үҙем туй мәжлесендә булдым, тип. Бер көрьән Хафиздан ҡалған ҡатын ҡырҡ йәштәрендә, исеме Бибкәй исемле тип. Мөфти улы Арыҫланғәленең һүҙенә бик ышанмаған инем. Хафиз хажи шулай һөйләгәс, ышандым. Мин һиңә ҙур хеҙмәттәр һәм күп жалуньялар булһын, тип теләгән инем һәм бер үҙемә хәсрәт булды.

Был хәбәрҙе әүәл Суфый Әхмәттән ишеттек. Суфый Әхмәт һүҙенә ышанмаған инек. Был хәбәрҙе бер мәхәллә-

һендә Фатима бикәгә әйткәндәр. Ул Фатима бикә әйткән: «Мин уның был эшенә ҡул ҡуймайым. Ул Мөхәммәтсәлим мырҙа бында ваҡытта бикәһен бик яраталыр ине. Был һүҙ дөрөҫ булмаһа кәрәк, тигән».

Доғаларынды уҡып, хат көтөүсе ҡатының Бибиғәбиҙә тип мәғлүм. 13 ноябрь 87 сәнә».

Ошондай төрлө хәбәрҙәргә ҡарамай мөхәббәтенә, ғаиләһенә, иренә тоғро Бибиғәбиҙә сабырлығы һәм өмөтө менән бар ҡайнар һәм тыйнаҡ хисен шиғырға һалып та аңлата.

Әлеге хат Бибиғәбиҙәнең түбәндәге шиғри һүҙҙәре менән тамамлана:

Һағынмаҡтан һары булды сырайым,
Ҡауышмаҡты насип итһен хоҙайым.
Әгәр белһәң ине һағынғанымды,
Һинең өсөн күҙ йәшем ағыҙғанымды.
Һинең менән күрешмәктер мораҙым,
Мораҙыма ирештерһен хоҙайым.
Был хатымды ҡабул итеп ала күр.
Миңә лә бер-ике юл хат һала күр.
Уҡыһам мин мөбәрәк һүҙҙәреңде
Бер күргәндәй булырмын үҙҙәреңде.
Ялҡытһам да яҙайым бер-ике юл,
Янып барған йөрәккә ял булыр ул.
Дәхи низәр яҙайым, бөттө һүҙем,
Йәш менән тулы минең ике күҙем.
Һүҙем бөттө һиңә, йәнем, етерме,
Был хат менән арала һүҙ бөтөрмө.
Хаталы хат хатаһын өрмә йөҙгә,
Хатанан хали айырмаһын хаҡ илә үҙгә.

Ниндәй сабырлыҡ, ни тиклем ғәфү итә белерлек һүҙҙәр мәңге һөйөр хәләл ҡатыны шиғырында. Йыр менән дә нығыта ул һағышлы һәм тоғролоҡло уйҙарын:

Һандуғасҡай һайрай яҙ айында
Ҡарағайҙан бейек ҡайында.
Һин һағынмайһыңдыр ҙа, әй, унда
Мин һағынам сәғәт һайын да.
Аҡҡош ҡына осор күл күреп,
Былбыл ҡоштар осор гөл күреп.
Шул гөлдәргә ҡунған былбыл кеүек,
Һөйләшербеҙ микән бер күреп?
Самауыр ҙа ҡуйҙым, сәйҙәр һалдым,
Эсмәҫ булһаң, сәй һалмаҫ инем.

Һин дә минең кеүек һағынһаң,
Аяғыңдин баҫалмаҫ инең.

Аҡыллы Бибиғәбиҙә әйткәнсә, әҙәм балаһы хатанан хали түгел. Кем белә, бәлки хаталыҡ Мөхәммәтсәлимдә лә булғандыр. Хатаны ваҡытында төҙәтә белгән, йөрәк яраларын йәһәт уңалтыша алған әҙәм ғәфү итмәле.

Мөхәммәтсәлим ғаиләһенә һәм энеһе Сөләймән старшинаға адреслап яҙған хатында күпмелер хикмәтләп һәм кинәйәләп, энеһенә, үҙе өсөн генә тигәндәй, руссалап ниҙелер аңлата булыр:

*«Йөрөгән кеше шымарыр, ятҡан кеше мүкләнер, тирҙәр, йәғни бай булыр.*

*Арыҫланғәле Солтанов киткәндә бик сирләй инем, оҙата барманым. Баязиттан Арыҫланғәле «һөйөнсө» тип мыҫҡыллаған икән.*

*Может быть, вам передавал и хаджи Хафиз о том, что я женился на старой вдове кадыя. С этого дня, т. е. с 18 июля я захворал, но когда мне весть сказали, что до тех пор не выздоровишь, покуда не отпустишь ее и не дашь обет ехать к детям. Сон оказался святым, ее я отпустил, а сам переехал в другую квартиру и наняя повара из касимовских татар. Вот почему явилась мысль о родине и вас всех хотел бросить и уехать за границу!*

*Надеюсь, что вы постараетесь утешить жену, не будете насмехаться, судьба зависит не от человека, которому если суждено испытывать на свете и горького, и сладкого, и слезы и утешения. Прощай. Да здравствует дом Юмраново на славу грядущего поколения. М. С. Уметбаев».*

Аңлағанға ишара, алғанға һабаҡ.

Ҡырымда ваҡеф комиссияһына, Ғәбиҙулла солтан Сыңғыҙханов әйткәнсә, күп тигәндә ярты йыллыҡ тигән эш ике йылға яҡын һуҙыла. 1888 йылдың яҙын ҡайтыу мәсьәләһе, ниһәйәт, хәл ителгән кеүек ине. Мөхәммәтсәлим Ҡырымдан Ибраһимға һуңғы хаттарының береһен ебәрә (ул хатты эпистоляр жанрҙың, М. Өмөтбаевтың хат тел-стилен асыҡ күрер өсөн, нөсхәһендәгесә күсерәйек әле):

«Бисмилларахманрәхим. Зияда сөйөклөләрем Бибиғәбидә туташыма, Баязидҡа, Бибигөлсөмгә, киленгә, Шаһисәрүәргә һәм Мөхәммәдзакирға ихласлы сәләмләремне юллап доғалар уҡыңыз. Үтенәмен йәнә хөрмәтле туғаным Сөләймәнгә, киленгә барча балалары илән, жиңгәчәгә ошондай балалары илән сәләмнәр күндереп доғаларын үтенәмен.

---

*зиядә* — бик, үтә; *әлхәмделилла әл-ғәләмин* — аллаға шөкөр.

Әлхәмделилла әл-ғәләмин, үзем сәләмәт йөрөймен. Алла тәбәррәк вә тәғәли ғәзимен табшырып, айның 21 көнөндә кич шисәнбе көн йортҡа ҡайта чыҡмаға ниәт идәмен. Рүзәдән мәҡәддәм үземезнең илгә яҡынлашәсәм иде дип өмөд итәмен.

Ходай тәғәлә хәйерле юл бирсен, шатлыҡ күрмешкә насип иткәй имде. Амин. Доғада булыңыз.

Яз көннәре юлларның ауыр һәм бозоҡ вә ҡаты, суларның ташҡан заманы. Хода ҡушса, Самара йәки Ырымбурға барып, андан ат илән чыҡмаға ниәт идәмен. Аллаға тапшырдыҡ.

Әйберләремне ҡызыл сандыҡҡа салып, янымда йөрөтмәк ниәт идәмен. Ходаның эшен белеп булмай: бәлки берәр ердә мәнег йәки сырхап ҡалсам, сандығымны сорағайсыз дип.

Әл-хәле үҙеңә тапшырдым, яғмәжиб әл-сәлла ғыйлми. Амин.

Доғаларыңыздин өмөтләнеп язучы әткәңез Мөхәммәдсәлим Өмөдбаев. 1888, 20-че апрель. Симферополдән.

P. S. Хода ҡушса, Эстәрлетамаҡ арҡылы ҡайтыр идем. Ебәрмәскә тырыщдылар. Тырышыбыраҡ рөхсәт алдым. Ахыры хәйерле булғай имде. Амин».

Әҙәм бер төрлө уйлай, ғәмәл икенсе төрлө эшләй. Ҡайтыу хаҡында Сит ил эштәр министерствоһынан приказ булғансы йәйе үтеп көҙө етә. Шулай ҙа М. Өмөтбаев яҙ иҫәпхисап эштәрен тапшырып, йәй башында тыуған яғына ҡайтырға сыҡҡан булырға тейеш. Эштән бушатыу хаҡында приказ күпкә һуңлап бирелә. Бәлки, ҡай бер ваҡеф вазифаларын Өфөлә тамамлап ҡуйыу өсөн ул йәйгеһен эштә иҫапланғандыр.

---

*алла төбәррәк вә тәғәли ғәзимен* — мөбәрәк ғәзиз һаман алла тәүәккәллегенә; *рүзәдән мәҡәддәм* — ураҙанан алда; *мәнег* — тотҡар, ҡаршылыҡ.

# ЙӘНӘ ӨФӨ

*«Һәр кемдең ҡалалыр бер йәдкәре».*
М. Өмөтбаев

1

Мөхәммәтсәлим Ҡырымдан тура Ибраһимға ҡайтты. Юл ғазабы — гүр ғазабы: өс мең саҡрымға яҡын юлда поездан поезға, поездан атҡа күсеп ултыра-ултыра, аҙналар буйы килә-килә тамам йонсоп бөттө.

Өфөгә барып күренде лә, бер ни тиклем хәл йыймаҡ һәм хужалыҡ эштәре менән шөғөлләнмәк булып, ауылда ғаиләһе янында ҡалды.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың көнкүреше, нисектер, ике ярыраҡ килеп сыҡты. Бер фатиры, төпләнеп эшләүе — Өфөлә, икенсе йорто, хужалығы — Ибраһимда. Йәшәүҙәре көҙөн-ҡышын — ҡалала, йәйлеген — ауылда. Оло улы Баязиттың ғаиләһе менән көнкүреше лә шулай. Ике ғаилә гел бергә.

Петербург Өмөтбаевты Диниә назаратынан командировка рәүешендә саҡырып алып, Эске эштәр министерствоһында ваҡытлыса хеҙмәттә иҫәпләнеп, әүәлге штат урыны һаҡланырға ике-ара килешелгән булһа ла, урынында әле икенсе кеше эшләү арҡаһында, вакансияны бушатыу төрлө волокиталар менән оҙаҡҡа һуҙылды. Өмөтбаев Өфөлә элекке вазифаһына 1889 йылдың мартында ғына тотондо. Был бер йылға яҡын арала ул ауылда йорт, хужалыҡ эштәре менән мәшғүл булды. Фән, ижад менән шөғөлләнергә күберәк форсат тапты.

Башта йорт-ҡоралдарҙы ныҡытыу хәстәрен күрҙе. Умарталығын тәртипкә килтерҙе. Яҙында мул ғына һабан ашлыҡтары сәстерҙе. Йәйен сабын, умарта эштәре, ураҡ урҙырыу, ашлыҡ һуҡтырыу менән күп көндәре үтте. Малтыуарын, йылҡыларын ҡышҡылыҡҡа йылы ҡораларға индерә алды. Шул йыл өй эсе менән ҡышлауға ауылда ҡалды үҙе лә.

Әммә ике ғаиләне Ибраһимдағы хужалығы иҫәбенә генә аҫрау еңел түгел ине. Өҫтәүенә Өфөләге фатирҙы

ла һаҡларға, унан өҙөлмәҫкә кәрәк. Унының үҙ сығымы байтаҡ: фатир хаҡы, утыны-ние. Баязиты күберәк шунда йәшәй. Унының бисәһе менән тынышмай.

Үҙ ғаиләһенең хәстәре, хәсрәттәре етерлек. Уртансы улдары Шаһисәрүәр бик сирләшкә булып сыҡты. Сабый сағында үпкәһенә һалҡын тейҙереүҙән мандып китә алмайынса әллә күпме ыҙаланып, туҡһанынсы йылдар башында ун йәшендә вафат булып ҡуйҙы. Унының өҫтөнә иң яратҡан ҡыҙы Бибигөлсөмөнөң һис уйламағанда йәшләй ҡапыл өҙөлөп ҡалған ғүмеркәйе ҡайғыһы өҫтәлде.

Илгәҙәк берҙән-бер ҡыҙын, Бибигөлсөмөн, Мөхәммәтсәлим бигерәк ныҡ яратыр ине. Ҡыҙы ла «атайым» тип өҙөлөп торҙо. Ситтә, Ҡырымда эшләп йөрөгәндә һағындырғаны ошо үҫеп килгән ҡыҙы ла төпсөк улы Мөхәммәтзакир ине.

Ун дүрт йәшлек ҡыҙының атаһына Ҡырымға яҙған бер ҡыҫҡа ғына хаты һаҡланған. Бына ул: «Хөрмәтле, һөйөклө атайымдан үтенәмен, зинһар, ошбу хатҡа ҡаршы үҙемә башҡа биш йә алты һум аҡса хат менән һалып ебәрерһең. Ебәрһәң ине, зинһар. Өфө йәрминкәһенә саҡлы бер көн килеп етерлек булһын. Йәрминкәлә арыуыраҡ шәл һәм ситек, кәүеш алырға итәмен.

Үтенеп яҙыусы һөйөклө ҡыҙығыҙ Бибигөлсөм тип белерһең. 1887 йыл.

Уҡығыҙ беҙҙең яҙған һүҙебеҙҙе,
Күргән кеүек булырһыҙ үҙебеҙҙе,
Бер күрергә мохтаж булдыҡ үҙегеҙҙе,
Хаҡ тәғәлә сабыр жәмил бирһен инде».

М. Өмөтбаев архивында «Бибигөлсөмгә» тигән бағышлау шиғыры бар.

Уғлан булған кеше һис ҡайғырмаҫ,
Донъяға килдем йәнә киттем тимәҫ,
Юҡтыр унда үлем әндишәһе,
Кис-көндөҙ уйнамаҡтыр пишәһе,
Кис-көндөҙ уйнамаҡтыр һәр сәғәте.

1876. Мөхәммәтсәлим

Аҙаҡ ошо шиғыр аҫтына шуларҙы яҙып ҡуйған: «Был ҡыҙыбыҙ 1873 йыл вөжуд булып, 1894 йыл вафат булды».

---

*Әндишәһе* — уйы; *пишәһе* — шөғөлө; *вөжуд булыу* — тыуыу.

Әллә нисек сәйер һәм ҡыҫҡа булды шул берҙән-бер һөйөклө ҡыҙының ғүмеркәйе. Матур булып үҫеп килгән 17 йәшлек Бибигөлсөмдө ағаһының улы Ғәбдрәхимгә 1891 йылдың декабрендә кейәүгә бирҙеләр. Татыу ғына йәшәп ятҡанда, 1894 йылда баш балаһын донъяға килтерә алмай ғүмере киҫелде: ике йән эйәһенең — үҙенең дә, ҡарынындағы сабыйының да.

Төпсөк улы Мөхәммәтзакир ҙа, ни эшләптер, теремекләнеп китә алманы. Уны яңы һабаҡҡа төшкән йылда ер ҡуйынына илтеп һалырға тура килде. Әллә күп ҡайғыларҙан, әллә донъя баҫыуҙан хәләл ефете Бибиғәбиҙә лә йыш ҡына сирләй башланы. Нәк шул йылдарҙа Мөхәммәтсәлимдең бер дәфтәренә «Ибраһим Әҙһәм һүҙҙәре» тип, «Ваһ бәни йөҙ мең бәләләргә дусар иткән үлем, ихтыярымды алып би ихтиярһыҙ иткән үлем» тигән юлдарҙы теркәп ҡуйыуы ла һис осраҡлы түгел, әлбиттә.

Сөй өҫтөнә туҡмаҡ. Өҫтө-өҫтөнә ауған ауыр ҡайғыларҙан сабыр һәм тыныс Мөхәммәтсәлим үҙе лә нык бирешкәндәй итте. Төрлө шомло уйҙарға батҡан саҡтары, күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән мәлдәре булманы түгел. Диндарлыҡ тойғолары ҡуйыра башлай кеүек. Әллә былар барыһы ла алла ҡәһәреме? Яҙмышыңа төшкән ҡара өлөшмө? Шулай икән, хаҡ яҙғанын күрмәй сара юҡ. Бисараға бүтән ни сара.

Ҡәҙерле балалары, туған, дуҫ-иштәренең ҡәберен зыярат ҡыла барғанда йәки бер ҡәбер ташындағы «Бән кичә сәнең кеби ирдем, сән дә иртәгә бәнем кеби улырсың бәндә» тигән яҙыуҙарҙы уҡып (ул һүҙҙәрҙе дәфтәренә лә теркәп ҡуйған), был донъяларҙың фанилығы хаҡында уйланмай ҡалмаҫ.

Дөшөптөр тупраҡҡа есеме,
Белерһең үледер рәсеме.
Онотола уның исеме,
Ни дәүләт ҡала, худ вә ат, —

тигән шиғыр юлдарының барлыҡҡа килеүе лә осраҡлы булмаҫ.

Нәҡ ошо туҡһанынсы йылдарҙа М. Өмөтбаевтың донъяға ҡарашында дини-мистик философияның ҡайбер элементтары беленә бирел ҡалыуы ла ерле-юҡтан түгел булһа кәрәк. Уның суфыйсылыҡ поэзияһы менән әҙме-күпме мауығып алыуы ла шуны кеүәтләй. Үҙенең бер-ике шиғырында, бәғзе яҙмаларында, ғәрәп, фарсы телдәренән күсермәләрендә пессимистик, хатта фаталь уй-тойғолар сағылып ҡала.

Бер һүҙ аҫҡас, М. Өмөтбаевтың философик ҡараштары хаҡында әйтеп үтәйек.

Төп философик ҡараштары нисек уның? Ислам, суфыйсылыҡ философияһы менән бәйләнешлеме, түгелме?

Күп әҫәрҙәренән, яҙмаларынан сығып ҡарағанда, М. Өмөтбаевтың фәлсәфәи фекерҙәре тәбиғәттең, донъяның асылын, кеше ғүмеренең мәғәнәһен йәки мәғәнәһеҙлеген асыҡлауға, философияның төп мәғәнәләренә йүнәлә. Үҙ тәжрибәһенә, белем дәрәжәһенә, беренсе сиратта, донъя философтарының, бигерәк тә көнсығыштыҡыларҙың тәғлимәттәренә таянып, ул үҙенсә фекер йөрөтөргә, ниндәйҙер һығымталарға килергә тырыша. Ысынбарлыҡтың, йәшәйештең төп айыштары хаҡында баш вата.

Әйтергә кәрәк, философияның үҙәк проблемаһы — аңдың бөтәбарлыҡҡа (бытие), фекерләүҙең материяға мөнәсәбәтендә М. Өмөтбаев нигеҙҙә материалистик ҡараш-та тора. Уның аңлауынса һәм аңлатыуынса, бөтәбарлыҡ, тәбиғәт объектив һәм үҙ алдына йәшәй. Ә кеше аҡылы шуны танып белә, фекерләүе менән тәбиғәттең серҙәренә һәм йәтеш ҡоролошона төшөнә. «Ғәжәйеп тау-таштар, йылға-шишмәләр, тереклектәр, үҫемлектәр — һәммәһе лә кеше аңына еткеле һәм һиммәтле», — ти М. Өмөтбаев. Быларҙы аңлауға кеше фән ярҙамында, шулай уҡ үҙе төшөнөүе һәм тәжрибәһе менән килә икәнен айырып әйтә. Тимәк, әҙип материяның — беренселлеген, аңдың икенселлеген таный, бөтәбарлыҡты танып белеү тәбигәтен күрһәтә.

М. Өмөтбаев тәбиғәт һәм йәмғиәт үҫеше нигеҙендә ятҡан диалектик эске бәйләнеш законлыҡтарын да яҡшы аңлай. Тәбигәттәге һәм йәмғиәттәге үҫеш-үҙгәрештәрҙе күҙәтә, шуларҙы өйрәнеү объекты итә. Һәр нәмәнең хәрәкәттә, ағышта булыуын, үҫеш, күсеш формаларын күп миҫалдар, ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр менән яҙмаларында дәлилләй. Күренештәрҙең эске тәбиғәтен, асылын үҙенсә аңлатырға тырыша.

Әммә ул ысынбарлыҡтың барлыҡҡа килеүен, тәүсәбәбен (первопричина) тәбиғәттең үҙенән сығып аңлатаһы урында быны сит бер мистик көскә — алла ҡөҙрәтенә ҡайтарып ҡалдыра. Шулай итеп, материализмдан объектив идеализм юлына ҡайырыла. Тимәк, уның материалистик ҡараштары ҡаршылыҡлы һәм эҙлекһеҙ төҫ ала. Донъяның яратылышын, әҙәмдең донъяға килеүен ислам тәғлимәте буйынса ҡабатлай. «Хоҙай был донъяла нисә-нисә йәнле вә йәнһеҙ нәмәләр бирмеш, — ти ул анһат ҡына.—

Вә әхирәтте кәсеп итергә ғаҡыл бирмештер. Ғаҡылды мәғрифәт вә дин ғилеме илә мәзен (тиң) ҡылмыштыр». Йәғни быҙдай ҡараштары менән М. Өмөтбаев ғилем менән динде үҙ-ара килештермәксе, бер-береһен ҡултырышыр һәм үҫештерер тәғлимәттәр тимәксе. Уның материалистик һәм идеалистик ҡараштарының ҡапма-ҡаршы һәм ҡаршылыҡлы үрелеп китеүенең бер сәбәбе һәм һөҙөмтәһе лә шунда. Дуализмға тарта йәнә.

Фән менән динде тиң һәм яраш күрсеүсе М. Өмөтбаев ике юллыҡ бер ҡитғаһында таҡрарлай:

> Китмәйән дәүләт кешегә дин илә ғилем камал,
> Ҡаһ килер, ҡаһ китер дар фатида кәнж мал.

Мәғәнәһе:

> Китмәҫ дәүләт кешегә, булмаһа дин менән ғилем камил,
> Бер килер ҙә бер китер ул был ғәләмдә хазина-мал.

М. Өмөтбаев шәрехләүенсә, фән тәбиғәт байлығын файҙаланыуҙа, йәмғиәттә прогресты тәьмин итеүҙә мөһим сара булһа ла, берҙән-бер түгел. Әҙәмдең камиллығы һәм һиммәте рухи, әхләҡи юғарылыҡ менән үлсәнер. Ә әхләҡ ҡанундарының бар йыйылмаһы — дин тәғлимәтендә. Береһе — мәғрифәттә. Әҙип халыҡтың борондан килгән әҙәп-әхләҡ ҡағиҙәләрен дин ҡанундарынан айырып ҡарамай. Уларҙы күпмелер тәңгәл күрә.

Шулай итеп, М. Өмөтбаев үҙенә тиклемге һәм үҙ заманындағы күп кенә философтар кеүек, ысынбарлыҡты танып-белеүҙә, донъяға ҡараш, әҙип-әхләҡ принциптарын формалаштырыуҙа дин өйрәтмәләренә лә таяна, фән менән динде киҫкен айырып йә ҡапма-ҡаршы итеп ҡарамай. Тимәк, философик ҡараштарында М. Өмөтбаев үҙ заманы улы, уның күндәм бер уҡымышлыһы булып ҡала. Күптәргә замандан уҙмыш юҡ.

«Бәғзе кемһәнәләрҙә дин ғилеме юҡ, заһид вә тәҡүәне риғайә ҡылмай донъяуи фәндәр илән ғаҡыл вә мәғрифәт бабында данешмәнд булып ни ҡәҙәр фәһем вә ран яҙһалар ҙа, тәснифтәре кафир вә мәкер вә һатдин хали түгелдер, — тип фәлсәфәгә төшөп китә М. Өмөтбаев. — Бының миҫалы Толстой хәкимдең тауфиҡ вә тәрбиә хаҡында яҙған бәхәсендә ҡатын алмаҡты ла ҡәбих эш күргән».

---

*Заһид вә тәҡүәне риғайә ҡылмай* — дин ҡушҡанды хөрмәт итмәй; *данешмәнд* — ғалим; *фәһем вә ран* — фәһемле нәмәләр; *тәсниф* — яҙғандары; *ҡәбих* — боҙоҡ.

Иҫкенең зауҡымы көслө әле бында.

М. Өмөтбаевтың философтарға ҡағылмыш бер шиғыры осрай.

Ете меңдер, бәлки, донъяны бел,
Ғөмөрө үтте философлыкта нәфи,
Алмаһындин һәм хәйәте булмағас
Алмаһы һәм философы бында юҡ.
Философтан күп дауа булһа фәрип,
Дәрттәргә ҡөрьән дауалыр, әй ғәрип.

Был шиғыр ниндәйҙер бер көнсығыш хикәйәте тәьҫирендә яҙылғанға оҡшай: хикәйәттән шиғри хикмәт сығарыла.

Уның бер осон беҙ М. Өмөтбаевтың «Йәдкәр» китабында баҫылған бер хикәйәттән барып табабыҙ. Ул атаҡлы «Әлиф ләйлә вә ләйлә» («Мең дә бер кисә») ғәрәп әкиәттәре сюжетынан, «Физиология» исемле рус журналында сыҡҡан хикәйәттән ирекле тәржемә ителгән. «Торба, балаҫ һәм алма хикәйәте» тип исемләнгән.

Хикмәтле генә хикәйәт ул. Сюжет тотмары былай: Бер алыҫ ҡалала бер батшаның өс улы булған, ти. Береһе Хөсәйен, береһе Ғәли, береһе Әхмәт атлы. Көндәрҙән бер көн был батша улдарын саҡырып алған да «Эй, улдарым, сәфәргә сығып, һәр ҡайһығыҙ донъяның ғәжәптәренән берәй нәмә килтерегеҙ. Ҡайһығыҙ тапҡан шәберәк булһа, фәлән батшаның Нурнәһәр исемле ҡыҙын алып бирермен», — тигән. Шунан улдары өсөһө өс тарафҡа сәфәр сыҡҡан. Бер заман Хөсәйене оса торған балаҫ алып ҡайтҡан, Ғәлие — фил һөйәгенән яһалған хикмәт торбаһы, Әхмәте — хикмәтле алма.

Был ғәжәйеп нәмәләрҙе атаһы һынамаҡ булған ти. Йыраҡты яҡынайта торған торбаны алып ҡараһа, Нурнәһәр исемле әлеге ҡыҙҙы күрҙе, ти. Белде: ҡыҙ сырхаулап киткән икән. Шунан тиҙ генә Хөсәйен алып ҡайтҡан балаҫҡа ултырып ҡыҙ янына осоп китәләр, ти. Батшаны күреп, ҡыҙын дауалап ҡарарға рөхсәт алдылар. Теге Әхмәт тапҡан хикмәтле алманы ҡыҙ танауына еҫкәткәйнеләр, Нурнәһәр күҙҙәрен асып, һуш алып һауыҡты ла китте, ти. Шунан ике батша килешеп, Нурнәһәрҙе кесе улы Әхмәт менән никахлап ҡоҙалар булышты, ти.

Был хикәйәт сюжеты менән хикмәтле алма хаҡындағы башҡорт әкиәттәрен хәтерләтеп тә ҡуя. Алмаға бағлы фәлсәфәһе лә оҡшаш.

Ҡылды ҡырҡҡа яраһы юҡ. Хикәйәттең хикмәт — фәлсәфәһен М. Өмөтбаев ғилем-хикмәткә килтереп бәйләй. «Әм-

---

*нәфи* — ситтә, һөрөлгән.

мә ғилем хикмәт (фән, философия — Ғ. Х.) был заманда шул ҡәҙәр камаләткә етешкәндәр, — ти ул, — хатта машинаһыҙ эштән, машиналы эштәр күберәктер. Мәҫәлән, ут арбалары һәм йоҡлата торған хлороформ исемле дауалар торба, балаҫ һәм алма урынына ярарлыҡтыр һәм әкиәт тә түгел.

Был заманда астролят көҙгөләре ср үлсәүендә ошондай уҡ камиллыҡҡа ирешеүҙер. Йәнә йондоҙҙарҙы ҡарай торған телескоп торбаһы шул ҡәҙәр йыраҡтан асыҡ күрһәтәлер. Мәҫәлән, ҡояш миллион саҡрым ер, бәлки артығыраҡтырҙа. Ундағы ут тауҙарының ҡиәфәтен һәм яман ут ялҡындарын күрәләр. Һәм айҙағы, йондоҙҙарҙағы диңгеҙҙәр вә тауҙарҙы күреп яҙалар».

Әҙип былай тигәне менән генә ҡәнәғәтләнеп ҡалмай. «Телеграф, ут арбаһы һәм хлороформ» тигән бәләкәй генә хикәйә яҙып ташлай. «Ҡазан ҡалаһында минең һөйгән ҡыҙым бар ине, — тип һөйләй герой. — Биш йөҙ саҡрымдан телеграф менән иҫәнлеген бер сәғәт эсендә белештем. Беләгенә яман шеш сыҡҡан икән. Табибтар: «Шеште киҫмәйенсә сәләмәтләнмәҫ», — тигәндәр. Әммә, ныҡ ауыртҡанлыҡтан, быны эшләргә ҡыйыусылыҡ ҡылмағандар.

Был хәбәрҙе алғас та мин, тимер арбаға ултырып, тиҙ арала Ҡазанға барҙым. Әммә ҡулымда философ алмаһы юҡ ине. Шул сағында табиб хлороформ тигән дарыуҙы — аҡһыл һыуҙы — минең ҡулъяулығыма ҡойоп, ҡыҙҙың танауына еҫкәтте. Табиб, шеште киҫеп, дауа ҡылды. Дауа ҡылыу тамам булғандан һуң, ҡыҙ уянды һәм бер нисә көн эсендә сәләмәтлеккә ирешә. Алма дәләләте кеүек, был һәм сәләмәтлеккә дәләләт булды».

Был хикәйә һәм алда килтерелгән шиғыр әҙиптең архивында ҡулъяҙма көйө ятып ҡалған.

Шуныһы ҡыҙыҡ, был әҫәрҙәр жанры буйынса әкиәттән хикәйәткә, хикәйәттән хикәйәгә, хикәйәнән шиғырға күсә бара, фантастика реаллек, булған ваҡиға менән ялғана.

Шуның шикелле М. Өмөтбаев ҡай бер философик ҡараштарын дини легендаларҙан һәм боронғо хикәйәттәрҙән сығып белдергән тәҡдирҙә лә идеалистик йә ярым идеалистик фекерҙәрҙән материалистик фекерләүҙәргә, реаль тормоштоң һәм тәжрибәнең үҙенә килеп сыға. Тормош, тәжрибә уны материалист, айыҡ ҡарашлы фекер эйәһе итмәй ҡалмай.

## 3

XIX быуаттың һуңғы сирегендә Башҡортостанда әҙәби-культура хәрәкәте һәм ижтимағи фекер үҫеше шаҡтай йәнләнә бара. Башҡорттар араһынан М. Рәмзи, Р. Фәхретдинов, Ғ. Салихов кеүек йәш ғилем эйәләре майҙанға сыға. Улар Урал — Волга регионы тарихын, Башҡортостан тарихы һәм культураһын эҙмә-эҙлекле өйрәнә башлайҙар. 1891 йылда Диниә назаратында ҡазый булып эшләй башлаған Риза Фәхретдинов башҡорт һәм татар уҡымышлыларының тормошо һәм ижады тураһында биобиблиографик хеҙмәте «Аҫар»ға материал туплай. М. Өмөтбаевтан һуңырaҡ Ырымбур кадет корпусын тамамлаған икенсе бер башҡорт уҡымышлыһы Әбүбәкер Диваев Урта Азияға китеп, үзбәк, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ халыҡтарының этнографияһын, фольклорын, рухи байлыҡтарын йыйған, өйрәнгән һәм китап итеп баҫтырып сығарған ҙур ғалим булып танылa. Минзәлә башҡорто Кәшәфетдин Шаһирмәрҙән (1840—1910) Ҡаҙағстанда мәғрифәт таратып, төрлө хикәйәт йыйынтыҡтарынан, әҙәби уҡыу ҡулланмаларынан торған утыҙлап китаптың авторы булып ҙур шөһрәт ҡаҙана.

Ошондай йәш ғалимдар эшмәкәрлегендә, Ғ. Соҡорой, М. Аҡмулла, шул уҡ Р. Фәхретдинов ижадтарында мәғрифәтселек рухы менән һуғарылған демократик ҡараштар баҙыҡлана.

Әҙәбиәттең үҙендә башта иҫке рухлы традицион йүнәлеш өҫтөнлөк алған булған, быуат аҙағына табан мәғрифәтселек йүнәлеше алға сыға, урта быуатсылыҡ әҙәбиәтенән яңы тип әҙәбиәткә күсеш билдәләнә.

Ошо ҡатмарлы күренеште, ижади эволюцияны тулыраҡ сағылдырыу яғынан Ғәли Соҡорой (1826—1889) ижады айырылыбыраҡ тора. Ғ. Соҡорой — бер яҡтан, суфыйсылыҡ ағымын, Т. Ялсығол, Ғ. Усман, Ә. Ҡарғалы, Ш. Зәки поэзияларынан килгән традицион йүнәлеште дауам иткән шағир. Икенсе яҡтан, ижадында реалистик принциптарға нығыраҡ таяна башлаған, яңылыҡты тойомлаған заманса әҙип. Ул Башҡортостан ысынбарлығын, халыҡтың тарихын, көнкүрешен, рухи донъяһын, айырым шәхестәрен, конкрет тарихи, милли ерлектә реалистик яҡтыртыуға етди ынтылыштар яһаған яҙыусы. Уның теҙмә һәм сәсмә әҫәрҙәре уңға яҡын баҫма китаптарына тупланған. Ҡулъяҙма көйө ҡалғандары күп. «Тәуарихи Болғариә йәки тәкриби Ғари» («Болғар тарихтары йәки Ғариҙың яҡынса аңлатмалары») тигән хеҙмәтендә ул Мөслими, Т. Ялсығолдарҙан килгән тәуарих жанры тради-

цияларын, Болғар, башҡорт тарихын хикәйәттәр, легендалар формаһында сағылдырыуын уңышлы дауам итте. Ул үҙенең туған Ҡара Табын ырыуы шәжәрәһен шиғыр менән яҙып сыҡты, башҡорт шәжәрәләренең поэтик традицияларын үҫтерҙе.

Башҡорт поэзияһының яңы йүнәлешенең, мәғрифәтселек реализмының тыуыуы һәм нығынып китеүе, иң беренсе сиратта, Мифтахетдин Аҡмулла (1831—1895) исеме менән бәйле ине. Ул үҙенең булмышында иҫкелек менән яңылыҡ көрәшенең сая һәм драматик, хатта трагик яҡтарын, шиғриәтендә боронғо традицион әҙәбиәттән яңы әҙәбиәткә күсештең бороломло моменттарын, ҡыйыу новаторлыҡ башланғыстарын сағылдырған шағир булыуы менән фәһемле. Поэзияла ул реалистик, халыҡсан-демократик йүнәлештә нигеҙләй, яҙма һәм ауыҙ-тел әҙәбиәте традицияларын оҫта берләштерә, поэтикаға күп яңылыҡтар өҫтәй. Хитап, шиғри мөрәжәғәт рәүешендә сығарылған «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» шиғырындағы «Ырыҫ, дәүләт шишмәһен асам тиһәң, ғилем-һөнәр берҙән-бер әмәл булыр» тигән мәғрифәтле ҡараш уның поэзияһының арҡау ебе булып үтә. Ошо позициянан тороп, кеше ҡылығындағы һәйбәт яҡтарҙы, изге күңелле, уҡымышлы, итәғәтле кешеләрҙе ололай, ғилем, һөнәргә өндәй, ҡара эсле, яуыз уйлы бәндәләрҙе, залим түрәләрҙе, наҙан мулла-моңтағайҙарҙы рәхимһеҙ тәнҡитләй. Үҙе әйтмешләй, уның «тура һүҙе — берәүгә им, берәүгә ыу» ул.

Ишмөхәммәт сәсән, Ғәбит сәсән, Муллағол Диуана кеүек исемдәре киң билдәле сәсәндәрҙең поэзияһы халыҡ араһында шөһрәт ҡаҙана.

XIX быуаттың һуңғы сирегендә Башҡортостанда проза жанрының торошон Хәбибназар Стәрлененең «Нәуадир тәржемәһе», В. В. Радловтың уҡыу китабы рәүешендә сыҡҡан «Белек» йыйынтығы; Ғ. Соҡоройҙоң «Хажнамә», Р. Фәхретдиновтың «Сәлимә йәки Ғиффәт», «Әсмә йәки ғәмәл вә яза» тибындағы китаптар билдәләй. Был китаптарҙың тәүге икеһе хикәйәт, ҡисса, хикәйә жанрҙарынан ғибәрәт булып, Ғ. Соҡоройҙоң китабы хажнамә, сәйәхәтнамә жанры икән, Р. Фәхретдинов әҫәрҙәре иһә повесть жанрына ҡарауы менән, йәғни жанр төрлөлөктәре, реалистик, тормошсан йөкмәткеләре менән иғтибарҙы биләй. Тимәк, был осорҙа реалистик характерҙағы милли проза ла нығынып килә. Драматургияның тәүге башланғыстары күренә.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев Башҡортостандағы бындай әҙбәи-культура күренештәрен, үҫеш тенденцияларын күрепбелеп тора, әлбиттә. Баҫылып сыҡҡан китаптары менән

генә түгел, авторҙарҙың байтағы менән үҙе яҡындан таныш. Риза Фәхретдинов менән бергә эшләй, көн дә күрешеп, әңгәмәләшеп йөрөй. Аҡмулла менән осраша. Ғәли Соҡорой менән Хәбибназар хатипты ла күреп белгән булырға тейеш. М. Өмөтбаев Диниә назараты йомоштары менән өйәҙ, волостарға йыш сығып йөрөгәндә исемдәре билдәле, бигерәк тә әҫәрҙәрен уҡыған әҙиптәр, ғалим-ғөләмәләр, сәсәндәр менән танышырға, бәйләнеш булдырырға тырышҡан зат.

4

Өмөтбаевтар Өфөнөң үҙәгендәге Архирей биҫтәһенә Андрей Кондратьев тигән кешенең иркенерәк йортона күстеләр. Фатирҙары өс ҙур бүлмәле. Аш-һыу урыны айырым. Иң мөһиме, Мөхәммәтсәлимдең хәҙер үҙ эш урыны бар. Унын эш өҫтәле, диван һәм бер креслонан ҡала тирә яғын, өс стенаһын китап шкафтары уратып алған. Китаптарына ҡарап хужаның ниндәй фәндәр менән мауығыуын, шөғөлөн, зауыҡтарын еңел тоҫмалларға мөмкин. Уң ҡулдағы ҙур шкаф тулы күбеһе күк тышлы ҡалын-ҡалын ҡамус, лөғәт, тәфсир, ислам, дин ғилеме, поэзия, тәзкирә китаптары. Башлыса ғәрәп, фарсы, төрки телдәрендәге баҫмалар. Һул ҡулдағы ике шкаф тотошлай тиерлек йә сафъян, йә төрлө бутал тышлы рус телендәге фолианттарҙан — хөкүмәт закондары йыйынтыҡтарынан, һүҙлектәрҙән, тарих, экономика, философия, тел ғилеме, әҙәбиәт китаптарынан ғибәрәт. Бүтән фәнни йыйынтыҡтар, журнал төпләмәләре бар. Яҡында, ҡул осонда кескәйерәк форматтағы баҫмалар, дәреслектәр, ҡулланмалар. Өҫтәл өҫтө яҙмалар, яңы газета-журналдар менән тулы.

Былар М. Өмөтбаев шәхси китапханаһының ҙур бер өлөшө генә. Ҡалғаны — Ибраһимда. Унда ла өс-дүрт шкаф китап. Былары, күрәһең, йәй ауылда йәшәгәндә уҡыр, эшләр өсөн кәрәкле баҫмалар. Ауыл халҡы ла Мөхәммәтсәлим хәҙрәттән китап алғылап уҡырға ғәҙәтләнгән. Кем теләй, ҡыҙыҡһына — рәхим итһен. «Ул донъя малына ҡыҙа торған кеше түгел ине, — тип яҙа Гөлсөм Ибраһимова Мөхәммәтсәлим бабаһы хаҡында. — Мал-әйбер йыйманы. Ул үҙе, минең иң ҙур байлығым бына ошолар инде, тип кәштәләрҙәге, шкафтарҙағы китаптарын, төрлө-төрлө яҙ-

---

*ҡамус* — энциклопедик характерҙағы һүҙлектәр, белешмәләр; *тәзкирә* — художестволы әҙәбиәт йыйынтыҡтары.

маларын күрһәтер ине. Ул саҡ мин китап та булған икән байлыҡ, тип уйлай торғайным».

Донъяла туймаç ике төр әҙәм бар, ти ғәрәп мәҡәле: береһе — белемгә туймаç ғалим, икенсеһе — байлыҡҡа туймаç серегән бай» (Өмөтбаев күсереп алған яҙмаларҙан).

Өфөгә күскәс, М. Өмөтбаев китаптарҙы даими йыя башланы. Уға тиклемгеһе, ара-тирә тупланып, байтағы ауылда, төрлө ерҙә таралыбыраҡ ҡалды. Мәскәүҙә, Петербургта булғанда һирәк осрар байтаҡ китаптар алып ҡайтты. Ҡырымда эшләгәндә үҙе ҡыҙыҡҡан, күргән берен һатып ала килде. Хажға барған туғандары, дуçтары уның үтенесе буйынса Стамбулда, Таһаранда, Ҡаһирәлә сыҡҡан бик кәрәк баçмаларҙы алып ҡайтып бүләк иткеләнеләр. Үҙе илебеҙҙә — Мәскәүҙә, Петербургта, Өфөлә сыҡҡан матбағаға даими яҙылып, һәр саҡ таныша һәм туплай барҙы. Китап, газета-журнал тигәндә аҡсаны ла, ваҡытын да тамсы ла йәлләмәне.

«Донъяла ғилемдән ләззәтле шир юҡ, ә ғилемдең икмәге китаптыр» — тип яҙҙы М. Өмөтбаев. Был тапҡыр һүҙҙәр уның ижад әләменә әүерелгәйне күптән.

Ана шул туплаған китап, рухи байлығына таянып, М. Өмөтбаев Өфөлә ғилем эше менән төпләнеберәк шөғөлләнде хәҙер.

Бар белемен һәм тәжрибәһен ғилемгә бирергә форсат күптән еткәйне уға.

Оло йортҡа ни кәрәк, кесе йортҡа шул кәрәк.

Халыҡтың шул мәҡәлен дә өлгө итеп ала М. Өмөтбаев (Ҡулъяҙмаларында уны ике урында айырыбыраҡ яҙып ҡуя). Европа, Азияның, Россияның, оло йортло мәҙәниәтле халыҡтары кеүек, Башҡортостан, башҡорт халҡы кеүек кесерәк ил-йорттар өсөн дә шунса ғилем, мәҙәниәт, әҙәбиәт кәрәклеген белеп, оло маҡсаттар ҡуйып эш итә ул. Башҡорт халҡының да үҙ тарих фәне, әҙәбиәт, тел ғилеме, бүтән фән тармаҡтары булһын. Уҡымышлылары араһынан үҙ Карамзиндары, Ломоносовтары, Пушкиндары сыҡһын. Үҙ Әфләтундары, Мәржәниҙәре лә булырға тейеш.

Оло йортҡа ни кәрәк, кесе йортҡа шул кәрәк: кисектергеһеҙ ихтыяждан, яңы йорт ҡороп ингән крәçтиән кеүек, төрлөһөнә тотона Өмөтбаев. Тарихына, әҙәбиәтенә, тел ғилеменә, бүтәненә. Уға эреһе-вағы юҡ. Заман рухы һәм традициялар ҙа шуны талап итә. Ғөмүмән, көнсығыш ғилеменең һәм әҙәбиәтенең әүәл-әүәлдән килгән баҙыҡ традициялары аҡыл эйәһенән ғалим, әҙип, хаким исеменә лайыҡ киң һәм төрлө белемгә эйә булыуҙы һорай.

Әүәл Урал-Волга буйҙарында йәшәгән атаҡлы ғалим-ғөләмәләргә ҡарата һәр фәнгә маһир уҡымышлы йәки мөтәфәннин, йәғни энциклопедик ҡарашлы ғалим тигән атама һәм баһа киң таралған булған. М. Өмөтбаев «Ағиҙел буйындағы ғөләмә вә мәшәйехтәр» исемле мәҡәләһендә шундай уҡымышлыларҙың йәки мөҙәристәрҙең атаҡлыларын мөтәфәнниндәр тип атай. «Европа халҡының һүҙҙәре» тигән белешмәһендә фән өлкәһендәге бындай төшөнсәләргә ул шундайыраҡ аңлатма бирә: «Мәғлүмдер ки, һәр фәндең мөжтәһид вә камил маһирын юнан халҡы ҡәҙимдән философ тимештер. Был заманда ғәрәп халҡы хаким тиһә, Европа халҡы доктор тиер... мәшриҡ лөғәтенә маһир кемһәнәне ориенталист тиерҙәр. Лөғәттәргә фикли рәғиҙе гуманлылыҡ, йәғни инсаниәт тиерҙәр».

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың күп яҡлы ижади-фәнни эшмәкәрлеге, төрлө фәндәргә маһирлығы уны мөтәфәннин, йәғни энциклопедигик ҡарашлы ғилем эйәһе һәм әҙип тип әйтергә тулы мөмкинлек бирә. Уның был сифаттары туҡһанынсы йылдарҙа тамам асыҡланып етә. Быны энциклопедик характерҙағы «Йәдкәр» китабы үҙе үк раçлап тора. Бында ул тарихсы, әҙәбиәтсе, телсе, фольклорсы, шағир һәм әҙип булып алға баса. Оло йортҡа ни кәрәк, кесе йортҡа шул кәрәк икәнен «Йәдкәр» миниатюр формала дәлилләй кеүек.

Авторҙың ике ҙур маҡсатты алға ҡуйып эш иткәне айырым-асыҡ: береһе — туған халҡын фән, педагогика нигеҙҙәре менән күпмелер таныштырыу, икенсеһе — башҡорттарҙың тарихын, этнографияһын, фольклорын, мәҙәниәтен тикшереп ҡарау. Шуға күрә китап ифрат бай мәғлүмәт туплаған, башҡорт гуманитар ғилеменә нигеҙ таштары һалышҡан хеҙмәт кеүек ҡабул ителә лә.

Боронғо грек мифологияһында фән менән сәнғәт хаҡында бер миф бар. Фән менән сәнғәттең туғыҙ музаһының һәр береһен ҡурсалар үҙ илаһиҙары булған, имеш. Астрономиянығы — Урания, сәнғәттеке — Калиона, тарихтыҡы — Клио, поэзиянығы — Эрато илаһиәһе һ. б. Шул музалар бер саҡ ҙур тауға йыйылалар һәм аҡыл эйәләренә һыйыныр һәм бағындырыр булғандар, ти.

«Йәдкәр» авторының ғилем даирәһе һәм һәләте шул музаларҙың байтағына бағлы.

---

*мөжтәһид вә камил маһиры* — тырыш һәм камил оçта (белгес), *лөғәт* — тел; *бергел* — халыҡ белгесе; *инсаниат* — кешелеклелек.

Ҡәрәк тирәкте йыға.

Тарих тирәгенә Өмөтбаевтың нисегерәк тотоноуын тарих буйынса эштәрен байҡағанда күпмелер күреп үткәйнек инде.

Фән ҡалын урман икән, башҡорт ғилеме — торғаны бер ҡарурман ул. Бөтөнләй тейелмәгән, өйрәнелмәгән төбәктәре күп.

Халыҡ ижадын, әҙәбиәтен, ыҙан-йолаларын ал — үҙе төбәк-төбәк тылсымлы бер рухи донъя, халыҡтың күңел тарихы бит. Халыҡтың моңло, һағышлы оҙон йырҙарын тыңлап, үҙе лә йырлап, М. Өмөтбаев уның аһ-зарына күпме болоҡһоманы ла күңел күркенә күпме һоҡланманы икән. Әкиәттәрен, легендаларын, риүәйәттәрен аҙмы тыңлаған тиһең. Башҡорт мәҡәл, әйтем һүҙҙәрен, һынамыштарын отоп алып, халыҡтың аҡыл, һынсыл ҡеүәһенә таң ҡалмаҫ булырмы. Поэтик эпосынан, ҡобайырҙарынан тарих өнөн ишетмәй булмаҫ.

Тыңлағандан йүнләгән артыҡ. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, әҙип кеше, тыңлап, әҫәрләнеп кенә ҡалмаған, әлбиттә, күбеһен күңеленә, зиһененә һеңдереп, байтағын ҡәләм осона алған. Бына ул 1883 йылда сыҡҡан «Справочная книга Уфимской губернии» тигән белешмә китабында Өфө губернаһы мосолмандарының һынамыштарын, мәҡәл-әйтемдәрен һәм хикмәтле һүҙҙәрен рус теленә тәржемә итеп баҫтырған. Шунда уҡ халыҡ исеме менән поэтик эпостан, ҡобайырҙарҙан матур үрнәктәр урынлаштырған. Тарихи-этнографик хеҙмәттәрендә теге йәки был тарихи ваҡиғаны йәки ғәжәйеп күренеште халыҡса дәлилләү өсөн легендаларҙы, риүәйәттәрҙе оҫта файҙаланған.

Ғилем әйәһе кеше ҡайбер фекерҙәрен раҫлағанда яйы тура килгәндә халыҡ мәҡәлдәрен йәки көнсығыш хаҡимдарының хикмәтле һүҙҙәрен бик йәтеш кенә ҡушып ебәрергә ярата. Ғилеменә елеме йәбешеп китә. Халыҡтың рухи донъяһын toймай, поэтик ижадына ҡолаҡ һалмай, уның тормош, этнографияһын, культураһын төплө төшөнөп булмай икәнен тәрән белеп эш итә ул М. Өмөтбаев.

Йыйғандан фәһемләгән яҡшы. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев башҡорт халыҡ ижады өлгөләрен йыйыу, файҙаланыу өҫтөнә уларҙы ғилми яҡтан өйрәнгән һәм башҡорт фольклористикаһына нигеҙ һалышҡан уҡымышлыларыбыҙҙың береһе. Ул айырыуса поэтик эпосҡа һәм йыр, легендаларға ҙур әһәмиәт бирә.

Башҡорттарҙың боронғо эпосын М. Өмөтбаев «өләң» термины менән билдәләй. «Башҡорттарҙың боронғо йыры

өләң тип атала, — ти ул. — Өләң — ул хикәйәт, йәғни эпос... Өләң йырҙарында батырҙарҙың ҡаһарманлығы һәм хандарҙың уландарына өгөт-нәсихәттәре йырланған».

Хәҙерге башҡорт фольклористикаһында поэтик эпосты «ҡобайыр» исеме менән атау нығынған. Халыҡ прозаһы, уның айырым жанрҙары хикәйәт исеме менән йөрөй. «Өләң» термины хәҙер ҡаҙаҡ фольклорында лирик йыр, шиғырға ҡаратараҡ ҡулланыла. Борон башҡорттар араһында ла был «өләң» һүҙенең эпосҡа йәки эпик йыр формаларына ҡарата ҡулланылған булыуы бик мөмкин. Ләкин ул һуңынан онотолған йә икенсе исем менән киткән.

Хикмәт, әлбиттә, терминда түгел, эпостың тәбиғәтендә. «Бөтә башҡорт батырҙары өләндәрҙә йырлана: мәҫәлән, Мораҙым, Заятүләк, Сура батыр һәм дары еҫен аҙ еҫкәгән бүтән күп кенә батырҙар, — тип яҙа М. Өмөтбаев.— Өләң йәки башҡорт эпосы осоро иһә, башҡа европалыларҙыҡы кеүек үк, батырҙар дәүере менән тамамлана. Ҡырғыҙҙарҙа (ҡаҙаҡтарҙа — Ғ. Х.) өләң йыры хәҙерге ваҡытта ла беренсе урында тора. Ләкин улар үҙҙәре ябай йырҙарҙы өләндәрҙән айырмайҙар, шуға ла бөтәһен рәттән өләң тип атайҙар. Ә башҡорттарҙа өләң хикәйәтте, йәғни эпосты аңлата, мәҫәлән, «Игорь полкы тураһында һүҙ» кеүек. Песня башҡорттарҙа йыр тип атала».

М. Өмөтбаевтың алдағы һәм әлеге аңлатмалары буйынса, башҡорт эпосын йөкмәткеһенә һәм эске тәбиғәтенә ҡарап, батырҙар, дары еҫен аҙ еҫкәгән батырҙар һәм өгөт-нәсихәт төркөмдәренә бүлеүҙе күрергә була. Хәҙерге фольклористика ғилеме лә нәк ошондай классификацияны таный һәм батырҙар, мөхәббәт, өгөт-нәсихәт хаҡындағы ҡобайырҙарға бүлеп ҡарай.

Йәнә шунығы мөһим: М. Өмөтбаев башҡорт эпосының батырҙар дәүере менән тамамланыуын билдәләй. Был тезисты хәҙерге фольклористика ғилеме лә раҫлай. Башҡорт уҡымышлыһы өләндәрҙең аҙаҡ йырҙарға урын биреүен бик зирәк тотоп ала, шул эволюцияны асыҡ күрә. «Ләкин власть ныҡлап урынлашҡан һәм башҡорттар төрлө халыҡтар менән аралашҡан ваҡыттан алып өләң йырҙары дүртәр юллы лирик рифмаларға әүерелде», — тип яҙа ул.

Мәҡәләләрендә М. Өмөтбаев башҡорт йырҙарына ярайһы ғына характеристика бирә. Тормош-көнкүреш, мөхәббәт йырҙары хаҡында яҙа. Шулар араһынан атаҡлы «Ашҡаҙар» йырын айырып күрһәтә. Элеккерәк йырҙарҙан һуғыш, һалдат, кантон йырҙарына, легендалы йырҙарға туҡтала. «1812 йылғы һуғыш тураһындағы хикәйәттәр, ри-

уәйәттәр, легендалар һәм йыр-көйҙәр башҡорттарҙа бик күп, — тип яҙа ул. — Йыр-көйҙәрҙең күбеһе, ғәҙәттә, ҡурайҙа башҡарыла. Мәҫәлән, генералдар Бахмутов менән Марковты, барон Розенды, кенәз Кутузовты һәм башҡаларҙы данлаған йырҙар шундайҙарҙан. Хәрби губернаторҙар Перовскийға, Волконскийға, Сухтелинға, Эсенға, ғәскәр командующийҙары Циалковскийға, Жуковскийға, Балкашинға һәм, типтәр һәм башҡа припущенниктарҙы ҡушып, 28 китап барлыҡҡа килгәнгәсә булған 12 кантон башлыҡтарына арналған йырҙар ҙа ҡурайҙа уйнала. Был йырҙар йылдан-йыл онотолоп бара». Ысындан да, М. Өмөтбаев йәшәгән заманда йырлап йөрөгән был йырҙарҙың күбеһе беҙҙең көндәргә килеп етмәгән, онотолоп-юғалып ҡалған. Күренеүенсә, башҡорттар башҡорт ғәскәренең һәр бер командующийына, генералына, генерал губернаторҙарға махсус йыр бағышлар булған. Ләкин уларҙың күбеһенең эйәләре менән бергә йырҙары ла аҙаҡ онотолған.

Һәр бер кантонға сығарылған йыр ҙа бөгөнгәсә һаҡланмаған.

Тарих, халыҡ хәтере иләге эреһен — эрегә, вағын — ваҡҡа иләй торған...

Хәҙерге йырҙарҙан тип, М. Өмөтбаев бер һалдат йырына үткер аңлатма биреп үтә. «Быларҙан тыш хәҙерге ваҡытта ижад ителгән башҡорт йырҙары бар, — ти ул. — Шундай йырҙарҙың береһендә үрелгән сәсле һалдат телгә алына. 25 йыл хеҙмәт иткәндән һуң өйөнә әйләнеп ҡайтҡас, үтә ҡартайған әсәһе уның сәсен үрә һәм улына уның менән тиҙҙән буласаҡ осрашыу тураһында күргән төшөн көйләп һөйләй.

Күрәһең, башҡорттарҙан һалдатҡа алыныусылар әбей батшалар осоронда ла күп булған. Сөнки башҡорттарҙы енәйәттәре өсөн күп ваҡыт ошо рәүешле хөкөм иткәндәр: «Яраҡлы икән — һалдат хеҙмәтенә, яраҡһыҙ икән — Себергә!» Был һүҙҙәр уларҙың хәтерендә оҙаҡ ҡалыр әле».

Йыр әйтә тип, үҙенең ҡәтғи һүҙен дә әйтә бит ғалим.

Байтаҡ ҡына легендалар ишеткән һәм яҙып алған булған. 1812 йылғы Ватан һуғышы батыры Абдрахман хаҡындағы легендалар унда ҙур ғорурлыҡ тойғоһо уятҡан. Асылыгүл ише күлдәр хаҡындағы легендаларға, Заятүләк йыр-өләңенә һәм легендаларына, Балҡан һәм Нарыҫ тауҙары тураһындағы йырлы легендаларға иғтибар итә ул. Әммә үкенестәрен дә белдермәй ҡалмай: «Ләкин ваҡыт булмау арҡаһында, мин Өфө губернаһындағы хәҙерге башҡорттарҙың ошондай легендаларын, йыр-өләңдәрен, ғөмүмән, әҙәби ҡомартҡыларын йыя алмайым. Быны өсөн бөтә губернаны гиҙеп сығырға кәрәк. Ә Башҡортос-

танда әҙәби ҡомартҡылар, бигерәк тә шиғри әҫәрҙәр һәм йырҙар етерлек. Ләкин улар бик аҙ йыйылған»,— ти ул.

«Башҡортостанда әҙәби ҡомартҡылар, бигерәк тә шиғри әҫәрҙәр етерлек».— М. Өмөтбаевтың был раҫлауы айырым иғтибарға лайыҡ. Тимәк, улар күп булған. Әҙиптең Өфөләге һәм Ибраһимдағы бай шәхси китапханаһында ҡулъяҙма әҙәби ҡомарҡыларҙың ишле булыуына ла шик юҡ. Тик шуныһы йәл: атаһынан улына күскән был китапхана, уның ҡулъяҙма китаптары ла, Баязит 1925 йылда вафат булғас, таралып тәләф булып бөткән.

Яҙмаларында, мәҡәләләрендә телгә алыуына, шиғри цитаталар килтереүенә ҡарағанда, М. Өмөтбаевтың китапханаһында көнсығыштың классик әҙиптәренән Фирдәүсиҙең, Сәғҙиҙең, Хафиздың, Низамиҙың, Науаиҙың, Бабурҙың баҫма һәм ҡулъяҙма китаптары урын алырға тейеш. «Әлиф ләйлә вә ләйлә», «Бабурнамә», «Сохайлы», «Сәйфелмөлөк» кеүек әҙәби әҫәрҙәргә йыш мөрәжәғәт итә ул. Авторҙары билдәһеҙ ҡулъяҙма мәжмуғалар, диуандар менән ҡыҙыҡһына. Уның архив фондында, нисектер, һаҡланып ҡалған боронғо бер хикәйәттәр мәжмуғаһы ҡулъяҙмаһына «ошбу китапты уҡып идраҡ ҡылдым... 1888, 24 август» тип яҙып ҡуйған. «Ошбу китаптың эйәһе Ниғматулла бин Көҫәпҡол Әхмәт бин Нурый» тигән белешмә янына «Эстәрле өйәҙе Үтәгән ауылы түгелме?» тип һорау һүҙе өҫтәгән.

Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ» поэмаһы М. Өмөтбаевтың яратып уҡыған һәм яттан һөйләп йөрөгән әҫәре. «Башҡорттар талантлы шағир тарафынан шиғыр менән төрки телендә яҙылған «Йософ вә Зөләйха» романын айырыуса ҡәнәғәтләнеп уҡыйҙар» — тип яҙа ул был әҫәр хаҡында.— Әгәр ҙә был поэзия үрнәге рус теленә тәржемә ителмәгән икән, был, моғайын, Йософтың тарихы күптәргә мәғлүм булған өсөн генә». Бында ул Йософ сюжетының «Библия», «Ҡөрьән», көнсығыштың Фирдәүси, Хәмзә, Яхия, Дүрбәк, Ғәндәлиф һ. б. шағирҙары поэмалары аша билдәле икәнен күҙ уңында тота булыр.

«Изгеләр тураһындағы башҡа күп кенә китаптар ҙа, шулай уҡ батырҙар, батшалар һәм хәлифәләр хаҡындағы байтаҡ фарсы һәм ғәрәп тәржемәләре уртаҡ»,— тип яҙа икән Өмөтбаев башҡорттар араһында ирекле тәржемә йәғни тәзкирә рәүешендә ижад ителгән уртаҡ һәм күсмә сюжетлы дастандар, ҡиссалар, хикәйәттәр хаҡында һүҙ йөрөтә. Уларҙан «Сәйфөлмөлөк», «Йән Таһир вә йән Зөһрә» яҙма ҡомартҡыларын исемләп үтә.

---

*идраҡ ҡылыу* — уҡып төшөнөү, фәһемләү.

«Мәғлүм булыуынса, халыҡтарҙың әҙәбиәте күберәген ил башлыҡтарының һәм түрәләренең тырышлығы менән йыйыла һәм өйрәнелә» — ти Өмөтбаев. Башҡорттар араһында был эштең әле тейешенсә юлға һалынмауына, ориенталистарының да быға иғтибары аҙлығына бошона. «Ә бит уларҙың (башҡорттарҙың—Ғ. Х.) араһында «Ҡөрьән»гә тарихи аңлатма биреүселәр ҙә, шиғыр ижад итеүселәр ҙә, әхләҡи-этик тарихтар яҙыусылар ҙа, хатта ғәрәп грамматикаһын төҙөү һәм төрлө фән тармаҡтары өҫтөндә эшләүселәр ҙә булған, — ти ул. — Мәҫәлән, мөдәрис Абдрахман уҡытҡан бер заманда Ырымбур Ҡарғалыһы рухани һәм донъяуи фәндәр үҙәге булараҡ Бохараның үҙенән һис тә ҡалышманы».

Ырымбур Ҡарғалыһы поэтик мәктәбенән М. Өмөтбаев ике әҙипкә ныҡыраҡ диҡҡәт бирә. Әбелмәних Ҡарғалыға һәм Һибәтулла Салиховҡа. Уларҙың күңеленә ятҡан шиғырҙарын күсереп ала, Һ. Салиховтың атаҡлы «Тәндә йәнем...» тигән шиғырын яттан һөйләргә ярата. Шуны ла айырып әйтә ул: «Быларҙан тыш шиғыр ижад итеүселәр һәм прозала өгөт-нәсихәттәр һәм кәңәш-күрһәтмәләр яҙыусылар күп. Шуларҙан Һибәтулла, мәҫәлән, үҙе менән бер осорҙа йәшәгән башҡорт ғәскәрҙәре башлыҡтарына һәм бер ҡатлы башҡорттарға шиғри сатиралар яҙған. Ул күптән түгел генә үлде».

М.Өмөтбаев Тажетдин Ялсығол-Башҡорди ижады менән мөкиббән. «Әфтиәк»кә аңлатма яҙған аҫаба башҡорто Тажетдин Ялсығол шәриғәт ғилемен белеүе менән бигерәк тә айырылып тора, — ти ул. — Ул шулай уҡ дин догматы «Çөбәтелғажизын"ға «Рисаләи Ғәзизә», йәғни уның ятҡан үҙ ҡыҙы «Ғәзизә хаты» исеме аҫтында шәрехнамә яҙған». Был әҫәрҙәрҙең фәлсәфәи характерҙа булыуын, поэтик яҡтарын билдәләй. Т. Ялсығолдоң «Тәуарихи Болғария» китабынан Әй башҡорттарының шәжәрәһе өлөшөн «Йәдкәр» йыйынтығында баҫтырып сығара.

Сәсән тәбиғәтле әҙиптәрҙән М. Өмөтбаев Хөснөтдин Жданов, шағир Аҡмулла эшмәкәрлегенә юғары баһа бирә. Аҡмулланың шиғырҙарын үҙ дәфтәренә күсереп ала, байтағын хәтерҙән белә. Уға мәшһүр шағир менән Өфөлә шиғри әйтешкә инеү бәхете тейә.

Мөхәммәтсәлим ҡулъяҙма поэзиянан бик күп шиғырҙарҙы яттан белгән. «Атайым мәрхүмдең (Сөләймәндең) һөйләүенә ҡарағанда, — тип хәтерләй Ғ. Ибраһимова, — Сәлим бабай шиғырҙарҙы гел яттан һөйләгән. Сәғәттәр буйы китапҡа ҡарамай һөйләүен күреп, кешеләр аптыраша торған булғандар».

М. Өмөтбаевтың мәҡәләләренә һәм яҙмаларына ҡа-

рағанда, Урал — Волга буйы төрки әҙәбиәтен, башҡорт әҙиптәре ижадын яҡшы белгәнлеге, уларға тәүгеләрҙән булып, системалы бер ҡараш һәм конкрет фекерҙәр әйткәне күренә. Тимәк, әҙәбиәт ғилеменә лә ишек асыла.

## 6

Ете илдең телен бел, ете төрлө белем бел, ти халыҡ. М. Өмөтбаев ана шулай ете илдең телен белер, ете төрлө белемгә эйә уҡымышлы. Уның фарсы, ғәрәп, рус телдәрен камил белеүе беҙгә яҡшы мәғлүм. Ул татар менән татарса, ҡаҙаҡ менән ҡаҙаҡса, уйғыр менән уйғырса ла еңел һөйләшкән. Тәржемәсегә телдәр белеү үҙенән-үҙе фарыз тиерҙәр, бәлки. Әммә М. Өмөтбаев тәржемәсе генә түгел, телдәр белгесе — ғалим-филолог кеше. Ул татар, фарсы, рус грамматикалары авторы, фарсы-төрки, фарсы-төрки-рус һүҙлектәре төҙөгән лексикограф, этимолог.

М. Өмөтбаев тел ғилеме менән ныҡлап шөғөлләнгән 80—90 йылдар төрки яҙма теленең халыҡ һөйләү теленә йүнәлеш алған осоро. Шуға уның дөрөҫ йүнәлеш, теоретик нигеҙҙәрен нығытыу, грамматик принциптарын асыҡлау айырыуса фәнни-практик әһәмиәт тота.

Өфөлә 1889 йылда ғалим-ғөләмәләрҙең, мөғәлимдәрҙең ҙур ғына бер кәңәшмәһе булып үтә. Туған тел — әҙәбиәтте уҡытыу менән бергә, унда төрки әҙәби теленең бәхәсле мәсьәләләре лә тикшерелә. Төрки тел тарафтарҙарын бында, халыҡ теленә ориентация тотҡан, татар ғалимдары Ҡ. Насыри, Х. Фәйезханов ҡараштарын яҡлаған төркөм фекере еңеп сыға.

Ошо кәңәшмәлә ҡатнашҡан һәм халыҡсан тел тарафтары М. Өмөтбаевҡа ҡабул ителгән ҡарарҙар нигеҙендә, үҙе әйткәнсә, «башҡорт һәм татар ҡәрҙәштәргә яңы ысулда» яңы грамматика яҙыу бурысы төшә. Быныц өҫтөндә байтаҡ ғүмер эшләй ул. Айырым баҫма булып, лингвистиканан беренсе китабы «Әлифба интикад бәяны...» 1897 йылда, «Татар нәхүсе мөхтасары» 1901 йылда ғына донъя күрә.

Быға тиклем яҙылған төрки, төрки-татар грамматикалары тәжрибәләрен өйрәнә, уларҙың ыңғай һәм йомшаҡ яҡтарын иҫәпкә ала. Мәҫәлән, И. Гагановтың 1801 йылда Петербургта сыҡҡан «Грамматика татарского языка» китабынан алып, М. И. Ҡазым-Бәктең «Грамматика турецко-татарского языка» (Казан, 1839, 1846), М. Ивановтың «Татарская грамматика» (1842), М. Биксуриндың «Начальное руководство...» (1859) тигән русса баҫмаларына, Ҡ. Насыриҙың татар теленән ҡулланмаларына тиклем.

Ырымбурҙа уҡыған дәреслектәренең бер файҙаһы, мөғәллимдәренең матур традицияһы бына ҡайҙа ла килеп тейә. Шуларҙың ыңғай тәжрибәһенә таяна. Орлоҡтар көр шытым бирә.

Элегерәк М. Өмөтбаев М. Ҡазым-Бәктең әлеге рус telендә яҙылған грамматикаһын төрки телгә тәржемә иткән була («Ошбу профессор Мирза Исмәғил Ҡазым-Бәктең русиә телендә яҙған рисаләһен төрки лөғәтенә тәржемә ҡылдым» — ти үҙе). Был хеҙмәте өсөн профессорҙан үҙе һәм мөфти исеменә рәхмәт хаты ала. Ләкин ул тәржемә грамматика, иң әүәл Диниә назараты хеҙмәткәрҙәре өсөн генә тәғәйенләнгәнгәме, нисектер, китап булып баҫылмай ҡала, аҙаҡ ҡулъяҙмаһы ла юғала. Әммә был эш эҙһеҙ ҡалмай.

Йәнә иҫкә төшөрәбеҙ, юғарыла исемләнгән авторҙарҙың китаптары «Татар теле грамматикаһы» тип аталһалар ҙа, хәҙерге татар теле мәғәнәһендә түгел, бәлки төрки тел грамматикаһын тәшкил итә ине. «Татар нәхүсенең мөхтасиры» («Татар теле грамматикаһы») китабында ла М. Өмөтбаев ошо традицияны тота. Бында дөйөм төркилек менән ҡатар татар, бигерәк тә башҡорт тел үҙенсәлектәренә диҡҡәт итә. Инеш һүҙендә былай ти ул: «Беҙҙең татар теле боронғо сығатай вә истәк (башҡорт) халыҡтары теленән килгән телдер. Был тел илә күберәк сығатай нәҫеленән булған ҡыпсаҡ, ҡырғыҙ, башҡорт вә төрөкмән һөйләшәләр. Был тел илә һөйләшкән халҡыбыҙ үҙҙәре «төрки тел» тип әйтәләр».

Грамматика китабын яҙғанда М. Өмөтбаев, берҙән, көнбайыш һәм көнсығыш телдәр грамматикаһын яҙыу принциптарына иғтибар итһә, икенсенән, татар һәм башҡорт телдәренең үҙ эске тәбиғәтен нык иҫкә алып эш итә. Был ҡәрҙәш телдәрҙең үҙ грамматик үҙенсәлектәрен, үҙ атамаларын (терминдарын) билдәләргә тырыша. Халыҡ һөйләү теленән миҫалға халыҡ ижады өлгөләрен иркен ҡуллана. Башҡорт теленең лексик ҡатламын, фонетик, морфологик үҙенсәлектәрен иҫтән сығармай. Яҙма төрки телде халыҡтың һөйләү теленә яҡынайтыу, татар, башҡорт өсөн еңел, аңлайышлы телдә ҡағиҙәләрҙе ябай һәм асыҡ итеп биреү хәстәрлеген күрә. «Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевҡа туған тел материалында лингвистик терминдарҙы беренсе башлап эшләү өлөшө төштө, — тип яҙҙы профессор Т. М. Ғарипов. — Ысын патриот М. Өмөтбаев урта быуаттың яһалма «төрки» китап теле башҡорт теленең үҙенсәлеген самалы сағылдыра икәнен яҡшы төшөндө».

Шуныһы ла фәһемле: М. Өмөтбаев башҡорт теленең боронғонан килгән лексик ҡатламын, архаик грамматик

шәкелдәрен юллап ҡарай, ҡыҙыҡлы ғына байҡауҙар яһай. Баяғы инеш һүҙендә ул ҡыйыу рәүештә шулай ти: «Истәк, йәғни башҡорт, ҡәҙимдә был төрки тел менән һөйләшкәндә дәлил «Ҡиссаи Рабғүзи, Әбүлғәзи вә «Бабурнамә» китаптары[1]. Сөнки әүәленең мөғлифе Насир Рабғүзи китабының башында әйтә: истәклеккә сәһел булһын, тип был тел илә яҙҙым тип».

М. Өмөтбаев башҡорт теленең боронғо бер тармағының Урта Азия, сығытай теле менән тығыҙ бағлылығы гипотезаһын ҡуя. «Һун башҡорттарының, йәғни төп аҫабаларҙың һөйләше үҙ аллы, ә күп һүҙҙәр Урта Азия халыҡтарынан, атап әйткәндә, сығатайлыларҙан үҙләштерелгән, — тимәксе ул. — Шуға ла һөйләшеүҙә үҙгәртелгән ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре ҡулланыла. Төп үҙһүҙҙәр бик күп. Улар Урта Азиянан һәм монголдар араһынан сыҡҡан «Бабурнамә» һәм «Ҡиссаи Рабғүзи» китаптарында ла йыш осрай. Шуға күрә лә башҡорт теле элек тә, хәҙер ҙә төрки ҡатышмаһынан тора».

Башҡорт ырыуының Урта Азияға бәйле этник тамырҙары хаҡында М. Өмөтбаев былай ти: «Хәҙерге башҡорт ерҙәренә бик боронғо ҡыпсаҡ, бөрйән кеүек ырыу-ҡәбиләләрҙән һуңғараҡ төрөкмән, сарт, үзбәк һәм башҡа ырыу-ҡәбиләләрҙең вәкилдәре килеп урынлашҡан булған. Шуға күрә юғарҙар (юғүрҙәр), йәғни аҫаба башҡорттар, күрәһең, был хәрәкәттең эҙемтәһен алдан күреп һәм үҙҙәренең милли йөҙ-һыҙаттарын һаҡлап ҡалыу уйы менән, Болғар дәүләте аҫтында булған саҡтарында уҡ, үҙҙәрен баш унғор, йәғни баш юғур һәм, аҙаҡ килеп, башғур, һуңғараҡ башҡурт тип йөрөтә башлағандар».

Әлбиттә, башҡорт этносының формалашыуында айырыуса роль уйнаған ҡыпсаҡ, бөрйән, унан ҡала күпмелер һарт, төрөкмән этник элементы башҡорт теленең ҡыпсаҡ-уғыҙ тел һыҙаттары менән һуғарылыуына килтергән. Башҡорт этнонимының килеп сығыуын М. Өмөтбаевтың үҙенсә аңлатыуы ла иғтибарға лайыҡ: баш унғар—баш юғур—башғүр — башҡурт.

«Сығатай халҡының лөғәте беҙҙең башҡорт халҡының ҡатай исемле ырыуының лөғәтенә оҡшай,— ти М. Өмөтбаев.— Уйғур халҡы «Бабурнамә» лә яд ителә. Бәғзе кемһәләр башғур тигән баш уйғур тимештәр». Башҡорт уҡы-

---

1. Һүҙ бында урта быуат төрки әҙәби-тарихи ҡомартҡыларҙан Рабғүзиҙың «Ҡиссаи энбиә», Әбүлғәзи Баһадурҙың «Шәжәрәи төрк», Заһретдин Бабурҙың «Бабурнамә» китаптары тураһында; *мөғлиф* — автор, *сәһел* — анһат, еңел; *яд ителә* — иҫкә алына.

мышлыһы «Бабурнамә» китабындағы сығатай (иҫке үзбәк) лексикаһы менән башҡорт лексикаһынан оҡшаш йә бик үҙенсәлекле һүҙҙәрен сағыштырып ҡарай: айлыҡ, оран, тыу, төмән, ҡаҙаҡлыҡ, ҡарауыл, сардауыл, даруға, бүтәгә һ. б.

Йәнә, бая әйткәнсә, М. Өмөтбаев грамматика яҙғанда һәм ике телле, өс телле һүҙлектәр төҙөгәндә ғәрәп, фарсы, рус, бер аҙ көнбайыш телдәренән, латиндан, бигерәк тә башҡорт, татар телдәренең үҙ атамаларын ижади ҡуллана. Һүҙлектәрҙә өҫтәмә сағыштырыу лексикаһына мөрәжәғәт итә.

Әйтәйек, фарсы, татар-рус һүҙлегендә ул ошо өс тел теҙмәһе менән ҡәнәғәтләнеп кенә ҡалмай, айырым һүҙҙәрҙе тағы анығыраҡ аңлатыр өсөн башҡорт, ҡаҙаҡ, уйғур, үзбәк телдәренән дә эквиваленттарын таба, сағыштыра. Былар иһә һүҙлекте йәнә байытып, төрлөләндерә төшә. Быға ғына хушһынмайынса, М. Өмөтбаев, рәсемгә лә әүәҫ кеше, астрономия терминдары, йондоҙ исемдәре йәнәшенә кескәй генә һүрәттәрен биреп тә күргәҙмәләп биҙәп ҡуя. Был үҙе күргәҙмәлелек өлгөһө.

Тарих, этнография, фольклористика буйынса хеҙмәттәрендә М. Өмөтбаев ҡай бер фекерҙәрен ҡеүәтләр өсөн тел факттарына ла йыш мөрәжәғәт итә, телде бик мөһим сығанаҡ итеп файҙалана. Телдең этимологияһын, мәғәнә төҫмөрҙәрен, стилистик сараларын төпсөй.

М. Өмөтбаевтың 80—90-сы йылдарҙа тел буйынса ғилми-тикшеренеү эштәре өс йүнәлештә бара: грамматикалар яҙыу, һүҙлектәр төҙөү һәм лексик материал туплау. Топонимик, диалекталь, аномастик һүҙҙәр, аңлатмалар яҙмаларында һибелеберәк ята. Уның аномастика буйынса башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының алфавит тәртибендә русса төҙөгән исемлеге һаҡланған. XIX быуатта башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының иң таралған үҙенсәлекле исемдәре һайланған. Бының бер ҡиммәте лә шунда.

Тел белгесе булараҡ, М. Өмөтбаев лингвист, грамматик, лексиколог, лексикограф, топонимист, аномаст, диалектолог, этимолог, йәғни киң профиллы ғалим булып алға баҫа.

Ҡәрәк тирәкте йыға.

7

Ғалим булмаҫ күрмәгән нәхү вә ҡәләм,
Ғамил булмаҫ сикмәгән жоур-әләм

---

*нәхү вә ҡәләм* — грамматика (синтаксис) һәм йәнле телмәр; *ғамил булмаҫ* — хеҙмәт эйәһе булмаҫ; *сикмәгән жоур-әләм* — ауырлыҡ, йәбер-михнәт сикмәгән (кеше).

Шулай ти бер ҡитғаһында М. Өмөтбаев.

Үҙе йәнә «әҙәм балаһы бер сырхамай, бер нужа күрмәй ир булмай», — тип әйтергә яратҡан шикелле, ғилем нескәлектәренә төшөнмәйенсә ғалим да, ауырлыҡтар кисермәйенсә аҡыл эйәһе лә булыу мөмкин түгелен шулай уҡ татып белдс.

«Йәдкәр» авторының әҙиплеге лә аҡыл һәм ғилем эйәһе булып өлгөрөүе менән бергә баҙыҡланды.

Ил һәм халыҡ нужаларын бергә кисергән, ил-ерҙәр гиҙеп, донъялар күреп ҡайтҡан, гласный булып йәмәғәт тормошонда ҡайнаған М. Өмөтбаев 80-се йылдарҙа, әүәлге поэзияһында сағылған өгөт-нәсихәт, мәғрифәтселек иллюзияларынан арынып, социаль йөкмәткеле тормошсан шиғырҙар ижад итеүгә килде. Яңы шиғырҙары сағыштырмаса аҙ, әммә тос ине. Уға шунса һәлмәк сәсмә әҫәрҙәре өҫтәлде.

«Үткән заман, ҡалған хәтер» шиғырында яңырап алды был яңы мотивтар. «Башҡорт ерҙәрен тәләфләүгә, земстволар тормошона, йәмәғәт «пирогын» бүлеүгә ҡағылышлылары, мәҫәлән. Фән, техника менән килер замандың прогресын да тоя шағир:

Беҙҙең заманда юлдарға булды киңлек,
Телеграф, пароход менән именлек.
Беҙ ул заманда — земский гласный
Тимер юлға тырыштыҡ согласный.

Бында тәғәйен Һамар — Өфө — Златоуст тимер юлын төҙөтөү мәсьәләһенә гласный авторҙың үҙ ҡатнашлығы ла әйтелгән. Өфөгә пароход юлы төшөүгә лә әллә ни күп түгел әле.

Йәмәғәт эшмәкәре һәм әҙип кеше капиталистик мөнәсәбәттәрҙең ыңғай һәм кире яҡтарын да тиҙ арала күрә алды һәм быға үҙ мөнәсәбәтен белдермәй ҡалманы. Бер ҡулъяҙмаһында русса былай яҙған ул: «О отцы и деды, чего только не изобретали ваши потомки: на месте великих лесов выросла армии, а леса угнал по водам, а земли — по богатым рукам. За то вместо лучинки световой газ. Население работает теперь на заводы, и как не стало дров богачи умудрились жечь камень... и где перевелись скотина нигде стало трав... и ничем поесть».

Аңлашылыуынса, прогресс менән ҡатар капиталистик йәмғиәт алып килгән регресс — тәбиғәттең аяуһыҙ ҡырылыуы, ер-һыуҙарҙың ҡыҫылыуы борсой әҙипте.

Шиғриәтендә «Шикәйәт», йәғни «Ялыу» тип атаны шундай уй-тойғоларға бәйле шиғырҙарының береһен.

Заманында фәрүән был диарҙа
Тулы урман илә ҡорт мал-тыуарҙа,
Күмәк ғәскәр һәм закон саяһында
Ҡарар тапты тижарҙар сауҙаһында.
Аяҡлы мал тамами бөтә яҙҙы,
Ағастар аҡты, Әстерханға уҙҙы,
Уның артынса осто ҡорт һәм әре,
Юҡ инде тау кеүек ағас тауары.
Был башҡорт урманы тамам киҫелгәс,
Сәфиләләр тауарҙан һәм өҙөлгәс,
Фекерләп таптылар һәм башҡа шәйҙе:
Ҡара тал ҡайырын, ҡош һәм күкәйҙе.

Бына шулай күҙ алдына килтерелә башҡорт урмандарының ҡырылыуы, ер-һыуҙарҙың ҡороуы. Сит промышленниктарға һәм ҡомһоҙ сауҙагәрҙәргә төшөрә тәбиғәттең шулай һәләкәткә яҡынлауын.

Ғыжайымды алып, ҡалдыра фәғлән,
Сырур ҡылырға артында ни мәғлүм
Назым, ҡанун боҙор өсөн һәр ишә
Үҙе белгәнсә йөрөһөн тип керешә...
Ғәҙәләт изгелектең бул яры һин,
Хәүф тотма ғәдүҙәр ҡәһәрен һин,
Ғәҙәләт илә хаҡ барһын әккә,
Низамдың ҡәҙерене ҡалдыр оҙаҡҡа.

Шиғырҙың төркисә ауырыраҡ яҙылған бындай строфалары авторҙың үҙенең руссаға тәржемәһендә көслөрәк яңғырай:

Увозя сокровище, оставляют нравы,
За спиною ходят повредить,
Чтобы порядки и законы испортить,
Каждому по своему жить велит.

Друг справедливости и добра,
Не бойся неправды и врага,
Восстанови на века права,
Закон и честь и правду навсегда!

---

*фәрүән был диарҙа* — мул, иркен был ерҙәрҙә; *саяһында* — ярҙамында; *тижар* — сауҙагәр; *сәфилә* — баржа.

*ғыжай* — байлыҡ; *фәғлән* — ғәҙәт; *сырур ҡылырға* — зарар итергә; *назым* — тәртип; *ғәҙәләт* — ғәҙеллек; *гәду* — дошман.

Тимәк, ил-ерҙәрҙең байлығын, күркен, именлеген һаҡлау — ғәҙеллек һәм изгелекте яҡлау, тәртип-низамдарҙы, закондарҙы ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы ҡорал итеү кеүек социаль, хоҡуҡи мәсьәләләр ҡырҡа ғына ҡуйыла был «Шиҡәйәт» шиғырында.

Шағирҙың әҙәбиәткә «Ҡайыш менән Йүкә» исеме менән ингән атаҡлы мәҫәлендә социаль-политик мәсьәлә, тыштан эзоп теле менән кинәйәләп, тағы үткерерәк яңғыраш таба. Бында әҙ эшләр, әммә үтә һауалы Ҡайышҡа кәм баһаланыр, әммә үҙенсә ҡеүәтле Йүкә образы контраст ҡуйыла. Ҡайыш йөҙөндә фәҡир торғаны асыҡ. Уларҙың көрәше Йүкә файҙаһына хәл ителә. Мәҫәлдең морале лә иҫкәртмәле: «ҡыйынында берәүҙең барлығынан, ҡолаҡ ҡағыр шул көнсөл байлығынан». Көнсөл ҡайышҡа иҫкәртеү был.

Олоғайып барған шағир йәмғиәттәге мораль боҙоҡлоҡтарҙы, ике йөҙлө монафиҡ, мөртәт әҙәмдәрҙе лә зирәгерәк күрә хәҙер. Әүәл идеал итеп хыялланған ғали заттарҙың үтә аҙлығын йәки бөтөнләй юҡлығын тойоп йөрәге әрней.

Йыһанда тапманым бер йәр садиҡ,
Дәрте дәртемә булғанын муафиҡ.
Әгәр таптым иһә бер йәр садиҡ,
Ризалыҡ һандығым сыҡты монафиҡ.
Батырҙар йыһанда Рөстәм булмаҫ,
Ғүмер оҙон булыр тип алданма, бәс.
Йөҙкәләр бик күптер — хәтеме булмаҫ,
Уларҙың күплегенә итмә һәуас...

— тип күңелһеҙ һығымталарға килә. «Яҡын дуҫтарың китте низән? Туҫтағың булһа ла тулы, ғәжәп, баҡсаңа былбыл килмәҫ низән?» — аптырашлы әхләҡи һорауҙарын, үҙ-үҙенә, бүтәндәргә бирә («Низән?»). Әллә ил-көн, ғәуам хаҡы тип, ғилем вә мәғрифәт тип, ғалим-ғөләмә араһында тырышып йөрөүҙәрең, түккән көсөң, ҡылған эштәрең һәммәһе лә елгә осамы? Низән, нилектән былар?

Әй, Сәлим, күп кеше һөйләп, йәр вә юлдаштан ҡалып,
Бер нөжүми хөршид булган пирә инсаф ҡылманың.
Әрәм итеп мөмкинлегең вә көсөң елгә биреп,
Яҙ вә ҡышын яҙған булып, унап өгөт алманың.

---

*садиҡ* — эскерһеҙ, саф; *монафиҡ* — ике йөҙлө, ялған; *хатем* — хәл итеүсе (ҡыйыу); *һәуас* — аптырау; *бер нөжүми хөршид булған пирә инсаф ҡыманың* — йондоҙҙар араһында ҡояш кеүек булған ҡарт ғилем эйәһенә инсафлыҡ күрһәтмәнең.

Һинән башҡа һәр береһе мөнбәр хужаһы булды,
Балһыҙ һағыҙаҡ кеүек, һин ярағың күрмәнең.
Башҡаларҙы өгөт итеп, үҙең иһмалда ҡалып,
Бер ғалимдың мәжлесенән яҡшы идраҡ ҡылманың.

Бындай үкенесле уйҙарын, төрлө һорауҙарын авторҙың ҡаршылыҡлы уйланыуҙарға бирелеүе, эҙләнеүе тип фараз ҡылырға мөмкин. Һорауҙар, ғәҙәттә, яуаптар эҙләтә, эҙләнеүҙәр яңы юлдарға, үрҙәргә илтә.

Барыһын йөҙгә бәреп, шаран-яран ярып һала бармаҫ инабатты һәм сабыр Мөхәммәтсәлим мәҫәлдәр, хикәйәттәр йә күсермәләр тигән булып — минең һүҙем түгел, бүтәндеке, йәнәһе, тигәндәй, — ситләтеп кинәйәләп әйтергә мәжбүр. Уның ҡәләме аҫтынан сыҡҡан сәсмә әҙәби яҙмалары барыһы ла тиерлек шундай.

Бына кеше хаҡындағы хикмәтле хикәйәте.

«Кеше, бүре кеүек батыр, арыҫлан кеүек көслө, төлкө кеүек хәйләкәр. Айыу иһә рыяһыҙ йыртҡыс иҫәпләнә. Бына уның тураһындағы хикмәтле һүҙ.

Берҙән-бер көндө айыу йылға аша ҡара урманға ҡарай сығып барғанда, уны күреп ҡалған суртан:

— Ҡайҙан киләһең? — тип һораған.

— Аҡыллыны һайлаған ерҙән, даланан, — тип яуаплаған айыу.

— Кемде һайланығыҙ инде?

— Кешене. Тағы кемде булһын.

— Эй, айыу, айыу, кешенән хәҙер һиңә үҙ урманыңда, ә миңә үҙ йылғамда тынғылыҡ булмаясаҡ. Аҡыллы зат итеп һайлағанығыҙ өсөн ул һеҙгә, исмаһам, берәй нәмә вәғәҙә иттеме һуң?

— Унан нимә талап итәһең инде. Уны бит беҙҙең арабыҙҙа зиһенгә эйә булған берҙән-бер йән эйәһе булған өсөн һайланылар. Өҫтәүенә, уның йыртҡыс хайуандарҙыҡы кеүек, үткер тештәре, имәнес тырнаҡтары юҡ. Әйткәндәй, яланғас, нәфис тәнле һәм затлы нәҫелдән. Алла кемде яҡын күрһә, халыҡ та шуны үҙ итә. Шуға ла кешегә хөрмәт күрһәткәндәрҙер инде. Ҡалай итәһең?

— Шулай ҙа, теге ни..., — тип яңынан һүҙ башлаған суртан.

— Һиңә тағы нимә кәрәк, — тип екергән уға айыу, — үҙ ҡәрҙәштәреңде эҙәрлекләгәнең, үткер тештәрең менән ҡырғаның да еткән.

---

*ярағың* — үҙ кәрәгең-ярағың; *иһмал ҡылыу* — иғтибарҙан ситтә ҡалыу; *идраҡ* — төшөнөү.

— Юҡ, мин бит ул хаҡта һүҙ йөрөтмәйем. Аҡыллы итеп һайлаған кешенән беҙгә ниндәй яҡшылыҡ булыр икән, бына шул ҡыҙыҡһындыра мине.

— Ярай, улай бик беләргә теләгәс, әйтәйем инде һиңә дөрөҫөн. «Һеҙ мине аҡыллы тигән тәхеткә күтәреп ултырттығыҙ. Бының өсөн мин һеҙҙең ҡайһы берегеҙҙе яурындарыма һалырмын, ә ҡайһы берегеҙҙе өҫтәл өҫтөнә ҡуйырмын»,— тип вәғәҙә бирҙе ул кеше тигәненең үҙенең һайлаусыларына.

— Эй, туған, — тип бошонҡо ғына аңлата башлаған суртан, — был бит кеше һинең туныңды һалдырып, үҙенең яланғас яурындарына ҡаплай, ә мине үҙенең аш өҫтәленә ҡуя тигән һүҙ».

Кешенең бүреләй батыр, арыҫландай көслө, төлкөләй хәйләкәр икәнен хикмәтләп һөйләп биргән ғәҙәти хикәйәт кенә микән был? «Ҡайыш менән Йүкә» мәҫәлендәге шикелле, уның социаль дөйөмләштереү ҡеүәһенә эйә булыуы бик ихтимал бит. Шул уҡ М. Өмөтбаевтың үҙенең буйһоноусан тәбиғәте, туған халҡының Рәсәй батшалығына вәғәҙәләшеп ҡушылып, шул айыу хәленә төшкән яҙмышҡынаһына ла ишараламаймы?

М. Өмөтбаевтың Әбелмәних Ҡарғалының бер хикәйәтен төрөксәнән рус теленә тәржемә итеп, А. С. Пушкин юбилейы айҡанлы сыҡҡан бер мәҡәләһендә файҙаланыуы хикмәтле генә.

Был хикәйәттә бик арҙаҡлы бер шәйех үҙенең мөритен һынар өсөн аҡса биреп, сәфәр сығарып ебәрә лә, теге йәш мөрит бер илдә Дилара исемле ҡыҙға үлеп ғашиҡ булып һушһыҙ ҡала. Шулай суфыйсы тәүфиғынан да, иманынан да яҙа. Әл дә шәйхе ҡөҙрәте йолоп ала үҙен. Ә гөнаһты тәүбәләр менән түгел, аллаға, шәйехенә мәңге тоғролоҡ менән генә йыуырға мөмкин.

Шәйехтең мөрите шикелле, ҡаты бәғер тиран Дәүләтгәрәй хан да иҫ киткес сибәр Диләрәс бикә — Мария ҡаршыһында тәҡәтһеҙ ҡала А. С. Пушкиндың «Баҡсаһарай фонтаны» поэмаһында.

М. Өмөтбаевтың 90-сы йылдарҙа яҙған әҙәби теҙмә һәм сәсмә әҫәрҙәре әҙиптең элекке бер яҡлы иллюзияларының юҡҡа сыға барыуы, ҡай бер инаныуҙарының ҡаҡшауы, айыҡ аҡыл өҫтөнлөк алыуы хаҡында һөйләйҙәр.

Кешенең ҡатмарлы күңел донъяһын асыр психологизм элементтары ла көсәйә уның ижадында: ҡаршылыҡлы фекерҙәр бәрелеше, хис-тойғолар ҡайнауы.

Бер рус әҙибе менән яҙышҡан хатында (тик уның кем икәнен асыҡлап булманы әле) М. Өмөтбаевтың шундай

һүҙҙәрен уҡырға мөмкин: «В четвертом пункте Вашего письма изображено высокое мнение о личности господина, называемого учителем разума. Кажется, те строки списаны с портрета или, так сказать, с физиогном его. Если так, то Вас можно назвать физиогномасом, имеющим проницательность описывать по характеру душу и Дон Кихота. Наука по этой части у мусулман вообще называется киафатнама. Это великая наука, это великий дар божий».

Ана шул ҡиәфәтнамәне тасуирлай алыу психологизмдың нәҡ үҙе инде.

Шағир кеше, ҡайсаҡ диуаналай, шиғыр менән ҡыуана ла йыуана торғандыр. М. Өмөтбаев үҙе яҙған, бигерәк тә ятаҡан шағирҙарының шиғырҙарын, ғәзәлдәрен яттан һөйләп кинәнес тапҡан әҙип. Шулар менән үҙ күнелен, табын-мәжлестәрҙе күркәмләп ебәргән һүҙ оҫтаһы. «Ҡунаҡ төшөмдәрҙә, йыйындарҙа Сәлим бабаҡай донъя хәлдәрен, үҙенең, Аҡмулланың шиғырҙарын һөйләргә әүәҫ булған», — тип яҙа туғандарынан Гөлсөм Ибраһимова.

Ат кешнәшеп табыша, кеше һөйләшеп таныша тигәндәй, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевҡа мәшһүр шағир Аҡмулланың үҙен күрергә лә, бер мәжлестә ҡара-ҡаршы ултырып шиғыр әйтешергә лә насип була.

1894 йылдың сентябрендә Өфөгә Аҡмулла килеп сыға. Уның хөрмәтенә Солтанов Мөхәмәдйәр мөфти түңәрәк кенә бер мәжлес ойоштора. Өфө мосолман ғалим-гөләмәләренән байтаҡ ҡына кеше ҡатнаша. Йәш ғалим Риза Фәхретдинов Аҡмулланың был мәжлестә шиғыр уҡыуын, М. Өмөтбаев менән шиғыр бәйгеһе ҡороп ебәреүен бер хәтирәһендә яҙып ҡалдырған.

Бына мөбәрәк табында донъя хәлдәре хаҡында һөйләшә-һөйләшә, мәғишәт, дин, фәлсәфә турында әңгәмә ҡуйырып алғас, ҡорҙағыларҙың бер саҡ мәшһүр шағир Аҡмулланың шиғыр әйткәнен тыңлағылары килеп китә. Аҡмулла ялындыра торғандарҙан түгел, шиғыр — уның тел асҡысы, һүҙ маһирлығы. Әҙ генә тамағын ҡырып ала ла моңло һәм асыҡ маҡәм менән ярым көйләп шиғыр әйтә лә башлай:

Башланмаҫ бисмиллаһыҙ ни әмер бар?
Уйыңда булһа, йәштә ҡыймылдап ҡал.
Йығылһаң нарҙан йығыл, тигән һүҙ бар —
Башлайымсы шиғырымды һеҙгә арнап.

---

*мәғишәт* — тормош; *нар* — дейә.

Мин үҙем бер дәрдмәнд диуанамын,
Ҡайҙа бер тәхҡиҡ күрһәм, ҡыуанамын.
Был затта ғәжәп тәхҡиҡ күргәндән һуң,
Ихтыярһыҙ шул сәбәптән йыуанамын.
Мәжлесенә ҡарай ғына ғаугабыҙ бар,
Ҡоҙоғона ҡарай ғына ҡаугабыҙ бар.
Эрбет менән Мәкәрйәгә сама ҡайҙа —
Баҙарына ҡарай ғына сауҙабыҙ бар.
Бәхетебеҙ асылмаған беҙ бер фәҡир,
Абруйым артыҡ юҡ, эшем таҡыр.
Йәштән йыйған бер быуаҙ мәжмүғәм бар,
Уның да бәгзе ере таҡыр-маҡыр.
Фәҡирлектән артыҡ фән күрә алманыҡ,
Шәһәр сығып, алыҫ яҡҡа йөрә алманыҡ.
Мәргәндәрҙе таныrлыҡ хәлебеҙ бар.
Шул сәбәптән сабыр ҡылып тора алманыҡ.
Аҙ ғына дәресем бар ҡыш ваҡытта,
Китап ҡарау-ғәҙәтебеҙ буш ваҡытта.
Беҙҙең дә белем ишеге бикләнгән юҡ,
Аңлайбыҙ кәйеф килгән буш ваҡытта,
Уйламағыҙ «Жарудә»не күргән юҡ, тип,
Әгәр күрһә, ғибрәтен белгән юҡ, тип,
Көс барынса һаҙаҡ тартҡан егеттәр бар,
Уйламағыҙ, доньяла мәргән юҡ, тип...

Шулай берсә талғын, берсә етеҙ шиғри һүҙ аҡҡанда Аҡмулла бер мәл тынып, иркенләберәк тын тартҡанда, М. Өмөтбаев сәсәнсе әҙ генә хәл алдырырға теләгәндәй, поэтик өндәш һүҙен ялғай:

Сәләм һиңә, Өмөтбайҙан, Аҡмуллабыҙ,
Асмандағы йондоҙҙарҙың сулпаны һеҙ,
Күңелебеҙҙе эретерҙәй солтаны һеҙ,
Шиғриәтебеҙ күгенең шоңҡары һеҙ.
Өләңдәрең уҡып ҡына баҡҡаным бар,
Һүҙ уҡтарын бәгзеләргә атҡаным бар.
Зиһенемә ятҡанын ятҡа алып,
Мәжлестәрҙә рух ишеген ҡаҡҡаным бар.

Шиғри әйтеште Аҡмулла элеп ала:

Татлы телең шәрбәт вә мөләйем,
Ғибрәтһең шул шәрбәт телең, әй, һәр дайым,
Тел бирелгән тәңеренән һөйлә тиеп,
Тура юлға телемде мин әйҙәйем.

---

*тәхҡиҡ* — дөрөҫлөк, хаҡлыҡ.

Үҙең ғалим, ат-затығыҙ бик арҙаҡлы,
Ишетә килдем ат-датыңды быға саҡлы.
Инде күреп танышырға булды насип,
Әйтешкә лә яйы сыҡты килеп ғатип.
Барадарым, ғилем әһлен беләһеҙме?
Ғилемлек китаптарын күрәһеҙме?
Башҡорттоң Йөҙөкәев кантонынан,
Даны сыҡҡан үҙе бер түрәһеңдер.
Әһле ислам йоҡлабыраҡ ҡалыр булды,
Башҡа милләт алға табан барыр булды.
Дошмандарға мөҡауәмәт ҡылмаҡ өсөн
Яңы гилемдәр беҙгә зарур булды.
Хәл килһә, төрлө фәнде күргән яҡшы,
Ғалимдар ҡатарына кергән яҡшы.
Урыҫса уҡып-яҙып ҡына түгел белмәк,
Хәл килһә, французса белгән яҡшы.
Иң әүәл үҙ гилемеңдә заһир бул һин,
Ышанысың ҡеүәте таһир булһын.
Һиндостан ғәләмендәй мәхкүм күреп
Ғилемгә ҡаршыларға ҡаһир бул һин.

Өмөтбаев:

Һай, афарин, шулай булһын, сәсәнебеҙ!
Морадыбыҙ: ғилем нуры сәсәребеҙ.
Ғилем берлә вәли булһаҡ,
Ғәзә берлә ғали булһаҡ,
Һөнәрҙә алдын булһаҡ
Игелеге килер, һай, илдәргә.
Һиммәтлеге тейер ирҙәргә әү,
Һиммәттәре тейер беҙҙәргә...

Ике шағир ҡатнашҡан сәй мәжлесе нәфис һүҙ маһирлығын танытыр шиғыр бәйгеһенә, табындағыларға күңел сафаһына әйләнеп китә.

Был осрашыу табындағыларҙың хәтерендә мәңгелеккә ҡала. «Быны Фәхретдинов үҙе айырыуса бер иҫтәлекле ваҡиға итеп һөйләй торғайны, — тип хәтерләй ҡарт педагог Закир Шакиров. — Ғөмүмән, Риза менән һөйләшкәндә, Аҡмулла йәки Өмөтбаев хаҡында һүҙ сыҡмай ҡалмай ине. Аҡмулланы ул башҡорттарҙың мәшһүр илгиҙәр шағиры тип атай ине. XIX быуатта йәшәгән татар, башҡорт

---

*дат* — дан; *барадар* — туған, ағай-эне; *мөҡауәмәт* — ҡаршы тороу. *заһир* — асыҡ; *таһир* — таҙа, ғәйепһеҙ; *ҡаһир* — көрәшсе.

яҙыусыларының бөтәһенән өҫтөн ҡуя ине. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев иһә — Фәхретдинов өсөн беренсе башҡорт ғалимы, уның яҡын ҡәләмдәше... Мәжлестә Аҡмулла менән Өмөтбаев ҡара-ҡаршы ултырып шиғыр әйтешкәндәр. Сиктән тыш оҫта телле, йор һүҙле булыуы менән Аҡмулла был әйтештә һәммә кешене хайран иткән. Өмөтбаев та унан ҡалышмаҫҡа тырышҡан — үҙенең бөтә шағирлыҡ һәм сәсәнлек һәләтен эшкә ҡушҡан».

Өсөнсө әҙип Риза Фәхретдиновтың үҙе менән таныштырып үтәйек әле.

Был осрашыу ваҡытында Риза Фәхретдинов әле яңы танылып килгән, һәр фәнгә маһирлығы, ғалимлығы күренгән йәш кеше. Ырымбур губернаһы Бөгөлмә өйәҙе Кисеүсат ауылында башҡорт ғаиләһендә тыуған, мәҙрәсәләрҙә һабаҡ алып, бер ни тиклем мөғәллим булып эшләгәндән һуң, 1891 йылда Өфөгә Диниә назаратына эшкә саҡырылған. Ғәрәп, фарсы телдәрен, көнсығыш әҙәбиәтен, философияһын, ислам тарихын яҡшы үҙләштергән. Әле мәғрифәт өлкәһендә йөҙөп эшләй башлаған сағы. Ҙур ғалим һәм әҙип М. Өмөтбаев менән ижади дуҫлыҡтары нығынып килә. Күп тә үтмәҫ, Риза Фәхретдинов педагогика, философия, дин ғилеме, журналистика буйынса күп хеҙмәттәр яҙған ғалим булып танылыр, йөҙләп китабы нәшер ителер, «Аҫар» серияһы томлыҡтары барлыҡҡа килер, әҙип тигән яҡшы аты сығыр. «Шура» журналының мөхтәрәм мөхәррире булып китер.

Әлеге сәй мәжлесендә хужа кеше Солтанов Мөхәмәдйәр мөфти «Русиәнең Пушкины вә беҙҙең Өмөтбаевыбыҙ шағирҙар» тигән икән, шуға Риза Фәхретдинов үҙ иҫтәлектәрендә шуларҙы ҡуша: «Руссиә белмәгәнем сәбәбендән Аҡмулла менән Пушкинды мизанға һалып тора алмаһам да Өмөтбаев менән Аҡмулланы үлсәргә мөмкин, — ти ул. — Мөхәммәтсәлим төрлө мәжлес күргән вә шул ваҡыттағы мөғтәбәр ғаиләлә үҫкән, Мәскәү вә Петербургтарҙа йөрөгән, Ырымбурҙың хәрби мәктәбендә уҡыған, Мирсалих Биксурин, Салих Күкләшев кабилендән мөдәристәр хозурында яҡшы урын тотҡан, Эстәрлетамаҡ шәйехтәре мәжлестәрендә булған, мөфти Сәлимгәрәй менән таж кейҙереү байрамында иштираҡ ҡылған, Ҡырым мирзалары араһында уҙҙырған зат. Былар өҫтөнә әҙәбиәт вә тарих менән хәбәре иштиғбал иткән, рус әҙиптәренең тәржемәи хәлдәренән хәбәрҙар».

Йәш әҙип бында өлкән әҙип һәм ғалимдың илгиҙәр Аҡмулла менән сағыштырғанда бөтөнләй икенсе мөхиттә

---

*Мизан* — үлсәү.

тәрбиәләнеүен һәм әҙерлекле ғилем эйәһе икәнен айырып әйтә. Мөғтәбәр табында уларҙың нисек тотошо, Аҡмулланың юғалып ҡалыу ихтималы хаҡында үҙенсә борсола. «Аҡмулла үҙенең шиғырҙарын моңло тауышы менән бер ҡәҙәр ҡәвағиәт вә ғәйрәт менән һөйләне, — тип яҙа ул.— Был яҡшы ғына тәьҫир бирҙе. Уның туҡталыуы менән һис көтөлмәгән бер ваҡытта Мөхәммәтсәлим әфәнде үҙ сәнғәтендәге бер кеше менән осрашыуы сәбәпле булһа кәрәк, күңеле асылып, мөсәбәҡәт ҡылырға кереште».

«Фазыл Мәржәниҙең мәрҫиәһе» әҫәрендә Аҡмулла «Иғтибар»ҙа иғтибарға алған икән «хөрмәтле Ризаитдин — бер камил зат» тип баһалаған Р. Фәхретдинов шул Өфөлә булғанында атаҡлы шағирҙың ҡулъяҙма мәжмүғәһен китап итеп сығарырға вәғәҙә лә итә. Ләкин киләһе йылына Аҡмулла һәләк ителгәндә ҡулъяҙмалары ла юғалып, был ниәт ғәмәлгә ашмай ҡала.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев Аҡмулла хаҡындағы бер яҙмаһында уның мәшһүр шағир икәнен билдәләп, шуны ла өҫтәй: «Бәйеттәрен ятҡа уҡыр ине. Бер заман Мөхәмәдйәр мөфти уҡытты. Тыңларға мәжлесенә беҙҙе лә саҡырғайны, күп ғибрәт һүҙҙәр әйтте». Өмөтбаев Аҡмулланың айырым шиғырҙарын үҙ дәфтәренә күсереп ала.

## 8

А. С. Пушкин тәржемәселәрҙе халыҡтар культураһын аралаштырыр элемтәселәр, тип атаған.

Әҙәби тәржемә эшенең әһәмиәте һәм вазифаһы хаҡында М. Өмөтбаев былай ти: «Бөйөк шағирҙарҙың вә бөйөк әҙиптәрҙең кешелек донъяһына хеҙмәт итеүҙәре уларҙың әҫәрҙәре һәр төрлө телдәргә тәржемә ителгәнлектәренән килә. Боронғо гректарҙың Гомеры, Ирандың Фирдәүсие, Хафизы, Сәғҙие, боронғо төркиҙәрҙең Мир Ғәлиширы (Науаи), инглиздәрҙең Шекспиры, немецтарҙың Һетеһы вә Шиллеры кеүек әҙиптәр бөтә мәҙәни телдәргә тәржемә ителгәндәр. Беҙҙең Александр Пушкин да, былар кеүек үк, бик суҡ милләттәрҙең телдәренә тәржемә ителмештер».

Тәржемә менән тәржемәнең дә айырмаһы ҙур. Бар әҫәрҙең сюжетын ғына ябайлаштырып һөйләп сыҡҡан ауҙармалар. Бар иректе тәржемәләр. Шул уҡ ваҡытта ысын ижад булғандары — художестволы тәржемәләр.

---

*мөғтәбәр* — хөрмәтле; *мөсәбәҡәт* — ярыш, конкурс; *суҡ* — күп; *иштиғмал иткән* — шөғөлләнгән; *ҡәвағиәт* — үҙенсә тәртибе.

Башҡорт культура, әҙәбиәт тарихы М. Өмөтбаевҡа тиклем тәржемәләрҙең төрлөләрен белә: Көнсығыш һәм Көнбайыш әҙиптәренән күскән уртаҡ сюжеттарҙы, шиғри әҫәрҙе проза рәүешендә биргән миҫалдарҙы, әҙәби адаптацияларҙы, ирекле тәржемәләрҙе. М. Иванов, С. Куклəшов, М. Биксурин, В. Радлов, Хәбибназар хрестоматияларында быныҡ төрлө формалары бар.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев үҙенә тиклемге тәржемәләргә тәнҡит күҙлегенән килеп, был эшкә ҙур яуаплылыҡ һәм яңы талап менән ҡарай. Ул оригинал телен камил белеүҙе шарт итә. Һәм ижади тәржемә принцибын яҡлай. «Бер инглиз ғалимының: «Бөйөк Фирдәүсиҙең, Хафиздың вә Сәғҙиҙең әҫәрҙәрен уҡымаҡ өсөн генә лә фарсы теленә тәхсиле шаядтыр», — тигәне билдәлелер, — ти ул. — Ысынлап та, европалылар вә рустар араһында ғәрәп, фарсы вә төрки тәхсил итеп, ғәләм шәреҡтең бөйөк шағирҙарының вә мәшһүр яҙыусыларының әҫәрҙәренән истифадә иткәндәр аҙ түгел. Шулар кеүек беҙ ҙә көнбайыш халыҡтарының әҫәр ғаҡылиәһенә, әҙәбиәтенә вә шиғриәтенә ваҡеф булһаҡ, файҙанан башҡа бер нәмә лә булмаҫ».

Ғәрәп, фарсы, төрки телдәрен камил белеүсе булараҡ М. Өмөтбаев көнсығыш әҙәбиәттәренән Фирдәүсиҙең «Шаһнамә»һенән, Хафиздан, Сәғҙиҙән, Науаиҙан, хикәйәттәрҙән, ҡитғаларҙан айырым өлгөләрен тәржемә итеп ҡарай. Ҡай бер үрнәктәрен «Йәдкәр» китабына индерә, байтағын гөләмә хөкөмөнә сығарырға баҙнат итмәй. Ул ғәрәп мәҡәл һәм афоризмдарын рус теленә тәржемә итеү тәжрибәһен яһай.

М. Өмөтбаев — күп яҡлы тәржемәсе, А. С. Пушкин һүҙҙәре менән әйткәндә, халыҡтар культураһын бәйләүсе бер элемтәсе. Ул, бер яҡтан, көнсығыш мәҙәниәтенән һәм әҙәбиәтенән, рус әҙәбиәтенән төрки, татар телдәренә тәржемәләр яһап, төрки һәм туған башҡорт халҡын матур әҙәби үрнәктәр менән таныштырыуҙы маҡсат итһә, икенсенән, көнсығыш әҙәбиәтенән, башҡорт фольклорынан, башҡорт әҙәбиәтенән айырым өлгөләрҙе рус теленә тәржемә итеүе менән тағы киңерәк майҙанға сыға.

Әҙәби тәржемәләренән уның иң яратҡан жанры — поэзия, күпселеге — рус шиғриәте, кумиры — А. С. Пушкин. Бөйөк рус шағирының йөҙ йыл тулыу байрамын үткәрергә әҙерләнгән һәм үҙе лә А. С. Пушкин юбилейы комиссияһында эшләгән сағында М. Өмөтбаев уның әҫәрҙәрен татар теленә тәржемә итеүгә ең һыҙғанып тотона.

---

*тәхсиле шаядтыр* — белеү, эйә булыу шарттыр; *истифадә* — файҙаланыу; *әҫәр аҡылиә* — фән, философия; *ваҡеф* — аңлаусы, белеүсе.

Атаҡлы әҫәрҙәренән «Баҡсаһарай фонтаны» поэмаһын, «Бәхетһеҙ ғишыҡ» исеме менән бер романсын, «Шатлыҡ хыялы» исемендә «Наслаждение» шиғырын, «Делибаш» шиғырын тәржемәләй. Ул татар, башҡорт поэзия һөйөүселәренең зауығына ярашлыраҡ әҫәрҙәрҙе һайлай, уларҙың татарса тәбиғи яңғырашлы булыуы хәстәрлегән күрә.

Тәржемәгә «Баҡсаһарай фонтаны» поэмаһын һайлауы һис осраҡлы түгел. Ул, берҙән, көнсығыш сюжетлы әҫәр, икенсенән, һүрәтләнгән ерҙәр — Ҡырым тәбиғәте, Баҡсаһарай баҡсалары, фонтан шишмәләре Мөхәммәтсәлимгә бик таныш һәм күңеленә яҡын.

Шуныһы һәйбәт: рус шағирының поэмаһын һәм шиғырҙарын татарсаға һүҙмә-һүҙ йәки юлға-юл күсерергә тырышмай, бәлки оригиналдың поэтик үҙенсәлеген һаҡлап, уның рухын һәм йәмен үҙ уҡыусыларына еткерергә ынтыла. Тәржемәлә А. С. Пушкин талап иткәнсә, әҫәрҙең ҡоро үҙен түгел, рухын бирергә («передать дух, а не букву») принцибы тотола.

«Баҡсаһарай фонтаны» поэмаһындағы, мәҫәлән, түбәндәге шиғри юлдар тәржемәлә татарса (шулай уҡ башҡортса ла) бик тәбиғи яңғырай һәм шағирҙың һүҙҙәре, тәржемәсенең үҙ һүҙҙәре кеүек тә ҡабул ителә. А. С. Пушкин кеүек М. Өмөтбаев та Баҡсаһарайҙы ҡыҙырған бит:

Ҡуйып төньяҡ илдәрен,
Күңелле тормош, байрамын;
Баҡсаһарайға килеп
Күрҙем дар вә диярын...
Зиннәт, рәхәт, багтар бар,
Һыуҙар аға, гөлдәр бар;
Йөҙөм үрмәләп үҫер
Алтынланган диуар бар.
Гөл быуын, фонтан һыуҙарын
Хайран булып уйланым,
Күреп ҡалгандай булдым
Ҡыҙҙың зифа буйҙарын!..

Тәржемәсе поэманы оригиналдың үҙ ритмик-интонацион үҙенсәлегенә яҡын башҡорт халыҡ шиғырының (ҡыҫҡа йырҙарҙың) 8—7 ижекле үлсәүҙәрен һайлаһа һәм матур яңғырашына ирешһә, шиғырҙарҙы тәржемә иткәндә, шулай уҡ уларҙың үҙ үлсәмдәренән сығып, башҡорт шиғырының бүтән үлсәмдәренә мөрәжәғәт итә.

Бына, мәҫәлән, «Шатлыҡ йыры» шиғырының үлсәмен башҡорт оҙон йырҙарына көйләй. Йәнәшенә хатта ул йырҙың схемаһын теркәп ҡуя:

Зайдый ғына микән, әй, әйхайлүк (10)
Әйдәй генә микән вайхайлүк (9)
Зайдый ғына микән зайдарайлүк (10)
Зайдый ғына микән айхайлүк. (9)

Ҡазанда 1901 йылда сыҡҡан «Баҡсаһарай фонтаны» тәржемәһе китабында теркәлгән был схема башҡорт оҙон йыр ҡалыбының таш баҫмала бирелешенең иң беренсе үрнәге ул.

Ошо шиғри ҡалып нигеҙендә тәржемә ителгән Пушкин шиғыры башҡорт оҙон йырҙарындағыса һәлмәк һәм һағышлы ишетелә:

Һиҙелмәйҙер тыуған уҡ сәғәттән
Күркәм егет дәүере еткәнсе.
Мин белмәйем донъяның шатлығын,
Тормай бәхетем күңелем бөткәнсе.

Ғүмере буйы А. С. Пушкин ижады менән хозурланып йәшәгән һәм әҫәрҙәрен яратып тәржемә иткән М. Өмөтбаев бөйөк рус шағиры тураһында иң ихлас һоҡланыу һүҙҙәрен ташҡа баҫтырып ҡалдырған. «Бөйөк шағир Александр Пушкин» тип атала ул, башлап «Йәдкәр» китабында, аҙаҡ 1899 йылда «Тәржеман» газетаһында төркисә һәм русса баҫылған мәҡәлә.

«Пушкин бөйөк шағир, бөйөк әҙип ине — тип яҙа М. Өмөтбаев. — Наме вә әҫәрҙәре Ғосмания хөдүдәтәрен ашып, әжнәбиҙәргә дәхи мәғлүм вә мәшһүр булмыштыр... Пушкин русса яҙыр инс, ләкин шул тиклем гүзәл, шул тиклем үткер яҙыр ки, уның яҙғандарынан беҙ ҙә ят вә сит булып ҡала алмайбыҙ. «Бөйөк шағир — ватанының шәрифелер, ләкин бөтә донъяның хадимылыр», — тиҙәр. Бик ғәҙел һүҙ. Шағир Пушкиндың яҙғандары һәр ерҙә, һәр милләт араһында уҡыла торған нәмәләрҙер. Уның яҙған йөҙ меңдәрсә сатырҙары эсендә бер милләткә вә дингә тейеп яҙылған бер генә сатыр ҙа юҡтыр. Уның бөтә яҙғандары ғәләм инсаниәткә хеҙмәттер. Шуның өсөн Пушкин бөйөк ул».

Бөйөк рус культураһына, бөйөк Пушкинға оло мөхәббәтен башҡорт уҡымышлыһы — эше, йөрәк һүҙе менән дә раҫлар булды.

---

*наме* — исеме; *хөдут* — сик; *әжнәбиҙәргә-дәхи* — тағы ла сит илдәрҙә; *шәрифе* — даны; *хадим* — хеҙмәт итеүсе; *сатырҙары* — шиғыр юлдары; *ғәләм инсаниәт* — кешелек донъяһы.



*М. Өмөтбаевтың А. С. Пушкин юбилейы уңайы менән русса яҙылған мәҡәләһенең автографы.*

М. Өмөтбаев үҙ һәләтен йәнә төркисәнән руссаға поэтик тәржемә буйынса ла һынап ҡарай. Үҙенең «Шиҡәйәт» шиғырын руссаға тәржемә итә. Бер төрки шиғырҙы тәржемәләй:

Увидел я твой розовый лик, ох! О, Душа!
Смотри, юноша, прелестна ли я и достойна?!
Потешь меня, милый, не жги душу,
Смотри, юноша, прелестна ли я и достойна?!
Преклоняюсь и говорю, полная надеждой,
И сердцем, хотя разбитым насмешкой.
Уходя, тебя не называю душою,
Смотри, юноша, насколько я прелестна и достойна?!

Кем был шиғырҙы русса яңғырамай, хис һәм ялҡын ташып тормай, тип әйтә алыр икән?

Һәләтлеләр өсөн тәржемә ул үҙе бер ижад, ҙур сәнғәт.

## 10

Ҡазанда 1897 йылда «Йәдкәр» китабы донъя күрә. Тышлығына «Мөхәммәдсәлим бин Ишмөхәммәд Өмөтбаевның тәснифләрендән» тип ҡуйылған. Төп эстәлеге ҡыҫҡаса әйтелгән: «Бәйетләр, хатлар, коранация, йәғни император Александр Александровичтың таж кейгән хикәйәте, хәбәр Аҡташ хан мәғ Зөлҡәрнәйен, шәжәриғ татар, Тарағут ҡалмыҡлары, башҡортлар, хәбәр фирғәүен вә Рум, ай башлары вә дәхи хикәйәтләр».

«Йәдкәр» китабы М. Өмөтбаевтың, асылда, әҙәби-ғилми эшмәкәрлеген төрлө яҡтан сағылдырған, мөһим әҫәрҙәрен туплаған баҫма. XIX быуатта башҡорт культура тарихы өсөн тос бирәгәйле йыйынтыҡ.

«Йәдкәр» — М. Өмөтбаевтың баш китабы, башҡорт әҙәби һәм ғилми-тикшеренеү әҫәрҙәренең аҫыл йәдкәре. Китап көнсығыш рисаләләре, бигерәк тә М. Иванов, С. Күкләшев, М. Биксурин диуандары традицияларында төҙөлгән. Әммә ул яңы тарихи шарттарҙа новаторҙарса үҫтерелгән һәм яңыртылған. Уҡыу ҡулланмаһы ғына түгел, тормош ҡулланмаһы рәүешен алған.

«Йәдкәр» составы, йөкмәткеһе менән кесе энциклопедик характерҙағы хеҙмәт. Тәбиғәт һәм донъя, ғилем һәм мәҙәниәт, әҙәбиәт һәм халыҡ ижады, уҡыу-уҡытыу һәм халыҡ педагогикаһы, бүтәне буйынса төрлө мәғлүмәттәр, өлгөләр бар унда.

---

*тәсниф* — әҫәр; *мәғ* — шуның менән бергә.

Жанр йәһәтенән мәҡәлә һәм фәнни очерегы, белешмәһе һәм тасуирламаһы, юлъяҙмаһы һәм документы, хикәйәте һәм риүәйәте, мәҡәле һәм хикмәте, шиғыры һәм мәҫәле һ. б. Китаптың быға тиклем бирәү ҙә тулы анализлап, һанап-хисаплап бөтмәгән йөкмәткеһен атап үткәндә генә лә ғәжәп итерлек. Ниҙәр генә, ниндәй жанрҙар ғына юҡ унда. Бары түбәндәгесә (бер һанап, теркәп сығайыҡ әле күргәҙмәлек өсөн): Бисмилланан мөҡәддимә (инеш һүҙ). Балаға сәсмә нәсихәт. Шуның назымға һалынғаны («Әй, әһлам...», «Ниғмәт шәриф»), «Нәсихәт» (бер төркөм назым). Бәжнәп остаҙ Мирсалих генерал Биксурин (мәдех), Бәжнәп хәзрәт мөфти әл-сәлам Сәлимгәрәй бин Шаһигәрәй Тефкилев (мәдех). Йомран дәүараны (шиғыр). Нәсихәт (назым). Коранация (таж кейҙереү) байрамы (очерк). Бәйет. Таж кейгән көнө (назым). Мәскәүҙә Ходинская поля тигән майҙан (очерк). Император Александр Третийҙың коранацияһы хаҡында (очерк). Наследниктың байрамы (очерк, назым). Вәсиәт вә нәсихәт (назым). Әл-хат нәсеф әл-мөләҡәт (ҡотлау хаты). Ҡырым мөфти Гали бәк Хуннановҡа (мөрәжәгәт). Улым Баязитҡа хат. Әй, Сәлим... (шиғыр). Көнөрт һыуы (тасуир). Аҡташ хан (риүәйәт). Назым. Тажетдин Ялсығолдоң нәсәбнамәһе (шәжәрә). Кесе табын халҡының нәсәбнамәһе (шәжәрә). Кесе Табын халҡының бабалары һәм унан айырылған Йомран Табын йорто (тәуарих, тарихи очерк). Ата-әсәгә мәдех. Бәжнәп ахун Ғатаулла Баязитов (мәдех). Бәжнәп мөфти әл-Әринбург Мөхәммәдяр Солтанов (мәдех). Йығлаған бала (шиғыр). Ҡыш китеп (ҡитға). Сәләм булһын (назым). Диғар (назым). Мәғрифәт (мәҡәлә). Башҡорттар һәм Тарғаут ҡалмыҡтар хаҡында (тарихи очерк). Бәйет (ҡитға). Тарих башҡорт халҡының аҡ һәм ҡара көнләре (тарихи очерк). Үткән ғүмер, ҡалған хәтер (шиғыр). Тәржемәләр. Боронғо башҡортларның өләндәре (эпостан өҙөмтә). Мәҡәл һүҙҙәр. Ҡайыш илә Йүкә (мәҫәл). Фирғәүендәр хаҡында (тарихи белешмә). Ғилем хикмәт хаҡында (белешмә). Европа халҡының һүҙҙәре (белешмә һүҙлеге). Сәсәнлек (назым). Килде беҙгә айырылмаҡ көндәр (назым). Дәр Сәфәр Ҡырым (шиғри юлъяҙма). Тәржемә. Руми илән 1400 йыл эсендә булған ваҡиғалар (тарихи белешмә). Рум шәһәре хаҡында (тарихи белешмә). Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының оҙатылыуы (туй йолалары күренеше. Шиғыр менән). Урмансы (шиғыр). Мәҫәл (шиғыр). Өфө шәһәренең өс йөҙ йыл мәғмүр булдығы өсөн үтелгән ҡәләмдәрҙән (тасуир). Юби-

*әл-хат нәсеф әл-мөләкәт* — осрашыуҙа ҡотлау хаты.

лей праздниги (тасуир). Ағиҙел буйындағы ғөләмә вә мәшәйектәр (белешмә). Башҡорт лөғәтенсә сабыйҙарға һан күрһәтеү (һабаҡ). Йыл исемдәре. Татар, монгол вә уйғур вә төрк хаҡимҙарының низамына (календарь). Числоның нисә көн икәне (һабаҡ). Ҡәмәриә йылының хисабы менән ай башын тапмаҡ (һабаҡ). Петербург хаҡында күцел мөһөрө (юлъяҙма). Петербургта ғәжәйепхана нәүге (тасуир). Шиғыр Дәр хәҡ зәмин башҡорд (фарсы теленләге шиғыры).

Шулай бик күп төрлө мәғлүмәттәр, белешмәләр, төрлө жанрҙар менән сыбар йыйынтыҡ кеүек тойолһа ла, «Йәдкәр» ғилем, педагогика, Башҡортостан тарихы, башҡорт этнографияһы, фольклоры, әҙәбиәте, публицистикаһы, тәржемәһе буйынса үҙ концепцияһы булған бер бөтөн әҙәбиғилми китап ул. Быға тиклем сыҡҡан төрки баҫма китаптарҙың береһендә лә булмағанса, башҡорт тематикаһы, башҡорт ғилми-иҗтимағи фекере үҙәкләшеүе менән ул оригиналь һәм уникаль күренеш. Үткән бүлектәрҙә М. Өмөтбаевтың әҙәби, ғилми эшмәкәрлеген ҡыҫҡаса ғына байҡап үҙғанда әйтелгән мөһим әҫәрҙәренең күбеһе ингән унда.

«Йәдкәр» китабы авторҙың сирек быуат самаһы әҙәби һәм ғилми-тикшеренеү эштәренең үҙенсә бер йомғағы кеүек ҡабул ителә. Шуның авторҙың төп ижадын, улай ғына түгел, XIX быуаттың һуңғы сирегендәге башҡорт әҙәбиәте һәм фәнни-иҗтимағи фекер үҫеше тарихын тулы күҙ алдына килтерен булмай.

«Йәдкәр» китабы — ул торғаны менән халыҡ хәтере. Тарих хәтере. Шуның әҙип зиһене аша үтеп ҡағыҙға күскәне, ташҡа баҫылғаны. Ул йәнә тәуарихтар, шәжәрәләр, риүәйәттәр традицияһын ижади үҫтерә.

Башҡорт, татар халыҡтары араһында әүәл йәдкәр дәфтәрҙәре киң таралған булған. Йәдкәр халыҡтың, бигерәк тә йәштәрҙең зауығын ҡандырып йырын һәм бәйетен дә, шиғырын һәм парсаһын да, мәҡәл һүҙен һәм хикмәттәрен дә үҙенә һыйҙырған. «Йәдкәр» китабының бер баҙыҡ тамыры ошо халыҡ хәтере, йәдкәр дәфтәре традицияларына тоташа. Халыҡтыҡы халыҡтағыса булып.

М. Өмөтбаев ғилем һәм әҙәбиәттең төрлө төрҙәрен үҙенә берләштергән һәм популяр формала үткәргән көнсығыш рисаләләре традицияһына ныҡ таяна. Фән менән әҙәбиәтте аралаштырып, ғилем, педагогика күренештәрен әҙәби формаларҙа, белешмә рәүешендә биреүҙәре лә шунан килә. «Йәдкәр» авторы ижадты, әҙәбиәтте киң мәғәнәһендә фараз ҡылып, шағир йәки публицист, тарихсы



یادکار

محمد سلیم بن ابشحمد امید بابی ننك تصنیفلرندان

بیتلر مطلر کارناوانیه یعنی امپراطر الیکساندر الیکساندروویچننك تاج کیگان
حکایتی خبر آقطاش خان مع ذالقرنین شجرهٔ تاتار طارغاوت قالاقلاری
باشقرطلر خبر فرعون وروم آی باشلری ودخی حکایتلر

بو کتاب باصمه اولنمشدر قزانده دوبراواسکی ننك طبع خانه سنده
۱۸۹۷ نچی یلده

باصمه‌سنه رخصت بیرلدی سانکی پطربورغده ۳ نچی سینتابرده ۱۸۹۷ نچی یلده

Дозволено цензурою С.-Петербургъ 30 Сентября 1897 года.
Типографія Б. Л. Домбровскаго въ Казани.

*«Йәдкәр» китабының титул бите.*

йә тәржемәсе, тел белгесе йә этнограф ҡына булып түгел, аҡыл һәм ҡәләм эйәһе, ҙур әҙип булып сығыш яһай.

Быны үҙ заманында рус матбуғаты айырып билдәләп үтә. «Волжский листок» газетаһы библиография бүлегендә шуларҙы яҙа: «Һуңғы ваҡытта мосолман китап баҙарында ике ҙур булмаған китап күренде. «Тәнзимәт» исемендәге береһе Ырымбур Диниә йәмғиәте ағзаһы Фәхретдиновтыҡы, икенсеһе шул уҡ йәмғиәттең тәржемәсеһе коллежский секретарь Өмөтбаевтың әҫәрҙәр йыйынтығы. Был ике мосолман автор мәғариф эштәренең ауыр юлында күп хеҙмәт күрһәтә. Икеһе лә, көнсығыш телдәре һәм монгол-төрки телдәре белгестәре булараҡ, берҙәй популяр.

Бынан тыш Өмөтбаев әфәнде — башҡорт кешеһе, ырыуҙаштары араһында үҫкән һәм оҙаҡ бергә йәшәгән әҙип — башҡорт халҡының тарихы буйынса бик киң белем һәм мәғлүмәттәргә эйә. Уның әҫәрҙәр йыйынтығы «Йәдкәр» исемендә, йәғни иҫтәлек тигән мәғәнәле. «Йәдкәр»ҙә шиғырҙар, хат үрнәктәре, император Александр III коранацияһын тасуирлау, Өфө губернаһы башҡорттары тураһында ҡиммәтле мәғлүмәттәр, ниһәйәт, шағир-авторҙың үҙ иҫтәлектәре һ. б. бар. Шиғырҙарҙан авторҙың «Васиәт һәм нәсихәт» тигәне иғтибарҙы айырыуса ныҡ биләй. Был йыйынтыҡтағы тарихи материалдар, бүтән хәбәрҙәр тураһында икенсе юлы әйтербеҙ әле».

«Йәдкәр» китабы Россия мосолман ғәләмендә, башҡорт йәмғиәтселегендә ҙур яңылыҡ булып ҡабул ителгән. «Тәржеман» газетаһында китап ыңғай баһалап үтелгән. Автор үҙе ғалим-ғөләмәләр даирәһенән, яҡын хеҙмәткәре һәм йәш ҡәләмдәше Риза Фәхретдиновтан һәйбәт фекерҙәр ишеткән, тәбрик хаттары алған. Бына шундай хаттарҙың береһе. «Әфәндем бер «Йәдкәр» рисәләнеҙ ҡулыма төшөп, ғәртисә уҡып, тамашалар вә хикмәттәре булыусы мөсрәт хасил булды, — тип яҙа Ырымбурҙан Ҡамал хәлфә Ҡотойов.— Барыһы әғлә, һәммәһе бик мәрғүп эш. Әйтәбеҙ: бер-ике дана нөсхә күндерһәгеҙ, ул нөсхә аманат ҡына итеп тотолор ине. Уҡып сыҡҡаным лайыҡлылыр: бигерәк ғәйәт тә шыма һәм ғәмәлдәр ҡылып яҙғанһығыҙ. Барыһы ла афарин, ғәжәп фәғән, мәнзил мәжмуға».

## 11

80—90 йылдарҙа ғилми-ижади эшмәкәрлеге күрелмәгәнсә күтәрелеп киткәндән Өмөтбаевты бары ғилем менән

---

*әғлә* — бик яҡшы; *фәғән* — эшлекле; *мәнзил мәжмуға* — дәрәжәле йыйынтыҡ.

шөғөлләнер әһелгә әйләнгәндер бәлки, тип уйларға мөмкин. Юҡ, ул әүәлгесә бик күп төрлө эштәр менән мәшғүл.

Назараттағы төп эше — мәшәҡәтле тәржемәселек вазифаһын башҡара. Иртәнге туғыҙҙан киске алтыға тиклем. Йәмәғәт эштәре күп. Ижадҡа, фәнгә форсаты тейһә, ял көндәре, киске сәғәттәр генә ҡала. Профессиональ ғалим, әҙип булһа икәнсе.

Быуат аҙағында хәҙер ил ағаһы кеше Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев ҙур абруйлы йәмәғәт эшмәкәре: земствола гласный, ауылда негласный ходатай, суд палатаһында заседатель, йәмғиәттә төрлө комиссиялар ағзаһы, матбуғатта штаттан тыш корреспондент...

Ил өҫтөнә яңы афәт, 1891—1892 йылдарҙа ҡаты аслыҡ ябырылғас, Өмөтбаев асығыусыларға ярҙам итеү комиссияһында эшләй, үкһеҙ етем ҡалған балаларҙы приюттарға урынлаштырыу хәстәрлеге артынан йөрөй, аҙыҡтүлек табыр өсөн төрлө ойошмаларға хаттар яҙа, мөрәжәғәттәр тәржемә итеп баҫтыра. Өфө попечитель йәмғиәтендәге эше лә муйындан. Популяр брошюралар, рәсми ҡағыҙҙар тәржемә итеү комиссияһында ла эштәрҙең ҙур өлөшө уға төшә.

1897 йылда Бөтә Россия халҡын иҫәпкә алыу компанияһы башланғас, шул уңай менән төҙөлгән Өфө губернаһы перепись комиссияһы составында М. Өмөтбаев шулай уҡ ағза. Ул халыҡты иҫәпкә алыу инструкцияларын, бүтән рәсми мәғлүмәттәрҙе татарсаға тәржемә итеү һәм баҫтырыу менән шөғөлләнә. Өфө өйәҙе мосолмандарына халыҡ иҫәбен алыу тәртибен аңлатыу эштәре менән волостарға йыш сыға, йыраҡ төбәктәрҙә аҙналар буйы йөрөп ҡайта.

Уҡымышлы кеше тантаналы комиссия эштәренән дә ситтә түгел. Мәҫәлән, Өфөнөң өс йөҙ йыллығын байрам итеү йәһәтендә бик күп эш башҡара. Өфө тарихын яҙырға материалдар йыйыша, айырым бүлектәрен төҙөшә. Юбилей көндәрендә Өфөлә үтер һабан туйының бөтә шартына килтереп программаһын төҙөп, уны байрамсалап ҡороуға күп көс түгә. Комиссия ағзалары ағаһы Фәхретдин, ҡайныһы Нурғәли Рәжәпов нык ярҙамлаша.

1899 йылдың башында А. С. Пушкиндың 100 йыллығы юбилейы айҙарында, Өфө губернаһы комиссияһы ағзаһы булараҡ, М. Өмөтбаев шулай уҡ ең һыҙғанып эшләй: бөйөк рус шағирының әҫәрҙәрен татарсаға тәржемә итә, матбуғатта тормошо һәм ижады хаҡында мәҡәләләр баҫтыра. «Уфимские губернские ведомости» газетаһында сыҡҡан мәҡәләһе А. С. Пушкин ижадын өйрәнеүсе ғалимдарҙың иғтибарын биләй.

«Уфимские губернские ведомости» газетаһының актив хәбәрсеһе булараҡ, М. Өмөтбаев Башҡортостан тарихы, башҡорт йолалары, милли ашамлыҡ-эсемлектәре буйынса мәҡәләләр баҫтыра. Үҙәк газеталарға корреспонденциялар ебәрә. Ләкин баш ҡала матбуғатына үтеү еңел булмай. Уның материалдары кемдер тарафынан тотоп ҡалына йәки үҙенсә файҙаланырға ынтылыштар булғылай. Мәҫәлән, 1897 йылдың октябрендә М. Өмөтбаев Мәскәүҙән «секретно» тигән һүҙ аҫтында ниндәйҙер бер Искәндәрбәк тигән әҙәмдән хат ала. «Һеҙҙә Башҡортостан этнографияһына ҡараған материал күп. Улар юҡҡа әрәм булып ята,— тип яҙа ул бәк.— Теләгегеҙ булһа, беҙ уны «Русские ведомости» газетаһына эшкәртеп баҫтыра алыр инек. Өфө ҡалаһы һәм, ғөмүмән, Өфө губернаһының хәҙерге көндәренән хәбәр ебәрә алаһығыҙ. Тема төрлөсә булыуы мөмкин. Мәҫәлән, земство, мәктәптәр, земство начальниктары, мәҙрәсәләр тураһында. Ҡала эштәре, халыҡ хәстәрҙәре, налогтар, урмансылыҡ, крайҙы үҙләштереү һ. б. тураһында. Әлбиттә, мәғлүмәттәрҙең бик теүәл булыуы кәрәк. Гешафты уртаҡ бүлербеҙ. Һеҙ миңә материал ебәрһәгеҙ, ә миндә — эшкәртеү яғы».

Шулай итеп, ғалим хәбәрсенең мәғлүмәттәрен, яҙмаларын уртаҡлашырға әҙер тороусылар ҙа табыла. Шундайҙар башҡорт уҡымышлыһының хеҙмәттәренең үҙ исеме менән үҙәк матбуғатҡа үтеүенә кәртә булып та яталар. Ә тынғыһыҙ күп төрлө эш, йәмәғәт йомоштары барыһына ла берҙәй етешеүгә ҡамасаулай.

Ике ҡулыңа бер эш булһа икән.

# ҺУҢҒЫ ТӨЙӘК

*Үтә алманым мәрхәмәттең тупһаһын*
*атлап,*
*Унда бик күптәр сират тора һаҡлап.*

*М. Өмөтбаев*

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев 1899 йылдың 21 авгусында отставкаға сыҡты. Һәҡ 58 йәше тулған көндө. Әлбиттә, ул көндө көтөп алғандан түгел, сәләмәтлеге ныҡ ҡаҡшауҙан мәжбүр булды китергә.

Һуңғы йылдарҙа уның ревматизм ауырыуы бик көсәйҙе, аяҡ-ҡул быуындары шешеп, йөрәгөһөҙ саҡтары йышайҙы, көн-төн һыҙланыуҙары тәҡәтен алды. Шуға ла 18 йыл «корон» дәүләт эше, Диниә назаратында толмаслыҡ хеҙмәте өсөн пенсия алырға хоҡуҡ срогы еткәс тә, көнө-сәғәте менән тигәндәй «хаҡлы ялға» китте. Ә әүәлге 20 йыл кантондағы иң ауыр, мәшәҡәтле эштәре хеҙмәт стажына индерелмәне, иҫәпкә лә алынманы. Шуға батша хөкүмәтенең пенсияһы йылына бары 59 һум 40 тин көмөш ине. Айына барлы-юҡлы биш һум самаһы. 38 йыл тоғро хеҙмәте дәүерендә хөкүмәт бүләкләгән Изге Станислав ордены, ике көмөш, бер бронза миҙалдарҙың баһаһы ла шунса ғына булғандыр инде. Биш һум пенсияға күҙ терәп, йәшәп, ғаилә аҫрап ҡара инде хәҙер. Хәйер, ул заман йөҙҙән берәүгә тейгән шундай пенсияһына ла шөкөрана.

Ярай әле, ҡара көндәренә һаҡлаған бер аҙ аҡсаһы бар. «Йәдкәр» китабына арыу ғына гонорар түләгәйнеләр. Ибраһимдағы ере, мал-тыуары күпмелер терәк булыр. Ғилем, ижад эшенә төпләнеп ултырһа, яңы әҫәрҙәрен баҫтырып сығара алһа, бәлки, әжере лә килер. Шулай өмөт йәшәтә бәндәне.

Бар мәшәҡәттәрҙән, вазифаларҙан арынып, ғилем менән генә шөғөлләнер көндәрен көтмәне түгел, көттө инде ул. Тик ғилеме яҡын дуҫ булып та ауырыуы ғына яман дошман була күрмәгәйе. Дәртһеҙгә генә дауа юҡ: ауы-

рыу-һыҙланыуҙарын онотоп, Мөхәммәтсәлим пенсионер дәртләнеп ғилми эшкә сумды оҙамай.

## 2

Өмөтбаевтың бар өмөт-ниәте — «Йәдкәр»ҙе дауам итмәк. Дөрөҫөрәге, энциклопедик характерҙағы ҙурыраҡ рисаләһен яҙмаҡсы. Нисегерәк килеп сығыр: әл-мәғариф рәүешендәме, әллә йыһаннамә кеүекме, әллә рисаләләр серияһы, ҡамус ишеме булыр — әле киҫеп кенә әйтеүе ҡыйын. «Йәдкәр» китабына күберәк туған халҡының тарихына, культураһына ҡарар эштәре, дөйөм мәғлүмәттәр, үҙ ижад емештәре ингәйне. Күпмеһе һыймай тороп ҡалды. Хәҙер, ғөмүмән, бөтә донъя, дөйөм тарих, мәҙәниәт тураһында киңерәк мәғлүмәттәр бирер рисалә төҙөйһө ине.

Әле йәшерәк сағында яҙып ҡуйған бер тәғбире һаҡланған: «Тәуарих яҙмаҡ өсөн йыһаннамә фәне кәрәк. Миҫала Ғираҡ әғәрәбе тәуарихыны яҙғанда ерenең тарафы, шәһәрҙәренең вә халыҡтарының кәсеп вә сауҙаләре бәяны һуңында батшаларыны вә кескенә ваҡиғаларыны яҙалар». Йәғни ил, халыҡ тарихын яҙа башлағансы уның географик-территориаль торошон да тасуирларға кәрәк икәнлеге аңлашыла.



*М. Өмөтбаев Диниә назараты хеҙмәткәрҙәре араһында (ултырғандарҙан уңдан беренсе.)*

һуңғы яҙмаларында был фекерҙәрен йәнә асыҡлай төшә: «Бер вәләйәткә махсус хикәйәтте яҙмаҡта әүәл еренең урыны йыһаннамә фәне илә грәһәрдының тулы вә ғәрсе дәрәжәләрен әйтеп, исемдәренә тәфтиш ҡылып хикәйәт итәләр. Бөтә йыһаннамәне дәнешмәндтәр география тиерҙәр. Әммә бер генә дәлиләтнамәһене этнография тиҙәр». Тимәк, бер ил, халыҡ тураһында тулы итеп яҙыр өсөн йыһаннамә фәне лә, географияһы, этнографияһы ла шунса кәрәк. Йыһаннамә китаптарын төҙөүҙең көнсығыш халыҡтарында үҙ традициялары бар. Ғәрәп, фарсы телдәрендә әллә ни саҡлы йыһаннамәләр яҙылған. Төрки китаптарҙан, мәҫәлән, төрөк ғалимы Ҡәтиб Чәләбиҙең (1609—1657) бөтә донъяға билдәле география, астрономия, тарих, философия, әҙәбиәт буйынса хеҙмәттәре яҡшы мәғлүм. Ә атаҡлы төрөк сәйәхәтсеһе Әүлиә Чәләбиҙең иһә (1611—1670) Серия, Палестина, Египет, Европа илдәренә, Рәсәйгә, Уралға сәйәхәттәре хаҡындағы «Сәйәхәтнамә» китаптары төрлө телдәрҙә киң таралған. Былдай китаптарҙың күсермәләре башҡорттар араһында ла йөрөгән. Шуларҙың береһен 1824 йылда Троицкийҙан Ғабдулла Рәхмәтулла улы тигән башҡорт Төхфәт кантонға «Сәрдар кантон Төхфәтулла Утауи өсөн» тигән автограф менән бүләк иткән. Ул ғәләмәт ҙалын «Йыһаннамә» ҡулъяҙма китабы хәҙер Башҡортостан фәнни үҙәге китапханаһында һаҡлана.

Көнсығыш, шул иҫәптән төрки халыҡтарында йыһаннамә фәненең лексикограф А. З. Будагов билдәле төрки һүҙлегендә шулай билдәләй: «Йыһаннамә — космография (собственно, показывающее весь мир — так называемый зеркало и чаша персидского царя Джамшида)». Тимәк, был фән көнсығыш халыҡтарында әл-мәғариф — энциклопедияға күпмелер яҡын.

Ошондай йыһаннамәләр тибында, көнсығыш традицияларында үҙ заманы йыһаннамәһен яҙырға өмөтләнгән булырға тейеш Өмөтбаев. Ул, үҙе яҙыуынса, башта йыһаннамәнең космографик планын төҙөгән. «Был хеҙмәтемде Петербургта картограф Ильинға күрһәттем, — ти ул. — Һыҙманың ул тулылығына һәм ситтәрендәге яҙылған ентекле мәғлүмәттәргә хайран ҡалды. Был космография цензура тарафынан баҫтырырға рөхсәт алынһа ла, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, аҡсам юҡлыҡтан китап итеп баҫтыра ал-

---

*әл-мәғариф* — энциклопедия, мәғлүмәттәр тупламаһы; *ғираҡ әғәрәбе* — Ғәрәп Ираҡ иле тарихы, *вәләйәт* — өлөш; *грәһәрдының тулы вә гәрсә дәрәжәләре* — меридиан һәм киңлек; *дәнишмәндтәр* — ғалимдар; *дәлиләтнамә* — бүлек, өлөш; *тәфтиш ҡылып* — тикшереп.

маным. Ул ҡаҙна ҡарамағында йәки берәй йәмғиәтселек китапханаһында һаҡланһа яҡшыраҡ булыр ине». М. Өмөтбаев Йомран Табын ерҙәренең топографик һыҙмаһын да эшләгән.

Тәуарих яҙмаҡ өсөн йыһаннамә фәне кәрәк: был ниәтенә ялғап тәуарих яҙыуҙы — тарихнамә китабын да дауам итә Өмөтбаев. Башҡортостан тарихы буйынса яңы материалдар туплай. Россия тарихын киңерәк тикшерә. Яҙма сығанаҡтарҙы, баҫмаларҙы өйрәнә. Йәнә көнсығыш тәуарихтарына мөрәжәғәт итә.

Ул, мәҫәлән, төрки-монгол ырыуҙары генеалогияһын тағы бер ҡат тикшереп сыға. Ундағы айырым легендар батшаларға, тарихи шәхестәргә үҙенсә аңлатма бирә, бүтән сығанаҡтар менән сағыштырып ҡарай. Әйтәйек, генеалогиянан «Һушнаһ» тигән легендар зат исеме эргәһенә: «Берәүҙәр Һушнаһ шаһты Фридун тиҙәр» тип яҙып ҡуя. «Афрасиб»тың «Турани шаһ» икәнен аныҡлап үтә. Рөстәмгә туҡтала. Былар Фирҙәүсиҙең «Шаһнамә» китабындағы атаҡлы ҡаһармандар икәнен иҫтә тотоп та эш итә тарихсы. Генеологияла «Ҡаһарман» исеме бар. Уға Өмөтбаев «241 биттә Табариҙа килмештер» тип, «Тарихи Табари» китабы мәғлүмәттәрен телгә ала. Йософ ғәлиәссәләм исеме янына «Ҡиссаһы мәшһүрҙер» тип өҫтәй. Тимәк, бындай исемдәрҙе Өмөтбаев әҙәбиәтсе йөҙөнән дә сағыштырып билдәләп бара.

Шаһ, хандар исемлеге аңлатмалары буйынса Сыңғыҙханға, унан ары хандарға еткәс, был теҙемде Өмөтбаев Әбүлғази Баһадир хандың «Шәжәрәи төрк» китабындағы мәғлүмәттәр менән сағыштырып, айырмаларын атап китә.

Атаҡлы тарихсы шәхестәрҙе М. Өмөтбаев яҙасаҡ тарихында киңерәк яҡтыртырға уйлаған булһа кәрәк. Уның Александр Македонский (Искәндәр), Дари шаһ, Ганнебал, Юрий Цезарь, көнсығыш хандары, төрөк солтандары, көнбайыш батшалары, полководецтар тураһында байтаҡ яҙмалары бар. Күбеһен айырым китаптар, тарихи журналдар, газеталар, боронғо сығанаҡтар буйынса бөртөкләп йыя.

Бына ул һуңғыраҡ атаҡлы мосолман полководецтарынан Мөхәммәт Ғәли паша менән ҡыҙыҡһына. Мөхәммәт Ғәли (1769—1849) сығышы менән албанлы. Төрөк армияһында янычар. Ғәскәр башлығы булған. Египеттың азатлығы өсөн көрәшкән паша, бик күп яуҙарҙа ҡатнашҡан батыр һәм ғәскәр башлығы. 1799—1801 йылдарҙа Наполеон Бонопартҡа ла ҡаршы һуғышҡан. Египеттың экономик һәм культура үҫеше өсөн ҙур хеҙмәт күрһәткән дәүләт эшмәкәре.

М. Өмөтбаев ошо Мөхәммәт Ғәли пашаның Россия илендә Ҡара диңгеҙ буйында Елизавета губернаһында дворяндар ғаиләһендә тыуған бер мосолман икәнлеген «Санкт Петербургские ведомости» газетаһындағы мәҡәлә буйынса асыҡлай һәм факттар йыя башлай.

Йәки бына рус полководецы Суворов хаҡында мәғлүмәттәр туплай. Уның Европаға походы, Альп тауҙары аша сығыу тураһында ентекләп яҙа.

1906 йылда батша адресына яҙған хатында М. Өмөтбаев үҙенә бөтә замандарҙың полководецтарының һәм атаҡлы батшаларының, шул иҫәптән рус тарихына билдәле булмаған Азия тарихи шәхестәренең исемлек яҙмалары барлығын хәбәр итә. Күрәһең, был эшен ул эҙлекле рәүештә алып барған. Үҙенең бик мөһим «Тәуарих хаҡында мөҡәддимә», йәғни тарихҡа инеш мәҡәләһен дә отставкаға сыҡҡас яҙа. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ғүмереңең һуңғы осоронда тарих буйынса күп яҙмалары, үҙе үлгәс, таралып тәләф булып бөтә, айырым өлгөләре генә киҫәк-киҫәк тороп ҡала.

Башҡорт этнографияһы хаҡында яңы тасуирлауҙары бар.

Тел ғилеме, лексикография буйынса эштәрен дауам иткән. Фарсы грамматикаһын төҙөгән. Уны «Фарсы нәхүсе» исемендәге ҡулъяҙмаһын 1905 йылдың ноябрендә Өфөлә Кәримовтар матбағаһына баҫтырырға тапшырған. Был китабын, заманында Т. Ялсығол «Рисалаи Ғәзизә»не, Ғ. Соҡорой «Ҡара Табын башҡорт ырыуы шәжәрәһен» яҙыуҙарын халыҡ нисек үтенгән шикелле, таныштарының үтенесе буйынса яҙғанлығын шиғыр менән әйтеп бирә:

Мәжлес булып бер көн әхуандар мине,
Дәғүәт итеп һөйләнеләр һәм быны,
Булһа ине бер нәмүнә дәстғар,
Фарсы уҡыр талиба тип әйттеләр.
Был фәҡирдә дәрт булып, юҡ дарманы,
Шөйлә ине ғәҙәте тик торманы.
Бәлһәҙ ине, үҙене яҙыр ине.
Бынан элек мәннәт итеп хеҙмәттәр
Яҙып ике төрки нәхү милләтә,
Һуңра яҙҙы был нәхүҙе фарсыла
Асан булһын тип лөғәт дәрселә.

Ҡулъяҙма аҙағындағы был шиғырҙан һуң шундай бе-

---

*әхуандар* — ҡәрҙәштәр; *дәрүәт итеп* — өндәп; *намүнә дәстғар* — үрнәк ҡулланма; *ҡәнд* — пәҡ; *мәннәт* — маҡтаулы эш; *асан* — еңел.

лешмә килә: «Тамам булды шәһәр Уфала, 1904-се май айында, мө әлифе титулярный советник Мөхәмметсәлим бин Ишмөхәммәд Өмөтбаев әл-Йомрани».

Сит ил ғалимдары менән баҡаланышҡа инә М. Өмөтбаев. 1901 йылда Будапештан Өфөгә венгр филологы Вильмош Преле килә. «Ул башҡорт телен өйрәнеү, материал йыйыу буйынса күп эшләне»,— тип яҙҙы «Уфимские губернские ведомости» газетаһы. — Был эшендә венгер ғалимына башҡорт әҙәбиәтселәре Сәлим Өмөтбаев менән Сәлимгәрәй Солтанов хажи ярҙам иттеләр» (1903, 11 июнь).

Ғалимдың аҙаҡ Венгрияла сыҡҡан «Башҡорт грамматикаһы» китабының айырыуса һүҙлек өлөшөндә Мөхәммәтсәлимдең хеҙмәте һиҙелеп тора.

Лексикограф В. В. Ҡатаринский менән бәйләнеште өҙмәй. Василий Владимирович «Краткий русско-башкирский словарь» (1893), «Башкирско-русский словарь» (1899) китаптарын сығарырға әҙерләгәндә М. Өмөтбаевҡа йыш мөрәжәғәт итә, консультациялар ала.

1903 йылда Өфөлә булып киткән поляк журналисы И. А. Урсын Варшавала сыҡҡан «Слово» газетаһында Башҡортостан тураһында, уның әҙиптәренән М. Өмөтбаев менән Р. Фәхретдинов хаҡында ҙур-ҙур мәҡәләләр баҫтыра.

Отставкаға сыҡҡас, М. Өмөтбаев халыҡ медицинаһы менән ныҡ ҡыҙыҡһына. Төрлө шифалы үләндәр менән нисек дауаланыу тураһында күп мәғлүмәттәр туплай. Үҙенсә рецепт-күрһәтмә кеүек нәмәләр яҙа. Тыйп китабы төҙөмәксе. Тәбиғәтте күҙәтеү, халыҡ һынамыштары буйынса дәфтәр тота.

### 3

«Беҙҙән йәшлек үтте, әхирәтте ҡайғыртыр ваҡыт етте»,— ти бер хатында Мөхәммәтсәлим.

Йомғаҡларға ваҡыт буғай.

Яңы быуат башында Өмөтбаевтың аллы-артлы өс китабы нәшер ителә: «Баҡчасарай шишмәсе вә ғәйре бәйетләр» (1900), «Татарча ҡысҡа нәхү» (1901), «История Оренбургского магометянского духовного собрания» (1903).

Был баҫмалар пенсиялағы авторҙың материал хәлен шаҡтай ғына еңеләйтә төшкән ахырыһы: 1903 йылды Өмөтбаев бик алыҫ һәм ҙур сығым һораған хаж сәфәренә йыйына.

---

*мөәлиф* — автор; *тыйп китабы* — халыҡ медицинаһы китабы.

(«Ҡитаптарымды баҫып сығарыуҙан тапҡан аҡсама хажға барҙым»,— ти үҙе). Уйында мотлаҡ хаж ҡылыу, хажи булыу ниәте ныҡ урынлашҡан булды микән, ҡарт һәм ауырыу көйө быға тәүәккәллек итә ул Мөхәммәт пәйғәмбәр йәше етеп килгәндә. Кем белә, һаулығы етмәһә, хаж юлында шәһит китеренә лә разыйҙыр.

Өмөтбаевтарҙың бер нисәһе күптән хажи. Ағаһы Фәхретдин, унан энеһе Сөләймән хажға барып ҡайтты. Улы Баязит та Мәккә-Мәҙинәлә булды. Мөхәммәтсәлим генә һаман хажи түгел, бәлки, намыҫы ла килеп киткәндер. Үҙе әйтмешләй, ғалимдар улар вәҡар ҙа булалар.

Нисек тәүәккәлләгәндер, сәфәрҙә күпме айҙар йөрөп, юл ғазаптарын нисек үткәргәндер, 1903 йылды хаж китеп, шул йылында кире имен-аман әйләнеп ҡайта үҙ йорт-иленә. Юлда күргән-белгәндәрен ҡайтҡас, «Хажнамә» китабында бик ентекләп яҙа. Уны китап итеп баҫып сығарырға әҙерләй. Ҡулъяҙмаһын Ҡазан нәшерҙәренә тапшыра. Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул баҫылыу ғына түгел, ҡулъяҙмаһы типографияламы, ҡайҙалыр юғалып ҡала.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев әүәл-әүәлдән сәйәхәт китаптары, хажнамәләр менән ҡыҙыҡһына килгән. «Ислам индерелгәндән алып башҡорттар..., муллалары Мәккәгә йөрөй башлағандар, әйләнеп ҡайтҡас, сәйәхәт һәм дини йолалар хаҡында һөйләгәндәр, — тип яҙа ул, мәҫәлән «Башҡорттар» тигән мәҡәләһендә. — Мәккәгә Төркостан, Бохара, Хиуа һәм Персия аша йөрөгәндәр. Тимәк, бөтә Азияны үтергә кәрәк булған. Етмәһә, ...ундан берәү генә ҡоллоҡҡа эләкмәйенсә йәки фарсылар (Ҡыҙыл баштар) тарафынан үлтерелмәйенсә, өйөнә әйләнеп ҡайта алған. Ә Константинополь аша йөрөргә аҡса күп кәрәк булған. Ул ваҡыттарҙа, сәфәрҙең ауырлығы арҡаһында, Мәккәгә сәйәхәт итеү, хәлле кешеләрҙең бурысы булһа ла, бай башҡорттарҙың башына ла килмәгән.

Башҡорт муллаларының бөтә Азия аша Мәккәгә яһаған сәйәхәттәре, ундағы һанап бөтөргөһөҙ легендалар маҙаҡтырғыс. Ләкин бөгөн генә тотоноп хикәйәләрҙе (рассказы) йыйыу, дөрөҫөрәге, бындай сәйәхәтселәрҙән башҡа йыйыу ифрат ауыр».

Күрәһең, М. Өмөтбаев бындай сәйәхәтнамәләрҙе йыйырға һәм өйрәнергә теләгән. Был йәһәттән ул башҡорт әҙиптәренән Тажетдин Ялсығолдоң сәйәхәтенә туҡтала. Әбелмәних Ҡарғалыны иҫкә ала. «Икенсе бер сәйәхәтсе— Әбелмәних,— тип яҙа. — Ул уҡымышлы сифатында Бохара илсеһе менән Константинополгә килгән һәм унан Египет аша Мәккә һәм Мәҙинәгә барып ҡайтҡан. Ул Египетта «Тәфсир кәбир»ҙән шиғри тәржемә яҙған. Был кита-

бында ул үҙенең сәфәре хаҡында ла телгә ала һәм үҙ өлгөләрен килтерә». М. Өмөтбаев бында Әбделмәнихтың «Тәржемәнән хажи Әбделмәних әл-бистәүи эс-Сәғиди» (1845, 1889) китабын күҙ алдында тота булырға тейеш.

Һәр хәлдә, сәйәхәтнамәләр һәм хажнамәләр менән таныш М. Өмөтбаевтың үҙе яҙған «Хажнамә» китабының мауыҡтырғыс һәм күҙәтеүҙәре йәһәтенән ентекле булғанына шик юҡ.

Китап итеп баҫтырыу маҡсаты менән яҙылғас, ул художество яғынан да тейешле кимәлдә булғандыр тип уйларға кәрәк. «Унда юлда күргәндәрем һәм ишеткәндәрем тураһында, Константинополдә төрлө заманадарҙағы һәм стилдәрҙәге архитектура сәнғәте хаҡында яҙҙым», — ти ул бер хатында. М. Өмөтбаевтың архивында хажға барғанда алып ҡайтҡан ҡай бер фотоһүрәттәр, рәсемле открыткалар һаҡланып ҡалған. Мәҫәлән, Константинополдәге атаҡлы Ая-Суфия мәсете, Солтан Баязит жәмиғы (мәсете), Мәҙинәлә пәйғәмбәр мәсете, Мысырҙа Ҡаһирәлә Мөхәммәт Ғәли паша Жәмиғы фотоһүрәттәре. Шундай архитектор ҡомартҡылар уның «Хажнамә» китабында бик ентекле тасуирланган булырға тейеш.

Яҙмалары араһында Константинополь (Стамбул) хаҡында бер шиғыр өлөшө лә осрай:

> Константиняның ҡыйсыры ҡалды кем хәленә,
> Һарун әл-Рәшид Жәғфәр илә ҡалды малына,
> Жәғфәр ғази Сәйедбатталдыр пәһлуан,
> Ҡыйсыры Румда һарун менән һөрҙө дәүран.
> Нисә йөҙ мең кеше килде хәлифәләр илә
> Барыһы ла сәхағ ҡайтты еренә.
> Ахры Мөхәммәд ханға насип фәхренә,
> Уның өсөн Әбел-Фатых булды тибәйәт.

Бындай шиғри өлөштән күренеүенсә, М. Өмөтбаев сәйәхәт китабында айырым ҡалаларҙың архитектур ҡомартҡыларын тасуирлау менән генә сикләнмәйенсә, был ҡалаларҙың, үҙе үткән илдәрҙең тарихын, халҡын, географик хәлен, көнкүрештәрен дә күпмелер сағылдырмай ҡалмағандыр. Ғалим сәйәхәтсенең күҙәтеү, тикшеренеү манераһы, элекке бар яҙғандары шул йүнәлештә бит.

Бында Өмөтбаевтың йәнә бер һәләтен билдәләп үтергә кәрәк. Ул — рәссам ҡәләмле кеше. Унда шул заманса әйтһәк, тасуир вә тәрсим һәләте бар. Сәфәр йөрөгәндә ул

---

*ҡыйсыры* — бипалары, һарайҙары; *дәүран* — ирек, иркенлек; сахағ — *фәхер* — дан, ғорурлыҡ; *белдәй* — үҙе.

матур урындарҙы, гүзәл тамашаларҙы һүрәткә төшөрөргә яратҡан. Мәҫәлән, М. Өмөтбаевтың архивында Ҡырым күренештәренән, Сатырдағ, Димерче ҡая, Алушта тауҙарынан ҡәләм менән яһалған матур-матур һүрәттәре бар. Бер ҡулъяҙма китапты буяулы ҡәләмдәр менән биҙәп матур каллиграфия менән күсергән. Уның яһаған һүрәттәре, көнсығыш орнаментлы биҙәмәләре ғәжәйеп матур һәм килешле. Тимәк, М. Өмөтбаев, рәссам булараҡ өйрәнелергә һәм баһаланырға ла лайыҡ.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев — бына тигән каллиграф. Шул заман атамаһы менән әйткәндә, оҫта хаттат. Батшаға яҙған хатында үҙе шулай ти: «Былардан тыш мин үҙем һәм улым Баязит хажи был яҡтарҙа беренсе каллиграфтарбыҙ». Өфө земствоһы, Диниә назараты батшаға йәки иң ҙур дәрәжәле түрәләргә адресланған рәсми хаттарҙы, альбомдарҙы йыш ҡына Өмөтбаевтан яҙҙырып алыр булған.

Әллә ҡартлыҡ ғәләмәте, Мөхәммәтсәлим хажилығына ҡарағанда дворянлығы менән маҡтанғылап алғылай хәҙер. Улына яҙған бер хатында шулай ти: «Дворяндарҙың ҡәҙере — бәрәбәре генералдар дәрәжәһендә. Сөнки хәҙер ҙә генерал булмайынса дворянлыҡ алып булмай. Дәүләтендең ҡәҙерен белергә кәрәк. Ул (дворянлыҡ) дәрәжәһен миллион биреп алырҙар ине, әммә аҡса менән алып булмай».

Тик шуныһы: үҙе аҡсаһыҙ, ярлы дворян әйтә бына.

Мөхәммәтсәлим йәйләгән Ибраһимда йәшәгәндә, бигерәк тә олоғайған йылдарында Ноғман хәҙрәт менән йышыраҡ аралаша. 1877 йылда үҙ туғандарынан Ишдәүләт Назарғул мулла вафат булғас, урынына Өфө өйәҙенең Сыуалкип ауылынан Ноғман Зәйнулфәттах улы Көсәевте приговор менән мулла итеп һайлап ҡуйғайнылар. Былай мәғлүмәтле, әммә тәҡүә әҙәм. Имам хатип. Һеңлеләре Суфияны уға никахлағас, кейәү бала. Үҙе ислам тигәндә, гүйә, бер тәғәссип инде.

Ноғман хатип ғилем, дин, фәлсәфә хаҡында әңгәмә ҡорорға бик әүәҫ. Уның менән Мөхәммәтсәлимдең сәғәттәр буйы гәпләшкәне, ҡыҙып бәхәсләшеп киткәндәре, донъя яңылыҡтары, дин, сәйәсәт мәсьәләләре хаҡында әңгәмәләре бихисап. Ноғманда ҡәләм тибрәтеү һәләте лә юҡ түгел. Мөхәммәтсәлимдән бер аҙ алдараҡ хажға барып ҡайтҡас, бер теҙмә хажнамә лә яҙып ташлағайны. Күңеле килгәндә гәзәл, назымдар ҙа яҙғылай. Аҙаҡ тәснифтәрен

---

*Тәснифтәрен* — яҙғандарын; *тасуир вә тәрсим һәләте* — яҙыу һәм рәсем яһау оҫталығы.

һайлап, 1909 йылда Өфөлә «Рисаләт мәнзүмәт» (шиғри яҙмалар йыйынтығы) исемле китабын нәшер иттерҙе: Китап менән танышҡанда авторының үтә диндар, тәғәссип дин әһеле икәнен тойорға мөмкин. Үҙе ҡәҙимге бер назымсы. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев менән сағыштырһаң, ер менән күк араһы. Уларҙың ултырҙаш, әңгәмәләш булыуы шул кейәүлегенә күберәк бәйлелер. М. Өмөтбаев архивында Ноғмандың хаттары ла бар. Унда, башлыса дини фәлсәфә ҡора.

Алтмыштан ары ҡайтмыш, ти мәҡәл. Алтмыштан ары, айырыуса Мәккә — Мәҙинә йөрөп ҡайтҡас, Мөхәммәтсәлим хажида диндарлыҡ, үҙен әхирәткә әҙерләү тойғолары ҡуйырғандай итә. Ауылда уҡымышлы хажи кешегә йыш ҡына дин хәстәре менән мөрәжәғәт итәләр хәҙер. «Христиан, мәжүсиҙән, — сыуаштар, сирмештәр мосолман диненә сығыу күбәйҙе, — ти бер яҙмаһында. —Байтаҡтарына үҙем прошение яҙыштым. Бишауыл — Уңғарҙа Миңлебай Биккенә, Бәшир Биксәнтәй тигәндәре шулай мосолман булып киттеләр».

Был нимә: әҙәмдәрҙәге мөртәтлекме? Әллә выждан талабымы?

Ана 1738 йылды Туйгилде тигән башҡортто көсләп христиан итеп, кире мосолманлығына ҡайтҡан өсөн генә Екатеринбург ҡалаһының майҙанында утта яндырып үлтергәндәр. Джордано Бруно һымаҡ. Береһе инанысы өсөн, икенсеһе көнө-ҡоно өсөн.

Мөхәммәтсәлим былар хаҡында ла уйланмай ҡалмағандыр. Ә үҙенә, хаҡ мосолманға, фарыз нәмәләрҙе еткереп үтәргә тура килә хәҙер.

## 4

Яңы быуат башы.

М. Өмөтбаев отставкаға сыҡҡан йылдар — Россияла азатлыҡ хәрәкәтенең яңы, пролетар этабы башланған заман. Тарих XX быуатҡа ингәндә иһә илдә революцион ситуациялар ҡуйырып бара ине инде. Оҙаҡламай 1905—1907 йылдарҙың революция дауылдары ҡубып китте. Бының көслө елдәре Башҡортостанға ла килеп етте. Митинғылар, демонстрациялар, хатта ҡораллы бәрелештәр ҡуҙғыны. Өфө, Златоуст эшселәре ҡоралға тотондо, крәҫтиәндәр ирек, ер даулап быға ҡушылды.

Шул революцион хәрәкәткә, Беренсе рус буржуаз-демократик революцияға М. Өмөтбаев нисегерәк ҡараған?

---

*тәғәссип* — фанатик.

Ниндәй мөнәсәбәттә булған? — Бындай һорауҙар үҙенән-үҙе тыуа.

Ләкин былар хаҡында ҡулыбыҙҙа асыҡ ҡына факттар аҙ. Ауырып пенсияға сыҡҡан, вазифаларҙан бушанған Өмөтбаев көнүҙәк хәл-ваҡиғаларҙан, ижтимағи хәрәкәттән шаҡтай ситләшкән кеүек. Ни тимә, көн итеше башҡа — мөхите башҡа.

Мәғлүм булыуынса, ул, әлбиттә, әүәлгесә илдәге яңылыҡтар, Башҡортостандағы, Өфөләге хәлдәр менән газета-журналдар аша даими танышып бара; төрлө түрәләр, таныштар аша көндәлек манзараларҙы, йәмғиәттәге эре һәм ваҡ хәл-ваҡиғаларҙы ишетә-белә тора. Ана 1903 йылды Өфөлә Ушаков паркында губернатор Богдановичты атып үлтерҙеләр. 1905 йылдың ғинуарында «ҡанлы йәкшәмбе» көндәрендә Өфө эшселәре ҙур демонстрацияға сыҡты, маевкалар ойоштолорҙо. Шул йылдың декабрендә Өфө тимер юл депоһында полиция менән атыштар, бомба шартлатыуҙар булған. Илдә әле бер, әле икенсе ҡалала, ауылдарҙа халыҡ ҡуҙғалышы көсәйеп бара тиҙәр. Рус-япон һуғышы булып алды. Ил еңелеү хурлығын кисерҙе.

Батша, ҡурҡыпмы, әллә бер әмәлдәнме, — 1905 йылдың 17 октябрендә манифест иғлан итте. Һүҙ, матбуғат, гражданлыҡ ирке, бүтән мөмкинлектәр вәғәҙә ителде. Дәүләт Думаһы саҡырыу тәғәйенләнде. Татар, башҡорт милли буржуазияһы ҡыбырланы. Милли съездар, социал-демократтар, әллә ниндәй союздар, иттифактар хаҡында һүҙ китте. Дәүләттең беренсе Думаһы ҡыуылып, икенсеһе саҡырылды. Ер, хөрриәт тип даулаштылар.

Бәхеткә ҡаршы, М. Өмөтбаевтың архивында ошо осор хаҡында «Хәбәр» тигән бер яҙмаһы ҡалған. Бына ул: «Урыҫтарҙың тәжрибәле ҡарттары әйтер ине: ағастарҙың япраҡтары көҙ фасылында тамам түгелмәйенсә ҡышҡа ҡалһа, Руссияла ауырлыҡ була тип. 1904 йыл ҡайын япрағы төшмәйенсә хатта яҙға тиклем ҡалды. Ул был йыл япон халыҡтары илән ҙур һуғыштар булып Руссәгә күп зарар булды, һәм ғәскәр, һәм аҙыҡ тәләф булып чуҡ фетнәләр сыҡты.

Йәнә 1905 йылда йүкә ағасының япрағы төшмәне, Руссиә йортонда чуҡ ваҡиғалар булып, мәслихәт өсөн Петербургка вәкилдәр ебәрҙеләр, йәғни государствоның Дума мәхкәмәһендә яңы низамдар төҙмәк өсөн. Әммә ул вәкилдәр, йәғни члендар дәүләттең төп биналы закондарҙы мәхү ҡылып, әмерене һәммәһе үҙҙәренә алып, батша-

---

*чуҡ* — күп; *мәслихәт* — кәңәш; *мәхкәмә* — идара; *низам* — тәртип, закон; *төп биналы* — нигеҙле; *мәхү ҡылыу* — юҡҡа сығарыу.

ның раинә хилаф әмерҙәр һөйләгәс, ул члендарҙың һәммәһен ҡыуалап ҡайтарып, яңы члендар һайларға бойорҙо. Ул арала күп фетнәләр сығып, талау-үлтереү булды. Ул етмәһә, егермеләп губернала ғәйәт тә асыҡ булды.

Был бәхетһеҙлектәр арҡаһында күп ғали шаң фармандар илән хосуси 1905 йыл 17-се октябрь манифесы илән дингә, милләткә, яҙыуға, хосуси йәриәләргә вә ғәйре әмерҙәр вә хөрриәт бирелде, йәғни халыҡтарға ирек бирелде».

Бынан ҡоро хәбәр генә түгел, авторҙың мөнәсәбәтен тойорға ла мөмкин.

Уның ҡағыҙҙары араһында «Что такое всеобщее, равное, прямое и тайное избирательное право?» тигән русса брошюра осрай. Әйәһе уны ҡәләм менән ентекләп уҡыған, ҡат-ҡат өйрәнгән. М. Өмөтбаев, күрәһең, губерна түрәләренең үтенесе буйынса, 17 октябрь манифесын, Беренсе Дәүләт Думаһы положениеһын татарсаға тәржемә иткән. Улар баҫып сығарылған.

Манифестың һүҙ, матбуғат ирке хоҡуғынан тиҙерәк файҙаланып ҡалырға теләгәндәй, М. Өмөтбаев Өфөлә татарса газета сығарырға ынтылыш яһап ҡарай. Уның Өфө губернаторы исеменә татарса аҙналыҡ газета сығарырға рөхсәт биреүен һорап яҙған прошениеһының ҡараламалары һаҡланып ҡалған. Тик рөхсәт ителмәгәнме — нисек был ниәте ғәмәлгә ашмаған.

Әлбиттә, Мөхәммәтсәлимдең үҙе газета сығарырлыҡ аҡсаһы-нисе, байлығы юҡ. Уға ҡайһылыр бай исеменән һәм иҫәбенән генә эшләргә мөмкин. Үҙе, бәлки, мөхәррир булыр ине.

Өмөтбаевҡа ғаиләһе менән биш һумлыҡ пенсияға ғына ҡарап йәшәү һис еңелдән түгел. Шуға ла ул пенсияһын айына ун һумға булһа ла еткереүҙе һорап, хөкүмәткә әллә нисә тапҡыр үтенес яҙып ҡарай. Ләкин нәтижәһеҙ ҡала үтенестәре. Аптырағас, батшаның үҙ исеменә, Мәскәүҙең иң юғары түрәләренә мөрәжәғәт итә. Илгә ғүмере буйы тоғро хеҙмәтен, эш вазифаларын, баҫылған китаптарын, яҙылғандарын атап күрһәтә. Һис юғы ун һумлыҡ пенсияға хаҡлы булыуын раҫларға тырыша. Ауыр хәлен дә йәшермәй. «В настоящем году я с августа месяца не здоров, а потому, как сказал А. С. Пушкин: «Я живу поэтом без дров зимой, без дрожек летом»,— ти ул 1906 йылдың 14 декабрҙә батшаға адресланған хатында. Ә батша канцелярияһы яуабы бер: «Ходатайство оставлено без удовлетворения».

Ғүмере буйы ғәҙел хеҙмәт иткән, батшаларға тоғролоғон һаҡлаған һәм маҡтау һүҙҙәре бағышлаған Өмөтбаевҡа батшаның яуап «мәрхәмәтлелеге» нисек тәьҫир иткәндер,

мәғлүм түгел. Әммә инаныстары ҡаҡшамай ҡалмағандыр. «Батшаға ҡарата үҙгәргән тойғоларын Өмөтбаев үҙ һүҙҙәре менән түгел, ә ситләтелгән юл менән белдерергә теләгән булһа кәрәк, — ти, мәҫәлән, Әхнәф Харисов, — ул үҙенең ҡулъяҙмалары араһында «Уфимская земская газета»һынан (1904, 21 апрель) айырыуса ғибрәтле бер хәбәрҙе татарсаға тәржемә итеп беркеткән (тарих өсөн)».

Бында һүҙ батшаның миллионлаған доходтары тураһында. «Батшаның ҡатынын һәм балаларын тәрбиәләү өсөн ҡаҙнанан йылына 12 миллион 800 мең аҡса ебәрелә икән. Йәғни көнөнә 35 мең һум. Бынан һуң батшаның һәр балаһына тыуған көнөнән башлап бәлиғ булғанғаса йыл һайын 33 мең, ә бәлиғ булғас йорт ҡорор өсөн бер миллион һум түләнә. Батшаның Себерҙә 42 миллион 500 мең дисәтинә ере бар. Әллә күпме завод, фабрикалары. Батшаның туған-тыумасалары ла бик күп ер биләп, шунан йыл һайын 20 миллион доход алалар икән. Етмәһә араҡы сауҙаһынан — 20 миллион табыш».

Әхнәф Харисов бынан шундай һығымта яһай: «Өмөтбаев был хәбәрҙе: «Мин ҡарт көнөмдә йылына 60 һум пенсия алып йәшәнем, ә батшаның бер балаһына көнөнә 35 мең һум «тәрбиә аҡсаһы» бирелә ине — ғәҙеллек ҡайҙа?! Мин үлгәс, бына ошо хәҡиҡәтте ғибрәт өсөн сағыштырып ҡараһындар», — тип үҙенең шикәйәт яҙыуҙары менән бергә төпләп ҡуйған булырға тейеш».

Батшанан алған һуңғы ҡаты һабаҡтың нәтижәһе шулдыр, моғайын.

Әҙиптең ғүмер эңерендәге уй-тойғоларын шиғырҙары буйынса ла белеп була. Хәйер, улар бер нисә бөртөк кенә. Ауырыу, кәйефһеҙ ҡарт кешенең күңеле шиғриәткә көйләнә алмаған, күрәһең.

Мөхәммәтсәлимдең хаждан ҡайтҡас буғай, бер Мәһди тигән хажиҙың һуңғы яҙмышы хаҡында яуап шиғыры бар.

Саҡыраһың бер күрешеп, дәрт итеп ултырмаға,
Бар мораҙым ғәрҙи итәргә һинән дарман юҡмылыр.
Хажи Мәһәди былбыл булып ҡалмаға ҡанаттарың.
Ах итәрҙән бағ эсендә ғәнжә гөлдәр юҡмылыр.
Рәнйеү, михнәт алдылар сын дәртең белдермәгә,
Серләшергә йәнең менән нурдидәң юҡмылыр.

Ҡәйефле генә шиғыр был.

Ә бына «Ишек төбөндә» исеме менән баҫылған иң һуңғы шиғырҙарының берсһе бар ғүмеренә йомғаҡ, һуңғы һүҙе кеүек ишетелә.

---

*ғәрҙи* — иң, киңлек; *ғәнжә* — сәскә.

Байлыҡ-муллыҡ ишегенә ҡаҡтым мин оҙаҡ,
Төштө тәҙрәнән ярты тин аҙаҡ.
Үтә алманым мәрхәмәттең тупһаһын атлап,
Унда бик күптәр сират торалар һаҡлап.
Дан йортоноң ҡапҡаларын ҡараным ҡағып,
Әйттеләр: «Һин йәйәүлегә тормабыҙ бағып!»
Ишеттем аһ-зар ауазын хеҙмәт йортонан,
Инмәйенсә ары киттем күңел һыҡрауҙан.
Илдәр гиҙеп сығып киттем ырыҫ-ҡот эҙләп,
Булманы юл күрһәтеүсе бер кем дә йүнләп.
Инде ҡалды тағы бер йорт барып ҡарарға...
Ҡәберҙә, дөрөҫ, ҡунаҡтар булһа ла бик күп,
Мин ярлыға унда урын табылыр бик хуп.

Йомғаҡ күңелле түгел: байлыҡ-муллыҡ ишектәрен, дан йортоноң ҡапҡаларын ҡағып ҡарауы ла файҙаһыҙ булған, мәрхәмәт тупһаларын ашатлап үтә лә алмаған, хеҙмәт йорттарынан аһ-зар ауаздары ишеткән, инде һуңғы йорто ишеге төбөнә килеп еткән. — Йорт метафораһы шундай киң мәғәнә ала. Ил, батша, халыҡ тип күпме хеҙмәт итеп, үҙен малһыҙ, данһыҙ хәлдә тойоуы аяныслы, әлбиттә.

Ҡәләм хеҙмәтенә лә үҙенсә ҡәтғи ҡарар сығара ул:

Ҡар итеп, ғүмеремә ҡағыҙ ҡалманы,
Яҙам, тип йөрөнөм, алдап ғәләмде.
Үҙен белмәй, ҡарағыҙ бисараны,
Доға теләр, табалмай һис сараны.

Аянысынан ни саранан бисара ауазы тиергә мөмкин быны.

«Нитәккә әйтмештәр: кеселәрҙең эше хәүеф-хаталыр, олуғтарҙың эше ғәфү-ғаталыр»,— ти Өмөтбаев «Йәдкәр»-ендә.

Шуның шикелле М. Өмөтбаевтың уй-тойғоларында хәүеф-хаталары, айырым ҡаршылыҡлы ҡараштары, уның ҙур хеҙмәттәре үҙе ғәфү-ғаталыр.

Яҡшы ат өҫтөнә сыбыҡ йыҡмайҙар, тигән һүҙе лә бар Өмөтбаевтың.

Үҙ эштәрен кәм баһалауын әҙиптең көнсығыш яҙма традициялары буйынса әйтеүе, авторҙың үтә тыйнаҡлығы тип ҡарарға кәрәк.

Ана Аҡмулла ла әйткән:

---

*ҡар итеп* — уҡып, өйрәнеп; *нитәккә әйтмештәр* — юҡҡа әйтмәйҙәр; *ғәфү-ғаталыр* — ғәфү итәлер бүләк, һәләт.

Ризамын, инсаф ҡылып ҡараһағыҙ —
Беҙ, байғош, бөйөктәрҙән алашабыҙ,
Кесерәйтһәгеҙ, кесерәйтергә мин яраймын,
Үҙегеҙ ҙурайырға яраһағыҙ.

Бер ҡитғаһында Өмөтбаев шулай ти:

Ҡани Ширин илә Фәрһад,
Ҡани Ләйлә илә Мәжнүн —
Улар үтте был ғәләмдән.
Был донъя би бәка тиҙәр.

Эйе, донъя мәңге түгел, ә Ширин-Фәрһад, Ләйлә-Мәжнүн образдары, ижади эш күп ғүмерлек.

Быуат башында М. Өмөтбаевтың үҙенән өлкән бөйөк замандашы Лев Толстой ижады һәм ҡараштары менән ҡыҙыҡһынғаны күҙәтелә. Уның архивында Әсфәндиәр тигән хәҙрәттең Лев Николаевичҡа дин, фәлсәфә хаҡында яҙған хатының күсермәһе һаҡланған. Үҙе рус тәнҡитсеһе һәм әҙәбиәтсеһе Е. А. Соловьевтың «Очерки по истории русской литературы» (1902) китабы менән танышып, унда Л. Н. Толстойҙың хәҙерге интеллигенция менән халыҡ мөнәсәбәте хаҡындағы ҡараштарын айырым тәржемә итеп ала. Халыҡ менән интеллигенция араһында ятҡан тәрән ара түгел, яҡынайтыр юлдар хаҡында уйлана ул. «Ғалимдар шулай әйткәндәр: кемдә ғилем вә һөнәр булһа, шул изге инсандыр», — ти М. Өмөтбаев.

Башҡорт уҡымышлыһы үҙе ғүмере буйы шул ғилеме менән һөнәрҙе, белем менән тәжрибәне бергә ҡушырға тырышып йәшәне. Шунын бер сараһы итеп, бар кешегә аңлайышлы, факттарға бай мәҡәләләрен, шиғырҙарын, фәһемле сәсмә әҫәрҙәрен ижад итте.

Әммә күпме ижтиһат итмәһен, донъяһын да, үҙ күңелен дә күпмелер бөтәйтә алдымы һуң?

«Донъя һис кемгә бөтөн түгел, түңәрәк айҙың да китеге бар», — ти ул аптырап.

Ғәрәптең тапҡыр мәҡәл һүҙен: «Әсъғәб ғәли лә инсан мәғрифәт нәғсә», йәғни «кешегә иң ауыры үҙ-үҙенде танып-белеү» тигәнде ғүмере буйы төшөнөргә тырышты. Үҙеңде үҙең төшөнөп бөтмәгәнде, кешеләрҙе, донъяны төшөнөп бөтөү мөмкинме ни? Хатта тағы бер нисә ғүмер бирелгән тәҡдирҙә лә...

Бер мәшһүр хаким әйткән: «Бөгөн эшләргә мөмкин булған эште иртәгә ҡалдырма», — тип ошо үҙе яҙып ҡуйған тапҡыр һүҙҙәр Өмөтбаевтың эш ғәмәле ине.

---

*ҡани* — ҡайҙа.

Әлегеһен унда хәҙер сәскән-урғандарын ҙуратҡа һалып барлап ҡарау хәстәре. Баҫылған китаптары былай аҙ түгел. Бына улар:

1. Мөхтасар әл-виҡайә. Өфө, 1890.
2. Әлифба интихад бәяны. Өфө, 1897.
3. Йәдкәр. Ҡазан. 1897.
4. Бакчасарай шишмәсе. Ҡазан, 1900.
5. Татар нәхүсенең мөхтасары. Ҡазан, 1901.
6. Оренбург духовное собрание тәуарихы. Өфө, 1903.
7. История Оренбургского духовного собрания. Уфа.

Баҫылғанға ҡарағанда баҫылмағандары күберәк. Улар нәшергә әҙерләнгән ҡулъяҙмалар рәүешендә йәки ҡайһылары яҙылыу, тамамланыу өҫтөндә. Авторҙың ҡайғыһы шулар хаҡында.

Бына уның баҫылмаған йыйынтыҡтары:

1. Жиһаннамә.
2. Йомран Табын волосының планы.
3. Фарсы нәхүсе.
4. Хажнамә.
5. Этнографические и исторические сведения Уфимской губернии.
6. Краткий перечень полководцев и замечательных людей.

Был баҫылмаған хеҙмәттәре хаҡында М. Өмөтбаев батшаға яҙған үтенесендә лә телгә ала, исемлектәрен төҙөй.

Ләкин, ҡыҙғаныусҡа ҡаршы, автор үҙе үлгәндән һуң, уларҙың «Фарсы нәхүсе» ҡулъяҙмаһынан башҡаһы ҡайҙалыр таралып юғалып бөтә.

Шулай ҙа баҫылған китаптары буйынса ла М. Өмөтбаев йәмғиәтселеккә киң билдәле ине. «Башҡорттарҙың Сәлим Өмөтбаев тигән 60 йәшлек үҙ шағирҙары бар,—тип яҙҙы 1903 йылдың 11 июнендә «Уфимские губернские ведомости» газетаһы.— Ул тулҡынландырғыс һәм көслө стилгә эйә. Пушкиндың «Баҡсаһарай»ын бик һәйбәт тәржемә итте. Ҡазанда ла, Оренбургта ла, Уралда ла, Өфөлә лә киң билдәле». «Волжский листок» газетаһы уның «Йәдкәр» китабына ыңғай баһа бирҙе. Үҙәк газеталарҙа М. Өмөтбаев башҡорт ғалимы һәм әҙибе булараҡ билдәләп үтелде. «Тәржеман» газетаһы уның хаҡында яҙҙы.

Мосолман йәмғиәтселеге, ғалим-голәмәләр араһында Өмөтбаевтың абруйы оло ине. Уҡымышлылар уға мәдех бағышлар булды. Бына шундай маҡтау һүҙҙәренең береһе. Уны Бөрө өйәҙенән имам хатип Ғабдулҡадир Ғәбделмөниров яҙа:

Ғилем хадимынан бер зат Уфа шәһәрендә Өмөтбаев,
Әдәбә ғасир хазирының сәркәтибе Өмөтбаев,
Был заттың мөфхәрени тәғлимдәр йөрәгендә мәшһүр
Зә йөмлә әҙәбиәт әлифбаи Өмөтбаев.
Дәхи бер тәржемәселер татар теленә русидан,
Мөхәммәт ғалимдар бәндә китабынан Өмөтбаев.
Ученый бер рисаләһе сәйәхәттән мөбәсах,
Гәрәеп вә ғәжәп бә бәян итмеш Өмөтбаев.
Латифат илә нар ҡылыр йәмғиәтә шәрғиәлә хеҙмәт
Вә мәғадлек илә нар тәғлиф вә иншәғәт Өмөтбаев.
Ҡәрим әл-тәбиғтыр рузи дәхи Хәлмиҙер һүҙе.
Нәсел санәә исем хисап иғасәдер Өмөтбаев.

Имам һәм йәш әҙип Сафуан Яҡшығолов уға шиғыр менән ҡотлау хаттары күндерә. «Мохлисанә доға көйҙәр һеҙгә булһын би шөшөр, һандуғастар һайратҡан багатыныңдан рүз шәп, бад шимал исеменсә бағың булһын бер ҡарар» ти ул бер мәдехендә (Йәғни остазына ысын күңелдән хисапһыҙ доға, маҡтау һүҙҙәрен яуҙыра).

Риза Фәхретдинов «Мөхәммәтсәлим әфәнде күп мәғлүмәтле һәм яҡшы күңелле бер әҙәм ине. Ваҡытында ҡәҙере беленеп етмәне», — тип иҫкә ала. «Өмөтбаев үҙенең яҙғандарын башҡорт әҙәбиәтенә нигеҙ тип хисап итә»,— торғайны ти.

Ғалимды ғалим таныр хаҡ һүҙ.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев үҙе мәҙәниәт донъяһын күҙәтә килә. Өфөлә, Петербурҙа сыҡҡан рус газеталарын даимым уҡып бара. Донъя, Рәсәй хәлдәре менән көн дә тигеләй таныш. Шуныһы ҡыуандыра уны: илдә 17 октябрь манифисынан һуң төрки-татар телдәрендә газеталар күренеүе. Петербургта Ғатаулла Баязитов ахун «Нур» газетаһын сығара башланы, уға йәнә «Өлфәт» тигәне өҫтәлде. Ҡазандан «Ҡазан мәхбире», Ырымбурҙан «Ваҡыт» газеталары килә. Өфөнөң үҙендә «Әл-ғәләм әл-ислами» газетаһын сығарырға керештеләр. М. Өмөтбаев үҙе күптән хыял иткән, ынтылыштар яһап ҡараған эштәренең бойомға аша башлауы бит былар. Шөкөрана, был көндәрҙе лә күрҙе.

Әҙәбиәткә өмөтлө генә йәштәрҙең килеүе һөйөндөрә Өмөтбаевты. Риза Фәхретдинов «Аҫар» китабының бер нисә бүлемен, ике әҙәби рисаләһен ташҡа баҫтырҙы. Мәжит Ғафуриҙың «Фәҡирлек менән үткән тереклек», «Себер тимер юлы йәки әхвәле милләт» мәжмуғәләре менән таныштырды. Һәләтле ҡәләм булмаҡсы. Уның үҙенә яҡшы таныш

---

*хадим* — хеҙмәт иткән кеше; *әдәбә гасир сәркәтиб* — әҙәп мәшәҡәтле эштәрҙең секретары; *мөбәсах* — ҡыйыу; *латифәтлә* — мәрхәмәтле.

Нурғәни хәлфәнең улы, Ҡәлсер Табын ырыуынан икәнен белде. Закир Һадиҙың Ырымбурҙа табиғ ителгән «Бәхетле ҡыҙ» менән «Бәхетһеҙ ҡыҙ» хикәйәләрен күҙҙән кисерҙе. Яңы газета-журналдар яңы исемдәр, яңы әҫәрҙәр алып килә тора.

Өфөлә 1906 йылда «Ғәлиә» мәҙрәсәһен асып ебәрҙеләр. Белем алыуға, мәғрифәткә һыуһаған йәштәр күп хәҙер.

Оло әҙип һиҙенә: яңы быуат башынан, «хөрриәт» тигән ауаздар менән йәмғиәттә инҡилаби замандар килеүен, татар-башҡорт зыялары араһында ислахсылар көсәйеүе, мәҙәниәт тормошо йәнләнеүен.

## 7

1906—1907 йылдың ҡышында Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың ауырыуы көсәйгәс, үҙенең үтенесе буйынса, улы Баязит уны Ибраһимға бөтөнләйгә күсереп алып ҡайта. Аяҡ быуындары шешеүҙән ул тамам йөрөй алмаҫ хәлгә килә. Шунда ла Мөхәммәтсәлим ҡәләмен ташламай. Гөлсөм Ибраһимованың иҫтәлектәренә ҡарағанда, ул ауырыу көйө булһа ла көнө буйы тиерлек өҫтәл артында яҙышып йә китаптар уҡып ултыра.

Мөхәммәтсәлимдең ҡатыны Бибиғәбиҙәнең вафаты беҙгә йылы-көнө менән билдәле түгел. Ул 1900 йылда гүр эйәһе булһа кәрәк. Киләһе йылына Мөхәммәтсәлим Бәҙәрямал тигән тол ҡатынға өйләнгән. Әммә уның менән оҙаҡ ғүмер йәшәй алмаған. Бер дәфтәренә Мөхәммәтсәлим шулай теркәп ҡуйған: «Хажи Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың жәүҙәһе Бәҙәрямал Муса ҡыҙы вафат булды 1906-сы сәнә 10 августа, шәһәр Уфала. Дәфен ителде 11 августа».

Тимәк, яңғыҙ ҡалған һәм әжәл ауырыуы көсәйгән Мөхәммәтсәлим тыуған ауылына, үҙенең һуңғы төйәгенә ҡайтырға ҡарар иткән. Тыуған тупраҡ юҡҡа тартмаған икән үҙ улын: 1907 йылдың 28 июлендә Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың йөрәге тибеүҙән туҡтай һәм уның кәүҙәһе Йомран Ибраһим ауылының ҡиблаһындағы һырт зыяратҡа ерләнә. Ул ата-әсәһе, күп туғандары, балалары ятҡан зыяратта һуңғы йортона күсә. Атаһы ҡәберенә Баязит яҙҙырып ҙур таш ҡуйҙыра: «Һадә төрбәт әл-хажи Мөхәммәтсәлим бин Ишмөхәммәд Өмөтбаев мәрхүм мәхкүмә шәрғнәдә 26 сәнә тәржемән улуб һижри илә 1335-че рәжәбдә 65 йәшендә вафат...».

Яҡшы кешенән ат ҡалыр, ғалимдарҙан хат ҡалыр, ти башҡорт мәҡәле.

---

*зыялылар* — интеллигенция; *ислахсылар* — реформасылар.

«Үҙе үлер, хаты ҡалыр йәдкәр»,— тигән һүҙе бар Өмөтбаевтың.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың ҡалдырған йәдкәре — «Йәдкәр» китабы һәм бүтән ғилми-әҙәби хеҙмәттәре. Улар халыҡтың рухи байлығы.

Риза Фәхретдинов 1915 йылда М. Өмөтбаев тураһында «ваҡытында ҡәҙере беленеп етмәне» тип яҙғайны.

Ә ҡәҙерле улын тыуған халҡы ҡасан ҡәҙерләй башланы һуң?

Үлгәненә ҡырҡ йыл ғүмер үткәс, онотоп бөткәс, 1947 йылда: «Октябрь» (хәҙерге «Ағиҙел») журналында башлап иҫкә алып.

Шунан һуң ғына онотолған Өмөтбаевты исемләй, хеҙмәттәрен барлай башланыҡ. Яйлап әҙәби портреты яҙылды, әҫәрҙәре дәреслектәрҙә, хрестоматияларҙа урын тапты.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың тәүге биографы, уның хаҡында хеҙмәт яҙған, «Йәдкәр» китабын 1984 йыл яңынан әҙерләп сығарған ғалим Ғиниәт Ҡунафин әҙибебеҙ хаҡында шулай ти: «Әҙәби һәм йәмәғәт эшмәкәрлегенең ҡоласы, ғилми ҡыҙыҡһыныуҙарының киңлеге, зиһененең үткерлеге һәм һиҙгерлеге, егәрлелеге һәм тыуған халҡына бар булмышын биреп хеҙмәт иткән ысын патриот булыуы менән ул Октябрь революцияһына тиклемге башҡорт мәҙәниәте майҙанында үҙенсәлекле, ҡабатланмаҫ бер фигура булып ҡалҡып тора. «Ул йәнә шул фекерҙе өҫтәй: «Туғандаш халыҡтарҙың ижтимағи тормошонда М. Ломоносов, М. Ахундов, Ҡ. Насыри, Ч. Вәлиханов, И. Алтынсарин, А. Ҡунанбаев, И. Ҡануков, Т. Асари, Г. Зардери, С. Михайлов, И. Яковлев кеүек ғалим-яҙыусыларҙың ижади эшмәкәрлеге ниндәй роль уйнаһа, М. Өмөтбаевтың ижади һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге лә үҙ халҡының ижтимағи тормошонда шундай әһәмиәткә эйә.

Шундай ҙур фигура Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың тормош юлын, йәмғиәт эшмәкәрлеген һәм күп яҡлы ижади-фәнни эштәрен төплө өйрәнәһеләр алда әле.

Француз әҙибе Ренар әйткән: әҙип донъя мәҙәниәтендә бер китабы, хатта бер тапҡыр һүҙе менән ҡалһа ла бәхетле, тип.

Илебеҙ мәҙәниәте өсөн М. Өмөтбаевтың «Йәдкәр» китабы, йәдкәр булырҙай фәһемле һүҙҙәре ҡәҙерле.

Үҙ ерендең ғалимы мәғҙән эсендәге алтын бәрәбәрендә.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев уҡыған дәреслектә шундай бер хикәйәт бар: Хатим Тай йомарттан күршеһе үтескә бер тутәрәм икмәк һораған икән. Ә Хатим Тай уға бер бөтөн икмәк һибә иткән. Ҡатыны аптырабыраҡ аҙаҡ һораған: «Күршебеҙ бер тутәрәм генә тигәйне, һин бер бө-

төн көйө тотторҙоң, етмәһә, һибә бүләк иттең?»

Хатип Тай: «Ул үҙ хәленә мөнәсәбәтле һораны, ә мин үҙ дәүләтемә мөнәсәбәтле бирҙем», — тип яуап биргән.

Ҡәҙерле уҡыусым, әгәр һин зауыҡ-дәүләттә Хатим Тай мөнәсәбәтендә икән, мин уның күршеһе хәлендәмен.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев шәхсиәтен һәм ижадын тулы асыр өсөн ҙур-ҙур монографиялар, тос ғилми-тикшеренеү хеҙмәттәре кәрәк. Беҙҙең был китап шуға бер инеш була алһа, бик шатбыҙ.

Өфө — Мәскәү,
1988. VI — 1989. IV.

## М. ӨМӨТБАЕВТЫҢ ТОРМОШ ҺӘМ ИЖАД ЮЛЫ ДАТАЛАРЫ

*1841, 21 август* — Ырымбур губернаһы, Өфө өйәҙе 9-сы башҡорт кантонының Йомран Табын волосы Ибраһим ауылында Ишмөхәммәт кантон ғаиләһендә Мөхәммәтсәлим тыуа.

*1849, ноябрь — 1852 апрель* — Ибраһим мәҙрәсәһендә һабаҡ ала.

*1852, ноябрь* — Ырымбур кадет корпусына уҡырға инә. С. Күклөшев, М. Биксурин кеүек мәғрифәтсе уҡытыусыларҙан тел һәм әҙәбиәт дәрестәре тыңлай. Мирсалих Биксуринды үҙенең остазы итеп таный.

*1856, йәй* — Һамар губернаһы Сергеевский шифаханаһына дауаланырға бара.

*1860, август* — Атаһының ауырыуы арҡаһында, Ырымбур кадет корпусында һуңғы курсҡа күскәндә уҡыуын ҡалдырырға мәжбүр була.

*1861, ноябрь* — Ырымбур кадет корпусында 1852—1860 йылдарҙа уҡыуы хаҡында танытма ала.

*1861, йыл башы* — Башҡорт ғәскәре идараһы ҡарамағында Йомран-Табын кантонында тәржемәсе булып урынлаша. Уға урядник чины бирелә.

*1864, ғинуар* — Кантондар бөтөрөлгәс, Мөхәммәтсәлимде Ҡырмыҫҡалы волосына мировой посредник писары итеп эшкә саҡыралар.

*1865, көҙ* — Бозаяз ауылы ҡыҙы Бибиғәбиҙә Рәжәповага өйләнә. 1867 йыл улдары Баязит тыуа.

*1866, май* — Ҡырмыҫҡалы волосы старшинаһы итеп һайлап ҡуялар.

*1866—1878* — Старшина булып эшләгән йылдарында волостың гласныйы булып та ҡат-ҡат һайлана.

*1866—1878* — Старшина булып эшләгән йылдарында халыҡ араһынан байтаҡ легендалар, ҡобайырҙар, мәҡәл һәм әйтемдәр, һынамыштар яҙып ала. Шул осорҙа ижад эше менән дә шөғөлләнә башлай.

*1876* — «Башҡорттар» тигән тарихи очеркын яҙып бөтөп, Өфөгә «Уфимские губернские ведомости» газетаһына ебәрә. Ләкин мәҡәлә баҫылмайынса ҡулъяҙма көйө ҡала. Ул 1979 йылда, йәғни йөҙ йылдан артыҡ ғүмер үткәндән һуң, «Башҡорт әҙәбиәтенең текстологияһы мәсьәләләре» китабында баҫылып сыҡты.

*1879, ғинуар* — Стәрлетамаҡ мәҙрәсәһенә рус теленән һәм математиканан уҡытыусы итеп тәғәйенләнә.

*1880, яҙ* — Стәрлетамаҡ мәҙрәсәһендә уҡыуҙар тамамланғас, үҙе теләп уҡытыуҙан китә. Ибраһимға ҡайта.

*1880, июнь* — Өфөлә Диниә назараты канцелярияһына хеҙмәткәр булып эшкә урынлаша. Бер үк ваҡытта Өфө окружной судында тәржемәсе, етем балалар приютында тәрбиәсе вазифаларын да башҡара.

*1880, июль* — Диниә назаратында тәржемәсе вазифаһын тапшыралар. Был вазифала ул 1899 йылды отставкаға киткәнсе эшләй.

*1880—1900* — Өфөлә эшләгән йылдарында М. Өмөтбаев Р. Г. Игнатьев, М. В. Лоссиевский, П. И. Добротворский, Д. С. Волков, Н. А. Гурвич кеүек рус ил өйрәнеүсе ғалимдары һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре менән аралаша.

*1880* — «Уфимские губернские ведомости» газетаһында башҡорт этнографияһы буйынса ике мәҡәләһе донъя күрә.

*1881, 24 октябрь* — Өфө өйәҙе земствоһының сираттағы VII йыйылышында өйәҙҙә милли мәғариф эштәре буйынса сығыш яһай.

*1882* — Земство ултырышындағы сығышы «Вестник Уфимского земства» (IV сығарылыш, XXI том)» журналында баҫыла.

*1883* — «Справочная книжка Уфимской губернии» китабында рус телендә «Приметы, поверья, поговорки и изречения магометан Уфимской губернии» тигән материалы баҫылып сыға. Ошо уҡ белешмә китапта «Боронғо башҡорттарҙың өләңдәре» тигән материалы ла урын ала.

*1883, май* — Мәскәүгә барышлай Ҡазан ҡалаһында туҡтап, Шиһабетдин Мәржәни менән осраша.

*1883, май* — Мәскәүҙә Александр III батшаны тәхеткә ултыртыу коронацияһында ҡатнаша. Мәскәүҙең музейҙары, архитектура ҡомартҡылары менән таныша. Был хаҡта юлъяҙмаларында тәьҫораттары менән уртаҡлаша.

*1883* — Рус география йәмғиәтенең Ырымбур бүлегенә ағза итеп һайлана.

*1884* — М. Өмөтбаевҡа коллежский регистратор дәрәжәһе бирелә, киләһе йылына — губерна секретары дәрәжәһе.

*1886* — Өфө ҡалаһының нигеҙләнеүенә 300 йыл тулыу айҡанлы төҙөлгән юбилей комиссияһында эшләй. Өфө тарихы буйынса мәғлүмәттәр йыя. «Өфөнөң тарихына ҡағылышлы материалдар» тигән мәҡәләһен әҙерләй.

*1886, декабрь* — Ҡырымдағы вакеф эштәре комиссияһында ҡатнашыу өсөн Петербургҡа саҡыралар.

*1887, ғинуар — март* — Петербургта Сит ил эштәре министерствоһы ҡарамағында эшләй. Баш ҡаланың ҙур музейҙары, архитектура ҡомартҡылары менән таныша, был хаҡта үҙ тәьҫораттарын яҙа. Бында Ғатаулла ахун Баязитов менән яҡындан таныша.

*1887, март* — Петербургтан Ҡырымға килеп, Симферополь (Аҡмәсет) ҡалаһына урынлаша. Вакеф эштәре менән ныҡлап шөғөлләнә башлай.

*1887, 26 апрель* — Баҡсаһарайҙа күренекле мәғрифәтсе һәм нәшер Исмәғил Гаспринский менән осраша.

*1887, 27 сентябрь* — «Йомран дәүраны» тигән шиғырын яҙа.

*1888, йәй башы* — Ҡырымда вәкеф эштәрен тамамлап, тыуған яғына әйләнеп ҡайта.

*1888, йәй, көҙ — 1889, ҡыш* — Ибраһимда йәшәй. Йорт ҡаралтыларын нығытыу, хужалыҡ эштәре менән шөғөлләнә.

*1889, март* — Өфөлә Диниә назаратында тәржемәселек вазифаһын дауам итә.

*1889* — Коллежский секретарь дәрәжәһе бирелә.

*1889* — Татар-башҡорт телдәрен уҡытыу мәсьәләһендә Өфөлә үткәрелгән йыйылышта ҡатнаша һәм грамматика дәреслеге төҙөү эшен башлай.

*1890* — «Мохтасар әл-викәйә» дәреслек китабы сыға.

*1891—1892* — асығыусыларға ярҙам итеү комиссияһында эшләй.

*1892* — Титулярный советник дәрәжәһе бирелә.

*1894, сентябрь* — Өфөлә Аҡмулла менән әйтеш шиғри ярышта ҡатнаша.

*1897* — Ҡазанда «Йәдкәр» китабы баҫылып сыға.

*1897* — «Әлифба интиҡад бәяны...» тигән дәреслек китабы донъя күрә.

*1899* — Өфө губернаһында А. С. Пушкиндың 100 йыллыҡ юбилейын үткәреү комиссияһында эшләй, рус шағирының поэма һәм шиғырҙарын төркисәгә тәржемә итә.

*1899* — «Тәржеман» газетаһында «Бөйөк шағир Александр Пушкин» тигән мәҡәләһе төрки һәм рус телдәрендә баҫылып сыға (1899, 19 ).

*1899, август* — Сәләмәтлеге ҡаҡшау сәбәпле отставкаға сыға. Йылына 59 һум 40 тин пенсия тәғәйенләнә.

*1900* — М. Өмөтбаев тәржемәһендә А. С. Пушкиндың «Баҡсаһарай фонтаны» китабы Ҡазанда баҫылып сыға.

*1901* — «Татар нәхүсе мохтасары» дәреслек китабы баҫылып сыға.

*1903* — «История Оренбургского магометанского духовного собрания» китабы сыға. Төрки һәм рус телдәрендә.

*1903* — Хажға барып ҡайта.

*1904—1905* — Диниә назаратында штаттан тыш тәржемәсе булып эшләп ала.

*1906, 14 декабрь* — пенсияһын бер ни тиклем арттырыуҙы үтенеп батшаға хат яҙа.

*1907, 28 июль* — Ревматизм ауырыуынан үлә. Ибраһим ауылы зыяратына ерләнә.

## ҠЫҪҠАСА БИБЛИОГРАФИЯ КИТАПТАРЫНАН


1. Йәдкәр. Ҡазан, 1897.
2. Йәдкәр. Өфө, 1984.


## М. ӨМӨТБАЕВ ТУРАҺЫНДА ӘҘӘБИӘТ


1. Ҡунафин Ғ. Мәғрифәтсе ғалим һәм әҙип Өмөтбаев. Монография. Өфө, 1991.
2. Вильданов А., Кунафин Г. Башкирские просветители-демократы XIX в. Москва, «Наука», 1982.
3. Харисов Ә. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы, Өфө, 1965.
4. Харисов А. Литературное наследие башкирского народа. Уфа, 1973.
5. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 2-се том, Өфө, 1990 («М. Өмөтбаев» бүлеге).

# ЙӨҠМӘТКЕҺЕ


Һәйләү . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
*Беренсе бүлек.* Нәçел-ырыу . . . . . . . . . . . . . . 14
*Икенсе бүлек.* Ырымбур . . . . . . . . . . . . . . . 43
*Өсөнсө бүлек.* Волость . . . . . . . . . . . . . . . 81
*Дүртенсе бүлек.* Өфө . . . . . . . . . . . . . . . . 133
*Бишенсе бүлек.* Петербург . . . . . . . . . . . . . 177
*Алтынсы бүлек.* Ҡырым . . . . . . . . . . . . . . . 197
*Етенсе бүлек.* Йәнә Өфө . . . . . . . . . . . . . . 223
*Һигеҙенсе бүлек.* Һуңғы төйәк . . . . . . . . . . . . 265



ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННОЕ ИЗДАНИЕ

**ХУСАИНОВ Гайса Батыргареевич**

**МУХАММЕТСАЛИМ УМЕТБАЕВ**

**Историко-биографическая книга**

*(на башкирском языке)*

Редакторы *Р. Х. Нигмәтуллин*
Рәссамы *У. Т. Мәсәлимов*
Художество редакторы *В. П. Ковалев*
Техник редакторы *З. Ғ. Чингизова*
Корректоры *Ә. З. Хажиева*

ИБ № 4515

Наборға бирелде 05.12.90. Баçырға ҡул ҡуйылды 27.05.91. Ҡағыҙ форматы 84×108[1]/32. Ҡалҡыу ысул менән баçылды. Тип ҡағыҙы № 1. Шартлы баçма таб. 15,12. Шартлы буяу отт. 15,33. Учет.-изд. таб. 15,97. Тиражы 10 000 экз. Заказ № 173. Хаҡы 1 һум 50 тин.

Башҡортостан китап нәшриәте. 450000, Өфө-үҙәк, Совет урамы, 18. Башкирское книжное издательство. 450000. Уфа-центр, ул. Советская, 18. Башҡорт ССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

1 һум 50 тин